

Һәҙиә Дәүләтшина

# ЫРҒЫҘ

роман

Башҡортостан китап нәшриәте
ӨФӨ—1977

С (Башҡ)
Д 95

Дәүләтшина Һәҙиә
Д 95 «Ырғыз». Роман. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. 496 бит.

Һәҙиә Дәүләтшина «Ырғыҙ» романында тарихи әһәмиәткә бай булған ҙур дәүерҙе — 1902—1922 йылдарҙы — ала. Автор ошо йылдарҙағы башҡорт халҡының тормошон, революция йылдарында, граждандар һуғышы осоронда иҙеүселәргә ҡаршы аяуһыҙ көрәшеп, большевиктәр партияһы етәкселегендә бәхетле тормошҡа сығыуын күрһәтә.

Д $\frac{0763-324}{М\,121(03)-77}$ 63—77

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1977

40973
БИБЛИОТЕКА
объединенного фонда
Учалинского ГОК.

## ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНА ҺӘМ УНЫҢ РОМАНЫ ХАҠЫНДА БЕР НИСӘ ҺҮҘ

«Беҙҙең иҫ киткес гүзәл тормошобоҙ, беҙҙең совет ысынбарлығы менән һоҡланып йәшәнем, бөтә саф йөрәктән эшләнем мин, һәм тәрән шатлыҡлы тулҡынланыу менән Партия сафына баҫырға әҙерләндем».

А. *Дәүләтшинаның А. Фадеевҡа яҙған хатынан*

Ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе башҡорт яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшина һәм уның тормошо хаҡында, уның үҙенсәлекле ижады, бигерәк тә «Ырғыҙ» романы тураһында бик оҙаҡ һөйләргә мөмкин. Тик асыл таштың аҫыллығын иҫбат итеү өсөн күп һүҙ кәрәкмәгән кеүек, гүзәл кеше, көслө һәм ғәйәт ҙур художник — Һәҙиә Дәүләтшина ла быға мохтаж түгел.

Эйе, уның хаҡында бик күп һөйләргә була, тик бер ҡасан да тыныс ҡына һөйләү мөмкин түгел.

Ҡыҫҡараҡ ҡына буйлы, йоҡа ғына кәүҙәле, ғәҙәттән тыш ябай һәм баҫалҡы Һәҙиә Дәүләтшина, ғәҙәтенсә йылмайып, — матур ирендәре менән генә түгел, э барлыҡ мөләйем йөҙө менән, мөхәббәтле күҙҙәренән. осҡонло ҡарашын туп-тура һинең йөрәгеңә юнәлтеп йылмайып, — иркәләүсән, күгәрсен гөрөлдәүенә оҡшаған аҡрын һәм тыныс тауыш менән: «Бына, туғандар, оҙаҡ йылдар яҙыша-ныҡыша торғас, мин дә бер роман яҙған булдым да... Белмәйем, оҡшатырһығыҙмы, юҡмы инде, әлләсе...» — ти һымаҡ.

Беҙ был бик ябай ҡиәфәтле башҡорт ҡатынының, тулҡынландырғыс ваҡиғалар тулы ҡалын романға оҡшаған тормош юлын күҙ алдыбыҙға килтерәбеҙ һәм уның был «Ырғыҙ» тигән ҙур китабын уҡып сығабыҙ... Ҡапыл ғәжәйеп, тулҡынлы хәл булып китә: оялсан ғына йылмайып торған, ҡыйыуһыҙ күренгән, йоҡа ғына кәүҙәле ҡатын күҙ алдыбыҙҙа үҫә башлай, үҫә башлай һәм... легендаларҙағы баһадиргә әйләнә, һәм ғорур тауыш менән әйтә: «Бына, күрегеҙ, мин — башҡорт ҡатыны, быуаттар буйына туйында күҙ йәше аша сеңләп, тормоштон. үлән дә үҫмәй торған таш туғайында зарығып йырлап, Зөлхизә йәки Сәлимәкәй, Ғилмияза йәки Шәүрәкәй булып илап, хур булып, ҡол булып йәшәгән башҡорт ҡатыны, Октябрь ҡояшының шәфҡәтле нурҙары аҫтында ниндәй ҙур булып үҫтем!»

һ. Дәүләтшина 1905 йылда элекке Самар губернаһы (хәҙерге Куйбышев өлкәһе) Пугачев өйәҙе, Имель волосе, Хәсән ауылының ярлы крәҫтиәне Лотфулла Ильясов семьяһында тыуған. Был ауыл Бүгәсә башҡорттары яғындағы атаҡлы Ырғыҙ йылғаһының тап башында улхыра.

Был яҡтарҙа йәшәүсе башҡорттарҙың тормошо үҙенең үҙенсәлектәрен оҙаҡ замандар һаҡлап килә;. улар араһында кусмә тормоштоң ҡайһы. бер ҡалдыҡтары Октябргәсә йәшәй.

һүҙ ыңғайында әйтергә кәрәк, Л. Н. Толстой бына ошо, унын һүҙҙәре менән әйткәндә, «кырағай башҡорттар» араһына дауаланырға килеп йөрөгән һәм уларҙың тормошон '«Кешегә күпме ер кәрәк», «Ильяс» кеүек хикәйәләрендә һүрәтләгән.

һ. Дәү"ләтшинаның бала сағы, үҫмер йылдары һәы йәшлегенең бер өлөшө ошо үҙенсәлекле тормош эсендә үтә.

1919 йылда һәҙиәнен. атаһы тиф ауырыуынан ү'леп китә, улосәһе һәм ике ҡустыһы менән бөтөнләй ярҙамсыһыҙ ҡала. Граждандар һуғышы*уты был яҡтарҙа айырыуса көслө була. Шуға ҡарамаҫтан, йәш Совет хөкүмәте бындағы ҡараңғы башҡорт ауылдарында ла мәктәптәр асып ебәрә. Уҡыуға бик зирәк һәҙиә был мәктәптәрҙә революцияға тиклемге «кыҙҙар мәҙрәсәһе»ндә алған белемдәрен үҫтерә. Ә 1920 йылда инде унын үҙен шул тирәләге Диңгеҙбай ауылына укытыусы итеп билдәләйҙәр. Ләкин уға бында оҙаҡ эшләрг» мөмкинлек булмай. 1920—1921 йылдарҙа Ырғыҙ буйҙарында башбаштаклык иткән аҡ бандалар совет работниктәрен, шулар иҫәбенән укытыусыларҙы ла, үлтереп йөрөйҙәр. Шуға курә һ. Дәүләтшина 1921 йылдың аҙағында Самарға китергә мәжбур була. Унда ул яңы ойошторолған татар-башҡорт педтехникумына укырға инә.

1922—1923 йылдарҙа һ. Дәүләтшина Мәскәүҙә йәшәй, 1923 йылдың көҙөндә Өфөгә ҡайта. Аң-белемгә ынтылған һ. Дәүләтшина 1924 йылда Өфө башҡорт педагогия рабфагына укырға инә. Ләкин сәләмәтлеге насарайыу сәбәпле, ул рабфакты тамамлай алмай, ҡалдырып сығырға мәжбүр була. 1927 йылда Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортонда тәрбиәсе булып эшләй башлай. Шул ук ваҡытта, үҙалдына укып, белемен арттырыу өҫтөндә ҙур ныҡышмалылыҡ менән эшләй. Татар әҙәбиәте менән бик якшы таныш булған һ. Дәүләтшина, рус телен үҙләштереү менән, рус әҙәбиәте классиктәрен һәм рус совет яҙыусыларының әҫәрҙәрен системалы укый. Йәш әҙәбиәт һөйөүсе башҡорт яҙыусылары менән таныша, улар менән аралашып йәшәй башлай.

һ. Дәүләтшинаның әҙәби хеҙмәт менән шөғөлләнә башлауы лз ошо йылдарға тура килэ. «Башҡортостан йәштәре» газетаһының 1927 йылғы 8 март номерендә һ. Дәүләтшинаның «Пионерка һылыуҡай» тигән тәүге хикәйәһе баҫылып сыға. Шунан башлап унын исемен ваҡытлы матбуғат биттәрендә йыш ҡына осратып була. Иәш яҙыусынын әҙәби оҫталығы көндән-көн үҫә бара. Быны унын 1931 йылда яҙған «Айбикә», тигән повесе раҫлап тора. Был повесть һ. Дәүләтшинаның киң полотнолы әҫәр тыуҙырыуға тәүге һәм һөҙемтәле ынтылышы булып тора. «Айбикә» повесе, рус теленә тәржемә ителеп, 1936 йылда айырым китап итеп тә баҫып сығарыла.

Н. Дәүләтшина ижадынын беренсе осоронда ' «Айбикә» повесе үҙәк урында тора. Был әҫәр хаҡында автор үҙе былай тип яҙа: «Ваҡ крәҫтиән хужалыҡтарын коллективләштереү мине тәрән тулҡынландырҙы һәм мин «Айбикә» тигән хикәйәмде яҙҙым. Бында мин колхоздарҙың еңеүен, кулактарҙын. синыф булыу яғынан бөтөрөлөүен, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынын. кулак эксплуатацияһынан мәңгелеккә ҡотолоуын күрһәтергә тырыштым. Айбикәнең тракторист, коммунист, аҙаҡ килеп колхоз председателе була алыу дәрәжәһенә өлгәшеүен тасуирләнем... һәм был хикәйә мине башҡорт яҙыусылары сафына баҫтырҙы, һәм артабан мин үҙемде тағы ла яуаплыраҡ тойҙом».

һәм был тойғо һ. Дәүләтшинаны яңы, ҙурыраҡ күләмдәге әҫәр яҙыуға рухландыра.

Беренсе унышлы аҙымдар һ. Дәүләтшинаның башын әйләндермәйҙәр; якшы яҙыусы булыу өсөн ул үҙенә системалы белем етешмәүен якшы төшөнә. 1932 йылда ул Мәскәүгә китә һәм издательстволар өсөн редакторҙар әҙерләү институтына укырға инә. Бында уға атаҡлы яҙыусы А. А. Фадеев булышлыҡ итә. Дәүләтшинаны институтҡа тәҡдим иткән хатында иптәш Фадеев унын хаҡында «башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан берҙән-бер яҙыусы», ти. Ләкин ул был институтты ла тамамлай алмай. 1933 йылда һ. Дәүләтшина Башҡортостанға ҡайта һәм Баймаҡ районының Ижлайыр орлоҡсолоҡ совхозының политик бүлек газетаһы редакцияһында әҙәби сотрудник булып эшләй. 1935 йылда ул тағы Өфөгә ҡайта һәм К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт педагогия институтының тел .һәм әҙәбиәт факультетендә (башҡорт бүлеге) белем алыуын дауам итә башлай. •

1931 йылдан башлап һ. Дәүләтшина әҙәби ижад эше менән бик актив шөғөлләнә; ул үҙенең темаһын, жанрын табырға тырыша, шиғырҙар, художестволы очерктәр, нәҫерҙәр (проза менән яҙылған шиғыр), хикәйәләр, повестәр яҙа. «Айбикә» повесенән һуң, был уңышынан ҡанатланып, ул «Партизан» (1932), «Башаҡтар тулҡыны» (1932), «Ҡыҙылармеец Сынтимер» (1934), «Аҡыҡ бөртөктәре» (1934) тигән хикәйәләрен, «Еңелмәҫ батырҙар» тигән художестволы очереген (1935) яҙа. һуңғы ике әҫәрҙә Башҡортостандың Урал арты өлөшөндәге ауыр тәбиғәт шарттарында сиҙәм ерҙәрҙе күтәреп иген үҫтереүсе совхоз эшселәренең тормошо, көрәше көүҙәләнә. Быларҙан

тыш һ. Дәүләтшина шиғыр жанрында ла үҙенең ҡәләм менән көсөн һынап ҡарай. 1934 йылда уның «Ҡыш килде», «Ҡайнар сәләм» (Октябрь революцияһының 17 йыллығына арналған), «Ударник йыры», «Шатлыҡ тулҡындары», «8 Март», «Арыҫланбәк» тигән шиғырҙары баҫылып сыға.

1935 йылда һ. Дәүләтшинаның «Хикәйәләр шәлкеме» исеме аҫтында тәүге китабы сыға. 1936—1937 йылдарҙа ул А. М. Горький менән осрашыуҙары хаҡында «Онотолмаҫ кеше», «Ул бер ҡасан да онотолмаҫ» тигән иҫтәлектәрен, яңы Конституцияға арналған нәҫер-очереген һәм башҡа әҫәрҙәрен яҙа.

һәҙиә Дәүләтшинанын. тәүге әҫәрҙәре уҡыусыларҙың мөхәббәтен, әҙәбиәт йәмәғәтселегенең таныуын һәм хөрмәтен ҡаҙана. һ. Дәүләтшина Совет яҙыусыларының Беренсе Бөтә Союз съезында делегат була; хеҙмәтсәндәр уны 1936 йылда Өфө ҡалаһының Ленин районы Советенә депутат итеп һайлайҙар. Был ғәҙәттән тыш нескә күңелле, сирләшкә генә (һ. Дәүләтшина оҙаҡ йылдар буйы үпкә һәм йөрәк ауырыуҙары менән яфаланды) башҡорт ҡатыны үҙенең тормош юлында көслө ирҙәрҙең дә бик һирәктәре генә күтәрә, кисерә алырлыҡ ауырлыҡтарға тап була. Ләкин йөрәгендәге енелмәҫ совет патриотизме тойғоһо уны һаҡлай, сафта ҡалдыра.

һ. Дәүләтшина 1951 йылдың 20 мартында А. А. Фадеевкә яҙған бер хатында: «Мин шундай асыҡ аң менән йәшәнем, — тип яҙҙы,— ҡайҙа ғына булмайым, үҙемден, Тыуған илемә ярҙам итмәй булдыра алманым, үҙемден. марксистик-ленинсе ҡараштарымдан саҡ ҡына ла тайпыла алманым... Мин һәр ерҙә совет һауаһын һуланым. Арыу-талыу белмәй хеҙмәт иттем. Бигерәк тә Ватан һуғышы йылдарында мин үҙемдең шәхси ҡайғымды бөтөнләй оноттом, беҙҙен. Ватанды һаҡлау эшәнә тулыһы менән бирелдем. Ҡулымдан ни килә, бөтәһе менән дә булыштым уға».

Башҡортостанда Октябрь социалистик революцияһының енеүе, уның башҡорт халҡына биргән емештәре, граждандар һуғышы һәм уның беҙҙең еңеү менән тамамланыуы, башҡорт халҡының рус халҡы менән быуаттар буйына һуҙылған дуҫлығы, азатлыҡ, бәхетле тормош өсөн уларҙык бергәләп алып барған көрәше, бөйөк рус халҡының һәм бигерәк тә уның алдынғы отряде — пролетариаттың башҡорг халҡына булған ярҙамы менән, Коммунистәр партияһы етәкселегенд» башҡорт халҡының ысын тормошҡа сығыуы кеүек бөйөк ваҡиғалар һ. Дәүләтшинаны тәрән тулҡынландырып килә һәм ул уларҙы кик полотнолы әҫәрҙә кәүҙәләндереү тураһында бик күптән хыялланыга йәшәй. Күренеүенсә, был ваҡиғалар «Ырғыҙ» романының нигеҙ таштары булып торалар.

Был теманы эшләүгә һ. Дәүләтшина 1932 йылда уҡ тотона. Ошо йылда ул үҙенең ҙур ғына күләмле «Партизан» хикәйәһен яҙыӷ



баҫтыра. Был әҫәрҙә яҙыусы граждандар һуғышы йылдарында үҙенен, тыуған яҡтарында булып үткән ҡайһы бер героик ваҡиғаларҙы Һүрәтләй. «Партизан» хикәйәһе «Ырғыҙ» әҫәренен. тәүге главаларынык береһе була. Үҙенен, әҙәби оҫталығы нығый башлауын тойғас Ьәм күп кенә материалдар туплағас, һ. Дәүләтшина 1935—1937 йылдарҙа «Ялҡынлы йылдар» исемле повесен яҙыу өҫтөндә ярһып эшләй ^башлай.

Ләкин яҙыусы үҙенән булмаған сәбәптәр арҡаһында был әҫәре өҫтөндә эшләүен оҙаҡ ваҡытҡа туҡтатырға мәжбүр була.

1942 йылда һ. Дәүләтшина Башҡортостанға ҡайта һәм Өфө, Стәрлетамаҡ, Бөрө ҡалаларында йәшәй. Ошо йылдарҙа ул «Ялҡынлы йылдар» повесен яҙыуын дауам итергә тотона.

1942—1952 йылдар эсендә, оҙон ун йыл буйына, «Ялҡынлы йылдар» повесен бер нисә редакцияла ҡат-ҡат яҙып сыға. Аҙаҡ сиктә ул повесть рамкаларын аша үтеп китә һәм күп темалы, бик ҡатмарлы сюжетле, ғәйәт оҙон осорҙо эсенә алған ҙур романға әйләнә. һәм автор уны «Ырғыҙ» тип атай.

Романдың ҡулъяҙмаһы Яҙыусылар союзында ентекле өйрәнелеп, уны камилләштереү буйынса авторға етди тәҡдимдәр яһала.

Сәләмәтлеге йомшара барыуҙы ла онотоп, һ. Дәүләтшина романын ҡайтанан эшләргә тотона. Яңы тарихи материалдар өйрәнә, романдағы геройҙарҙың прототиптары менән осраша, унда һүрәтләнгән ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан кешеләр менән бәйләнешә. Шул иҫәптән, элекке Самар губернаһында 1917 йылға тиклем һәм унан һуңғы йылдарҙа революцион эш алып барған Н. М. Шверник иптәшкә мөрәжәғәт итеп хат яҙа. Унда яҙыусы романының идея эстәлеген түбәндәгесә билдәләй: «Минең романымдың темаһы шул, — ти ул: — Аҙ һанлы башҡорттарҙын., уның байҙарының һәм батрактарының нисек йәшәгәнлектәрен һәм үҙ-ара ҡайһылай көрәшкәнлектәрен күрһәтеү; был башҡорт хез.мәтсәндәре менән большевиктәр партияһы нисекитеп етәкселек иткән һәм нисек уларҙын. көрәшендә булышҡан; нисек итеп рус пролетариаты башҡорт хеҙмәтсәндәренә ярҙамға килгән, нисек нтеп улар 1917 йылда еңеүселәр булып сыҡҡандар һәм ҡайһылай бергәләп партизан отрядтәрендә һуғышҡандар...»

«Ырғыҙ» романында автор бөтә донъя-тарихи әһәмиәткә эйә булған ваҡиғаларға бай ҙур бер дәүерҙе (1902—1922 йылдар) ала. Был ваҡыт эсендә Россия халыҡтарының яҙмышында ғына түгел, бөтә кешелек тарихендә яңы эраны асып ебәргән социалистик революцияның еңеүенә килтергән ваҡиғалар була.

Үҙенән-үҙе аңлашыла, һ. Дәүләтшина романда бөтә был ваҡиғаларҙы тулы сағылдырыу бурысын ҡуймаған, һәм был мөмкин дә булмаҫ ине. Автор конкрет материал нигеҙендә тарыраҡ темалар ала.

Романдык сюжет эстәлеген тәшкил иткән — башҡорт общинаһының, төптән тарҡалыуы һәм емерелеүе, башҡорт крәстиәндәренең синфи бүлгеләнеүе, башҡорт милли буржуазияһының тыуыуы һәм уның ярлы, урта хәлле крәстиәндәрҙең бөлгөнлеккә төшөүе иҫәбенә, бигерәк тә беренсе бөтә донъя һуғышы осоронда, ҡоторонол байыуы — бына ошоларҙың һәм Коммунистәр партияһы тарафынан етәкләнгән рус пролетариатының революцион хәрәкәтенең үҫә, тәрәнәйә һәм киңәйә барыуының туранан-тура йоғонтоһо һөҙөмгәһендә башҡорт пролетариатының синфи аңы үҫеүе," ярлы башҡорт крәстиәндәр массаһыныц азатлыҡ көрәшенә ылыҡтырылыуы кеүек процестәр һәм ваҡиғалар беҙҙең быуаттың тәүге 'бгерме йылында Рос-сияла булған бвйөк ваҡиғалар фонында, шул ваҡиғалар менән бәйле, шуларҙың тәьҫире һәм һөҙөмтәһе итеп һүрәтләнәләр.

Романда алынған был күп төрлө темалар бетәһе лә бер үк дәрәжәләге художество көсө менән сиселеп етмәгәндәр. Ләкин улар, төрләһө төрлө кимәлдә, барыбер, нигеҙҙә, уңышлы хәл ителгәвдәр. Ә ҡайһы бер темалар, әйтәйек, -башҡорт общинаһынын. бөтөнләйгә тарҡалыуы һәм емерелеүе, башҡорт крәстиәндәренек синфи бүлгеләнеуе, ярлы крәстиән массаларыныщ революцион хәрәкәткә тартылыуы кеүек темалар — ә улар романда төп темалар — башҡорт крәстиәндәренен көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре ҙур художестволы көс менән һүрәтләнгәндәр. Шулай ук башҡорт халкының рус халҡы менән куптәнге традицион дуҫлығы, был халыҡтарҙың бергәләп көрәшеүҙәренең кәүҙәләнеше лә романдык иң уңышлы яҡтарының береһе.

Ғөмүмән, һ. Дәүләтшина китап укыусылар алдына оҫта һәм көслө художник булып баҫа; ул һөйләмәй, ә күрһәтә, фекер йөрөтөп кенә сикләнмәй, ә һүрәтләй. Кеше характерҙәре уларҙыд үҙгәрә барыу процесендә, уларҙың бер-береһе менән бәрелештәре аша асыла, әҫәрҙең сюжет һыҙығы шуға ҡоролған. Романда бик күп кеше образдары һүрәтләнә, ләкин уларҙык береһе лә тиерлек эҙһеҙ юғалып ҡалмай, уларҙың төп герой булғандары ла, икенсе планда торғандары ла — бөтәһе лә тиерлек хәтерҙә ҡала.

Романдың теле иҫ киткес бай. Беҙ быны уның лексик &айлығы яғынан ҡарап ҡына (һис шикһеҙ, был үҙе лә бик мөһим, сөнки әл& интенсив үҫеү дәүере кисергән беҙҙең әҙәби телде эшләшеүҙә һәр башҡорт яҙыусыһы актив ҡатнашырға бурыслы) әйтмәйбеҙ, һ. Дәүләтшина теле әҫәрҙә иң мөһим художестволы һүрәтләү ҡоралы, образдарҙы ҡороу сараһы, материалы булып хәрәкәт итә.

Беҙ Н. Островскийҙең «Ҡорос нисек сыныкты» романының художество көсө, геройҙарының ҡаһарманлығы менән һоҡланабыҙ һәм, бер ук вакытта, уның авторының ижади подвиге, әҫәрҙең яҙылыу тарихе алдында ла таң ҡалып баш эйәбеҙ. «Ырғыҙ» романы ла тав



шундай әҫәр. Был әҫәрҙең яҙылыу тарихе — үҙе бер ҡаһарманлыҡ. һәҙиә Дәүләтшина романды баҫырға әҙерләүҙә ҡатнаша алманы. Ул 1954 йылдын. 5 декабрендә Берө ҡалаһында үлеп ҡалды. Шуға күрә китапта булған ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе (мәҫәлән, диалогтарҙағы күп һүҙлелек, композиция, сюжет айыуына зарар килтерә торған ҙур булмаған тайпылыштар, бигерәк тә романдың аҙаҡкы главаларында схематизмгә тартым күренештәр, ваҡиғалар еҫтөнән ашығыс югереп үтеүҙәр) бөтөрөү еҫтөндә эшләй алманы. Был ауыр бурысты яҙыусының яҡташы, башҡорт халыҡ шагире Рәшит Ниғмәти башҡарып сыкты. Романдын, икенсе һәм өсөнсө баҫмаларын әҙерләгән редактор М. Игебаева иптәш етди текстологик эш үткәрҙе. Элек төшөп ҡалған ҡайһы бер өҙөктәр үҙ урындарына ҡайтарылдылар.

«Ырғыҙ» романы яҙыусы һ. Дәүләтшинаның аҡкош йыры, уның талантынын. һуңғы тапҡыр гөлтләп яныуы булды. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы тарафынан азат ителгән йырсы башҡорт ҡыҙы, ялҡынлы совет патриоткаһыныщ йөрәк тауышы ул. Ул тормошто ғәйрәтле һөйөү менән һөйә ине. Больницала яткан сағында, үлер алдынан ашығыс ҡына яҙған бер лирпк шиғырында һ. Дәүләтшинанын. көр күңеле, көслө рухы күренә, ҡайнар һөйөүсән йөрәгенең тибеше ишетелә. Шуға күрә беҙ уны бында тулы килеш тиерлек килтереүҙе кәрәк һанайбыҙ:

*Көн дә тыңлай доктор йөрәгемде,,*
*Иҫенә ала бик күп белемен.*
*Күренеп тора ихлас һөйләгәне,*
*Ярҙам иткеләре килеүе:*

*«Ҡайһы йөрәк сире шулай була —*
*Бер елкенә, тағы бер бөтә;*
*Ун биш тамсы ғына дарыу эсһә,*
*Тынысланa, уға шул етә.*

*Ә был, һинең йөрәк, ни өсөндөр,*
*Көнө-төнө ярһый, туктамай.*
*Әллә инде уны ярһытамы*
*Төндәр үткәреуең йоҡламай?»*

*Үткер уғын шаян Купидон*
*йөрәгемә сднскән урталай.*
*Һеҙҙә булмай уның дауаһы —*
*Бөтә барлығымды ут алған!..*

*Рәхмәт, доктор, һис тә зарар юҡтыр,*
*Борсолмауығыҙҙы һорайым.*
*Бик һирәк ул — ысын, ялҡынлы «сир»,—*
*һуңғы тапҡыр дөрләп янайым!..*

«Ырғыҙ» романы һәҙиә Дәүләтшинаның ҙур ижад емеше һәм, ғөмумән, бөгөнгө прозабыҙҙың оло ҡаҙанышы булараҡ, башҡорт совет әҙәбиәтенең данын артабан күтәрҙе. РСФСР яҙыусыларының беренсе съезында яҙыусы Леонид Соболев: «һ. Дәүләтшинаньщ «Ырғыҙ» романын укымай тороп, башҡорт халкының үткәнен аңлау, күреү мөмкин түгел» тигән юғары һәм хаҡлы бәйәне бирҙе.

«Ырғыҙ» романы башҡорт укыусыларының һөйөп укылған әҫәрҙәренең береһенә әйләнде. Инде ул, рус теленә тәржемә ителеп, бер нисә тапкыр баҫылып сыкты һәм күп милләтле совет халыҡтары «Ырғыҙ» әҫәрен уҙҙәренең рухи байлыҡтары хазинаһына ҡабул иттеләр.

*Ғәйнан Әмири*

# БЕРЕНСЕ КИҪӘК

## КӨТӨҮСЕЛӘР

**Әйҙәп кенә барған йылкымдың**
Алалары Єар ҙа буҙы юк,
Янып ҡына барған йөрәккәйемдең
**Ялҡындары бар ҙа ҡуҙы юҡ.**
*Халыҡ йыры*

1

—> ...Ялҡындары |бар ҙа шул ҡуҙы юк... һайт, һайт! Фють-фюуть!

—» һайт, ҡара юрға! Асатай, көтөүҙең башын ҡайырГ Ҡайҙа күләүеккә ҡайтараһьщ, Баланлыға бор. Асатай, һинә әйтәм бит!

Айбулаттың көслө тауышынан бөтә ялан яңғырай. үКаршылағы күгәреп яткан текә тау Айбулаттың көйөн дә, һүҙҙәрен дә, орошоноуын да яңғырап ҡабатлай.

Көтөүҙән уң яҡлап, аяңлап барған аты өҫтендә Асатай артҡа ҡайырылып, тауышын Айбулаттан уҙҙырырға тырышҡан кеүек, ҡысҡырып һораша:

—• Тоҙло күл яғына табан түгелме ни, Айбулат ағай?

—• Баланлы үҙәккә тиҙәр бит һиңә. Әйҙә, ҡайыр, ҡайыр! Ана, һулға табан — байҙыд йәйләүенә бор!

Айбулат менән Асатайҙыщ бөтә өҫ-баштарын көтөүҙән күтәрелгән сан. болото баҫкан, күҙҙәре менән тештәре генә йылтырайҙар. Улар таң ҡараңғылығынан бирле юлда йылҡы ҡыуып килә-килә арып та, йыбанып та, асығып та бөткәндәр.

Көтеүсе Айбулат үҙенең нисәмә йылдарға һуҙылған көтеүселек ғүмерендә малын үрешкә ебәргәндә лә, йәә алыҫҡа ҡыуғанда ла һәр ваҡыт моңло йырлап көн үткәреп ғәҙәтләнгән. Әле лә ул кеслө күкрәк тауышы менән ялан яңғыратып йырйа Г ^

Олоҫтанҡай һыуына таш ташланым
Сайпый-сайпый ғына батһын, тип,
Беҙгә лә хоҙай шулай ҡушҡан микән
Кеше туп һаһында ла ятһын, тип.

Урал көйөнөң уралып-уралып сыҡҡан, бер күккә ауа» лаған кеүек үргә күтәрелеп, бер текә ярҙар аҫтына төшөп юғалған кеүек булып, ә ҡайһы берҙә тигеҙ ялан буйлап йәйелеп янғыраған ҡатмарлы моңо, Айбулаттың ауыр уйҙарын, ялҡынлы хәсрәттәрен тараҡҡандай булып, сикһеҙ йәйләү яландарына тарала.

Айбулатҡа ҡарағанда байтаҡ йәш, урта буйлы, йыуантыҡ Асатай ат өҫтөндә лә дүрткел һымаҡ булып күренә. Ул йә Айбулаттың йырын тыңлай, йә үҙе һыҙғырып көйләй. Әгәр ҙә аҙ ғына ҡатарҙан сыҡҡан мал булһа, уны ҡайтара, ҡороған ерҙә дыһырҙатып һөйрәтеп, көтөүҙең йә уңына, йә һулына сабып сығып һайтылдай башлай. Айбулат әленән-әле Асатайға берәй нәмә тип ҡысҡыра ла тағы йырлай:

Ауаларҙа осҡан, ай, һар микән,
Аяккайҙарын кургән бар микән.
Эстәремдә янған хәсрәт утын
Тыштарымдан белгән бар микән.

— һайт, һайт, фюить! һайт, ҡола байтал! Күк юрға, һаш!

Ырғыҙҙың кенсығыштан кеньяҡҡа һуҙылып ятҡан оҙон буйы меһабәт Байсура тауының итәгенән сылтырап ҡына .сығып башланып китә лә, Баланлы йәйләүенә урап һуғылып, артабан тәгәрәШ

Был йәйләү бик иҫке замандарҙан бирле маҡталып килгән бай йәйләүҙәрҙең береһе. Элек бында Айҙаҡай ауылының бетә халҡы сығып йәйләй торған булған. Хәҙер инде, ярлы башҡорттар үҙ ерҙәрен мәңгегә һата башлаған замандан алып, ер Ныяҙғол бай ҡулына инеп бөткән дә, шулар эсендә Баланлы йәйләүе лә уға күскән. Шул ваҡыттан бирле Баланлының көмөшләнеп тулҡынған ҡылғандары, аллы-гәллә сәскәләре араһында һәр кем иркенләп, йәйрәп, саф һауа йотоп йөрөй алмай. Улар үҙҙәренең барлы-юҡлы малдарын да был бай яланда көтә алмайҙар. Байсура тауы битен ҡаплаған ҡалын урмандарҙа таң еәхәрҙән тороп һайраған һандуғастарҙың моңло тауыштарын да, көндәр буйы арымай-талмай саҡырған кәкүктәр тауышын да хәҙер ауылдың башҡа халҡы һағынып ҡына һөйләйҙәр. Улар бүтән, йәйләүҙәргә сығалар ҙа: «Ҡуй инде, Байсураға еткән ер ҡайҙа ул, унын болотҡа олғашҡан ҡаялары ҡайҙа ул, унын ҡурғыларындағы кеүек емештәрҙе ҡайҙан өҙөп ҡабаһың! Быны да ни, ҡола дала, ҡоро татыр әрем дә юшан, ағасы ялanғас, үҙәге йәмһеҙ, һыуы тәмһеҙ...» тип зарланалар ҙа Байсура тау, Баланлы үҙәк, Ырғыҙ йылғаһына йырҙар сығаралар, шуларҙы йырлап ҡайғыралар.

Байсураға менеп, ай, ҡараһам,
Орпаҡ менән Мулдаҡ күренә.
Ерһенмәйем, ялан, ай, ерендә,
Заруратган йәмле лә күренә.

Сәҙе генә буйы, ай, татыр,
Ат аяҡкайҙарын аҡһатыр,
Беҙҙең генә уйнап-көлгән ерҙә
Күк үләндәр үҫмәй күп ятыр.

Хәҙер инде был тирәләрҙә лә, Өсүҙән, Сәҙе буйҙарында ла дөйөм йәйләү тормоштары бөткәнгә күп йылдар үткән! Йәштәрҙең күбеһе йәйләүҙе белмәйҙәр, белгәндәре лә шул Баланлы йәйләүен генә беләләр ине.

2

Ныяҙғол бай нисә йылдар инде ошо бай, матур ерҙәрҙә үҙе баш, үҙе түш булып маҙырап йәшәй. Үҙе теләгәндә генә, ашыҡмай ғына, ер кибеп, үләндәр сәскә атҡас, ваҡ малдын. балалары бауыр күтәреп утыҡҡас ҡына йәйләүгә сыға. Ул үҙенең көтеү-көтеү малы менән яланды ҡаплай. Өс бисәһенә өс аҡ тирмә, ҡалған семьяһына тағы бер нисә тирмә ҡороп ебәрә лә, шунда күҙгә тиклем ҡымыҙ эсеп, ҡунаҡ һыйлап, иреккәнендә ҡалаға барып килеп, ситтән килгән түрәләр менән донъя емереп, ҡоторошоп йәй үткәрә. Ә кеҙ еткәс, ,ит, май, бал еҫтәре аңҡыған, хандар һарайы һымаҡ яҡшы, йылы, өлкән ейенә тағы күсеп ҡайта.

Бейек тауҙар араһынан сығып, далаларҙа борғолаСнып-борғоланып шыуған оло аҡ йылан һымаҡ, наҙланып аҡҡан Ырғыҙ йылғаһы, Байсура тауҙың итәгенә тотҡан киң таҫма кеүек әйләнә лә, тағы әллә ҡайҙа ағып китә. Яз башында ҡалын боҙҙар иреп ташҡандан бирле унын тыныслығын бер кем дә боҙғаны юҡ. Балыҡтар ҡояш нурҙарында кемөш тамсылар сәсрәтеп сиртәләр ҙә, түңәрәк һырлы йондоҙҙар яһап, тепкә сумалар, үҙҙәрен ҡыуалаған эре балыҡтарҙан ҡасып юҡ булалар.

Бына бөгөн Айбулат менән Асатайҙың ҡыуып әйҙәп алып килгән йылҡы көтөүе Ырғыҙ буйының йомшаҡ

үләндәр, сәскәләр менән ҡапланған уйпатын үтеп, тал сауҡалары, ҡомло ҡырсындар менән ҡапланған еренә килеп төштө. Көтөүҙең кешнәшкән бейәләре, сырҡыраған ҡолондары, ушҡырған айғырҙарының тауыштары, күмәк тояҡтарҙың ҡыштырҙап тыпырҙауҙары менән яр буйы шаулап китте. hыу ситендә ғәмһеҙ йөҙгән балыҡтар уртаға ҡастылар. Сауҡаларҙағы төрлө ҡоштар, был сырсыуға аптырашып ҡараштылар ҙа, йырҙарын бүлеп, оло урманға табан остолар.

Айбулат, үҙе һыбай килгән аттан төшөп, уны буш ебәрҙе лә, эйәр, тукымын ҡулына алып, юғәнен яурыны аша һалып, тирмәләр ҡороласаҡ ҡалҡыуға табан атланы. К&төү янында Асатай ҡалды.

Иылҡы килеп таралғас та, яландын, ауыл яҡ һыртынан ҙур һыйыр көтөүе күренде. Уларҙан арттараҡ леһерҙәп, ерҙән тәгәрәгән оло ҡара болот һымаҡ ер ябып, бер нисә мең баш ҡуй көтөүе шыуҙы. Был кетөүҙең ян-яғынан, тәртипле урынлаштырылған ғәскәри ҡарауыл кеүек, алты көтөүсе, арып-талып, алпанлап атлайҙар. Улар араһында арттанырак талтанлап атлап, көтөүсе ҡаҙаҡ Истебай, башындағы ҡолаҡсынын ялпылдатып, эҫегә, саңға йонсоп арып килә. Уның оҙон буйы, киң яурыны, билбау урынынан сүс еп менән быуған ялбырап бөткән алама көпөһе, алыҫтан ҡарағанда, атлап килгән йәнле ҡарасҡыны хәтерләтә. Ул оҙон сыбыртҡыһын шартлатып яланды яңғырата, тыңлауһыҙ ҡуйҙарҙың эркелешеп ситкә тарткан ҡайһы бер төркеменә асыуланып ҡыскыра, уларҙы әрләй.

—• Ҡайҙа боролдоң, бәррә! Уй арам ҡатҡыры! Бәррә!

Ҡатарлап баҫҡан яҫы аҡ ука кеүек булып нисәмә йөҙ саҡрымдарға һуҙылған, ҡайҙа барып осона сығыуы билдәһеҙ булған ялан юлының ике тәгәрмәс эҙе араһында ялланып үҫкән бейек үләндәрҙе һыҙыртып, байҙың йорт-ер күсе килде. Тирмәнең кирәгә, сағараҡтары, кейеҙҙәре нығытып тейәлгән пар аттар егелгән биш-алты йек, уның артынан һауыт-һаба, урын-ер, эшсе ҡатындар бала-сағалары менән теҙелешеп ултырған тағы бер нисә йөк килде. Иң аҙактан ике күсәргә икешәр тәгәрмәс кейҙереп, уның өҫтөнә ултыртылған өлкән ағас будканы дүрт үгеҙ саҡ һөйрәп килеп туктанылар. Будка һыртында, алға ултырып, үгеҙҙәрҙе ҡыуып килгән Сәйеткол, будка ишеген асып, бисәһе Хәлимәгә төшөргә ҡушты.



—1 Әйҙә, бисә, тиҙерәк тө,ш инде. Ни, ҡоҙағый һьшаҡ, әйткәнде көтөп ултыраһың!-г тине. '

Хәлимә эҫегә әлһер.әп, тилғып ултырған еренән күҙен асты ла, ҡапыл ҡуҙғалып, ҡулында йоклап киткән йәш балаһын тотоп, будканан сыҡты.Бала былҡуҙғалышҡа •ҡапыл уянды ла тызылдап илай башланы. Хәлимә уны, ураған юргәктәре менән ялпылдатып алып барып, өлпө төбенә күләгәгә һалды, тик ул һаман мыжҡылдап илағас, уны туктатыр өсөн икмәк сәйнәп төйгән .сепрәк имеҙлекте төкөрөк менән ашығыс ҡына ебетеп, бәпесенең ауыҙына ҡаптырҙы ла йөктәр бушатырға югерҙе.

Ҡояш тауға яҡынлап, көн ҡыҙыуы һүрелгәс кенә, пар күк ат еккән елкән ҡара повозкала Ныязғол байҙың оло бисәһе Рәхимә, уртансы бисәһе Ғәзимә, эргәләренә йәш бисә Миңлекәйҙең ҡыҙы Хаятты алып, күсер ултыртып килеп төштөләр.

Улар килеп төшөүгә ҡоролоп бөткән тирмәләрҙе ашығыс йыйыштырып йөрөгән Мәғфүрә, янында урағып йөрегән Диләфирузға тирмәләге мендәрҙәрҙе ҡағып күпертергә ҡушты ла, үҙе, югерә-атлап, байбисәләрҙе ҡаршы алырға китте.-

Ул уларға ғәйепле йылмайып:

—' Бынау бейәләрҙе бәйләп йөреп, тирмәләрҙе йыйыштырырға һуңға ҡалдыҡ әллә ни. Улай ҙа ҡайнаға үҙе килмәгән икән әле, — тине.

Кешегә ҡырыҫ, күҙенең ҡабаҡ аҫтынан тексәйеп ҡарап, үҙенә буйһонғандар менән һөйләшкәндә екереп һөйләшә торған, шуның есөн уларҙан «бупылдыҡ Ғәзимә» ҡушаматы алған быжыр битле, йәмшек танаулы уртансы бисә, повозканан тешөү менән, бер кемгә лә иғтибар итмәй, бетә йәйләүгә күҙ йөрөттө. Унан һуң Мәғфүрәнең өлдөрләп тороуына ла бер яуап та бирмәй, уны күрмәгән дә кеүек иғтибарһыҙ үтеп, аҡ тирмәгә инеп китте.

Ғәзимәнең төҫкә йәмһеҙ, үҙе уҫал булыуына ҡарамай, Ныязғол байҙың уны икенсе бисәлеккә алып тороуына күп кеше ғәжәпкә ҡала. Уның тураһында күп хәбәрҙәр йөрөй. Ҡайһы берәүҙәр: Кәмәлектең Иәнтүрә старшина менән Ныязғол бай араһында ниндәйҙер йәшерен ыҙғыш сығып, Иәнтүрә уны ҡурҡытып, кейәү сыҡмай ултырған ҡыҙын биргән икән, тиҙәр. Ҡайһы берәүҙәр: Ныязғол бай Кәмәлек буйына барып һигеҙ ауылдан ҡыҙ күҙләп йөрөгәндә* йәнтүрә старшина ҡыҙы тип, кис кенә тәҙрә үтә Алтынғужа тигәнТ р кешенең бик һылыу ҡыҙын

40973
БИБЛИОТЕКА
объединенного пр фкома
Учалинского ГОК

күрһәткәндәр икән дә, ул бер күреү менән уға ғашиҡ булып, әллә ни тиклем мал түгеп алған икән дә, һуңынан, ҡушылғас — ҡараһа, ошо ямаҡ Ғәзимә булып сыҡҡан икән, тиҙәр. Ныязғол быға бик ғәрләнеп үкенһә лә, сер бирмәҫ өсөн риза булған икән, тип көләләр. Ҡайһы бер йор кешеләр Ныязғол ағайҙан: «Ни эшләп улай итеп йәш кәләште һайламай алдың?» — таш һорағас, ул: «Өлөшө-мә тейгән көмөшөм», — шп әйткән икән, тип, «Ғәзимә ул Ныязғолдоң көмөшө», тип мыҫҡыл итәләр. Ә инде ҡайһы берәүҙәре: Ныязғол бай Ғәзимәне күреп, белеп, уның сикһеҙ бай һәм старшина ҡыҙы булғаны есөн, уның ағай-энеләренен, дә күбеһе шулай бай, түрәләр булыға, төрлө ҙур ҡалалар менән эш иткәндәре өсөн алған, тиҙәр. Ғәзимә артынан килгән кетеү-көтеү мал, ике ҙур ағас йорт, йекләгән өй йыһаздары ошо һуңғы хәбәрҙең дөрөҫ булыуын раҫлайҙар. Ни булһа ла булған. Ләкин хәҙер ун йыл буйы йәш бисә булып, һигеҙ йыл уртансы бисә булып ғүмер итеп килгән Ғәзимә, үҙенең бер балаһы ла булмауына ҡарамай, ошо оло йорт хужалығыңда үҙәк таяуҙарҙыщ береһенә әйләнгән. Ул үҙенең иренә ҡаршы, үҙенең елкән көндәшенә ҡаршы тел әйтмәҫкә өйрәнгән. Тәү килеп төшкән йылдарҙараҡ ул үҙенең йәш кәләш булыу эрелеге менән маһайып ҡараһа ла', Ныязғол бай уны тиҙ өйрәткән. Сөйҙә элеүле торған беҙергәле ҡамсыға ҡырын ғына күҙ һалған да, бик тыныс тауыш менән:

—• Ғәзимә, абай бул! Минең ейөм эсендә тауыш сығыр булмаһын. Мин һине Рәхимәнән артыҡ икән, һылыу икән, тип алғаным юҡ. «Ирҙең быуыны һайын ҡатын» тигән мәҡәл бар. Ләкин ирҙең һәр бер -катынының үҙ урыны булыр, шуны белергә кәрәк, — тип ҡуйған.

Ғәзимә ошо көндән һуң, үҙенең әҙәм көсә етмәҫлек ауыр, тотош алтын-көмөштән, мәрйендән, аҫыл ҡашлы сулпыларҙан бөткән ҡашмауын кейеп, һаҡал, селтәрҙәр һалып, ебәккә солғанып килгән атаҡлы старшина ҡыҙы булыуына ҡарамай, көндәшкә дусар булыуы өсөн әсе күҙ йәштәре түккән дә яҙмышына риза булған. Хәҙер ул оло бисәгә өнһөҙ буйһона, унан еңелеп, уға тейешле булған хөрмәтте күрһәтергә лә өйрәнгән. Үҙенән һуң йәш кәләш булып төшкән татар ҡыҙы Миңлекәйҙең һылыулығына, ҡупшылығына, Ныязғолға ҡуштанлығына көнләшеп, эстән янһа ла, үҙе менән бик аҙ иҫәпләшкән был ҡатындың үткерлегенән ҡурҡа. Ә уның балаларын үҙ балалары кеүек итеп ярата, ҡарай, бауырына баҫа. Өй эсендәге, өй



тышындағы тулып эшләп йөрөгән байҙың хеҙмәтселәренә килгәндә, ул инде, үҙенең бәхетһеҙлектәренең бөтә үсен алғандай итеп, ирме, ҡатынмы, ҡартмы, бала-сағамы булыуына ҡарамай, бөтә көсте уларға төшөрә, зәһәр менән ажғырып тора.

Мәғфүрә Ғәзимәнең, повозканан төшеү менән, ҡыҙыл сатин күлдәк, йәшел ебәк яулыҡ, батышай еләндәре менән күлбеп, һүҙ ҙә ҡушмай текәнләп киткәненә арттан ипләп кенә күҙ һалды ла: «Тағы һулаҡай ҡабырғаһы менән ятып йоҡлап килгән, ахыры, бигерәк тымһайған, эшемдән тағы әллә ниндәй мөнтөктәр табып әрләр инде», тип уйланды.

һимеҙ өйрәк кеүек байпандап атлап йөрөй торған оло бисә Рәхимә повозканан көскә шыуып төштә. Ул, бвр аяғы менән аҡһаңлай-аҡһаңлай, повозка янынан ҡуҙғалып китә алмай туктаны ла Мәғфүрә менән һөйләшә башланы.

Рәхимә йәш сағынан һылыу булып, әле лә төҫөн һалмаған, буртлансыҡ битле, яҫы маңлайлы, ҡуңыр күҙле, ҡыр танаулы, йоҡа ҡыҙыл иренле ҡатын ине. Уны Ғәзимәгә ҡапма-ҡаршы ҡылыҡлы кеше, тип йөрөтәләр. Кешегә алсаҡ, һүҙгә ипле, Ныязғолдоң иң баҫалҡы, аҡыллы ҡатыны тип һанала. Мәғфүрә лә уға ҡарата башҡаларҙан артыҡ хөрмәт һаҡлай, бигерәк тә уға эше менән ярарға тырыша. Сөнки Мәғфүрә үҙенең башына нужа төшкән һайын, ашарыша бөткән һайын, Ғәзимәләр ҡаҡҡан һайын, ошо байбисәгә иңкәлә. Ә Рәхимә уны бер ваҡытта ла буш сығармай, ситләтеүселәрҙән яйлап ҡына әрсәләп алыл ҡала. Асыҡҡанда берәр туҫтаҡ он, эсәкҡарын, бер нисә баш ҡорот, алама ҡата, иҫке күлдәк кеүек нәмәләрҙе Мәғфүрәгә бирә лә:

— Мә, ал, килен, тамаҡ ялға, өҫ-башыңды бетәйт, балачсағаңа юнәтеп тегеп кейҙер. Ямаһаң, әллә ни саҡлыға етер, иҫке булһа ла ныҡ әле ул, фәлән балам фәлән-сә йыл ғына кейҙе, яратмай ташлағанғр ята. һиндә юғалмаҫ, эшләп түләрһең әле, — тип, береһенән-береһе шыма, йылы **һүҙҙәр** менән ярлылыҡтан интеккән Мәғфүрә«ен йәнен иретә, үҙенә тарта.

Мәғфүрә әле лә, Рәхимәнең аҡһаңлауын күргәс, уның янына ашыҡты.

— Аһ, өлкән еңгә, аяғыңа ни булды, ауырттырҙыңмы әллә? — тип һораны.

Рәхимә, аяҡтарын ыуалай-ыуалай:

—' Ай, атаң бар булғыры. Бына оҙаҡ ултырып килеп, аяғым ойоп бөткәнсе. Ҡайнағаң бөгөн дә, иртән дә килә алмаҫ әле ул. Юғарынан әллә ниндәй өлкән урыҫ түрәләре килеп төштө. Шунан старшина һайларға барасаҡтар әле. Миңлекәй менән икәүһе шулар менән әүерәләнеп тороп ҡалдылар. Унда арлы-бирле эштәре бөткәс, бында тирмәләр әҙерләнгәс, тәкәләр һуйып, уларҙы ошонда ҡунаҡҡа алып килерменме-ниме тигәйне, нишләр. Әле ни, һеҙ бында төптө юнәтеп бөтмәгәнһегеҙ икән. Мин инде эште бөтөрөп ҡаҙан аҫҡандарҙыр, тигәйнем. — Ул, маңлайына ҡулын ҡуйып, бөтә йәйләүгә күҙ йөрөтөп сыҡты. —' Түрәләрҙең килгән береһе ошо йәйләүҙә ҡунаҡ булырға анһығалар бит. Быйыл, әллә ни, һуңлаңҡырап та сығылды шул. Улар унда үҙҙәренең эшен бетөргәнсе, беҙ ҙә бында тайяр әҙерләнеп көтөп торорға кәрәк.

Мәғфүрә башытан шыуып сиселеп барған, иҫкереп уңып бөткән эре биҙәкле француз яулығын ашығыс төҙәтеп бәйләне. Повозкала байбисәләр сумып ултырыуҙан уйылып яткан мамыҡ яҫтыҡ, ҡыҙыл биҙәкле аҡ кейеҙ, йәшел сатин юрғандарҙы ҡулына алып ҡаҡты ла, һаман аяҡтарына юнләп баҫа алмай аҙапланған Рәхимәгә кәңәш бирҙе:

— Өлкән еңгә, аяғыңды салауат әйтеп һыйпа, салауат әйтеп төкөрһәң дә ебәрә торған ул.

— һыйпаным инде. Салауат укып текөрөп тә ҡараным. Әллә ни ебәрмәйсе. Ситек сисеп һыйпаһаң, мәсих боҙола инде, яңынан аяҡ йыуып кейергә кәрәк.

Рәхимә аҡһаңлап тирмәгә ыңғайланы. Үҙе артынан нәмәләр күтәреп килгән Мәғфүрәнән тағы һорашты, бойороҡтар бирҙе.

—> Бейәләрҙе бәйләп ҡуйғанһығыҙ икән. Бөгөнгә бәйләмәй торғанда ла ярар ине юлда йонсоп килгән хайуандарҙы. Кисә бер әйткәйнем түгелме мин һеҙгә. Асатай йылҡыларҙы әллә ҡайҙа таратып ебәрмәһен тағы. Ул ни, ята ла йоҡлай торған. Оло кеше һин үҙең киҫәтеп әйт уға, Мәғфүрә килен. Башҡаларҙың һүҙен ул ҡолағына ҡапыл ғына элмәй торған. Беҙ ултырып килгән аттарҙы таң ашырмай ҡуша күрмәһендәр, эҫеләй булыр, бик ҡыҙыу килдек.

Улар тирмәгә килеп инделәр. Рәхимә, уның эсен әйләндереп ҡарап, риза булған төҫ менән һейләнде:

— һәйбәт булған булыуын. Тик бына тирмәне аҙ



ғына анауындараҡ, ҡалҡыуғараҡ ҡормағанһығыҙ икән, Унда яҡшыраҡ булыр ине, тим дә.

Мәғфүрә алып килгән нәмәләрен ҙур һары ҡалайлы ялтыр һандыҡ өҫтөнә таҫлап өйөп ҡуйҙы ла үҙен дә, бүтәндәрҙе лә яҡлағандай итеп яуапланы:

—' Әллә шул, үҙебеҙ ҙә Айбулат менән шулай итәйекме әллә тип һөйләшкәйнек тә, шунан уЛ: «Ярар инде„ ошонда ҡорайыҡ та ҡуяйы-к, оҡшатмаһалар күсерербеҙ», — тигәс, беҙ ныҡышманыҡ.

Өҫ-башын сисенеп, кәзәкейҙәрен урҙаға элеп маташҡан Ғәзимә, уларға ҡарамай, асыулы мөңкөлдәне:

— Айбулаттың уның ғүмеренә шул сей киреләге ҡалмаҫ инде. Эште эш булһын тип, әҙәм ыңғайына киләме ул, икенсе Сәлимә. Баштан-аяҡ әсәһе!

Уларҙын, һүҙҙәрен тышта сырылдашып талашып илаҫҡан балалар тауышы бүлде.

Повозканан ырғаңлап һикереп төшкән Хаят күп ваҡыт үҙе менән бергә уйнай торған Мәғфүрәнең ҡыҙы Диләфируз янына югерҙе. Уны, әсәһенең ҡушкан йомоштарынан бүлеп алып, әйҙәләп етәкләне лә, икәүләшег? сәскәләр менән күмелгән аҡланға югерҙеләр. Улар унда-сүтерләшә-сүтерләшә үҙҙәренең уйындары, ҡурсаҡтары, юлда килгәндәге хәбәрҙәрҙе һөйләшеп сәскә йыйырға* тотондолар. Дилә сәскәләрҙең төрлөләрен, матурҙарын,. еҫлеләрен йыйып бер елкән букет яһаны, уны төрлө йәшел үләндәр менән уратып бәйләне. Ул ошо күҙҙең яуын-алып торған сәскәләрҙе ике ҡуллап ҡосаҡлап, икенә» үргән сәс толомдарын сайҡалтып, шаяра-шаяра ҡайтырға ыңғайланы. Бер нәмәнең дә үҙенекенән артыҡ, матур' булыуына ейрәнмәгән көнсө Хаят, Диләнең сәскәләренә» әле генә күргән кеүек, һоҡланды ла, үҙенең насар, тәртипһеҙ итеп йыйған сәскәләрен ергә ырғытып ташлап:

—' Диләкәй, һин уны миңә бир. Үҙең тағы йыйырһың, —• тине. Ләкин Дилә күнмәне.

—' Бәй, ни эшләп мин һиңә бирәйем ти, үҙең йыйғанынды ташлама! —тине.

Хаят, шуға асыуланып, унын, иң матур сәскәләре» йолҡоп алды. Диләнең дә Хаяттан еңелгеһе килмәне, уны ҡапыл этеп ебәрҙе лә, үҙе алға югерҙе. Хаят уны> ҡыуып етеп, ҡалай көмбәҙҙәр таҡҡан сәсүргесенә йәбеште. Шулай итеп тарҡкылаша торғас, ысынлап һуғышып киттеләр. Хаят туҙған һары сәстәре, ҡаласа тегелгән әллә исә итәкле батист күлдәге менән әлтелдәтеп юге-

реп илап тирмәгә инде лә, ужарланып, бөтә сәскәләрен <балаҫ өҫтөнә туҙҙырып ырғытты. Үҙе Ғәзимәнең алдына барып тәгәрәне.

Ғәзимә:

—' Алла, баламды' ни эшләттегеҙ? — тип, күҙҙәрен .алартып баҡырып ебәрҙе. Хаяттың туҙған сәстәрен һыйпаштырып:— Ни булды ла ни булды? — тип " әлдиләне. Хаят уның һайын нығыраҡ буҫығып, мыршылдап танауын тарта-тарта, ошаҡларға кереште:

—| Бәләкәй әсәй, ҡара әле, анау аҡырай күҙ Диләкәй тминен. сәскәләремде бирмәй. Үҙе минекенән күп итеп йыйған да маҡтана. «һиңә бирмәйем шул, үҙең шулай итеп йый», тигән була. — Ул тағы ла нығыраҡ үкереп илап >ебәрҙе лә өҫтәп ошаҡланы:

—' Бәләкәй әсәй, ул әле мине мишәр турғайы, ситай, һарыбаш, тип әрләне. Шунан мине төртөп йыҡты, ҡара >сурнай. И-и-и...

Ғәзимә Хаятты тағы ла нығыраҡ әүрәтте:

— Ҡара һин уны, ҡараҡайҙы. һин һуң үҙең уны: «Хәйерсе ҡыҙы, асҡаҡ», тип әрләһәң ни була! Ни эшләп улайтып уға бирешеп тораһың, йолҡошҡа?

Был ғауғаның былай ҙурайыуын күреп торған Дилә•фируз, әсәһенең күҙ ҡарашынан уҡ у^ен туҡмарын һиҙенеп, сәскәләрҙе ҡосаҡлаған көйө, тирмәнән ун таяҡтар •самаһы ары ултырған будка артына йүгерҙе. Ул унда, үҙеяең уртаға ярып тарап үргән шоморт ҡара сәстәренең туҙған шәлкемдәрен сәскәле ҡулы менән һыйпай-һыйпай, ҙур үткер ҡара күҙҙәре менән төмһайеп, ҡара ҡыйғас ҡаштарын төксәйтеп, әсәһенең үҙе янына килгәнен көтә башланы.

Ғәзимә, тирмә алдына сығып алып, ҡайҡайып баҫты ла Мәғфүрәне, ҡыҙын тыймауҙа ғәйепләп, әрләргә йә•беште:

— Бала аҫыраған булаһыц, Мәғфүрә килен, шуны •аҙыраҡ тыйнағыраҡ итеп тотһан, булмаймы? Ҡуйсы, ҡуйсы, ҡыуанып ҡына йөрөгән баламды ҡайһылайтыш •илаткан. Ҡәһәр һыккыры, ҡара мәрйә! Үҙе иламай ҙа <бит әле, сыт та итмәй, һинең ҡороғороң. Ул ни эшләп 'беҙҙең Хаятты «мишәр турғайы» тип әрләй әле ул? Дна шул һеҙҙән, ололарҙан, ишеткәнен әйтә ул. һеҙҙең Миңлекәйҙе мишәркәй тип һөйләгәнде ишетә. һеҙ ас бет кеүек әсе тешләйһегеҙ. Үҙегеҙҙең тамаҡ туйҙырып йөрөгәнегеҙгә рәхмәт әйтеү юҡ, байҙын, балаһын рәнйетәһегеҙ.



Кәрәгегеҙҙе алырһығыҙ әле, кеше ҡәҙерен белмәгән эт* тәр! — Ул будка яғына ҡарап Диләгә йоҙроҡ күрһәт-; те: —• Ну суска, мин һине! Әсәң өйрәтмәгәнде өйрәтер-, мен!

Мәғфүрә әллә ниҙәр әйтеп Диләне яҡларға уктаlhа ла, Ғәэимәнең әсе теленән, эште ҙурға ебәреүенән ҡурҡып, ҡыҙына асыуланды.

—• Ҡәһәр һуккан бит ул минең Диләфируз, ен ботағы! Әйткәнде тыңламай, теңкәмде ҡорота әйтәгүр! —тип. ҡыҙып китте лә, югерә-атлап барып, ҡыҙын тотоп алды,, усы менән уның башына бер-ике сәпәп һуғып ебәрҙе: — Бар, үҙебеҙҙең ҡыуыш тирәһенән китмә, бында һиңә ни?-_ нәмә бар! — тине.

Дилә илай-ялай үҙҙәре ултырып килгән таҡта арбаның тәртәләрен күтәреп яһаған ҡыуыш аҫтыва инеп ул-:• тырҙы.

Ул үҙе бәләкәй булһа ла, Хаяттың эшләгән ғәҙелһеҙлеген яҡшы аңлай. Ғәзимәнең үҙен әрләүен Хаяттың. ошағы арҡыры булғанын белһә лә, әсәһенең былай аҙапланыуына тешенә алманы. Уның әсәһе Диләне бөтә йәберләүсе кешеләрҙән яҡларға, кеше теле, кеше ҡулы тейеүҙән һаҡларға тейеш була тороп та, ни өсөн ул Ғәзимә алдында һукты әле? Дилә шуға яуап таба алмай[1] намыҫланып, үкһеп-үкһеп иланы. Уныц шулай еенләп илаған тауышы әллә ни хәтлем ишетелеп торҙо ла тьшды. йоҡланы ахыры.

Рәхимә был ыҙғышты яратманы. Ул ике яҡты ла килештергес тауыш менән тыныс һөйләнде.

—• Ҡуйығыҙсы, ҡуйығыҙ. Бала араһына инеп, бала булып йөрөү ололарға килешкән эш түгел. Улар ни, көсектәр кеүек, хәҙер талаша, хәҙер яраша. Улар араһынаәсә ҡыҫылмаһын ул. Әллә, үҙем нисәмә бала үҫтерҙем, шулар арҡыры кешеләр • менән бер ваҡытта ла телтә» килешкәнем булмаҫ. Ҡуйығыҙ бушты. Ҡана, бер һәйбәтләп, еәхрәлә иркенләп сәй эсеп алайыга әле. Аш бешкәнгәтиклем ҡорһаҡ та асып китер. Мәғфүрә килен, һин дәбалаға теймә, эшенде ҡара. Самауыр ултырт. Иәш килендәр ҡайҙа? Улары ла һыйырҙарҙы һауып бетә алмайоҙаҡматашалар.

Мәғфүрә ҡыҙып китеп Диләһен һуғып алһа ла, уның ғәйепле түгел икәнлеген белгәнгә, йөрәге йәлләү менән әсене, Ғәзимәгә асыу менән ярһыны. Шунын, еҫтөнә Рәхимәнең килештергес һүҙҙәренән күңеле йомшап китте.

Күҙҙәренән мөлдөрәп сыҡҡан ике тамсы йәш бертөге, яҙғы елгә елһеп, ҡояш менән ҡарайып тутлаған ике бите Зуйлап эйәгенә тәгәрәп төштөләр. Ул уны, байбисәләргә күрһәтмәҫкә тырышып, кәзәкейенең йышылып бөткән ямаулы ең остары менән һыпырҙы. Рәхимәнең бойороғон йәһәт еренә еткерергә тырышып, хәҙер генә ергә ҡаҙып ағаған усаҡ янында борҡоп ҡайнап ултырған өлкән аҡ самауыр янына йүгерҙе. Унан килеп тирмә алдына кейеҙ юрған йәйеп, ике ҙур аҡ тышлы мендәр һалып, ашъяулыҡ йәйеп, сәй әҙерләй һалды.

Ул әҙерләп бөткәс, Рәхимә:

— Сәйҙе һин яһа, Мәғфүрә килен, һинен. ҡулыңдан сәй тәмле була, — тине.

— Тәмле генә булһынсы, минән эш ҡалмаҫ, — тине Мәғфүрә.

Байбисәләр, табындың түр яғы булған тирмә яҡ ситенә йыйылышып ултырып, киң даланың саф һауаһына ҡатышып тәүге шәшкегә ҡойған, танауҙы ҡытыҡлаған яҡшы сәйҙең еҫен күкрәктәренә тарттылар. Ике әсәйҙең уртаһына ултырған Хаят та илауҙан ҡыҙарған күҙҙәре менән көлөп иркәләнде. Ғәзимәнән әле бал, әле эремсек Кораны. Ғәзимә уны еҙләкһеҙ һыйланы. Шул арала үҙен һис бер яратмаған Мәғфүрәне лә сәнсеп ҡалырға тырышып, көбө эсенә төшкән себен һымаҡ мөңгөрләне.

— Аша, Хаят бәпесем, аша. Ни нәмә бирәйем, ҡалаҫка бал яғып бирәйемме, әллә варение менән перәник ашайһыңмы? Аша, балам, юҡҡа буҫыҡма. Бынау әтер-аламаларҙы әйтәм, ҡорсаңғылар, үҙҙәренең бала-сүрәһе менән килеп һыйып тороуҙары етмәй, бай балаһын ҡағалар. Уларға аҙ ғына өндәшмәйерәк торһаң, хәҙер түбәгә сығырға әҙер торалар ул. Эс сәйеңде, балаҡайыш. Бал менән эс!

Мәғфүрә башын баҫҡан көйө өндәшмәй сәй яһауында булды.

3

Ҡояш, шаршау оитенән ҡарап көлгән һылыу шаян килендәй, Ҡырморон тауының ялдары артына битен йәшерә биреп, бер аҙ көлөп торҙо ла нурлы уктарын, ерҙән альвд, күккә һирпте.

Шрғыҙҙың ҡурғаш иҙән кеүек яйлап аҡҡан һыуының Байсура тауы итәгенән әйләнгән бөгөлөшендә кәтөүселәр, малдарҙы өйөреп, төнгө ятаҡҡа әҙерләнәләр. Улар. үҙ-ара низәрҙер ҡысҡырышып һөйләшәләр ине. Уларҙан, ундараҡ һайтылдап йыл-кыһын тау ашырған Асатай:

— Айбулат ағай, мин Ырғыҙ башында булырмын.. Килһән, ҡола атты уйпагка тышаулап ҡалдырҙыш! — тип ҡысҡырҙы. Айбулат, һыу буйындағы ҡолондар елеһенә тип уратып үрелгән ситәндең нығытылмай ҡалған мөйөштәрен йәш тал менән нығытып, ҡапкаһына арҡыры һайғау ағастары һалып, ҡыҫып бәйләй ине. Ул Асатайға^

— Ярай, һуцыраҡ килермен! — тип яуапланы.

Уларҙың көслө ҡалын тауыштары, Байсураға һуғылып килеп, ҡабат яңғыраны ла, һүҙҙәре, береһен-береһе ҡыуышҡан кеүек, ҡабатланып барып, Ырғыҙ өҫтөнә таралып юғалдылар.

Айбулат, һалмаҡ атлап, тирмәләргә ынғайланы. Унын. мыҡты, төҙ, ҡупшы кәүҙәһе, энергә яҡынлаған аҡһыл. тоноҡ яҡтылыҡта тағы ла төҙерәк, тағы ла мыҡтыраҡ булып күренә. Ул, башындағы аҡ кейеҙ ҡалпағын алып, сәстәре араһындағы тирҙәрен һыпырҙы. Унын етек һаҡал-мыйығы, битенең эйәк, сикәләрен ҡуйы ҡаплап, әле егерме дүрте лә тулмаған йәш кешене байтаҡҡа олағайтып күрһәтә. Тик унын тигеҙ ҡыр танауы, ҡайһы саҡта уйнаҡ, ә ҡайһы саҡта уйсан үткер ҡара күҙҙәре, келгәндә ҡыйылып һикерә торған баҙыҡ ҡара ҡаштары, ҡояшҡа янған битен сағылдырып ебәрә торған тигеҙ аҡ тештәренә абайлап ҡараған кеше генә әле унын яңы ир ҡорона тулған йәш кеше икәнен күрә.

Айбулат кәзәкейен сисеп ҡулына алды, иҙеү һиҙәбен, ысҡындырып, күлдәген елпетте. Саҡ ҡына өргән йылы еләҙгә битен ҡуйып, тәрән тын алды:

Сәйгә алдан туйып алған Рәхимә бик кәйефләнеп,. аяҡтарын һуҙып ебәреп, тирә-яғына ҡаранды. Шунак оноткан бер нәмәне иҫенә төшөргән тауыш менән:

— Әйткәндәй, беҙҙең ялсылар, күсеп килгәс, сәй эсеп алдылармы әле, юҡмы шулар? — тип Мәғфүрәгә һорау бирҙе.

— Юҡ, сәй эсергә ҡул тейеү ҡайҙа ти ул. Бушай алмаҡ, елкән еңгә. Быны иртәнән бирле тәүбашлап ошосамауырҙы ҡайнатып торабыҙ. Йыйыштырына-йыйыштырына ошо көнгә ҡалдыҡ. Төш ваҡытында бер йыйылышып ҡатыҡ эсеп алғайныҡ. Айбулат та, Асатай менән Истебай ҙа ҡулдарына берәр һыныҡ икмәк тотоп ҡына киткәйнеләр. Бала ҡуйсылар ҙа шул һыныҡтары менән

генә тамаҡ ялғап, ҡуй көтөүе янында йоҡларға яталар янде.

—* Улай булғас ни, бындағылары бына~ ҡалған сәйҙе эсНендәр. Айбулатты ла ҡайтарығыҙ. Килендәр ҙә ултырһындар, бер ҡайнаған самауыр барыһына ла етер. Аш бешеп, ҡасан уны ашағансы, ҡарындары асып китер.

Ғәзимә туйып шәшкеһен түңкәрҙе лә, алдында йоҡлап яткан Хаяттың башын һыйпап, мыжый-мыжый һүҙгә ҡушылды:

—. Иә, ҡатыҡ эскәс, сәй ни нәмәгә кәрәк ул, эсәк йыуҙырып. Ҡатыҡ сәй ише буламы, туклыклы бит ул. Быna беҙ ашағас, аш ашарҙар. Берчике сәғәткә түҙёрҙәр, үлмәҫтәр әле. —Ул тағы әллә ниҙәр теҙеп алып китте.

һыйырҙар ятағы янынан ике ҙур аҡ күнәк менән яңы һауған һөт көйәнтәләп Гөлйөҙем, уньщ менән ҡатар •Сәйетколдоң һеңлеһе Разифа, улар артынан көйәнтәле Хәлимә күренделәр. Мәғфүрә уларҙы күреп:

—' Ана, иилендәр ҡайтып та киләләр, һейләп тә бөт-" мәгәйнек, ғүмерҙәре оҙон булыр әле, — тине.

Гөлйеҙөм башын түбән баҫкан көйе, күнәктәге һөттәрҙе сайпылтмаҫ есөн тигеҙ атлап, етешкән ҡорһағын ололарға күрһәтмәҫкә тырышып, бер ҡулы менән алъяпҡысын күтәрә биреп тотоп, будка артындағы сепаратка үтте. Уның артынан Хәлимә менән Разифа ла шунда ыңғайланылар. Рәхимә уларға:

—• Әйҙәгеҙ, килендәр, Разифа һин дә, бергә-бергә ултырып, сәй эсеп алығыҙ. Айбулатты ла ҡайтарырға ҡәрәк, — тип өҫтәне.

Гөлйөҙөм ололарҙың, бигерәк тә байбисәләрҙең әйтеүенә килә һалып ултырыуҙың ҙур әҙәпһеҙлек икәнен яҡшы белә. Шуға күрә ул үҙенең йөрәге һурылып • асыҡһа ла, көн буйы эшләп арыған, һыуһаған булһа ла, ашыҡмай ғына һөттәрҙе сепаратка ҡойоп әйләндерә башланы. :Янында ярҙа^млашкан Разифаға шыбы-рҙап ҡына:

—' Бар, ағайынды сәйгә саҡырып кил. Ул бахыр таң «ртәнән бирле бер нәмә лә ҡапканы юҡ бит, — тине.

Разифа, будканан сығып мал ятағы яғына ыңғайлағас та, ҡайтып етеп килгән Айбулатты күреп туҡталды.

—| Бәй, ана бит, ағайым үҙе лә ҡайтып килә ята,— тине ул..

Айбулатты ҡалған сәй янына ултырттылар. Рәхимә ;унан ситәндең үрелеп бөтөүе, малдың яйы тураһында төпсөп һорашты.



Айбулат Мәғфүрә еңгәһе янына, ашъяулыҡ ситенз» килеп аяҡ салып ултырҙы ла, Ырғыҙҙа йыуып килгәе бит-ҡулын күлдәк итәгенә һөртә-һөртә, яуап бярҙе:

—I Ҡолондарға тагән ситән кәртәне үреп беттөм. һыйыр кәртәһенә тағы ла байтаҡ тал кәрәк әле. Шуға тағыг берәй кеше яллап ҡырҡтырғандаГ мин үреүҙе туҡтатмаҫ инем. Шул тал ҡырҡып бөгеүе ҡулды тота. Эш тә шуға күрә бик оҙакҡа тартылды, — хине.

Рәхимә Айбулаттың алдына бауырһаҡ, эремсек, ике телем икмәк өҫтөнә май киҫәктәре һалып ырғытты ла, йомшаҡ тауышын үҙгәртмәй генә:

— Ни нәмәһе яллап тора ти инде ул, көндөҙ йылкыг елләгәндә Асатай ҙа ҡырҡышыр. Ҡуйҙарҙы малайҙар ҡараған арала Истебай ҙа булышһын, шулайтканда •эшегеҙ ҙә тиҙерәк бөтөр, — тип кәңәш һымаҡ бойороҡ. бирҙе.

Ғәзимә лә ҡоро ҡалманы.

—• «Кеше яллау», имеш. һеҙгә бик уңайшул, ялла ла ҡуш, ялла ла ҡуш. Ә һеҙ үҙегеҙ бер көтеү ялсы була тороп та, шул тал кәртәне лә бөтмәй бызмырлайһығыҙ. Х^ҙер көн о.ҙайған заман, бик өлгөрөп була ул, йыйын ялҡауҙарға ни, әйткәнде беләләрме! — ул һүҙен ослап бетөрә алмаған һымаҡ, асыулы һикереп торҙо ла тирмәгә инеп китте.

Гөлйеҙөм тағы бер-ике тапкыр әйткәс кенә сепаратты әйләндерергә Разифаға бирҙе лә, сәй янына килеп, сама* уыр төбөнә арты менән генә ултырҙы.

, Мәғфүрә уларға сәй яһап эсерә башланы.

Самауыр һыуынып бөткән, һыуы һемәктән сей һыу тауышы сығарып шыбырҙап аға ине.

Будканан һул яҡтараҡ ҡоролған арба ҡыуыштар араһында сырылдап илаған йәш бала тауышы ишетелде,. Рәхимә шул яҡҡа күҙ һалып алды ла:

— Йә, һуң бынау Сәйетҡол менән Хәлимә килен ниңәкилә һалып тамаҡланмай маҙалананалар инде, — тип һукранды. — Хәлимәһе инде анау илаҡ балаһы менән ҡайнашалыр, Сәйетколо ҡайҙа йөрөй һуң? — тип өҫтәне.

Уға Айбулат яуап бирҙе:

— Сәйеткол ағай хәҙер килеп етер, дөйәләрҙе анау уйпатҡа алып барыш тышаулап ҡалғайны, — тине.

Рәхимә тағы л,а ризаһыҙлыҡ белдергән тауыш менән:

—• Ана шул дейәләргә лә берәй малай кеше булһа,



Сәйетколдоң ҡулы бушап башҡа эшкә ярар ине. Бер егерме-утыҙ двйә өсөн оло кеше тотҡансы,— тине.

Айбулат, һыуынған сәйҙе һемерә-һемерә, үҙе икенсе уйҙар. менән мәшғүл кеше тауышы менән:

— Ул шайтан шикелле дөйәләр балаларға түгел, Сәйеткол ағайҙың үҙенә лә баш бирмәй китәләр әле. Бигер&к тә анау Нар дөйә, Моҡаш, күк дөйә биҙгәләк... — тип һул ҡулын оиткә һелтәп ҡуйҙы.

Айбулаттың бөгөнгө бетә эшкә булған һүлпән ҡарашы Рәхимәнең күңеленә бер ҙә оҡшаманы. Ул бешҡа ялсыларға ҡарағанда яҡынырак ағай-эне тейеш был кешенең дә шул донъя, малға атылып тырышып торорҙай кеше булмауына үкенеп көрһендө. Ул хужалар булһа, үҙҙәре ситтәге ҙур эштәр артынан йөрөүҙән бушамайҙар, тигән борсоулы уйҙарға батып, бер талай өндәшмәй ултырҙы ла һуңғы әмерҙәрҙе бирҙе:

—• Айбулат, ана шул кәртә эштәрен йәһәтлә, йәһәтлә, —> тине. —• Истебай менән Мүлдәк мал янында йоҡлаһындар. Иоҡлаһындар тигас тә, йән белмәй үлек һьшаҡ ятмаһындар! һиҫкәнеңкерәп, күҙ-ҡолаҡ булып ятһындар. Бүре-маҙарҙан һаҡ булырға кәрәк. Серәкәй малды йонсотмаһын. Ҡоро ғына ат тиҙәге йыйнап ел үренә төтөнләк һалһындар. Иртән ағайың йә килер, йә юҡ. Шулай ҙа тәкәләрҙең бик һимеҙҙәренән бер биш тәкә алып ҡалырға онотма. Ағайың килмәһә, Имаметдин килеп төшмәҫме әле. Ул килһә, ҡунаҡтар алып килермен, тигәйне .Әҙер торған яҡшы булыр.

Айбулат Рәхимәнең был оҙон теҙмә кеүек һуҙылған күрһәтмәләренең барыһын да үҙе лә бик яҡшы белә. Нисә йылдар буйынса инде ул был эштәрҙең бөтә ағышын, тәртибен ятлап бөткән. Шуға күрә, һәр ваҡыт тыңлауҙан еләп бөткән был һүҙҙәрҙе ул өнһөҙ тыңланы ла урынынан тороп китте.

Мәғфүрә сәй янына һуңлап килгән Сәйеткол менән Хәлимәгә, Разифаға сай яһап эсереп ултырҙы.

Яланға килгән ят ҡунаҡтарҙың еҫен әллә ҡайҙан һиҙеп өлгөргән ялан серәкәйҙәре, тызылдашып килеп, уларҙы һырып та алдылар. Сәй янындағылар, ел үренә твтөнлек һалып, уларҙан аҙыраҡ ҡотолоп ултырһалар ҙа, ашты тирмәгә әҙерләргә булдылар.

Мәғфүрә, аҡ тирмәгә инеп, оло абажурлы утыҙлы лампаны яндырып элде. Сәй эскән урында мендәрҙәр өҫтөндә аунап йоҡлап киткән Хаятты күтәреп алып, тир-

мәгә индереп һалып, өҫтөн япты. Киске намаҙға әҙерләнгән байбисәләргә урҙанан намаҙлыҡ алып бирҙе лә тирмәнән сыҡты.

4

Ырғыҙҙың өҫтөндә иләнмәгән аҡ ебәк ептәр кеүек булып күтәрелгән аҡһыл күк томан, матур-матур бөгөләшлә суклы һыҙаттар яһап, байыған ҡояштаң күктә ҡалдырған алһыу юлаҡтарына ынтылды. Һыу ситендә саҡ ҡына өргән дьшлы елә҇ ел, сәскә еҫтәре менән ҡатнашып, бит, ҡул, муйындарҙы иркәләп һыйпаны. Байсура итәгендәге сауҡалыҡтарҙың төҫө тағы ла ҡуйыланды, уларҙың эсендәге ваҡ ҡына йәнлектәрҙең шыптырҙауы тағы ла серлеләнде. Улар аҫтынан бер күренеп, бер йәшенеп сылтырап аҡкан һалҡын шишмә буйында һандуғастар һутылдашып һайраша башланылар. Ҡайҙалыр бик яҡында ғына кәкүк саҡырҙы. Алыҫта, урмандьщ арғы башында, икенсеһе күкелдәй башланы. Сикһеҙ зәңгәр күктең әле ул, әле был ерендә, шаян күҙҙәр кеүек быҙылдашып, яҡты йондоҙҙар ҡал-ктылар.

Гөлйөҙөм ҡаҙан аҫтына яҡкан утындың ҡыҙыу күмерҙәрен ҡуҙғатып, Разифа' йыйып алып килгән ҡыу тал сыбыҡтарын шатырҙатып яғып ебәрҙе. Усаҡтан борлап сыҡкан ҡуйы күк төтөн әле нәҙек оҙон бағана һымаҡ юғары үрләне, әле саҡ ҡына ҡалғып, Байсураға сәләм биргән кеүек, бөгөләп баш эйҙе. Оло ҡаҙан тирәһен әйләндереп күтәрелгән ут ялҡындары төтөндө ҡыуҙылар ҙа, уның артынан үрмәләп етә алмағанға асыуланған шикелле, осло телдәрен бегөп, тағы ла ҡаҙан һыртын ялманылар.

Мәғфүрә усаҡ яҡтыһына яҡын килеп он ашъяулығын йәйҙе һәм туҡмас таҡтаһын һалып, үҙе тубыҡланып тороп, кипкән һалма йәйемдәрен ҡырҡырға кереште.

Усаҡтың ел үре яғында арыраҡ ейелгән ҡаҫ өҫтөнә ултырған Айбулат ҡағыҙға төргән тәмәкеһенең ҡуйы твтенөн һауаға боролдатты.

Мәғфүрә уны ҡәйнеш итеп һәр ваҡыт шаярта. Төрлв һүҙҙәр менән үсекләп, уйын һүҙҙәр ҙә әйтә. Айбулат уға тағы ла ныҒыраҡ яуаптар бирә. Эштән бушап, ошол-ай аҙыраҡ хәл алып ултырған саҡтарҙа йәки аҙыраҡ үпкәләтәйем тип уйлағаада, ул Мәғфүрә еңгә тимәйенсә, «запас» тип кенә һүҙ ҡуша. Мәғфүрә: «Ағайын, ишетеп ҡалһа, запасыңды бирер әле», тип, юрамал асыуланған булып орошһа ла, үҙе үк Айбулатҡа, шаяртып, «запас» тип ҡушамат ҡушып алвайны. Улар шулай күп һейләнеү арҡаһында был һүҙгә үҙҙәре лә, Гөлйөҙем дә, Мәғфүрәнең ире Ҡотлояр ҙа өйрәнеп бөткәйнеләр. Шуға күрә лә ҡайһы бер бик ысынлап һвйләшкән мәлдәрендә лә бербереһенә «запас» тип өндәшәләр ине.

Әле лә Айбулат бөтөнләй уйынһыҙ төҫ менән уйланып:

—' Запас, мин юҡта киленең бәпесләп ҡуйһа, үҙең кендек инәһе бул инде, йәме, — тип үтенде.

Мәғфүрә быға бик ихлас кинәнде:

. —• Булмай әллә, булам, алла бирһә. һөйөнсөндө генә яҡшыны әҙерлә! —тине.

. —' Була ул, тик малай ғына булһын!

—' Нй бетмәгән малай тағы? Тимерең бар бит. Ҡапҡан һайын ҡалъя элакмәй ул. Ҡыҙ булһа ла ярап торор. Ҡайһылай улдан тәм тойған!

Һаман усаҡ аҫтына яғып булашҡан Гөлйеҙөм дә иренә орошоу ҡатыш көләмһерәп һүҙгә ҡатышты:

— Эй һармаҡ та инде бынауы! Алдағы эш,кә көйөп ултырасы! Ҡабат-ҡабат малай тапмай ни һинә, үҙемә бер ҡыҙ табып алам әле! — тине.

— Уй, тазрайған, ҡыҙ табам тип торған була битәле. Ниңә кәрәк ул ҡыҙ, кеше кешеһе бит ул. Минең Тимербулатыма иш кәрәк!

Уларҙың ошолай итеп уйын-көлкө менән барған һүҙҙәренең ҡыҙыҒыш Мәғфүрәнең йән әрнеүҙән сыҡкан ҡалтырауыҡлы тауышы баҫып китте. Ул:

— Эй запас, запас, ул булһа ла булһын, ҡыҙ булһа ла булһын, тик бәхете менән тыуһын. Беҙҙең кеүек эт типкеһендә йөрөмәһен, — тине лә һүҙенән туктаны.

Айбулат быға бер аҙ аптыраңҡырап:

— Ниңә улай тиһең, еңгә, ни булды? — тине.

— *Әле бына һин ҡайтыр алдынан ғына эт ишетмәҫ һүҙҙәр ишеттем. Был хурлыҡтарҙы дуҫың түгел, дошманың да күрмәһең!

—• Ни есөн һине рәнйетәләр тағы?

— Ни өсөн булһын, уларҙын. алдында тәгәрәп йерөп эшләгән өсөндөр инде. Улар әҙәм балаһына рәхмәт әйтә белә торған бәндәләрме ни! Төптә юҡ өсөн. Йә, ярар, һуңынан яйлап һейләшербеҙ.

Айбулат тәмәке төпсөгөн утка ырғытты ла, уны янып бөткәнен диккәт менән карағаи һымак, утка те! ләп уйға калды. Бер аҙҙан Мәғфүрәнен, бик ауыр ите1 ^ ф - ф , тип кҙрһөнөүе Айбулаттың иғтибарын үҙенә борҙ< ПсГөрләп янған уттар кеүек беҙҙең йөрәктәр яна» тигә т5ер йыр аҙағы уның уҫын ослань ла, ул үҙе лә уфылда: урынынан тороп киттё^)

## 5

Мәғфүрә ит ашап, һурпа эсеп туйып, тармә түренд; маҙырайышып ултырған байбисәләргә будкалағы олс имән көбөнө гөмбөрләтеп бешеп, ике өлкән сағаи алдырға кымыҙ койоп индереп бирҙе. Улар кымыҙҙы бер-ике һемерҙеләр ҙә, Рәхимә үҙенең ғәҙәте буйынса Мәғфүрәгә карап:

—> Бик һәйбәт һаумал булған, килен, кымыҙың тамакка яғылып тора, — тип мактап, үҙенән калған кымыҙлы туҫтакты Мәғфүрәгә һуҙҙы. — Мә, үҙең эсеп бөт, — тине.

Ғәзимә үҙенен, өлкән Көндәшенән өлгө алғандай, калған кымыҙлы туҫтағын ашъяулык уртаһына шыуҙырып:

—* Мә, быныһын Айбулатка сығарып бир, эсеп куйһын, — тине.

Тирмә тирәһендәге бөтә ялсылар ҙа шулай итеп, калған-боҫкан аш-һыуға туйынып, һәр кем үҙ урынына — кайНы береһе йоклarға, ә кайһылары мал һакларға таралыштылар.

Айбулат тағы ла йыл-кы көтөүе ятағына китте. Уның артынан корһағы дыңрайып ашап туйған, бүрегә йәбешә торған Шоңкар, койроғон болғай-болғай ялағайланып, һертелдәп, кырын юртып эйәрҙе.

Мәғфүрә менән Гөлйөҙөм, таң караңғыһынан бирле аяғөҫтө йөреп, арып-йонсоп бөткән эштәренән сак тигәндәй арынып, байбисәләрҙе йоҡоға һалып тыныслағас, икәүләшеп ситән кыуыш янына барып һөйләшеп эстәрен бушатырға, хәсрәттәрен таратырға ултырҙылар. Улар янына илак балаһын йоклата алмай аптырап бөткан Хәлимә лә, малайын кулына алып, имеҙә-имеҙә, килеп ултырҙы. Ул, Мәғфүрәгә якынырак шыуышып килеп:

—• Карасәле, апай, бик йөҙәнем дәбаһа бынау малайҙан. Бер тынмай илай бит. Эсе лә каты булып күбеп тик тора. Әллә өсйән булдымы икән, карасәле, апай, — тине.



Мәғфүрә баланы кулына алып, аркаһын, эсен һыйпап уны киреләтте лә яратып әүрәтте.

—« Йә, улым Әбүзәр, үҫеп кара әле, нишләп улайтып 'илауҙан бушамайһын, әле, егет кеше? — тине. — Өсйән •, булһа ла булыр. Уны әб&йҙәр белә инде. Әллә бер нәмәһе лә юктыр! Ана бит иламай ҙа, кулда булғае, мыкыр-мыкыр итеп кинәнә. Ул, бахыр, кулға кен тәүлегенә бер эләкмәй, алама сепрәк араһында һаҫып яткас, иламай нишләһен,—'Тип баланы Хәлимәгә- кире бирҙе.

— • Эйе, апай, кулға алыу кайҙа ул. Әле юргәген алмаштырғанды күреп калһалар ҙа әрләй башлайҙар. Бөген анау Ғәзимә әйтә: «һай, һай, «балалы катын — йыуылмаған эсәк», һаман шул сәңгелдәктән ки,тә алмай сыуала», — ти.

—' һейләмә инде, туғанкайым, — тине Мәғфүрә.— Бала үҫтереүҙең кайғыһы ла, мәшәкәте лә бик күп буда ул. Бына минең Диләмде генә әйт әле, әллә ниткән кәрәкмәгән үткер бала булды шул. Кыҙ бала ла был тиклем сая булыр икән. Әллә кемгә окшаған. Атаһы өйҙә булмаған ня, бала артык тынлаусан булмай бит ул. Бөген кайһылай юктан тауыш сығартты' ана. Әлдә Рәхимә еңгәм арыу. Анау быжыр бака, алланын. кәһәре, үгәй инә бауырһак, тигәндәй, уға ни калмаған, биҙәүгә! Туйҙыра алмаған әллә нисә балаһы бар кешеләй булыш, "хатта тарамыш кеүек каты, һыкмыр! Уның янында ултырыш ашаһаң, ашың тамакка тейөлә. һыңар күҙе менән нисә капканыңды тикшереп ултыра, ялпашкыр! Анау бер көнө сәй янында Диләикмәккә һуҙылғайны, асыулаңып килеп кулынан икмәк телемен һелкә тартып алды. «Етер, комағай, өсөнсе телемгә тотондоң, оятһыҙ!» ти бит. Баяғы «эт еңгәнен кабыр» тигәндәй, шул сабыйҙы (•ҫбитләй бит, йә!

Хәлимә аптырап башын сайканы.

—' Шулай тиме, апай? Ни теле барып шулайтып баланы әрләмәж кәрәк.

— Ни «теле барып».тиһең. Уның теленең йылан телендәй ағыулы икәнен тора-бара күрерһең әле. һеҙ әле яңырак килгән кешеләр. Ә мин бит инде ңисәмә йылдар ошоларҙа эшләйем. Быйыл мин бында йәйләүгә килмәҫкә үк уйлағайным. Анау елкән еңгәм үҙе, оло башын кесе итеп, килеп әйткәс, уның күңелен йыкманым. «Әйҙә бар инде, һин оло кеше, барыһына ла күҙ-колак булырһың, йәштәр ни белә» тигә^ һүҙен йыкманым шул. Улай

бик ҡыйырһыта башлаһалар, ҡайтам да китәм. Әллә ул тиклем мине быҡаулап ҡуйғандармы. Тик әле Диләнең атаһы үҙе урыҫ араһында йөрөгәс, ҡыҙ баланың күңеле үҙгәреп китер тип, беҙ икәүебеҙҙе ауылда ҡалдырып киткәйне. Юҡҡа булды. Урыҫтарҙың кешегә шундай итәғәтлеләре бар, Ғәзимә кеүектәрең ары торһон. Улар хатта бер туғаның кеүек, йәлләшеп, ярҙамлашып торалар ул. Ашарға тағы етер ине әле шунда. Былайтып кеше күҙенә тилмереп ҡарап, әсе һүҙҙәр ишетеп торғанса, үҙалдыңа исмаһам, «ас тамағым, тыныс ҡолағым», т,ип тик тораһың.

Йәш килендәр Мәғфүрәнең һүҙҙәрен бик оҙаҡ иғтибар менән тыңланылар. Ул туктағас, Гөлйөҙөм дәХаяттың әле килә һалып төшөүе менән Тимерҙе семтеп илатҡанын һөйләп алды.

Мәғфүрә күҙ йәштәрен һөртөп керһөндө лә:

— Ҡуй инде, кешегә ҡалған көнөн. ҡараңғы инде ул. Әйҙәгеҙ, булмаһа йоҡлайыҡ. Иртәгә байрам түгел бит. Тағы ла таң менән торорға кәрәк. Гөлйөҙәм килен, һин былау ауыраяҡлы көйөңә йонсойһоң, күп йөрегәс, аяҡтарыңа ҡан төшөп китәлер әле, — тине.

— Төшә шул, енгә. Иртә менән йоҡонан торһам, аяҡтарымды яҙып ала алмайым.

— Шул,ай була шул, ауыр күтәргәндеке, күп йөрөгәндеке ул.

Мәғфүрә менән Хәлимә үҙҙәрененң арба аҫты ҡыуыштарына киттеләр.

Мәғфүрә Диләһенең янына һырығып ятты ла, уның башынан, арҡаһынан һыйпап һөйөп, сәстәрен еҫкәп йоҡлап китте.

6

Гөлйеҙам, үләндең һәр бер шыптырҙағанын тыңлап һиҫкәнә-һиҫкәнә, иренең ҡайтып килеүен көтөп ятты. -Ҡыуыштың ябылып бөтмәгән тишек-тошоҡ түбәһе үтә төшкән тулған айҙың нурҙары, селтәрләнеп, уның ябынып ятҡан ҡораҡ юрғаны еҫтөндә һаҡалға теҙгән көмөш тәңкәләр кеүек йылмылданы. Арҡаһына төнгө дымһыл Калҡын бәрелгәндәй булғас, ул юрғанының ябылмай ҡалған ситенҡымтыңҡырап ябынып, бер нәмә белмәй йо"клаған улы Тимербулатвдң янынараҡ шыуып, уны ҡосаҡлап ятты. Ул шулай тыныс ҡына ятып, буйындағы

бер туктауһыҙ йыбырлап ҡуҙғалып әйләнгән йән зйәһеһенең улмы, ҡыҙмы булыуы тураһында уйланып, ул тыуғас, би-шйәше тулған Тимербулаттың унан үҙен нисек көнләйәсәген күҙ алдына килтерҙе. Ул Айбулаттың: «Малай булһын, ҡыҙ булмаһын» тип, үҙен юрамал үсеҡтереүен иҫенә төшәрҙө лә, ул булһа, кем т;ип, ҡыҙ булһа, кем тип исем ҡушырбыҙ икән, тип хыялланды. Ошо һуңғы уйҙар тәгәрәп осо сейәлгән йомғаҡ кеүак буталдылар ҙа Гөлйөҙвмдө талғын йоҡоға сумдырҙылар.

Ул күпме йоҡлағандыр, тик Айбулаттың ысыҡлы үләндәрҙе шыптырҙатып килгән аяҡ тауышын әллә ҡайҙан ишетеп, тағы күҙҙәрен асты.

Юрған өҫтөндәге селтәр нурҙар ҡайҙалыр юғалғандар. Улар урынына тешләккә әйләнгән айҙың тулы яҡтыһы, ҡыуыш ишегенән инеп, уның ярты иҙәнен ҡаплап алғайны.

Айбулат батырҙарса мыҡты кәүҙәһен яртылай бөгөп ҡыуышҡа инде. Гөлйөҙөм, урынынан шыуыңҡырап ятып, уға урын бирҙе лә, йоҡо аралаш иркәләгән йомшаҡ тауышы менән:

— Ҡалай оҙаҡ йөрөнөң, — тине.

Айбулат төнгө саф һауаның һалҡынына һыуығайған ҡулдары менән Гөлйөҙөмдө сирҡандыра-сирҡандыра юрған аҫтына инеп ятты, уны һаҡ ҡына ҡосаҡланы ла:

—• Яйлап ҡайттым, кәләш, уйланып ҡайттым, — тине. Гөлйө^өмдөн. йоҡоһо бөтөнләй асылды.

— Ниҙәр уйланың һуң әле?

— Ни тип, шул, әлеге лә баяғы инде. Үҙебеҙгә башҡа айырылып сығырға кәрәк ине. Өлкән ағай бер ҙә өндәшмәй. Имай ағай менән ул турала һүҙ әрәм итеп һөйләшеп тә тормайым, уның кәрәге шул хәтлем. Үҙ алдыбыҙға көн күрә башларға кәрәк инде. Дүрт-биш йыл булды бит инде. Өйҙө лә һыламай киттек бит әле.

—• Эйе шул. Әллә ни уңайһыҙландымсы. Тоҡтомалдан барып өй һылай башлаһаң, еңгәмдәр әллә ни әйтерҙәр. Былтыр бер барып тәҙрәһен ҡаплағанда ла анау Ғәаимәһе: «һай, һай, эш тапҡан, сысҡандың да үҙ ояһы бар, имеш», — тип әрләп бөттө. Әсәйемә әйтеп ебәрһәм, һылап ҡуйыр әле.

Айбулат бер аҙ уйланып ятты.

—• Әйтһәң, әйтеп ебәр. Ни булһа ла быйылдан ҡалырға ярамай. Былай кеше һүҙенә ҡ-арап тороп, үҙебеҙгә бер нәмә арттырып булмаң. Бала-сағалар ар.та, уларҙы

ла тәрбиәләргә кәрәк. Барыһынан да бигерәк... — Айбулат һүҙен әйтеп бөтөрмәй туктаны.

Гөлйөҙөм уның был ухталышына иғтибар итә тормаңы, һорау бирҙе:

— Ә бурысың бөтт&ме һуң ҡайнағаларға?

— Бурыс бөткәнгә ҡан заман инде. Минең иҫәп буйынса, бынан ике йыл ярым элек теүәл түләндё булһа кәрәк. Улар иҫәпләмәһәләр ҙә, дүрт йыл буйынса икәүләшеп ике йөҙ һумлыҡ ҡына көс түккәнбеҙҙәр инде.

Гөлйөҙөм дә уйланып ята бирҙе лә ҡапыл ҡыуанды.

—> Әй, ысынлап та, шулайтып үҙебеҙ генә торһ-аҡ, өсәүләп кенә. Мин гел һине генә, балаларҙы ғына тәрбиәләп ҡарап тороп инем, былай ни, һине кән тәүлегенә бер күреп булмай китә бит.

Айбулат Гөлйөҙөмдөң хыялдарына кинәнде. Унығ ай яҡтыһында тағы ла ағыраҡ булып күренгән йеҙенә, ҡыҙ ваҡыттағыға ҡарағанда ла, ҡатынлыҡ, әсәлек тойғолары менән килә торған мәғәнәле уйсанлыҡ өҫтәлеп матурайған күҙҙәренә, ауыраяҡлы булыуҙан аҙ ғына эскә һурылып уйҡылланған сикәләренә ҡарап һоҡланды ла, уларҙы үҙенең ҡытыршы ҡулдары менән һыйпап, вәғәҙә бирҙе.

—> Ярай, Гөлйөҙем, бөгөн үк ҡырҡа һөйләшәм дә, булмай икән, ташлап сыға ла китәбеҙ. Уларҙан ҡурҡып торһаң, һаҡалың биленә еткәнсе ошонда йәшәрһең.

Гөлйөҙө-мдөң әл.е генә шатлыҡ менән нурланған йөҙөнә тағы ҡайғы күләгәһе төштө:

— Көнө-төнө эшләйһең, эшенде яратмайҙар. Өсөнсө көн йыуған керемде Ғәзимә: «Асылмаған, буҙарткан-һыц», тип, тотош ҡабат йыуҙыртты. Берәм-берәм һелкеп алып иҙәнгә ырғыткан була. Улайткас ни, ап-аҡ кер ҙә ҡап-ҡара булды ла ҡуйҙы. Ун бишләгән кешенең өсәрдүртәр ҡаттан сискән кейемдәрен йыуа-йыуа билем ҡалманы, әле лә билем өҙөлөп бара. Мәғфүрә еңгәм эоемде ҡарағайны: «Эсең түбәнләгән, бәпесең- төшөп ҡуймаһа ғына ярар ине», т;ип күтәреп бәйләгән булды әле. Анау •ҡыйыш мегөҙ өлкән ала һыйыр уҫал да инде. Сәбәләнеп теңкәмә тейә. Бөгөн һауғанымда ла икр рәт тибеп ебәрҙе. Тышаулап һауайым тиһәм, әлеге Ғәзимә: «Ҡуй, ҡуй, малды яман ейрәтмә, бер тышаһаң, гел шуны көҫәй ҙә тора ул», — тип ҡыҫыла. Шул яман һыйыр менән булышып, Разифа ун ике һыйыр һауғансы, мин туғыҙҙы ғына һауҙыш да, Рәхимә еңгәм: «Йәш килен, ни эшләп улай быҙмырлай башланыщ әле?» — ти. Ғәзимәгә шул ғына кәрәк. Уныһы: «Ул й&ш килен сыттан ҡорот урлап, тәпәндән май тумырып әпсәһенә ташығанда ғына сапсан ул, ә эшкә тигәндә ығыр», — тип, күҙгә ҡарап алдап тора. Был тиклем дә нахаҡтан рәнйетерҙәр икән. Ғәрлеге ни тора!

Гөлйөҙөмдөң болоҡһоуҙан тауышы ҡалтыраны. \Үҙенең донъяла инәраткан, иняҡын кешеһененшулайюкка кәмһетелеүенә Айбулаттың йөрәге яндщЛ«Исмаһам, янғыҙ атьш ғына булһасы», тип уйланы ул. Ләкин был ғына уларҙың тормошон теҙәтә алмаясағын хәтерләне. Уның артынса ук Михаилдең: «Үҙебеҙ ғәйепле, башыбыҙҙы артыҡ түбән эйәбеҙ, ә был һис нәмәгә ярамай»» тигән һүҙҙәрен уйланы. Ул Гөлйөҙөмдең оҙон, ҡалын ҡара сәс толомдарын аҡрын ғына һыйпаны ла:

—' Иә, ярар, һин ул оятһыҙҙарҙың һәр бер ялған һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып кейөнмә. Үҙ күңелең таҙа булһа — булды. Хәҙергә һайләнеп йөрөһендәр әле. Бына үҙебеҙгә башҡа сығып алайыҡ та, уларҙың биттәренә төкөрөрбөҙ. Үҙебеҙ йркенләп, рәхәтләнеп торорбоҙ. Әйҙә йоҡлайыҡ инде, борсолма, — тине.

Был һүҙҙәр Гөлйөҙемгә тыныслыҡ биргән һымаҡ булды»Жл, уң ҡулын Айбулаттың муйынына һалып, күҙҙәрен йомдо.

* *
*

Айбулаттың Гөлйөҙөмдө борсоғоһо килмәне, шуға күрә үҙенең оҙаҡ йереүенең теп сәбәбен дә һөйләмәне. Сөнки уның бегөнгө уйҙары бик алыҫта, бик юғарыла һәм бик ҡатмарлы, боpooулы инеләр.

Быңан бер нисә кендәр элек, күсеү мәшәҡәттәре менән әҙерлек алып барған саҡта, ул Расторгуев утарына Ҡотлояр ағаһынын дуҫы Михаилгә барып килде. Күптән төҙәттерергә тип заказ бирелгән повозка тәгәрмәстәреиең шиндәрен һу-ктырып алып ҡайтырға кәрәк ине.

Айбулат барып ингәндә, Михаил Фролов, ерҙән ала баҫкан күк тетөн эсендә күрегенең уттарын сәсрәтеп өрҙөртөп, нindәйҙер бер ҡалын тимерҙе ҡыҙҙыра ине.

Айбулат ҡыскырып һаулашты:

— Здраветвуй, Михаил ағай!

—• А, Айбулат Айдарович, здарвствуй, здравствуй. —• Ул күрек баҫып торған уң ҡулын бушатып Айбулатҡа

һуҙҙы л.а ҡыҫыл күреште. — Ну, эштәр нисек? Мин хәҙер бөтәм, аҙ ғына көт, — тип өҫтәне.

Айбулат та уға:

—• Ничево, Михаил ағай, ашыҡма. Эштәр элеккесә. Дела идут, контора пишет, хозяин не платит, —тип яуап бирҙе.

— Шиндәрҙе алырға килдеңме?

— Эйе, әҙер булһалар.

—• Әҙер, алырһың. Ну-ка, улай ашыҡмаһаң, тот әле анау күрак һабынан. Беләһеңме икән?!.

Күректе Айбулат баҫа башлағас та, ут баяғынан әллә ни тиклем касәйеп, осҡондары көлтәләп оса башланы.

Михаил быға бик кинәнеп көлөп ебәрҙе. Ҡулындағы тимеренен. әле ул яғын, әле был яғыш әйләндергеләп, сү-*кеш алып туҡмай башланы.

—• Оho, молодец. Көс тигәнең бар нкән һиндә! — тине. Тимерен бер талай тукмап, үҙе теләгән формаға килтереп еткергәс, уны бер яҡҡараҡ һалды ла:

—• Шулай, контора пишет, хозяин не платит, — тиһеңме?

— Юҡ, Михаил ағай, түләү түгел, уйлап та ҡарамай.

—• Билдәле, ниңә түләһен. Үҙебеҙ ғәйепле, башты бик түбән эйәбеҙ. Ә хужаларға шул ғына кәрәк тә.

Ғәрсел Айбулатҡа был һүҙҙәр бик үткер булып ҡаҙалдылар. Уға оят та, хурлыҡлы ла һымаҡ булды. Ҡотлояр ҙа был турала һөйләшкән сакта уны гел шундай һүҙҙәр менән ороша торғайны. Ул был утарҙа йылҡы көткән Ҡотлояр ағаһы тураһында һорашты:

—• Ҡотлояр ағай бөгөн яланда ҡунамы, ҡайтамы?

— Әлбиттә, яланда. йылҡы малы менән ниңә утарға ҡайтып йөрөһен. Да, ул. һине, килһә, күрмәй китмәһен тигәйне әле. Барып әйлән. Ул Росташа буйында булыр,— Михаил тимерлектәге утлы күмерҙәрҙе йыйыштырғыланы.

Тимерлек эсе бер юлы тынды. Күк төтөн болоттары асыҡ ишект.ән тышҡа ағылдылар. Михаил ҡап-ҡара булып ҡоромға баткан мөйөштәге йәшниктән дүрт оло-оло тәгәр(мәс шиндәре сығарып Айбулатҡа тотторҙо ла уны өйөнә саҡырҙы.

—• Әйҙә, Айбулат, беҙгә, аш ашайыҡ, — тине.

— Юҡ, Михаил ағай, оҙаҡ була.

Михаил тағы ла көлдө.

— Бына кәрәк булһа, башҡорт кешеһе лә ҡунаҡҡа барыуға кире торор икән! Әйҙә, әйҙә, киттек. Миңә лә тамаҡ-ланып алырға ваҡыт, — тине.

Михайлдең өйөнә утарҙың бер осонан икенсе осона тиклем һыҙылып яткан яр аҫтынан, һыу буйлап киткән һуҡмаҡ менән барырға кәрәк ине. Улар, утарға ҡағылмай, ошо юл менән киттеләр. Михаил, бая ғына һөйләшеп өҙөлгән хәбәрҙе дауам иткән һымаҡ, һүҙен тура бер еҙөктән башланы.

— Эйе, Айбулат брат, беҙҙең эш хәҙер тап шуға барып терәлде инде. Түҙеүҙән әллә ҡасан уҙҙы. Мине лә был тимерселек эше еләтте. Эшме ни ул. йә ҡалала заводта менләгән кешеләр менән бергә эшләһәң ине, йә булмаһа, үҙеңә бер таадаҡ туйҙырырлыҡ ер биләп, иген эше менән самостоятельный хужа булып йәшәһәң ине. Ә былай ни — ни ары, ни бире. Ер тиһәң, хәҙер яңғыҙ һыйырынды ашаТырлыҡ участка ҡалманы. Байҙар, яңы закон буйынса, бөтә ерҙе юк-буш хаҡҡа ғына тәшерөп, отрубка ҡырҡып алып бөттөләр. Беҙгә — шиш!

Ул, һүҙен ослап бөтмәйенсә, аҙымдарын һуҙыш-һуҙып баҫып атлап китте. Айбулат уның оҙон, мыкты, аҙ ғына елкәһе көмһөрәйгән кәүҙәһен баштан-аяҡ ҡараны, һүҙенен, дауамын кеттө. Ләкин Михаил өндәшмәй бара бирә ине. Айбулат түҙмәне, асыуланғандай тауыш менән:

—• һуң, нлшләмәк булаһығыҙ? — тип һораны.

Михаил ҡапыл артына боролоп туктаны ла, ул да Айбулатҡа асыуланған кешеләй булып:

—• Бына шуны эшләмәк булабыҙ ҙа, — тип ҡыскырҙы ул. —• Сергеевҡа, Ивановка, Горячевкалар тотош күтәрелеп сығабыҙ ҙа Расторгуевтың бөтә отрубка алған ерен общиналап тартып алабыҙ, вот, белдеңме?

—• Белдем, ләкин...

—• Бер ниндәй ҙә «ләкин» булмаясаҡ. Әгәр ҙә Расторгуев алтынсы, етенсе йылдарҙағыса атаһы мәрхүмдең методы буйывса ҡорал көсө ҡуллана икән, тотабыҙ ҙа утарын яндырабыҙ, — тине.

Михаилде тынлап барған һайын Айбулаттың йөрәге ҡатыраҡ һукты, асыуы нығыраҡ ҡабарҙы. Михаилдең һүҙен бүлеп тагәндәй, үҙенең законһыҙ-ниһеҙ, хатта отрубка һатыу хаҡын да түләмәйенсә Ныязғолға күскән ере тураһында һөйләп китте. Улар хәҙер, киңерәк юлға сығып, ҡатар атлайҙар ине.

Михаил уның һүҙенә ҡеүәт кенә бирҙе:

— Бына, бына шул, Айбулат, шул юл бик шәп инде. Һин дә шул мәсьәләне Ныяҙғол алдына ҡуй, давай, ҡайтар минең еремде тиң.

Айбулат Михаилде тыңлағанда, Ныяҙғодға ул мәсьәләне нисек ҡуйырға, уның эше менән Михаилдәрҙең эше. араһында айырма бармы, юҡмы икәнен хәл итә алмай уйланып тыңланы.

Ул арала Михаилдең землянкаһына килеп еткәйнеләр инде.

Михаилдең бисәһе Зина уларҙы йылмайып ҡаршыланы. Айбулатҡа ҡул биреп күреште. Ҡыҫҡа ғына, йыуантыҡ кәүҙәһе менән, тумалап йөрөгән һыяҡ, йәһәт йүгереклэп өҫтәлгә аш әҙерләй башланы.

Михаил Зинаға:

— Зиночка, был ҡунаҡты беләһеңме, аш арыу сәй эсмәй китмәй торған башҡорт ҡунаҡ, самауырың да булһын, — тип көлдө.

Зина күңелле яуапланы:

— Самауырым да ҡайнаған, борсолма, зинһар.

Айбулаттың сәй кәрәкмәй, рәхмәт, тип уларҙы тыйырға тырышыуына улар иғтибар итмәнеләр. Икәүһе лә өтәләнеп:

— Йә, йә, давай ултыр әле, ултыр, — тип уны түрҙән уҙҙырып, үҙҙәре ситтән өҫтәл уратып ултырҙылар.

Ашты ашапбөтөп Зинаның сәйен көткәндә, Михаил, ултырғысында ^рткараҡ ҡайҡайып, мыйыҡтарын һыйпаны ла, ялтыр ҡара күҙҙәрен уйнатып, Айбулатҡа һораулы ҡараны. Сал инә башлаған сәстәрен артҡа һыйпап, һүҙҙәрҫн тағы ла өҙгән ерҙән ялғаған кеүек дауам итте:

— Башҡа выход бөттө, туғанкай, һин дә был мәсьәләне Ныяҙғолға шулай ҡуй, чтобы ул эштен, ҡайҙа табан барғанын төш^енһөн.

— Һин дә һин тип һайлэйһен,, Михаил ағай. Унда мин генәме ни әле һуң, ә халыҡ?

— Тем более. Хәйер, һеҙҙең башҡорт ергә бик аптырамай торған. Душ башына 40 десятина.

Айбулат ярһып ҡапыл урыньшан торҙо:

— Уның телдә генә икәнен яҡшы беләһең дә инде, Михаил ағай! Мәҫәлән, минең бер душ — 40 десятина ер булырға тейеш, ә ҡайҙа ул?

— Һинеке Ныяҙғолда, ә башҡаларҙыҡы?

— н Башҡаларҙан — минең ағай-энеләрҙән генә егерме-утыҙлап кеше Ныяҙғолға бишнәккә бушҡа һатып бетҡәләр ҙә хәҙер бер әоминник ергә аптырап йөрөйҙәр. Уларҙан башҡа нисәмә ауыл.

Быларҙың бөтәһен дә электән үк яҡшы белгән Михаилгә Айбулаттың былай аңлап ҡыҙышыуы бик оҡшаны. Зина яһаған бёр стакан сәйҙе Айбулатҡа шылдырҙы, икенсеһен үҙенә алып күтәреп бер ике һемерҙе лә тағы Айбулатҡа һорау менән текләне. Айбулат уға яуап биргән кеүек итеп:

— Һеҙ яҡшы эш ниәтләгәнһегеҙ, Михаил ағай, ә бына беҙҙекеләр менән нисек эш башЛарға икәнен хәл итә алмай ултырам әле, — тине.

Михаил Айбулат өсен мәсьәләне хәл иткән кешеләй булыщ.кинәнеп баш эйҙе.

— Т.имәк, һин дә был турала ысын һәм ныҡ уйланаһың икән.

— Уйланмай ни, Михаил ағай, һин әйткәадәй, эш түҙеүҙән әллә ҡасан үтте инде. Бишенсе йыл ҡайһылай күмәк күтәрелеп эшкә керешкәйнек, уныһы ла юҡҡа юғалып ҡалды. Уларҙы һин дә беләһең...

Михаил мыйығын тағы бер һыйпаны ла, уйланып, яйлап ҡына яуап бирҙе:

— Улай булһа, Айбулат, ошо айҙын, ун биштәре тирәһендә мин һлнә хәбәр итермен. Һин шул хәбәрҙе алыу мвнән миңә килеп әйлән. Һйне мин шундай бер бик аҡыл эйәһе ағай менән таныштырырмын. Ул һинең бөтә һораузарыща яуап бирер, күп нәмәгә төшөндөрер, булдымы?

— Булды, Михаил ағай, обязательно киләм.

— Ә бегөн үаендең Ҡотлояр ағайың янына ла етеп ҡайт. Уның да һине күргеһе килә ине, — тине Михаил.

— Ярар, уны ла күрермен.

Улар бөгөн элвккегә ҡарағанда күп яҡын дуҫтар булып айырылыштылар.

Бына ошо көндән бирле Айбулатты тәрән уй алды рыл эштәрҙең йән ҡуҙғатҡыс ҡайнар касө уны ҡапланы! Хәҙер үк ошо турала иптәштәренә, ауылдаштарына, дуҫтарына хәбәр биргеһе килде. Ләкин Михаилден, был турала һис кемгә һөйләадәй торорға тигән һүҙе уны тыйҙы: Шулай ҙа ул бөгөн төндә көтөүҙәре яиында яткан Асатай менән Истебайға аҙыраҡ сер сисеп эсен бушатты.

Байсура тау итәгендәге ҡыуаҡлыҡтар араһыщан аҡҡан серле шишмә генә уларҙың серен тыңланы^Д

## ЭШ ЭҘЛӘГӘНДӘ

1

Айбулат Бөрйән ырыуынан булған Айҙар ҡарт мәрхүмдең еңгәләтә алған икенсе бисәһенән тыуған бала. Ул биш-алты быуын айырылған булһа ла, бер ырыуҙан булғанлыҡтан, Ныязғолға ағай-эне һанала ине. Айбулаттың әсаһе Сәлимә Айҙарҙың бер туған ағаһы Иомабайҙан утыҙ йәштәрендә генә саҡта ике бала менән тол ҡалды. Айҙар был еңгәһе Сәлимәне уҙенә нисек алыуы тураһында дуҫ-иштәре араһында һәр ваҡыт маһайып, ҡупырайып, ошондай әңгәмә һөйләй торғайны: «Мин Сәлимә еңгәмде ҡыйғас ҡара ҡаштары өсөн генә, тол булыуына ҡарамай, мәһәренә ҡырҡ һум биреп, туйына тана һуйып, ҙурлап алдым. Йомабай ағайымдың үҙе тере саҡта ук, ул килен булып төшкәс тә, минең күңел уға |Д^,п,төшкәйне.1Шунан ни, ағайым үлгәс, уны Байыш яусылата икән тигән хәбәрҙе ишеткәс үк, минең намыҫ килде бит, малай. Ошоноң шикелле бер йыйын ваҡыты ине. Хәтеремдә юҡ, Шаһимәрҙән ҡорҙаштың улына кәләш әйттереп, туй яһап яткан мәле инеме икән, әйтәгүр, кеше лә бик күп, мулла ла шунда ине. Бер заманды Байыштың яусыһы Нoралы: «Сәлимә һылыу беҙҙең ҡулдан ысҡынмаҫ», тигән хәбәрҙе һалды бит. Мин ҡыҙ ҙа кит! Аш янынан һикереп торҙам да баштағы ҡамсат бүректе һыпырып алыл, иҙәнгә һуктым: «Булмаҫ, тим, Нoралы вғай, —• мин әйттем, — әгәр ҙә йорт йолаһын аяҡ аҫтына ҡалдырып Сәлимә еңгәмде Байышҡа ебәрһәмме, төптө ир булып йәшәмәйем, ошо бүркөмде ү.к кеймәйөм, исемем Айҙар булмаһын!» — тине!М.

Уныщ тарә-яғындағы ирҙәр, был әңгәмәгә ҡыҙығып китеп, Айҙ,арға яҡыныраҡ шыуып ултыралар ҙа һүҙгә ҡыҫылалар:

— Йә, йә, шунан?

— Бьша ҡыҙыҡ!

—' hё, he, he,—тип кетерләшеп көлешә башлайҙар, Айҙар тағы ла ҡайҡая бирә лә, тауышын күтәрә төшә.

—* Шул. Әлегендәй, бүректе алып һуккайным, Фәйзулла мулла минең ҡыҙғанды күреп:

—- «Алла бирһә» тлп әвт, ҡустым Айҙар, «алла бирһә» тип әйт, тигән була. Ундай ваҡытта һинә «алла бирһәң» иҫкә төшөп торамы! . •



— Эйе ләбаһа, ундай ваҡытта ҡайҙа инде ул, — тип хуплайҙар Айҙарҙың дуҫтары.

—• Иҫкә төшеү ҡайҙа ул, унда инде тиҙерәк кеҫә яғывды ҡарайһын, да үҙ ирлегеңә нығыраҡ таянаһыщ. Шул көне кис үк үҙемдән, өлкән ҡатындан Гөлйемеш әбейҙе саҡыртып алдьш да икәүһенең уртаһына ошо мәслихәтте һалдым: «Бьгаа, икәүегеҙгә лә бер һүҙ, — тинем. — Йығылыш үлегеҙ, мин әйтәм, әммә ошо эштәш итеп сығарығыҙ, тим. Емеш еңгә, һинә бер сатин күлдәк, бисәгә әйтәм: Хупъямал, ҡара, арҡыры төшә торған булһаң, аҙағы насар булыр, тим. Емеш әбей яусылап өйрәнгән инде ул, ихлас тырышып тора. Бисә лә байтаҡ үпкәләп, илаштырып ҡараны ла, мине еңәме һуң. Эш Сәлимәлә ҡалды бит инде. У«һы: «Ғиҙҙәтем тулмаған, балаларым бар, уларҙы ҡағыр, үҙемде тин. күрмәҫ, бәлән-әлән», — тип әйтә, ти. Уға ла бәләкәс бармаҡ янап алырға тура килде. Әйтеп ебәрҙем: «Әгәр ҙә Сәлимә мине һанға һуҡмай ятҡа китә икән, мин уны ер еҫтөндә йөрөтмәмен», — тип" әйтеп ебәрҙем. Ул да кеше бит, күнде бахырың. Шул бына, өлкән бисә лә тырышты, малын да аяманым, һүҙем дә һүҙ булды, Байышың ана йөрөй танауын тартып. Иргә мал ҡыйбат түгел, ир үлһен дә дан ҡалһын.

Ирҙәр тағы ла хуплайҙар:

— Ысын дабаһа. Еңгәнен. һулаҡай ҡабырғаһы ағайҙыщ үҙе тере саҡта ук ҡәйнештеке ул. Ағандан ҡалғас, ни йәнең менән еңгәне ятҡа ебәрмәк кәрәк. Юҡ, булмай, — тиҙәр.

Был әңгәмәләр Айҙарҙың һүҙен һүҙ итеүе менән ярылырҙай булып маҡтаныуы булды. Унан, Сәлимәнең тәүге иренән ҡалған балаларына ғына түгел, үҙенән тыуған Айбулат менән Нәсимәгә лә аталыҡ .ярҙамы теймәне, тәрбиәһе булманы. Сәлимә тәүге иренән ҡалған барлыюҡлы малын аҙлап үрсетеп, тырышып, балаларын тәрбиәләне. Айбулатты ете йәшенә етеүе менән ауыл мәҙрәсәһенә укырға бирҙе. Айҙарҙыщ: «Беҙҙең балаларҙың укып мулла була торғаны юҡ, ана мал ҡараһын да донъя көтһен», — тип ҡаршы «млеүенә лә Сәлимә бирешмәне. «Үҙең ҡарамағас, балала эшең булмаһын, һин ситтән ҡараусы, ысын атай түгелһең, тик һыртҡы ямау^ ғына бит», — тип, үҙ һүҙен һүҙ итте, «минең улым бик^зирәк, укыһын», тине.

Ҡыҙы Нәсимәне кейәүгә биргәндә лә Сәлимәгә ире менән аҡып тартышырға тура /килде. Ләкин был юлы ул еңә алманы. Айҙар: «Ҡыҙ минеке, «емгә бирһәм дә, күп-ме мәһәр алһам да, үҙ ҡулымда. Ҡатын башың менән килгән яусыларҙы кире ҡайтарып ултырма»,—• тип, үҙ-һүҙләнеп, Нәсимәне ике балалы буйҙаҡ иргә бирҙе лә ебәрҙе. Унан килгән мал, мәһәр аҡсаһы ла Айҙарға китте. Ә Сәлимәгә барлығы бер кәзәкей ҙә бер күлдәк кенә тейҙе.

Айҙарҙың үҙен шулай итеп ҡыйырһытыуҙарына Сәлимә үҙе үлгәнсе зарланып ^барып үлде.

—• Ҡуй инде, нисә әйтһән. дә, кеше ире яр булмай икән ул. Бер ҙә генә шуға барғым килмәгәйне. Аяҡ атларға бирмәй яусылатты бит. «Димсе диңгеҙ кисерә», тигәндәре шулдыр инде. Емеш еңгәм генә башымды ашаны. Бигерәк өгөтләп димләне шул. Етмәһә, Айҙарҙың оло бисәһе үҙе бит әле, ҡайта-ҡайта~~'килеп, димләште. «Быға тиклем апһын булып йәшәп ара боҙолманы, көндәш булғас талашып та кеше келдермәбеҙ әле, йорт-ер алдында ҡәйнешендең хаҡын төшөрмә, ят яғаһын еҫкәгәнсе, үҙ кешең булыр, ят итмәҫ»,— тигән булып, таҫма телдаре менән йыуҙы. Ә хәҙер күҙендә уғы булһа — атырҙай бульга йөрөй. Балаларҙы тупһаһына баҫтырыу ҡайҙа ул! Мин алйот ни, шул көндәштең һүҙен тыңлаған булдым шул, йоланы аяҡ аҫтына һалмайым, тигән уйьш булды. Ә ул, атай була тороп, балаларҙың өҫтөнә бер ҡат кейем дә алып бирмәне. Ҡыштың ҡыш буйы малын ҡаратты, йэй буйы эштән бушатманы. Ә тәрбиәләргә тигәндә, ике ятып бер төшөнә лә инмәне. Бына үҙегеҙгә лә билдәле, тәүге ире-м үлгәндә ике ат, ике һыйыр, кәртә тулы ваҡ мал ине. Хәҙер бына шуның донъя жетөүгә вайымһыҙлығы арҡаһында бер танаға ҡарап ҡалдым. Үлгән кешене яманлап һейләһән, һөйәге ҡуҙғала, йәне рәнйей, имеш, тиҙәр. Нисек итәйем, үҙәгемә үткән шул. Хәҙер бына унын. үлгәненә ес йыл тулды. Әгәр ҙә ул мәрхүм үҙе һау саҡта шул ,баланы ғына әҙәм итерлек донъя ҡалдырған булһа ине, бегөнгө көндә шул сабый бынауы Ныязғол тигән ҡарундар ҡулына тешеп интекмәҫ ине. Былары ни, йығылғанды түбәлә тигәндәй, «еңгә, Айбулатты үҙем ҡарайым, кеше итәм» ^тигән булып әпикун булып алды ла, балаға тейгән бөтә ерҙе биләне. Ә минең Айбулатым, бахыр, айыуҙан ҡасҡан бүрегә тигәндәй, Ныязғол ҡулында бушлай ялсы булып, кеше көнлө булып



тик йөрөй. Ҡуй инде, был тиклем дә ҡара яҙмышлы булыр икән әҙәм балаһы.

Сәлимә шулай зарлана-зарлана ла күҙенә эркелгә^; йәштәрен яулыҡ осо менән һөртөп ала торғайны. Унын бөтә ғүмеренә һуҙылған был ҡайғылары үҙе үлеү менән генә туҡталдылар. Шулай һыҙланып үткән көндәренен. бер ҡараңғы кисендә ул йән бирҙе.

2

Әсәһе үлгән саҡта Айбулатҡа ун дүрт йәш ине. Ул үҙенең эшкә беше, теремеклеге арҡаһында, әсәһенән ҡалған >балсыҡ өйҙөң тәҙрәләрен тиҙәк кирбестәре менән ҡапланы ла, ҡоба тананы Мәғфүрә еңгәһенә ҡалдырып:

—< Еңгә, быҙаулаһа, һауып һөтөн эсеп торорһоң әле шунда. Мин берәр яҡта кәсеп итеп, өҫ-башымды бөтәйтәйем, — тип эш эҙләп сығып китте.

Мәғфүрә уны үҙ балаһы кеүек күреп йәлләй. Яҙ башы һайын уны ситкә кетөү эшенә оҙата ине. Быйыл да, шулай «теп, әсә кәңәштәре биреп оҙатты:

—• Ярар, ҡәйнеш, бәхет эҙләп ситкә китәһең китеүен, әллә ҡайҙа зимагур булып аҙып-туҙып йөрәмәһәң ярар ине. Әллә быйылға ошонда Ныязғол ҡайнағаларҙа ғына эшләп тораһыңмы? Бәлки бында ла өҫ-башлыҡ эшләй алырһың. Улар ҙа йылдың-йылы һинең өлөшөңдө йотмаҫтар, бәлки. Үҙең дә хәҙер үҫкәнһең инде, • — тине.

Ләкин бәләкәйҙән үк атаһынан да, Ныязғол ағаһынан да файҙа күреү түгел, үҙенең булған ғына донъяһын бөтөрешкәндәрен күреп өйрәнгән Айбулат тептән уйланы.

—• Юҡ инде, — тине ул, — еңгә, булмаҫ инде. Ситтә йөрөп ҡайтайым "әле. Кузьмин утарышда һыйыр көтөүе бар, ти, шуны барып алайым.

—• Ярар әләйһә. Артыҡ-бортоҡ аҡсаңды йыя бар. Юҡҡа туҙҙырма. Игенгә һейләш, уны һатып, бәлки, берәр ат яһарһың.

Мәғфүрә уға сәй эсереп, бер тоҡсайға бер таба сөсө күмәс һалып бирҙе. Уны арата ҡапҡанан оҙата сыҡҡанда, ҡултығына ваҡ-төйәк нәмәләр һалған то.ғон ҡыҫып, морондары ямалған итектәренә ҡараған Айбулатҡа тағы ла кәңәш бирҙе.

— Ҡәйнешкәйем, инде элекке йылдарҙағы кеүек, тапҡанынды эттән ашатып, арҡаңды беттән ашатып подпаскала йеремә. Көтөүҙе үҙенә ал да, ни тапҡаныңды туплай

бар. Хәҙер ;һин егет ҡорона тулғанһың, бала түгелһең. Ун һигеҙең тула. Башлы-күҙле булыр заманың етте, — тине. Унан һуң Мәғфүрә, еңгәләрсә йылма-йып: — Туй яһарлыҡ бол йыйып ҡайтһаң, Гөлйөҙөмгә үҙем яусы булып барырмын, — тип өҫтәне.

Ике-өс йылдан артыҡ ялланып эшләп йөрөп, кәләш алырлыҡ аҡса таба алмауына уңайһыҙланыпмы, әллә күптән һөйөп йөрегән ҡыҙы Гөлйөҙөмдең исемен ишетеүенән оялыпмы, Айбулат ҡып-ҡыҙыл булды. Ләкин бирешмәне. Еңгәһенең йөҙөнә күтәрелеп, көлөп ҡараны ла:

— Ярай, еңгә, изге теләктә тор, — тине.

Мәғфүрә унын яуабынан бик риза булып шатланды.

— Ай, ҡәйнешкәйем, иң ысын күңелемдән теләктә торормон. Хуш, һау йөрө! — тине.

—| Хуш, еңгә, Ҡотлояр ағайым ҡайтһа, минең ҡайҙа киткәнде әйтерһең.

— Ярай, әйтермен. — Мәғфүрә уны урамдан сыҡҡансы оҙата килде.

("Айбулат яҙ башынын, еүеш һалкын елдәренә ҡаршы атЯаны.-

Аяҡ аҫты, кисә кендөҙ ирөп -калып, төнгө һыуыҡ менән ҡатҡаҡланған. Ҡар һыуҙары ат тояҡтары эҙенең соҡорҙарында ҡаңалтыр боҙ булып туңғандар. Уларҙын. өҫтөнә саҡ ҡына баҫыу менән, йоҡа быялалар кеүек сылдырашып ыуалып, соҡорҙоң төбөнә ҡойолалар. Яҙ ҡояшы сығып аҙ ғына күтәрелеү менән үҙенең йылыһын һирпә. Биткә өргәвдә һалҡын һымаҡ тойолған ел ҡар битен шаҙра яһап ашай. Ҡар өҫтө аҡ ҡом кеүек ҡыштырҙай, шыйылдай, атларға ҡамасаулай. Юл буйындағы ҡары китеп асылған ҡара ерҙәр ҙә төндә туңғанға күрә, иртәрак сығып атлағанда еңел булһа ла, ҡояш ауалау менән уның да суҡыйышып ҡатҡан осло моронсоҡтары ҡарайып иҙелә, аяҡ баҫҡан һайын Айбулаттың аяҡтарын артҡа тарталар, талдыралар.

3

Кузьмин утара- Айҙаҡай ауылынан етмеш саҡрым самаНында ине. Икенсе кен «иокә һарҡып, ҡояш тауға терәлгәндә, АвбуЛат утарға барып инд^ Был утарҙың ҙурлығы һәм байлығы Аввулаттың иҫен китәрҙе. Ул быға тиклем тирә-яҡ рус ауылдарында, рус утарҙарында күп



йөрөгән булһа ла, был тирәгә килеп сыҡҡаны һәм бындай бик елкән имение биләп ултырған яңғыҙ байҙы күргәне юҡ ине. Ул утарға инер алдынан бейек түмәләскә баҫты, бөтә тирә-яҡҡа уйланып ҡарап торҙо ла: «Бына ҡайҙа икән ул бай донъя!..» — тип һуҙып әйтеп ҡуйҙы. Был утар янында Расторгуевтың утары ла ,күп ҡайгыш, ә Ныязғолдоң йорт-ере бетөнләй бәләкәс һымаҡ тойолдо.

Өҫтө ағас, аҫты ҡыҙыл кирбестән һальшған ике ҡатлы бейек өй эре-эре өлгөле ун ике тәҙрәһе менән ялтырап ултыра. Өйҙөң кеньяҡҡа ҡараған алты тәҙрәһе гөлдәргә сырмалған бейек террасаға ҡарай, террасалағы былтырҙан ҡалған сырмалсыҡ гелдәр кипкән һабаҡтары менән елгә елберҙәп шыптырҙайҙар. Терраса ла, уға менеп китә торған бейек баҫкыстың «ке терәүес бағаналары ла, урамға сыҡҡан ишектәр ҙә, өй түбәһе менән бер төҫ, йәшелгә буялғандар. Өйҙө ике яҡлап та, ҡаршыһында ла ҙур-ҙур таш келәттәр, лавкалар, арыраҡ таш һарайҙар, ваҡ йорттар теҙелешеп китәләр ҙә эҫкерт, иген машиналары менән тулған ырҙынға •барып тоташалар. Был утар тотошо менән төрлө ағастар, ошо емеш баҡсаһы эсендә йәшеллеккә күмелеп ултыра.

Айбулат шулай тирә-яҡҡа ҡаранып, тамаша ҡылып, өй янына килеп еткәндә генә, баҫкыстың әллә ҡайһы еренән абайламаҫтан ғына ҙур барак ауыҙлы ялбыр ҡара эт, уҫал күҙҙәрен алартып, осло тештәрен ыржайтып, ларҫ итеп өрөп, ҡапыл уға ташланды. Айбулат ҡулындағы таяҡ менән бер һелтәп өлгөрмәне, эт уньвд көпө салғыйын йырта тешләп тә алды. Айбулат үҙен әрсәләп артҡа тайпылды ла таяғы менән эттең башына ҡундырҙы. Ул арала, был тауышты ишетеп, ишек алдынын, төрлө яғынан терлө тауышлы эттәр ерөшөп йыйыла башланылар. Ошо эт өргән тауышҡамы әллә былай ғынамы, бер ҡулына ике силәк, икенсе ҡулына көйәнтә тотҡан бер рус ҡыҙы бәләкәй ҡапҡанан килеп сыҡты. Ул ҡыҙыл сарафаның лтөгөн төрөп -биленә ҡыҫтырған, ҡара сыбар яулығын ослайтып бәйлҙгән, ендәрен терһәктәренә тиклем һыҙғанған, ҡыҙғылт таҙа йоморо беләкле, күләс зәңгәр күҙле ине. Ул сығыу менән Айбулатты таларға йәбешкән эткә югереп етеп:

— Пошел, Пугай, пошел! — тип көйәнтәһе менән һелтәп ебәрҙе лә Айбулатты унан айырып алды. Пугай, ирекле-ирекһеҙ ҡыҙға буйһоноп, асыуҙан ҡанһауыпҡыҙарған күҙҙәре менән Айбулатҡа ҡарай-ҡарай, ҡапҡа төбөн-

дәге ояһына инеп китте. Унын башҡа оялаш иптәштәре лә, был талаш эшенең ҙурға китмәүенә үкенгән һымаҡ, баштарын эйеп, төрлөһө-төрлө яҡка таралдылар.

Айбулат көпөһөнөң эт тешләп айырған йыртыҡ киҫәген ҡулы менән ипләштереп ҡыҙға ҡараны.

Ҡыҙ унан:

—• Больно? — тип һораны.

Айбулат эттәрҙән ҡурҡып ағарған йөҙө менән ҡыҙға йылмайҙы ла:

—' Нет, — тине. Ул тағы ла ҡыҙҙың әллә ниҙәр һорашыуына яуап бирергә әҙерләнеп өлгөрмәне, ҡыҙ уға:

—• һин ошонда ултырып тор, мин хәҙер килермен, — тине лә, уны тимер түбәле өлкән йорттоң ишегенән индереп ебәреп, үҙ эшенә югерҙе.

Был ейҙөң түбәһе бейек, таҡта иҙәне һап-һары итеп ҡырып йыуылған. Унын бер яҡ мейөшөндә өлкән ап-аҡ рус мейесе. Унын уң яғында киң таҡта өҫтәл. Өҫтәлден, бер яҡ башында төрлө ҙурлыҡтағы көршәктәр, кастрюлдәр ултыралар, икенсе башында Айбулат ғүмерҙә күрмәгән, мейестән яңы ғына сыҡкан төрлө семәрле бәлештәр, өҫтәренә шәкәр вағы һибеп эшләнгән һәр төрлө ҙурлыҡтағы күмәстәр теҙелгән. Тәҙрә янындағы быялалы өлкән шкафта төрлө варениеләр, төрле банкылар, бал һалынған һауыттар, тағы әллә ниҙәр теҙелешеп ултыралар. Был бәлеш, күмәстәрҙең тәмле еҫтәре Айбулаттың танауына килеп инәләр ҙә, унын асыҡкан ашҡаҙанын ауырттырып, ауыҙынан ҡара һыу ҡоялар. Ул был өйҙөң бөтә эсен шулай ентекләп ҡарап, баяғы ҡыҙҙың өйөмө икән әллә байҙың үҙе ашай торған өйө ошомо • икән, тип уйланды. Айбулат был тирәләге байҙарҙа йәрөп ҡайтҡан ялсыларҙын, көтөүселәрҙең ауыҙынан, үндай байҙарҙың ашап-зсә торған, ҡунаҡ саҡыра торған, йоҡлай торған өйҙәре һәр ҡайһыһы үҙенә башҡа була, тип һөйләгәндәрен ишеткәне бар. Шуға күрә ул, үҙ уйынса, уларҙың бөтәһе лә Ныязғол байҙың ауылдағы ҡараҡаршы һалынған өлкән өйҙәре кеүек, өлкән-өлкән һәм башҡа-баштса булып, бөтә утарҙы алып теҙелеп ултыралар кеүек итеп күҙ алдына килтерә ине. Ул зәңгәр күҙле ҡыҙҙың да кем булыуын аңларға тырышып ҡараны. Байҙың үҙ ҡыҙы тиһән, ул бай балаларының бер ауыр эш тә эшләмәгәндәрен белә. Ә был ҡыҙ һыуға китте; ул бай ҡыҙы булмаҫ, тип һеҙемтәләне.



Айбулаттың асығыуы сигенә етте, ҡулындағы тоҡсайҙы сисеп, Мәғфүрә еңгәһе һалған сөсө икмәктен бер ситен ҡыйпытып бүлеп алып ҡапты ла ипләп кенә сәйнәп йота башланы.

Айбулаттың был тикшеренеү уйҙарын шарт итеп асылған ишек тауышы бүлде. Ул, баяғы ҡыҙ килеп ингәндер тип, ялт әйләнеп ҡараһа, унан мыҡты кәүҙәле, сал мыйыҡлы, тамһәй күҙле, тотош аҡжейем кейгән, аҡ ситса кәпәсле бер кеше килеп инде. Айбулат был көтөлмәгән кешенең килеп инеүенә ҡапыл ырғып торҙо. Ҡарт уға бер аҙ ғына ҡарап торҙо ла, ендәшмәй үтеп, оло өҫтәл янына эскәмйәгә барып ултырҙы. Ул, Айбулатты бар тип тә белмәгән кеүек, өҫтәлгә терһәкләп яңағына таянды ла асыҡ тәҙрәнән тышҡа ҡараған көйө уйға ҡалды. Оҙаҡламай ҡыҙ ҙа һыу көйәнтәләп ҡайтып килде. Ул, аҡ силәктәрҙе ишек тәбөвдәге эскәмйәгә ултыртып, көйәнтәһен соланға ҡуйып инде. Шунан Айбулат янына яҡын килеп, асыҡ йөҙ менән йылмайып һораша башланы:

— Ҡайҙан килдең, знаком?

—*I* Алыҫтан, Айҙаҡай тигән башҡорт ауылынан.

—> Ә ни эшләп йөрөйһөң? — Ҡыҙ был һорауҙарҙы ниңәлер ярым шаяртып һораны. Шуғамы икән, Айбулат та, нығыраҡ батырайып, көлеп яуап бирҙе:

—• Эшләп ‹өрөмәйем, эшләргә килдем.

—• Ә, шулаймы ни? Исемең кем?

— Айбулат. Ә һинең исемең кем?

—• Маруся, тиҙәр мине.

; Маруся, Айбулат менән һөйләшеүҙән туктап, быға тиклем быларға иғтибар итмәй, үҙ уйына батып ултырған кешегә ниҙер әйтмәксе булып:

— Дядя Митя, — тигәйне, ҡарт, быға ҡапыл асыуланған һымаҡ, туҙып китте. Өҫтәлдәге күмәстәрҙе ҡул һырты менән йөрәкһеп һыпырҙы, урынынан тороп, кемделер әрләне-әрләне лә, кире зскәмйәгә лөп итеп ултырҙы.

Тәүҙә Айбулат, был кеше Марусянең ағаһы булып, үҙен бында лндергән өсөн асыуланамы икән, тип шикләнеп урынынан торғайны. Ләкин Марусянең ҡарттың әрләүенә күҙҙәрен ҙур итеп асып, йәлләгән төҫ менән ҡарап тороуынан һүҙҙең башҡа берәүҙәр тураһында булыуын аңланы.

Ҡарт тағы өнһөҙ ҡалды.

Маруся унын бөкөре елкәһенә уң ҡулын һалып:

—• Ну, дядя Митя, ул тиклем борсолма инде. Ни эшләйһең бит, — тип әүрәтергә тырышты.

Ҡарт йөрәгенән сыҡкан әрнеүле баҫынҡы тауыш менән һөйләнде:

—> Их Маруся, дорогая, понимаешь, мин бында эшкә кергәндә һин донъяла ла юҡ инен, әле. Бит, егерме ,бер йыл ошо мейес янынан китмәй, ошо сусҡаларға аш бешерҙем бит. Ә улар, бына һиңә кәрәк булһа!..

Зирәк Айбулат ҡарттың был һүҙҙәренән уның Марусянең ағаһы түгел, ә бик күптән эшләгән аш бешереүсе икәнен төшөнөп ҡуйҙы.

Иртәгеһенә дядя Митя бөтә ваҡ-төйәк нәмәләрен йөкмәне лә ҡайҙалыр йәйәүләп сығып китте. Маруся уны илай-илай оҙатып ҡалды.

4

Дядя Митя киткәс, Маруся Айбулатты кухнялә ашатып тамағын туйҙырҙы. Айбулат ашағылағансы, кухняләге бөтә ваҡ-төйәк эште йәһәтләп эшләп ташланы ла, ишек алдына сығып, утын яра башланы. Быны күреп ҡалған Айбулат, балтаны Маруся ҡулынан тиҙ генә алып, уға бик күп утын ярып бирҙе. Маруся Айбулатты шаяртып һейләшә-һөйләшә күп рәхмәт әйтте.

—> Бына рәхмәт, Айбулат. Хәҙер минең бер үҙемә эш бик күбәйҙе. Яңы повар килгәнсе, миңә нисек булғас та, барыняләргә оҡшарлыҡ итеп бешереп ашатырға кәрәк.

—• Утынды ла гел һин яраһыңмы ни?

—• Юҡ. Вася ҡайтһа, миңә утынды күп үтеп әҙерләп бирә ул.

—• Кем һуң ул Вася?

—' Васяме, Вася беҙҙең би.к яҡшы егет ул. — Маруся һуңғы һүҙҙәренә айырым баҫым яһап әйтте лә, Айбулатҡа ҡарап, көлөп ҡуйҙы.

—• Хәҙер ул ҡайҙа?

—• Ул кисә генә йәш баринде Самарға алып китте. Иртәгә кистән ҡалмай ҡайтырға тейеш.

Улар бер аҙ һөйләшмәй торҙолар.

Тынлыҡты Маруся боҙҙо:

— Аибулат, һиңә нисә йәш?

— Ун һигеҙ тулды.

—• Вот Васягә лә йәй көнө ун һигеҙ тула. Ҡорҙаш булып сыҡтығыҙ, дуҫлашып та китерһегеҙ әле. Бик әйбәт егет ул Вася.



Маруся ярылған утындарҙы ташый башланы. Унын, Васяне ҡабат-ҡабат маҡтауы Айбулатҡа әллә нисә оҡшаманы. Ул үҙе лә, был турала үҙенә иҫәп бирмәйенсә, ҡапыл бойоҡто ла, ишек яңағына һөйәлгән көйө, тәҙрәгә ҡарап тик торҙо.

Утындарын ҡосаҡлап күтәргән Маруся, килеп инеп, Айбулатҡа ҡағылды. Ул Айбулаттың был хәлен абайлап ҡалып:

—• И Ай.булат, һин нимәгә улай тәрән уйға ҡалдың? — тине.

; Айбулат йыуаш йылмайҙы Әллә ниҙән үҙен-үҙе аҡлаған һымаҡ, ҡапыл яуапланы:

—* Юҡ, юҡ, Маруся, уйға ҡалманым. һинең Вася тураһында һ&йләгәнеңде тыңлайым бит, — тине.

Маруся ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Мин уны бая уҡ һейләп бөттем бит инде. Беләһеңме, Айбулат, әйҙә мин һине Васянең әсәһе янына алып барайым; Ул да бик һәйбәт ҡарсыҡ. һине эшкә алһалар, барыбер фатиргә шунда ҡуйырҙар. Әйҙә, таныштырайым!

Ҡыҙыл кирбестән эшләнгән оло бер йорт эсендә, киң урындыҡ ситендә илле йәштәр самаһындағы бер апай йөн иләп ултыра ине.

Маруся шаулап килеп инде:

—• һаумы, Даша апай, хоҙай ярҙам бирһен! Бына һеҙгә бер ҡунаҡ килтерҙем, — тине.

—- һаумыһығыҙ. Бик яҡшы. Әйҙә ултырығыҙ. Ҡайҙан килгән был ҡунаҡ?

ҫ Тетя Даша бәрхәт кеүек йомшаҡ ҡуңыр күҙҙәре менән был йәштәрҙе иркәләп йылмайып ҡараны.> Айбулат уға ҡул биреп күрешеп һаулашты. Маруся унын һорауына яуап бирҙе:

—' Тетя Даша, ул Имел волосенән килгән башҡорт. Эш эҙләп килгән. Ә бөгөн, как раз, приказчик өйҙә юҡ,— тине.

— Ә, улай икән. Ярар, ошонда йоҡларһың. Эш тә табылыр, улым, — •йше тетя Даша. — «Были бы руки, найдутся муки», тигәндәр бит боронғо кешеләр. Беҙгә шул инде бына, — тип һөйләнә-һөйләнә орсоғон әйләндерә башланы.

Маруся тағы бер аҙ һөйләшеп торҙо ла ашығып кухнягә кире югерҙе.

Тетя Даша Айбулаттын. ҡайҙа, кемдәре барлығык һорашты. Айбулаттын. үкһеҙ етем булып үҫкәнен белгәс,, ул уны тағы ла яҡынырак күреп китте. Васяһенә оҡшатты.

—• Ничего, улым, хәҙер егет булғанһың инде. Минең. дә һинен. кеүек кенәулым бар. Маруся һөйләнгәндер инде„

Иртәгеһен приказчик Айбулатты баштан-аяҡ үрле-түбәнле ҡараны ла:

— Көтөү көтә беләһеңме? — тине.

Айбулат үҙенең ике йыл көткәнен һейләне.

— Тимәк, һин хәҙер үҙең, старший булып, подпаскалар алып эшләй алырһың?

Айбулат, был турала уйламағанға, аҙырак өндәшмәй торҙо ла:

— Кеше бармы һуң? — тине.

—• Уны һин үҙең, табырға тейешһец. Был тирәлә табылмаһа, ана Уральскигә табан йөреп әйлән. Берәр ҡа-*ҙаҡ балаһы осрар әле. Иртәгә ана Васянең саптарын ек. тә шул яҡка барып ҡайт. һинә ике көн срок, — тине.

Айбулат ошо юлға сығып китеп, Селекле йылғаһы буйындағы ҡаҙаҡ малын көткән көтөүселәр араһынак үҙенән ике йәшкә кесе Истебай тигән бер етем малайҙы табып алып килде.

Улар, хаҡты һөйләшеп, көтөү көтә башланылар.

Көтөү эше еңел түгел ине. Баярҙың береһенән-береһе уҫал, бура кеүек эре йеҙәрләгән һыйырҙарын, ер ярып үкереп, яндарына яҡын ебәрмәй торған уҫал үгеҙҙәрев таң ҡараңғынан тороп яланға ҡыуырға кәрәк. Көв ҡыҙа башлау менән һыйыр малы безәкәйләп өйгә ҡайтыу яғын ҡарай башлай. Шуға күрә уларҙы утарҙан ес-дүрт саҡрымдағы күлгә алып барып һыулауға төшерөргә, унда ла тейешле ваҡыттан оҙаҡ тотмайынса, кире яланға алып китергә кәрәк. Әгәр малды ошо ағас күләгәләре аҫтында бер ярты сәғәт кенә кәрәгенән артыгк. ваҡыт тотаһың икән, быны управляющий хәҙер күреп ала ла, эттән алып, этқә һалып әрләй, бик артыҡ күҙе аларып ҡыҙған сағы булһа, көтөүселәрҙе ҡамсы менәв һыҙыртып туҡмарға тотона ине. Ләкин ниндәй эшкә тотонһа ла емертеп, еренә еткереп эшләй белгән Айбулат был көтеү әшендә лә улай әрпешлек күрһәтеп управляющий туҡмағына эләкмәне. Ул, хужаларҙың ҡайһы берәүҙәре килеп иҙерәйә башлаһалар ҙа, аптырап торманы, яуапһыҙ ҡалманы.



Истебай ҙа, бик бәләкәйҙән мал көтеп өйрәнгән булғанлыктан, подпаскалыҡка ғына ярарлыҡ малай түгел,, ә Айбулаттын, үҙенә тиң бер иптәш булып сыҡты. Шуға күрә, улар эигте икәү ара бик тигеҙ алып барҙылар. Алмашлап ял иттеләр, мемжин булған тиклем көнө-төнө* бергә булырға тырыштылар. Уларҙын, ял итеү урындарьь кендөҙгә яланда үҙҙәре яһаған тал ҡыуыштары булһа,, төнгө һалҡындарҙа малды утарға алып ҡайтканда тетя-' Даша терған ялсылар йорто була ине.

Был өлкән, килбәтһеҙ, һарайға оҡшаған йортта, тетя; Даша менән Вася яһаған бәләкәй генә йылы мөйөш Айбулат есөн бер күңелле йомшаҡ төйәккә әйләнде.

Вася Сергеев Самар менән Кузьмин араһында ат ҡыуып йөрөп донъяны күп күргән. Ул һис тә ҡайғы, нужаларҙы муйынына алырға теләмәгән күңелле егет, ысын? күңелдән дуҫ була белә торған иптәш ине.

Айбулат менән Истебай кәтөүҙе алып ҡайтып япкаш саҡтарн булһа, тиҙ үк Вася янына киләләр. Вася-үҙенең русский гармунын ала ла, улар өсәүләшеп, Марусянең ваҡы.ты булған саҡ булһа, дүртәүләшеп, утар--ҙын, әллә ҡайҙағы алыҫ ситенә күңел асырға китәләр.

Айбулат, күп йылдар рус араһында йөрөп, русса һөйләргә бик яҡшы өйрәнгән. Ә инде Истебайға килгәндә,. был эш бик ҡыйын да, бик ҡыҙыҡ та булыш сыға торғайны. Ул тик үҙ телен — ҡаҙаҡсаны ғына белә. Уға Айбулат менән башҡортса һөйләшеү ауырлыҡ менән мөмкин булһа ла, руссаһы бик тоҡор сыға. Шуға күрә-Вася уны айырым ҡыҙыҡ күреп, әңгәмәдәп, руссаға өйрәтә.

— Ну, Истушек, давай йырлайбыҙ, — ти ҙә, үҙе гармунын уйнап, йырҙы башлап ебәрә:

Сама садик я садила,
Сама буду поливать.
Сама милого любила,
Сама буду забывать.

Айбулаттың иркен, моңло тауышы менән был йырҙар» бик моцло яңғырай, һүҙҙәре лә бик дөрөҫ. Ә быны тыңлаған Истйбай ҙа бик ихлас, етди төҫ манән, күҙҙәреш йома-йома йырға ҡушылмай түҙә алмай:

Сама садик я садилай,
Самай буду балывать.
Сама милавай любилай,
Сама будем забывай,—

тип йырлап та ебәрә. Ә Вася менән Айбулат үләнгә тәтәрәп китеп көлөшәләр.

Был әңгәмәләр шулай күңелле итеп һуҙыла торғас, Истебайға ла файҙалы емештәрен бирҙе. Ул да руссаға ап-арыу ейрәнеп китте.

Егеттәрҙе был шаярыу эше лә туйҙырҙы. Айбулат күпме уйнап кәлһә лә, эсенән һаман русса укый алмай ҡалыуына көйәнә ине. Уның әсәһе, бахыр, уға бик бәләкәйҙән укыуҙың бик кәрәк эш булыуын ныҒытып күңеленә һеңдергәйне. Айбулат йәй кетеү көтһә лә, кыш көндәрендә ялланып эшләһә лә, укыуҙы ташламаны. Ул әле лә үҙе яратып укыған ҡыҙыклы терки китаптарҙы ҡалдыр:май үҙе менән йөретә. Ул, көтөүен үрешкә ебәреп яңғыҙ ҡалған саҡтары булды иһә, хәҙер китапка йәбешә ине.

Бер кене шулай унын, был эш менән шөғелләнеүен Вася күреп ҡалды ла төпсөп һорашырға кереште:

— Айбулат, һин нимә укыйһың?

—• Китап укыйым.

- —' Ниндәй китап ул, молитвамы әллә?

Айбулат ҡыскыр*ыщ көлөп ебәрҙе:

—| Юҡ, түгел. Ниңә, мин молитва укып **ултырырлык** •бабай түгелмен бит әле!

—- Ә һуд ни нәмә тураһында?

Айбулат ул замандағы халыҡ араһында бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған светский китаптарҙы күрһәтеп, .мәғәнәләрен аңлатып бирҙе.

—' Ә һеҙҙең китаптар шулай ундан һулға яҙылалармы ни?

—• Шулай яҙылалар шул.

— Ошо ҡаракүлдәрҙең барыһы ла хәрефме инде?

Айбулат тағы ла рәхәтләнеп көлдө:

—• Хәреф шул. Бынау точкалары ла хәреф яһашалар, — тине.

Быларҙы тәүләп күргәң Вася б*ик оҙаҡ уйланды. Шунан:

—• һе, бик ҡыҙыҡ икән, — тип һуҙҙы ла, ҡапыл, — ә һин, Айбулат, русса укый беләһеңме һуң? — тип һораны.

Был юлы Айбулат уйланып керһөндө.

—* Бик аҙ беләм шул. Хәрефтәрҙе генә таныйым тиерлек. Бик аҡрын укый алам.

Быны ишеткәс, Вася шатланып китте:



— Бәй,' миндә бик күп ҡыҙыклы китаптар бар, әйҙә» икәү бергә укыйбыҙ!

Ысынлап та, Вася әсәһенең урындыҡ еҫтөндә ултырған ағас һандығын асып ҡутарып, үҙенең бөтә китап байлығын һейрәп сығарҙы.

— Бына, бына, Айбулат, күрәһеңме, минең, бәләкәй саҡта укыған азбукам да ятҡан. Мә, һиңә булһын, — ул азбуканы тантаналы тоҫ менән Айбулатка һыйланы. Айбула.ттың шатлыҡтан тыны ҡурылды. Азбуканы ҡуш ҡуллап алып күкрәгенә ҡыҫты.

Уның был ҡыланышын күңелләнеп ҡарап торған Вася:

—' Бына шул, Айбулат. һин шуны өйрәнеп укып бөттә, бынау ҡалғандарын барыһын да укырһың, — тине. — һин уны яланда гел ҡыскырып укы, — тип өҫтәне.

Улар хәҙер, йыр, гармунды онотоп, китапка тотондолар. Хатта кетөү кеткәндә лә АЁбулаттың бер ҡулында сыбыртҡы, икенсе ҡулында китап булды.

Айбулат йәйге оҙон кендәрҙең береһен дә бушка ебәрмәне. Вася уны укырға ғына түгел, яҙырға ла өйрәтте. Уның почереге эре, тигеҙ, матур ине. Айбулат та, уға оҡшатып яҙа торғас, матур яҙыуға өйрәнеп китте. Айбулат Васянен, яҙыуын тәү күргәс тә ҡыҙығып маҡтағайны:

—' Уй, ҡайһылай матур яҙа беләһең, Вася!

Вася ҡупырайманы, ә етди эреләнде:

—• А как же, Булатик, укырға-яҙырға мине дядя Гриша өйрәтте бит.

Васянең һәр бер яҡшы хәбәре, матур уйҙары, киләсәк өмөттәре дядя Гришаны телгә алып, унын тураһында урынлы маҡтауһыҙ үтмәй ине.

«Минең дядя Гришамы, улмы, ул... — тип һөйләп кит& ине Вася. — Ул ана шул ҙур Самар ҡалаһында бик ҙур заводта эшләй. Элекке замандараҡ, йәш сағындараҡ, ул да ошо баярҙа эшләгән. Шунан һун, ерен был баяр үҙенӘ' тартып алған да, ул асыу менән ошо тирәләге бөтә крәҫтиәндәрҙе эйәртеп сығып, унын бөтә имениеләрен яндырыға бөткәндәр...»

Айбулат Васяне бик ихлас тыщлай, һорауҙар бирә:

—' Ҡала, ҡала бик ҙур тиһең, ни-сә ауыл ҡәҙәр булыр, һинеңсә?

—• Нисә ауыл?.. — Ваея уйлана, ләкин уны тиңәрлек ауылдарҙы белмәй. — Әйтәм бит, бик ҙур ул. йорттары әллә нисә ҡатлы. Ә байҙары беҙҙең Кузьмин кеүектәр

тенә түгел, унан да эреләр. Унда уларҙың бер генә магазине лә бөтә урамды буйлап алып ята. Ә беҙҙең барчук укый торған йорт биш ҡатлы. Ҡыҙыл кирбестән һалынған. Барышня укый торған гимназия ес ҡатлы, тәҙрәләре эре-эре. Мин уларҙың икәүһен дә көн дә иртә менән сәғәт 9-ға илтеп ҡуям. Ә урамда барғанда теге ҙур йорттарҙың аҫкы ҡатындағы стена ҙурлығы оло күҙгөләрҙә үҙенде лә, атынды ла күреп бараһың. Ҡыҙыҡ була. Ә беҙҙең барчуктың ,күк юрғаһы һымаҡ юрға бер кемдә лә юҡ. Ә барчук йәкшәмбе кистәрҙе гулять итергә тотонһа, юрғаға прямо бәлә тыуа. Ул иптәш офицерҙәрен тейәп ала ла, бөтә урамды бер итеп, сабып йөрөй. Бахыр күк юрға таңға хәлдән тайып а-рып, тиргә батып ҡайта. Ә ҡайһы саҡта шулай һыуытырға ҡуйғанда уның күҙҙәренән йәштәре тәгәрәп-тәгәрәп төшә. Мин уны йәлләп арҡаһынан һыйпайым, муйынынан ҡосаҡлап һейләшәм. Ул башын минең муйыныма һала ла уфылдаған һымаҡ тын ала. Булат, әллә ул хайуан да.кеше телен беләме икән, ә?

—• Әллә шул, Вася, белһә белер ҙә. Минең дә һыйырҙар шул тиклем үҙемә эйәләшеп китәләр ҙә ташлап ҡайтҡанда белгән кеүек мөңөрәйҙәр.

Вася тағы ла хикәйәһен оҙайта. Ҡала тормошо тулыһы менән Айбулаттың күҙ алдына килмәй. Ул һәр ваҡыт барып күреү уйы менән йәшәй ине. Уның бигерәк тә нык иҫен китергән нәмә — ҡалалағы байҙарҙың игесиге булмаған аҡсалары тураһындағы хикәйәләр ине. Вася ул турала һөйләгән саҡта үҙе лә күҙҙәрен ҙур асып, тауышын түбәнәйтеп, ғәжәпләнгән сер менән:

—• Беләһеңме, Айбулат, улар миллионлап аҡса тоталар. Бер кис ресторанда ултырғанда ғына ла биш-алты йөҙ һум аҡса туҙҙыралар. Бер тәңкәне бер тингә лә һанамай ырғыталар, — тип һәйләй.

Айбулат тыңлай ҙа, миллионлаған түгел, йөҙ һум аҡсаның да, кеҫәгә һалһаң, ҡайһы ҡалынлыҡта булып, уға ниҙәр алып бөтергә мөмкин икәнен башына һыйҙыра алмай. Шуға аптырап тағы һораша:

—' Ул тиклем күп аҡсаны улар ҡайҙа һаҡлайҙар икән, ә?

— Бәй, ҡайҙа булһын, банктасы,

Айбулатҡа был һүҙ тағы ла мәрәкә тойолоп көлгөһө килә.



— Банкыһы ниндәй була тағы? Варение һауыты һымаҡ, быяла һауыт буламы?

Был һорауға Вася рәхәтләнеп көлә лә:

—• Ай Айбулат, Айбулат, һинә һөйләһәң ни ҙә, һөйләмәһән, ни! Ни эшләп ул варение һауыты һымаҡ булһын! Ул үҙе шулай айырым бер йорт. Унда утҡа янмай торған һандыҡтар, шкафтар тулып ята. Байҙар аҡсаларын шунда һалалар ҙа ҡарауыл аҫтында тоталар. Кәрәк саҡта баралар ҙа алалар. Ул банк йорттарыньщ үҙҙәренең айырым хужалары була әле уларҙың.

Айбулат шунан һуң яҡшы төшөнә лә бәләкәй саҡтауға өләсәһе һөйләгән әкиәттәге ете йоҙаҡ менән йоҙаҡланған ете ишекле алтын һарай эсендәге алтын тултырған хазина көршәктәрен күҙ алдына килтерә. Үндағ.ы һәришек һайын икешәр бүре һаҡсылар торғанын хәтерләй ҙә, Вася һөйләгән һаҡсы һалдаттарҙы шул бүреләргә оҡшатып ҡуя-.

Айбулаттың уйҙары тағы ла алға тәгәрәй.

—' Вася, улар ул бик күп аҡсаны ҡайҙан, нисек йыйып бөтәләр икән, ә? Беҙ тапкан аҡса ашарға ла, эсергә» лә етмәй, еҫ тә алама, укыу ҙа эләкмәй.

— Ҡайҙан ала, имеш. Ә бына беҙҙең эшләгән баярҙар ҡайҙан ала һуң?

—« Былары билдәле. Ере күп, малы күп, беҙҙе яллап: эшләтә лә байый бирә. Ә ҡалала ул ер~ ҙә, мал да юҡ. табаһа.

—• Ә, һин ул турала аптырайһыңмы ни әле? Минең. дядя Гриша әйтә: «Беҙ бер генә заводта меңәрләгән кеше ун икешәр сәғәт эшләйбеҙ. Ҡулдарыбыҙҙа шундай һөнәр,. халыҡ һүҙе менән әйткәндә, ҡулдарыбыҙҙан алтын ҡойола, ә ул байлыҡтын, бер генә өлөшө лә беҙгә теймәй, хужаның тик бер үҙенә китә, вот шуға улар байлыҡтыҡайҙа ҡуйырға белмәйҙәр. Ә беҙҙең, ашарға ла етмәй,, кейергә лә юҡ. Улар беҙ яһаған нәмәләрҙе һатып байыйҙар, һатып бетөрә алмай башлаһалар, эшселәрҙе эштән; сығаралар, кеше кәрәкмәй башлай», — ти. Былтыр ғына әле Самойлов бай үҙенең заводынан м-ең ярым кеше ҡыуған. Мин яҙ башы ҡайтып киткәкдә дядя Гриша ла: «Был юлы миңә лә эләгә», — тип ҡалғайны, ни булғандыр инде.

Айбулат тыңлап аптырай. Уйлап өлгөрә, һорау бирәг

— Ә һуң, Вася...

Лəкин егеттəрҙе был əңгəмəлəренең иң ҡыҙыҡ ерендə •кемдер бүлде. Тыштан ук берəү:

—- В.ася ҡайҙа, барчук саҡырта! — тип ҡысҡырҙы. 'Быларҙың лыбырҙауына күҙен йои^hа ла, йоҡлай алмай -яткан тетя Даша hикереп торҙо.

—• Васенька, мин hиңə əйттем бит йоҡла, тип. Их, rheҙҙe! Ана хəҙер бер яҡка китергəлер əле. Тиҙ бул, ;югер!—тип hуҡранды.

Вася сығып киткəс, Айбулатты ла йоко алманы. Ул ишек алдына сыҡканда, таң hарғайғайны инде. Ул да, тиҙерəк атлап, hыйырҙар биклəнгəн оло кəртəгə табан .китте. Кəртə янындағы ҡура башында, бесəнгə күмелеп, Истебай йоҡлай ине. Айбулат уны уятты ла көтөүҙəрен -кыуып алып сығып киттелəр.

## ЙƏН ДУҪТАР

### I

Бер көн кис, hыйырҙарҙы алып ҡайтып кəртəлəргə яндергəс, hауынсы ҡыҙҙар, ҡулдарына күнəктəр алып, !hыйыр hауырға таралдылар. hыйыр hауғанда ер тырнап үкереп, hауынсыларҙы ҡурҡытып бетə торған буралбай ҡоба үгеҙҙе Айбулат таш hарайға айырып биклəне. Ул уның ҡапка келəhен элеп торғанда, аттар hарайынан Вася лə килеп сыкты. Ул:

—| Булатик, ну, беҙгə лə айырылышыр ваҡыт етте, — тине.

Айбулаттың ышанғыhы килмəүҙəн күҙҙəре уйнаны.

— Ну, алдайhындыр əле, — тине ул.

həр ваҡытта Айбулатты йə шаяртып алдап, йə уй'нап-квлөп, айпалашып йөрегəн Вася бөгөн күңелhеҙ ине. Шуға күрə ул, Айбулаттың ышанмай ныуылдауына ла моңайған hымаҡ, уйсан күҙҙəре менəн ҡарап торҙо.

•—• Ысын, ысын. Булатик, ни эшлəп алдайым,,—• тине ГВаоя. Үҙенең иртəгə баярҙың улы менəн ҡыҙын ҡалаға укырға алып китəсəген hөйлəне. Улар ул кисте тағы ла «бергə үткəрҙелəр. Ялсылар өйөндəге урындыҡка йеҙтү•бөн hуҙылып төшөп яткан көйө бик оҙак hөйлəштелəр. Үҙҙəренең шулай берəй ҡалала укый алмауҙарына үке•яешеп уфтандылар. Истебай ҙа уларҙы тыңлай ине.



Вася йəшник өҫтөнə ултыртылған. бишле лампаньщ утына ҡарап уйлана ла Айбулаттың яурынына уң ҡулъ менəн hуғып ҡуя:

— Их Айбулат, Булатик, белhəң ине минең нисек укығым килеүен!

— Бына hөйлəнең hүҙ! Мин ни эшлəп белмəйем та инде. Мин үҙем дə был турала həр ваҡыт уйлап көйəм.. Беҙ ҙə ата балалары бит, ə укырға hис мемкинлек юҡ. Бына hин шуны белhəң ине.

— Белəм, Айбулат, белəм. hинең hейгəненде лə белəм.

—' hин, исмаhам, Самарҙа саҡта дядя Гриша менəн' теге үҙең hөйлəгəн воскресный школаға йөрөрhөң. Ула ниндəй ҙур эш. Ə миңə ул да юҡ.

—« Эйе, Айбулат, был турала hин хаҡлыhың, туғанҡай. —• Васянен. күҙҙəре ҡапыл йəнлəнеп ялтырайҙар_ Унын əсəhе күҙҙəренə оҡшаған hoро бəрхəт күҙҙəре, йомшаҡ, йылы осҡондар сəсеп, Айбулатҡа ҡарайҙар. Ул б«к күңелле бер нəмəне хəтеренə алған кеүек йылмая. — Мив унда үткəн ҡыш hигеҙ тапҡыр булдым. Күберəк йөрөргəйə мине баяр улы бушатмай, йə дядя Гриша: «Бөгө№ бала-сағаға барырға кəрəкмəй», — тип кенə ҡалдыра ла> китə. Мин ниндəй бала-саға булайым инде, буйым ҡолға хəтле! Быйыл мин унан бик үтенермен дə бер ҙə ҡалмай йөрөрмөн инде.

—• Вася, унда ни нəмə укыталар hуң, шуны бер ҙə» hейлəгəнең юҡ?

—• Ундамы, унда иң тəүҙə укырға, яҙырға, хисапҡа ейрəтəлəр, география уҡыталар.

—• Бай балалары ла буламы? "*

—• Юҡ, Айбулат, что hин. Унда тик оло йəштəге эшселəр генə укыйҙар.

— Ə нинə hуң дядя Гриша hине ҡайhы саҡта, «ярамай», тип эйəртмəй китə?

—' Əhə, бөтə мəсьəлə ана шунда шул, — Вася күҙҙəрен тағы ла нурлы көлдөрөп дуҫына ҡарай ҙа, тауышын* əкренəйтепГсер сисə:

— Сөнки ул көндəрҙə эшселəргə политика тигəю ғилем өйрəтəлəр. Аңлайhыщмы, по-ли-ти-ка. — Вася бер' аҙ уйланыш ала. Башҡа ишетеүсе йҡмы тигəн hымаҡ, тирə-яғына ҡарана. Лəкин бөгөн был өлкəн өй буш. Ə' Истебай иптəштəренен. hөйлəшеүҙəре аҫтында ойоп йоҡлап киткəн. Тетя Даша ла ҡайҙалыр сығып киткəйне.

Айбулат урынынан тороп ултырып һорау бирҙе:
— Нимә була ул политика, ниндәй ғилемгә инә?
— Улмы, ул беҙҙең кеүек миллионлап иҙелгән халыҡтар, меңәрләгән эшселәрҙе үҙҙәрен тотҡонлоҡта тотҡан батша самодержавиеһе менән нисек керәшергә, нисек итеп унан ҡотолоп иреккә сығырға өйрәтә торған ғилем ул, белдеңме?

Айбулат ышаныр-ышанмаҫ төҫ менән Васягә ҡарай. Ышаныр-ышанмаҫ тауыш менән һорау бирә;
— Батшаның үҙе менәнме хатта?
— Эйе, уның үҙе һәм законы менән.
— Ә кемдәр укыта һуң ул политиканы?
— Социал-дөмократтар тигән иң яҡшы кешеләр укыта, Айбулат, ә уларҙың иң ҙур етәксеһе Ленин...

Айбулат, Васяне тәүбашлап күргәндәй, һоҡланып аптырап ҡарай. Бик яҡын уҡытыусыһына һорау биргән кеүек хөрмәт менән тауышын баҫа биреп, һүҙҙәрен яйлап әйтеп һорай:
— Ә һин, Вася, Лениндең үҙен күрҙеңме? — Ул әйтмәй ҡуймаһын тигән шик менән Васягә йотолоп текләй.

Вася серьез төҫ менән ҡашын йыйырып:
— Юҡ, Айбулат, уны мин күргәнем юҡ. Ул бит беҙҙең Самарҙа ғына тормай, бөтә Россияны йөрөп сыға, сит илгә лә барып ҡайта, ти. Ул бер урында ла оҙаҡлап тормай, ти. Ә бына дядя Гриша уны күргән. Ул хатта уның менән әллә ни-сә ҡат һөйләшеп ултырған. Ул дядя Гришаға «Искра» тигән ҙур, ҡиммәтле газета ла ебәртәйне әле. һәр ваҡыт ебәрә ул.
— Газета... һин уны үҙең укыныңмы?
— Уҡыным. Тик был турала бер кем дә белергә тейеш түгел. Уны бик һаҡлыҡ менән генә, ҡулдан ҡулға йерөтөп кенә укыйҙар ҙа йыйып ҡуялар. Юҡһа был турала жандармдар, белеп, һиҙеп ҡалһалар, хәҙер тотоп алалар ҙа төрмәгә оҙаталар.

Был хәбәрҙәр Айбулатҡа быға тиклем таныш булмаған ниндәйҙер бер эҫелек менән килеп бәреләләр. Айбулат бик тәрән керһвнә. Ә яңы һүҙҙәрҙең ҡайһы берәүҙәрен, әйтергә ейрәнергә тырышҡан һымаҡ, шыбырҙап ҡабатлай: «Ленин», «бик ҙур кеше Ленин». Тағы уйлана ла: «Социал-демократтар, иҙелгәндәрҙе яҡлаусы иң яҡшы кешеләр».

Вася инде бер ҙә туктамай күп итеп һөйләй. Уларҙың бетәһен дә башына һыйҙыра алмаған Айбулат ҡайһы



ер бик матур һәм яҡтылыҡ һипкән кеүек һүҙҙәрҙе тиҙгер&к отоп ала. «Искра», газета «Искра»!.. Вася уны күптән укыған. Ә ул яңы ишетә генә.

Айбулат ҡапыл Васянен. муйынынан ҡосаҡлап үҙенә яҡын тарта.
— Шулай ҙа һин миңә ҡарағанда күп бәхетлеһең, Вася! —ти ул. Үҙе быға бик шйтлана, бит алмалары ҡыҙарып яна.

Вася уны көлөп йыуата:
— Ҡайғырма, Булатик, һин дә күрерһең әле. Бына бер ваҡыт ҡалаға барып сығырһың да, шунда тағы ла «Искра»ны иҫкә алырбыҙ, хатта икәүләшеп укырбыҙ. Эйе, Булат, беләһеңме нәмә, ул газетаның «Искра» тиа ҙур итеп яҙылған исеме аҫтына нимә тип яҙылған? «Из искры возгорится пламя» тип яҙылған, аңлайһыңмы, Айбулат. «Оҫҡондан ялҡын тоҡаныр». Бына ошо ялҡын тоҡанһа, барыбыҙ ҙа бәхетле булырбыҙ.

Айбулат йылмайған төҫ менән, баяғы Вася һымаҡ, лампа утына ҡарап уйға баткан: «искра» — башҡҫртса «оҫкон» була, ә «пламя» — «ялҡын» тигән һүҙ.

Айбулат үҙенең был туралағы уйҙарын ошолайтып асыҡлап ҡуя.

Вася, һөйләүенән туктап, урындыҡ ситенә үк барып ултырып, ниндәйҙер уйға тештө.

Айбулаттың уйында яңы һорауҙар тыуҙы:

«Долой царокое самодержавие!» Вася был һүҙҙәрҙе ағаһы Гришанан ишетеп ҡалған икән. Тимәк, батшалыҡ бөтһөн, кәрәкмәй. Шул сакта беҙгә ирекле, рәхәт көндәр тыуасаҡ... Ә һуң батша булмағас, нисек инде, Россиялз кем етәкселек итер икән... — Айбулат ошо турала Васягә һорау бирмәксе булып әйләнгәйне лә, Вася алдан өлгөрҙе. Ул, ҡапыл боролоп:
— Айбулат, әйҙә, Маруся янына барып киләйек,— тине.
— Повар. ундалыр бит.
— Булмағайы, чорт с ним. Тиҙҙән барыбыҙ ҙа таралышабыҙ бит.

2

Маруся дядя Митя киткәне бирле баярҙың ҡаланан килтерткән йәш повары менән бергә эшләй. Был кеше бик ҡырҡыу холоҡло. Хужаларҙың ҡушкаайынан ситкә

сыкмаҫка, уларға ярарға тырыша. Үҙенен. ашты оҫта әҙерләй белеүе менән маҡтана, кухняләге таҙалыҡгы бөтә ҡағиҙәләре менән һаҡлата. Марусягә улүҙенҙур начальник итеп танытырға тырыша. Маруся баштараҡбыл кешенән ныҡ ҡына ҡурҡһа ла, һуңғы айҙарҙа уға аҙыраҡ эйәләшкәйне. Ул поварҙың былай бик ҡоро, уҫал булыуының күбеһе тик тыштан ғына булып, барыһя алдында үҙен шулай «якшы яктары» менән танытырға тырышыуы икәнен төшөндө. Ҡайһы бар ваҡыттарҙа, бигерәк тә аштарҙың бик уңышлы һәм тәмле әҙерләнеп, байҙарҙың маҡтап ашағандарын ишеткән сакта, ул, бөтөнләй асылып китеп, уйын һүҙҙәр ҙә ҡыҫтырғылап һөйләшеүҙәрең дә Маруся һынап алғайны. Шулай булһа ла, был повар, элекке һышаҡ ук, Айбулат, Вася йәки лакейҙәрҙең ваҡытлы-ваҡытһыҙ кухнягә иркенләп инеп йөрөүҙәренә асыулана торған булды. Марусягә ул:

— Чтобы бында уларҙың эҙҙәре булмаһын, барыня асыулана, эшкә оронсоҡлайҙар һәм бысраҡ ташыйҙар,—• тип әйтеп ҡуйҙы.

Айбулат үҙе тәү килгән сағында бай өйө микән әллә тип уйлаған был кухнянен, эсен яңы повар килгәне бирле асыҡ тәҙрәләрҙән генә күреп үтә торғайны. Әле инде ул Васянен, әйҙә, тигән һүҙенә ҡыймай ғына, уның батырайып барғаны өсөн генә эйәрҙе.

Улар ишек төбөнә килеп еткәндә генә, боролдатып быу һирпкән ишектән өймәләмә итеп ашамлыҡ тултырылған өлкән аҡ һауыт күтәреп, Клавдия ашығып килеп сыҡты ла баяр өйөнөң еҫке ҡатына баҫҡыстарҙан ашығып менеп китте. Уның артынан ишек ябып ҡалырға ынтылған Маруся, егеттәрҙе күреп ҡалып, көләп ебәрҙе.

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тине.

— Ошонда, һинең янға киләбеҙ, — тине Вася.

Маруся икеләнеп повар яғына күҙ һалғансы, Вася менән Айбулат кухнягә килеп тә инделәр.

Эш күплектәнме, ниңәлер, повар был юлы уларға артыҡ иғтибар итмәне. Ғәҙәттәге ҡырҡыу тоҫө менән Марусягә бер-бер артлы йомош ҡуша торҙо.

Маруся үҙенең сапсан ҡуҙғалышы, етеҙ ҡулдары менән ,машина кеүек йәһәт эшләй ине. Ул төрлө үлсәүҙәге һауыттарҙы, суйын сүлмәктәрҙе, кастрюлдәрҙе һәр берeһенә таман күсәркә, ухыуаттар, таба тоҡостар менән әле оло мейескә, әле плита еҫтенә күсерә һалып, ошо һауыттарҙағы аштарҙың ваҡытлы бешеүен тикшерә, бик



ваҡытлы өлгөртә. Повар үҙе елкән аҡ тәпәндәге тәмле еҫтәр сығарып ҡабарған һарғылт апараға әллә ниндәй порошоктар һалып, йоморткалар һытып, бер оло банка менән һары май ҡойоп ебәрҙе лә Маруся иләп биргән шәкәр кеүек аҡ, мамыҡ кеүек йомшаҡ ондо.һалып ҡамыр баҫа башланы. Был — баяр балаларына юл аҙығы ине.

Үҙҙәренә өндәшкән кеше булмағас, Вася менән Айбулат тупһаға тағы ипләберәк ултырҙылар ҙа, бер-берeһенә терһәктәре менән тертөшеп, шаян ымлашып йылмайыштылар. Ул арала горничная Клава селтәр ситле аҡ алъяпҡыс, аҡ башлыҡтары (менән тағы ла ялт итеп килеп етте. Егеттәр, уға юрый юл бирмәҫ есөн, ҡуҙғалманылар. Ләкин Клаваның бегөн, башҡа ваҡыттарҙағы шикелле, улар менән шаярып торорға ваҡыты юҡ ине. Ул, матур һоро күҙҙәрен бер генә секундҡа һирпеп, томоз танауын йәмшәйтеп көлде лә көслө ҡулдары менән егеттәрҙең икеһен ике якка айырып ашығып үтте.

—• Туктағыҙ әле, булашмағыҙ, ваҡыт юҡ, — тине Клава.

Унын, килеүе менән повар Марусяне тағы ҡабаландырҙы:

—• Давай, тиҙәрек ҡаҙҙарҙы сығар!

Маруся, өтәләнеп, *төмбәя* ҡапҡастар ябылған эре-эре өс жаровникте мейестән өлкән күсәркә менән тартыл сығарҙы. Ул уларҙы өҫтәлгә ҡуйҙы. Ҡапҡастарын асып ташлап «әйбәт булған бит» тигән тоҫ менән поварға ҡараны. Жаровниктәрҙә майға мансылып, һуғанға, бороҫка буталып, эре-эре картуфтар менән уратылып, лавровый япраҡтар араһында ҡарағусҡыл булып ҡыҙарып бешкән һимеҙ ҡаҙҙар теҙелешеп яталар ине. Повар уларҙың береһен/ алып өлкән оҙонса тәрилкәгә һалды, уның тирә-яғын баяғы ҡыҙҙырылған эре картуфтар, тоҙло ҡыярҙар, тоҙло кәбеҫтә, «ишер киҫәктәре, салат япраҡтары менән биҙәп бөттө. Шунан ул тәрилкәне тағы бер ҡат әйләндереп ҡараны ла, ошо әҙерләнгән ҡаҙ еҫтөнә майлы тоҙлоҡ һибеп, ап-аҡ таҫтамал менән тирә-яғын һөртөп, үҙ ҡулы менән Клаваға тотторҙо.

— Ҡара, төшөрөп ебәрмә! — тине ул.

Был юлы Вася менән Айбулат үҙҙәре, Клаваға юл биреп, ситкә тайшаадылар.

Ҡыҙған һимеҙ ҡаҙҙың тәмле еҫтәре Васянең ауыҙ һыуын ҡойҙо. Ул тағы ла ипләп ҡенә Айбулаттың ҡабырғаһына төрттө лә шаян көләп шыбырҙаны:

— Их, тәмле буғай, ә? — тине.

Айбулаттың Васянең был шаяртыуынан бик нык келгеһе килде, ләкин ҡысҡырып көлөргә ярамағанға, ул да Васяга ҡарап, ҡылҡынып йоткан кеше булып, шаярып яуап -бирҙе. Ә үҙе зстән генә: «Әгәр ҙә Гөлйөҙөмдө алып донъя ,көтә башлаһам, күп итеп ҡаҙ аҫырармыш»,— тип ниәтләп ҡуйҙы. Тик башҡорттарҙа бындай өлкән рус мейестәре булмауын, -баш-корт кешеһе ҡаҙҙы ғүмерҙә улай ҡыҙҙырып ашамағанын уйлап алды ла рус мейесе ләяһарға ниәтләне. «һис (булмай икән, шулай бишбармаҡ бешереп ашаһаң да тәмле булыр әле»,— тип уйын теүәлләп ҡуйҙы.

Улар ошолай итеп ҡуҙғалышмай оҙаҡ ныҡышып ултырғас, поварҙын, да түҙеме бөттө. Юлға һалырға тип ҡалдырған ике ҡаҙҙы, иплəп кенә өлкән тәрилкәгә һалып, Марусягә һалҡынға сығарып ҡуйырға ҡушты ла:

— Ну, егеттәр, әйҙәгеҙ, әйҙә, бында күп ҡайнашмағыҙ, китегеҙ, — тине.

Айбулат уға ҡаршы ҡаты ғына итеп бер нәмә әйтергә укталғайны, Марусянең сыкканын ғына көтөп ултырған Вася, тиҙ генә Айбулаттың еңенән тартып:

— Әйҙә, әйҙә, киттек, — тине.

Маруся, ауыр ҡаҙҙарҙы күтәреп, кухнянән келәткә бара торған оҙон коридорҙан ашығып бара ине. Вася, уны -кыуып етеп:

—< Маруся, тукта әле, уны -кайҙа алып бараһыц, давай береһен Булат менән миңә ашат та ҡуй! — тип шаяртты.

Марус-я, туктап боролоп, уларға иркәләнеп йылмайҙы:

—> Әй, |был ҡаҙҙар үҙемдеке булһасы, икәүһен дә һеҙгә ашатыр инем. Иртәгә китеүселәргә бит, — тине.

— Ну что же, беҙ ҙә иртәгә китәбеҙ, — тине Айбулат.

— Әллә, Айбулат, һин дә иртәгә ҡайтып китәһеңме?

—• Китәм шул, Маруся, мин дә оҙаҡламай китәм. Бына яңғыҙ ҡалаһың инде.

Маруся, аҙ ғына туктала биреп, иҫенә ниҙер төшөргән кеүек булды.

— Ярар, улай булғас, мин һуңыраҡ, эш бөткәс, һеҙҙең янға килермен, йәме? — тине лә ары китте.



3

'Егеттәр үҙҙәренең мал һарайы кеүек өлкән дөйөм ятаҡтарыма ҡайтып ингәндә, егерме-утыҙлаған ялсы, өҫ-баштарын да сисенмәгән көйө, киң оҙон урындыҡ буйына теләһә нисек ятып йоҡлағайнылар. Бөгөн уларға тамаҡ юнләп, керҙәрен йыуып арып бөткән тетя Даша, ҡап-ҡара булып ыҫланған оло рус мейесенән өлкән ҡара суйын көршәкте тартып сығарып, тары буткаһын табаҡҡа төшөрөп маташа иие. Вася менән Айбулат килеп ингәс, ул орошоуға ҡарағанда үпкәләүгә яҡын булған тауыш менән:

—• Бына һеҙҙең ғәҙәтегеҙ һәр ваҡыт шулай инде. Ашты йылы кейөнсә генә ашаһындар, тип әҙерләйем, ә һеҙ төн буйы әллә ҡайҙа китеп юғалаһығыҙ ҙа китәһегеҙ, — тине.

Вася үҙенең һәр ваҡыттағы иркәләнеү шаянлығы менән әсәһенә бирешмәне:

—• Әй әсәй, бутҡандың күлбегән майы тунғандыр инде, шуға асыуланаһыңдыр. Ҡана, Булатик, тиҙерәк ашайыҡ, — тип ҡулдарын йыуа башланы.

—• Майы булмаһа ла, эҫеләй генә ашаһаң, файҙалыраҡ була. Эскә йылы төшә ул. Үҙен. юлға сығырға тораһың.

— Миңә лә, Айбулатка ла китергә кәрәк инде, әсәй. Шуның есөн беҙҙе ныҒыраҡ һыйлап ҡалырға тырыш.

Улар, шулай шаярып һөйләшә-һөйләшә, сисенеп, ҡулдарын йыуып, ҙур өҫтәл буйына һуҙылған оҙон эскәмйәгә һырлыҒышып инеп ултырҙылар.

Айбулат был утарға килгәне бирле ашарға әҙерләп, өҫ-башын йыуып ҡарап торғаны есөн уны үҙ әсәһе кеүек яҡын күреп, эҫенеп китте. Уға ҡәҙер итер-гә тырыша, ҡулы бушаған арала иҙәнен һеперешеп, утынын ярып, һыуын индереп ярҙамлаша торғайны. Тетя Даша ла уны үҙенең Васяһе кеүек к^'реп ярата, ҡәҙерләй. «Был тиклем ипле, аҡыллы бала булыр икән, бәхете генә булһын инде», — ти.

Тетя Даша бөген уларҙың икәүһен дә хәленән килгән тиклем һыйлап ҡалырға тырышты. Эре-эре итеп киҫкән арыш икмәге телемдәрен һап-һары итеп йыуған өҫтәлгә теҙеп һалды. һыуға бешкән ҡаты тары бутҡаһын елкән табаҡҡа ауҙарып, унын өҫтөнә бөр бәләкәй бутылканан киндер майы һибәләне. Өлкән еҙ самауырҙан. тогкалары

һынып бөткән шәшкеләргә сәй яһаны ла һәр береһенен алдына берәр шаҡмаҡ шәкәр ҡуйҙы.

Улар берәр шәшке сәй эсеп өлгөрмәнеләр, Маруея ашығып килеп инде. Егеттәр уны шаулашып ҡаршы алдылар. Маруся:

— йоҡламанығыҙмы әле, — тип көлдө лә, өҫтәл янына килеп ултырып, үҙенең алып килгән күстәнәстәрен өҫтәлгә һалды.

Маруся үҙенең киске ашын бер ҙә ашамаған, күрәһең. Ул алъяпҡысына төрөп алып килгән ваҡ ҡына күмәстәр, ҡалаҡ башындай ғына булһа ла бер нисә киҫәк ит, бер нисә селедка сығарып өҫтәлгә теҙҙе. Улар, дүртәүләшеп өҫтәлде уратып ултырып, әңгәмәләшә-әңгәмәләшә, ашапэсергә тотондолар.

—< һин, Маруся, был тиклем закускалар алып килгәс инде, аҙыраҡ коньяк та алып килергә ине, — тип шаярт-ты Вася.

Айбулат:

— Коньягы коньяк, Маруся, ҡаҙҙы алып килергә онотҡанһың, — тип өҫтәп көлдө.

— һеҙҙең яҙ ҡайтыуығыҙға барыһын да әҙерләп көтөрмен, — ти Маруся.

Улар бөтәһе лә күңелле келешәләр.

Киң урындыҡ буйлап теҙелешеп ятып йоҡлаған ялсыларҙың иң, арғы ситендә яткан дворник Андрей ҡарт, уянып, ҡажкылдап юткерергә кереште лә:

—I Акрын, йоҡларға ирек бирмәйһегеҙ, чорттар, — тип һуҡранды.

Тетя Даша ла йәштәрҙе тыйҙы.

—' Бик шаулайһығыҙ шул. Шыбырҙап ҡына һөйләшегеҙ. Кешеләр арып яткандар, йоҡлаһындар, — тине.

Шунан улар шыбырҙашып һөйләшә башланылар.

Сәйҙән һуң тетя Даша юл нәмәләре әҙерләй башланы. Унын, күңеле бөгөн тағы ла йомшаңкырағайны. Улын бөтә ҡыш буйына ҡалала торорға оҙатыу бик ауыр ине. Иәй буйьшың йәмле ваҡыттарын, улы менән көңгөр-ҡаңғыр тигәндәй бергәләшеп үткәргәндән һуң, тағы оҙаҡ ваҡытка айырылышыу бик күңелһеҙ ине. Ул һөйләшкәндә лә уфылдап ултырҙы. Васяһенә тип йыуып әҙерләгән бер пар күлдәк-ыштанын бекләп бер киндер тоҡсайға һалды. Салбар тубығындағы тишектәрҙе яманы, һары тундың төймәләрен һәм елкәлеген нығытып тегеп сыкты ла үҙалдына һөйләнгән кеүек уйла«ып һөйләнде:



___Виктор Макарич, Васька быйыл һәйбәт кенә йөрөһә, бөтөнләй, күктән кейендереп, ҡала формаһында йөрөтәм, тигән була ла бит, булмаҫ. Ул йыл һайын шулай вәғәҙә бирә лә онота торған...

Ләкин йәштәр, үҙ-ара әллә ниндәй бик ҡыҙыҡ хәбәр менән мауығып, былдырҙашып, әбейҙен. был өмөтлө һүҙҙәрен ишетмәнеләр. Улар есөн был һуңғы айырылышыу кисе, бер яктан, бик күңелһеҙ, ә, икенсе яктан, ғүмергә иҫтәрендә ҡалырлыҡ бик яҡын һәм йылы кис ине.

Айбулаттын Марусягә, тетя Дашаға, бигерәк тә Васягә бөтә йәй буйына күрһәткән хеҙмәттәре, дуҫлыҡтары өсен әллә ниндәй яҡшы һүҙҙәр менән рәхмәт әйткеһе килә ине. Ләкин был тәрән тойғоларҙы тулы аңлатырлыҡ матур һүҙҙәрҙе ҡайҙан табаһың! Айбулат, ошо тойғоларын һирпегән ҡара күҙҙәрен көлдөрөп, Васягә текләй. Васянен, үҙенә яҡшы иптәш кенә түгел, бик ҙур белем биргән укытыусы булып киткәнен дә ул бик яҡшы төшөнә, уны ғүмерҙә лә онотмаясағын аңлай; бына әле Вася үҙенең дуҫы Маруся менән һейләшеп туя алмай. Мөмкин булһа, йыш ҡайткылап торорға вәғәҙә бирә ул Марусягә. Маруся үҙенең һәр ваҡыттағы зәңгәр көләс күҙҙәре менән Васянең вәғәҙәләренә ышанып ҡарай.

Айбулат уларға:

— Вася, Маруся, мин быйыл ҡайткас та өйләнәсәкмен. һеҙ миңә ҡасан ғына ваҡыт тапһағыҙ ҙа ҡунаҡка килегеҙ, йәме, тетя Дашаны ҡалдырмағыҙ, ярайкы, — тине.

Вася ҡыуанып көлә лә, Марусягә мәғәнәле ҡараш ташлап:

— Маруся, ишетәһеңме, Айбулат тиҙҙән өйләнәсәк,— ти. Унын ҡарашында: «Ә беҙ һуң ҡасан өйләнешербеҙ икән?» тигән әйтелмәгән һорауҙы зирәк Маруся шунда уҡ аңлап ала ла оялып ҡыҙара, ләкин яуапһыҙ ҡалдырмай:

— һау булһаҡ, беҙ ҙә, беҙ ҙә... обязательно һиңә ҡунаҡка барабыҙ, Булатик, — ти.

Вася шатлыҡтан ике дуҫын бергә ҡосаҡлай.

— Ишетәһеңме, Айбулат, беҙ һеҙгә обязательно барабыҙ. Ну, Айбулат, уға тиклем һиңә Самарға барырға юл тешһә, м-ине күрмәй ҡайтма. Туп-тура дядя Гриша фатиренә кил. Хәҙер һиңә адрес билдәле: Казанский урамы, номер 120, полуподвал. Мин һиңә вәғәҙә иткән бөтә китаптарҙы табып бирермен.

Әллә улар шулай таң атҡансы ла һөйләшеп ултырырҙар ине. Әллә уларҙың былдай күңелле, йәшлек өмөттәре аденән тулған уйҙары бик күп кистәр буйы ултырһалар ҙа бөтмәҫ ине. Улар Марусянең әкрен генә йырлаған моңло тауышынан, үҙҙәренең яратҡан йырҙарын йырлауҙан бер ҙә айырылғылары килмәй:

Давайте, пожмем друг друга руки
В дальний путь, на долгие года...

Ләкин ятырға, ял итергә кәрәк. Был турала тетя Даша уларҙы әллә нисә ҡабат иҫкәртте инде, Шауламағыҙ, тине. Тынларға кәрәк ине.

4

Вася, урындарында баҫып сыҙай алмай .торған пар күк арғымаҡты семәрле күк повозкаға егеп, баярҙың парадный ишеге төбөнә килде. Повозканың көймәһе артҡа ташлап асылған. Өҫтәренә формалар кейгән йәш лакейҙәр уның елкән кузлаһы аҫтына эреле-ваҡлы сумаҙандар ташлап тейәнеләр, уларҙың һелкенәме, юкмы, барышня менән барчуктың аяҡтарына уңайһыҙламайҙармы икәнен тикшереп, һелкетеп-һелкетеп ҡарап, ҡайһы берәүҙәрен тартып бәйләп ҡуйҙылар. Улар артынан өйҙә ҡалған сал башлы, күҙ ҡабаҡтары һалынған иң ҡарт лакей ҙә ҙур ике төйөн алып сығып повозкаға һалды.

Ошо әҙерлектәр бөткәс, башына йомшаҡ ҡара бесәй бүрек кейеп, яурындары күпереп торған ҡара буҫтау пальтоһыныщ бүрке менән бер төҫ яғаһын юғары күтәрә биреп, байҙың ҡыҙы Нина сыҡты. Ул үҙенеа сыйылдаған нәҙек тауышы менән үҙен оҙата сыҡҡан йыуан әсәһенә әллә ниҙәр татылдап һөйләнә. Әсәһе менән үбешеп һаулашып, повозканың ҡанаты янына баҫты. Уны бер яҡтан Клава, икенсе яҡтан баяғы ҡарт лакей күтәрмәләп мендереп повозкаға ултырттылар. Барыня тағы ла уға әллә ниҙәр һөйләне, әллә кемдәргә онотмай хат тапшырырға, әллә кемдәргә бик һағынып сәләм әйтергә, әллә кемдәрҙең рождествоға ҡунаҡҡа килеүҙәрен үтенеп һорарға ҡушты.

Атаһы менән улы ла, әсәһе менән ҡыҙы кеүек, әллә ниҙәр тураһында һөйләшә-һөйләшә, баҫҡыстан әкрен генә ҡултыҡлашып атлап төштөләр.



Баяр Кузьмин, алға кәпәйгән ҡорһағы һытылып китмәһен тигән ҡиәфәт менән, бик аҡрын һәм эре ҡуҙғала, елкәһендәге беләкләнеп яткан ҡалын майы бөкләнмәһен тигән һымаҡ, муйынын бормай, бүре һымаҡ, тотош кәүҙәһе менән боролоп хәрәкәт яһай. Улы Виктор үҙенең нәҙек биле, ҡупшы кәүҙәһе, бейергә әҙер торғандай етеҙ аяҡтары менән, бала сағынан бирле сығып бөтмәгән иркәлек ен.еллеге менән, йәһәт ҡуҙғалыштар яһап, алдан атланы. Ул атаһы, әсәһе менән үбешеп күрешеп һаулашты ла, повозкаға һикереп менеп, йәтешләп ултырҙы. Барыня балаларының икәүһенен, дә маңлайҙарынан үҙе үбеп суҡындырҙы ла илап ебәрҙе.

— Һеҙҙе алла һаҡлаһын инде, минен. ҡиммәтле балаҡайҙарым...

Клавдия уға тиҙ генә яулыҡ тотторҙо ла ҡултыҡлап алды. Уның икенсе яғынан ҡарт лакей килеп ҡултыҡланы ла, баҫҡыс янына тартылдылар.

Вася Сергеев һары кәзәкей туны өҫтөнән билен шаҡырайта быуған. Башында ҡолаҡлы бүрке. Уныа төҫөндә башҡа ваҡыттағы шаянлыҡ та, күңеллелек тә юҡ. Ул, хужалар алдында саҡ ҡына ла яңылыш ҡуҙғалыш яһамаҫ өсөн, бөтә көсө менән ныҡ, ыҡсым, етеҙ булырға тырышып, тыпырсынып торған арғымаҡтарҙыщ яңы ҡайыш дилбегәләрен ҡыҫып тартып тотҡан. Уларҙың ышлыяларындағы кемәш биҙәктәр, серге остарындағы ука суктарҙы яңы күреп ғәжәпләнгән һымаҡ ҡарап ҡатҡан.

Китеүселәрҙе баярҙын. бөтә двор халҡы оҙата сыҡҡайны. Марусянен, йоҡоһоҙ үткән ҡайғылы төнө, унын төҫөнә талғынлыҡ һалған күҙ тептәре эскә батҡандар, уларҙы йоҡа ғына күләгәләр баҫҡан.

Оҙатыу ғөреф-ғәҙәттәре бөткәс тә, баяр, ун, ҡулы менән һелтәп, китеүселәргә китергә ишара яһаны. Вася дилбегәне ҡуҙғата биреп артҡараҡ ҡайҡайғас та, Маруся, башҡаларға белдермәй, уға баш эйҙе лә, хәҙер тәгәрәп тешөргә торған йәш бөрсөктәрен кеше күрмәһен тип, алъяпҡыс осо менән ауыҙын баҫып, кухня соланына инеп китте. Был хәлдәрҙең бөтәһен абайлап торған Айбулатҡа Вася менән Маруся бөгөн бигерәк тә йәл, бигерәк тә яҡын тойолдолар.

Васянең әсәһе был пар атлы повозка күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалды. Ул иң аҙаҡтан ғына боролоп өйөнә атланы.

## ДЯДЯ ГРИША

### 1

Приказчик, баярҙың тағы ла өйгә ҡайтасағын ишетепме, әллә былай ҙа эше күп булып бушай алмауҙанмы, ике йоманан артыҡ инде, Айбулатҡа иҫәп бирмәй һуҙып тик йөрөтә. Көтөүҙе яланға ҡыуыуҙың срогы әллә ҡасан үткән булһа ла, ул Айбулаттың, һорауҙарын йә ишетмәмеш булып, йә ишетһә лә бик иғтибарһыҙ ғына:

— Иә, ҡайҙа ашығаһың, минең ваҡыт юҡ әле, — тип ситкә ҡарап серт төкөрә лә үҙ юлына китә бирә.

Айбулат бөгөн дә, приказчиктең конторағa килеүен көтөп, өйҙөң аҫҡы ҡатындағы һарайҙар яғына табан ҡараған бәләкәй ишек тирәһендә һыҙғырына-һыҙғырына уралды. Ул арала Кузьмин баяр, баҫҡыстан тамаҡ ҡырып төшөп, ҡапҡа ҡаршыһындағы оло таш лавка яғына ҡарай үтте. Айбулат был кешене бөтә йәй буйына ни бары өсөнсө тапҡыр күрә ине. Уны һәр йыл яҙҙан алып көҙгә тиклем бөтә семьяһы менән әллә ҡайҙа диңгеҙ буйындағы Ҡырым ҡалаларында ятып үткәрә икән, тип һөйләйҙәр. Вася Айбулатҡа улар тураһында күп хикәйәләр һөйләгәне бар. Ләкин Айбулат был хикәйәләрҙән ҡаланы күҙ алдына асыҡ килтерә алһа ла, диңгеҙ тигән сикһеҙ киң, төпһөҙ тәрән, сиктәре менән офоҡҡа олғашҡан ғәжәп өлкән һыу байлығын ул бер нисек тә күҙ алдына тулы итеп килтерә алмай.

Айбулат әле үҙе әйләнеп йөрөгән йорттоң өҫкө ҡатының зсен дә күргәне юҡ. Шуға күрә, уның бөтә стеналары алтын менән биҙәкләнгәндер инде, тип уйлай. Ошонда кесе йәштән үҫеп тә, был өйҙөн. коридорынан ары үтә алмаған Вася лә был турала артыҡ тулы мәғлүмәт бирә алмай ине.

Кузьмин баяр үҙе шикелле үк йыуан управляющийе менән әллә ниҙәр тураһында һөйләшә-һөйләшә кире ҡайтып китте. Айбулат, үҙенең өҫтөнә бер генә тапҡыр ҙа күҙ һалмағаң был кешенең ҡапыл һүҙ ҡушып ҡуйыуынан тартынып, стенаға табанырaҡ һыйынып баҫты. Ләкин баяр уның эргәһенән йәнһеҙ бер бағана янынан үткән һымаҡ башын юғары сейеп эре, иғтибарһыҙ үтте. Улар уҙып киткәс тә, Айбулат контора ишегенән инеп китте. Оҙаҡ та үтмәй оҙон һары сәстәрен ҡара картузының уң яғынан туҙҙырып сығарып үргә ҡаратып тарап



ҡуйған приказчик, ялтыр итектәре менән көйәҙләнеп баҫып килеп, еҫтәл артындағы ултырғысҡа ултырҙы. Ул да, хужаһы һымаҡ, Айбулатҡа күҙ ҙә һалманы. Айбулат ишек төбөндә торған көйө приказчиктең һүҙ ҡушыуын көттө. Ә приказчик үҙенең еҫтәл тартмаһынан сығарған эре-эре кенәгәләрен ҡутарып ниҙер 'эҙләнде. Шунан һуң улар араһынан ниндәйҙер бер кәрәкле урынын табып алып, йыуан ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙғас ҡына, ултырғысын өҫтәлгә яҡынырaҡ тартып, уңайланып ултырып, кәүҙәһе менән бетөнләй тигәндәй еҫтәлгә ятып башын ҡыйшайтты ла ваҡ ҡына тигеҙ почерк менән яҙа башланы.

Айбулаттың уның үҙенә күҙ һалыуын көтөүе бушҡа китте. Шунан ул үҙе өҫтәлгә яҡын килеп:

— Павел Павлович, давай расчет, — тине.

Ләкин Павел үҙенең башланған яҙыуы яңы юлға барып етмәйенсә уға яуап бирмәне. Яңы юлға туҡтап, нөктә ҡуйып, кеҫәһенән папирос сығарып тоҡандырып, бер-ике һыҙат төтөндө һауаға өргәс кенә, Айбулатҡа күҙен төшөрөп, эре ҡиәфәт менән танау эсенән, тауышын һуҙып:

— Расчет, тиһеңме? — тине.

— Эйе, расчет.

— Так. Ә һинә күпме аҡса кәрәк һуң? Өс йөҙ һум е-терме?

Айбулат, бынан приказчиктен, мыҫҡыл итеп көләме, әллә ысынлап та уны үҙенә тин. кеше һанап шаяртамы икәнен айырып аңлай алмайынса, бер аҙ ҡарап торҙо ла:

— Незнай, — тине.

— Незнай, тиһең, ә үҙең расчет һораған булаһың, ах һин, дурак башкир. — Ул шулай һөйләнә-һөйләнә папиросын тартып бөтөрөп, ергә төкерҙе. Тағы ла, Айбулат сығып киткән һымаҡ итеп, үҙ эшенә кереште.

Ул арала баяғы йыуан управляющий бик ашығып, пыхылдап конторға килеп инде. Айбулат тағы ла ишек төбөнә сигенде.

Приказчик управляющийҙе күреү менән урынынан һикереп тороп, фуражкаһын һалып баш эйҙе. Ләкин управляющийҙең унда эше булманы. Өҫтәл башындағы ултырғысҡа дөп итеп барып ултырҙы ла, аҫтыртын тауыш менән ашыға-ашыға, әллә ниндәй делоларҙы күрһәтмәҫкә кәрәк икәнен әйтте.

Приказчик өтәләнеп шкафты асты, күҙ асып йомғансы ниндәйҙер бер кенәгәне тартып сығарып өҫтәлгә һал-

ды ла, сөйҙәге счетты алып, бармаҡтарын төймәләр өҫтөндә күҙ эйәрмәҫлек ашығыс уйнатып алды. Шунан управляющийға эйелеп, кеселекле тауыш менән ашыға-ашыға:

— Иөҙ мең бот бойҙай, илле мең бот арыш, Петр Петрович, ә тегеләре бында кертелмәгән, — тине.

Петр Петрович бер нисә минутка ғына ниҙер уйланы ла:

— Аһа. Ярай улай булһа, әйҙә, кенәгәләрҙе ал, тегендә барайыҡ, — тине.

Улар, ҡабаланышып, аллы-артлы сығып киттеләр.

Айбулат та, улар артынан сығып, ишек төбөндәге эскәмйәгә ултырҙы.

Тағы ла ике көн буйы Айбулат эш ялын ала алманы. Приказчиктәр, лавкасылар, хатта хужа өйҙә юҡ саҡта бөтәһен үҙ ҡулында ҡалтыратып торған управляющий ҙа, был икекен эсендә ҡара тир эсендә югерештеләр. Баярға әллә ниҙәр әҙерләп бирҙеләр, әллә ҡайҙа барып ҡайттылар. Әллә ҡайһылары тен йоҡламай ҡайғырҙы, ә ҡайһы берәүҙәре ҡыуанып йылмайҙылар.

Был ҡайнаш, буталыш өсөнсө көн тигәндә, баярҙың тағы ла ҡалаға китеүе менән баҫылды.

Приказчик, тағы ла башын ҡыйшайтып, телен тешләп эшенә тотондо. Айбулат бегөн, уның өндәшкәнен көтөп тормайынса, уның янына яҡын килеп баҫты ла, Павел Павлович, тип һүҙ башланы.

Приказчик бөгөн уны, күпме аҡса кәрәк тип, шаяртманы. Ул өндәшмәй-нитмәй бер ҡалын кенәгәнең уртаһынан асып, үрле-түбәнле ҡараны. Кенәгәне Айбулат яғына бороп:

— Бына бынауында ҡулыңды ҡуй, — тип уң яҡ биттең түбәнерәк бер һыҙығының өҫтөнә төрттө.

Айбулат үҙе эшкә ялланғанда һейләшелгән һан — 70 тигән цифрҙы күрҙе лә, үҙенең ғәҙәте буйынса, башҡортса ҡул ҡуя башланы.

Приказчик ҡапыл ҡысҡырып уны туҡтатты:

— Ай, ай, ниңә һин, дурак, үҙеңсә яҙаһың, давай русса яҙ! — тине.

Айбулат хәҙер инде үҙенең русса яҡшы ғына укыйяҙа белгәнен хәтерләп алды ла ни эшләп әле русса ҡул ҡуйырға уйламағанына үҙе лә аптыраны. Тағы шунда уҡ бының өйрәнгән ғәҙәт буйынса килеп сыҡканын уйланы. Был турала ул приказчикка лә шулай тип һөйләп



бирер ҙә, яңынан һәйбәтләп русса Айдаров тип ҡул ҡуйыр ине. Был Айбулаттын, үҙе өсөн дә бер ғорурлыҡ, шатлыҡ булыр ине. Был турала әллә ул Васягә лә хат яҙыш ебәрер ине. Ләкин приказчиктен. былай ҡапыл аҡырып һүгенеүе Айбулатты бик ныҡ ғәрләндерҙе. Ул шуға күрә асыулы тауыш менән:

— Белмәйем, — тине.

— Белмәгәс, яҙма. Бына ал. — Ул иҫәплəп 56 һум 30 тин аҡса бирҙе.

Айбулат аптырап китте:

— Ниңә, Павел Павлович, 70 һум кәрәк бит, — тине.

Приказчик күҙҙәрен алартты:

— Ә һин беҙҙә ашаның!

— Ашанышщ? Ә договор буйынса...

— Ашағанһыщ икән, лыҡылдама. Бар, дурак, — тине лә приказчик үҙ эшенә кереште.

Айбулаттыщ тәү һөйләшеүе буйынса ашау байҙан булырға тейеш ине. Көтөүҙе лә октябрҙең ун бишенә тиклем кетергә һөйләшелгәйне. Ул уны ноябрь башына тиклем кеттө. Быны иғтибарға алып еҫтәп хаҡ биреү урынына, Айбулаттын. эш хаҡын ашаған өсөн тип киҫеп алып ҡалдылар. Айбулат приказчикте ни тип әрләргә лә белмәне. Яғаһынан тартып һелкеп тартышҡыһы килде, ләкин ул ваҡытта был бәндә тағы ла бер этлек уйлап табыр ҙа ҡалған аксаны тартып алып ҡуйыр, тип өндәшмәне. Эсенән асыуы ҡайнап, ҡара көйөп, Айбулат контораһынан сыҡты.

2

Айбулат ҡайтып ингәндә, Даша менән Маруся урындыҡ ситендә, ящик өҫтөндәге лампа тирәһендә, энә, еп менән ниҙер тегеп булашалар ине. Улар Айбулатты бик йылы ҡаршы алдылар.

Тетя Даша:

— Ана, беҙҙен Булатик тә ҡайтып етте, — тине лә ҡулындағы энә менән ебен Марусягә бирҙе: — Мәле, һабаҡлап бир, кис булһа, бер нәмә лә күрмәйем. — Шунан ул Айбулатҡа боролдо:

— Бына һинен. ваҡ-төйәктәренде юлға юнәтеп ултырабыҙ. Хәҙер күлдәгенде ямайым да, кискә тамаҡланып алырбыҙ.

Маруся Вася киткәне бирле ныҡ бойоҡто. Айбулаттың ҡайтырға әҙерләнеүен күргәс, ул тағы ла ныҒыраҡ

бошондо. Айбулат унын аяҙ күк йөҙө һымаҡ асыҡ зәңгәр, һәр ваҡытта көләс күҙҙәренең уйсанланыуын күреп йәлләп китте. Ауылға алып ҡайтырға әҙерләнгән күстәнәстәренән тетя Дашаға бер яулыҡ бирҙе лә тағы бер йәшел еҫле- һабынды Марусягә һуҙҙы. Маруся быға ҡыуанып, оялып ҡыҙарҙы ла Айбулаттың муйынынан дыҫтарса ҡосаҡлап ҡыҫты:

— Рәхмәт, Булатик, мин был һабын менән Вася ҡайтҡас ҡына йыуынырмын инде!

Уларҙың был ҡыланыштарын ҡарап торған тетя Даша ҡыуанысլы йылмая, үҙенә бүләк итеп бирелгән күк сыбар яулыҡты алдына һалып һыйпап, Айбулатҡа рәхмәт әйтә.

Кемдер ишек ҡаҡты.

Тетя Даша Айбулатҡа:

— Бар, ас әле, балаҡайым. Егеттәр тирмәндән ҡайтҡандарҙыр, — тине һәм шул ыҙғайҙан ул Марусягә лә йомош ҡушты: — Ә һин, Марусенька, сәй әҙерләй башла, мин дә хәҙер бушайым, — тип лампа тирәһендәге нәмәләрҙе йыйыштыра башланы.

Айбулат шәп кенә баҫып элмәкте ысҡындырҙы ла, ҡаты ябылған лшекте ҡуш ҡуллап этеп асайым тигәнсе, ишекте ҡапыл асып, Айбулатҡа бөтөнләй ят бер кеше килеп инде.

Ул урта буйлы, ҡуңыр мыйыҡлы ине. Башында ҡуңыр кепка, өҫтөндә ҡала формаһына тегелгән ҡуңыр пальто, аяғында итек. Айбулат был ят кешегә һораулы ҡараш менән артҡараҡ сигенеп юл биргәнсе, ул, ҡулындағы төйөнсөгөн һелтәй биреп, бик көр һәм яғымлы тауыш менән:

— Х&йерле кис!—• тип ҡыекырып сәләмләне.

Был тауышты ишетеү менән тетя Даша, йәш ҡыҙҙар һымаҡ етеҙ ҡуҙғалып, был кешегә ҡаршы ташланды:

— Атаҡайым, минең ҡиммәтле энем, һаумы, һаумы, минең ҡиммәтле энекәйем! — Ул, шатлығынан тыны ҡурылып, ҡунаҡты ҡосаҡлап күреште. Ҡунаҡ та тетя Дашаны ҡосаҡлап алды.

— һаумы, һаумы, минең ҡиммәтле апайым, — тине ҡунаҡ. Ул бик алсаҡ йөҙлө ине.

Маруся иҙән уртаһына баҫҡан көйө шатлыҡлы ҡыҙарған йөҙө, көләс күҙҙәре менән уларға ҡарап тора. Ул арала ни булғанын да аңлап өлгөрмәгән Айбулат, ҡунаҡтың: «һаумы, Марусенька!» — тип ҡул биргәнен күҙәткәнсе, ҡунаҡ Айбулатҡа ла ҡулын һуҙҙы. Бик яҡын таныш ҡешеһенә ҡараған кеүек ҡыуанысլы йылмайып, Айбулаттын, ҡулын ныҡ итеп ҡыҫып күреште һәм үҙен:



— Григорий Волгин, — тип таныштырҙы.

Айбулат, бер һүҙ әйтергә лә көсө ҡалмаған һымаҡ телдән яҙып, күҙҙәрен ҙур асҡан көйө өҫ-башын ҫисеп булашҡан Волгингә ҡарап ҡатты. Унын арҡа буйы тараҡандар югергәндәге һымаҡ зымбырланы. Шунан ул, теле яңы асылған бала һымаҡ:

— Дядя Гриша... — тип һорау ҡатыш хөрмәт менән һуҙып өндәшеп ҡуйҙы.

Быны ишетеп ҡалған ҡунаҡ Айбулатҡа тиҙ үк боролдо ла, баяғыса уҡ асыҡ йөҙ менән:

— Эйе, мин дядя Гриша, ә һинең исемен, кем һуң? Күрешкәндә әйтеп күрешмәнек бит әле, — тине.

— Айбулат.

— Айбулат? Тимәк, һин мосолман улы?

Айбулат, уйлап та тормайынса, йәһәт кенә: *

— Юҡ, дядя Гриша, мин башҡорт улы булам, — тине.

Был ябай һәм асылында дерөҫ булған теҙәтмә Григорийгә бик ҡыҙыҡ тойолдо һәм бик оҡшаны. Ул үҙенең киң күкрәк тауышы менән бер рәхәтләнеп көлдө лә, өҫтәл янындағы эскәмйәгә ултыра-ултыра:

— Ну, ну, братик, ни нәмә дерөҫ, ул дөрөҫ инде, әйҙә, ултыр минен. яныма, башҡорт улы! — тине.

ине. Тетя Даша әле һаман тынысланa алмай болоҡһой

— Бына бит, нисә йылға бер күрештек, — тине ул.

Улар дүртәүләшеп Маруся әҙерләгән сәй янына йыйылдылар.

һаулашыу, һорашыу, хәбәрҙәр, барыһы бер юлы йыйылып килеп, быуаға йыйылған ташҡын боҙҙары һымаҡ, юл алып китә алмай эркелделәр. Ул арала тетя Даша тынысланды.

— Беҙ ни әкренләп ҡыбырҙаған булабыҙ. Гришенька, һин һаман шул эшендәме? Вася яҙ ҡайтҡан саҡта, һине, эшһеҙ ҡалды, тигәйне. Ул нисек инде хәҙер?

—• һаман шулай килә әле ул эшһеҙлек. Бына күптән түгел хужалар үҙҙәре эштән ҡыуған кешеләрҙе яңынан эшкә ала башланылар. Ләкин мин эшкә керә торманым, ошо яҡҡа ҡайтып әйләнгем килде.

— Ярай, бик яҡшы булды. һине бик һағынғайным. һуң балалар ни хәлдә? Катя һаман шул фабрикаламы?

Дядя Гриша стакандағы сәйен һемерҙе лә апаһынынң һорауҙарына яуап бирҙе.

— Балалар сирләй-сирләй үҫәләр. Катя фабрикала эшләй. Балалар янында Юлинька тора. Уның да һине бик күргеһе килә, һағына. Мине лә алып ҡайт, тип һораны ла, өйҙә кеше кәрәк.

— Бына Вася барғас, ҡайтарһаң ҡайтара алырһың.

— Хәҙер булмай, апай, яҙ булғас, бәлки, ҡарарбыҙ. Вася үҙ эшенән дә бушамай ул.

— Гришенка, һин Марусяне бирҙән үк танының бит әле. Ә бына был егет беҙҙең Васяның дуҫы инде, — тип өҫтәне тетя Даша.

— Хәҙер мин уны ла беләм инде, таныштыҡ, — тип дядя Гриша Айбулат яғына көлөп ҡараны.

Уларҙың, ошолай күңелле генә теүләшкән бәләкәй семья түңәрәге төн уртаһы самаһында инде өлкән өйҙө тултырған егермеләп кешелек түңәрәккә әйләнеп ҙурайғайны.

Һәр ваҡыттағы ғәҙәтенсә, ҡажҡылдап юткереп, дворник Андрей килеп инде. Башта ул, ялбыр аҡ һаҡалын, тәмәкегә һарғайған оҙон аҡ мыйыҡтарын йыбырлатып, аптыранҡыраған иғтибар менән текләне. Шунан өнө ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— О Гриша, здравствуй! — тип ҡысҡырҙы, тиҙ генә килеп, ҡул биреп күреште лә: — һаумы, Гриша! Ҡайҙан былай һине ел ташланы? — тип һораша-һораша Григорийҙең ҡулын һелкә-һелкә ебәрмәй торҙо.

Дворник артынса уҡ килеп ингән бүтән ялсылар ҙа бер-бер артлы Григорий янына эркелделәр. Уларҙың барыһы ла уға ҡул биреп күрештеләр, барыһы ла шатландылар, барыһы ла бер юлы тиерлек һүҙ башланылар.

— Ниңә бик күптән күренмәйһен, Гриша?

— Ә ниңә үткән ҡыш килеп етмәй, кире киттең?

— Ә беҙ һине өс көн буйы көттөк, Григорий Иванович.

— Минең улымды әйтәһеңме, Гриша? Ул ни былтыр действительныйҙан уҡ ҡайтмай эшкә ҡалғайны, заводта сокращениегә эләкте. Ә хәҙер ҡалала төрлә эштә йөрөгән була. Кем белә инде, хат яҙмай. Зимагур булып ҡалды инде.

— Минең ни, шул инде бына. Ошонда йөрөйем. Ҡарсығым үлеп ҡалды. Мал бөттө, ер юҡ...



— Беҙҙең хәлдәр һинә билдәле инде. Ә һун, һеҙҙә эштәр нисек бара?

Айбулат быларҙың бөтәһенә хайран ҡалып ҡарап ултыра. Бына ул алты-ете ай ошо кешеләр менән бергә тигәндәй эшләп, бер ҡыйыҡ аҫтында көн итте. Ул, берәмләп һорашҡанда ла, был үҙенең, яҡындары булып киткән кешеләрҙең барыһын да яҡшы беләм тип һис шикләнмәй әйтә алыр ине. Ә хәҙер, уларҙың һәр береһенең дядя Гришаға бар булған хәсрәттәрен, эс серҙәрен асып, күңелдән һөйләп ултырғандарын күргәс, бына ғәжәп, был халыҡ Айбулатҡа өр-яңы һәм таныш булмаған кешеләр булып сыҡтылар.

Айбулат был турала асыҡ итеп әйтә алмаһа ла, үҙе бынын. шулай икәнен асыҡ һиҙә ине.

Ә дядя Гриша әллә ҡайҙа ғына барып байтаҡ йөрөгән дә үҙенең ошо өлкән семьяһын һағынып ҡайтҡан, тиерһең. Ул, әйтерһең дә, ошолар өсөн ҙур ярҙамдар бирерлек хазина тейәп ҡайтҡан да, шуға күрә был кешеләр уға шулай ынтылып һырныҡғалар.

Гриша уларҙыа һәр береһен ихлас тыңлай, йылы күңелдән һораша, кәңәштәр бирә, ярҙамдар вәғәҙә итә.

Бер аҙҙан тирмәнгә барған ялсылар ҙа, улар менән барған Истебай ҙа ҡайтып килделәр.

Тирмәндән ҡайтыусылар ҡунаҡ менән ҡыуанып күрештеләр.

Ҡолаҡлы бүркен дә, ҡыҙыл сапанын да сисмәй, был кешеләргә ҡарап торған Истебай иплəп кенә Айбулат янына килде.

— Айбулат ағам, был кем була ти? — тип шыбырҙаны.

Айбулат, бик мәғәнәле итеп:

— Дядя Гриша ошо була инде, — тип яуапланы.

— Ә... — тип һуҙҙы Истебай. Үҙенең ҡыҫыҡ күҙҙәрен ҙур асып ялтыратты, дядя Гришаны өр-яңынан тикшереп ҡарай башланы.

— Беҙҙең эштәр хәҙер бик серьезныйға һәм ҙурға китте, туғандар, — ти ине дядя Гриша.

Башҡалар бөтәһе лә, унын, ауыҙына ҡарап, алыҫ ерҙәрҙә: Петроградта, Кавказда, Ростовта, Киевтә, Одессала — бөтә Россияла булып яткан ғәжәйеп ҡуҙғалыштар тураһында тыңлайҙар. Уларға ошо геүләшеп көрәшкә күтәрелгән ҡалаларҙын, кеслө тауыштары яңғырап ише-

телгән һымаҡ була, уның һайын улар тулҡынланып тыңлайҙар, һорауҙар яуҙыралар.

Григорий Иванович менән булған был беседа төн уртаһы ауғансы ултырып ҡына түгел, шәмде һүндереп, йоҡларға яңынан теҙелешеп ятҡас та бик оҙаҡҡа һуҙылды.

Айбулат күҙе алдында тағы ла йәшен балҡығандай үткер, утлы, уҡлы һүҙҙәр ялтыраны: «Искра», «Ленин», «Партия».

3

Иртә менән дядя Гриша, урындыҡтын. иң түрендәге тәҙрә янында бер буйлы балаҫҡа аяҡтарын һуҙып, әллә ниндәй ҡағыҙҙар, ваҡ ҡына китаптар рәтләп ултыра ине.

Тетя Даша өҫтәлдән сәй урынын йыйыштыра-йыйыштыра Гриша менән һөйләшә:

—• Кисә һине нисек һырып алдылар. Үҙебеҙгә иркенләп һөйләшергә лә ирек бирмәнеләр, шайтандар.

— Ни эшләһендәр инде, бахырҙар, — ти дядя Гриша, үҙе моңһоу уйлана, — һәр ҡайһыһы үҙ хәлен һөйләй. Барыһының да беҙҙең эшселәр хәлен белгеһе килә. Барыһы ла ошо ауыр тормоштан нисек сығыу, ҡасан ҡотолоу өмөтө менән йәшәйҙәр, кетәләр...

-— Шулай инде уныһы. һин бит әле бөгөн үк тағы ауылдарға сығам тиһең түгелме? — Тетя Даша Гришаға һораулы ҡарай.

— Юҡ, апай, бөгөн дә, иртәгә лә китмәм әле. Мөғайын, бөрһегөнгә ҡуҙғалырға тура килер.

— Улай булһа, тағы бер хәл.

Тетя Даша хәҙер инде Айбулатҡа ҡарай борола:

— Булатик, мин кисә һиңә кеҫә тегеп бирәйем тигәйнем дә бушаманым. Ҡана, хәҙер көпө түшеңә булһа ла тегеп бирәйем.

Айбулат көпеһөн тетя Даша янына алып килә:

— Рәхмәт, тетя Даша, үҙем дә тегә беләм, энә генә бир, — ти ул.

— Ничего, үҙем тегеп бирәйем инде, — тетя Даша, бер дүрткел сепрәкте ҡулына алып, кепе түшенен, ҡултыҡҡа табан бер ерен самалай. Үҙе Айбулатка кәңәштәр бирә:

— Байтаҡ ҡына аҡсан, булды. Юғалта күрмә инде.

Айбулат был һүҙ ыңғайына:

— Байтаҡ булыр ине лә, приказчик бик күп кәметеп бирҙе, яуыз, — тине.



— Эй балаҡайым, ул йыртҡыстарҙың ғәҙәттәре мәнге шул инде. Әле ярай яртыһын тотоп алып ҡалмаған. Унда ла улар менән бер ни ҙә эшләй алмаҫ инең.

Уларҙың был һөйләшеүҙәрен иғтибарһыҙ тыңлап ултырған Григорий Иванович ялт әйләнеп Айбулатҡа ҡараны ла бик асыулы төҫ менән күҙҙәрен ялтыратты:

— Кем ул аҡсанды тулыһынса түләмәне? — тип ҡысҡырып һораны.

Айбулат был хәлде көтмәгәйне. Ул бик уңайһыҙланды, сөнки дядя Гриша унын, үҙен ороша һымаҡ тойолдо. Дядя Гриша һаман да күҙен алмайынса:

— Кем? — тине.

Айбулат, тыныс булырға тырышып

— Приказчик, — тине.

— Нимә тип бирмәне?

— Беҙҙә ашаның, ти.

— Ә нисек һәйләшкәйнен?

Ашау байҙан ине.

— Күпме түләп бөтмәне?

Был һорауҙар Айбулатҡа бик уңайһыҙ ҙа, бик яңы ла ине.

— Күп түгел дә ни...

Григорий Иванович ҡағыҙҙарҙы йыйыштырҙы ла, өҫтөнә пальтоһын һалып, сығып китте.

Тетя Даша былар һүҙенә ҡатнашмай тыңланы ла, Гриша сығып киткәс, Айбулатҡа ҡарап, шаянлыҡ ҡатыш ғорур йылмайҙы:

— Ну хәҙер Пашканың кәрәген бирә минең Тришам. Ул беҙҙең Гришанан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа. Бына күрерһен, әле...

Айбулат быға бер аҙ аптыраңҡыраны ла, ҡыҙыҡһынды ла, ләкин быныщ сәбәбен һорашырға елгөрмәне, дядя Гриша ҡайтып та килде,

— Мә, ал, — тине ул, көлеп, Айбулатка ун алты һум етмеш тин аҡсаны тотторҙо. Ул хәҙер бик йомшаҡ һәм күңелле ине. —• Ал, башҡорт улы, — тип шаяртып өҫтәне.

Айбулат әллә нисә төрлө тойғоно бер юлы кисереүҙән болоҡһоп ҡыҙарҙы: кисә генә күрешкән дядя Гриша уға ниндәй изгелек итте, ул ниндәй ҡыйыу кеше. Ә үҙе, Айбулат үҙе, ниңә шул батырлыҡты эшләй алмаған? Приказчик янынан ауыҙын йомоп сыҡкан да киткән. Хәҙер инде, быша, Айбулаттыщ ошо эше өсөн дядя Гриша үҙе борсолоп, мәшәкәтләнеп йөрөргә тейеш. Ә бит Айбулат

унын менән әллә ниндәй ҙур эштәр тураһында һөйлә-шергә, һорашырға йыйына ине. Хәҙер ни...

Айбулат үҙенең ошо кисерешен ослап та бөтә алманы, дядя Гришаға рәхмәт тә әйтерго онотто.

Был ваҡытта инде дядя Гриша менән тетя Даша, иҫ китерлек бер нәмә лә булмаған кеүек, үҙ-ара бик ябай нәмә тураһында һейләшәләр, көләшәләр ине.

— Гриша, һин нисек тиҙ үк еңеп алдың әле был аҡ-саны?

— Үҙең беләһең инде, апай, хәҡиҡәт. Ундай трустарҙың ҡайһы берәүҙәрен хәҡиҡәт менән сикәләһәң дә, уларға бик йәп төшә ул.

Тетя Даша һаман көлә лә көлә:

— Ул, меҫкен, һинең яҡшылығың тураһында әле лә онотмай, күрәһең.

— Юҡ, ҡайҙа ти ул онотоу. «Эттең ҡойроғон кем ҡырҡһа, шул яҡшы», — тиҙәр бит. — Дядя Гриша күҙҙә-ренән йәш сыҡҡансы хахылдап көлә, ҡулдары менән күҙҙәрен һыпыра ла: — Әллә нисә хужаға ярайым тип, ул Пашканың ҡойроҡ ҡынаһы ла сонтайып бөткәндер инде!

— Әйтмә инде.

Улар тағы ла көлөшәләр.

4

Айбулат уларҙын был әңгәмәһен яратып тыңланы, ләкин тәбөнә төшөнмәне. Сөнки был бегөнгө күңелле әң-гәмәнең артында бик күп кешеләрҙең яҙмышын хәл иткес ҡатмарлы тарихи ваҡиғалар ята ине. Ә тормош шундай ҡатмарлы нәмә, ул ҡайһы бер бик ҡуйы трагик ваҡиғалар араһында үҙенең бәләкәй генә комедик картиналарын да күрһәтеп үтеп китә. Былдай хәлдәр тураһында тәүҙә йәштәр аңлап етмәй, ә ҡарттарҙың үҙ баштарынан кискән була. Әле лә шуның кеүек хәлдәрҙең береһе ине.

...Бынан бер нисә йылдар элек, бер төндә, ошо Кузьмин утарының әйләнәһен түңәрәтеп, әллә нисә урындан ух ялҡындары күтәрелде. Ялҡындар ҡарағусҡыл ҡыҙыл, төтөндәре ҡором кеүек ҡара ине. Улар төн ҡараһын тағы ла ҡуйыртҡан һымаҡ булалар. Геүләгән ут, шыйлаған ел тауыштары, үс алыусы крәҫтиәндәрҙең. еңеү гимне һымаҡ булып, гёрләп күккә аша. Ошо ғәрәсәт араһынан,



саука аҫтынан ҡасып килеп сыҡҡан ҡуян һымаҡ, бер кеше оло юлға килеп тештө. Ул тирә-яғына ҡаранды ла алға китергә ынтылды. Ләкин ошо ваҡытта юлдың утарҙан оло юлға ҡайырылған сатлығында, ут яҡтыһында .әңгәһәрҙәй булып күренгән бер кәүҙә ҡалҡты ла югереп барған кешенең юлын быуҙы. Быларҙын. ҡурҡыныс кәүҙәлеһе — Паша — приказчик, мыҡты кәүҙәлеһе — Григорий ине.

Улар бик ҡыҫҡа һейләштеләр:

— Ҡайҙа бараһың? — тине Григорий, Пашаға уҫал ҡараш ташлап.

— Управляющийға барам, тиҙерәк волоскә ат саптырырға... ~~ .

Григорий көслө ҡулы менән Пашаның тарамыш елкәһенән маткып тотто ла уны ергә сүктерҙе.

— Беҙҙе тотторорғамы? — тине.

Был хәлдән Паша теше тешкә йоҡмай ҡалтыранды.

— Ни эшләрбеҙ һун, янабыҙ бит? — тине ул.

— Ни эшләргә? Беҙгә ярҙам итергә булмай икән, өндәшмә, молчать!

— Йә, ярар, Григорий Иванович, өндәшмәм.

— Тынынды сығарма. Тыньщды сығарһан, — ҡабат килеп минен, ҡулға эләкмә, эләкһәң — үҙендән күр1 Аңланыңмы?

— Аңланым, Григорий Иванович, һис бер ваҡытта һиңә ҡаршы килмәм.

— Миңә генә түгел, беҙҙен, бөтә халыҡҡа.

— Эйе, эйе, бөтә халыҡҡа, Григо...

Григорий уны ҡулынан һелкетеп ысҡындырҙы.

Паша, артына ҡарай-ҡарай, кире югерҙе. Ул ваҡытта ул Григорийгә йәл дә, көлкө лә ине. Шунан бирле күп кешеләр унын ҡурҡаҡлығынан көләләр ҙә, ерәнәләр ҙә.

Айбулат, үҙенең бөтә нәмәләрен юлға әҙерләп бөтөп, бер урынға ситкәрәк ейҙе лә ипләп кенә дядя Гриша янына килде. Дядя Гриша үҙенең, әллә ниндәй ҡағыҙҙарын, ваҡ ҡына китаптарын бәйләп йыйыштырып бөттө лә Айбулатҡа, «тағы һиңә нимә кәрәк?» тигәндәй, һораулы ҡараш ташланы.

Айбулат, үҙенең болоҡһоуын баҫырға тырышып, кисәнән бирле ҡыймай йөрөгән һорауын бирҙе:

— Дядя Гриша, һин беҙгә китаптар алып ҡайттыңмы һуң? — Унын тауышы ҡаушаулы ине.

Дядя Гриша ла ҡаушаған кеше шикелле аптырап китте. Уның күҙҙәре нурланып янды. Айбулатты яңы күргән кеүек, баштан-аяҡ ҡараны ла:

— Ә ниндәй китаптар һун? — тип һораны.

— Төрлө китаптар. Газеталар ҙа... «Искра» тигән газета, — тине.

— Ҡара әле һин, Айбулат, башҡорт улы, һиңә кем, ҡасан был турала һөйләне?

— Вася һөйләне. Ул был турала бик күп белә.

Дядя Гриша ҡапыл аңланы:

— Ах, ана нисек ул. Аңлашыла, аңлашыла. — Ул тағы ла Айбулатҡа ҡарап торҙо. Был юлы аптырап түгел, яҡын күреп ҡараны.

— Әгәр мин һиңә «Искра» газетаһын алып ҡайтһам, һин уны ни эшләтер инең?

— Бәй, укыр инем. Миңә бөтөнләй бирһәң, уны мин үҙебеҙҙең ауылға алып ҡайтып, ағай-энеләремә, дуҫ-иштәремә укып күрһәтер һәм аңлатыр инем.

— Дөрөҫ уйлайһың, туғанҡай, бик дөрөҫ. Ә һуң һинең шулай һөйләп өйрәткөнеңде ишетһәләр, ни эшләтәсәктәрен беләһеңме?

— Беләм.

— Ҡурҡмайһын. дамы?

Был һорауға Айбулат хатта ғәрләнгәндәй итеп яуапланы.

— Ни эшләп ҡурҡайым инде, дядя Гриша. Айыуҙан ҡурҡһан, урманға барма, тигән шикелле була бит ул.

Волгинде ниндәйҙер ғорурлы шатлыҡ ҡапланы.

— Молодец, Айбулат, — тине лә һүҙен бүлеп уйға ҡалды.

Хәҙер инде дядя Гриша Айбулатҡа, бая ғына үҙе ярҙам күрһәткән йәш кешегә, бала кешегә ҡараған кеүек түгел, ә үҙенә тиң өлкән кешегә, хатта уларҙың алып барған бик ҙур эштәрендәге ярҙам итеүсегә ҡараған кеүек ҡарай, шул кимәлдә һөйләшә. Шунлыҡтан Айбулат та үҙенең баяғы ҡыйыуһыҙлығынан, ҡйушауҙарынан бөтөнләй ҡотолдо. Дядя Гришаны тыщлаған һайын ул бер ҙур яңы ғилем биреүсе китап укыған тәьҫирҙе ала, быға тиклем Вася һөйләп тә аңлатып бирә белмәгән күп мәсьәләләрҙе һорашып төшөнә ине.

Аҙаҡ дядя Гриша, Айбулаттыщ һорауы булған «Искра» газетаһына туҡтап, ул турала күп аңлатты. Тик



үҙенен. янында бер нисә генә номер булып, уны ҡа*лдыра алмауына үкенеп, ғәфү үтенде. Киләсәктә бирергә вәғәҙә бирҙе. Шунан ул Айбулатҡа «Искра»лағы бик күп мәғәнәләрҙе эсенә алған бер прокламация бүләк итте.

## 5

Айбулат бөгөн дә юлға сыҡманы. Иртәгеһен Волгин китер алдынан ғына ҡуҙғалды. Ул дядя Гриша менән үткәргән был көндәрҙән, сикһеҙ йыһан гиҙгән, бик.бай эстәлекле бик алыҫ сәйәхәттәрҙә булған кеүек, тәрән тәьҫир алды.

Тетя Даша менән Маруся уны Васяне оҙатҡандағы кеүек ҡайғырышып оҙаттылар.

Дядя Гриша менән һаулашҡан саҡта улар, үҙ-ара бәйләнеште һис тә өҙмәҫкә вәғәҙәләр бирешеп, дуҫлашып айырылыштылар.

Шулай итеп, Айбулат, иртә яҙ башынын, ала ҡарында шыя ярып килгән оло юл буйлап, көҙгө ҡырпаҡ ҡарҙын. йоҡа ғына йомшаҡ көртөн ярып, өйөнә юнәлде.

Айҙаҡайға яҡынлаған һайын унын ҡыуанысы арта бара. Уйлаған уйҙары ла, ҡорған пландары ла тиҙ генә бойомға ашырҙар кеүек тойола башланы уға. Ғүмер эсендә беренсе тапҡыр ҡулына ингән бик ҙур аҡса — 70 һум унын бөтә кәрәк-ярағына ла, мәһәргә лә, туйға ла етер шикелле.

Ә унан һуң, Гөлйөҙөм!.. Уның менән бергә ҡоролған киләсәк... шикһеҙ йәмле буласаҡ... Киләсәк.

Был киләсәктең мәғәнәһе хәҙер Айбулаттын, быға тиклем күҙ алдына килтергән бөтә мәғәнәләренән дә юғары, бөтәһенән дә киң һәм яҡты ине. Был киләсәктә бөтә пролетариат өсөн, бөтә иҙелгән кешеләр өсөн ҙур көрәштәр менән яулап алынырға тейеш булған ҙур бәхет бар. Ул бәхеттен. исеме — азатлыҡ. Ул азатлыҡ бөтә бәхетһеҙҙәрҙе йылыта алырлыҡ бик иркен һәм ҡайнар тынлы. Ә Айбулат ана шул иректе яулап ала торған бөтә көрәштәрҙә лә батыр егет булып көрәшергә тейеш. Дядя Гриша Айбулатҡа ана шуны өйрәтте. Дядя Гришаға был турала бейөк Ленин ейрәткән.

_ Ошо нурлы өмөт ҡанаттары Айбулаттың аҙымын еңеләйтте, юлын ҡыҫҡарттылар.

# ГӨЛЙӨҘӨМ

## 1

Өс тәҙрәһе һыу буйы урамына ҡараған, ҡыйыҡһы? стена, түбәләре тотош шыма итеп һылап ҡуйылған йыйнаҡ ҡына бер кирбес өй. Үмәр ҡарттың өйө. Ауылдың уртаһында ла түгел, ситенә лә бик сыҡмаған был ҡупшы өй, оло урамдарҙың береһенә лә буйһонмағандай, яр башында Ырғыҙ һыуының шаян тулҡындарына һоҡланып текәлгән өс ҡуҙле бер януар һымаҡ, гел бер төҫ кенә, тыныс ҡына ултыра бирә. Был өйҙөң һул яғындараҡ уға ҡаршы һалынған уртаса ғына кирбес келәт, уға текәлеп, ялғанып киткән ҡура, бәләкәй генә һарай, ялан кәртәләр, бөтәһе бергә бөтөн генә, йыйнаҡ ҡына бер тормошто күрһәтәләр.

Унын, арата ҡапҡаһы иртәнән кискә тиклем, бер асылып, бер ябылып, шығырҙауҙан бушамай. Быйылғы уңышлы йылдың йәшел бесәне, уңған игенден, алтын көлтәләре тейәп ташылған һигеҙ сабаҡлы бейек әрәндәктә, унын өҫтөндә ултырып ҡайтып, «трр!..» тип ҡысҡырғав Үмәр ҡартты, йә таң ҡараңғыһынан «на-на!..» тип ат ҡыуып сығып киткән Гөлйөҙемдө был арата ҡапҡа шығырҙап ҡаршы ала, оҙатып ҡала ине.

Улар аталы-ҡыҙлы бөтә яҙ, йәй, көҙ буйына шулай эшләнеләр.

Үгәй улы Әхмәҙи атаһы менән тыныша алмай башҡа сығып киткәс, Муйылбикә:

— Ҡороғоро бала, ҡарт көнөмдә, бала үҫтерҙем, тип ҡыуанып торғанымда, ҡайһылайтып йорт алдында мәсхәрә итте, — тип иланы. Әхмәҙи булмағас, бөтә хужалыҡ емерелер шикелле булды. Бер бәләкәй ҡыҙ — Гелйөҙөм менән генә ҡайҙа бараһың, тип уйланы ул.

Муйылбикә үгәй ульша, унан да бигерәк кире холоҡло атаһына асыуланды.

— Был тиклем дә бер-берегеҙгә ҡырыҫ булырһығыҙ икән. һинен, ҡомағайлығыщ бөтмәҫ инде. Үлһән, бөтә донъянды ҡәберенә күтәреп китә алмаҫ инен. әле. Исмаһам, шул яңғыҙ улын, Әхмәҙиҙән донъянды тартма тағы. Киленгә һүҙем юҡ, ҡәҙер итеп тора. Ерле юҡ өсөн баланы йорттан ҡыуып сығар, имеш. Әле һине яманатлы итмәҫтәр, һаман да шул мине, үгәй әсә уҫаллығынан тип, ғәйепләрҙәр, — тип ҡартына бик нығышып ҡараны, ләкин Үмәр ғәҙәттәге үҙенең үҙһүҙлелеген ҡуйманы.



— һин, үгәй инә бауырһаҡ тигәндәй, шул Әхмәҙиҙе яҡлама. Иәшем иллегә етеп, улымдан аҡыл алып ултырайыммы? Мин бер терле өйрәтәм, ә ул үҙенсә эш йөрөтөргә тырыша. Кем уға үгеҙ башмаҡты һатырға ҡушҡан? Эҙләүһеҙ-һорауһыҙ итсе Мусаға юҡ хаҡҡа ысҡындырып ҡуйҙы. Өс тапҡыр баҙарға бесәи тейәне. Мив уға, бесән ҡыйбатайһын, түҙергә кәрәк, тип ҡараным,. юҡ, тыңламай, үҙенекен итә. Ҡартайғанда, саҡ донъя төҫө күрә башлағанда, мин шул тыңлауһыҙҙан малды тәләф иттерәйемме ни? Бер аҙ һуған һурпаһы эсһен. Әллә ҡайҙа китмәҫ, ҡайтып килер әле, атай кәрәк булһа,. ҡайтыр.

— Кешенән оят бит, — тип Муйылбикә тағы ла ауыҙ. асҡайны, Үмәр ҡырт киҫте:

— Етәр, тим. Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар, тигәндәр. Астан үлмәбеҙ әле.

Әхмәҙи кире ҡайтманы. Донъя көтөүҙен, күп ауырлығы Гөлйөҙемгә йөкмәлде. Ул ун өс-ун дүрт йәштән* үк йортҡа ярҙам итә башланы. Хәҙер Гөлйөҙемгә ун ете йЭш ине.

Үмәр ҡарт Гөлйөҙөмдө бер арбаға ултыртып, үҙе икенсе арбаға ултырып, иртәнсәк таң ҡараңғыһынан китеп, кис күҙ бәйләнгәс кенә ҡайталар. Улар десятина • ярым игенде Тимерғәле ағайҙар менән ҡул алмашлап урҙылар. Уны яландан көлтәләп ташып, һыртҡы ырҙынға өйҙөләр. Көҙгө көндөң арыу уҡ һалҡын елдәр өргеләй торған миҙгеле етте. Үмәр ҡарт, ай яҡтыһы бар саҡта,. ошо иген әүернәһен бөтә һалып ҡуйырға тырышып, "ҡалған көшөлөн ағас кәрәк менән ашыға-ашыға елгәрергә' кереште. Ул үҙенен, көҙ эшләргә тип уйланған күп ниәттәренец тормошҡа атҡарыла барыуына риза төҫ менә» йөрөй. Арыған сағында ла, башҡа ваҡыттарҙағы һымаҡ,. Гөлйөҙөмгә мыжымай. Уны, ҡыҙ кеше булғаны есен, әҙәмгә һанап кәңәшмәҫкә тейеш булһа ла, үҙалдына уйланған һымаҡ, ҡайһы бер уйҙарын һөйләгеләп ҡуя.

— Бер егерме бото һатылһа, бер ун ботон бесәнгэ* алыштырырға ла тура килер. Бесән таҡы-тоҡораҡ булыр. Ала һыйырҙы ла, танаҡайҙы ла ҡышлатып, киләһе йыл ике быҙаулы һыйыр яһап алырға тура килер.

Унщ өҫтөнә ул Гөлйөҙемдә кейәүгә биреү, туй кәрәк-яраҡтары тураһында ла уйлай. Ләкин ул уны эсенәа генә уйлап бетөрә. Уға ла байтаҡ иген кәрәк. Хәйер, уны-

һы мәһәрҙен нисек булыуына ҡарай инде. Мәһәрҙе күберәк һорарға тура килер, тип ҡарарлай ул.

Бөгөн дә улар көн оҙон икәү ҡайнаштылар. Ай, ҡалтшп, юғары күтәрелде. Гелйөҙөм ҡыҙыу эшләп тирләне дә киске һалҡынға кәзәкейенең элмәктәрен ысҡындырҙы. Атаһы: «һыуыҡ тейер, сисмә», — тиһә лә, башындағы яулығын сисеп арбаға тейәлгән бойҙай өҫтөнә ырғытты. Ул таҙа бойҙайҙын, һуңғы йөгөн өйгә алып ҡайтып китте.

Юлда туры ат башын салыҡлап, һәлпелдәп кенә атланы. Гөлйөҙөм арбаның алғы майһыҙ тәгәрмәсе шығырҙаған тауышты бер аҙ тыңлап барҙы ла саф матур тауышы менән йырлап ебәрҙе:

һандуғастар һыу ташый,
Ҡайҙа икән һыу башы,
һағынып айға ҡарайым,
Айҙың да яңғыҙ башы.

Таш ташланым болаҡҡа,
Ташым китте йыраҡҡа.
Ташламам, тип әйткән инең,'
Ташлап киттең йыраҡҡа.

һыу буйына төшкәндә,
һындырма талдарымды,
Кәкүк кеүек зарланһам да,
Белмәйһең хәлдәремде.

Туры ат ҡапҡаға етеп туҡтағас, ул, һикереп төшеп, жапҡаны асты. Уға әсәһе лә ҡаршы сығып килә ине, улар ягенде икәүләшеп тиҙ генә бушата һалып алдылар.

Гөлйөҙөм, шатланып:

—• Әсәй, ҡара әле, ни тиклем бойҙай булды. Ике бура ла тула яҙҙы бит, — тине.

Муйылбикә ҡыҙынын. шатлығына ҡушылып йылмайҙы ла:

— Эйе, алла бәрәкәтен генә биреп, үҙебеҙгә генә ризыҡка яҙһын инде, балам, — тине. Үҙе шунда уҡ, был игенде ҡайһылайтып ҡына һуҙһаң да, йыл әйләнәһенә, налог, ғөшерҙәре менән булған бөтә сығымдарҙы ҡапларға етмәйәсәген уйлап ҡуйҙы. Тик был турала ул ҡыҙына әйтә торманы.

— Бар, балам, оҙаҡламағыҙ . инде, — тип ҡапканы ябып ҡалды.

Гөлйеҙөм был юлы туры атты юрттырып китте. Атаһы уны:



— Иә, ҡыҙым, бынау һепергән ҡый-ҡыпырҙарынды, көрәк, тырмаларҙы арба төбөнә һал да, әйҙә, ҡайтайытс инде. Бөттөк ҡуй ошо, — тип ҡаршы алды.

Гөлйөҙөм атаһыныщ ырҙын төбөнән һепереп йыйыгт ҡуйған тауыҡ емлеген, тәүҙә көрәк менән, ҡалғанын усы менән һыпырып йыйып, торопшаға урап арбаға һалды ла үҙе лә һикереп менеп ултырҙы. Атаһы уға атты ҡыумаҫка ҡушып, үҙе йәйәүләп ҡайтырға булды. Ырҙыв ҡапҡаһынан сыҡкас та ул, күҙ ҡабаҡтарын тексәйтеп,. был ауыр эштең ысынлап та бөткәненә ышанмаған кеше һымаҡ, үҙе өйгән һалам эҫкерттәренә ҡарап торҙо. Ҡапҡанын. сүс бәйе ныҡмы икән, тип ҡабат-ҡабат тартып ҡараны. Шунан күрше ырҙындарҙағы елгәреп, ташыгт ҡайнашҡан кешеләргә күҙ һала-һала, ҡулдарын артҡа ҡуйыщ, өйгә табан ыңғайланы.

Муйылбикә улар ҡайтыуына сәй әҙерләне, бөгөн генәбешкән майын тәрилкәгә һалып, унын янына яңы ғына усаҡтан сыҡкан сөсө күмәсте ҡулдарын бешерә-бешерә* бүлгеләне лә батмус тирәләй әйләндереп ашъяулыҡка • һалды. Ул, кин ҡыҙыл күлдәгенең итәген бөрмәһенәьГысҡындырып, һыҙғанған еңдәрен тешөрөп йәтешләнде ләирен ҡабаландырҙы.

— Ҡана, тиҙерәк сәйгә ултырығыҙ! — Шунан, башында шыуып киткән яулығы аҫтынан сыҡкан һарғылт ҡуңыр сәстәрен юнәтеп һыйпап, яулыҡ остарын нығытып бәйләне лә «бисмилла» тип сәй яһарға тотондо.

Муйылбикәнен, утыҙ һигеҙ йәше үтеп, ҡатын уртаһына еткәнде күрһәткән йөҙө, күҙ тирәләрендә якшы уҡ беленә башлаған сырыштары, танауы янынан нәҙек кенә булып төшкән юлаҡтар унын йәш сағында матур ғына булған икәнен әйтеп торалар. Ул, Үмәр ҡарттын, тәүгебисәһе үлгәс, тол кешегә бирелгән ҡыҙ булыуына, үҙ ти* ненә барыш ғүмер итә алмауына үкенгән йылдарын инде күптән артта ҡалдырған. Хәҙер ул үҙенә оҡшаған ҡыҙы Гөлйөҙөмдөң кеше күҙенә күренерлек булып үҫеп килеүенә ҡыуанып йәшәй, эсенән генә унын, һылыу булыуына һоҡлана. Ул уға якшы тәрбиә бирергә тырыша. Гөлйөҙөмдөң ап-аҡ йөҙө, ҡыйғас ҡара ҡаштары, нәҙек ҡыртанауы, бит урталарыш нурландырып янып торған ҡыҙылдар, ыҡсым ҡупшы кәүҙәһе үҙ ауылдарындағы егеттәрҙең генә түгел, аша ауыл егеттәренен, дә күҙен төшөргән. Унын өҫтәүенә, ул бик эшлекле һәм егәрле. Әсәнең; шуға күрә лә, кешегә һөйләмәһә лә, үҙ уйынан киләсәк

яусыларҙын. яҡшы, бай урындарҙан булыуына өмөте ҙур «не. «Тик бына исем-атағы сығып ҡына харап булмаһын. Жыҙ бала сәскә менән бер бит ул, хәҙер генә күҙ тейергә, хәҙер генә һулырға әҙер тора...» — тип уйлана.

Муйылбикә сәйҙең ҡуйыһын ғына яһап, самауырҙан >һыу йөрөткәндә, Гөлйөҙөм 'дә шатланып килеп инде.

— Әсәй, өй ҡайһылай йылынып киткән, усаҡка яҡтыңмы әллә?

— Яҡтым шул. Бөгөн ни шул ҡаҙан индереп ултыртып, һылап мәшәҡәтләндем бит әле. Етмәһә, мөрйәне тсором бороп киткән, уны таҙартып ыҙа сиктем. Быйыл шул мейесте боҙоп, адынан сығарырға ҡул теймәне бит. Хәҙер һуң инде.

Үмәр ҡарт, мендәргә яҡшылаңкырап ултырып, аяҡтарын ипләңкерәп бөкләп, ашъяулыҡ янына шыуҙы. Ъисмилла тип икмәк һындырҙы ла, балғалаҡ менән май һоғона-һоғона, сәй эсергә кереште. Башта сәйҙе һүҙһеҙ эстеләр.

Гелйвҙөм ике-өс шәшке сәй эсте лә, әсәһенең ҡолағына ниҙер шыбырҙап әйтеп, өйҙән сығып югерҙе.

Үмәр, сәйгә туйыщҡырап алғас, һейләшкеләй башланы:

— Бик арытты бит әле, бисә. Бөгөн, исмаһам, берәй төрлө һурпа бешерерлек юнең булманымы ни һуң? Тукмас кәрәк ине.

Муйылбикә үҙен аҡлағандай итеп яуапланы:

— Әллә тағы, итсе Муса тана һуйған, имеш, ҡаҙағы •һигеҙ тин менән ит һата, имеш, тип һөйләгәйнеләр. Ебәуергә кеше булманы. Иә үҙен. шунда, төшкә ҡайтканда щсләмәнең. Бала-саға ебәрһәң дә, ит алыуҙыщ рәтен беләләрме ул. Бойорған булһа, иртән үҙең альш ҡайтырһын, -әле бер биш ҡаҙаҡ. Анау өлкән тауыҡты һуяйыҡмы әл-лә, тип уйлағайным да, һаман һалыуҙан туктамай, се•бештәр ваҡ.

Ул бөген аш бешерә алмауына тағы әллә ниндәй дәлилдәр табырға уйлағайны, ләкин Үмәр унын һүҙен лбүлде.

— Хәҙер ни, тауыҡка тейергә яраймы, ем бар инде, ҡышлатырға кәрәк, — тине лә, сынаяғындағы сәйен һе•мереп бөтөп, алдына һалған ҡыҙыл башлы таҫтамал менән тирләгән маңлайын һөртәп, иҙеүен ыскындырҙы. — Төлйөҙөм ҡайҙа китте, ҡунырғамы? — тип өҫтәне.



— Яланбикәһе янына китте. Унының, бегән Хәмдиә еңгәм яңғыҙ, беҙҙе ҡунырға әйтте, тип килгәйне. Ебәрмәҫкә лә булғайным, эштән арығас, аяным, барһын инде,. тинем. Ҡыҙҙарҙың ни уларҙын., ҡаҙ себештәре һымаҡ,, сутылдашып йоҡламаһалар — күңелдәре буламы ни..-

— Ҡунырға йөрөтмәҫкә кәрәк, ҡыҙ еткән инде хәҙер, — тине атаһы. — Әле бына кисә Иыһангир ҡоҙаны күргәйнем. Ул Таллы ауылына барып өйләнгән икән. Бажаһында ҡунаҡта булған. Шул әйтеп торҙо әле, Моратша старшина улына ҡыҙ эҙләй, ти. Йоманан сыҡҡас, мәсет алдында һөйләшеп торғандар. Ул: «Иәйләүҙән яңы күсеп ҡайттым әле», — тип әйтә, ти, килен әйттереү турала беҙҙең ауылға ла килеп сығасаҡ, имеш, ти. «Улым һайлағанын алһын, малды аямам, һеҙҙең ауылда күрке менән дан тоткан бер ҡыҙҙы, беҙҙең ауыл менән һеҙҙец ауыл егеттәре яҙ сәхрәгә саҡырышҡандарында, ульш күҙләп ҡайтҡан», — тип әйтә, ти. «Кем ҡыҙы икән ул, төпсөргә ярамаймы, ҡоҙа кеше?» — тип көлгәйнем, ул: «Ниңә ярамаһын, беҙҙең, кешенән ҡурҡкан эшебеҙ юҡ, һеҙҙең Үмәр аҙаматтыщ ҡыҙы булһа кәрәк», — тип әйтте, ти. Улын да бик маҡтайҙар икән, эсмәй, тартмай, йыуаш, ти. Әллә, әсәһе, ошо урын-яйы тура килһә, баланы урынлаштырып ҡуйғанда ла ярамаҫмы, тим. һин был турала берәй уй йөрөткәнен. бармы?

Был хәбәр Муйылбикәне йәшен кеүек һукты. Ҡарты яйлаи һөйләп бөткәнсе, ул уйын әллә нисәгә бороп өлгөрҙө. Моратша бай исемен ишеткәс тә, ул бисәләр араһындағы: «Моратша бай аҡылға бер төрлө ҡылый күҙле малайына ике йыл буйы ҡыҙ таба алмай икән, үҙ тирәяғындағыларҙың берәүһе лә бирмәй икән, шуға күрә ул хәҙер аша ауылдарға йөрөргә уйлай икән», — тигән хәбәрҙәрҙе хәтерләне. Ул был турала ҡартына тура әйтергә баҙнат итмәй, байтаҡ ендәшмәй ултырҙы. Ҡырҡа әйтһә, унын. киреләнеүен белгәнгә күрә, уратып яуап, бирҙе:

— Әллә тағы, күрмәгән-нитмәгән кешене ҡалайтыгь оҡшатырбыҙ икән һун,? Әллә ҡайҙа алыҫ, ер аяғы ер башы. йөҙөкәс ни әле ауыҙға алырлыҡ еткән ҡыҙ ҙа түгел бит әле. Саҡ ун етеһе тула, — тине.

— Алыҫ, тип ни, ат етмәҫлек ер түгел, ҡуй. Йәшен унын ниңә ҡайғыртаһын, үҙен ун дүрттә килен булып төштөң бит әле. Хәҙерге заманда ҡыҙ баланы аҫырауы бик ҡыйын эш бит. Урын насар түгел. Моратша бай бо-

рон-борондан түрәләр менән эш йөрөтеп килгән тоҡом хешеһе. Үҙе старшина. Шундай кеше беҙҙе һанға алған-да, беҙ ни нәмә менән эреләнә алабыҙ? — тине.

Муйылбикә башҡа өндәшмәне. Сәйен'йыйыштырып, урын һалды ла, йоҡларға яттылар. йоҡо алдышан Үмәр •уҙенең иртә таң менән баҙарға иген тейәп китәсәген һөй-ләне. Бисәһе үҙ ниәте менән яуап бирҙе:

— Барһаң, барып ҡайт шул. Беҙ бында инан-ҡанан ғына өйҙө һылап алырбыҙ. Бөтә кеше тигәндәй өй һылап •бөттө, тик беҙҙекенең генә балсығы ҡойлоғошоп тора. «Өмә итермен дә һылатырмын, — тине.

2

Ҡыҙҙарҙың үҙ хыялдары, үҙ өмөттәре.

Әхмәҙиҙең тар ғына урындығы буйында иң мөйөштә Яланбикә, уның менән ҡатар Гөлйеҙөм, улар янында, •балаһын ҡосаҡлап, Хәмдиә теҙелешеп яталар. Мейес эргәһенә етер-етмәҫ түшәлгән кейеҙҙең сите тәңгәлендә Хәмдиәнең йәш балаһының сәңгелдәге элеүле тора. Ишек төбөнә табан Яланбикәнең ҡустыһы Исмәғил көпөһөн :ябынып йоҡлай. Өйгә саҡ ҡына тиҙәк төтөнө еҫе сыҡҡан. Был еҫ Хәмдиәнең, иртәнсәк кешегә ут алырға югермәҫ •өсен тип, бер киҫәк тиҙәкте ҡуҙға һалып, өҫтөн ныҒытып көл менән күмеп, таба ҡаплап ҡуйған уты киҫәгенән сыҡ-ҡан.

Бүтәндәр күптән йоҡлай. Тик йомалар 'буйы ҡыр эше-;нән бушап күрешә алмаған тиндәш ҡыҙҙарҙың әле бер ҙә йоҡолары килмәй, серҙәре лә бөтөрлек түгел. Улар, •әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырҙашып хәбәр һөйләйҙәр. Башҡалар уянмаһын тип, шым ғына көлөшә-ләр. Уларҙың һүҙҙәрен ишетергә тырышып, ҡолаҡ аҫтына терһәген ҡуйып тыңлаған Хәмдиәнең йоҡлап киткәненә «нде әллә ҡасан.

— Шунан мин ҡабаланып ҡына һыуға төшөп бара инем, кемдер берәү әсе һыҙғырып ебәргәнгә ҡараһам, һыуҙын. арьяғында, Мәкән инәйемдәрҙең тирәгенә ышыҡ-ланып ҡына, теге ҡарап тора. Мин оялышымдан ни эш-ләргә белмәнем. Шунда ла һыу алып, көйәнтәләп ҡайтып .киттем. Баҫҡыстан күтәрелгәндә, быуындарым ҡалты-рай. Ҡәһәрлекте, һис тә күргем килмәй, ә ул әллә нәмә-Ьенә ҡаныҡҡан да ҡалғансы. Исмәғилде күрһә лә: «Ҡәй-неш бул, бәке бирәм», — тип үсектерә, ти, нишана. Айбу-



лат ағайым һымаҡ, буй-һыны булһа икән, исмаһам. Тер-һәктәрен артҡа сығарыш, елкәһен көмһөрәйтеп атлағав була ла, мөхәббәтһеҙ...

Гөлйөҙөм, Айбулат исемен ишетеүгә йөрәге дөпөлдәге һуҡһа ла, әхирәтен юрамал асыуландыра:

— И, һинең Айбулат ағайың да шул инде, ҡашы япы-райып, сәсен ҡырын тарап, ауаға ҡарап йөрөй.

— Ярарсәле. һиңә Айбулат ағайым эләкһә әле, яған,-ды биш тот^р инең дә, бына үҙенде Моратшаның ҡылыйз тинтәгенә биреп ебәрһәләр әле, шунда буҙларһын.1

Гөлйөҙөм быға ла иҫе китмәгәнгә һалыша:

— һе, бирһәләр ни. Исмаһам, бынамын тигән бай старшина килене булып, пар аттарҙа ғына һеҙгә ҡунаҡ-ҡа килермен. Уҡалы елән, оло ҡашмауҙарым, батмустай селтәрҙәрем булыр. һинең Айбулат ағайыңдың ни, бер туҡалыҡ өйө генә. Кәртә-ҡураһы юҡ, соланының түбәһе юҡ. һыйыры быҙауламаған, юрғаһы тыумаған, бойҙайы урмаған, бәхете булмаған, — ти Гелйөҙем, үҙе шаян көлә^

Был юлы Яланбикә ысынлап ныҡ асыулана:

— Ярар, улайтып хурлар булғас, ни нәмәһе «Айбу-лат та Айбулат» тип телендән өҙмәйһең. Киләһе баҙарҙа ҡайтам тип әйтеп ебәргән әле. Үҙенде ошаҡламаһаммы,. .ҡара ла тор.

Гөлйөҙөмгә ошо хәбәр генә кәрәк тә. Ул, бөтә шая-рыуыш онотоп, әхирәтенен, яурынынан ҡосаҡланы.

.— Ысынмы, Яланбикә әхирәт, кем әйтте, ҡасан ҡай-та, ти? — Ул ҡаранғыла Яланбикәнең күҙҙәрен күрергә-тырыша.

Хәҙер инде Яланбикә инәлтә башлай:

—• Кем әйткәндә ни эшен. бар? Әйҙә, ҡылый күҙенден. ҡасан килерен һораш. Айбулат ағайым үҙе һымаҡ бер-ярлыны табыр әле. Уғата тиһә, бигерәк тә эреләнеп ки-тәһең. Ул ҡайтҡас, барыбер әйтәм мин уға: «Иөҙәкәи һине мыҫҡыл итә», — тим.

Гөлйеҙем был юлы урынынан тора.

— Эй инде, ошо Яланбикә булһа, уйнағанды күтәр-мәҫ. Бигерәк тә ел теймәҫ ерәнсәһең, ҡыйтыҡ.

Яланбикә Гөлйөҙөмдө ҡыуаныслы үсекләп көлә. Уныг тартып янына ятҡыра:

— Ә, шулаймы ни! Бына икенсе юлы ауыҙыңды йы-йып һөйлә. Атайым Яйыҡҡа баҙарға барғанда юлда күр-гән. Көтөүен әйҙәп, утарға инеп бара ине, ти. «Ола-тай!» — тип ҡысҡырғанға әйләнеп ҡараһам, Айбулат

еткән, ҙурайып, матурайып киткән, ти. «Ике генә йома срогым ҡалды, шунан ҡайтам», — тип әйтә, ти. «Ҡыҙ эҙләй торайыммы?» — тип әйткәс: «Эҙләй торғаны юҡ инде, олатай, Үмәр ҡорҙашынды күндерә тор», — тип әйтте, ти.

Шатлыҡтан Гөлйөҙөмдөң тыны ҡурылды.

— Ысынмы, әхирәт? Алдамайһыңмы, Яланбикә?..

— Фу әттә. Ысынмы ла ысынмы! йөҙәттен, әйтәгүр. Алдайым ти бына, һармаҡ. Кисә әсәйем менән атайым йоҡоға яткас, һөйләшкәндәрен тыңлап яттым. Улар мине йоҡлаған тип, ҡысҡырып һөйләшеп тик яттылар. Бына һиңә хәбәр шул. Миңә тигән йөҙөгөңдө әҙерләп ҡуй, көмөш булмаһа, алмайым.

— И оятһыҙ. Әллә мине еңгә тимәксе булаһыңмы? Ни ауыҙың барып шулай әйтерһең икән тиңдәшенә.

— Атаҡ, атаҡ, еңгәм тимәй әллә, еңгә булаһың шул. Алла бирһә, үҙем һыуға башлармын әле.

Гөлйөҙөм әхирәтен нығытып ҡосаҡлай, йомшаҡ көлә.

— Ярар, көмөш булыр.

— Бикәсем, тип әйт.

— Юҡ, уныһын әйтмәй торам әле. «Иртә саҡырған кәкүктен, башы ауырта», — ти. Эй, Яланбикә, ул көндәрҙе күреп булырмы икән һуң? Атайым әллә ниңә лә риза булмаҫ инде...

— Күрербеҙ, күрмәй әллә? Тик күңелең генә ысын булһын.

Дуҫтар бик оҙаҡ серләштеләр. Оҙон төн етмәй ҡала. Улар, теләктәрҙең, матур емөттәрҙең осона сыға алмаййынса, таң алдынан ғына йоҡлап китәләр.

## ӨМӘЛӘ

1

Өй артына түңәрәкләп йәйгән ике өлкән йәйем мәте тсатыш ҡомдоң уртаһына ат тиҙәге ташып өйгәс, ҡыҙҙар, килендәр сыр-сыу килеп шаярыша-көлешә, Ырғыҙҙан «өйәнтәләп һыу ташып ҡойҙолар, һалам һалдылар. Муйылбикәнең әҙерләп ҡуйған өс-дүрт силәк эҫе келөн һибәләп, балаҡтарын төрөп, күлдәк итәктәрен бөрмәләренә ҡыҫтырып, ике йәйемгә бүленеп, тубыҡтан батып, балсыҡ баҫырға тотондолар. Балсыҡтың ҡайһыһы тиҙерәк булыуы тураһында шаян һүҙ керәштерә-көрәштерә, ике



йәйемде лә ашығып әйләнәләр. Көл уртаһында быҙлап ятҡан ваҡ ҡына тиҙәк ҡуҙҙары аяҡты бешерә, ләкин улар бирешмәҫкә тырышалар, «әәм, ҡалай эҫе» тиҙәр ҙә бешкән аяҡтарын һыуыҡ балсыҡҡа тығалар. Өмәселәр шулай итеп, балсыҡты һағыҙ кеүек булып шартлағансы •баҫып әҙерләп, төшкө сәйгә ултырҙылар. Төштән һун. ейҙә һә тигәнсә һылап бөтөрөргә булдылар.

Муйылбикә ул йомарт ҡуллы. Өмә тигәндә бигерәк тәныҡ һыйлаусан. Шуға күрә уға, ниндәй эшкә булһа ла емә иттениһә, тирә-яҡтағы йәштәрҙең бөтәһе лә килергә ынтылып торалар. Урта йәштәгеләр ҙә ҡоро ҡалмайҙар. Алама күлдәгән кейеп, туҙып бөткән кәзәкейе өҫтөнән билен быуып, мәҙәк һүҙҙәр һейләй-һөйләй, Мәғфүрә лә килде.

— Беҙгә әйтмәнегеҙ ҙә, беҙ ҙә тырнап һыламайбыҙ, шыма ғына һылай беләбеҙ, — тип үпкәләшеп, Сабира ла апһыны Бәҙи менән килеп етте.

Ләкин улар уйлағандарынса бөгөн генә һылап бөтәалманылар. Киске туҡмастан һуң, тырышып-тырышып келәттәрҙе һылап бөтөрөргә ынтылһалар ҙа, йәштәрҙен, эшкә ҡарағанда күберәк шаярыуҙары, таҡмаҡ-йырҙары менән эш ыраманы. Мәғфүрә уларҙы ҡабаландырһа ла, Хәмдиә менән Бәҙи ыжламанылар ҙа.

— Ҡуйсәле, еңгә, улай ҡыҫырыҡлама әле беҙҙе. Был ни, аҙаҡҡы өмә бит. Яҙға сәйен өмә күрмәбеҙ. Әңгәмәләшеп тик йөрөйек, ҡәйнәмдең майы, ҡаймағы етер әле.

— Эйе шул, Үмәр ҡайнаға ла баҙарҙан ҡайтып төшһә, баҙарлыҡ менән сәй эсербеҙ, — тип көлөштөләр.

Иртәгеһенә балсыҡтын. аҙаҡҡы баҫымын һылап бөтеп, ҡыҙҙар, килендәр, стенаға балсыҡ түңәрәтеп йәбештереп, иҫтәлек есөн үҙҙәренен. ҡулдарын, бармаҡтарын тарбайтып һуғып ҡуйҙылар.

Шаян Бәҙи Гөлйөҙөм менән Яланбикәне ирештерҙе:

— Киләһе көҙ кейәүҙәрегеҙ менән ҡунаҡҡа килгәнсе, беҙ илай-илай ошо ҡулдарға ҡарарбыҙ инде.

— Эйе шул. Беҙ кейәүгә китеп барабыҙмы һуң әле.

.— Китеп бармай әллә, ҡартайышып өйҙә ултырмаҡ булаһығыҙмы?

Хәмдиә Бәҙиҙе йөпләне:

— Алла бирһә, быйыл туйҙарын ашап тороп, үҙҙәрен кейәүгә ҡушып, таҫтарҙарын алабыҙ инде. Бына Гөлйөҙөм бигерәк ҙурайып үҫеп китте. Түбәһенә иҫке сабата

менән һуғнрға кәрәк. Ҡабаланып әллә ҡайҙа бара, — тине.

Мәғфүрә ҡыҙҙарҙы ололарса яҡлаған булды:

— Ярар инде, теймәгеҙсе, үҫһендәр. Улар нн йәш үлән менән бер бит хәҙер, елберҙәп үҫәләр ҙә үҫәләр.

Еңгәләренең бындай шаяртыуҙарына күнгән ҡыҙҙар бирешмәйҙәр.

— Бирерһегеҙ, бирмәй ни. Ашарһығыҙ туйҙы. Тамағығыҙға арҡыры тормаһын, туй итен иплә кенә, ҡылкынып тшна йот.

— Бәй, әллә һеҙҙе, биреп ашамай, һуйырға аҫыраған-дар, тип уйлайһығыҙмы?

Гөлйөҙөмдөн, тел осонда ғына еңгәләренә ауыҙ асмаҫлыҡ итеп бирерлек яуаптары бар. Ләкин ул Айбулаттың енгәһе Мәғфүрәнән тартынынңҡырай. Шуға күрә уларҙы тик ирен сығарып үсекләү менән генә туктай.

Өмәселәрҙең эш бөтөүҙәренә Муйылбикә ике силәк эҫе һыу алып сыҡты:

• — Йә, килендәр, ҡыҙҙар, йыуынығыҙ. Тамаҡланып алайыҡ. Өшөп тә бөткәнһегеҙҙер инде, — тине.

Улар шаулашып, һыуыҡ балсыҡ менән булашыуҙан өшөп күгәреп беткән аяҡ, ҡул, биттәрен йыуа башланылар. Сәнгеп өшеп бөткән ҡул бармаҡтары, эҫе һыуға тыҡҡас, зымбырҙап ҡысыта, сәнскеләй. Ләкин уға иғтибар иткән кеше юҡ. Бындай эштә, өшөнөм, тип сер биреү үҙе ғәйеп һанала.-

һәр ваҡыт бер нәмә уйлап сығара торған Хәмдиә баҫым төбөндә ҡалған балсыҡтан бер йомғаҡ йомарлап алды ла:

— Әйҙәгеҙ, ҡана, бынау балсыҡты Шәһиҙә ҡәйнәмә ебәрәйек, — тине.

— Ҡайһы Шәһиҙә, теге Урал әбейме?

— Эйе, эйе, шуға инде, Урал әбейгә.

Был тәкдимде ҡыҙҙар элеп алдылар. Бигерәк тә Яланбикә хупланы.

— Ысын ебәрәйек! Ул бөгөн генә беҙҙән гебө алып тороп май бешге. Әйҙә, кем алып бара? Бәҙи еңгә, һин бар Урал әбейгә, — ул югереп инеп өйҙән бер тәрилкә алып сығып, бер йомғаҡ балсыҡты һалды ла, өҫтөн таҫтамал менән ябып, Бәҙигә тотторҙо.

Мәғфүрә йәштәрҙе орошоп алды:

— Ул ни тағы, Урал әбей тигән исем таптығыҙ? Шәһиҙә инәй, тип әйтегеҙ.



— Бәй, үҙе шул яҡтан килгәс ни.

— Бәй, үҙе гел, Урал, Урал, тип һөйләгәс ни.

— Килһә ни ҙә һөйләһә ни. Кеше ишетеп ҡалып күңеленә ауыр алыуы бар, — тип Муйылбикә лә Мәғфүрәне яҡлашты. — Үҙендән елкән кеше алдында һис бер ваҡытта үҙ исемен дә атап өндәшергә ярамай, инәй, тип әйтергә кәрәк. Ә һеҙ, етмәһә, ҡушамат тағып һөйләйһегеҙ.

Ҡыҙҙар уңайһыҙланып риза булдылар.

Бәҙи быйыл ҡыш ҡына төшкән йәш килен, тартына бирҙе:

— Оят булмаҫмы икән?

**Мәғфүрә** уны күңелләндерҙе.

— Ни эшләп оят булһын ти, бына. Өмәнән ебәрҙеләр тип әйт. йола бит ул.

Муйылбикә:

— Ҡуйсы, буш менән булмағыҙ, ҡарт кешене мәшәҡәтләп, —• тиһә лә, үҙе ҡыҙыҡһынып көлә ине.

— Бына тағы. Ни эшләп буш булһын, ике көн буйы балсыҡ һылап донъянды ысынъяһау итеп ҡуйҙыҡ. Өмә балсығы ла ебәрмәй әллә. Әгәмәһе ни тора?

— Ул инәйҙе йырлатырбыҙ. Бик рҫта, ят йырҙар йырлай ул.

Бәҙи, яулыҡ осо менән битен ышыҡлап, башын түбән баҫып, урам аша сыҡты ла боролоп тыҡрыҡҡа инде. Өмәселәр уны әллә нindәй ҙур йомош тапшырып оҙатҡан һымаҡ, артынан ҡарап ҡалдылар.

Улар йыуынып бетөп, сәй янына йыйылғылағансы булмай, алдан Бәҙи, унын артынан Шәһиҙә әбей, баяғы тәрилкәнең балсығы урынына бер өлкән йомғаҡ май һалып, бер таба сөсө икмәк ҡултыҡлап килеп инделәр.

Муйылбикә, унайһыҙланып:

— Ҡуйсы, бикәм, бынауҙарҙыңкешеаҙаплап йөрөгәндәрен, — тип һөйләнергә итһә лә, уға ирек бирмәнеләр:

— Ни эшләп аҙап булһын, йнәйем үҙебеҙҙеке бит ул.

—• Әйҙә, әйҙә, инәй, түрҙән ултыр, ана, мендәргә, мендәргә, — тип әбейҙе ҡултығынан күтәрмәләп урындыҡҡа мендерҙеләр ҙә мөйөшкә алып барып ултырттылар.

Әбей йәштәрҙең ойпаланыуынан һүтелеп киткән таҫтарын юнәтеп бәйләп, осон эйәк аҫтына ҡыҫтыра-ҡыҫтыра, алтмыштан уҙған булыуына ҡарамай, теҙелеп торған аҡ тештәрен күрһәтеп көлә-көлә ҡыуанды.

— Ҡуй, Муйылбикә килен, юкты һөйләмә. Аҙап була тиме? Мин бахыр ни, алйот әбей, һайт тигәнгә тайт тигәнден. берехе бит. Уң як усым ҡысытып, күҙ ҡабагым тарткас, әллә берәй ерҙә кустәнәс ашарғамы, тип уйлағайным әле. Ул, баҡтиһәң, һеҙҙең өмә балсығығыҙҙы тоторға икән. Аҙап буламы ни! Әҙәмгә һанап, иҫкә алыу үҙе ҙур хөрмәт.

Өмәселәр унын, һайын сыуылдашып әбейҙе ҡупырайттылар.

— Ана, әйттем бит, Шәһиҙә инәйемдә торош юк инде

— Иәгеҙ, ултырығыҙ, барығыҙ ҙа, ашап-эсеп алайыҡ, — тине Муйылбикә.

Өмәселәр бер ҙур табын булып әйләнеп ултырҙылар. Әңгәмәләшеп, лабырҙашып ашап-эсергә тотондолар. Уларға Муйылбикәнең һурпалы ит ҡурҙағы ла, тары бутҡаһы ла, йомғаҡлы аҡ майҙары ла бик тәмле тойолдо. Шау-шыу араһында Гөлйөҙөм:

— Сәй эсеп бөтөп, тамаҡ ебегәс, инәйемде бер йырлатып алырбыҙ әле, — тине.

Башҡалар шунда уҡ ярҙамлаштылар:

— Йырлатабыҙ инәйемде. Унщ Уралдан алып килгән әллә ниндәй ят, матур йырҙары күп бит.

Мәғфүрә был һорауға ҡатнашты. Сөнки ул ошо «Урал әбейҙең» йәштәр әйткән ят, матур йырҙарынын. ниндәй тәрән ҡайғылы йөрәктән сыҡҡанын яҡшы белә. Уны әллә нисә тыңлап, эсе әрнегәне бар. Шуға күрә әбейҙе йырлатыу, унын эске ауыр яраһын ҡуҙғатҡан кеүек уңайһыҙ хәл, тип уйланы.

Ләкин Шәһиҙә әбей, һәр ваҡыттағы үҙенең ҡылығынса, ауыр кәйефлелек күрһәтмәне. Киреһенсә, күңелле яуап бирҙе:

— И балалар, хәҙер йырларға ни, ҡымыҙ мәле үтеп китте, тамаҡ ҡарлыҡты инде, — тип көлдө.

Сабира уға ҡаршы тештө:

— Ҡуй инде, ҡымыҙ бөтһә ни, оҙаҡламай туй, ҡалымдар башланыр. Беҙ, билде биштән быуып, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы һыйларбыҙ. һин түрҙә ултырып йырлап хөрмәтләрһең, — тине.

Муйылбикә уны ҡеүәтләне:

— Эйе ләбаһа. Хәҙер бына һинә көй яңырта торорға кәрәк. Эштән бушап күптән бирле йырлашҡан да юк.



Әбей, баяғыса күңелле көлөп, уларҙың әле береһенә, әле икенсеһенә ҡарап алды ла:

— Иә, был тиклем дә телгә оҫта булырһығыҙ икән. һеҙҙән аяғанымды эт ашаһын ине лә, бер ҙә көйө килмәй бит әле.

— Йырла, инәй, йырла, —тип һоранылар ҡыҙҙар.

— Туктағыҙ һун, кешегә аҙыраҡ уйларға ирек бирегеҙ^— тип Муйылбикә ашъяулыҡты йыйыштырҙы. Өмәселәр төрлө ергә таралышып ултырып йыр кеттөләр.

Шәһиҙә әбей йәштәрсә сыщғырҙап торған моңло тауышы менән нәҙек кенә итеп йырлап ебәрҙе:

Ауаларҙа оҫкан, ай, һар микән,
Аяккайҙарын күргән бар микән?
Уҙып ҡына киткән был ғүмерҙең
Иҫәптәрен белгән бар микән?

Өмәселәр, тын да алмаған һымаҡ, тыцлайҙар. Бер кем дә ҡуҙғалмай. Әйтерһең, бәләкәс кенә ҡуҙғалыш та йырҙың моңон бүлер һымаҡ, унщ сыңғырҙап күтәрелгән музыкаһына ҡамасаулар шикелле ине.

Ҡыр ҡаҙҙары оса, ай, теҙелеп,
Күлдән-күлгә төшә өҙөлөп,
Беҙҙең генә өсен кем илаһын,
Эс-бауыркайҙары өҙөлөп.

Алыҫтан да ҡарайып, ай, күренгән
Иҙел башы Ирәмәл таш икән.
Таш аҫтынан аҡкан йылға тиһәм,
Күҙҙәремдән аҡкан йәш икән.

Әбей туктаны.

— Эй, ҡартайғас ни, тын ҡыҫыла. йәш саҡтағы тауыш ҡайҙа ул, — тине Шәһиҙә әбей.

Мәғфүрә уға «ваһай икән» тип көй күтәрҙе лә, күҙенән тәгәрәгән йәштәрен башына бәйләгән яулыҡ оео менән һөртөп ҡуйҙы.

Муйылбикәгә был етә ҡалды.

— Зерә һәйбәт йырлайһын, бикәм, тыньщ да иркен әле, — тип көрһөндө.

Иәш килендәр баштарын түбән баҫкан көйө уларҙы тыщланылар.

Тик ҡыҙҙарға ғына йыр ул тиклем ныҡ тәьҫир итмәне. Улар бер-береһенә көләмһәрәп ҡараштылар. Яланбикә күҙҙәрен йыпылдатып ымлап Гелйөҙөмдән, ҡолағына:

— Сүгәтәләрен йыуа башланылар, әйҙә сығайыҡ, — тине.

Гөлйөҙөм, тамағына тығылған көлкеһен тыйып:

— Әбейҙәрҙен, эше шул инде. Ҡара әле Хәмдиә еагәм дә һытылып бара, — тип шыбырҙаны.

Әбей үҙе иламаны. Тик баяғы уйынсаҡ йылтыр күҙҙәрен тәрән уй баҫты. Ҡыҙҙарға ҡарап һоҡланды.

— Бына, йәштәр, һеҙгә донъяла рәхәт әле. Һеҙҙен, ҡолон-майҙарығыҙ өҫтөгөҙҙә. Донъя хәсрәтен күрмәгәнһегеҙ әле. Беҙ күргәнде һеҙгә күрергә тура килмәһен. Беҙ күргән ауыр көндәр һеҙгә лә килә ҡалһа, һис тә бирешеп бөгөлмәгеҙ. Беҙҙән ғүмер үтте лә китте. Беҙҙән дә үтте, эттән дә үтте. Шуға күрә йәшлектен, ҡәҙерен бик нык белегеҙ, донъя баҫыға килһә лә, бөгөлмәгеҙ, балалар. Һуңынан, үҙегеҙ ҡартайғас, бер әбей беҙгә шулай тип әйтә .торғайны, тип иҫкә алырһығыҙ.

Өмәселәр әбейҙен, йырына ла, был нәсихәт һүҙҙәренә лә күп рәхмәт әйтеп шауланылар ҙа, йәш килендәр, балаһағаларын, эштәрен иҫкә төшөрөп, ашығып һаулашып, ҡайтып киттеләр. Муйылбикә олорактарҙын, берәүһен дә ҡайтарманы:

— Юҡ, юҡ, ҡуҙғалмағыҙ. Самауыр яңыртам. Баяғыһы өмә сәйе ине. Бынығы аулаҡ өй сәйе булыр, — тине. Хәмдиә менән Гөлйөҙөмгә самауыр ҡайнатыу, һыйыр һауыу йомоштарын ҡушты ла: — Хәҙер үҙем дә ҡунаҡтар менән бер ултырып хәл алайым әле, — тип урындыҡ өҫтөнә менеп, Мәғфүрә янына мейескә һөйәлеп ултырҙы.

## «УРАЛ ӘБЕЙЕ»

Шәһиҙә, Ырғыҙ буйҙарын ҡалдырып, Урал яғына сығып киткән сағында ун ике генә йәштә ине әле. Унын атаһы, Түңгәүер ырыуынан булған Ғәзим тигән кеше, кесе йәшенән үк ата-бабаһынан Өфө губернаһына ҡараған Урал тигән бер ил барлығын, ул ил урманға, һыуға бай һәм бик матур икәнен, ҡасандыр үҙҙәренен, ҡартаталары шунда йәшәп тә, ошо Ырғыҙ буйына килеп сыҡкан кешеләр_б_у_лғанын, әгәр ҙә мөмкинлек булһа, шул Урал яғыша кире күсеү тураһында хыялланып һөйләүен ишетеп үҫкән. Ҡарттар үлгәндәр. Ғәзим үҙе егет булып үҫеп алғас та, ошо урманһыҙ, һыуһыҙ, нужалы донъяға аяҡ баҫыу менән, ата-бабаһы мираҫ итеп ҡалдырған ошо хыялдан айнымаған. Ул, үҙенен, Түңгәүер тоҡомо буйлап,



быуындан-быуынға күсеп тултырыла барған бер шәжәрәне бик нык тикшереп ҡарап, Ғәзимгә хәтле ун атаға айырылған булһа ла, тоҡом ебе шул Уралда йәшәгән Ярат тигән бер кешегә барып текәлгәнен белеп ала һәм, шул шәжәрәне кеҫәһенә һалып, бисәһе менән ҡыҙын эйәртә лә, тәүәккәлләп, Урал яғына ҡыҙырып сығып китә. Был Түңгәүер ырыуынан килгән Яраттың тоҡомо Уралда ҡалғанмы, Ғәзим барып уны тапҡанмы, әллә тапһа ла, бер нужанан ҡасып, икенсеһенә барып эләккәнме, асыҡ ҡына билдәле түгел. Ул ваҡытта бәләкәй булған Шәһиҙә лә тулы мәғлүмәт бирә алмай. Һәр хәлдә Ғәзимдең, унын, семьяһынын һәм Шәһиҙәнен, үҙенең дә үткәргән ауыр яҙмыштары Ғәзим мәрхүмдең эҙләгән бәхетен ҡыуып етә алмағанын иҫбат итәләр.

Ғәзим бер нисә йылдар төрлө ерҙәрҙә ҡыҙырып йөрөгәндән һуң, Златоусттан алыҫ түгел Сутыш тигән бер ауылда урынлашып ҡала ла ғүмерен шунда үткәрә. Шәһиҙә ҡыҙ булып үҫеп етә. Уны шул ауылдың Златоуст ҡалаһында заводта эшләп йөрөгән бик аҡыллы, эшкә бик оҫта һәм бик уңған, ҡарап тороуға мөһабәт, үткер күренгән бер Батырйән тигән егеткә кейәүгә бирәләр. Шәһиҙә ошо ире Батырйән менән булған бөтә ғүмерен Златоустта прокат заводында үткәрә. Балалары, үҙе әйткәндәй, тыуа торалар, үлә баралар. Уларҙың тик берҙән-бер улы Асҡар ғына үҫә.

Бына быйыл яҙ башында Шәһиҙә ҡайтып төшөп, әсәһе менән бер туған ҡустыһы Үмәрҙе тапҡас ҡына, әллә ҡайҙа бер кәштәлә саң баҫып яткан еренән табып алып уҡылған бер иҫке тарих һымаҡ йәшәй. Бүтән өлкән тарихтәр менән сағыштырғанда, бер тамсы ла әһәмиәткә эйә булмағандай күренгән был бәләкәй генә семья тарихе, әлбиттә, бер-ике ай буйы ауыл араһында һөйләнеп йөрөтөләләр ҙа онотолалар ине. Ә ысынында ул улай ғына булып сыҡманы. йәштәр исем ҡушып алған «Урал әбейе» менән бергә был тарих, Урал илендәге йөҙәр йыл буйынса тау заводтарында эшләп тә, синфи көрәш уттарында ҡаты сынығып та үҫкән пролетариат һәм уларҙын, ошо һуңғы йылдарҙағы юғары баҫкыска .үрләй барған революцион көрәш ялкындары тураһында һөйләй торған өлкән тарихтен, бер бите булып, Ырғыҙ буйына ҡайтып төшә.

Хә^ер ошо турала ирҙәр йыйылышҡан ерҙә, ҡатынҡыҙ түңәрәкләшеп ултырған өйҙә төрлө хәбәрҙәр һөй-

ләнә. Унда булған ғәжәйеп* ваҡиғалар, оңҡот завод хужалары, уларҙың файҙаһын яҡлашып эшселәр ҡанын түгеүсе батша ялсылары бөйөк Уралдың мөһабәт фонында йәнле картиналар кеүек күҙәләнеп, Ғәзим, Батырйән, Аҫҡарҙарҙың бындағы — алыҫтағы туғандарының һәм яҡташтарыныщ йөрәктәрен һыҙлата, асыуҙарын ҡабарта ине.

Муйылбикәгә йыйылған өмәселәр ҙә Шәһиҙә әбейҙең, үҙ башынан үткән хикәйәһен йотлоғоп тыңлайҙар, уны бик йыш бүлеп, һорауҙар яуҙыралар.

— Ул яҡтар беҙҙең Ырғыҙ буйҙарына бер ҙә оҡшамағандар, тауҙары шул тиклем бейек, хатта болоттар ҙа уның итәге буйлап ағалар. Ҡара урмандары йырып үткеһеҙ, әҙәм аяғы баҫмаған ерҙәре бик күп, унда айыу, бүре — төрлө кейектәр йәшәй. Һыуҙар ҙа унда бик шаян аға, бик йыш боролоп, ҡая таштар аҫтына инеп китергә яраталар, әллә ҡайҙа барып, тағы килеп сығалар. Бына ошо урманлы бейек тауҙар араһында Златоуст тигән бер ҡала бар. Уныщ ҙурлығы һөйләп бөткөһөҙ. Өйҙәре лә бындағы кеүек балсыҡ та, ҡыйыҡһыҙ ҙа түгел, барыһы ла ағастан бөткән, барыһы ла ҡыйыҡлы. Урамдарына таш түшәлгән. Улар тигеҙ генә дүрткел-дүрткел булып бер тау башына менеп китәләр, бер тау итәгенә төшөп юғалалар. Унда йөрей-йөрөй аяҡ калмай. Ә ҡаланың үҙенә кешеләрҙе суйын юлы алып барып төшөрә.

Урал әбейҙең, хикәйә һөйләйәсәген ишетеп, бая сығып киткән ҡыҙҙар ҙа яңынан килеп инделәр. Улар һәр ваҡыттағы үҙҙәренең тиктормаҫ ҡылыҡтары менән ололарҙан орошолалар ҙа бер аҙ тыныс ултыралар. Оҙаҡ та үтмәй, ҡыҙыҡһыныуҙары уларҙы тағы еңә.

Әле тағы ла Яланбикә:

— Инәй, һин суйын юлында үҙең йөрөй беләһеңме?— тине.

— Беләм, балам, беләм. Ҡайтҡанда суйын юлы менән ҡайттым.

— Бүлмә, инәйемде, — ти кемдер берәү.

— Әбей дауам итә:

— ...Ана шул суйын юлы Златоусҡа барып етер саҡта ун. яҡлап уның урамдары әллә ҡайҙан уҡ, сатрашлап теҙелгән эре шаҡмаҡтар һымаҡ, ялтырап күренеп яталар.

— һе-һе, — тип аптырашалар йәштәр.

— Күрһәң ине.



— Бына ошо ҡалала, балалар, мин ҡырҡ йыллап ғүмер иттем.

— И-и-и...

— Ул ғүмерҙә күргәндәрҙең барыһын да һөйләр өсөн тағы ла шул оҙонлоҡ ғүмер кәрәк. Мин бегөн һеҙгә башымдан үткән хәлдәрҙең иң ауырын, һеҙҙең өсЪн иң ғибрәтле булғанын, былтыр ғына булып үткән бер хәлде һөйләйем әле.

Әбей, үҙенең фекерҙәрен туплаған һымаҡ, байтаҡ өндәшмәй ултырҙы ла дауам итте.

— Ана шул Златоуст ҡалаһында ятып ҡалды минен. яңғыҙ улымдың кәүҙәһе, — уға был турала әйтеү бик ауыр булған һымаҡ, ул тәрән көрһөндө.

Ҡыҙҙар тағы һоранылар:

— Инәй, улың нисә йәштә ине?

— Егерме өс тулғайны уға. Яратҡан ҡыҙы ла бар ине. Өйләнеп ғүмер итеүҙәр уға насип булманы шул. — Әбей дауам итте: — Ҡыш көнөнөн, әсе һыуыҡтары ине. Минең улым Аҫҡар бик ашығып ҡайтып инде. Төҫө бик борсоулы, асыулы ине. Уның эш ваҡытында былдай болоҡһоп өйгә ҡайтыуын күргәс тә, мин тынымды эскә тарттым. Эштең тиген булмағанын төшөнеп торам инде. Улай ҙа һорай ҡуйҙым:

— Ни булды, балам, ни эшләп эш ташлап ҡайттың? — тинем.

Ул мине тынысландырырға уйлапмы икән, әллә үҙе шулай тыныс булдымы икән, яйлап яуап ҡайтарҙы:

— Эй, әсәй, беҙҙең ни, һаман да шул бер ыҙғыш инде, — тине. Хатта әңгәмәгә һалыштырып көлөп ҡуйҙы. Үҙе кеҫәләренән әллә ниҙәр эҙләй. «Ыҙғыш» тигәс, мин яҡшы беләм инде, уның үҙенең иптәш эшселәре менән үҙ-ара бер ваҡытта ла ыҙғыш күтәргәне булманы. Ә атаһы мәрхүм тере сағында инде, мин бындай хәлдәрҙе бик күп күргәнмен. Ул да шулай әленән-әле: «Эш ташланыҡ, хужалар беҙ һорағанды бирмәһәләр, эшкә сыҡмайбыҙ», — тип ҡайтып килә лә минең ҡотомдо ала торғайны. Бара-бара мин дә был эштәргә күнегеп киттем. Әле лә Аҫҡарымдын, ошолай итеп ҡайтып килеүе миңә бик таныш ине. Ул былай ҙа хас атаһы холоҡло булды. Атаһын да бергә эшләгән иптәштәре, урыҫмы, башҡортмо булһын, бик ярата торғайнылар. Хужалары менән ниндәй генә бәрелеш булдыниһә лә, хәҙер килеп етәләр ҙә: «Иә, Батырйән, ҡалай, ҡалай итәбеҙ, ни эшләйбеҙ?» —

тип уны үҙҙәренен кәңәштәренең уртаһына ала торғайнылар. Минеи. Аҫкарым атаһьша ҡарағанда ла үткерерәк, ҡыйыуыраҡ булды. Шул, баяғыса, тамағына әҙерләп ашаттым. Ул сығырға кейенеп тә өлгөрмәне, үҙе менән бергә эшләгән унлаған иптәше килеп тә инделәр. Улар менән бергә Аҫкарҙың ин, яҡын дуҫы Сәргәй ҙә бар ине. Улар: «Әйҙә, тиҙерәк, Аҫкар», — тинеләр. — «Беҙҙең прокатсылар бөтәһенән алда барып торорға тейеш», — тинеләр. Үҙ-ара ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләштеләр:

— Ул дәфтәрҙе һис тә алырға ярамай.

— Алмайбыҙ. Унан беҙгә ни ҡала.

— Ни ҡалһын, көнөнә ун алты сәғәтлек эш ҡала. Эщләйһец, эшләмәһәң — сығаһын. Ә һин эштән сыҡтың иһә, һиңә донъя кәрәгенән бер сажин ер ҙә, бер йөкмәү утын да теймәйәсәк. Шул законды үткәрә бит был ян.ы дәфтәр.

— Өфөгә Иван Якутовҡа хәбәр иткәнбеҙ. Ул тағы берәй сара өйрәтер әле, — тип ҡыҙышалар ине.

Бына шунан башланып китте лә китте. Эшселәр: «Дәфтәрегеҙҙе алмайбыҙ», — тигәндәр хужаларына. Хужалары: «Кем дә кем быға ҡаршы тора, шуны эштән ҡыуабыҙ, хекөмгә тарттырабыҙ», — тип янай башлағандар. Эшселәр, бер һүҙ ҡуйышҡас, боҙмайҙар инде ул һүҙҙе. Улар шулай берегетшп бер эште алдарына алалар икән, бик ныҡ, бер төптән тороусан булалар. Ҡурҡыуҙыщ ни икәнен дә белмәйҙәр.

— Бахырҙар, ни эшләһендәр инде барыһы ла бергә эшләгәс, — тип һөҙөмтә яһай Мәғфүрә.

— Бөтә нужалары бергә инде уларҙың, — тип ҡуя Муйылбикә.

— Шулай итеп, беҙҙең балалар эшләгән прокат заводынан көндән-кен йыйыла, күбәйә барып, был ыҙғышҡаике ай тигәндә улар ике мен. кешегә тулып, тау нәсәлнигe алдына барып баҫалар ҙа тағы бер ҡабат уларҙың хәйлә менән яҙылған эш дәфтәрҙәрен алмаясаҡтарын ҡырҡа белдерәләр. Нәсәлник ни, арҡаһын юғарыға терәй. «Министр шулай ҡуша», — тип кенә ебәрә. «Бөгөндән үк үҙ урындарығыҙға баҫып эшләй башлағыҙ», — ти.

Нәсәлниктәр ҙә, үҙ-ара һүҙ тейнәп, батшаға тиклем хәбәр иткәндәр, күрәһең. Март айының уртаһы яҡынлағас, әллә ҡайҙан һалдаттар килә башланы. Шул арала беҙҙең, алдан башлап йөрөгән ышаныслы ғына кешеләрҙе ҡулға ла ала башланылар.

— Ниңә, инәй? — тн Яланбикә.



— Бәй, ул кешеләр эшселәрҙе яҡлашып, бил быуып көрәшәләр ине. Эшселәр ни әйтә, шуны, илсе булып барып, хужаларҙан таптыралар. Шуға асыу итеп уларҙы төрмәгә ябалар.

— Уй, төрмәгә...

— Беҙҙекеләр уның һайын асыуланалар, уның һайын ныҡышалар. Хәҙер инде шул үҙҙәренең бикләнгән иптәштәрен ҡотҡарыуҙы талап итәләр.

Златоустта әллә утыҙ йыл уҫал эт кеүек ырылдап ятҡан Долгов тигән ротмистр жандарм бар ине. Ул эшселәргә: «Был эш миндә түгел, хәҙер губерна үҙе теләһә ни эшләй», — тигән. Ул да, үҙенән сүп осороп, эшселәрҙе еиә алмағас, Өфөгә губернаторға хәбәр иткән булған. Губернаторы ла шуның һымаҡ бер ҡанескес Богданович тигән бер уҫал бәндә булып сыҡты.

Тыңлаусыларҙыщ иҫе китә.

— Әллә һин ул губернаторҙың үҙен күрҙеңме, инәй?

— Күрҙем, күрмәй ни. Шунда үҙебеҙҙең бала-саға артынан, ҡотобоҙ осоп, шуларҙы һағалап, улар тау идараһы тигән өйгә барған һайын эйәреп йөрөйбөҙ инде, ҡайҙа ул!

— И бахыр ғыналар. Ни тиклем ыҙғырлыҡ...

— Әйтмә инде, төн йоҡоһо ла булмай ул ундай саҡтарҙа. Шул губернатор үҙе килеп төштө. Эшселәрҙең. илселәре тураһында эште ҡарау ҡайҙа ул. Уларҙы төрмәнән сығарыу тураһында таптырып барыусылар менән һөйләшеп тә тормай, әллә нисә йөҙләгән һалдатты теҙҙертте лә беҙҙең балаларға ҡарап аттыра ла башланы.

Тыңлаусылар барыһы бер юлы ах итеп аптыраштылар.

— Уй алла, бахырҙарҙы!

— йә инде, — төптө юҡҡа...

— Ай, ҡан түгеүсе ләғинде, бына һин әле!

Әбейҙең, күҙенән эре-эре ике бөртөк йәш тамсыһы бите буйлап тәгәрәне. Ләкин уның сырайында бер үҙгәреш тә юҡ. Күҙҙәрендә ғорур ,асыу. Ул үҙенең шундай батыр үлеме менән үлгән улының хөрмәтен бер ваҡытта ла илап, зарланып һөйләп кәмһетмәҫкә һүҙ биргән. Хәҙер уның тауышы ныҡ һәм кер.

— Шулай итеп, әҙәм балаларын урам буйҙарына түшәп һальга ҡуйҙылар.

— Ҡусы, ҡуйсы, йәндәре лә юҡ икән эттәрҙең... — ти Сабира.

Әбей һөйләй:

— Ҡысҡырыш, бәрелеш, боларыш китте. Мылтыҡҡа ҡаршы нисек бараһың? Беҙҙекеләрҙә ҡорал-маҙар юҡ ине. Беҙ ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күбәйеп киттек. Һәр кем үҙ кешеһен эҙләп югерҙе. Мин улар менән бергә югерешеп Асҡарымды эҙләйем. Ул арала таҡта арбалы ылаусылар әллә ҡайҙан килеп еттеләр ҙә, яралыларҙы ла, үлгәндәрҙе лә тейәп, әллә ҡайҙа алып китә башланылар.

— Ай алла, бик интегәләрҙер инде улар.

— Интегеүҙең сиге юҡ инде. Мин ул арбалар янына ла барып ҡарайым, юҡ, күренмәй. Беҙҙе лә бынан ҡыуалар, төртөп ебәрәләр. Мин шул тиклем ғазапландым да бер жандармдын. битенә лас итеп текөрҙем. Ул мине Ьуғып ебәрергә ынтылғас та, әллә ҡайһыһы унььщ үҙен тертөп осорҙо. Асҡарымды таба алмағас, минең күн.елемә: «Уға бүл теймәгәндер, хәҙер ул ейгә ҡарай киткәндер»,— тигән өмөт төштә лә, үҙебеҙгә табан ыңғайлап, бер тар ғына тыҡрыҡҡа боролдом, — әбей ҡапыл һүҙҙән туҡтаны, тыны ҡыҫылған кеүек булды.

— Асҡарым шул тыҡрыҡтын. ситән стенаһына башьш терәгән дә, көтөп торған һымаҡ булып, минә ҡарап баҫып тора. Шатлығымдан: «Эй балаҡайым, һине эҙләйем бит», — тип ҡысҡырып ебәрҙем.

Ул да, мине эҙләп йөрөп тапҡандағы кеүек ҡыуанып, көләп ҡуйған булды ла хәлһеҙ генә тауышы менән:

— Мин бында, әсәй, — тине. йөҙе ап-аҡ, күҙҙәре янып бара.

— Әйҙә, бала.м, китәйек, тип ҡулынан тоттом. Ул ипләп кенә сүгеп ергә ултырҙы. Шул арала әллә ҡайҙан ситән аша уның дуҫы Сәргәй һикереп килеп төштө. Беҙ уньщ менән икәүләшеп тиҙ генә улымдьщ өҫкө кейемен ысҡындырҙыҡ. Күлдәге ҡыҙыл ҡанға буялып, түшенә йәбешкән ине. Бүл күкрәгенә тейгән, йөрәккәйемдең. Иптәше Сәргәй тағы бер кеше менән (униһын мин танымай ҙа инем) Асҡарҙы күтәреп алып ҡайтып киттеләр. Өйҙә ул киләһе таңға тиклем тере ятты... Шунан һун, мин, яңғыҙ улымдан яҙып, ҡаңғырып тороп ҡалдым.

Бисәләрҙең күбеһе үкһеп илайҙар ине.

Муйылбикә Гөлйөҙөм менән Хәмдиә килененә сәйҙе тиҙерәк ултыртырға ҡушты. Үҙе күҙ йәштәрен яулыҡ осо менән һертөп алды ла, шәм яғып, әбей янындағы һандыҡ өҫтөнә ҡуйҙы.



Хәҙер инде әбейҙең тауышы күтәренке, үҙенән кеселәргә берәй эш ҡушҡандағы һымаҡ бойороҡло ине.

— Юҡ, балалар, мин әйтте тип,иҫегеҙҙә тотоғоҙ, илау менән ундай кешеләр кире ҡайтмай ул.

— Эй бикәм, бигерәк йәл бит улар, — тине Муйылбикә.

— Бик йәл, бик аяулы шул улар. Шуға күрә лә уларҙыщ башын ашаған күк һыртлы ҡанескес бүреләрҙең илағанын күрергә теләйек. Бына шул йәнһеҙ бәндәләр әҙәм балаларын эт урынына ла күрмәй ҡырҙылар. Урам буйы ҡан менән буялды. Ут һүндергес мискәләр алып килеп, шунын, эсәктәренән һыу һиптереп, урам таштарын йыуҙырҙылар. Ә ҡан уның һайын йәйелде. Шунан йөкләп-йөкләп ҡом килтереп һипкән булдылар. Улар шунын менән, ҡан эҙҙәрен йыуыу менән, үҙҙәренең ғәйептәре юйылыр тинеләр, күрәһең. Юҡ инде, балалар, был эштәр мәңге юйыласаҡ түгел.

Шәһиҙә әбей ошо һүҙҙәрен әйтте лә ултырған мендәренең бер ситенә ҡыҫтырылған муҡсайын сығарьш ҡуҡарҙы. Ул был муҡсайын бер ваҡытта ла өйҙә ҡалдырмай, уның зсендәген ул һүҙ ыңғайында кешегә күрһәтсргә ярата торғайны. Хәҙер ҙә ул унан әллә ниндәй эрелеваҡлы ҡағыҙ киҫәктәре, төрлө ҡалынлыҡтағы китап кеүек нәмәләр сығарып күрһәтте:

— Бына, балалар, был ҡағыҙҙарҙың берәүһе лә шайтан ҡурҡыткыс доғалыҡ түгел, быларҙын. бөтәһе лә ана шул улымдан ҡалған изге яҙыуҙар. Быларҙың бик күбеһе Өфө ҡалаһындағы Якутов тигән ҙур кешенең ебәргән яҙыуҙары. Ул яҙыуҙарҙы мин улымдан ҡалған ҙур мираҫ итеп күкрәгемдә һаҡлайым. Улар миңә ысын яҡут ташы бөртөктәре кеүек ҡыйбатлы күренәләр. Үҙем һау сағымда шул минен, Асҡарыма оҡшаған тағы бер батыр егет осрар әле, мин шундай бер балаға -бүләк итермен тип һаҡлап йөретәм уларҙы.

Тыңлаусылар йыйылышып килеп әбейҙеи, дәүләтенән сыҡҡан ҡағыҙҙарҙы ҡаранылар. Ҡыҙҙар хатта һыйпап та ҡуйҙылар. Ләкин улар араһында арлы-бирле мосолманса хәреф танығандары булһа ла, русса таныған бер кем дә юҡ ине.

— И инәй, һиңә бик күп рәхмәт инде, — тисштеләр ҡыҙҙар.

Бисәләр:

— Хоҙай үҙенә күркәм сабырлыҡ бирһен, - тип те-
ләнеләр.

Гелйеҙе, „енэ бик я.ын булған был инэһен беҒен башлап күргән һымаҡ һоҡланып ҡараи ине.

## ТЫУҒАН АУЫЛДА

Айбулат шатлыҡлы уйҙ-ар менән ауылына ҡайтып килде. Ул килеп ингәндә, урындыктын. кейеҙен төрөп ташлап, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша шапылдатып һуғып кәрт уйнаған дүрт кешенең ҡайһыһы Ҡотлояр ағаһы икәнен дә айыра алманы. Улар бәләкәс кенә өйҙә тәмәке төтөнө менән шул тиклем быҫҡыткандар, күҙгә төртһәа күренмәй тигәндәй ине.

Айбулат күтәренке, күңелле тауыш менән ҡысҡырып сәләм бирҙе, һаулашты. Ләкин үҙ эштәренә баштан-аяҡ сумған кәрт уйнаусыларҙын, уның сәләмен ишетерлек хәлдәре юҡ ине. Улар араһында ниндәйҙер талаш сыҡҡандыр, ахыры, бер-береһенә тындары бөтөп ҡысҡыралар, күҙҙәрен алартып бер-береһенә ул һуғарҙан, был һуғарҙан ынтылалар ине.

— Ни нәмәһе, күҙгә ҡарап тороп юкты алдайһың, ә! Вәлитте мин һалдым, Әптерәш етелек бирҙе, Әхмәҙи туз менән һукты!

— Түгел, Ҡотлояр ағай, түгел! Туз минеке ине. Үҙем һуҡтым.

— һуҡманын, минең күҙем юҡмы ни! —Ҡотлояр һаман.һүгенде. Айбулатҡа иғтибарһыҙ ғына күҙ төшөрҙө лә, уны көн дә күргән кеше һымаҡ итеп, иғтибарһыҙ кире алды. Алдындағы ҡайһыһы яланбаш, ҡайһыһы иҙеүен ысҡындырып, тирләшеп, итектәре менән урындыҡ таҡтаһыш бысратып ултырған иптәштәренән кәрттәрҙе һелкә тартып йыйып алды:

— Бирегеҙ, яңынан еләшәм, атағыҙҙың баштары. һеҙ әле мине — ҡарт бүрене алдамаҡсы булаһығыҙмы әле, шайтандар. Мин һеҙҙен, кеүектәрҙе күрмәгәнме? Бир, Сафа, кәртте.

. Башҡаларына ҡарағанда күп йәш булған Әптерәш, Айбулаттың ҡорҙашы, бүтәндәр кеүек ирешмәй, тик ҡыҙарып, бүртенеп, бик серьез тәҫ мбнән Ҡотлоярҙын. уйнап торған ҡулдарына күҙ эйәртте.



Ҡотлояр, кәртте өләшеп бетөп, бөтәһенә лә еңгән тәҫ менән күҙҙәрен ялтыратты ла, ҡарсыға танауы еҫтөндәге тирен һөртөп алып:

— Конда ун дүрт һум, малайҙар, бирегеҙ уны,— тине.

Башҡалар өндәшмәнеләр. һәр кем үҙенә тейгән кәртте, әллә ниндәй ҡәҙерле бер нәмә кеүек итеп, ситтән-ситтән генә күҙ һалып ҡатланылар ҙа, берәйһе тартып алыуҙан ҡурҡкан һымаҡ, устарына ҡыҫып тотоп, ҡаш аҫтынан шикле ҡарап, киҙәктәге кешенең йөрөүен кеттөләр.

Ҡотлояр тағы команда бирҙе:

— Йөрө, Сафа, ход һинеке!

Айбулаттың шатлығы ҡапыл һүнде. Шул тиклем һағынып ҡайтып та, бер кешенең дә уны ҡыуанып ҡаршы алмауы уның күңелен ҡырҙы. Ул урындыҡ ситенә ултырып бер аҙ ҡарап көттө лә, өндәшеүсе кеше булмаған, тороп бүркен сөйгә элеп, итектәрен сисәйем тип ин,-кәйгәндә, ишек асылып китте.

һыу көйәнтәләп Мәғфүрә ҡайтып инде. Уның йөҙө һытыҡ. Иренең өҙлекһеҙ кәрт уйнауынан йонсоп бөткән. Тупһаны аша атлап, бер силәкте ейгә индереү менән, кәрт уйнаусыларға асыулы күҙ һирпте. Көйәнтәһен мейеа артына шалтыратып ырғытты. Шунан һуң, Айбулатты күреп, ҡыуанып көлөп ебәрҙе.

— Бәй, Айбулат, һин ҡайтканһын, бит, һаумы! — тип, ул Айбулатҡа яратып ҡарай-ҡарай силәктәреи усаҡ янындағы һикегә ултыртып: — Шәп ҡайттыңмы, атаҡ, һин төптә 'еткән егет булғанһың инде, — тип, һөйләнәһөйләнә килеп, ике ҡуллап күреште.

Айбулаттың күңеле күтәрелеп китте. Тоҡсайын сисеп, Мәғфүрәгә тип алып ҡайтҡан ҡыҙыл биҙәкле яулыҡты алып бирҙе. Мәғфүрәнең, быны күргәс, шатлығынан күҙе йәшләнде.

— Ҡуйсы, ҡуйсы, Айбулат бахыркайым, ниңә улай итеп мәшәҡәтләнәһең инде. — Ул яулыҡты тәҫләп бекләп урын егенә ҡыҫтырҙы ла ҡайғылы тәҫ менән шыбырҙаны:

— Бына ағайыңда йылҡы көтөүенән өсөнсө кен генә ҡайтты. Әллә ниңә бик асыуланып ҡайткан. Ҡайтҡас, аҡса ла бирмәне. Бер француз биҙәклё күлдәк, бер сирек ᵉәй, Диләгә бер яулыҡ, ярты ҡаҙаҡтай монпаси алып ҡайткан. Бүтән бер нәмәһе лә юҡ. һорашһаң, яратмай, әрләй. Ҡайтканы бирле кәрт уйнай ҙа кәрт уйнай. Кисә

лә отторҙо, бөгөн дә отторол тик ултыра. Ирешhәм, тукмар тип ҡуркам. hин уға аҡсаҢды күрhәтә күрмә инде. Ату, биреп тор, тип алыр ҙа кәрткә hалып отторор. Алманым әле, тиген, йәме?

Айбулат, ярар тип, баш эйҙе.

Мәғфүрә, алып ҡайткан hыуын самауырға ҡойоп, ут hалды ла мейес соҡалағына ултыртты.

Ул арала урамда уйнап йөрөп өшөп бөткән Дилә, югереп инеп, Айбулатҡа ташланды. Ул:

— Айбулат ағайым ҡайткан, Айбулат ағайым, — тип ҡыҫҡырып шатланды.

Айбулат уны иркәләне. Уға еҫле hабын бирҙе. Дилә быға ҡыуанып бөтә алмай, әсәhенә күрhәтте:

— Әсәй, ҡара әле, Айбулат ағайым миңә еҫле hабын алып ҡайткан. Тәтәйле.

Мәғфүрә лә ҡыҙы менән бергә ҡыуанышты:

— Ай-hай, минен, ҡыҙымды ағаhы ҡайhылай ярата. hабынындың тәтәйен йыртмай ғына әрсе лә, hандыҡ эсенә йәбештерербеҙ, — тип кәңәш бирҙе.

Кәртте төн уртаhына тиклем уйнанылар. Айбулат, ҡашаяҡ яҡка сығып, усаҡ янынараҡ ултырып, Мәғфүрә менән бик оҙаҡ hөйләште. Мәғфүрә уға күберәк Гөлйөҙөм тураhындағы хәбәрҙәрҙе hөйләне. Уны hоратып күрше ауылдан яусы килгәнен, атаhыньвд риза булып, әсәhенең күнмәйерәк торғанын да, Гөлйөҙөм менән үҙе бер нисә тапҡыр осрашып, Айбулат тураhында ҡаға-hуға ғына hүҙ асыҡлағанын да hөйләне.

— Гелйөҙөмдөң күңеле hиндә, Айбулат. Кисә лә әле унын, еңгәләренә барып ултырғайным, атаhынын, уны бирәбеҙ, тигәнен ишеткәс/илай, ти. «Үлhәм дә бармайым, минец күңел hалған кешем бар», — тип әйтә, ти. Ярай әле, ҡайтып өлгөрҙөн. Берәй юнен ҡарарға кәрәк.

Айбулат-күберәк Мәғфүрә еңгәhенен, hөйләгәнен тың,-
килде. Мәғфүрә hаман дауам итте.
— Мөратша бик күп мәһәр бирә, ти. Ул үҙе бер ісере-
ланды. Үҙе hүҙ ҡыҫтырманы, hораушар бирмәне. Күп уйланы, нисек кенә булhа ла, Гөлйөҙөмдөңү үҙен күргеhе-
гән бай ккән, етмәhә, үҙе старшина икән. Улынын, күҙе ҡылый, имеш, ти. Шуға күрә ярлы ҡыҙы булhа ла, күрмәлекле булhын тип, Гөлйөҙөмдө алырға hарылып яталар, ти. Хәҙер эш тик ҡальш бирергәме әллә туй ғына яhарғамы, булмаhа, ҡалым да, туй ҙа яhарғамы икәнле-



ге тураhында ғына тора, ти. Гөлйөҙөмдөң атаhы: «Ҡалым алам», — тип әйтә, ти. Ә тегеләр: «Туй яhайыҡ та ҡуяйыҡ, йөҙҙән ашыу мәhәр, үҙе генә ни тора», —• тип әйтәләр икән, ти. Ошо киләhе йома эсендә ни булhа ла була, тип торалар. hин ҡайhылай булhа ла ашыҡтырырға тырыш. Булған аҡсаң, hөйләшкәс, әллә мәhәренә етер ҙә hуң, туйына кәрәк, ҡалымына кәрәк, уны ҡалай итерhеа икән инде?

Улар шулай кәңәшә-hөйләшә сәй эстеләр. Мәғфүрә ирен ни тиклем сәй эсергә ҡыҫтаhа ла, ул иғтибар итмәне, уйнай бирҙе.

Мәғфүрә тәрән көрhөнөп сәй яhаны. Айбулат алып ҡайткан монпасңҙән кеше башына өсәр бөртөктән генә бүлеп hалды ла ҡыҙына:

•— Аша, балам, Айбулат ағайындың күстәнәсе. Танаuың ҡысыткандыр әле, — тине.

Днлә, иркәләнеп, аҙыраҡ боршаңланы ла әсәhенең сәй ҡойғанын көттө.

Кәртселәр араhында тағы ла ниндәйҙер талаш сыҡты. Тағы ла ирәгешә, hүгешә, талаша башланылар. Был юлы Ҡотлояр, бигерәк ныҡ асыуланып, бетә кәрттәрҙе туҙҙырып ырғытты ла икенсе яҡка боролдо.

— Уйнамайым, чорту. hеҙҙең менән бьщда мухлёвка яhап ултырырға мин маңка малай түгел, әллә кем булаhығыҙ, собакалар.

Сафа унан да яман ҡыҙып hүгенде:

—• Уйнамаhаң, наплевать. Әллә мин hинең шул биш тәңкәң өсөн уйнайьшмы? Рас отканмын икән, отканмын инде.

Ул шулай hүгенә-hүгенә күҙҙәрен алартып, бүркен эҙләп кейҙе лә, кондағы бөтә аҡсаларҙы тырнап алып кеҫәhенә hалды ла ишекте шарт итеп ябып сығып китте.

Кәрт уйнарға быйыл ғына өйрәнгән йыуаш Әхмәҙи өндәшмәй генә тәмәке hурҙы. Тәмәкеhен тартып бөткәс, үҙен дә, Ҡотлоярҙы ла йыуаткан тауыш менән:

— Әйҙә инде, фарт килмәhә, килмәй инде ул. Унын өсөн дыуылдауҙын. файҙаhы юҡ, — тине.

Мәғфүрә уларҙы сәй янына саҡырҙы.

— Әйҙә, ууй, сәй эсегеҙ. Бер тотонhағыҙ, осо ла юҡ, ҡырыйы ла юҡ. Тағы етмәhә, әллә ни тапҡандар, уйнай торғас, ирешәләр ҙә китәләрсе.

Ҡотлояр уға бер генә ҡыҫҡырҙы:

— Етәр, тим hиңә! Ҡыҫылған булаhын, да тораhың!

Шунан ул Әхмәҙиғә боролдо:

— Әйҙә, Әхмәҙи, сәй эсергә ултыгр. Ни нәмәһе, балтаһы һыуға төшкән кеше һымаҡ, уйға ҡалып ултыраһың.

Әхмәҙи, келөмһөрәп, ашъяулыҡ янына килде.

Ҡотлояр ҙа, Әхмәҙи ҙә, Айбулатты ян,ы ғына күргән һымаҡ, һаулашып күрештеләр.

Ҡотлояр сырайын һытЬш торҙо-ла көлөп ебәрҙе:

— Ну ярай, Айбулат, һау эшләп ҡайткас. «Ҡуян алмаҫ, артынан ҡалмаҫ» тигәндәй, бына ағаң да (ул үҙенә төртөп күрһәтте) ун биш йыл буйы мал артынан ҡараңлай. Әйҙә, һин дә тырышып ҡара инде, ҡустым. Исмаһам, кәләш алырлыҡ бол йыя алдыңмы, юҡмы? Өс йыл көтөү көтөп, итек, салбар, көпө алдың, тағы бер-ике йыл көтөү көтһәң, кәрт уйнарға ла өйрәнеп алырһың әле.-

Айбулат Ҡотлоярҙың был уйынлы-ысынлы һүҙҙәренә ни тип тә мәғәнә бирә алманы. Бер ваҡытта ла үҙенең тормошонан зарланып сер бирергә яратмаған Ҡотлоярҙың былай һөйләнеүенән ул аптырап ҡалды. Сенки ул, үҙенең эрелеген юғалтып, былдай һүҙҙәр һейләмәй торғайны. Ул күп ваҡытта, «йә, төкөрҙөм мин Ныязғолдоң повозкаларына. Үҙемдең ҡола атым һау булһын. Мин уның менән бөтә Ырғыҙҙы ике көндә-буйлап сығам», ти. Йә булмаһа, «икмәгем таҙа булғас, урамда ла ултырып ашайым, Ҡаҙанҡап Абдулла һымаҡ, кеше талап йыймаған», ти, ә ҡайһы саҡтарҙа: «Эй ҡустым, беҙгә ни ике донъя, бер мөрйә, үгеҙ үлһә — ит, арба ҡыйралһа утын. Урыҫ байынын. бер аты ҡаҙаланы иһә, бер айлыҡ һугым. «Знакум, махан надо, возьми», тип ая сыккан һнмеҙ-һуғымды алдыңа үҙе килтереп йыға. Тиреһен һыҙырып бирһән, шуға риза», — тип маҡтана торғайны,

Айбулат Ҡотлоярҙын, үҙе генә зарланып түгел, үҙенә төртеп һейләүенә бик ғәрләнде. Сенки иртәнме, бөгөнмө яусы ебәрергә торған Гөлйөҙөмдөң бер туған ағаһы алдында үҙен кәмһетеүҙе күтәреү ҡыйын ине. Ул асыуынан ҡыҙара бөртте. Ләкин Әхмәҙи алдында һүҙ көрәштергеһе килмәне.

Бәхеткә ҡаршы, Әхмәҙи уға иғтибар итмәне. Айбулатҡа дуҫтарса көлөп ҡарап:

— Ярар, «егет кешегә етмеш терлө һенәр ҙә аҙ», тигәндәр ҡарттар. Әллә ниҙәргә өйрәнеп китер әле йәш кеше, — тине ул.

Ҡотлояр ҙа бер аҙ тынысланды. Көлөп ҡуйҙы.



— Хәйер, һин дә минең кеүек йырсы бит әле. Бына Мәғфүрә еңгәндең атаһы мәрхүм һымаҡ, бер алйот ҡурайсы тура килһә, һинең йырлағаныңды тыңлар ҙа ҡыҙын үҙе етәкләп килтереп бирер әле.

Мәғфүрә асыуланып ирен тыйҙы.

— Иә, етер инде. Ошо бер һөйләнә башлаһа, иҫерек кеше шикелле тотона торған.

— Нинә, ысынды һөйләйем бит мин. Әллә юкты һөйләйемме? Ныязғолдоң уртансы бисәһенең ҡалымында һинен, атайыңды ҡурай уйнарға, мине йырларға саҡырғайнылар. Минең йәш саҡ, һалдатҡа китерҙән бер йыл элек, тәмәке лә тартмай инем әле. Күкрәк киң. Килепкилеп тороп «Буранбай»ҙы йырлап ебәргәйнем, малай, бабайҙың күҙ йәштәре һаҡалы буйлап тәгәрәне шул. Тарткан ҡурайын ашъяулыҡ өҫтөнә ырғытты ла:

— Ай афарин, улым! Илдә бер егет икәнһең. Ҡырҡ йыл ҡурай тартып йөрөп, былдай йырсыға осрағаным юк ине. һыйлар инем, атым юҡ, яңғыҙ ҡыҙым бар, әйҙә, һинә булһын, — тине бахыр. Шулай итеп килгән Мәғфүрә еңгәң ул бына. — Ул, ҡырын яткан көйө һөйләнә-һөйләнә, Мәғфүрәнең яурынына һуғып ҡуйҙы. Бөтәһе лә келөштөләр.

Мәғфүрә лә, көлөп, иренә шәшке менән сәй бирә-бирә:

— Эй маҡтансыҡ. Ғүмеренә шул маҡтаныуын ҡуймаҫ инде, — тине.

— Ярар, бисә, ярар. Мин маҡтанһам да, һине кәмләмәйем бит. Нисәмә йылдар ғүмер иттек. Мин һине алтынкемеш түгеп алған байбисәләрҙән кәм аҫырайыммы ни. Тамағың тук, өҫтөң бөтөн, тырнаҡ менән дә сирткәнем юҡ. Тик бына бөгөн генә берәй һыйыр алырға етерме тип йәй буйы йыйған аҡсаны анау һаҫыҡ Сапар отоп китте. — Ҡотлояр үҙенең әңгәмәһенә үҙе кинәнеп келөп ебәрҙе. Уға эйәреп башҡалар ҙа келөштөләр.

Улар шулай байтаҡ әңгәмәләшкәс, Әхмәҙи һаулашып ҡайтып китте.

Айбулат кустәнәскә алып ҡайткан бер пачка махорканы Ҡотлоярға сығарып бирҙе. Ул уны ҡыуанып алды.

— Бына бынының ярағаң. Әллә үҙең дә тартырға өйрәндеңме, малай?

— Юҡ әле, өйрәнмәнем.

— «Юҡ әле», имеш. Әллә өйрәнергә уйлап тораһыңмы?

— Юҡ, ағай, юҡ. Уйламайым да, өйрәнмәйем дә.

— Шулай тип ҡотол!

Ҡотлояр һаман ҡырын ятҡан көйө, тәмәке төрөп, ҡағыҙын ялап йәбештерҙе лә тоҡандырмай һөйләнде.

— Ярай, ҡустым, һау ҡайтҡанһыңдың. Аҙып-туҙмағанһың. Көтөү эше бик йыбаныс, файҙаһыҙ бер һөнәр ул. Бына мин күпме көтөү көттөм, ә ннмәгә өйрәндем? Кәрт уйнарға, тәмәке тартырға, үҙа-барһа, араҡы эсергәме инде?

Айбулат Ҡотлояр өедн бая ғәрләнеп асыуы килһә, хәҙер уның был һүҙҙәренән ауыр тормоштан бик йонсоғанын күрҙе, йәл булды. Шулай ҙа ошо турала әйтеп үтмәй түҙә алманы.

— Ағай, һин әллә ни бер ҙә үҙеңә оҡшамағанһың, зарланаһың. Унан тағы ни өсөн инде мине Әхмәҙи алдында битләп ултыраһың? — тине.

Ҡотлояр иҙерәйеп яуап бирҙе:

•— Алла, харап булған икәнһең! «Тура әйткән — туғанына ярамаған». Әхмәҙи әллә һинең менән минең көтөүсе икәнде бөгөн күреп торамы? Беҙҙең эш, әйтәм бит, бер генә лә һөнәр арттыра торған эш түгел. Минең баштан үткән инде.

— һине.ң баштан үтһә, минең баштан үтмәгән әле. һин күңеленде төшөрһән, дә, мин төшөрмәйем әле, кәрт менән тәмәкегә лә биреләсәгем юҡ!

— Ҡара һин уны! •—/Котлояр Айбулатҡа һынаулы ҡараш ташланы. — Әллә ысынлап та байып ҡайттыңмы? Бик эре һөйләшәһең.

— Байып ҡайттым шул, аҡсаға булмаһа, аҡылға байып ҡайттым. — Айбулат асыу менән ҡыҙыу яуап бирҙе.

— Аҡыл, аҡыл, имеш, һин берәй һөнәргә ейрәндем тиһән, ҡолаҡҡа яғыр ине. Аҡыл ни, ул үҙемдә лә тулып ята торғайны. Тик бына бөгөн аҡса ла бөттө, аҡыл да бөттө.

Айбулат Ҡотлоярҙың аҙаҡҡы һүҙҙәренән ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.уның асыуы ла һүрелде.

— Юҡ, ағай, ысын. Мин әллә ни һөнәргә түгел, бик аҡыллы кешеләрҙе күреп, уларҙың бик тәрән мәғәнәле файҙалы һүҙҙәрен тыңлап ҡайттым.

Ҡотлояр, тағы ла үҙһүҙләнеп, иғтибарһыҙ көлдө:

— Булған ти һиңә Кузьмин утарында аҡыллы кешеләр. Әллә һин уның апара ҡорһаҡ управляющийен әйтәһеңме? Ул ҡайһы саҡта үҙ файҙаһына бик. шыма телле



була торған. Әллә теге приказчик — тыртыҡ ҡуянды һөйләйһеңме?

Айбулат көрһөнөп ҡуйҙы.

— К)к, ағай, һин беҙҙең. һөйләшеүҙе уйынға һабыштырыуыщды ҡуйсәле. Бөт.өнлән улар түгел. Был ысын күңелле, ана шул һин әйткән «апара ҡорһаҡтар»ҙы күралмай торған яҡшы кеше бар.

— Иә, кем һуа, мин беләмдер әле?

Айбулат Ҡотлоярҙы аптыратырлыҡ серьез итеп:

— Дядя Гриша, — тине.

Ҡотлоярҙың ысынлап та иҫе китте:

—• Кит артабан. Юҡты һөйләмә! Әллә һин төш һөйләйһеңме? Әллә ысынлап та Григорий менән осраштыңмы? — Ул урынынан тороп үк ултырҙы.

— Бер ҙә төш һөйләмәйем. Кузьмин утарында әллә нисә көн бергә булдыҡ. Бик күп һөйләштек.

Ҡотлояр, Мәғфүрәнән ҡуҙ һорап алып, тәмәкеһен тоҡандырҙы. Уны бер генә һу.рҙы ла Айбулатҡа ҡараны.

— «һөйләштек» тип әйтмә инде. һин ни беләһең? Ул һөйләгәнде һөйлә.

— һуң, ағай, һөйләй белмәһәм, тыңлай беләм, һораша беләм дә инде, һин бигерәк тағы. Унан мин яңғыҙ ғына түгел бит унда. Күмәк инек. Шуға күрә «һщйләштек» тип әйтәм.

— Юҡ, һин мин әйткәнде ауырға алма. Григорий Иванович менән һөйләшеү — ул һиңә күҙ йомоп ҡөрьән тыңлау түгел.

— Әллә һин дә беләһеңме уны, ағай?

— һин дә беләһеңме, тиһең. Уны был тирәлә белмәгән әҙәм юҡ. Хәҙер ул ҡайтыға килгәс, был тйрәләге баярҙарындын, йөрәктәре үксәләренә китте инде. — Ҡотлояр маҡтанған тауыш менән көлөп ҡуйҙы, ҡулын алыҫҡа һелтәп ҡуйҙы. — Оҙаҡҡа ҡайтҡан микән? — тип һораны ул.

—• Уныһын һорашманым. Уларҙыщ эшләгән цехтары ябылған шикелле, дереҫен генә белмәйем.

— Ну, ну, һөйлә, ниҙәр ишеттең унан?

Айбулат бик ҙур дәрт менән Григорийҙән бөтә ишеткәндәрен, бөтә аңлағандарын һөйләп бирҙе.

...Айбулат, яңы иҫенә бер нәмә төшкәндәй, кеҫәһен ҡутарып бер яҙыу сығарып Ҡотлоярға бирҙе. Был яҙыуҙы Ҡотлояр артыҡ ҡыҙыҡһынмаған төҫ менән яйлап

ҡына алды ла хәрефтәрен бөртөкләп кенә:

— Прокла-ма-ция, — тип укыны. — Гриша биргәндер инде. Ҡыҙыҡлы микән, кемдән укытабыҙ инде? — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Айбулат:

— Дядя Гриша бирҙе шул. Үҙем укып ишеттерәм хәҙер мин һиңә, — тине.

— Ну? Әллә урыҫса уҡырға ла өйрәндеңме?

— Вася менән йәй буйы русса укыу менән заниматься иттек, тип бая бер ҡабат һөйләгәйнем ҡуй инде.

Ҡотлояр шатланып китте.

— Бына һиңә кәрәк булһа, һөнәргә ейрәнмәнем т-И»-һен, ай тинтәк малай? Ҡайткас та шулай тиһәңсе һуң.

Айбулат, Ҡотлояр ағаһының үҙен һалҡын ҡаршы алғанын хәтерләп:

— һе, ул ваҡытта һинең минең менән һөйләшеп торорлоҡ ваҡытың бар инеме ни, кәрттән аҡса һуғып, байып ултыра инең бит! — тип сәнсте.

Ҡотлояр уға ла үпкәләмәне. Ул ҡулын һелтәне лә:

— Ҡуйһаңсы, шул зимагур һөнәре лә булдымы бер хәбәр.

... Ҡотлояр урынынан тороп уҡ китте. Ул бер аҙ ишекле-түрле йөрөнө лә, тулкынланыуын йәшермәй, Мәғфүрә алдына туктаны.

— Ишеттеңме, бисә, Айбулат ниндәй ғилемдәр тейәп ҡайткан. Иртәгә иртүк тороп сыбар тәкәне һуям. Ҡотлайбыҙ, Айбулаттьщ ҡайтыуын туйлайбыҙ, булдымы, бисә? — тине.

— Аһа, бигерәк яҡшы. Мин уға ҡуш ҡул ҡуям, — тине Мәғфүрә.

Ул, баянан бирле уларҙыщ ҙур һәм ҡыҙыҡлы хәбәрҙәрен тыңлап, үҙенең дә һөйләгеһе килеп, тамшанып ултыра ине. Әлё Ҡотлояр үҙенә ендәшкәс, ул да һүҙгә ҡушылып китте:

— Ҡарағыҙ әле, һеҙҙең һөйләшкәнде тыңлап ултыра торғас, иҫемә тештө әле, анау көнө Муйылбикәлә балсыҡ өмәһендә булғайным. Шунда беҙ өмә балсығы ебәреп Урал әбейен саҡырткайныҡ.

Айбулат, аптыраңҡырап, Мәғфүрәнен, һүҙен бүлде:

— Кем ул, Урал әбейе?

— Эй, уныһын һин белмәйһең бит әле. Ҡайтып-китеп йөрөгәс, ағайьщ белә. Яҙ көнө һин көтөүгә киткәс, Үмәр ҡарттарға бер ят кеше бер ҡарсыкты тейәп алып килеп



төшкәйне. Бына шул ят ҡарсыҡ Үмәр ҡарттың апаһы булып сыҡты. Ул бәләкәйҙән китеп, Урал тигән яҡта ғүмер иткән. Шуға күрә йәштәр уға «Урал әбейе» ти ҙә ҡуялар. Ана шул әбей менән беҙ Муйылдарҙа төн уртаһына тиклем һөйләшеп ултырҙыҡ.

Ҡотлояр:

— Ниңә, ул хәҙер Үмәрҙә тормаймы ни, саҡырҙыҡ, тиһең? — тип һораны.

— Юҡ, бергә тормай. Уны үҙҙәренең элекке иҫке өйҙәренә башҡа сығарып, ағай-энеһе йыйылып бер һыйыр алып биреп ҡуйҙылар. Янғыҙ тороп өйрәнгәнмен, кешегә лә йөк булғым килмәй, тип әйтә, ти.

— Ә, улай икән, шунан ул ни һөйләй?

— Ул үҙе торған ҡалала булған ҡот оскос нәмәләр тураһында һөйләне. Уның улы әле бына һеҙ һөйләгән һымаҡ, үҙҙәренең хужалары — байҙар менән һуғышып, уны бик күп иптәштәре менән атып үлтергәндәр. Шул әбей, бахыр, улының әллә ниндәй яҙыуҙарын, доғалыҡ шикелле итеп, муҡсайға һалып йөрөтә. Беҙгә ҡутарып, таратып күрһәтте. Бөтә яҙыуҙары ла ташҡа баҫылған.

Айбулат бик ныҡ ҡыҙыҡһынып тыңланы:

— Еңгә, мин һораһам, күрһәтер микән ул яҙыуҙарҙы? — тинç ул.

Ҡотлояр тағьГла үҙенең кирелеген итте.

— Йә, ул алйыған. әбей ни һөйләгән тиһен, берәй әкиәт һөйләгәндер әле, — тип ҡуйҙы.

Мәғфүрә ныҡ асыуланды:

— һин үҙең алйыған ҡарт. Кеше үҙенең янғыҙ балаһын әкиәт итеп һөйләй тиме ни? Берәүҙәр жандарҙар менән һуғышып баш һалғандар, ә һиңә әкиәт. Ҡартайғансы уйламай һөйләүеңде ташлай алманың!

Айбулат Ҡотлоярға ризаһыҙ төҫ менән ҡараны.

Ҡотлояр өндәшмәне.

Мәғфүрә дауам итте:

— Ул әбей әйтә, был яҙыуҙарҙы үҙемдең улым кеүек бер егеткә бирәсәкмен, ти. Шуны үҙемдең тыуып-үҫкән илемә, улымдан ҡалған бер мираҫ булһын, тип алып ҡайттым, ти- Айбулат, һиңә укырға бик ихлас бирә инде ул.

Айбулаттың, күҙҙәре янды, урынынан һикереп торҙо.

— Эй, еңгә, мин ул инәй менән күрешһәм, ә?

— Бәй, күрешәм тиһән. ни, иртәгә тәкә һуйғас та ҡунаҡҡа алып киләм мин уны. һине күрһәтәм. — Мәғфүрә

был вәғәҙәһенә үҙе лә көлөп ҡуйҙы. — Тик абай бул, ул бит Гөлйөҙөмдөң атаһынан да оло инәһе. Күренеш бирмәй күрешергә тура килә инде! — тине.

Айбулат аҙыраҡ ҡыҙарҙы:

— Эй, ул иләнмәгән-һуғылмаған эш бит, • — тине.

Унын, был һүҙен Ҡотлояр элеп алды:

— Уны иләп һуғыуы оҙаҡ эш түгел, ҡыҙҙы урлайбыҙ» ҙа алып киләбеҙ, — тине ул.

һүҙ был мәсьәләгә күскәс, Мәғфүрә тағы ла һүҙҙе оҙайтты.

Улар, шәм һүнгәс тә бик оҙаҡ һейләшкәндән һун., өсәүләп бер ҡарарға килделәр: ҡулдағы аҙ-маҙ аҡса туҙмаҫ борон, Гөлйеҙөмдө һоратып, тиҙерәк яусы ебәрерг» булдылар.

## ТАНЫШ БУЛМАҒАН ДУҪТЫҢ БҮЛӘКТӘРЕ

«Не в шумной беседе
Друзья познаются...»

Ҡунаҡтар таралғас, Мәғфүрә, Айбулатты күрештереү ниәте менән, Шәһиҙә әбейҙе ҡунырға алып ҡалды. Ул уны ҡунаҡҡа алырға барғанда уҡ, үҙенең бик аҡыллы, бик унған ҡәйнешенең ситтән йөрөп ҡайтыу хөрмәтенә һуйылған тәкә итен ашарға саҡыра килгәнен һәйләгәйне инде.

Шәһиҙә әбей, үҙен бик ҙурлап ҡунырға ла алып ҡалғас, тағы ла нығыраҡ ипреп китте:

— Рәхмәт инде, ҡыҙым, мин бахырҙы былай итеп хөрмәтләүегеҙгә бик күп рәхмәт. Ҡәйнешеңден. бәхете асылһын. Күрмәгә бик һәйбәт, бик һөйкемлө бала, — • тип маҡтаны.

— Маҡтаныуым түгел, инәй, ҡәйнешем елғыуар егет түгел. Уны һиңә күрһәтергә тырышыуымдың тағы бер сәбәбе шул: ул егеттә һинең улыңдың — Аҫҡарың ғәҙәттәре бар. Ул да шулай, һинең улың мәрхүм кеүек, әллә ниндәй ташҡа баҫылған урыҫса яҙыуҙарҙы шытырҙатып уҡып бирә, мәғәнәләрен дә әйтә. Мин уға Шәһиҙә инәйҙә төрлө яҙыуҙар барлығын әйткәйнем, ул: «Еңгә, берүк, шуны инәйемдән һорап ҡара әле, миңә уҡып торорға бирмәҫ микән?», — тип быуыныма төштө. Үҙе һорарға ҡыйып бөтмәй, — тип Мәғфүрә Шәһиҙә әбейгә Айбулаттың үтенесен тапшырҙы.



— Аһа, уҡыһын улым, уҡыһын. Ул ундай өлкән эштәр тураһында уй йөрөтә белә торған еғет булғас, мив ни эшләп унан йәлләйем, ти. Ҡайтҡаныма байтаҡ зама» үтеп бара, бер ҙә күҙгә эленгәндәй егет осрата алғаным юҡ ине әле.

Шәһиҙә, ҡултығынан дәүләтен сығарып, ҡутара-ҡутара һөйләнде:

— Ҡайҙа китте һуң әле ул балам?

— Бьша ҡунаҡтарҙы ғына оҙата сыҡты. Хәҙер ҡайтып инер, • — тип яуап бирҙе Мәғфүрә.

Шәһиҙә әбейгә Айбулат бик оҡшаны. Улар, күптәнге таныш кешеләр кеүек, әсә менән бала кеүек тиҙ үк үҙләшеп киттеләр.

Әбей Айбулаттың был тирәләге үҙе белгән ҡорҙаштарынан айырылып торған, үҙенә айырым бер холоҡло кеше икәнен һынап алды. Ул, унын менән бер талай һөйләшеп ултырғас та: «Был бала булдыҡлы бала булырға оҡшай, үҙенеңтиңдәштәреараһында айырылып уҡ тора. Мәғфүрә лә был турала бер ҙә арттырып һейләмәгән», — • тип уйланы һәм үҙе һаҡлап йөрөткән бөтә яҙыуҙарҙы Айбулатҡа бирҙе.

— Мә, улым, һиңә минең улым Аҫҡарҙан бер ҡомартҡы булһын, — тнне, Айбулаттың арҡаһынан тапап һөйөгс ҡуйҙы.

Айбулат был әбейҙә иң тәүҙә уҡ үҙенең әсәһенең ҡылығын күрҙе. Ул үҙенән-үҙе: «Был инәй ҙә минең әсәйем, һымаҡ, бер бөртөк хәреф тә танымай, бер ниндәй ҙәукыу күрмәгән. Шунда ла. үҙе, минең әсәйем бахыр шикелле,. балалары өсен уҡыу-яҙыу, ғилем, һөнәр тураһында, уларҙың бәхетле булыуҙары тураһында айырыуса бөйөк теләктәр менән йәшәгән», — тип уйланы.

Айбулаттың әсәһе үлгәнсе, үҙенең ғәзиз балаларыш бушҡа эшләтеп интектереп, эт типкеһендә йөрөткән Ныяҙғолдарҙы ҡарғап ятһа, Шәһиҙә үҙенен, бөтә ғүмереа заяға үткәреп кенә түгел, унын күҙ нурындай күргән улы Аҫҡарҙы фажиғәле үлемгә дусар иткән завод хужалары, уларҙың һаҡсылары булған Долгов, Богдановичтәрҙеаҙаҡҡы һулышына тиклем ҡарғаясаҡ, уларҙың ҡәбә.хәт эштәрен илгә, йәштәргә фаш итеүҙән туҡтамаясаҡ икәнен ул асыҡ төшенә.

Ырғыҙ буйында ла, Айҙаҡайҙа ла аҡыллы ҡарттар, аҡыллы әбейҙәр бик күп. Уларҙан Айбулат күп тәжрибә» күргәне, күп аҡылға өйрәнгәне бар. Ә улар янында был

Урал әбейе Айбулатҡа быға тиклем таныш булмаған, .ирҙәрсә ҡыйыу, ҡурҡыу һәм икеләнеүҙе белмәй торған тура аҡылы менән айырылып тора. Ул үҙенең ғүмер иткән, ҡайғы-шатлыҡтарын үткәргән һәм бөтә семьяһын шунда кумеп ҡалдырған Златоустты, прокат заводын, Уралын, хатта уның улы Аскарҙыц остазы Якутов йәшәгән •Өфө ҡалаһын иҫенә төшөргәндә лә, уның күңелендә уларға мөхәббәт, уларҙы үҙ семьяһын һағынғандай, өҙөлөп Мғыныу ҡуҙғала. Шәһиҙә әбейҙең бындай киңГ һәм изге күңелле булыуына Айбулат һоҡланып аптырай ине.

Бик оҙаҡ һөйләшеп ултырғандан һуң, Шәһиҙә әбей Лоҡларға ятты. Мәғфүрә лә Диләһен ҡосаҡлап йоҡлап китте. Ҡотлояр ҡунаҡка киткәндән ҡайтмаған.

Хәҙер Айбулат, бер үҙе ултырып ҡалып, үҙенә бер ваҡытта ла танышырға тура килмәгән Урал тауҙары аша ҡомартҡы булып килеп төшкән ҡиммәтле хазиналарҙы таратып һалып укып ултыра ине.

Иң тәүҙә ул үҙе көткән «Искра» газетаһының бер нисә номерен таратты ла Вася һөйләгәндән бирле күңеленә тәсбих булып нык һеңгән һүҙҙәрҙе тиҙерәк эҙләп тапты. «Из искры возгорится пламя», тип укыны ул.

Был газеталар «Искра»нын тәүге номерҙәре ине.

Айбулат, бик ҡәҙерле нәмәһен юғалтып та, әле генә тапҡан һымаҡ, тшуанды. Тик үҙенең янында хәҙер серләшеп һейләшергә Васяның булмауы ғына, ҙур кәмселек булып, эсте бошора ине. Сенки Айбулат русса бик яҡшы һөйләшә. Уҡырға ла хәҙер зарланырлыҡ түгел, арыу уҡ тиҙ укый белә, укыған һүҙҙәренең бөтәһенә төшөнә. Ләкин шулай ҙа һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнә тәрәнлеген аңлап етә алмай, ҡайһы саҡта аҙашып, тарҡалып китә ине. Ә был турала асыҡлап аңлатыуҙы һорарлыҡ бер кем дә юҡ. Шуға күрә Айбулат күп мәсьәләләрҙе үҙ-үҙенән уйлап, бик нык сейәләнгән ҡыл арҡанды сисергә тырышҡан һымаҡ тырышты.

Ләкин уның үҙенә үҙенең күңеле бөтмәне, ризаһыҙлыҡ һиҙҙе. Был ҡыш буйына укып кинәнерлек булған үҙенең байлығын — тәүҙә газеталарҙы, унан брошюраларҙы, улар өҫтөнә «Что делать?» китабын тәҫләп бөкләп һалды ла уларҙың бетәһен дә яҡшылап тәшөнгөһө, бөтөнләй ятҡа бикләп алғыһы килеп уйланды.

Уның был уйҙарын Ҡотлояр ҡайтып килеп бүлде.

— ,һин әле булһа йоҡламаныңмы ни?

— Йоҡо килмәй, укып ултырҙым.



— Теге яҙыуҙарҙы ҡулыңа төшөрҙеңме ни?

— Эйе, Урал инәйем бирҙе уларҙы.

— Ни яҙылғанын төшөнөп буламы һуң?

— Төшөнөп була^ ла, ауырыраҡ. Ә ҡайһы берҙәрек төшөнөп тә булмай. *

— Тешен, үтеңкерәмәйме ни? — Ҡотлояр сисенә-сисенә һорашты. — Төшөнмәһәң дә ғәжәп түгел. һинең менән: миңә укыу эләктеме ни? Былай һупалағас та бик ҙур эш.. Акрынлап асылып китерһең әле, бойоҡма. Был бит һиңә' әкиәт түгел.

— Бына шуға күрә лә бойоғорға тура килә шул,. ағай, — тине лә Айбулат тағы уйға ҡалды.

Ҡотлояр ҡапыл уйлап тапкан шикелле итеп:

— Юҡка борсолма әле һин. Мин иртәгә Кузьм-ингәкитәм дәбаһа. һин төшөнмәгән урындарынды миңә әйтеп, яҙып ебәр. Мин Григорийҙән һорашып ҡайтырмын, — тине.

Был тәкдим Айбулатҡа бик оҡшаны.

— Ысын, ағай, һин шулай итеп ҡара әле, — тине ул-

## ЯУСЫ

Землянка баҙарына барһаң, барыуы-кайтыуы менәнг һикһән саҡрымдан артыҡ юл йерөргә кәрәк. Атың бер төрлө булып, йәки йөгөң ауырыраҡ булһа, ара ҡунып йерөп, дүрт-биш көн үтеп китә. Шәп атлылар, йөк тейә* мәй, аҡса менән генә барыусылар кисә үк ҡайтып бөттөләр. Шуға күрә лә Землянкаға нисә саҡрым тиғән саҡта, кешеләр: «Яҡшы атҡа ҡырҡ саҡрым, насар ат менәк алтмыш-етмешкә етә», — тип яуап бирәләр.

Үмәр ҡарт бишенсе көндә төш ауа ғына ҡайтып төштә..

Ул, ҡайтып, ат туғарырға өлгөрмәне, тирә-яҡ күршеләр тулып киттеләр. Баҙар хаҡын һорашалар. Ундағы бойҙай, арыш, он, бесән, ситса, сәй, шәкәрҙән башлап энәһенән ебенә тиклем тикшерәләр. Улар кисә ҡайтыусыларҙан да әллә нисә тапҡыр һорашып белешһәләр ҙә, уларҙың бер нисәһендә берәр самауырлыҡ йыйналып баҙарлыҡ сәйе эсһәләр ҙә, әле Үмәр ҡарт менән көнө буйы һөйләшеп ултырыи, уның сәйен эсеүгә лә кире тормайҙар.

Ике ҡулын артҡа ҡуйып, тәүҙә Әпләс ҡарт килеп етте, уның артынса башҡалар ҙа, аҡрынлап ҡына һөй-

ләшә-һейләшә килеп, ишек алдына йыйылдылар. һүҙгә әүрәгән кеше булып, өйгә инделәр. Уларҙың ҡартыраҡтары ингәс тә түргә менеп ултырҙылар. Урта йәштәгеләрҙең ҡайһы берәүҙәре самауыр ҡайнар алдынаныраҡ:

— Ярай, һау йөрөи ҡайтҡас бик яҡшы, бик яҡшы. Әйҙә, ҡайтайыҡ ииде, — тип урындарынан торһалар ҙа, Үхмәр ҡарт уларҙы ҡоро ауыҙ сығарманы.

— Юҡ әле, Әхмәтьян, ҡайҙа ҡабаланаһың, бына баҙарлыҡ сәйе эсеп сыҡ, — тине.

Ҡунаҡ та артыҡ ҡыҫтатманы.

— Йә һуң, улай булһа, эсһәк зсәйек, — тип, ҡаталарын сисеп, түргә уҙып, тағы ла һүҙгә керештеләр:

—• йә, иген ни хаҡ тора был баҙарҙа? Аҙыраҡ күтәрелгән тигәндәй булалар?

Үмәр ҡарт, мейес эргәһендәге һандыҡ өҫтөнә ултырып, кәҙәкейен сисеп, камзулынан ялпылдап сығып торған аҡ күлдәгенең киң ендәре эсенән бармаҡтарын аралаштырыш, һорауҙарға яуап бирә:

— Юҡ, ҡайҙан күтәрелһен. Үткән баҙарҙа бойҙайҙың >бото бер һум һикһән тингә етте тигәйнеләр. Был юлы минең ниндәй таҙа эре бойҙай бер һум биш тиндән генә китте. Дөрөҫ, ана Ныязғолдоҡолар ҡиммәт үткәрҙе, ботон бер һум утыҙҙан биргән тиҙәр. Ун биш йөк тейәгәйне. Уның ни, знакум күп, прикащиге Алламорат ер аҫтынан йылан көйшәгәнен белә. Әллә ҡайҙа барыП' һөйләшеп, әллә ниндәй контораға тулайым һаткан, ти.

— Уларҙын, эше елле. Байҙыҡы бара инде ул. Әйтәм ерле, кисә Имаметдин, аҙыраҡ ҡағып алып, үҙе менән кырандасҡа Мәкәр купец улын ҡатар ултыртып, саптарҙы ҡыя сүкетеп, Сәргәйгә инеп бара ине. Ылауға урыҫтарҙы яллап, тағы бер утыҙ йөк Быҙаудыҡҡа тейәтә, ти.

— Тейәтә, тейәтә. Ике мен. ярым бот игенде ҡайҙа ҡуйып бөтһөн.

— Шулай инде. «Байҙыҡы фарман менән, юҡтыҡы ларман менән» тигәндәй, тәгәрмәсе алға ғына тәгәрәй инде.

— Ситса хаҡы ни булды?

Был юлы Үмәр, урынынан тороп, мейес янындағы таяу эргәһендә яткан токто ҡутарҙы. Ирҙәр бвтәһе лә тоҡ янына шыуышып эркелделәр:

— Бына быныһы сәтин һымаҡ бер нәмә, бөрләнтин тиҙәрме, аршыны егерме биш тин ярым. Ҡыҙға күлдәк булыр тип алдым. Бынауһы бер ҡара нәмә, ламбек тиһән,



ебе эрерәк, ни тии атайҙарҙыр инде. Аршыны ҡырҡ өс тин. Үҙемә кәзәкейгә бул*ыр тип алты аршын алдым. Бынауһы бына шаршаулыҡ, аршыны ун биш тин, ун аршын. Бынауһы ситлек өс аршын. — Ул шулай һөйләп аңғартып, алған нәмәләренең уңын-тиҫкәреһен әйләндерҙе. Өҫтәренән ҙур бер ҡәҙер менән һыйпап, тауарҙарҙы өҫтөөҫтөнә һалып, һәр берейе тураһында айырым туҡталды.

Уны ҡараусылар ҙа ҙур бер ҡыҙыҡһыныу менән:

—• Ай-һай, бик яҡшы и.кән. Бик аҫыл икән. Ҡайһы лавканан алдың, Әләксәйҙән алдыңмы әллә Трофимгә инденме? — тип һораштылар.

— Әләксәйҙән, Әләксәйҙән. Трофимдән алайым тип ингәйнем, үҙе лә бйк ҙурлап ҡаршы алғайны ла, нәмәһенә якын барырлыҡ түгел. Бынау ҡырҡ өс тинлек ҡаранан ҡырҡ ете тин һорай. Бер тин төшмәй, йөҙө ҡара. Шунан ҡатынға бер баш яулығы ғына алдым да сығып киттем.

— Не ходи, Әләксәйҙен, тауары гнилай, тигән була. Мин инде уйлап-уйлап торҙом да, гнилай булһа, гнилай булыр, быға биш-алты тинде әрәм ебәргәнсе тип, Әләксәйгә киттем.

— Шулай итмәй ни. Трофим борондан да һаранараҡ кеше лә ул. Анау бер йылды минең бер һум ҡырҡ тинде күрәләтә йотоп китте бит!

Улар шулай хәбәр арты хәбәр һөйләп, Үмәрҙең алып ҡайтҡан бер бау ҡаласы, бер ҡаҙаҡтай монпасие, Муйылдын. май-ҡаймағы, сөсө икмәге менән оҙаҡ итеп, самауырҙы өҫтәтеп-өҫтәтеп, бер сирек маҡтаулы аҡ ҡойроҡло сәйҙе бөтә яҙғансы эсеп таралдылар.

Муйыл ишек төбөнә йыйылып киткән бала-сағаны ла буш ҡалдырманы. Ҡалас һындырып, йә баҙар икмәгенән берәр телем икмәк, йә берәр монпаси өләште.

Ҡыҙ-ҡатындар был ирҙәр ҡайнашҡан көндө һырттан, өй тирәләренән, Гелйөҙөмдән генә һорашып таралдылар.

— Атайың нимә алып ҡайткан, Гөлйөҙөм?

— Миңә күлдәк, әсәйемә күлдәк, үҙенә кәзәкей... — Гөлйөҙөм барыһын да берәмләп һанап сыға. Ҡайһылары уға риза булмай, төҫтәрен һораша, хаҡын белешә. Аршыны егерме биш тингә төшкән ҡыҙыл сатин күлдәкте күргеләре килеп күҙҙәре яна. Иртәнсәк сәйҙән һуң Муйылдың саҡырып баҙарлыҡ сәй эсереүенә ышаналар:

— Атаҡ, оҙаҡлап киттем. Ярар инде, иртән күрербеҙ әле, — тнп югереклэп ҡайтып китәләр.

Уларҙың бөтәһен оҙатып. бөткәс кенә, Муйыл саҡ бушанып, самауыр яңыртып, үҙ семьяһы менән сәй эсергә ултырҙы. Ул сәй янына етеле шәмде яғып һандыҡ еҫтөнә ултыртты ла нәмәләрҙе ҡутарырға тотондо:

— Ҡана әле, нәмәләрҙе күрер ҙә әмәл юҡ. Халыҡ -кайнашты ла киттесе. — Ул был һүҙҙәрен ҙур бер эрелек менән күршеләрҙең үҙҙәренең байлығын күрергә йыйылғандарына маһайып әйтте. Үмәр ҡарт та бәтә тәҫә менән ризалыҡ күрһәтте:

— Әйҙә, кешенең килгәне яҡшы ул. Күрһендәр. Нәмәнең насарын алырға тырышылманы инде. Баҙарҙа Хәйҙәр бажа ла күргәс: «Ай-һай, бажа, ҡыйратканһың, әллә Айҙаҡай ауылында үҙеңә бер лавка асырға уйлайһыңмы?» — тип көлә. Икәүләп трактиргә инеп сәй эстек. Мин әйтәм: «Йыл да алына торған нәмәләр түгел бит, . урожай йыл тура килгәндә бөтәйеп ҡалырға кәрәк», — тим.

Ул Гөлйөҙемгә алған күлдәклеген алып ҡыҙына күр-:һәтә:

— Бына, ҡыҙым, яратһаң, үҙең әйтеп ебәргән ҡыҙыл-,ды алдым, — тине.

— Әйбәт бит, ни эшләп яратмайым, — ти.

Атаһы быға тағы ла нығыраҡ риза булды.

— Мин алғас, ҡыҙым яратыр. Мин униң ниндәйҙе яратканын беләм бит. Ҡыйбат булһа ни, булһын. Янғыҙ ҡыҙымды кейендерергә генә аҡсам етер әле. Киләһе баҙарҙа йәшел бәрхәттән кәзәкей алам, бәлки, берәй сәсәкле яулыҡ та алып булыр.

— Атай, шунда күлдәгемә төрләләккә таҫма ла алырһыщ, яраймы?

— Алырмын, ҡыҙым, алырмын, биш-алты төрлөһөн,— ти атаһы.

Улар сәйҙе шулай йылы һүҙҙәр, матур өмөттәр менән эстеләр. Сәйҙең аҙағына табан:

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип Тимерғәле ҡарт килеп инде.

— Вәғәләйкүмәссәләм. Әйҙә, ҡорҙаш, әйҙә, юғары уҙ. Бәләкәс яманланҡырап киләһең дә килеүен, ярай инде, маҡтаған сағың да булыр әле, әйҙә, — тине Үмәр.

— Юҡ, ҡорҙаш, яманлау ҡайҙа ул. Әле, ана, Ныязғолға бойҙай иләп йөрөп һунға ҡалып киттем. Булмаһа, һине ҡайтты тип ишеткәс тә киләйем тигәйнем.



Гөлйөҙөм Тимерғәле ҡарттан оялып тороп китте, урталағы ҡыҙыл шаршауҙы тәшөрөп, мейес артына сыҡты. Муйыл һөйләшмәһә лә, яулығын йыйнаштырып, еңдәрен түбән һыпырып, башын түбән баҫты. Шунан, сынаяҡҡа сәй яһап, ҡартына шыбырҙаны:

— Мә, ҡунаҡ алдына ҡуй.

Гөлйөҙемдө ҡарттың былай һунға ҡалып янғыҙ килеүе- ҙур ҡурҡыныстар, билдәһеҙ шатлыҡтар ҡатыш тулҡынлы уйҙар тыуҙырҙы. «Ул ебәргәндер, Яланбика әйткәйне... Атайым ни тиер икән. Бирһәләр?.. Бирмәһәләр?.. Ул Исхаҡ ағай менән урамдан үткәндә, мин ҡарап: торғанды күрҙеме икән, юҡмы икән?.. Күргәндер әле,. Исхаҡ ағай көләп ҡараны. Ул да күргәндер инде. Күрҙе шул! Ни эшләп ул килмәне икән Ьун?.. Әллә яратмаймы икән, әле Тимерғәле олатайым яусы ла булып килмәнемеикән? — Гөлйөҙөмдөң бер шатлыҡ, бер ҡайғы, бер ҡурҡыуҙар мен-әп тулған был уйҙарҙан йөрәге дөпөлдәне. Ул: арлы-бирле ҡаҙан тирәһен йыйыштырып маташҡан бул~ .ды. Ләкин ҡулы эшкә барманы. — Исмаһам, Яланбикәһе лә килмәне бит...»

Ҡарттар сәйҙән һуң яйлап баҫып ишек алдына сыҡтылар. Үмәр атын бесәнгә ҡушырға һарай яғына ыңғайланы. һарайға ингәнсе һүҙ һаман баҙар тураһында: булды. Ат һарайына инеп утлыҡсаға ҡатар ултырғасҡына, Тимерғәле ҡарт үҙенә тапшырылған мөһим эш тураһында һүҙ башланы:

— Ҡорҙаш, мин һиңә юҡ-юҡлап, балағымды тыштан: һалып, саталы таяҡ таянып килдем.

— Ярай, хәйерлегә булһын.

— Юғымдың һеҙҙә табылғаны яҡшы булыр ине. Атабабанан ҡалған йола — ҡыҙ бирмәк, ҡыҙ алмаҡ бар...— Тимерғәле үҙенең бөтә һүҙ оҫталығын юлға һалды. Ә* Үмәр униң һүҙе бөткәнсе, төрлө уйҙарға батып, ҡорҙашыныц кемдән яусы булып килгәнен сисергә аҘаплаиды.. Униң уйына быға тиклем ҙур өмөттәр биргән Моратша_ бай килде. Ул булһа, ҡайҙан бер ҡатыш-сатышһыҙ Тимерғәлегә барып сыҡһын... Әле униң был ауылға ҡабат килгәне лә ишетелмәй ине. Шулай ҙа ул униң һүҙен бүлмәне, түҙемһеҙлек менән көттө. Тимерғәле ҡарт, һүҙен алыҫтан уратып килтереп, төп маҡсатка килеп текәлде:

— Юғын юҡлап йөрөгән бала, арыу бала. йәш егет-Айбулат. Әллә ни алҡынып ятҡан байлығы булмаһа ла, көн күрерҙәй яйы бар. Эсмәй, тартмай. Яҡшы ата бала-

һы. Тоҡомона һүҙ тигеҙерлек түгел. Бөрйән тоҡомо. Әгәр күңеленә оҡшатҡандай булһаң, ҡыҙың еткән. Алла сәстәрен бәйләгән булһа, бай һүҙенде ишетәйек.

Тимерғәле һүҙенен. осо күренмәһә лә, был тәңгәлгә •еткәс, Үмәр түҙмәне, уны бүлде:

— Ҡорҙаш, тел тебеңә ҡарағанда, ниәтендең ҡайҙа барыуын төшөнөп торам. Мин һнне аталы, әсәле, йортло, •«рле бер кеше балаһынан килгәнһеңме әллә тип тыщлап ултырһам, һин төптө бер юҡ урындан килеп һүҙ асҡанһың икән. Ҡорҙаш, күңеленә ауыр алма, минең кетөүсегә бирергә тип үстергән ҡыҙым юҡ, — тине. Тимерғәле ҡарт бирешергә уйлап та ҡараманы:

—- Улай кефер һөйләүен. ярап бөтмәс, ҡорҙаш. Йәшең алтмышҡа табанлағанда, аҡылһыҙ йәштәр һүҙен һөйләйһең. Айбулат улай һин уйлағанса шыпа ҡоро ҡул ҡайтмаған. Ул донъясыл бөтмөр егет. Ҡулындағы байлығы һинең туй мәһәрҙәренде ҡапларға түгел, ике-өс йыл сүп ҡайырмай эшһеҙ ятһа ла, етерлек. Буш ҡул менән һинең һымаҡ арыу кешеиең балаһына ынтылырға башына тай типкән аҡылһыҙ бала түгел ул. Өйө лә бар. Быҙаулы танаһы бар.

— Бик белеп торам, ҡорҙаш. һанға һуғып килеүеңә бик рәхмәт. Мин үҙ һүҙемде әйттем инде.

Ләкин бындай яуаптың бик мөмкин булыуын алдан уйлап килгән таһыллы яусы әле теҙемгә индерә башламаған бик күп һаҡлыҡ дәлилдәрен дә юлға һала башланы:

— һүҙҙе улайтып уртанан һындырырға ярамай. Талды ла ҡапыл һындырып булмай. Хәйерле эште яҡшы һүҙҙән башлаған яҡшы. Көтөүсе булһа ла, яҡшы ата балаһы. Әҙәм балаһы тыумыштан маңлайына яҙғанды күрмәй булдыра аламы. «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигәндәй, һәр кем үҙ муйь/нына төшкән бурысын үтәй. һин бөгөн бай, иртәгә ярлы. Иәки бөгөн көтеү көтһә, иртәгә әллә ниндәй данлы ир булып китеүе бар. Быша Ныязғолдан ғына ғибрәт алайыҡ: әле ҡасан ғйна үҙебеҙҙен, тиң тигәндәй үҫеп, бергә бесән сабып йөрөгән егет ине, хәҙер ҡайһылай булып китте. һонолоп һыу ҙа эсмәй.

— Ҡорҙаш, инде ни генә әйтһәң дә, Ныязғол үҙ урынында, Айбулат үҙ урынында. Күреп торабыҙ бит, Ныязғолдоң байлығы Айбулатҡа буласағы юҡ. «Мал ҡәрендәш түгел, йән ҡәрендәш» тигәндәре шулдыр инде. Ике бармаҡ кеүек бер туғандан тыуған кешеләр, береһе байығып донъя рәхәтендә йәшәй. Икенсеһе урыҫ байы тупһаһында тилмереп мал көтә. Инде ҡалай итеп мин шул кешегә берҙән-бер ҡарап торған ҡыҙымды бирәйем, ти. Күнеленә ауыр алма, тал бөгөлгән ерҙән һынмаһа', быуынһыҙ ергә бысаҡ һалып та бер эш тә сыҡмаҫ.

Улар оҙаҡ һөйләштеләр. Уны-быны абайламаған Муйыл ҡыҙынан урын һалдырҙы ла, шәм һүндереп, йоҡларға ятты. Ләкйн Гөлйөҙөм үҙенең бөтә йәшлек зирәклеге менән ҡарттарҙын. был ултырыштарынан һүҙҙең үҙе тураһында барғанлығын аңланы. Ул, ейҙә унан-бынан йыйып, үҙенә ҡашаяҡ яҡҡа урын һалып, шаршауҙы төшөрҙе лә ипләп кенә өйҙән сыҡты. Ул, бейек дағалы матур ҡара итектәренең күтәрмәһе эсендәге сылтырауыҡты сылтыратмаҫ өсен, сысҡан ауларға барған бесәй һымаҡ ҡына баҫып, ҡураға инде. Ҡысыҡ ишеккә ҡолағын һалып, атаһы менән Тимерғәле ҡарттың һүҙҙәрен тыңланы. Уларҙың бик һаҡ ҡына һөйләшкән һүҙҙәре ҡуйы ирҙәр тауышы менән гембөрҙәп ишетелә ине. Тура ҡырҡа һүҙҙәрҙән бигерәк, күбеһе кинәйәләрҙән торған был кирәште Гөлйөҙөм тулыһынса аңлай алманы. Тик аҙаҡҡы һүҙҙәрҙе генә ишетеп, бөтә йөрәгенә өмөт шатлығы тейәп, тын да алмай, аяҡ ослап.баҫып, ҡуранан сыҡты. Ул ишеткән аҙаҡҡы һүҙҙәр атаһының төшенкө тауыш менән, тик Ти-. мерғәле ҡарттың кеше еңмәҫ оҫта теленән ҡотолор өсөн тигәндәй әйтелгән һүҙҙәр ине.

— Инде, ҡорҙаш, оло башыаҙы кесе итеп килеүеңә рәхмәт. Ашыҡҡан ашҡа бешкән, ти. Уйлашайыҡ әле. Ҡыҙҙын, әсәһе лә, ағай-энеләре лә бар. Муллағә ла әйтеп үтеү тейеш. Ҡыҙҙыщ йәше никахҡа яраймы, юҡмы. Ат ҡыуа торған алыҫ ер түгел. Аҙаҡҡы һүҙемде иртән әйтермен, — тине.

Тимерғәлегә шул ғына кәрәк ине. Ул быға ихлас күнде:

— Эйе, эйе, дөрөҫ. Ашығыу ул шайтан эше. Улай өтеп-ҡырып һөрлектөрөп йығайым тигән уй менән килмәнем. Ундай өлкән эштә кәңәшһеҙ буламы? Шулай-шулай, — тине, яйлап ҡына урынынан торҙо ла ипләп кенә һарайҙан ҡураға, ҡуранан ишек алдына сыҡты. Үмәр ҡарт уны оҙатып мөйөштән кире әйләнгәндә, Гөлйөҙөм солан ишеге артына ышыҡланды. Шунан ҡабат сығып, силәктәрен шалтыратып йыйыштырған кеше булып, келәткә ыңғайланы. Атаһы уны күреп, һаман йоҡламағанына аптыраны:

— Ни эшләп әле булһа ятмайһың, ҡыҙым? Бик һуң бит инде.

— Хәҙер ятам, атай. Бынау усаҡ keләтен йыйыштырып йөрөнөм дә.

Үмәр аҡрын ғына уйлана-уйлана өйгә инеп китте. Гелйеҙөм ҡурҡышынан да, шатлығынан да һуккан йөрәген баҫып, үҙалдына йылмайҙы. Келәттәге һерөмләнеп һүнеп барған сепрәк манып яндырған туң май шәмде, ел һүндермәһен тип, ҡулы менән ҡаплап тотоп, келәт.чшеген бикләп боролғанда, келәт мейешөнән:

— йөҙөкәй, — тигән һаҡ тауыш ишетте. Ул тәүҙә ҡурҡып китте. Ләкин май шәм яҡтыһына ашығып атлап Исхаҡ килеп сыҡты:

— Был мин, Иөҙөкәй. Мә, һиңә Айбулат бирҙе, — тип күҙ асып йомғансы уньщ ҡулына бер бәләкй генә 'төйөнсек тотторҙо ла шунда уҡ, йәнле күләгә кеүек, келәт артына китеп тә юғалды. Гөлйәҙем бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Тик Исхаҡтың биш билле ҡара кәзәкейен, ҡыҙыл таҡыяһын, йыуан ҡуңыслы итектәрен арттан ғына күреп өлгөрҙө. Келәт артында шым һөйләшеп ашығыс атлап китеүҙәренән ул Исхаҡтың яңғыҙ түгел икәнен төшөндө. Уның йерәге тағы ла нығыраҡ һукты. Ни өсаңдөр, ул был юлы, башҡа ваҡыттарҙағы кеүек, әллә ниндәй кешеләрҙән ҡурҡыу урынына, келәт артындағы аяҡ тауышының үҙенең яҡын кешеһе, бөтә йәй буйы һағынып кеткән, көндөҙ урамдан үткән, бер генә минутка күҙҙәрен осраткан үҙенең Айбулатының аяҡ тауыштары икәнен адланы. Ул был шатлыҡтан ни эшләргә белмәне. Эсенә һыймаған тынын тәрән итеп көрһенөп сығарҙы ла ҡулындағы май шәмгә өрҙө. Ул, елпелдәп, йығылырға теләмәгән һымаҡ, бөгөләп-бегөләп һүнде. Ул бер ҡулына май шәмле шәшке аҫтын, икенсе ҡулына ҡулды яндырып барған кеүек эҫе күренгән төйәнсөктө тотоп өйгә инде лә, тиҙерәк сисенеп, урынына тәгәрәне. Әсәләре һиҙмәһен тип, иплэп кенә бүләк төйөндө систе. Эсенән сыҡкан еҫле һабынды еҫкәне, көмөш балдаҡты урта бармағына кейеп ҡараны, ҡулъяулығын һыйпаны, бөтәһен бергә урап, яҫтығы аҫтына төпкә йәшерҙе. Иртәнсәк урын йыйғанда ғына онотмаһам ярар ине, тип уйланы. Щунан ҡыуанып юрғанға уранды. Ләкин күҙгә йоҡо килмәне.

Быға тиклем һис таныш булмаған әллә ниндәй көслө тойғолар Гөлйеҙөмдөң бөтә барлығын ҡаплап алдылар. Ул күҙҙәрен йомоп ятып ҡараһа ла, Айбулаттын, ҡуйы



ҡара сәстәре, тәрән уйсан күҙҙәре, ҡупшы төҙ кәүҙәһе күҙ алдынан китмәне. Яңы атҡан ал сәскәгә өрөп иркәләгән яҙғы таң еле һымаҡ, беренсе һейөүҙең күренмәҫ йылы тулкындары уның йәш йөрәген иркәләп бәүелттеләр...

Гөлйөҙөм, таң яҡтыһының аҡһыл шәүләләре өй эсенә һуҙылғас ҡына, йоҡоға китте.

## ҺУҒЫМ ҺУЙҒАС

Ныязғолдоң ҡара ҡаршы торған өлкән-өлкән ике ағас өйе арт яҡтан оҙон ситән кәртәләр, таш келәттәр, кирбес-ҡура", ат һарайҙары менән уратып алынған. Был дала кеүек йәйелеп киткән кәртәнең ей тирәһендәге әйләнәһе генә ҡара таҡыр булып тапалған, ә кәртә янындағы аласыҡка табан'бара торған тар берләм юл ҡырау һуккан ҡаҙ үләндәре араһында уҡа һымаҡ ағарып ята.

Ныязғолдоң бөтә ей эсе көтөү-көтөү мал менән йәйләүҙә ятып, бер-ике йома элек кенә ҡышлауға күсеп. ҡайтҡанға күрә, ҡура-тирәләрҙе әйләндереп баҫып үҫкән эре алабуталар тапалмайынса, кеҙгө ҡарлы һыуыҡҡа ҡатып ултыралар. һарайҙар артындағы йәй буйы ҡошҡорт тауыштары сыуылдап торған тирәктәр, сылтырап аҡкан шишмә тауышы хәҙер инде тынып ҡалғандар. Тик шишмәне аша сығып Ырғыҙға китә торған һыу юлының ике яғындағы түмсәйеп яткан бейек күндек өҫтөндәге ала еәүкәләр генә, ҡарҡылдашып, Ныязғолдоң кисә һуйҙырған ҡаҙыяһы ая сыҡкан һимеҙ тыу бейәһенең боғаҙ ҡаны сәсрәгән ерҙә, мәке янында — эсәк-ҡарын йыуған урындарҙа, бер ерҙән икенсе ергә һикерәнләп, осоп-ҡунып йөрөйҙәр.

Бөген бына шул бейәнең ите Ныязғолдоң ике өйөнөң һәм аласығының ҡаҙандарында борҡоп ҡайнай, ҡуйы күк төтөндәре мөрйәләрҙән ҡабарып-ҡабарып сыға. Ҡаҙы, ял, һимеҙ ит еҫтәре, ел түбәне ынғайына боролдап, танауҙы ҡытыҡлап, ауыл урамының түбәнге һарҡыуына һирпелә.

Мәғфүрә ошо тымыҡ көндөң һалкын һауаһына һирпелеп урамға йәйелгән күкһел аҡ болоттарға ҡаршы — Ныязғолдарға табан атланы. Ул, елкән бисәгә һейләй торған һүҙҙәрен барғас нисек итеп һәйбәтләп теҙеп әйтергә әҙерләгән һымаҡ, ҡайһы саҡта шәберәк, ҡайһы

саҡта әкренерәк атлай. Ул, көпөһө ҡуйындарын ҡымтый-ҡымтый, сәстәрен яулыҡ аҫтына йыйыштырғылап, ирҙәр юкмы икән, тип һаҡ ҡына баҫып, ҡапҡаэсенәинде. Ишек алдында ситтән килгән ҡунаҡтарҙың ҡайһы туғарылған, ҡайһы туғарылмаған аттары, кырандастары тора. Аттар янында күсерҙәр шаулашып йөрөйҙәр. Мәғфүрә, уларҙан артыҡ тартынмай үтеп, аш аласығына инеп китте. Унда өс ҡатын-ҡыҙ ҡабалана-ҡарһалана усаҡ, ҡаҙан тирәһендә ҡайнашалар ине.

Мәғфүрәнең бөтәһе менән бер юлы һаулашыуына урындыҡ ситенә ултырып бер табаҡ итте турашырға әҙерләнгән Рәхимә:

— Бик шәп әле, Мәғфүрә килен. Үҙең һау ғына йөрөйһөңмө? Бик уңай тура килдең әле. Бына бөгөн тирәяҡ күршегә һуғым ашатайыҡ, йәйләүҙән иҫән-һау ҡайтыуға ҡарттарҙан бер доға алайыҡ, тип ҡайнашып ятҡан көн әле. һине кисә үк ебәртеп алдырайым тигәйнем дә, бала-саға тапманым. Ҡарын алғанда килендәр етешә алмай ҡырын-ҡыйҡыу булдылар. Әйҙә әле, анау мейес һикәлтәһендәге салғы бысаҡты алып яныма ултыр. Бынау итте икәүләп турай һалып алайыҡ. Килендәр һалманы ҡырҡып алһындар. Ату ҡатып бара. Миңлекәй анау бала-сағаны уҡытырға урынлаштырайым тип киткәндән ҡайтк-аны юҡ. Ҡалаға, үҙ ағай-әнеһенә барғас ни, яйлап ҡунаҡ булып тик ята инде.

Мәғфүрә байбисәнең был һүҙҙәренә, үҙенә эш ҡушыуына кинәнеп, уның һәр ваҡытта үҙен маҡтап, аш-һыуға оҫтаһың тип һейләүенә зстән бик риза булып, уның йомоштарын тыңлай ине. Әле лә ул, юлымдың ундарына булһын, тип юрай һалып, йылмайған, асыҡ йөҙ менән:

—• Кисә ни, ҡәйнешем ҡайтҡас, бушай алманым. Киләйем тип әллә нисәмә уҡталдым, ецгә. Кеше ебәртмәһәң дә, һуғым һуйғас, өй мәшәҡәте күп булырын белеп торҙом инде, — тине. Үҙе йәһәт кенә көпөһен сисеп ташлап, күлдәк еңенең тирәһендәге йыртығын йәшерә-йәшерә һыҙғанып, бысаҡ алып ит турашырға тотондо.

Байҙың килене Фариза, ҡаҙан аҫтындағы тиҙәк ҡуҙҙарын ҡуҙғатып, ҡырҡкан һалмаларын һалып, һурпа ла ҡайната башланы.

Уртансы бисә Ғәзимә, ғәҙәттәге һытыҡ сырайы менән Мәғфүрәгә һүҙ ҡушмай, ҡабағын тексәйтеп бер генә күҙ һалды ла үҙ алдына ҡуйылған бер оло табаҡ итте турауында булды.



Мәғфүрә үҙенең йомошо тураһында һүҙ башларға бик уңай булғанын, тик Ғәзимәнең генә бында булыуы оронсоҡлағанын уйланы.

Улар итте турап бөтөп, ике елкән ҡоштабаҡка ейөп, урындыҡ ситенә шылдырҙылар. Рәхимә ҡулындағы бысаҡты Мәғфүрәгә бирҙе:

— Ҡана, килен, һин оҫта яный торғанһың, ҡаҙан ҡылысына ғына ошоно бер-ике тартып бир әле. Тел дә ҡыймай башланы бысағым. Асатайҙың үткерләүе лә шул инде, — тине.

Мәғфүрә бысаҡты ҡаҙан ситенә шыйылдатып бер нисә тартып яныны ла Рәхимәгә кире һуҙҙы:

— Үтә шикелле, — тине ул.

Рәхимә, өлкән биҙәкле батмуста уралып-уралып, йыуан булып күпереп ятҡан оҙон ҡаҙыларҙы, һарғылт булып майы һарҡып торған ял киҫәктәрен ипләп кенә телемләп ҡырҡкылай-ҡырҡкылай: ,

— Быna, исмаһам, үтеп ҡалды, — тип кинәнде.

Ғәзимә:

— Мәғфүрә килен яһил бит ул. Яһил янып үткәрә, тип шуны әйткәндәр ул, — тине.

Ғәзимәнең төртмә теленә күнеп бөткән Мәғфүрә был һүҙҙәргә иғтибар итмәне. Байбисә лә был һүҙгә ҡыҫылманы. Мәғфүрәнән:

— Йә, Ҡотлояр һау ҡайтканмы, өҫтө-башыңыҙға ала алғанмы? — тип һораны.

Мәғфүрә иренең иҫән-һау ҡайтканын, әллә ни арттыра алмағанын, берәр ҡат күлдәктән башҡа нәмә алып ҡайтмағанын зарланмаған төҫ менән генә һейләп алды. Ул иренән бер ваҡытта ла зарланманы. Уның көнө-төнө рус баярының йылҡы көтөүе артынан арып-талып йөрөүен йәлләп һөйләй. Үҙҙәренең етешһеҙ, аслы-туҡлы үткәргән ярлы тормоштары тураһында һөйләргә лә ғәрләнә ине.

Уртансы бисә бында тағы ла сәнсеп ҡыҫылды:

— Ҡотлоярҙың ни унын, эт ялҡауы, тырышкан тиһегеҙме? Эсеп-туҙҙырып йөрөгәндер шунда, — тип бик урынлы һүҙ әйткән һымаҡ көлөп ҡуйҙы. Мәғфүрә ирен яҡлап Ғәзимәгә әллә ниндәй һүҙҙәр әйтеп ташлағыһы килһә лә, эсенән генә тынды.

— Әллә инде, ирҙәрҙекен белмәҫһең, — тине ул.

Рәхимә, ҡаҙы-ялдарҙы турап бөтөп, бер төпсек ҡаҙыға бер ҡырҡым ит ҡушып Мәғфүрәгә бирҙе:

— Мәле, килен, һоғон әле. Үҙең былтыр һауған тура бейәнең итенән ауыҙ ит. Быйыл тыу йөрөп яҡшы һимергән икән хайуан, — тине.

Мәғфүрә:

— Ҡуйсы, өлкән еңгә, ҡунаҡтар ашамаҫ борон ни,— тип саҡ ҡына артҡа тартынды. Рәхимә уны ҡыҫтаны:

— Йә, ҡунаҡтар килер ҙә китер, ҡап, ҡап.

Мәғфүрә шунан һуң ғына уның ҡулынан һоғондо. Ул арала һалма бешеп өлгерҙе, Фариза уны бер силәктәге боҙло һыуыҡ һыуға сулпы менән һоҫоп тешөрҙе лә, арала һында ойошҡандары булмаһын тип, уларҙы аралай-аралай, ҡәйнәләре эргәһенә урындыҡ еҫтөнә килтереп ҡуйҙы. Рәхимә ҡушыуы буйынса, Мәғфүрә һалма менән итте табаҡтарға яһап, һурпа эҫеләп, уның алдына ҡуйҙы. Рәхимә был ит өҫтөнә үҙе тураған ҡазы-ялдарын бик тигеҙләп теҙеп, уның өҫтөнә сыҡҡансы һуған тураған майлы тоҙлоҡ ҡойоп әҙерләп бөткәс, ирҙәр йыйылған өлкән өйгә аш өлгерөүе тураһында хәбәр иттерҙе. Мәғфүрә ошо аранан файҙаланып, Айбулаттың да кисә көтәүҙән ҡайтҡанын, аҙ-маҙ аҡсаһы булғанын, берәй кәләш алып башлы-күҙле булырға уйлауын һөйләп алды.

Ләкин Рәхимәгә был хәбәр оҡшаманы. Айбулаттың ситтән ҡайтып та, бер туған тигәндәй ағаһына, еңгәләренә килеп сыҡмауына кәйефе ҡырылды:

— Бына бит ул ҡайһылай ят бауырлы. Бер ҙә беҙҙең кешенең ҡылығына тартмаған. Торғаны менән Сәлимә еңгәм, бахыр, ҡырыҫ. Ошонда килергә, һаулыҡ һорашырға, яманмы, яҡшымы, ағаһы бит, хәлен белергә кәрәк ине. Һис тә олоно оло итә белмәй бит, сусҡа, — тип орошоп алып китте.

Мәғфүрә уны төҙәтергә тырышты:

— Киләм тигәйне ул, өлкән еңгә. Мин, кешенең мәшәҡәтле сағы тип, уға бөгөн килмәҫкә ҡуштым. Әле бына шуға күрә, мин һеҙгә барам тигәс, ул һинә бер юлы кәнәш итеп ҡара әле тигәйне.

Рәхимә.кырт кисте:

— Кеше аша сәләм әйтеп ятырға, беҙ уның яты түгел. Килһен, күрешһен, һөйләшһен. Асыҡ сырайын, яҡты йөҙөн бирһен. Бүре һымаҡ аҫтан ҡарап, ситләп йөрөргә, беҙ уның атаһын үлтергәнме? — тине.

— Ҡунаҡтарҙың ҡулдарыш йыуҙырҙыҡ, — тип Асатай менән Әптеҫәхман килеп аштарҙы алып киттеләр.



Фариза, бер ҙур баш ыҫлаған ҡоротто иҙеп, бер ҡаҙан һурпаны ҡатыҡлап, борос һибеп, ҡыҙыл саған туҫтаҡ менән ҡәйнәһенә тәмләп ҡарарға һуҙҙы. Рәхимә, һүҙен бүлә-бүлә, һурпаны эсеп ҡарап:

— Бәләкәс тоҙо еңелерәк, һальвдкыра, — тине.

Мәғфүрә Рәхимәнен, ярһыуы баҫылғансы өндәшмәне. Ҡунаҡтарға әҙерләнгән елкән-елкән өс самауырҙың тояҡтарын, ҡолаҡ тептәрен, боҙлоҡ тирәләрен һөртте. Көбәгенә бер нисә тапҡыр өрөп ҡуйҙы.

Рәхимә сәс үрмесенә таҡҡан биш-алты тимер, еҙ асҡыстарҙы шалтыратып әйләндереп алдына һалды ла, мөйештә ултырған ҡара һандыҡты асып, өс сәй сәйнүгенә услап сәй һалып, Мәғфүрәгә бирҙе:

— Һыу ал да усаҡтың һүрән ҡуҙғынаһын тартып ултырт, ҡайнатмай ғына ҡабартып ал. Сәй ҡайнаһа, тәме бөтә уның.

Үҙенең килененә лә бойороҡ бирҙе:

— Сапсан бул, килен. Ҡайнын, үҙе ҡуҙғалып сығакүрмәһен, оят булыр. Ни быҙмырлайһығыҙ, тиер. Ҡана, тиҙ генә келәттән юкә бал тәпәнен индерә һалып, кәрәҙле бал тумыр ҙа, ана, өлкән таштабаҡтарға һалып бир. Ҡунаҡтар һурпа эсеп бетәләрҙер инде. Асатайға еҙ ҡомғанға йылы һыу ҡойоп, еҙ тас менән ҡыҙыл башлы таҫтамалды бир. Ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырып алһын. Ыңғайында һигеҙ таштабаҡҡа һары май тултырып индерергә онотма.

Мәғфүрә менән килен Рәхимәнен, бөтә ҡушҡандарын йәһәт эшләп торҙолар. Уртансы бисә шәшкеләр һөртөп батмустарға теҙҙе. Өлкән өйҙөң ишегенән аш өйөнә әле байҙың улы, әле ялсы Асатай менән күрше Әптерәш алмашлап кнлеп нәмәләрҙе ташый торҙолар. Килендәр югергеләп әҙерләп өлгөрттөләр.

Бай улы, сәсен артҡа ебәреп, йондоҙло кәләпүш кейгән. Уның бурҫлаҡ һимеҙ йыуан бите, ҡалын ҡарағусҡыл ирендәре, йәше утыҙҙан уҙғанда үҫә башлаған ҡорһағы, ауыр кәүҙәһе эштең ниндәй тығыҙ ваҡытында ла, мине көтөрһөгөҙ әле тигән һымаҡ, ашығырға теләмәйҙәр. Ҡыҫҡа ҡара бәрхәт кәзәкейенең көмөш ҡаптырмаларын, гамбр итегенен, ҡайтарма ҡуныстарын ялтыратып һәлмәк баҫып ишектән килеп инә лә йә бисәһенә, йә әсәһенә бер-ике һүҙ әйтә. Улар өтәләнеп яуап бирәләр. Әле лә ул, Асатайҙан алда йнеп, кеҫәһенән ҡулын алмай ғына:

— Иә, самауырығыҙ буламы? — тине.

Фариза боҫо борлап ултырған аҡ самауырҙы тиҙ г.енә соҡалаҡтан алып Асатайға һуҙҙы.

Рәхимә:

— Булды, балам, булды. Бауырһаҡтарҙы ғына алып ин, Мәғфүрә килен, тиҙ генә батмус менән шәшкеләрҙе алып бар, йәһәт булығыҙ! —тине.

Улар, шулай югерәкләшеп, һуңғы самауырҙы оҙаткас, • дүртенсе бәләкәй еҙ самауырҙы ҡуйып үҙҙәре сәй эсергә ултырғас ҡына, Рәхимә ашъяулыҡ янына иркенләп ултырып алды:

— Аллаға шөкөр. Аткарҙыҡ. Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ, үҙебеҙ ҙә тамаҡ туйҙырып алайыҡ. Иртән, алла бирһә, бисәләрҙе лә саҡырып сығарһаҡ, өҫтән ҙур бер йөк тешкәндәй булып ҡалыр ине. Иҫән-һау йәйләүҙән ҡайгкас, муллаларҙан, ҡарттарҙан хәйер-доға алмай булмай шул. Беҙҙең, Имаметдин ауылда ҡунаҡ саҡырыуҙы бик яратып бөтмәй ул. Әллә ни эшләп үҙебеҙгә оҡшамаған. Ҡаланан-ниҙән килгән татар, урыҫ-улаҡ булһа, кинәнә инде. Улар менән һин дә мин. Урыҫсаны һыу урынына эскәс ни, улар менән кинәнеп һөйләшә. Ауыл кешеләре менән әллә ниңә бер ҙә яҡмай шул.

Ғәзимә Рәхимәне йөпләне:

— Заманаһына ҡарап эш итә ул беҙҙең Имаметдин. Ауыл ҡарттары менән уның ни һүҙе килешһен, уҡыған кешенең.

Сәйҙе йогкан һайын Рәхимәнең тауышы тынысланды:

— Ҡотлояр ҡәйнеште саҡырып та булманы. һин уға алып ҡайтып булһа ла ашат инде. һыйлы аштан ауыҙ итһен. Үҙе бына саҡырғанды көтмәй ошонда килеп урағышып йөрөһә, бик ярар ине лә бит, әллә ни нәмәһенә уныһы ла ҡырыҫайып китте. Бер тоҡом тип әйтерлек түгел. Үҙе уйлап ҡараһасы, Бөрйән ырыуынан килгән һыуын тоҡомонан бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалдылар бит. Бына ҡайнағаң да Имаметдин. Айҙар ҡайнаға мәрхүмдең өс улы. Уларҙан тыуған унлап ир бала йәнен иҫәпләйек. Ҡотлояр. Инде анау ҡыҙ яғынан таралған ҡупшы «ҡара тундар»ҙы һанға ла индерә торғаны юҡ. Улар тоҡом нәҫелде лә онота башланылар. Онотмаһалар ҙа, «беҙ ҡыпсаҡтар» тип ата яғын ҡыуалар, танау буйҙарына ҡарап, юрға аттарға ултырып алалар ҙа сәләм дә бирмәй үтәләр. Улары эреләнһә, ярай инде, әҙәм шикелле хәлле көн итәләр. Бына Айбулатҡа асыуым бик



ҙур. Иыл буйы тигәндәй ситтә йөреп ҡайтып, килеп хәл белергә лә ярамай. Ярлы тәкәббер, кафыр. Мин уны ҡасан ситкә ҡаҡканым бар? Ағаһынан да уҫаллыҡ күрҙем тип әйтә алмаҫ. Мин, үгәй ҡәйнә булһа ла, унын әсәһе мәрхүмгә үҙ киленендәй булып ҡәҙер иттем. Сәлимә еңгәм, бахыр, үлә үлгәнсә: «Рәхмәт, килен, һинән күргән изгелекте алла ҡайтарһын», — тип алҡышланып ятты. Айбулатҡа шунын. ҡәҙерен ҡайтарырға кәрәк ине.

Мәғфүрә яһаған сәйҙе Рәхимә алдына ултыртты ла, башын баҫып, ашъяулыҡ ситен йомарлай-йомарлай яуап бирҙе:

— Айбулат ул эре түгел дә ни. Бала кеше ҡалай бекһәң, шулай, йәш тал шикелле бит әле. Мин уға яҙ башында уҡ, урыҫҡа эшләгәнсе, ағайындарға хеҙмәт ит, тигәйнем дә бит. Ул да ҡалырҙай булғайны. Тағы ла әллә ни эшләп Имаметдин үҙен орошҡаЕмы, һуҡҡанмы, шуға ғәрләнеп китте лә барҙы. «Мине кеше алдында һукты, — ти. — Кеше булмаһа, мин бер һүҙ ҙә әйтмәҫ инем»,— ти.

— һай-һай, харап булған икәң. Орошһа ла, һуҡһа ла, үҙ ағаһы бит. Ул тиклем күкрәк булырлыҡ ни нәмәһе бар. Кесе кешегә әҙерәк ҡаҡканды, һуҡҡанды ла күтәреп өйрәнергә кәрәк. Уның күргәне юкмы ни, Имаметдин ағаһы ҡаҙаҡ ялсыларын яткырып ҡамсы менән яра торғайны. Ә улар баштарын баҫып бер һүҙһеҙ «ағакәм» тип торалар ине ләбаһа. Ситтә йөрөп ни ҡыйратып ҡайгкан, һаман шул алама көпеһөлөр әле.

— Хәҙер ул үпкәһен оногкан шикелле инде. Бала кешенең кенәһе ни ҙә, үҙе ни. Еңгә, һин бер күреп үҙен аҙыраҡ ейрәтеп әйтһән., тыңлар ул. Әле бына аҙ-маҙ аҡса ла эшләп ҡайгкан. Әллә берәй ерҙән ҡыҙ әйттереп ҡарап, башлы-күҙле итһәк, үҙегеҙгә бер ҡулғамытлыҡ булырмы тип, ағаһы менән дә уйлашҡайныҡ әле. Тапкан хәрезе туйға етһә — мәһәргә, мәһәр бирһә—туйға етерлек түгел. Бөген килгән килеүем дә, өлкән еңгә, һиңә кәңәш итеп ҡарайым, тип уйлауым ине. Айбулат та, әйтеп еткермәһә лә, ҡаға-һуға ошоно аңлаткандай булды. Өлкән еңгәм ни әйтеп, ни ҡуйыр икән, тигән була. йәш булһа ла, төптән уйлай әле ул. Ағайымдар нисек ҡарарҙар икән, ти.

Мәғфүрә, шулай итеп, үҙенең бөтә тел оҫталығын йыйыштырып, үҙенсәләп иплән, яйлап һөйләп, Рәхимәнең күңелен йомшартырға тырышты. Рәхимә лә уның был һүҙҙәренән риза булып тауышын йыуашайтты:

— Беҙҙән эш ҡалмаҫ. Тик бына үҙе өлкәндә елкән итеп ҡәҙерләй белһен. Беҙҙең, аллаға шөкөр, байлығыбыҙ бар. Әгәр үҙебеҙгә ил булып -кырыҫланмай баш һалып килһә, ағаһы ла ситкә ҡаҡмаҫ. Ул беҙҙең үҙ ҡаныбыҙбит. Беҙгә сит ялсылар ҙа бөтмәгән. Тик йорттан һүҙ ишетеп тороуы яҡшы түгел. Кеше бит ул берҙе биш итеп һөйләй. Ана, ти, Ныязғол бай етем энеһен һыйҙырмай .урыҫ тупһаһында йөрөтә, байыған һайын һаранайҙы, ти, бит ул кеше. Кемдеке — уныҡы .Туп-тура килһен дә һейләшһен. Төбәгән ҡыҙы бармы, булмаһа, үҙебеҙ һайлап әйттереп бирербеҙ. Беҙгә тигәндә, берәүһе лә кире ҡаҡмаҫ.

Мәғфүрә эштең былай ыңғай яҡҡа боролоп китеүен» ҡыуанып, көлөп ебәрҙе. Айбулаттың Гөлйөҙөмдө яратыуы тураһында әйтергә уйлаһа ла, йә шайтан аралар, әлегә әйтмәй торайым, тип уйланы. Шуға күрә:

— Барҙыр инде ул. Егет кеше ҡыҙ күҙләмәй булмаҫ, — тип кенә ҡуйҙы.

Тен уртаһына тиклем Мәғфүрә уларға ҡунаҡ һыйлашып, эштәрен эшләшеп, һауыт-һаба йыйыштырып бөткәс, ҡәйнәһе ҡушыуы буйынса, Фариза уға бер сүлмәк ҡалған һурпа, һалмалы ит, мөнйөлмәгән һейәктәр, тураған-дан ҡалған ҡаҙы төпсөктәре күтәртеп ебәрҙе. Ул сыҡҡанда Рәхимә:

— Килен, иртән иртәрәк килергә тырыш. Бисәләр саҡырғанда кәрәк булырһың, — тип ҡалды.

## ИҪТӘЛЕКТӘР

Айбулаттың Ныязғол менән яаынан ҡатнашыуы. ана шулай башланды. Тәүҙә ике араны Мәғфүрә килештереп йөрөнө. Шунан Тимерғәле ҡарт килде. Ул Гөлйөҙөмдө һорап яусылай барҙы. Ләкин унан ҡыҙҙың атаһы Үмәрҙең яҡын да кидергә уйламағанын белеп ҡайтты.

— Белмәйем, балалар, булырлыҡ самаһы бер ҙә күренмәй. Мин барып инеп сәләм бирҙем: «Юҡ юҡлап йөрөйөм, ул һеҙҙә юҡмы икән?» — тип үҙебеҙҙең йола менән генә. һүҙ башлағас та, төҫө боҙолоп китте. Ҡыҙ тураһында һүҙ асҡас, ул: «Минең көтөүсегә бирерлек ҡыҙыш юҡ», — тип кенә ҡуйҙы. Танауын күтәргән. Моратша бай бит. һин дә, Айбулат улым, бик кенәсел булма. Байҙанаҡмаһа ла тама ул. Бер баш малһыҙ, ағай-эне ярҙамынан башҡа донъя көтөп китеүҙәре бик ҡыйын ул. «Эйелгән башты ҡылыс сапмаҫ» тигәндәр боронғолар. Ныязғол менән килешкәнен. яҡшы булыр. Үпкәләшмәй булмай инде. Шуның өсөн дә донъя бит ул. Гел һинеңсә генә булмай, һине һыртын. менән дә һөйрәтеп алып китә ул. Арыу ғына балаһың, үҙең өсөн әйтәм. Ныязғол бай, әле нисә әйтһәң дә, боронғораҡ кеше. ҒәҙЗт-йоланы, ағайэнелекте онотмай. Имайҙы әйтеп булмай. Кеше күңеле тип тормай, тотҡан еренән һындырып йәшәргә тырыша. Ул яны бай шул. Ныязғол ҡустыға ла һүҙ юҡ. Итәғәтле. Әле ана былтырғы, Ҡаратанау буйындағы сабынымды уларға биргәйнем. Имай шуның аҡсаһын бирмәй ошо көнгә еткерҙе бит. Ахыры, аптырап, Ныязғолға барҙым. Ауыҙымды ла астырманы. «Аҡса кәрәкме, ни кәрәк?» — тип тора. Мин әйттем: «Аҡса ла кәрәк кәрәген дә, шунда ла быйау еҙөк ваҡытта, онмо, бойҙаймы биргәнең арыу булыр ине», — тим. «Алдында булһын, ағай, тирмәнгә барып интегеп йөрөгәнсе, ҡарт кеше», — тине лә, ботона баҙарға ҡарағанда ун биш тин артыҡ һалып, өс бот он үлсәтте лә бирҙе. Ҡыйбатһынһам да, өндәшмәнем. Берәү теленән өҙөлөп, өлтөрәп торғас, ҡалай итәһең... Тормош ана шулай бит ул, балалар.

Тимерғәле ҡарт Иомаҡайҙан һәнәк һорап алды ла:

— Ҡура тирәмде йыйыштырайым әле, һүҙгә әүрәп оҙаҡ ултырып киттем, — тип өйө яғына юнәлде. Уны оҙатҡанда Айбулат бер ни тип тә ҡаршы әйтмәне. Ярар, олатай, тип тә ыңғай һүҙ ҡушманы.

Ҡарт тағы ла:

— Шулай ҙа тағы бер барып ҡарайым әле. Тик минең һүҙемде ҡолағыңа алғаның арыу булыр. Байҙар ҡатнашһа, Үмәр риза булыр ул, — тине.

Айбулат Мәғфүрәнең Рәхимәнән алып ҡайтҡан ҡалған ашын йылытып ашап ятҡас, усаҡ көлөндә быҙлап ятҡан сытыр ҡуҙының ваҡ-ваҡ ҡына осҡондарына ҡарап, усаҡ янында ятҡан өлкән һары бесәйҙең мырылдауын, Ҡотлояр менән Мәғфүрәнең мышылдап йоҡлауҙарын тыңлай-тыңлай, Тимерғәле ҡарттың ошо кәңәштәре тураһында уйланы.

Үҙе иҫ белгәндән бирле Ныязғол өйөнән күргән нужалары бөтәһе лә күҙ алдына килде, йәне әсене. Ныязғол, Айбулаттың атаһы Айҙар үлгәс, уның опекуны булып алды ла, уның йәшлегенән файҙаланып, уға тейгән ике душ ерҙең бөтәһен дә үҙе биләне. Ул үҫеңкерәгәс, уҙем

 

сәсеп бирәм тигән булып, унын ерена иген сәсте, бесәнен сапты, үҙен, эт итеп тигәндәй, ялсы урынында эшләтте. Айбулат менән әсәһенә, һеңлеһенә йылына ни бары ун биш-егерме бот иген, малға етер-етмәҫ бесән, күп ваҡытта һалам, әүрәү бирә килде. Айбулаттың бөтәһенән дә нығыраҡ асыуы килеп хурланыуы бынан өс йыл элек шундай бер ваҡиғанан булды: ул, әсәһе үлгәс, уны ерләргә тип, югереклэп йөрөгәндә, Ныяҙғол, үҙе саҡыртып алып, уға кәфенлек алырға тип биш һум аҡса бирҙе. Фидиәгә муллаға үгеҙ башмағын бирергә кәңәш итте. Сәлимәне күмешергә йыйылған халыҡты йәймәгә саҡырып, мулланан аят уҡыгканда, Рәхимә үҙе, илаулап йөрөп, уларҙы һыйлашты. Ҡөрьән сығырға тип муллаға бер ҡаҙын бирҙе. Айбулат ул ваҡытта уларҙың был изгелектәре өсөн әллә няндәй рәхмәттәр әйтергә, әллә ниндәй яҡшылыҡтар зшләргә уйлағайны. Ләкин был эшкә ярты йыл да үтмәне, Имай, Айбулатты саҡырып:

— Иә, ҡустым, утыҙ һум бурысынды ҡасан түләйһең? — тине.

Айбулат аптырап китте:

—. Ниндәй бурыс ул, ағай?

Имай, ҡаласа ҡырҡтырған текә керпе сәсен артҡа һыйпап, ауыҙындағы папиросты ҡырын тешләне лә ялтыр ҡара битен Айбулатҡа борҙо. Былай ҙа ҡапыс күҙҙәрен нығыраҡ ҡыҫып, контора лавкаһының бейек һикеһенә ашыҡмай ғына һикереп менеп ултырҙы ла бик һалҡын ҡан менән генә иҫәплэй башланы.

— Ниндәй бурыс булһын, әллә оноттоңмо? Әсәйеңә кәфенгә биш һум аҡса, — ул бармаҡтарын бөгә барҙы, — • уны күмгән көндә йәймә бешерергә киткән он менән майға бер һум һикһән тин, өсөн уҡыганда бешергән тәкә өС һум илле тин, етеһен уҡығанда ете һум, ҡырҡын уҡығанда 13 һум- (хәҙрәт килгәс, расход күберәк булды), гур саҙаҡаһына тигән -ҡаҙ, еләшкән хәйерҙәр... бына үҙең иҫәплэп ҡара.

Айбулаттың башына һуккан кеүек, битенә түкөргән кеүек булды. Ниндәй генә бурыс тураһында уйлаһа ла, әсәһен ерләгәндә хоҙай өсөн киткән был сығымды унан түләтерҙәр тип башына ла килтермәгәйне. Ул ни тип әйтергә лә белмәне. Асыуланырға ла, оялырға ла булдыра алманы. Тик нәфрәт менән ҡайнаған баҫалҡы, еҙөк эске бер тауыш менән:

— Уны мин түләйемме ни? — тине.



Имай баяғыса тыныслыҡ менән яуап бирҙе:

— Ато кем түләһен? Мин түләмәм инде, үҙ әсәйең бит.

Айбулаттың башҡа һүҙ ҡайтарып әйтергә кесө етмәне. Ни эшләргә белмәгән кеше һымаҡ, аяғындағы аҡ сарығының ҡыҫмауын тартты. Күтәрелеп Имайға асыулы ерәнгес күҙ һалды. Башындағы ҡара таҡыяһын бер алға, бер артҡа һыпырҙы ла, тамағы кибеп, конторанан сығып китте. Ә Имай үҙенен, уңайлап ултырған урынында, бер нәмә лә булмаған ҡиәфәт менән, лавка приказчиге менән һөйләшеп ҡалды.

Айбулат унан сыҡкас, әллә ниндәй бер бик ҡәҙерле өметөн юғалткан кеше һымаҡ, башын баҫып, Мәғфүрәгә барып инде. Хәлен һөйләне.

Мәғфүрәнен. быға иҫе китте:

— Ҡуйсы, ҡуйсы, Айбулат, ысыңмы? Был тиклем дә ҡарун булырҙар икән! Сәлимә еңгәм, бахыр, алыҫ булһа ла, Ныяҙғол ҡайнағаға еңгә тейә ләбаһа. Был Имайҙың ғына эше-булыр. Бер тин тиһәң, иманын һата, йөҙе ҡара, күн бит. Әле бөтә ауыл: «Бына, исмаһам, рәхмәт изге кешеләргә. Үҙ әсәһе кеүек ҡәҙерләп күмде. Теге донъяла йөҙө аҡ булыр. Ныяҙғолдоң малына хоҙай бәрәкәт бирер», — тигән булып маҡтаны тағы. Ә улар үлектен, һөйәген ҡуҙғатып яталар. Утыҙ һум. Әҙ аҡсамы ни, бер ат хаҡы бит. Ҡайҙан алаһын. ти уны. Алланың ҡәһәре һуҡҡыр, күҙ буяусылар. Үҙҙәре үлеп барғанда ауыҙҙарына бер тамсы һыу һалырлыҡ әҙәмдәр түгелдәр. Тупһаларына аяҡ баҫырлыҡ түгел. Тик бына нужаһы йеретә. Тукта, мин Рәхимә ен.гәмә әйтеп ҡарайым, бәлкем, Ныяҙғол ҡайнағаға әйтер ул.

Ләкин был эш барыбер Айбулаттын. игеҙ бәрәсле ҡуйын алыу, кеҙ көнө ай ярым буйынса Ныяҙғолға иген йыйнау менән бөттө. Ныяҙғол үткән көҙ тағы ла унын ерен һерөргә булғас, Айбулат быға ҡаты ҡаршылашты:

— Бирмәйем һеҙгә. Уртағына булһа ла, ятҡа бирәм. һеҙ барыбер бушҡа ашайһығыҙ, — тип ҡысҡырышты.

Имай менән ирәгешеп барып Ныяҙғол янына килделәр. Ныяҙғол:

— Айбулат, энем, һин бит әле минен, опекунлыҡтан да сығып бөткәнең юҡ. һине беҙ тәрбиәләмәй, кем тәрбиәләп әҙәм итте, кешенән оялмаһаң, алланан ҡурҡырға кәрәк, — тип өгөтләй башлағас, Имай атаһының һүҙен бүлеп екерҙе:

— Ни нәмәһе шул Сәлимә буралҡыныш эте менән һөйләшеп тораһың, атай, ҡыу ҙа сығар! — тине.

Айбулат та ҡыҙып китте:

— Ә, һин ҡоторған эт, ҡарун! — тип ҡысҡырҙы.

Уғаса булмай, Имай уның сикәһенә йоҙроҡлап һуғып ебәрҙе. Айбулат сайҡалып китте, ләкин йығылманы. Ул арала килеп инеп:

— Был ни эш был, был ни эш? — тип ҡысҡырып ебәргән Үмәрҙән оялып, сығып югерҙе.

Айбулат шунан һуң уларҙың бөтәйенә лә, бигерәк тә Имайға, ҡаты дошман булды. Уларға бармай, эшләһә, бүтәндәргә эшләп, ҡатышһа, тик Мәғфүрә еңгәләренә, Тимерғәле ҡарттарға ғына ҡатыша торған булды. Эсенән ут ҡайнап, сит баярҙарға көтөү көтөргә йөрөнө.

Ошо үткән йылдарҙың намыҫҡа тейә торған иҫтәлектәре уның асыуын бөгөн тағы ла ҡуҙғаттылар. Ул инде Ныязғол байҙарҙан изгелек күрмәйәсәген күңеленә нығ урынлаштырған. Ул уларҙыя йөҙҙәренә ҡабат әйләнеп ҡарамаҫлыҡ булып биҙгәйне, Ләкин бөгенгә Тимерғәле ҡарттың һәм Мәғфүрәнең һүҙҙәре уның ошо һерлеген ҡаҡшатҡандай булдылар. Тимерғәле ҡарт: «Байҙыҡы аҡмаһа ла тама», — тине. Кем белә, бәлки, ысынлап та, Ныязғолдоң берәй ярҙамы тейеп ҡуйыуы бар. Өлкән еңгәм ороша, ти. Ул орошһа ла, йәлләй торған. Бәлки, уның да берәй ярҙамы булыр, тип уйланды.

Бигерәк тә бөгөнгөһө ҡыйын бит әле. Барлығы илле һум аҡса бар. Көтөүҙән тейгән иген алып ҡайтылмаған. Быҙаулы ҡыҙыл һыйыр бар. Уны туйға һуйып.илле һумды мәһәргә бирһәк, уның арьяғында туй кәрәк-яраҡтары, үҙенә өҫ-баш, буласаҡ кәләшкә лә кейем-һалым, бүләк, ҡайныға сапан, ҡәйнәгә инә туны, ҡәйенеңгәләргә таҫтарлыҡтар, балдыҙҙарға кемөш тәңкәләр, ҡәйнештәргә бәке, кейәүләй барғанда, саҡырылып ингән бер өйҙә, сәй эсеп б.өткәс, шәшке түңкәргәндә һалырға ун биш, егермешәр тин көмөш аҡса, галош йәшергән ҡыҙҙарға тағы ла көмөштәр...

Айбулаттың был һандарҙан иҫе китте. «Әллә ысынлап та барып һаулашайым, күрешәйемме икән?»

Ошондай уйҙарҙың беренә-бере ҡаршы булған көстәре елгә һуғылған төтөн кеүек уралышып ҡаҡлығышалар ҙа ихтыярһыҙҙан Гелйөҙемгә табан тарталар, уны күҙ алдына килтереп, йөрәкте ҡыҫалар.



Ул бөгөн Гөлйөҙөмдәр урамынан ике-өс тапҡыр үтте. Төштән һуң, Исхаҡ менән үткәндә, Гөлйеҙөмдөн. кәртә аша ҡарап торғанын күреп ҡалды. Гөлйөҙөмдөң көлөмһерәп ҡараған матур ҡара күҙҙәренең бер генә секундҡа үҙ күҙҙәре менән осрашыуы уны бигерәк нығ ҡаушатты. Уларбик оҙаҡ ҡарашҡан кеүек тойолдо. Айбулат Гелйөҙөмгә бик нығ текләп яуап бирмәксе ине, ләкин ниҙер екде. Ниҙер уның күҙ ҡабаҡтарын ихтыярһыҙ түбән баҫты. Ул, һис көтмәгәндә, Гөлйөҙөмдән оялып ҡыҙарҙы. Уға үҙенең аяғына кейгән яңы итеген Гөлйөҙөм кешенеке тип уйлай һымаҡ булды. Ул шуға йылмаялыр һымаҡ тойолдо. Айбулат икенсе тапҡыр башын күтәреп ҡарағанда, Гөлйөҙем соланға югереп инеп киткәйне инде. Айбулатты, егет булып йөрөп тә, аҡса-мал менән еңеп, кәләш ала алмаҫ егет итеп иҫәпләгәндер инде ул, тип уйланды... Тимерғәле бабаһының, кисә икенсе тапҡыр яусыға барғас, Үмәр ҡарттын, әле булһа ипкә килмәй, һикһән һум мәһәр, туйға бер тана, инә туны, ҡайнына сапан, тағы әллә ниҙәр һорағанлығын әйтеүе иҫенә төштө. Үмәр ҡарт ошо һорауҙарҙы ҡуйған саҡта, Тимерғәле олатай ни нәмә тип әйтте икән? «Егет ярлы, уның быларға кесөнән килмәҫ», тигән булһа... ә Гөлйөҙөм ошо һөйләшкәндә шаршау артынан тыңлап торған булһа, үлемең дә кәрәкмәй. Егет намыҫы...

Был уйҙарҙан Айбулаттың күҙҙәре төн ҡараңғыһына ҙур асылдылар. Тышта ел, ыжылдап, һауаның боҙолғанын белдерә ине. Шунан һуң ул, Исхаҡ мәнән етәкләшеп, ҡайҙа баҫҡанын белмәй, урамдың икенсе яғына сыҡты.

Исхаҡ, туктап:

—• Ана", ул солан ишеген ҡыҫып ҡарап тора, ҡул болға, — тине.

Ә Айбулат әйләнеп тә ҡараманы, ҡул да болғаманы.

Өйгә ҡайтҡас, Исхаҡ уны ысынлап әрләне:

— Егет булып йөрөүен, ҡороһон. Ҡыҙ ҡарап торғанда ҡул болғай алмағас, һин ниндәй егет инде? Гөлйөҙөм һәр бер күҙләүсегә кәртә аша ҡарап ҡалмай ул. Ҡыҙҙың ҡәҙерен белмәһәң, бик тиҙ эйә табылыр. Ана, Таллы ауылының Моратша бай...

Айбулат түҙмәне, уға ҡаты екерҙе:

— Китсәле, Исхаҡ! һинән башҡа мин үҙем белмәй тиһеңме? Өйрәткән булаһың. Моратша бай ҙа Моратша бай. Уның шикелле мин аҡсаны ҡырсын ташы кеүек һибеи йөрөһәм нне... — Айбулат, асыуланып, ғәрлегенән

быуылды. Йөҙө ҡыҙарып, ҡура мөйөшөндә өйөлгән бесәнгә ҡырын ауҙы ла кеҫәһенән махорка сығарып төрә башланы.

Исхаҡ иптәшенен, был ҡыҙыулығына ла бирешмәне:

— Харап икән! Ул аҡсалы булһа ла, ялтаҡыл. Ә һин үҙең алтын бит, алйот. Ҡул болғағандан ни була ине? Гөлйөҙөм үпкәләгәндер әле. Ни хәтле йөрөп ҡайтып, һағынмаған да икән, тиер әле. һин юкта нисәмә егеттең һүҙ һалыуына ул гел кире ҡағып торҙо. Яланбикәгә әллә нисә рәт әйтеп илаған. «Айбулаттан башҡа кеше күҙемә лә күренмәй, һағындым, ҡасан ғына ҡайта инде», — тип әйткән.

Улар шулай оҙаҡ һөйләштеләр.

Айбулаттың әсәһе, үлер алдынан уны янына саҡырып, аҡтыҡ тапҡыр башынан һыйпап һөйҙө лә васыят әйтте:

— Айбулат балам, һине башлы-күҙле итеп, килен рәхәте күрә алманым. Минең өҫтөмдә ҙур бурыс китте инде, бәхил бул, балам. Әгәр ҙә башың һау булып, кәләш алһаң, киленгә минең ҡомарткым итеп бирерһең, — тип уң ҡулының урта бармағынан ҡара биҙәк менән биҙәлеп, ҡашына «Сәлимә» тип яҙылған яҫы көмөш балдаҡ һурып биргәйне. Айбулат шул балдаҡты, ҡыҙыл сатин яулыҡҡа урап, еҫле һабын ҡушып, Исхаҡтан Гелйөҙемгә бирҙерҙе. Былтыр биргән вәғәҙәһен онотмаған булһа, ҡабул итер. Әгәр күңеле һыуынып, яттарға ҡараған булһа, кире ҡайтарыр. Бәлки, ул яҙ башында ҡар һыуына барғандағы осрашыуҙы онотҡандыр, уйын үҙгәрткәндер... *К.Ш* белә бит, ҡайһы ҡыҙҙар бик сабыр йөрәкле булалар. Уларҙың күңеле, һәр бер ялтыр нәмәгә елберҙәп ҡунырға әҙер торған ел ҡанатлы күбәләктәр һымаҡ, һәр бер ялтырауыҡҡа ҡыҙығыусан булалар...

Үткән яҙҙың матур шаян ҡояшлы төш ваҡыты Айбулаттың күңелендә әле лә бөтә йылылығы менән һаҡлана. Ул көндө иҫенә төшөрһә, Айбулатка әллә нисек, тормошта бер нужа ла ҡалмаған һымаҡ, еңел тойола. Ул был көндө бөтә ваҡ-тейәктәре менән бөртөкләп яңынан уйлап сыға. Ауыҙ-күҙҙәре ихтыярһыҙ уйсан йылмаялар.

Ул, йоманға һыу ҡойорға барып, бер кенде егермеләп йомран тотоп, уларҙың тиреһен яурын аша һалып» һыҙғырып көйләп, Яллытауҙың итәк уйпатынан Өскайын төбөнә ҡалҡып сыҡты. Айбулат башта үҙ күҙҙәренә* үҙе ышанманы... Үҙенең бик нык яратып та бер һүҙ ҡу-



шырға ҡыймай йөрөгән ҡыҙы Гөлйөҙөм, бер нисә иптәш -ҡыҙы менән, Өскайын эргәһенән бөгөлөп үткән йыраҡанан шыялап аҡкан көмөш кеүек ҡар һыуын сүмесләп-сүмесләп аҡ күнәктәргә тултыра ине. Ҡыҙҙар, үҙ-ара ниҙер һөйләшеп, саф тауыш менән шаңҡылдашып көлөшәләр.

Башта улар Айбулатты абайламанылар. Тик Гөлйөҙөм генә һиҫкәнеп боролоп ҡараны. Уның сусып ырғыо тороуына һаҡал, сәсмәүҙәре шылтыранылар. Ике итәкле аҡ күлдәге елберҙәне. Сүмесен силәгенә тешөрөп ебәреп, һыуын күк кәзәкейенең салғыйына сәсрәтте:

• — Ай хоҙайым, ҡурҡканымды! — тине Гөлйөҙөм.

Уның был тауышына ҡыҙҙар ҙа боролоп ҡаранылар, оялышып, йөҙҙәрен йәшерҙеләр.

Күрше ҡыҙ Яланбикә оялманы:

— Бәй, Айбулат ағайым бит, — тине ул. — Ҡарағыҙ әле, ни тиклем йомран тотҡан. Ҡайһылай күп, ағай, һыу ҡойҙонмо, ҡапкан һалдыңмы?

— һыу ҙа ҡойҙом, ҡапкан да һалдым, ҡыуалап та тоттом.

Ҡыҙҙар был һүҙгә шым ғына көләштөләр.

Айбулат, Яланбикәнең иркен һөйләшеүенән файҙаланып, йомран тотҡандағы бөтә ҡыҙыҡтарҙы һөйләй-һөйләй, ҡыҙҙар менән ҡатарлап ауыл яғына атланы. Гөлйөҙөм, унан тартынып башын баҫкан көйө көйәнтә, силәктәрен ҡупшы бәүелтеп, ситтәрәк бара, һүҙгә ҡатнашмай. Ләкин Айбулат, был уңай осрашыуҙы ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, һөйләшергә йәйлы һүҙҙәр эҙләне:

— Гөлйөҙөм һылыу, ниңә оялаһың, оялма, барыбер һөйләштең бит инде, — тине Айбулат.

Яланбикә:

— Эй, уның ғүмеренә ҡылығы шул инде, юҡҡа ояла ла ҡала, — тине.

Гөлйөҙөм, ҡояш ҡыҙыулығынан да, оялыуҙан да ҡыҙарған биттәрен аҙ ғына бороп, ал ҡыҙыл яулығы аҫтынан ғына йылмайып, Айбулат яғына ҡараны:

— Ни-мә һөйләшәйем һуң?.. Оялмайымсы мин, — тине.

Айбулатҡа ошо ғына кәрәк ине. Бер һүҙ ҡушты, бер һирпелеп ҡараны, тимәк, бының аръяғына иркен һөйләшергә була. Ул шуға күрә, иркенләңкерәп, Гөлйөҙем янына килде. Гөлйеҙөмдең йеҙөн тағы ла яҡынданыратс күрергә теләп, ҙур ҡара күҙҙәренең ҡойроғо менән ген»

йылмайҙы. Унын, тигеҙ аҡ тештәре яҙғы елгә ҡарайған битенең ҡуңыр тутында тағы ла ағыраҡ булып ялтыранылар. Ҡалын ҡара ҡаштары дуғаланып һикерҙеләр. Ул, башындағы бүркен алып, тирләгән маңлайын усы менән һыпырҙы. Уның ҡара ҡуйы сәстәре түгелеп маңлайына һибелделәр.

— Ни һөйләйем тип ни, барыһын да һөйлә... — Шунан ул шаян тауыш менән ҡапыл: — Эй, ҡыҙҙар, нинә һеҙ ҡар һыуына бында килдегеҙ әле, Ырғыҙҙа һыу бөткәнме әллә? — тип уйынсаларға теләне.

Ҡыҙҙар үҙ-ара ниҙер әйтеп көлөштеләр. Яланбикә, Айбулаттың был шаян һүҙҙәренең серен аңламайынса, ысынлап яуап бирҙе:

— Ҡар һыуы кер йыуырға ла, сәйгә лә йомшаҡ була ул, ағай. Әсәйем дә, Муйылбикә инәйем дә: «Ҡар һыуы сәйгә йомшаҡ, барығыҙ әле», — ти ҙә торалар. Беҙгә ни, йөрөү булһа етте. һыу күбәйеп китһә, түгәбеҙ ҙә Йөҙөкәй әхирәтем менән тағы киләбеҙ.

Уларҙың күҙҙәре тағы ла осраштылар.

Гөлйөҙем был юлы ҡыйыуыраҡ булырға тырышып:

— Тауға һыуға барыуы ирмәк бит ул. һыу бөтмәһә ни, — тине.

Айбулат һүҙ урауы килеп етмәһә лә, тағы уйын әйтеп ҡалырға тырышып, кинәйә тапты:

— Шулай инде ул. Ирмәк тә була. һыу менән һыуҙың да, кеше менән кешенең дә айырмаһы күп була.

— Әллә мин уныһын белмәйем.

—• Ә бына мин беләм. Ҡыҙҙар менән ҡыҙҙар араһы ла ер менән күк араһы кеүек була. — Ул яуап көткәндәй итеп Гөлйөҙөмгә ҡарап барҙы. Башта Гөлйөҙөм ҡарамаҫҡа тырышты. һүҙ менән дә яуап бирмәне. Түҙмәйенсә, ул һис бер йылмайыу, шаярыу әҫәре булмаған, ул арала әллә ниҙәр уйлап өлгөргән һылыу йөҙө, уйсан күҙҙәре менән Айбулатҡа бер генә күҙ һалды ла ҡапыл бағышы баҫты. Был ҡыҫҡа, мәғәнәле уйсан ҡараш Айбулатҡа Гөлйөҙөмдөң бөтә эс серен аңлатты, бөтә уйын һөйләне. Егет йөрәгендәге һөйөү йылыһын кеслө ялҡынға әйләндерҙе.

...Улар һыртҡы гумналарға яҡынлашҡас, Айбулат ауылға икенсе юлдан инде. Ҡыҙҙар уның был аҡылына кинәнделәр. Булмаһа, әңгәһәрҙәй егет менән бергә ҡалайтып ауылға инәһең. Кеше әллә ни һөйләр.



Айбулат үҙенең артынан Гелйеҙөмдөң матур күҙҙәренең эйәргәнен һиҙә ине. Шуның өсөн урамға боролор алдынан уң яурынындағы тиреләр бәйләмен һул яғына алмаштырған кеше булып, тағы бер артына боролоп ҡараны ла, күкрәген киреп, ары атланы.

Кискә табан ул түҙмәне. Ике илеләй генә ҡағыҙға хат киҫәге яҙып, Яланбикәнән Гелйөҙөмгә бирҙертте.

Ике ҡыҙ ҡураға сығып, сыуал арттарына йәшенеп, күпме ваҡыт хат уҡығандарҙыр. Ләкин Айбулат иртәнсәк утарға көтөүгә китер алдынан яҙыу яҙа белмәгән Гөлйөҙөмдән Яланбикә аша тел яуабы алды:

«Ҡыҙарып бешкән алмаларҙы
Нисек итеп яңғыҙ ашайым?
Иөрәгемә ялҡын уттар һалдың,
Нисек итеп уны баҫайым?

Ҡара таҡыя килешә һинең ҡара ҡашыңа,
Моңло бала түгел инем, мондар һалдыц башыма.

Хат яҙмаһын. Кеше ҡулына тешөр ҙә, әллә ни тип һөйләрҙәр. Үҙе ситкә китеп барғанда, минең башымды әүерәгә һалмаһын. Атайымдар һиҙһә, йәнемде алырҙар, үҙе ҡайтҡас, күҙ күрер». Был йырҙар, был һүҙҙәр егет өсөн әллә ниҙәрҙән ҡәҙерле вәғәҙә ине. Ул был йырҙарҙы ынйы бөртөктәрендәй итеп күкрәгендә һаҡланы. Квтөүен үрешкә йәйеп, йәшел үлән, еҫле сәскәләр араһында көслө күкрәк тауышы менән, төрлө көйҙәргә һалып, бөтә ялан, һыу буйҙарын яңғыратып йырланы. Үҙе лә Гөлйөҙөмгә йырҙар сығарҙы:

Ырғыҙ йылға буйын, ай, буйланым,
Таянырға таяҡ тапманым.
Гөлйөҙөмкәй, һинә хаттар яҙҙым,
Ебәрергә кеше тапманым.

Алтын ғына булып ағайым,
Көмөш кенә булып тамайым,
Бәхетһеҙ ҙә үҫкән был башымды
һалдың утка, дөрләп янайым.

Сыбар ҙа ғына ҡанат аҡ ҡарсыға,
Осамы икән күктә ҡовд күреп,
Иөҙ илле лә керпек йвҙөн ябып
йоҡлаймы икән һылыуым төш күреп.

Айбулат ауылдан киткәндә Гөлйөҙөмдө осрата алманы. Яланбикә аша әйтеп ҡалдырған тел сәләменән башҡа бирерҙәй бүләге лә булманы. Йәйҙең оҙон айҙары кетөү

артынан сыбыртҡы һөйрәп йөрөп үтте. Бер генә көнгә булһа ла ауылына ҡайтып, Гөлйөҙемдө бер генә тапҡыр булһа ла күреп килгеһе килде. Ләкин был мөмкин булманы. Бөтә йәй буйына йерәк талсыҡты. Моңло йырҙар күңел асҡандай булды. Ләкин унын. артынса, кеслө елдән үрләгән ут ялҡындары һымаҡ, кеслө һөйөү ялҡыны уның йөрәген ялманы.

...Инде ни булыр?

Усаҡтағы сытыр ҡуҙы ла һүнеп бөттө. Өй эсе бик ҡараңғы булып китте. Айбулат төрлө яҡҡа әйләнеп ҡараны, ләкин уны йоҡо алманы.

Аҙ ғына таң беленеп, һөт кеүек аҡһыл яҡтылыҡ яйлап ҡына тәҙрәнән һикегә һуҙылды. Тәҙрәнен, һоро быялалары аҡрынлап ҡына ҡуйы зәңгәр төҫкә әйләнделәр. Тышта ел көсәйҙеме, мөрйә нығыраҡ геүләй башланы. Айбулатҡа был геүләү шул тиклем күңелһеҙ тойолдо, бәхетһеҙлек хәбәре кеүек булып, күңеленә шомлоҡ һалды. Тәҙрәнән йымылдап күренгән нурлы таң сулпаны Гөлйөҙөмдөн, күҙҙәрен хәтерләтте. Нисек итеп шул йондоҙҙарға барып етергә инде...

Быға тик бер генә ауыр юл ҡалды, ул да булһа Ныязғол менән барып күрешеү, уға баш эйеү ине. Гелйөҙөмдө алғас, күҙ күрер. Тимерғәле олатай әйткәндәй, эшләп түләрмен. Гөлйөҙем минеке булыр. Ҡаты булһалар, бурысым бөткәс, тағы ҡатнашмабыҙ. Гөлйөҙөм менән икәү бергә булырбыҙ. Икәү генә... Минең бүләгемде яратты микән?

Шул уйҙар Айбулаттың башында аҙаҡҡы тапҡыр уралдылар, сырмалдылар ҙа уны йоҡоға алып киттеләр.

## ҠАЙНАР СӘЛӘМ

Ул, йоҡонан тороп ҡына аяғына кейеп ултырғанда, башына ҡыҙыл сатин кәзәкейен генә беркәнеп, Яланбикә елтелдәп килеп инде. Ул, уянып тәмәке тартып ятҡан Ҡотлоярҙы күреп, бер аҙ тартынды ла, йомош тапмағас, һыйыр һауырға ҡураға сыҡҡан Мәғфүрәне һораны:

— Еңгәм ҡайҙа китте?

Ҡотлояр өндәшмәне. Айбулат сикһеҙ ҙур өмөттәр менән тулған күҙҙәрен Яланбикәнен. йөҙөнә текәне. Ул Яланбикәнең Йөҙөкәйҙән килгәнен шунда уҡ һиҙеп алды.

Яланбикә үҙенең хәйләләп өйрәнмәгән, алдай белмәгән холҡо менән күҙендә, йөҙөндә уйнаған шаян йылма-



йыуын да йәшерә алманы, бер Ҡотлоярға, бер Айбулатҡа ҡарап, икеләнеп торҙо ла, кеҫәһенән бер бәләкәй генә төйөнсөк сығарып, Айбулатҡа бирҙе.

Үҙе, ҡабаланып, янылыша-яңылыша, килештерә алмай алдаған булды:

— Айбулат ағай, бына һиңә ағайым ебәргәйне, нимәлер, белмәйем.

Шуны ғына көткән Айбулат ҡапыл ынтылып төйөнсөктө алды ла, ни әйтергә белмәйенсә:

— Үҙе ҡайҙа? — тине.

— Үҙе өйҙә. Әй, в'йҙә юҡ, тирмәнгә китте.

Айбулат, бер көлөп, бер ҡомһарып, үҙенен, һорауына унайһыҙланды. Ялт әйләнеп Ҡотлоярға ҡараны. Сөнки улар кисә Ҡотлояр менән икәүләп Исхаҡты тирмәнгә оҙатып ҡалдылар. Ҡотлояр уға тарттырып алып ҡайтырға тип ике бот бойҙай ҙа һалып ебәргәйне. Үткер Ҡотлояр, был бала-сағаньщ белер-белмәҫ көйҙәренә хәйлә ҡороп аҙапланыуҙарына ҡырын ғына күҙ һалып, оҙон ҡара мыйыҡтары аҫтынан көлөп ята ине. Ул, Айбулат ҡарағас, ауыҙынан ҡуйы тәмәке төтөнө бөркә-бөркә:

— Исхаҡтан һиңә күстәнәс килгән икән, — тине.

Айбулат көлөмһөрәне лә ендәшмәне. Яланбикә оялышынан югереп сығып китте.

Айбулат ашығыс кейенде лә, тиҙерәк сығып, төйөнсөктө ҡутарҙы.

Шатлыҡтан унын. тыны ҡурылды. Бына ул, һөйөклө йөҙөкәйенен, — хыялыньщ, йерәк ялының бүләге!

Ул үҙенен, ҡайнар һөйеү хистәрен эсенә йыйған матур бүләктәр ебәргән: бына үткән яҙҙы тәүге осрашҡанда үҙе ябынған ал кешмир яулыҡтың ике бөртөк сәскәһе. Ул шуны өҙгән дә, яндырылған шырпынын, бер башына ҡош йөнө бәйләп, ошо ал сәскәләргә ураған. Тимәк, Өскайын төбө бөгөнгөләй унын, хәтерендә. Яулыҡтың ике бөртөк сәскәһе — уларҙың шундағы икәүләп осрашыуҙарыньщ билдәһе, Гөлйеҙөм дә, быңа ошо янған шырпы һымаҡ, янып, көйөп йәйҙе үткәргән, ләкин осоп барыр өсөн, ошо күк күгәрсен ҡауырһыны кеүек, еңел ҡанаттары булмаған, Етмәһә, матурлап төрөп төрлө йөндән ситтәренә ваҡ ҡына сулпылар төйөп суҡлаған, йәшел атлас менән ҡыҙыл бәрхәттән ҡорап яһаған тәмәке тоҡсайы. Был — ҙур вәғәҙә. Киләсәктәге яҡты бәхеттәр тураһында, ҡауышыу тураһында йылы өмөттәр бирә торған теләктәр билдәһе...

Айбулат был нәмәләрҙе ҡарағанда, унын йөрәге шул тиклем ныҡ һуҡты, ул Гөлйөҙөмдөң үҙен күреп, унын үҙе менән һөйләшкәндәй булды. Был бүләктәрҙе әллә* нисә алып, ус эсенә йәйеп, әллә нисә ҡараны, донъялағы бөтә ҡиммәтле алтын-көмөштәргә алмаштырмаҫ был бүләкте ул һулаҡай яҡ күкрәк кеҫәһенә — йөрәге еҫтәнәһалып ҡыҫты.

Ни өсөн икәнен үҙе лә аңламайынса, тәҙрәләренә-тиҙәк тултырып һыланған үҙенең кирбес өйө тирәһенә-барып әйләнде. Әйтерһең, дә, унын, яҡты өмөттәре, күренмәҫ нурлы күләгәләр булып, ошо эйәһеҙ өй тирәһендӘ' урағылайҙар. Ул, ошо күтәренке күңел менән Мәғфүрәләргә ҡайтып, улар менән сәйгә ултырҙы.

Бер-ике чсынаяҡ сәйҙән һун. Мәғфүрә тағы һүҙ ҡуҙғатты:

— Айбулат, һин бөгөн дә Ныязғол ҡайнағаларға барып әйләнмәнеңме әле?

Айбулат Ҡыл бер ҙә аяғы тартмаған юлды һаман артҡа ҡалдырып килде:

— Юҡ әле, еңгә, ниңә? — тине.

— Ниңә тип ни, үҙең белмәгән ни эш бар. Үмәр ҡарт Тимерғәле ҡайнағаны тағы кире ҡайтарған бит. «Ағайэне оҡшатмай, кире ҡағалар. Ҡыҙ быйылға бирерлек түгел, йәше етмәгән», тигән була, ти. Мәһәрҙе һаман кәметмәй, етмәһә, туйына тыу бейә һуйырһың, тип әйтә, ти. Тимерғәле ҡайнаға: «Берәй һарыҡ һуйһаҡ ярамаҫмы?» — тип әйткән икән, ул ҡыҙып-ҡыҙып китте, ти. Минең һарыҡ һуйып туйлай торған тол ҡыҙым юҡ, хәленән килмәһә, буйы етмәҫ ергә үрелмәһен, тип әйтә, ти. Ҡуй инде, бер көндө аҙыраҡ ыңғайланғайны, әле тағы әллә ни эшлән киреләнгәнсе. Шайтан ғына аралайҙыр инде. Анау Моратша бай ҡыҙыулата, ти, шуға күрә арҡаһын ныҡҡа таяныш һөйләшәлер инде ул.

Айбулат ҡойған сәйен йота алманы. Әле генә беренән-бере матур булып теҙелгән өмөттәрҙе был һүҙҙәрҙең ауырлығы бер юлы баҫып китте. Иртәнсәктәге шатлығыу болот баҫҡан ҡояш һымаҡ, ҡараңғыланды.

Мәғфүрә һаман кәңәш бирҙе:

— һүҙемде тыңла, Айбулат, бар. Кәнен, төшһә, бит һыуынды биш түгеп, яттарға ла инәләһең ул, Былар әле нисек әйтһәң дә үҙеңдекеләр.

Быға тиклем ендәшмәй сәй эсеп ултырған Ҡотлояр Айбулатҡа асыуланды:



— Ни һин, Айбулат, шуларҙын. ыҙыр-мыҙырына ҡарайһьщ. Ҡыҙҙы алып ҡас та кит! Бар, ана, әҙләп арыһындар. Туйға бейә түгел, бәрәс тә һуймабыҙ, танауҙарын тартһындар. Әйтәм бит, бер тин сығарма. Улай үҙҙәре әллә кем булғас, һин уларҙан да эре бул.

Айбулат, һыуынып бөткән сәйен ^бер-ике йотоп, сынаяғын батмусҡа ҡуйҙы ла төшенке тауыш менән:

— Ҡыҙ, ҡасам, тип торамы һуң ул һиңә? — тине.

— Ҡыҙ, ҡасам, тип торорға, унын башы ике тиһеңме әллә? Ни өсөн һуң һин егет булып ер еҫтендә йөрөйһең, бер ҡыҙҙы ла алып ҡаса алмағас? Бөгөн Яланбикә килтергән тейенсөк һинен, башындан ашҡан. Ҡыҙ үҙе югереп килмәй ул. Шулай итеп бүләк, сәләм ебәрә лә егеттең батырлығына таянып көтә. Ҡыҙ кеше өсөн был үҙе бер ҙур батырлыҡ. Ә һин егет исемен юғалтма, ал да кит. Ат кәрәк булһа, бынамын тигән пар ат табып килтерәм. Ә сана, Моратша бай төшөндә лә күрмәгән сана булыр.

Мәғфүрә тауышын күтәреп уға ҡаршы төштө:

— Ҡуйсәле, һин туҙға яҙмағанды һөйләмә лә. Бына Айбулат Рәхимә еңгәмдәргә барһын, һөйләшһен. Кисә ул бик ыңғайланғайны. Ҡайнаға менән дә кәңәшеп ҡарарға булғайны. Кенә ҡыуыш эш сыҡмаҫ, үткән эштән төш яҡшы, бер барып ҡара, Айбулат.

Ҡотлояр, сынаяғын шарт түңкәреп, аҫтындағы мендәрен мөйөшкә ырғытты ла һуҙылып ятты.

— Бирер һиңә Рәхимә еңгәң, көтөп тор! һин уларға эшләгәндә генә яҡшы ул. Йомошоң төшеп ҡараһын әле, күрерһең. Әйтәм бит, ҡыҙҙы алыга ҡас та кит, Айбулат, Ҡурҡһаң, үҙем күсер булырмын.

Мәғфүрә бирешмәне:

— Юҡ менән болартма инде. Эште һәүетемсә генә бөтөрөргә кәрәк. Ана, Рәхимә...

Ҡотлояр ҡыҙып китте:

— Ҡартайғансы ҺИЕӘ лә аҡыл ултырманы. «Рәхимә еңгәм, Ныязғол ҡайнағам» тип, ауыҙ һыуын, ҡорой. Ун биш-егерме йыл шулар тупһаһында йөрөп ғүмер итәһең, әле булһа шуларҙың ҡылыҡтарына тешөнмәйһең. Ғәзимәһе туп-тура әйтә, ә Рәхимәһе, йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултырта. Миңлекәйе ул — ҡала юхаһы. Бер әйләнеп, биш тулғаньш, эсеңә инә лә аҡтыҡ киҫәгенде үҙенә ҡалдыра. Ныязғол суфый булып, хәҙрәткә мөрит булып йөрөй, ә ҡалала һин уны күрһәң ине, араҡы эсеп, фәхишә-

ләрҙән ҡайтмай. Имайҙың телгә алырлығы ла юҡ, имәнес> һаман шулар яҡшы һиңә.

— Бигерәк тә телең әсе инде. Гөнаһынан ҡурҡмай„ арыу кешеләр тураһында әллә ниҙәр һөйләйһең. Ишетеп ҡала күрмәһендәр, алла һаҡлаһын. Уларҙың яҡшымы-яманмы икәнен тикшереү менән мин нисек әйтәйем? Аҙ булһа ла, ярҙамдары теймәҫме тип йөрөнөм шул. Һин үҙең ситтә йөреп күҙең күрмәгәс тә, беҙгә бында еңел тиһеңме әллә? — Мәғфүрәнең тауышы ҡалтырап, күҙенә йәш эркелде.

Ҡотлояр уға төмһәүеп ҡараны ла йәлләпме, ни эшләп, өндәшмәне, ә Айбулагка:

— Барһаң, барып әйлән. Минең әйткәнде иҫеңдә тот. Ныязғол һиңә ярҙам иткән хәлдә лә ул уның өсөн биш ҡат тиреңде һуйып түләтәсәк. Күр ҙә тор, — тине.

Уларҙың үҙе өсөн ирәгешкәндәренә эсе бошоп тыңлага ултырған Айбулат Ҡотлоярҙын, һуңғы һүҙҙәренән ҡырҡа ҡарарға килде.

— Ярай, ни булһа булыр, барып ҡарайым әле„—• тине ул.

## САТИН КҮЛДӘК

Был йоманың һуңғы көндәре, гүйә, бөтә ҡайнаған ваҡиғаларын Гөлйөҙөмгә бағышланы. Ауылдағы бөтә хәбәрҙәр туҡталды, бөтә иғтибар Гәлйөҙөмгә, уның тураһындағы хәбәрҙәргә, килгән яусыларға, уларға бирелгән яуаптарға ҡағылды. Башта шым ғына һейләнгән һүҙҙәр сәй янында ҡыҫкырып һөйләнгән бисәләр хәбәренә күсә лә, ваҡ болоттарҙан эркелеп йыйылған өлкән болоттар кеүек, ейөлөп, ҡуйырып, күкрәп, эре күҙле ямғырҙар һымаҡ булып, бөтә ауылда шаулайҙар. Ләкин әлегә тикле^м был хәбәр ҡойондары ата-әсәһенең күләгәһендә, Айбулат мехәббәтенең йылыһында ышыҡланып ултырған Гелйөҙөмгә нык ҡағылмайҙар. Ул уларҙы сала-сарпы ғына ишетә лә алдында торған ниндәйҙер бер үҙгәрешкә билдәһеҙ ҡыҙығыу менән әҙерләнә. Ул алдағы бәхетенең нурын күргән кеүек йылмая. Шатлыҡлы уйҙар, береһен-береһе уҙып, уның күңелен тулҡындыралар. Ысынлап та, быйыл көҙ уның өсен күп ҡыҙыҡтар, шатлыҡтар килтерҙе: өмә булды, әңгәмәләшеп өй һыланылар. Шәһиҙә инәһе йырланы. Шунан оҙаҡламай Айбулат ҡайтты. Урамдан үтте. Бүләктәр ебәрҙе.



Инде атаһы алып ҡайтҡан матур, баҙлап торған сатин күлдәкте тегергә кәрәк ине. Гөлйөҙөм ул күлдәкте күрһәтергә еңгәләрен, әхирәт ҡыҙҙарын йыйҙы. Ҡайһылай итеп тегеү тураһында кәңәшләште. Еңгәләренен, йәшерәктәре татарса бесеп тегергә кәңәш бирҙеләр. Яланбикә;

— Ҡуйсы әле, минеке һымаҡ ике итәк тотоп, туғьф төрле төрлөк баҫып, буйын ҡаҙаҡса тотош итеп тегәйек, — тине. Иң аҙаҡ, уйлаша торғас, Гөлйөҙөм үҙ уйы менән күптән ҡыҙығып йөрөгән Ныязғол байҙың ҡалала уҡып ҡайтҡан елкән ҡыҙы Фатиханыҡы һымаҡ, татарса; бесеп, яурындарын бөрөп, еңдәрен камфарткалап, шлапур һалып тегергә булдылар.

Был эш бик ҡыйынға төштө. Улай итеп бесә белеүсе юҡ. Ә ҡарап бесергә күлдәк һорап Ныязғол байҙарға барыу тураһында уйлап ҡарарға ла ярамай ине. Оялмайынса байҙар тупһаһына ҡалай баҫаһың? Бирмәй, келвп сығарырҙар. Шулай ҙа ҡыҙҙар тырыштылар. Оҙатс уйлап, үткән яҙ сәхрәгә сыҡҡанда Фатиха артынан эйәреп ҡарап йөрөгән матур күлдәктең бөтә ҡатмарҙарыш хәтерҙәренә төшөрә-тешерә икәүләп бестеләр. Шунан аулаҡ өйҙә төндәр буйы етеле шәмде һандыҡ өҫтөнәкамфаркаға ултыртып, һағыҙ сәйнәй-сәйнәй серләшеп,, йырлашып, ҡул менән ике, өс ҡат һырыш, ҡыҙыл күлдәкте тектеләр. Итәк осондағы балитәктәрҙен. бөрөлөүе ҡаланыҡынса булмаһа ла, уйып киҫеп ҡуя торған ец. төбе урынына башҡортса кештәк ҡуйылһа ла, күлдәк матур булып сыҡты. Итәк осона төрлө таҫманан өс ҡаг төрлөк һалырға ла онотманылар.

Бер көндө кис атай, әсәйҙәрҙе Шәһиҙә әбей ҡунаҡҡа саҡырҙы ла, улар төнгә ҡалдылар. Гөлйөҙөм менән Яланбикә ҡыҙыл күлдәкте алмашлап-алмашлап кейеге ҡаранылар. Үҙҙәре таҡмаҡ әйтеп, үҙҙәре бейештеләр,. шаярҙылар. Гөлйөҙем таҡмаҡ әйтте, Яланбикә бейене..

Тәҙрәмдек ҡаптасын шыптырҙатма ҡаплағас,
Ҡыҙ күҙләргә тиеп килгән, ауылында тапмағас.
Тәҙрәнән ҡарама, бүректәрен алама,
Ҡараһан., ҡарамаһан, да, һин алйотҡа кем бара...

Үҙҙәре хахылдашып келөштөләр.

— Моратшаның тиле улы тыңлап торһа, иллә мәрәкә» булыр ине, — тине Яланбикә.

Улар шулай зыҡ ҡупҡанда тәҙрәнең быяланын ике тапҡыр сиртттеләр. Ҡыҙҙар, ҡурҡып ҡысҡырышып, мейес -артына ҡастылар.

Унан Яланбикә, аҙ ғына башын сығарып:

— Кем икән? — тип шыбырҙаны. Тәҙрәләге өрөп ҙурайтылған ус аяһындай асыҡ урынды күреп:

— Ай, әллә кем ҡарап тора? — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ул арала тыштан көлөшкән, шунан ҡурай уйнан «ебәргән тауышты ишетеп, ҡыуанып көлөштөләр.

— йөҙөкәй, был ағайымдар бит.

Исхаҡ тыштан:

— Асығыҙ әле, беҙ инеп сығабыҙ, — тине.

Гелйеҙөм, мейес артынан сығып, тәҙрә янына килде. Яланбикә ишек янына табан югерҙе:

—• Асайым, Иөҙөкәй, — тине.

Гөлйөҙөм тәүҙә икеләнде:

— Тукта әле, Яланбикә, асмай тор, кеше күрһә, әллә ши тиерҙәр, асмайыҡ.

Ләкин Яланбикә уның менән һөйләшеп тә торманы:

—• Таптың һүҙ, ағайымдар бит ул.

Ишектең ырғағын шартлатып ысҡындырыуға ике •егет килеп тә инде.

Исхаҡ,көлөп:

— Ҡурктығыҙмы әллә! — тине.

— Ҡурктыҡ шул, ағай, бигерәк ҡурктыҡ. Ни эшләп •улай һыуыкта ҡурай уйнап йөрейһегеҙ?

— Уйындан ҡайтып киләбеҙ. һеҙ икәү генә бер нәмә лә белмәй ултыраһығыҙ. Ярар әле беҙ килеп еттек.

Ҡыҙҙар ҡурҡып киттеләр.

Быға тиклем оялып мейескә ышыҡланып торған Гел•йөҙөм, алғараҡ сығып: '

— Ниңә улай тиһең, Исхаҡ ағай? — тине лә, Айбулаттың үҙенә йылмайып ҡарап торған күҙҙәре менән' осраштьг. Айбулат уға йотлоғоп ҡараны. Был һағынған ҡараш Гөлйеҙөмдөн. йерәген ярһытты.

Айбулаттың:

— Нихәл, Гөлйөҙөм, — тип һуҙған ҡулдарына үҙенең ҡулдарын биргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ул арала һүҙгә әүрәткән Исхаҡ Яланбикәнен төпсөнеүенә, ағаның туғанға була торған орошоу тауышы менән:

— Ниңә лә ниңә, имеш. һеҙ бында шаяраһығыҙ ҙа •шаяраһығыҙ, тәҙрә төбөгөҙҙә егеттәр йөрейҙәр, — тине.



— Кемдәр ул, ағай?

— Кем булһын, билдәле инде, Моратша байҙың туғыҙлыһы! 

Ҡыҙҙар икеһе берҙән:

— Аһа, аһа, — тип аптыраштылар.

— Беҙ белмәнек, ағай. Ҡәһәр һуҡҡан нәмә, бында ни ҡарап йөрей икән?

Исхаҡһаман асыуланды:

— Ни нәмә ҡарай, имёш, һеҙҙе ҡарай. Ҡыҙ күҙләйҙер. Беҙҙе күреп ҡасып киттеләр. Өс егет ине. Тәҙрәгеҙҙе ҡороп ултырһағыҙ булмаймы. ^

— Улай булһа, кәрәктәрен алғандар икән. Беҙ, белгән һымаҡ, уларға бик шәп тертке таҡмаҡтары әйтеп бейештек. •— Яланбйкә көлә-келә баяғы таҡмаҡтарҙы әйтеп күрһәтте. Улар барыһы ла рәхәтләнеп көлөштөләр. Ул арала Исхаҡ Айбулатҡа күҙ ҡыҫты ла, һеңлеһен әүрәтеп, көпөһөнөн, өҙөлгән төймәһен күрһәтте:

— Бикәтәй, ҡана, энә-ебен бармы, төймәмде татс. әле, мә!

Яланбйкә, һабаҡлы энә алып, ағаһы менән һөйләшәһөйләшә төймә ҡаҙай башланы.

Айбулат, Гөлйөҙөмдөң ҡулынан ипләц кенә тартып,. уны ҡашаяҡка алып сыкты ла, ни әйтергә белмәгән кеүек, бер аҙ торғас, ҡалтыраған тауыш менән:

—• Гөлйөҙөм, — тине.

Гөлйөҙөм Айбулаттан ныҕыраҡ ҡаушаһа ла, тәҙрә. тебөнә килгән ят егеттәрҙән ҡурҡыу ҡаплап алғанғамы, уға ниндәйҙер бер ҡыйыулыҡ ҡушылғайны. Ул, башын ҡалҡытып, Айбулатҡа тура ҡараны.

Бәләкәй шәм насар ғына яктырткан ярым ҡараңғы. мейес янындағы был ҡараш Айбулаттын, бөтә барлығын ҡапланы. Ул Гөлйөҙөмдө ҡапыл тартып, ҡосаҡланы да, ҡалтыранған ҡулдары менән ҡыҫып, ирендәренән һурып-
Гөлйөҙөм аҙ ғына тартылды. Ҡыҙарып оялды. Ни әйтергә лә белмәне. Теге яҡта һөйләшкән Исхаҡ менән-Яланбикә уларҙы күргәндәрҙер кеүек тойолдо. Айбулат та аҙ ғына артҡа тартылды. Ләкин Гөлйөҙөмдөн, эҫе ҡулдарын ысҡындырманы:

— һағындым, Гелйөҙөм. Ә һин?—тине.

Гөлйөҙем был һүҙҙәрҙең бөтә яҡынлығын, йЫлылығын тойҙо. Ул, уйлап та тормайынса:

— М.ин дә, — тине. ^

Айбулат был яуаптың йөрәк өҙгөс үткерлеген хис итте. Гөлйөҙөмгә яҡын килеп йылмайҙы. Эҫе бөркөп торған ҡайнар тынын уның битенә һирпеп:

— Ебәргән бүләкте алдыңмы? — тине.

— Алдым. һинсе?

— Мин дә алдым.

— Тимерғәле олатайым килгәнен ишеттеңме?

— Ишеттем.

— Күнмәйҙәр бит.

— Эйе шул.

— Ни эшләйбеҙ һуң?

— Әллә.

Айбулат аҙ ғына уйланды: «Әгәр төптө риза булма-!һалар, ни эшләйбеҙ, һин минеа менән ҡасырһыңмы?..» •— тимәксе булды. Ләкин ҡыҙ менән беренсе күрешеүҙә үк •был һорауҙы ҡуйыу әллә нисек килешһеҙ, Гөлйөҙөмдө кәмһетеү булыр шикелле тойолдо. Никаһыҙ «касып •сығыу» тигән бик ҙур енәйәттең, дин яғынан да, закон яғынан да Гөлйөҙөмгә ни тиклем ҡурҡыныстар, хурлыҡтар килтергәнен ул яҡшы төшөнә. Шуға күрә лә ул:

— Әллә, тиһеңме? — тип һорауҙан тыш бер нәмә лә -әйтә алманы.

Гөлйөҙөм йылмайҙы ла:

— Эйе, — тине.

Айбулат тағы ла Гөлйөҙөмдө ҡыҫып ҡосаҡланы ла, «ике битенән алмашлап үбеп:

— Гөлйөҙем, үлһәм үлермен, һине ятҡа ебәрмәм,— •тине.

Гөлйөҙөмдөң уға яуап итеп әллә ниҙәр әйткеһе кил-.де, ләкин ул һүҙҙәр юҡ ине. Ул Айбулатҡа күҙҙәрен тултырып ҡараны ла:

— Мин дә шулай, — тине.

Бер нисә минут эсендә әйтелгән был һүҙҙәр уларҙың түмерлек вәғәҙәләре ине.

Оялышынан, ҡыуанысынан еҫтөндәге ҡыҙыл күлдәтенән дә нығыраҡ ҡыҙарған йөҙө менән Гөлйеҙем шәм иҡтыһына тартылды. Айбулат, уның уң ҡулын ыҫкын-.дырмай, аҙаҡкы тапҡыр йотлоғоп ҡараны. Юҡ, Гөлйөҙөм бөгөн бигерәк тә һылыу ине. Уртаға ярып тарап үргән ҡара сәсенёң ике оҙон ҡалын толомо ике яурыны аша алға әйләнеп төшкәндәр, остарындағы сулпылар һәлмәк кенә сайҡалалар. һуҙылып һикергән ҡара ҡаштары, оҙон ҡара керпекле йомшаҡ ҡуңыр күҙҙәр көлгән



һайын дуғаланып уйнайҙар. Ҡалынса күпереп торғаҡ бәләкәй ирендәре наҙлы йылмаялар ҙа ҡыҙарып яныге торған бит алмаларына уйҡыл һалалар.

Айбулат бик ҡыйынлыҡ менән генә унын, ҡулдарын> ысҡындырҙы ла, мейестед иҙән яғынан уратып, Исхаҡ: янына сыҡты.

Яланбикә, ағаһынын, ҡалын көпөһөнә энәһен үткәр»-алмай ыҙаланып ҡулына сәнсеп «ә, эм» тип, бармағыа ауыҙына ҡабып, урындыҡ ситендә ултыра.

Исхаҡ уға көлөп:

— Әй бәлеш, ялбыр баш, бир үҙемә, — тине, ул энәнеүткәреп алып, ебен тешләп өҙҙө лә һеңлеһенә бирҙе. Янына килгән Айбулатты ҡабаландырҙы:

— Әйҙә, киттек, малай. Үмәр олатайым ка&тып килһә, һырт ҡайышыбыҙҙы алыр, — тине.

Улар көлөшә-келөшә һаулашып сығып киттеләр.

Ҡыҙҙар ул кисте теген менән булаша алманылар.

Гөлйеҙөм беренсе тапҡыр татыған, быға тиклем таныш булмаған был йәшлек тойғоһонон тәрән тулҡындарынан айный алманы. Йөрәге кукрәгенә һыймай дөпөлдәп һуға, тынын ҡыҫып, башын әйләндерә ине.

Яланбикәнең: «Нимә һейләштегеҙ, Иөҙөкәй, әйт инде», — тип ныҡышыуына ла ул бик һаран ғына яуапланы. Ҡайһы бер ябай һүҙҙәрҙе генә һөйләне. Ә Айбулаттың үбеүе тураһында бер нәмә лә әйтмәне. Ул хакта? әйтеү түгел, уйлау ҙа үҙенән-үҙе оят ине. Шулай итеп,. ул ғүмерендә беренсе тапҡыр серҙәшенән серен йәшерҙе^

## БАШ ЭЙГЭНДӘ

Айбулат аяҡ баҫыу түгел, боролоп ҡарамаҫтай булыш ташлап сыҡкан бейек йәшел ҡапҡаларға, күренмәҫ арҡан менән тартылған кеүек, аҡрын, күңелһеҙ атлап барып инде. Ҡапҡа төбөндә танып ҡаршы алған башматс хәтлем оло һорлан, ике өйҙөң урта соланына тиклем* иркәләнеп, ялағайланып, ҡойроғон болғап оҙатты.

Соландың бәләкәй ейгә инә торған һул яҡ ишегенән-Фариза өлкән еҙ самауыр күтәреп килеп сыкты. Ул, Айбулатты күреү менән йылмайып, асыҡ өндәште:

— Бәй, Айбулат, ҡайтып килдеңме? һаумы?! — Ул-самауырын ергә ултыртты ла ике ҡуллап күреште.

Оҙон буйлы, түңәрәк аҡ йөҙлө, ҡуңыр ҡашлы, һорғолт күҙле, теҙ танаулы Фариза еңгәһен Айбулат, Имай-

Ул ҡыйынлыҡ менән, этеп-төртеп, тағы әллЗ ниҙәр укып китте.

Айбулаттыщ ҡапыл асыуы килде. «Ни нәмәһенә мин гбында хәйерсе кеүек баҫып торам әле», — тип уйланы ла, сығып китертә ҡуҙғалып бейәләйҙәрен кейгәндә, Рәхимәтеге бүлмәнән байпаҡлап килеп сыҡты.

Ул, Айбулатты күреп:

— Аһа, Айбулат, һин дәбаһа. Мин ят кеше икән тип сыҡмай ултырам тағы, һаумы! — Ул ике ҡуллап унын. менән күреште: — Шәп ҡайттыңмы, ҡаскалаҡ? Ни эшләп улайтып ишек төбөндә тораһың, анаулай үтеп, ултырғыска ултыр, — тине.

Айбулат күҙ терәп килгән был өлкән еңгәһенә лә һаулыҡ һорашыуҙан башҡаны әйтмәне. Теләр-теләмәҫ кенә алға атланы ла мейес эргәһендә торған ултырғыска -барып ултырҙы.

Рәхимә ҡартына өндәште:

— һин, сәй эсмәйһеңме? Өйләгә киткәнеңсә, ошонда =ына ултыртып бирһендәр.

Ҡарт, укыуынан туктап, китапты тәҙрә төбөнә һалып -ҡуйҙы ла бөтә кәүҙәһе менән байбисәгә боролдо:

— Әллә, эсһәм эсеп алайым, әҙерләт. Дәүләт купецжә Моратша старшина килеп төшкән икән. Бегөн аҡшамдаң сығыуға беҙҙе ҡунаҡ күрергә саҡырҙы. Кесе улы килеп әйтеп китте. Бармағанда ла ярар ине лә.

— Әллә. Уныһы килеп сыҡтымы ни әле уның? «Бармағанда ла ярай», тип ни, бармай яраймы? Моратша тоҡомдары мәңге дошман булһалар ҙа, ауылыңа килгәс, тсунаҡ күрергә бармай ҡалыу ирлек түгел инде ул. Сатсырырға хәленән килмәне, ҡунаҡ күреүҙән ҡасты, тиер.

— Уныһы бар инде. Әллә ҡайҙа даның китер. Ныяз€ол бай һаҫыҡ бай икән, кешегә аралаша белмәй икән тип, исемде һатыр ул, мәлғүн. Сер бирергә ярамай.

Рәхимә, ишекте асып, кешеһеҙ соланға:

— Ҡана, килендәр, ҡайһығыҙ бар шунда. Ҡайныңа самауыр ултыртығыҙ! — тип ҡыскырҙы ла кире урыны-' на барып ултырҙы. Шунан ул:

— Айбулат, сисенеп ултыр, сәй эсерһең, — тине лә һүҙендә булды:

— Моратша ҡоҙа булып килгән, имеш, тигәндәрен мин Дә ишеткәйнем. Төбәп килгән ҡыҙы Үмәр ҡоҙанын. тшҙы булырға оҡшай. Ҡыҙы бик һәйбәт инде. Бик күр-



зләлекле, эшкә лә унған. Урыны килгәндә, биреп. ҡуйғаиы яҡшы инде.

Айбулатҡа был һүҙҙәр энә кеүек ҡаҙалдылар. Унын: «Юҡ, мин Гвлйөҙөмде уларға әллә нигә лә бирәсәк түтелмен», — тип ҡысҡырғыһы килде. «Тик бына аҡса ғына кәрәк, ағай, һин миңә ике йөҙ һум бир ҙә, мин бвгэн •үк уны үҙем алайым», — тип анау мейештә ултырған Ныязғолдоң ҡулынан тотоп һелкеткеһе килде унын.

«Ләкин был мөмкинме һуң? Улайтып ул һикереп торһа, был ултырған ике кеше, атаҡ, атаҡ, Айбулатка ни •булған, аҡылдан яҙғанмы, алмаш булғанмы, әллә мал араһында йөрөп, шулай әрһеҙ булып киткәнме, тип аптыраясаҡтар. Н.и эшләргә?.. Бында берҙән-бер юл — Рәхимә еңгәнен, һүҙен тыңлап, көпөнө сисеп ишек төбөндәге анау сөйгә элергә лә көтөп ултырырға, Ныязғолға ҡаршы һүҙ әйтмәҫкә, түҙергә кәрәк. Бәлки, берәй унайы килеп сығыр». Ул шулай уйланды. Ишек асылды. Унан иң алдан ашъяулыҡ, табанса, батмус күтәреп Фариза, унын, артынса, самауыр күтәреп, Мәғфүрә килеп инделәр ҙә, сәй ултыртып, сығып киттеләр. Фариза тағы, инеп, сәйде сәйнүк, бер таштабаҡ һары май, һауыт менән бал, күпертеп бешерелгән сырламалар, һыуыҡ ҡаҙылар ташып, һауыт-һауыт итеп батмусты уратып ашъяулыҡҡа теҙҙе лә сығып китте.

Ныязғол, Рәхимә менән һөйләшә-һөйләшә, ашъяулыҡҡа яҡынланы.

— Моратша, алйот улына тирә-яғынан ҡыҙ таба алмағас, беҙҙең ауылға килеп еткән икән. Үмәр ҡартҡа берәй һүҙ һалдырып кире ҡаҡтырғанда, иллә ҡыҙыҡ булыр ине. Танауы төшөп, мездәм булып ҡайтып китер ине теген.

Рәхимә, ашъяулыҡҡа, яҡынлашып:

— Әйҙә, яҡын кил, Айбулат, — тип сәй яһарға тотондо.

Айбулат, бөтә тартыныуҙарын онотоп, ашығыс сисенде лә самауыр эргәһенә аяҡ салып ултырҙы. Уға, сәй эсеүҙән бигерәк, уларҙың һүҙҙәренең ҡайҙа барғанын ишетеү кәрәк ине. Ныязғолдон, һуңғы һүҙҙәренән әллә ниндәй емөт яҡтылары яҡтырғандай булды. Ләкин һүҙгә ҡыҫылып, берәй уй йөрөтөргә улар алдында унын хаҡы юк ине. Был ҙур әҙәпһеҙлектән һанала ине.

— Ҡуйсы, юкты. «Көлгә аунаһын, көнөн күрһен». Кешегә уҫаллыҡ уйлап гөнаһҡа төшкәнсе, ҡуй!

Рәхимәнең был яуаптарына Айбулаттың бик асыуы килде.

Ныязғол, ҡатынына ҡырын ғына ҡарап, дауам итте;

— Ул минә бик күп баҙ ҡаҙыны инде. Үткән һайлауҙа мин старшина булып еткән ерҙә генә, киҫә арҡыры тешөп, бетә эште боҙҙо бит. Ул, әгәр бите булһа, минең ауылға ҡыҙ һорап аяҡ баҫыу түгел, урамдан үтергә оялыр ине. Эй ҡарсыҡ, улайтып бөтә үҙенә дошман кешеләргә юл ҡуйып ултырһаң, ер өҫтөндә йерәрләгәң дә ҡалмаҫ. һин генә ул гел хоҙайлығынды уйлайһың, аҡ күңел.

— Ярар инде, булған эш булған. «Таш менән атҡанға, аш менән ат», тигән боронғолар. Старшина булмаһан да, оло түрәләр алдында һинең ҡәҙерен, уныҡынан алдын йөрөй. Ҡайҙа барһаң, һүҙен, үтә. Алла шул байлығыбыҙҙан айырмаһын да, Имаметдиндең башы һау булһын. Ул губернаһына барып етер әле. Ҡана, эсеге? сәйегеҙҙе. Айбулат, майҙан етеш.

Ныязғол Рәхимәнең һүҙёнән риза булдымы, әллә уны еңә алмаҫын белдеме, өндәшмәй сәйгә кереште. Тик сынаяғын эсеп бөткәс кенә:

— Ғәзимә менән Миңлекәй ҡайҙа, ни эшләп сәйгә инмәйҙәр? — тине.

— Улар ҡунаҡҡа киттеләр. Шәһәрбану ҡоҙаса аталарынан ҡунактан ҡайтҡан да күстәнәс эсергә саҡырған. Миңә лә әйткәйне лә, бара торманым инде, һин дә өйҙә булғас.

Айбулат, өс шәшке сәй эсеп түңкәргәс, Ныязғол, уны яңы ғына күргән һымаҡ, күтәрелеп ҡарап һүҙ ҡушты:

— йә, Айбулат батыр, һөйләп ебәр. Ни ҡыйратып ҡайттың? — тине.

Айбулат:

— Ҡыйратманым, ағай, ни ҡыйратайым? — тине.

— һуң?

Айбулат, был һорауҙың ни аңлатҡанын да тешөнә алмай,'Ныязғолға ҡараны.

— Сит байҙарҙа эшләгәс, бик байып, мал йыйып ҡайттыңмы әллә, тим. Урыҫ байының малы ла, аҡсаһы ла беҙҙеке кеүек түгелдер инде. Ни эшләп ҡышларға ҡалманың?

Ныязғолдоң был мыҫҡыллы һүҙҙәренән Айбулат үҙенен Имай менән булған бөтә бәрелештәрен күҙ алдына килтерҙе. Ныязғолдоң был һүҙҙәре: «Аға^йын, менән талашып, ҡыйтайышып ситтә эшләп йөрөһәң дә, бер ҙә арҡан нәмәң юҡ икән, ҡустым, һаман шул йолҡош икәнһең», — тигән һүҙҙәр ине.

Айбулат ғәрлегенән уттай ҡыҙарҙы. «Ә һеҙгә етеһигеҙ йыл тир түгеп эшләп ни йәлсеткәйнегеҙ?», — тип •яуаплағыһы килде, ләкин, алдан үҙенә биргән вәғәҙәһе буйынса, сер бирмәҫкә тырышты, өндәшмәне.

Уға Рәхимә ярҙамға килеп ҡатышты. Ул үҙенен. көйлө тауышы менән яйлап ҡына ҡартын тынысландырҙы:

— Ризығы ситкә сәселгәс, йөрөгәндер шул инде. Ҡайҙа, ниндәй ерҙә, ни ашарға, ни эсергә хоҙай маңлайына яҙған булһа, бәндә шунда бит инде. Бына хәҙер ҡайтты. Берәй ерҙән ҡыҙ юнләп, кәләш әйттереп бирһән, бынамын тигән ир булып китер. Үҙебеҙгә ҡулғамытлыҡ итер. Беҙҙә ни, ана, әллә ни тиклем урыҫтар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа, мишәрҙәр ҙә ашап яталар. Эшләгәс ни, ҡайҙа ла барыбер инде ул.

Ныязғол был юлы Рәхимәнең һүҙҙәренә баш эймәне:

— Ризыҡ сәселер шул, ни зшләп сәселмәһен. Бер туған тигәндәй ағаһының йөҙөнә ҡара яғып, башынан атлап ситкә яллана. Урыҫ ялсыһы булғансы, ошонда бергә көн итһә, булмағанмы1

Рәхимә ҡартының был тынын да яҡшы һиҙә. Шуға күрә лә ул уның ынғайына һыпыра:

— Эйе, уныһы бик дөрөҫ. Әйтерен, бармы, Айбулат, кесе кешегә ағайҙарҙың ҡаҡҡанын, һуҡҡанын да аҙыраҡ күтәрергә кәрәк шул. Улай күкрәк булып йөрөү ярамай, кемдеке — шуныҡы. Кешенән оят. Эйелгән башты ҡылыс сапмай ул.

— Ана шуныһы шул — кеше һүҙе. Булмаһа, Айбулат һымаҡ бер малайҙың минен, ейөмдә булыуы ни ҙә, бул~ мауы ни. Минен, уға ҡалған көнем юҡ әле, — Ныязғол бер аҙ туҡтап торҙо ла тағы өҫтәне: — Әйҙә, үҙе яҡшы булһа, минән эш ҡалмаҫ, — тине.

Айбулат хурлығынан ҡара янды. Маңлайынан шыбыр тир аҡты. Арҡаһы ҡыҙып тирләп, күлдәге йәбеште. Был ауыр һүҙҙәрҙең сиге булмаҫ кеүек күренде.

Әлдә Ныязғол һүҙен шунан артыҡҡа һуҙманы.

— Ҡана, бисә, йыйһындар сәйҙе, мин өйләгә кнсәүләйем,—• тине.

Сәйҙе баяғы килендәр йыйыштырып алдылар. Ҡарт намаҙға әҙерләнде. Буҫтау тышлы тамаҡ тунын кейеп, стена буйына һуҙылған бейек көҙгә алдында көмөш төй-

мәләрен элде. Бейек ҡуңыслы ялтыр ситектәре өҫтөнә ҡаталарын, башына Рәхимә әҙерләп тотоп торған ҡама бүркен кейҙе лә тура атлап сығып китте.

Рәхимә Айбулатты тағы өгөтләне:

— Ағайыңдын, ҡылығын беләһең бит. Уға бер ҙә ҡаршы килергә ярамай. Ул үҙенең ыңғайына тороп, үҙенә эйелеп килгәндәрҙе ярата шул. Кисә әле мин, Мәғфүрә килен әйткәс, һинең турала бик оҙаҡ һөйләшкәнгә күрә генә, бөгөн бер аҙ ипкә килде. Булмаһа, һине күҙемә күренмәһен, тупһама аяҡ баҫмаһын, тип һырт биреп тора ине әле ул. Берүк, ҡаршы килмә, Айбулат, үҙең өсөн әйтәм. Йәш кеше, һине мин өйрәтмәй, кем өйрәтһен?

— Еңгә, яҡшы һүҙеңә рәхмәт. Мин һине тыңламай, ҡайҙа барайым? Үҙең килһен тигәнгә, һиңә таянып килдем. Мәғфүрә еңгәм әйткәндер бәлки, Үмәр ҡарттын, ҡыҙы Гөлйөҙөмдө ситкә ебәрмәҫкә ине... — Айбулаттыц: «Бер-беребеҙҙе яратышабыҙ», — тип әйткеһе килде. Ләкин ул Рәхимәнен. ул нәмәне тешенмәйәсәген белә, уныц: «Әллә, яратыу-фәләнде белмәй ғүмер иттек, шунда ла улыбыҙ ул, ҡыҙыбыҙ тшҙ, донъябыҙ донъя», — тип һөйләнгәнен электән дә ишеткәне бар ине. Шуға күрә ябай һүҙ менән дауам итте. — Нисә ҡат яусы ебәреп, атаһы күнмәне, маһәрҙе, ҡалым, туйҙы бик ауыр һалды. Ағайым ошо тәңгәлдә бер ярҙам итһә, изгелеген онотмаҫ инем.

Уны диҡҡәт менән тыңлап ултырған Рәхимә:

— Бына кәрәк булһа, — тине, — иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр. һуң әле генә ишетеп ултырҙың бит ҡыҙға ҡайҙан ҡоҙа килгәнен. Үмәр уға ҡыҙын ҡуш ҡуллап бирә инде ул. Ә һин, туй үткәс дембөргә тигәндәй, бушты һөйләп ултыраһың.

Айбулаттыц өҫтөнән һыуыҡ һыу ҡойғандай булды. Уныц уйына Ҡотлоярҙын: «Рәхимә еңгә ул йомшаҡ йәйеп ҡаты ултырта», — тигән һүҙҙәре килде. Шулай ҙа үҙенең болоҡһоуын баҫырға тырышып, ҡулындағы бүркен йомарланы ла тағы бер ынтылды:

— Еңгә, шунда ла әйтеп ҡара әле.

— Булмаҫ, Айбулат. Кеше эшенә ара төшөп, эш сыҡмаҫ. Ҡуй, илдә унан бүтән дә ҡыҙҙар бөтмәгәндер әле. Ағайың да шуны әйтер, һин дә бушты һөйләмә, ҡуй, — тине.



## ӘХМӘҘИ

Ҡыштың тәүге айы ғына булыуға ҡарамаҫтан, ауыл урамдарын, тәпәшерәк өйҙәрен көрт баҫты. Бик иртә килгән ҡыштың сатлама һыуыҡтары менән шартлап тороуы әле киләһе оҙон айҙарҙың бынан да ҡатыраҡ булыуын белдерәләр.

Ҡарттар: «Быйыл йылҡы йылы шул, йонсоу йыл. Утын да, аш-һыу ҙа, мал аҙығы ла башҡа йылдарға ҡарағанда мул кәрәк. Тауыҡ йылында ғына ул, буран өрөп, ел ыжылдауы менән генә ҡотолаһың. Быйыл нужа бабайҙың артынан бер талай өлтәңләргә тура килә. Нисек кенә ҡыш сығып китербеҙ инде?» — тип һөйләнәләр ҙә әләм-һәләм кейемдәрен ҡымтып ҡуялар.

Әхмәҙи, үҙенең бәләкәй өйе тирәһендә ҡар көрәп, аҙбарын таҙартып, аты, һыйыры, башмағына бесән һалып,, ишек алды ҡарын тигеҙләп көрәп алғас, атаһының мәсеттән ҡайтыу юлынараҡ ыңғайлап китте. Үмәр ҡарт бөгвн, башҡа кендәрҙән айырыуса, үҙенең байрамдарҙа, йома көндәрендә генә һаҡлап кейә торған күк бумазый тышлы тунын, ҡыпыулы бүркен кейеп намаҙҙан ҡайта.

Яҡшы төлкө толоп кейгән аҡ сәлләле мулла менән ҡатарлап, бик ҙур эш хәл иткән һымаҡ, ниҙер һейләшәһөйләшә, урам буйлап киләләр.

Мулла тамаҡ ҡырҙы:

— Эйе, эйе, Үмәр аҙамат, алла ҡушһа, эйе, бәрәкәлла, — тип урамдан боролдо.

Әхмәҙи ағас көрәген ҡарға сәнсте лә атаһына ҡаршы атланы.

Ҡарт улына һораулы ҡараш ташланы:

— Нихәл, һаулыҡмы, бала-саға именме?

— Арыу әле хәҙергә.

— Берәй йомош-юнен, бармы?

Әхмәҙи, уң ҡулын бейәләйҙән сығарып, ямаулы көпө өҫтөнән быуған ҡыҙыл билбауын аҙыраҡ төҙәтте. Аяҡ аҫтында яткан туң ат тиҙәген һул аяғы менән ситкәрәк тибеп, ҡалай итеп һүҙ башларға тигәндәй, уйсанырак тауыш менән:

— йомош тип инде, атай, йомош тиһәң дә, кәңәш тиһәң дә ярай. Ҡоҙаларҙың килер ваҡыты ҡасан әле?

Ата, тыныcһыҙланып, таяғын ҡарға сәнсте:

— Бында һин белмәгән ни эш бар һуң әле? Кисә үҙең ете ағай-эненен, кәңәше уртаһында булдың. Уларҙың һүҙҙәрен ишеттең. Ҡоҙалар иртәнән һуңға киҫкә

киләләр, никах укытабыҙ инде. Әле бына мулла менән һөйләшеп киләбеҙ ҙә, ун алты йәш тульщҡырамаған булһа ла, ун алтыла итеп яҙып никахларбыҙ, тине. Тик бына ҡоҙаның беҙ һалған мәһәр, ҡалым-туйға күнеп тә, мәһәрҙең илле һумын көттөрөүе генә күңелгә оҡшап бөтмәй. Аксаны уны бүлеп-ярһаң, бәрәкәте оса. Никах, туй сығымдарына аҙ китмәҫ бит әле. Кеше шикелле кешеләр менән ағй-эне булып ҡан ҡатышҡас, сер биреп, тартынып тороп булмаҫ инде. Йығылып үлһәң дә; ҡоҙаларҙы әҙәм араһында дан итерлек итеп һыйларға кәрәк. Бойорған булһа, яҙҙан ҡалдырмай түләр әле.

— Атай, эш мәһәрҙә лә, никахта ла түгел әле ул. Ҡоҙа мәһәрен дә түләр, мулла никахын да укыр инде уның. Уларҙан эш ҡалмаҫ. — Әхмәҙи икеләнеп туктаны.

— Йә, улай булһа, ни нәмәһендә һуң?

— Кейәү буласаҡ кешене халыҡ бик яманлай бит әле. Аҡылға ла бер төрлө тиҙәр. Әллә үҙем Таллыға барып егётте күреп ҡайтайыммы тип уйлағайным. Кисә күмәк кеше араһында өндәшмәүемдең мәғәнәһе лә шул ине.

Үмәр ҡарт улының был ҡыйыу һүҙҙәренә иҫе китте. Аптырауынан һүҙен әйтә алмай, Әхмәҙигә ҡарап.ирендәрен бер талай йыбырлатып торҙо. Уның шып-шыма булып, түбән һыпырылып торған сал һаҡалы үргә кәкшәйҙе. Түңәрәк битенең йыйырсыҡтары ризаһыҙлыҡ менән йыйырылдылар. Ҙур түцәрәк күҙҙәре еҫтендәге күҙ ҡабаҡтары тағы һалына биреп, уларҙың ҡарашын ҡырҡыулатты:

— Был... был ни тигән һүҙ тағы? Быға тиклем кем кейәү күҙләп ҡыҙ биргән? Егет үҙе ҡыҙ күҙләй торғайны, ә һин тағы ниндәй егет күҙләү йо-лаһы таптыщ?

— Күҙләй тип ни, мин кешегә белдермәй генә, яйлап кыша барып киләйем. Ҡыҙ биргәс, унын, кемгә. барыуын белгәнен, яҡшы түгелме һуң? — Әхмәҙи икеләнеп уйланды ла: — Бәлки, ҡыҙҙың үҙ күңеленә оҡшаған кешеһе барҙыр, уның был кешегә барырға бер ҙә ризалығы юҡ тиҙәр еңгәләре, — тине.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Үмәр ҡарттың асыуы сигенә етте, ҡомһарҙы. Бер улына, бер аяҡ аҫтына ҡарап ғәрләнгән, үпкәләгән, кәмһетелгән, шул уҡ ваҡытта үҙен ҙур күрһәтергә тырышҡан атай кеше тауышы менән улына ташланды:

— Ошо икән, ошо икән һинен, тел төбөн! Ни битен, менән атайыңа ошондай һүҙҙәр һөйләргә баҙнат итәһең? Ул ни тигән һүҙ ул, ҡыҙҙың күңеле тартҡан кешеһе булһын, имеш. Ҡыҙҙы ҡыҙыл эт муйынына таҡһаң да, китә ул. Оялмайынса, балаһы атаһын өйрәтһен, имеш. Был ниндәй оятһыҙ баш-баштаҡлыҡ! Минең кешенән һорап бирә торған ҡыҙым юҡ. Вәғәҙә бирелгән. һүҙ төйнәлгән. Бындай яҡшы урынды, көндөҙ сыра яндырып эҙләһән дә, табып буласаҡ түгел. «Старшина улы» тигән исеме генә ни тора! Ә ул тиклем мәһәр, туйҙы беҙгә бүтән кем бирә? — Ул тауышын түбәнәйтте.— Әгәр яҡшы ғына йөрөп, үҙенде ҡыҙҙың төп ағаһы итеп, минең эшемә аяҡ салмаһаң, килен менән ҡалымға алып барырмын, бөтә туймаҙар мәшәкәтендә лә үҙен, ҡатнашырһыщмы тиһәм, һин һаман шул үҙендең алйотлоғондо ҡуймайһыщ икән.

Үмәр ҡарт, һүҙе бөткән һымаҡ, ҡапыл туктаны ла ҡайтырға боролдо.

Әхмәҙи, уньщ артынан эйәрә биреп:

— Атай, мин ни, әйттем дә ҡуйҙым. һинен. эшеңә ҡыҫылып, ниәтенде боҙайым тигән уй түгел ине. Тик ана Гөлйөҙем Айбулат менән күрешеп һөйләшә икән тип, ауыл тултырып, һейләп яталар. Исем-атағы сығып ҡуйһа, уны ҡоҙалар ишетһә, алданыраҡ уйлаған яҡшы булырмы тигән кәнәшем генә, — тине.

Ҡарт был яңы хәбәрҙән тағы ҡара янды:

— Ай, йеҙө ҡара икән! Әйттем бит. «Ҡыҙ аҫырағансы ҡыҙыл эт аҫыра», тип белмәй әйтмәгәндәр ул. Ҡыҙ баланы уны тот та ун йәшенән кейәүгә бир. Еткерһән., шулай итеп йеҙенә серкеү килтерә бит ул. Ай ләғин! Етмәһә, һин дә шуны яҡлашаһың. Хәҙер мин ҡайтып унын. эт һыйыш китәреп юнайы-м әле, дуңғыҙҙыщ! — Ул, елтерәкләп, елләнеп атлап китте.

Әхмәҙи уны тағы туктатты:

— Атай, әгәр ҡоҙаларынды кире ҡайтармайым, дау сығармайым тиһән, тауыш ҡуҙғатма инде. Шулай. бөтһөн. Гөлйөҙөмдө үҙебеҙгә ебәрегеҙ, никах үткәнсе, үҙем ҡарауылылармын, — тине.

Ҡарт, был баш әйләндергес ҡайғыларҙан арыған һымаҡ уфлап, мацлайындағы тирен һөрттө. Улының һүҙенә тәьсирләнеп туктаны ла хәлһеҙләнгән тауыш менән:

— Ана, исмаһам, шундай ҡолаҡҡа яҡкан кәңәш бир. Юкты һөйләп ҡырмыҫкаға таяҡ тығаһың. Ярай, аллаға тапшырайыҡ инде.

Улар икеһе ике яҡка юнәлделәр.

## ҠАЙҒЫЛЫ ХӘБӘР

Гөлйөҙөм ейҙәге эштәрен иртә үк бөтөрҙө. Буш ваҡытында әңгәмәләшеп ултырырға әхирәте Яланбикә өйҙә юҡ, ҡунаҡтан ҡайтмаған. Шуға күрә ул, ҡаба төбө алып ҡайтып, йөн эше менән булышырға уйлап, кәзәкейҙән генә Хәмдиә еңгәһенә китте,

Бегөн унын күңеле күтәренке. Иөрәге, әллә ниндәй бер еңел генә шатлыҡ осҡоно төшкән кеүек, йылы ғына булып елпелдәп һуға ине.

Ул, барып инеү менән, еңгәһенең усаҡ янында сүкәйеп ултырғанын күреп, артынан килеп муйынынан ҡосаҡлап тартып йыҡты ла рәхәтләнеп көлдө.

— Эй еңгә, төптә хәлең юҡ икән. Серәкәй! — тине.

Еңгәһе:

— Ай шаян ҡыҙ, билемде ауырттыраһың бит, — тип ҡысҡырып ебәрҙе лә, усына таянып тороп, үҙе лә бергә көлөштө: — Әйҙә, әйҙә, шаярып, уйнап ҡал. Бына үҙенде старшина улына биреп ашаһаҡ, һин дә серәкәй кеүек кенә булып ҡалырһың әле, — тине.

— Бирә, бирмәй ни! Мине ашап, бирән ҡорһаҡ булырһың. Барамдыр шул мин уға. — Ул, һаман шаян көлөп, урындыҡ ситенә барып ултырҙы. Хәмдиә, усаҡта сытырҙап янған сағыр төбөрҙәрен теҙәтә-төҙәтә, бикәсенә сер систе:

— Бармай ни хәл итерһең. Эште бөтөргәндәр инде.

Гөлйөҙөм, аптыраулы, ышанмаған күҙҙәрен тултырып, еңгәһенә ҡараны, ҡаушаған тауыш менән:

— Еңгә, юрый алдатаһыңмы әллә ысынды һөйләйһеңме? — тип һораны.

Хәмдиә, унын янына килеп, яурынына ҡулын һалды.

— Юҡ, бикәскәйем, уйнап һөйләмәйем, ысын, — тине. — Мин ул эште бынан бер йома элек ишетһәм дә, һиңә әйтергә йәлләп йөрөнәм. Әле бөгөн бына ҡәйнәй: «Килешеп беттек, туй-ярағын күрә башларға кәрәк», — тигәс, түҙмәй, һиңә әйтеп тороуым. Берүк, мин әйткәнде кешегә белгертмә, йәнемде алырҙар.

Быға тиклем уйнап-көлөп һөйләнгән был хәбәрҙен. быңдай ысын теҫ алып китеүенә Гвлйеҙөмдең ышанғыһы килмәне. Тик еңгәһенең бөтә ваҡ-төйәктәре менән ентекләп һөйләүе уны ышандыра бара ине.

— Ҡайным үткән кесаҙна көнө ғешвр биргән саҡта, муллаға кәңәш итеп ҡараған икән. «Бына, хәҙрәт, беҙзен. ҡыҙыбыҙ үҫте, төрлө яҡтан яусылай башланылар. Айҙар мәрхүмдең улы Айбулат та һүҙ һалдыра», — тип кәнәшкән икән. Мулла тамаҡ ҡырған булды ла, ти: «Иә, Үмәр аҙамат, унын ниһенә ҡабаланаһың, ашығыу шайтан эше, ҡыҙындың йәше лә етмәгән, никах уҡырға ла иртә», — тигән, ти. Әле инде мулланыщ кейәүе Дәүләт купецкә Моратша бай килеп төшөп, унын улын яусы итеп йөрөтә башлағас, үҙенең был һүҙҙәрен онотҡан, ахыры. Хәҙер: «Бынан да ҡулай урынды ҡайҙан табаһың, изге эште ҡабаландырған яҡшы булыр», — тип әйтә, ти. Ағайың уларҙың араларында йөрөп бөтәһен дә ишетеп ҡайтып һөйләй. Мулландың шәриғәте лә шул, сей тире һымаҡ, ҡайҙа теләһә, шунда һуҙыла, ти. Ҡыҙҙы харап итәләр инде, ти. Бегөн иртәнсәк ул ҡайныма кире ҡағыу тураһында әйтеп ҡарайым тигәнсә, арыу уҡ һүҙгә килешеп алғандар. Ҡайным ағайындың туҙаҡайын ғына осора, ти.

Хәмдиә һаман һейләне. Гөлйөҙөм унын һайын ҡайғырҙы. Еңгәһенән өтәләнеп һораны:

— Еңгә, бетөнләй һөйләшеп бөткәндәрме ни инде?

— Әйтәм бит инде, оҙаҡламай никах уҡыталар". Никахҡа бер һарыҡ, йөҙ ҡырҡ һум мәһәр, туйҙа бер тыу бейә, һалымына ла бер һимеҙ йылҡы малы, ҡайныма бер сапан, ҡәйнемә инә туны, һиңә бер ҡат яҡшы кейем, тағы әллә нәмәләр алырға һейләшкәндәр.

Гөлйөҙөм ни эшләргә лә белмәне. Бер тәҙрә янына барҙы, бер еңгәһе янына килде. Ул ҡуҙғалған һайын, сәс тәңкәләре ҡаҡлығып сылтыранылар. Алһыу йөҙө бер ҡыҙарҙы, бер ағарҙы. Көлеп, һейеп ҡарауҙан башҡаны белмәгән матур күҙҙәре ҡайҙа туктарға белмәй яндылар. Тел әйтергә һүҙ тапманы. Ул үҙенең йөҙөк-беләҙектәр менән тулған ҡулдарына күҙ һалды. Бына уныщ урта бармағында Айбулат бүләк итеп биргән көмөш балдаҡ. Ул уны, кешеләргә күрһәтмәҫкә тырышып, һаҡлап ҡыша кейә. Эй Айбулат...

— Юҡ, еңгә, мин ул кешегә мәңге барасаҡ түгелмен. Еңгә, үҙең беләһең бит инде, Айбулат... — Унын тауышы ҡалтыраны. һүҙенең аръяғын әйтә алманы. Күҙҙәренән эре-эре йәш берсөктәре тәгәрәп төштеләр.

Был Гелйөҙөмдең башланып өлгермәгән йәш ғүмеренең беренсе ҡайғыһыныщ тәүге йәш бөрсектәре ине.

Еңгәһе, ендәшмәй бер аҙ торғандан- һуң, йәлләгән тауыш менән уны әүрәтте:

— Белгән менән ҡалайтайым һуң, йөҙөкәс. Ҡайнымдың һүҙенән берәү ҙә сыға алмай. Ул үҙ ғүмеренә байый алмаһа ла, мал тип хәлдән тая. Моратша байҙың фәләнсә баш йылҡыһы, төгәнсә баш һыйыры, тип ауыҙ һыуы ҡорой. Уны еңеү ҡайҙа ул. Нисек булһа ла, күнергә кәрәк. Бына ағайыңды ла мин ниндәй кеше икәнен дә белмәй килдем. Шунда ла һәйбәт торабыҙ. һин дә шулай күнеп китерһең әле... — Ул Гөлйөҙөмдө йыуатырға ошонан да яҡшы һүҙҙәр таба алманы. Үҙенең уйҙар ебен ялғап алып киткән һымаҡ, сытырҙап янған усағына ҡарап сүкәйеп ултырҙы ла, уң ҡулы менән эйәгенә таянып, тынып ҡалды.

Гөлйөҙөм өҙөлгән тауыш менән:

— Ҡуй инде, еңгә, башымды ашайҙар бит инде!.. — тине лә, буҫығып илап, урындыҡ ситенә ауҙы. Уның күңелендә тик Айбулатты ғына күреү, уға бөтәһен һөйләп, унан ярҙам көтөү ине.

## БАРЫБЕР ЯТТАРҒА ҠАЛДЫРМАМ

Үмәрҙең, ҡыҙы алдында тауыш сығармаҫҡа булһа ла, йыуаш төҫ менән тырҫылдап, юҡ-барға мыжыуы уныҡ кәйефенең насар икәнлеген белдерә ине. Гелйәҙөм сығып киткәс, ул Муйылбикәгә кисәге һүҙҙәрен ныҡланы,

— Ҡыҙыңдың ике аяғының береһен кешегә атлатма. Изге эште ен аралап ҡуйһа, алдың өлөштө! Ишеттеңме әле һин, ауыл араһында ниндәй яман хәбәр таралған? Әгәр ҡыҙыңдың шул йолҡош көтөүсе менән исем-атағы сыҡһа, бел уны, муйыҫыңды өҙөрмөн!

Муйылбикә Гөлйөҙөм менән Айбулаттың яратышыуы тураһында сала-сарпы ишетелгән хәбәрҙәргә бик ныҡ ҡолаҡ һалһа ла, анығын белә алманы. Ҡыҙының бик тыныс йөрөүе, уйынға-фәләнгә бармауы тураһында уйлап, бер нәмә лә юҡтыр, тигән ©мөт менан эстән тыныш йөрөй ине. Кисә Хәмдиәнең: «Гөлйөҙөм ер-һыу илай. Бармайым, тип әйтә», — тигән һүҙҙәренән эсе ҡайнаны. Берҙән, ҡыҙын йәлләп, икенсенән, ҡартынан ҡурҡып: «И аллам, үҙең дуҫ-дошман көлкөһөнән һаҡла», — тип аллаға тапшырып, никах уҡыткас, никах һыуы менән бит, ҡулын йыуындырырмын да бөтөр әле, тип шым ғына илап ҡуйҙы.

Айбулат Гөлйөҙөмдө алып ҡасырға һағалай икән тип ишеткәс тә, дошман һүҙе булыр; күрә алмайҙарҙыр,



тип ышанмаҫҡа уйланы. Ләкин ҡартының көн дә ҡайтып бетә асыуын уға төшереүенә ул түҙмәне. Ҡартҡна ҡаршы һүҙҙәр әйтте.

— Башымды ғына ҡаңғырттың, әйтәгүр! Ҡарғалай -ҡалҡмаған баланы биреп ашайым тип, бетә өйҙең аҫ-тын-өҫкә килтерәһең. Шул Моратшаның ертаҡылына биреп, уларҙың байлығы беҙгә булыр тиһеңме? Айбулат көтөүсе, имеш, үҙең әллә кемдер!

— Мин әйткәнмен, бөткән. Әйткәнде генә тыңла! — Үмәр ҡайҙалыр ашығып сығып китте.

Муйылбикә бетә ҡайғы-ярһыуын өйгә моңайып ҡайтып ингән Гөлйөҙөмгә һелкеп һалды. Күҙ йәштәрен бер ағыҙып, бер һөртөп ҡыҙын өгөтләргә тотондо:

— Был ни тигән эш инде, балам? Атайын, булһа, атайың мине тереләй ашап алып бара. һин булһаң, һин әленән-әле һүҙгә ҡалып бараһың. Мин ҡалай итәйем инде, ике уртала, ҡайһығыҙға булайым? Ысын һүҙме һуң ул, ни эшләп улай итеп атайын, биргән ергә бармайым тигән хәбәр сығараһыщ? Атайың икебеҙҙе лә эт һыйыбыҙҙы китереп туҡмаһа, ил еҫтөндәге ояттан ҡайҙа барып йығылырбыҙ? Мин һине шулай баш-баштаҡ булһын тип һылап-һыйпап үҫтерҙемме ни! Күкрәгемдең аҡ һөтөнөң ҡонон шулай ҡайтараһыңмы?

Гөлйөҙөм башын түбән эйгән кейө әсәһенең әрнеү, өгөттәрен тыңлап, өндәшмәй тик ултырҙы. Уға әсәһе бигерәк йәл тойолдо. Иәлләгән менән уны ни тип тынысландырырға үҙе лә белмәне. Уға бөтә хәсрәтен, бөтә уйҙарын, әллә ни генә эшләтһәләр ҙә, Моратша балаһына бармаясағын, утка-һыуға ырғытырбыҙ тип торһалар ҙа, Айбулатка китәсәген һөйләгеһе килде. Ләкнн әсәй тигән ҡәҙёрле, өлкән кешегә бындай эштәр тураһында бер ваҡытта ла һөйләргә ярамай, оят, тип тәрбиәләнгән Гөлйөҙөмгә бөгөн генә ундай батырлыҡ ҡайҙан килһен!

Әсәһе уны шулай орошоп та бер һүҙ ҙә ала алмағас, туйғансы үкһеп иланы ла: «Әллә балаҡайымды сихырланылармы икән? Моғайын, йә өшкөртөп эсергәндәрҙер, йә берәр шәлкем сәсен, ҡырҡып алып, тупһаға күмгәндәрҙер. Башҡаса булмаҫ», — тип уйланы. Ул ҡыҙының өндәшмәүенән уның үҙенә буйһонмаясағын аңланы. Шулай булмағанда Гөлйөҙем: «Юҡ, әсәкәйем, юкты һөйләйҙәр, тептө юкка көйәһең», — тип әсәһен әүрәтер, үҙе лә бергә илашыр ине. Юҡ, бик һере тора. Харрас баҡшыға ғына барайым да — сихыр булһа, эҫе мәлендә ҡайтарта

һалайым. Ысынлап та, кеше һүҙе дөрөҫкә сығып, Гөлйөҙөм ҡасып китә торған булһа, никах ҡылырға торған кейәү алдына, ҡоҙалар ҡаршыһына ни битең менән сыҡмаҡ кәрәк. Муйыл үҙенең был уйҙарынан ҡото осто. Ашыға-ашыға кейенде лә, башына һоро мамыҡ шәлен унан-бынан урап, ҡаталарыш ҡабаланып эләктерҙе лә, имсе Барсын әбейгә, унан булмаһа, Харрас баҡшыға тип, югерекләп сығып китте. Әсәһе сығып киткәс, Гөлйеҙем һулҡылдап иланы. Ҡайғы менән тулған күңелен йырлап йыуатты.

Әсәкәйем мине тапкас,
Аҡ биләүгә биләгән,
Аҡ биләүҙәргә биләгән,
Бәхетле бул, тимәгән.

Ниңә үҫтем, ниңә булдым мин ҡыҙ
Үҙ теләгем менән тормағаҫ,
Ни эшләтәйем йәннәт һине күреп,
Тиңем менән бергә булмағас.

Ул, илап та, йырлап та арығас, көйәнтә, силәктәрен алып, Ырғыҙҙың ялтыр боҙҙарында уйылған мәкегә һыуға китте.

һыуға барырға алыҫ түгел. Уларҙың келәте артынан йылғаға текә генә тау төшә. Бәләкәй сағында Гөлйөҙөм ҡыштың ҡыш буйы иптәш ҡыҙҙары менән өшөп, ҡыҙарып, ошо тауҙа шүмән эйә торғайны. Шүмән, зыулатып ел сығарып, ҡар туҙандарын туҙҙырып тау түбәненә осоп китә лә үҙенең ҡыҙыуы менән йылға буйлап әллә ҡайҙа шыуып китә. Ҡыҙҙар, сыр-сыу килеп, береһен-береһе ҡыуышалар. Ҡайһылары юлда йығылып төшөп ҡалалар, ҡысҡырышып көлөшәләр ине.

Эй ул бала саҡтар!..

Хәҙер атаһы тауҙың был еренән киртләсләп баҫҡыс яһаған, ат эсерергә, һыуға төшөргә юл һалған. Көн кисәүләгән, кешеләр өйҙәренә ут алғандар. Кис матур. Аяҙ зәңгәр күктә эре йондоҙҙар йылмылдай. Аҡ ҡарҙыбд һалҡынса булып биткә бәрелгән һыуығы Гөлйөҙемдө бер щ тынысландырҙы. Ул, башын түбән баҫып, уйланып атлап, яйлап ҡына мәке янына барып етте. Мәкенең биҙәкләнеп, ҡаймаҡланып туңа башлаған йоҡа боҙон көйәнтә башы менән һуғып тиште. Унын, һуғыуынан сыңҡылдап сыҡҡан боҙ тауышы йылға буйына тәгәрәне.



Ул, силәген батырып һыу алайым тип эйелгәндә генә, йомшаҡ ҡына итеп ҡар шығырҙаған тауышты ишетте. һыуҙың арғы яҡ яр башында ҡапыл ғына кемдер берәү гармун уйнап ебәрҙе. Гөлйөҙөм һиҫкәнеп башын күтәрҙе. Гармунға Айбулат, Исхаҡ, тағы бер нисә егет йырлап ҡушылдылар. Улар Гөлйөҙөмдөң үҙҙәрен абайлағанын күргәс тә, йырлай-йырлай түбән төштөләр.

Абау алла тиһәм дә,
Тиһәм дә, тимәһәм дә,
Барыбер яттарға ҡалаһың,
Өҙөлөп-өҙөлөп һөйһәм дә.

Айбулат, көрт аша һикереп, Гөлйөҙөм янына тештө. Ул, үҙенең ҡайғыһын белгертмәҫ өсен, Гөлйөҙөмгә ҡарап йылмайҙы ла, ашығып һуккан йерәген тыйырға тырышып, аҡрыш ғына итеп:

—• Гөлйөҙөм... — тине.

Гөлйөҙөм, быны ишеткәс, бөтә быуындары ҡалтырап, Айбулатҡа мөлдөрәп ҡараны.

Айбулат уның йөҙөндәге был тиклем ҙур үҙгәреште күргәс, аптырап та, уны йәлләп тә, тағы ла аҡрыныраҡ тауыш менән:

— Гөлйөҙөм, һиңә ни булды?.. — тине. Яҡыныраҡ атланы. Ләкин был мәке ҡарҙары аҙ ғына ҡаплаған асыҡ урында бөтөнләй яҡын килеү ҡурҡыныс, һәр кемдең күреүе мөмкин ине.

Гөлйөҙөм Айбулатты күреү шатлығынан да, башына төшнән ҡайғынан да тулҡынып ҡайнаған йерәгенең дөпелдәп һуғыуын хатта үҙе ишетә ине. Ул Айбулатҡа ни тип әйтергә лә белмәне. Был минут эсендә ни генә әйтеп аңлатаһың. Ул көслөк менән:

— Бер нәмә лә булманы... •—тигән булды.

Унын бөтә хәлен һүҙһеҙ аңлаған Айбулат, үҙе лә йерәк өҙөп барған әрнеү менән көрәшеп, тыныс булырға һәм Гелйөҙөмдө лә тынысландырырға тырышты:

— Гөлйөҙөм, һин ҡайғырма. Улар теләһә Һине Ҡаф тауы артына алып барып ташлаһындар, барыбер мин һине улар ҡулында ҡалдырасаҡ түгелмен. Йеҙөкәс, үҙең беләһең, мин ебәргән яусыны атайындар ҡырҡа кире һуғып ҡайтарҙылар. Тегегә бирергә килешеп беткәндәр икән.

һуңғы һүҙҙәр Гөлйөҙөмдөң йөрәген әрнетеп сәнселделәр. Ул, быға тиклем булған бөтә тартыңыуҙарын оно-

топ, башын ҡапыл артҡа ташлап, Айбулатҡа тура ҡараны. Уның был ҡарашында шул тиклем ҡыйыулыҡ, ҡырҡыулыҡ бар ине. Ул Айбулаттың һүҙҙәре әйтелеп бөтмәйенсә үк:

— Юҡ, Айбулат, мин ул кешегә үлтерһәләр ҙә бармайым, — тине.

Айбулат, күптән анһығып көтөлгән был ҡиммәтле һүҙҙәрҙе ишеткәс, үҙе лә һиҙмәҫтән шатланып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ысынмы, Гөлйөҙөм? Улай булһа, әйҙә, икәүләп берәй яҡҡа башыбыҙҙы алып сығайыҡ та китәйек! Әгәр һин.ҡурҡмаһаң, кеше һүҙе тимәһәң, риза булһаң? Гөлйөҙөм?..

Гелйөҙөм быға тиклем томанлы ғына уйлап йөрөгән был «кейәүгә ҡасып китеү» тигән хурлыҡлы атаҡтың бөгөн ысынлап та күҙ алдына килеп баҫыуына аптырап ҡалды. Ул был хәлдән һуң үҙен ни тиклем язалар көткәнен белә. Ата-әсәһенең ҡарғышы, үсле кешеләрҙең шатлығы, мулланың теге донъяла башы мәңге тамуҡтан сыҡмаҫ тип ҡурҡытыуҙары, старостаның ҡарттар менән бергәләп уның йөҙҙәренә ҡором буяп, алама септәләр тағып, муйынына ат ҡамыты кейҙереп: «Минән ғибрәт алығыҙ», •— тип урам буйлатып йөрөтөп ҡысҡыртырға ҡушыуы, бирелгән иренең, урядниктәр менән килеп, ҡыҙҙың сәсенән һейрәп туҡмап алып ҡайтыу фажиғәләре, барыһы ла йәшен тиҙлеге менән унын, уйьшан үттеләр. Ул тағы ла Айбулатҡа инәлеп ҡарап икеләнде:

— Эй Айбулат. Оят булыр бит. Биткә ҡара яғырҙар. Урамда йөретерҙәр, урәдниктәр килер, һиңә ауырлығы тешер. Тимерғәле олатайымды тағы ла ебәреп ҡара.

— Ярай, Гөлйеҙем, тағы ла ебәрермен. Әгәр һаман күнмәһәләр, китербеҙ, Йөҙөкәс! Ҡурҡма, берәүһенән дә тырнаҡ менән дә сирттермәм. Әллә ҡайҙа китербеҙ, Йөҙөкәс! Ваҡыт аҙ ҡалды. Беҙгә тик бер генә юл шул инде, — ул үткер күҙҙәрен шул тиклем йомшаҡ, иркә итеп Гелйөҙемгә текләне лә яуап көттө.

Ошо ҡараш Гөлйөҙөмгә ышаныс бирҙе. Эсендәге бөтә . ауырлығын тышҡа бөрккән кеүек, тәрән тын алды ла:

— Ул ваҡытта... китербеҙ, — тине.

Айбулат был яуапты ишетеү менән бик нык шатланды. Тағы ла аҙ ғына яҡынырак атланы. Уныц Гөлйөҙемдө ҡыҫыш ҡосаҡлағыһы, күтәреп алғыһы килде. Ләкин



был урында ул мөмкин түгел ине. Ул тик бик аҡрын тауыш менән генә:

— Гөлйеҙөм, йәнем, бәғерем... вәғәҙә, — тине.

Гөлйөҙөм өндәшмәне. Эйелеп силәктәрен күтәрҙе. Ул арала ҡайҙалыр йәшенеп көтөп торған Исхаҡ килеп етте. Ул:

— Тиҙ бул, Айбулат! — тине.

Улар югерә-атлай китеп барҙылар.

## ҠЫҘЫҢ СИХЫРЛАНҒАН

Муйылбикә, баҡшы Барсын әбейҙән ҡаратып, әле килгән үҙе менән бер туған апаһына башына төшкән ауыр хәлен һөйләп ултыра.

•— Бына, апай, иҫ киткес эшхәр булып китте. Иә, исмаһам, һин юҡһың. Ауыл ашаһы ер бит. Йыш килә алмайһың. Кемгә барып кәңәш итергә лә аптырайым. Әле бына Барсын әбейгә барҙым. Уның күршеһе Сәхиптең кесе улы сәсрәп ауырып киткән. Шуға ҡот ҡойорға барған. Эттән ҡурҡҡан икән, ҡурғашында ялбыр эт һүрәте төшә, ти. Шуны көтөп ултырып, оҙакланым. Ҡайтҡас, кейеҙ өҫтөнә йәйеп, ноҡот һалып ҡараны. «Бик ваҡытлы килгәнһең. Тап ошо икенде-а^шам араһында ҡараһаң, күренә инде ул», — тине. Ҡайтып ингәс тә шулай, ти, хикмәт шикелле. Мин әле уға ниңә килгәнемде лә әйткәнем юҡ. Баҡшы тиһәң, баҡшы инде. Сәсе-башы туҙған, өй эсе боларып бөткән, һыуыҡ, бахырҡайҙың. Бер баш ҡорот менән ҡыйырсыҡ икмәк бирҙем. Ҡыуана-ҡыуана ҡараны. Шул. Баяғы ҡырҡ бер ноҡотто әллә нисә бүлде. һаман бер теҫ сыға, ти. Өшкөртөп эсергәндәр, ҡыҙыщдың сәсен ҡырҡып алып, ҡырҡ төйөн төйнәп, тупһаңа ла күмгәндәр, ти. Сихыр ғәләмәте, күрәләтә сихыр ғәләмәте, ти. Хәҙер ана шул тупһанан аша атлаған һайын йөрәгенә елкереп, күңеле әләнләп тора икән, ти. Әйтерһең, берәү алдан һөйләп ҡуйған тиерһең. Ғәжәп шикелле бына, өҫтөнә генә баҫып әйтеп тик ултыра. Шуға аҙыраҡ күңелем тынысланып ҡайтты әле. Бына өшкөргән тоҙ бирҙе ул. — Муйыл яулыҡ осондағы бер семтем тоҙҙо усына ҡағып алып, мейес соҡалағындағы бер ағас ҡалаҡҡа бушатып, өҫтөн сепрәк менән ябып ҡуйҙы. Үҙе һүҙендә булды:

— Бына, тине, ете төн уртаһында тороп барып, мәкенән бер сүместәй һыу алып ошо тоҙҙо иҙ ҙә ҡыҙындың

яҡкан урын еренә һибәлә, шунан ҡалғанын таң ваҡытында алып сығып түпһәңдын. тыш яғына эргәләтеп кенә ҡойоп сыҡ. Алла бирһә, ҡул менән һыпырып алған кеүек булыр, тине. Бөгөн шулай итеп ҡарайым әле. Харрас баҡсыға ла барайым тигәйнем, Барсыш ебәрмәне. Ҡуй, йөрөмә, бына минең әйткәнде генә эшлә, тине. Шунан мин уйлайым, әллә, ҡороғоро, үҙе сихырлаған булып, үҙе ҡайтарамы икән, тим. Булмаһа, бигерәк белеп тотондо бит. Уны халыҡ бик һөйләй, бик әмәлсе, тиҙәр. Ер аяғы ер башынан килеп ҡараталар бит.

Ғәззә әбей алыҫ юлдан йәйәүләп, өшөп, арыш килгән. Ул, мейескә арҡаһын терәп ултырып, туғанынын, һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлай. Ул Муйылға ҡарағанда байтаҡ оло. Иәшенә ҡарап, ҡыйыҡса ташлап таҫтар бәйләргә күсмәһә лә, йыйырсыҡлы бите, нужа менән баҫылған күҙҙәре уны тағы ла ҡартыраҡ күрһәтәләр. Иәштән тол ҡалып, етем балалар аҫырап үҫтереп, ул донъяның әсе-сөсөһөн Муйылға ҡарағанда күп күргән. Сихыр хәлдәрен дә күп ишеткән. Ләкин донъяның бөтә ауырлығыш үҙ өҫтөндә үткәрә килгән был тәжрибәле, аҡыллы ҡарсыҡ ундай юҡ-барҙарға бик күптән ышанысын юғалтҡан ине. «Ҡуй, булмаҫ. Кешенең маңлайына яҙылғанды берәү ҙә имләп кенә үҙгәртә алмаҫ. Унын менән яҙмыш юйылмаҫ. Күргәнбеҙ инде. Бәхетең булмаһа, башыңды бөгәһең дә ҡамытыңды һөйрәй бирәһен, икән ул», — ти торғайны. Бегөн дә ул һеңлеһенен, былай өтәләнеп йөрөүенә, ышанып һейләүенә ысынлап ҡолаҡ һалһа ла, эсенән ышанманы. Ләкин башҡа ваҡыттарҙағы кеүек, ҡырҡа ҡаршы төшөп тә, уның күңелен һындырғыһы килмәне. Муйылдын, һүҙе бөткәс:

— Ярай инде, маташтырып ҡара, тик балаға бер нәмә лә эсерә күрмә. һыу һөлөгөндәй һылыу ҡыҙҙы аяҡтан йығып, ситлеккә бикләгән һандуғастай итеп һарғайтырға ни йәнең тарта? Ишеткәс тә күңелем ытырғанды. Исмаһам, һин ризалыҡ бирмәһәңсе? — тине Ғәззә әбей.

Унын. был һүҙҙәренән Муйылдын. хәтере ҡалды. Иламһыраған үпкәләү тауышы менән:

— И апай, кейәүевден, холкон беләһен, бит. Беребеҙҙе лә тыңламай. Ирешеп, талашып та бөттөк инде. Риза булыу ҡайҙа ул. Ҡартҡа, толға, үгәй өҫтөнә килеп, үҙем аҙ ҡайғы күрҙемме? Яңғыҙ баламдын, үҙ тиңе менән йәшәүенә мин ни эшләп ҡаршы булайым инде? — тине.



һыу көйәнтәләп ҡайтҡан Гөлйөҙөм уларҙың һүҙен бүлде. Ул силәктәрен һикегә ултыртты ла, югереп килеп, Ғәззә инәһен ҡосаҡлап күреште. Ғәззә әбей уның арҡаһынан тапап һөйҙө, башынан һыйпаны. Ҡарт күҙҙәре менән уның йеҙөнә иркәләп ҡараны ла:

— Собхан алла, ҡайһылай ҙурайып үҫкәнһең. һау ғына бул. Бәхетле бул, — тине.

## ҠАНАТ ҠАҠҠАНДА

1

йоманан сыҡкас, Тимерғәле ҡарт юлда Ныязғолдо осратырға тырышты. һүҙҙән һүҙ сығарған кеше булып, уратып-ҡыялатып, Айбулат тураһында һүҙ асты.

— Ай Ныязғол ҡусты, ғүмер үтә бит. һә тигәнсе йомаһы ла килеп етеп тора. Ел кеүек үтә. Әле бына ҡасан ғына һинең атайың мәрхүм менән ошолайтып мәсеттән ҡатарлап ҡайта торғайныҡ. Бик ир-егет ине, мәрхүмең. Иманы юлдаш булһын.

— Шулай, Тимерғәле ағай. Фани донъя шулай үтә тора. Беҙ генә донъя ҡыуабыҙ тигән булып, ҡасан үлебеҙҙе белмәй, алланы иҫтән сығарып ташлайбыҙ.

— Хәлдән килгәне шул инде. Үҙе ҡабул итһен. Бына әле һинең артыңдан ҡарап килдем дә, йөрөшөң хас атайың. Ә холҡоң уға оҡшап етмәгән.

Төлкө тунды ярпайтып асып, йәйрәп барған Ныязғол, үзенең ғәҙәте буйынса, Тимер ҡартҡа ҡарамай ғына еңел көлдө:

— һе, ниңә улай тиһең, Тимерғәле ағай?

— Юҡ, былай, һүҙҙән генә әйтәм. Үҙең, күреп тораһың, да инде. Ҡустыңдың танау аҫтынан Моратшалар ҡыҙын тартып алып яталар, ә һин бер боҫтоҡ та бошмайһың.

— һуң, бошоп ни, Айбулат һораған, улар бирмәгән. Егет булып йөрөп үҙе ҡыҙ ала алмағас, мин ҡалай итәйем. Әйҙә, бирһендәр. Ҡыҙҙың аҙағы булыр тиһеңме? — Ул ғәмһеҙ атлауында булды.

Ләкин Тимер ҡарт та унан ҡалышманы:

— Бына шуның өсөн әйтәм дә шул. Атайың бахыр булһа, шул Моратша тоҡомона сер биреп, үҙ нәҫеле алам тип торған ҡыҙҙы уларға ебәреп тороr инеме, бик намыҫлы ир ине бит ул, бахырың! Моратша бай, Үмәр ҡы-

ҙын улына алып бирһә: «Бына Бөрйән тоҡомоноң күҙ терәп торған һылыу ҡыҙын тартып алдыҡ. Ныязғолға мал түгел, ҡыҙ алыу ҡайҙа ул һыҡмырға, ҡырҡһан, ҡаны сыҡмаҫ, шундай һаран», — тип маҡтаныр инде. Әле кисә Дәүләт купецтәргә тәкә һуйып бирергә барҙым. Әйткәс, тыңлайым тип барғайным, аш ашарға ла ҡалдырҙылар. Шул, Моратша эстәршинә ярыла бит. «Мин көтөүселәр менән ярышып та тормайым, ти. Ныязғолдон. ата-бабаһынының сабата кейеп бесән сабып йөрөгән сағы бына ғына тора. Ә беҙҙең. тоҡом борон-борондан Бузыкай кантондан килә», — ти. Ауыҙына һуғып булмай, һөйләй.

— һун, көтөүсе тиһә ни, мин көтөүсе түгел дә.

— һин булмаған менән, Айбулат шул уҡ беҙҙең егет бит. Исеме бит унын, дан китеүе. Айбулат, малы булһа, аямаҫ ине, юҡты ҡайҙан алһын. Әгәр һин керешһәң, шул Үмәр ҡартты күндереп булмаҫ инеме? Акса ғына кәрәк. һинә ул сүп тә түгел бит. Бына унда һүҙең дә һүҙ булыр, үҙең дә еңгән исеме күтәрер инең.

Ныязғол Тимерғәлененң был һүҙҙәренән тәрән уйға тештө.

...Ысынлап та, Моратша бай тоҡомо менән унар йыл буйына һуҙулып килгән талашты ул ни эшләп онотоп ебәрҙе һуң әле? Атаһы мәрхүм, Өсүҙәндән күсеп килеп, Ырғыҙ буйында ер бүлешкәндән бирле: «Улар беҙҙең ҡан дошман, уларға үткәндә сәләм дә бирмә», — ти торғайны. Үткән һайлауҙа Ныязғолдоң старшина булыуына ла ул кисә арҡыры төшөп үҙе ултырҙы. Хәҙер бына байлыҡ мулайҙы. Киләһе һайлауҙа үҙенә старшина булып үтергә кәрәк. Имай: «Унын, кәрәге юҡ, аҡсаң ғына күп булһын», — ти ҙә бит, был дөрөҫ түгел. Хөкөм үҙ ҡулыңда булғас, ни эшләһән, дә — үткәреп була. Тик бына шул Моратша кеүек дошмандарҙы еңергә кәрәк. Улар тағы ла алдан әҙерләнеп аяҡ салырға тырышасаҡтар. Ҡара һин уны, өсөнсе көн генә килеп түремдә ҡунаҡ булды. Ул әле булһа килеп Ныязғолдоң ашын ашай, сығып фәйбәтен ашай икән. Тимәк, тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай. Айбулаты ла ҡандай мәшәҡәткә тарытты. Үҙе сәсрәп китһен ине лә, исемде һата бит әле... Ул туктаны ла бөтә кәүҙәһе менән Тимерғәлегә боролдо:

— йә, һин һун, Тимерғәле ағай, ошо хәбәрҙәрҙе ишетә тороп, ниңә әллә ҡасан килеп әйтмәнең уны? Хәҙер кене еткас, эш таҡалып терәлгәс, килеп хәбәр һейләйһең.



— һүҙ йөрөтәү минең эшем түгел, әле тик һүҙ ыңғайы сыҡҡанға әйтеп китәм. Айбулат тураһында Рәхимә киленгә нисә тапҡыр әйттем. Айбулат үҙе һинә барҙы. Бергә сәй эскән саҡта, үҙең бит: «Минән эш ҡалмаҫ», — тигәнһең. •.

— һин, Тимерғәле ағай, ҡарт башың менән юҡты һейләйһең! Ир кеше бисәләре менән аҡыллаша торғайнымы? Уларҙың сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа бит ул. Айбулаты тағы, ауыҙына йөҙөк йәшереп, өндәшмәй-тындашмай сәй эсте лә ҡайтып китте. Мин уның ни уйлағанын ҡайҙан беләйем?

— Донъя күрг.ән иргә сәйнәп ҡаптырыу кәрәкмәй. Кешенең тын алғанын да һиҙә белергә кәрәк. Айбулаттың башында бала аҡылы. Беҙгә үҙебеҙгә уйлашырға кәрәк.

Ныязғол ҡыҙып китте:

— Әйҙә, Тимерғәле ағай, хәҙер үк Үмәр ҡартҡа минең исемдән яусы булып бар. Ул Айбулат алйотлоғона ҡарап, бында дан һатыр хәл юҡ әле. Шул бит, ана, етем аҫырап изгелек күрәһеңме ни? Ни саклыға төшһә лә, Үмәрҙе кире дүндереп,- ҡыҙҙы һалдырып алырға кәрәк. — Үҙе күңелдән тиҙ генә иҫәпләп алды. «Бер йөҙ, ике йөҙ, өс йөҙ сыҡһын. Шунан Айбулат та быға тиклем даулашып йөрөгән бер душ ере тураһында ендәшә алмаҫ. Ошо расходҡа һуғаһың да ҡуяһың». Был ҡарарҙан уға тағы ла күңеллерәк булып китте. «Бер юлы ике ҡуян атыла бит», — тип уйланы ул.

— Ана шулай кәрәк шул! Исмаһам, ир һүҙе ишетәм. Тукта, мин өйгә генә инеп сығайым да йомошомда булырмын, һинә тиҙ үк хәбәр итермен.

Тимерғәле, шатлығынан югерә-атлап, өйөнә, унан сығып, Ҡотлоярға килеп, дошманын еңгән батыр һымаҡ, башын ҡаҡайтып хәбәрҙе һалды:

— Иллә, йығылһам йығылдым, айҙы күккә сығарҙым тигәндәй, Ныязғолдоң ауырткан еренәнтотоп ҡысҡырттым әле! Утка баҫҡан бесәй һымаҡ, ҡайҙа баҫыр урынын тапмай, өйөнә китте. Намыҫҡа текәлгәс, шулай була ул, хатта сәй эсергә лә саҡырҙы.

Унан шаулашып һораштылар. Ул яңынан һәйбәтләп, берәмләп, булған бөтә һөйләшкәнде ҡабатланы.

Быға ышанысһыҙ ҡараған Ҡотлояр, усаҡ көлдексәһе ҡаршыһында тәмәкеһен боролдатып өрә-өрә, мыҫҡыллы көлдө:

— Иә, йә, кем еңер икән. Ныязғол да улай иреп киткәс, таштар сәскә атыр инде. Иртән ҡояш кире яҡтан сыҡмаһа ярар ине.

Мәғфүрә ирен орошоп ташланы:

— Ай-һай, һинең шул телеңде! Эш ыңғайланғанда кеше кирегә һөйләмәһен ул!

Көтөлмәгән был боролоштан аптырап ҡалған Айбулат ишек төбендәге һандыҡ өҫтенә йыйылған ҡораҡ юрғанлы, ала тышлы яҫтыҡлы урынға һөйкәлеп, уларҙын, һөйләшкәнен һүҙһеҙ тыңланы. Ул был сыр-сыуҙын. бик һуң булғанын, Ныязғол менән Тимерғәле ҡарттың хәҙер инде никахҡа килеп терәлгән эште кире һүтә алмауҙарын яҡшы төшөнә ине. Шуға күрә, Тимерғәле ҡарт китеп, ейҙәге ҡупкан тауыш баҫылғас, ул Ҡотлоярға кәңәш итте:

— Ағай, бөгөн кис никах укыйҙар, ти, бит. Мулла никахты укып өлгөрһә, эште кире һүтмәҫтәр бит?

Ҡотлояр, уға ҡарамай, тәмәке тартыуында булды. Бер аҙ уйлағас:

— Ә ҡыҙ ни ти һуң? — тине.

— Ул ни тиһен? Алып китһән, китә лә барам, ти. Аҙағы нисек булыр икән? Кире алып ҡайтып, туҡмап, иренә кесләп биреп ебәрерҙәр тип ҡурҡабыҙ.

— Эй Айбулат, мин һине ир-егет икән тип уйлай торғайным. Бер толкһыҙ малай булып сығырһың, ахырыһы!

Айбулат ғәрләнеп ҡыҙарҙы ла ҡапыл урынынан торҙо:

— Ниңә шулай тиһең, һиңә кәңәшеп әйтәм бит! — тине.

— Ниңә, имеш. Ауыҙыңа сәйнәп ҡаптырғанды йота алмағаныңа асыу килә. Донъяла ҡуяндан ҡурҡып йәшәгәнсе, йәшәмәгәнең артыҡ. Гөлйөҙәм маладис ҡыҙ икән!

— Ни эшләйек һуң, шуға кәңәшәм дәбаһа! Мин үҙем өсөн ҡурҡаммы ни, ҡуян, имеш!

— Мин һиңә әллә ҡасан әйттем. Ҡыҙҙы алып ҡас та кит. Бар, шунан эҙләп алһындар! Мулла китабынан фәтүәләр тапҡансы, һин Ивановкала булырһың. Ҡыҙ үҙе риза булғас, уны көсләп алырға закон юҡ ул. Алып кит тә, шау-шыу баҫылғансы, күҙҙәренә күренмә. Урыҫ ауылына барыуың яҡшы. Сөнки башҡорт ауылдарыш-да хәбәр тиҙерәк таралып килеп етер. •

— Ныязғол ағайға белгертәйемме, ул ни әйтер икән?



— Унын, ни әйтеүе һиңә кәрәкмәй. Ул хәҙер Моратшаға ҡаршы сәмләнеп керешкәс, һинен, турала уйламай ҙа ул. Хәҙер улар, ике әтәс кеүек, ер тырнап, бер-береһенә ырғышып сәкәләшәләр инде. һин ҡыҙҙы алып китеүенде бел. Ҡалғанын беҙ үҙебеҙ бында яйларбыҙ. Ныязғол, аҡсаһын йәлләмәһә, эште тиҙ төҙәтер. Төҙәтмәһә, ихтыяры, төкөр шуларға, инәлеп йөрөмә! Ҡайтып килергә ашыҡма. Ҡыйрап ятҡан донъян, юҡ әле. Бик оҙаҡҡа китһә, шунда берәй мулла һьшаҡ кеше тап та, ижап .^кабул яһат. Указный мулла булмаһа, никах укый алмай ул. Ә былай ғына йөрөүегеҙ килешмәҫ. Мин хәҙер үк Расторгуй утарындағы Михайланын, пар ҡара атын егеп ҡайтайым да, улар никах утшп ҡайнашҡанда, һин Исхаҡты күсергә ултырт та, әйҙә, Ивановкаға һыҙ. Унда минен, менән көтөү көткән Гаврилаға төш. Аттарынды Исхаҡ кире ҡайтарып бирер ҙә үҙе, белмәмеш булып, өйҙә тик йөрөһөн. И шуның менән эш тә бөтә.

— Атты бирһә ярар ине знакомың?

— Ул турала уйлап та тормайым. Бер һүҙһеҙ бирә. Михайла ул бик егет кеше. Ауыҙ ҙа астырмаҫ.

Ул арала тәҙрә төбөнән, ялпылдап атлап, Исхаҡ үтте. Ул өтәләнеп килеп инде.

— Әй Айбулат, булмаҫ, ахыры, Тимерғәле олатайым, «Үмәр ҡарт һәйләшмәй ҙә», тип ҡайтып бара. «Ир һүҙе бер булыр, мин ҡурсаҡ уйнамайым», тип әйтә, ти. — Ул тағы ниҙер әйтергә ахылдап тотонғайны, Айбулат унын. һүҙен бүлде:

— Ярар, Исхаҡ. Теләһә ни эшләһендәр. Беҙ бында икенсене уйланыҡ. Тик Гөлйөҙәмдө генә ҡоткарып алыу кәрәк, уны бер ҡайҙа ла сығармайҙар, — ти.

—- Алып китәһеңме? — Исхаҡ шатланып ҡысҡырҙы. — Гөлйөҙөм тураһында ҡайғырма. Уны Хәмдиә еңгәләргә ебәрмәй хәлдәре юҡ. Ә Хәмдиә еңгәне үҙем күндерәм уны. Кейем-һалым Яланбикәнеке булыр. Тик Әхмәҙи ағай белмәһен инде. Ул тәүҙә бирергә риза булмаһа ла, атаһын еңә алмағас, хәҙер ҡаршы түгел. Ҡасыруға үлһә лә күнмәҫ, ғәрләнер.

Ҡотлояр уларҙы асыуланып туҡтатты:

— Етәр, малайҙар, күп ләпелдәмәгеҙ! Бик һаҡ булырға кәрәк. Өтәләнеп эште боҙорһоғоҙ әле. Бар, Айбулат, минең ҡоланы эсереп кил дә, мин Расторгуйға киттем. Ҡояш байыуға пар ат менән өйҙә булырмын. Штобы әҙер тороғоҙ. Бер ерҙә лә шылт тигән тауышы-

ғыҙ сыҡмаһын, ишеттегеҙме? — Ҡотлояр, күҙҙәрен аҡырайтып, бармаҡ ҡағып команда бирҙе, — барығыҙ, йәһәтләгеҙ!

Айбулат ат эсерергә, Исхаҡ, яйлап атлап, Әхмәҙиҙәргә китте.

Төштән алып кискә саҡлы дауыл алдынан тынған серле һауа кеүек, бөтә ауыл тып-тын ҡалды.

Гөлйеҙөм, еңгәләренен, мейесе янында ҡулдарын артҡа ҡуйып һөйәлгән көйө, тыныс булырға тырышты. Бер ҡурҡып, бер шатланып, бер асыу менән типкән йөрәгенең дөпөлдәүен үҙе генә белә ине. Күҙҙәге йәштәр ҙә киптеләр. Тик бөтә эске болоҡһоуҙы күрһәтКән биттәге сөм-ҡыҙылдар ғына тәҙрәнән тешкән ҡояш сыуағына нурланды. Күкрәккә һыймай ташып барған тулҡындар ауыр керһөндөрә. Тын шул тиклем эҫе, хатта Гелйөҙемдөң ал ҡыҙыл ирендәре ҡарағусҡыл булып ҡыҙарып ярылдылар.

Уны еҙләкһеҙ күҙәтәләр. Әсәһе, ҡоҙа һыйлау мәшәҡәттәрен ташлап, әле бер, әле икенсе йомош тапҡан булып, Әхмәҙиҙәргә килә. Ҡыҙының тыштан тыныс күренгән йөҙенә абайлатмай ғына ҡарап йәлләй ҙә ҡайтып китә.

Гелйөҙөмдөң янына ситтән бер кемде лә индермәйҙәр. Тик Хәмдиә генә, ҡайныларына бер барып, бер ҡайтып, йомошҡа югерә. Самауыр алып бара, шәшкеләр, туҫтаҡ, ҡалаҡтар ташый. һалма баҫа, һалма йәйә, ҡайта һалып, Гөлйөҙемгә ашығып шыбырҙап хәбәр итеп тора.

— Ҡояш байыуға ҡоҙалар бында булалар. Шәм алғас та, никах уҡыйҙар. Моратша бай мәһәрҙе тағы утыҙ һумға үҫтергән. Көттөрмәй, барыһын бер юлы бирә. һуңынан, берүк, минең белгәнде әйтә күрмә, һылыуым! Ағайын, үлтерер. Мин нисек тә Яланбикәне янына килтерергә тырышырмын. Ҡәйнәмә әйтһәм, тыңлар. Ҡайным да әллә нисә һорашты: «Ни эшләй, иламаймы?» — ти. йәлләй, ахыры, үҙе. «Иламай, уйнай, килеп һөйләшә», — тип яуап бирҙем. Белмәһәләр генә ярар ине. Китһәң, исмаһам, күҙең күрмәҫ. Әллә ҡайҙан эҙләп таба алмаҫтар әле.

Унын был әле ишеккә, әле тәҙрәгә ҡарап ҡ-урҡып шыбырҙауының күбеһен Гөлйөҙөм аңламай. Уға хәҙер барыбер. Бөтә кеше һөйләйәсәк, көләсәк. Ҡасып ҡотола алмаһал-ар, әллә ни саҡлы ауырлыҡ, хурлыҡ күрәсәк, Ул быларҙың бөтәһенә лә алдан күнгән. Тик әсәһенә генә



•ҡыйын булыр. Атаһы кире кеше, бирешмәҫ әле. Ләкин уныһы ла аяулы, йорт алдында... ниҙәр генә булһа ла, ул береһенә лә ҡарамаясаҡ. Тик өйҙән генә ысҡынып сығып китеп булһын...

Ҡояш тауға терәлгәндә, Яланбикә килеп инде. Гөлйөҙөм, стенаға һөйәлеп торған еренән ҡуҙғалып, Яланбикәне ҡосаҡлап алды:

— һине нисек индерҙеләр, Яланбикә?

— Әллә, Муйыл еңгәм үҙе әйтте. Гөлйөҙемдөн. бер үҙенә ҡыйындыр, янына бар, тине. Мин килеп ингәндә туп-тулы кеше ҡарап торалар ине. Бөтәһе лә, ни эшләрҙәр икән, тип аңдып торалар, ахыры. Дәүләт купецтең Ширәйе һыҙғырып ҡалған булды, ҡараманым. Ҡәһәр һуҡҡыры, шул шымсы булып йөрөйҙер әле. Исхаҡ ағайым уны, арлы-бирле булғанса, бал эсереп иҫертәбеҙ, ти.

— Айбулат ҡайҙа?

— Ул иптәштәре менән урамда йөрөй. Ҡотлояр ағайым атҡа китте бит, ишеттеңме һуң?

— Еңгәм әйтте.

— Ағайымдар һине ошо минен. кейемдәрҙе кейһен дә сыҡһын, мин ҡайта икән тип уйларҙар, — тинеләр.

Улар тәҙрәнән һүҙһеҙ генә ҡарап ултыра башланылар.

Ана, урамдың уң яғында, бер өй аша, Гөлйөҙөмдәрҙең өйө. Ана, уның атаһы, ҡабаланып, бер инеп, бер сығып йөрөй. Хәмдиә, лавканан ике оҙон бау ҡалас алып, муйынына тағып, ҡайтып килә. Ҡулында ла ҡағыҙға ураған төйөнсөктәре бар, монпаси, йөҙөмдөр инде. Мөрйәнән ҡуйы тетөн борлай. Тимәк, аш беште, хәҙер һалма ҡайнатырға әҙерләнәләр. Ул арала пар ат егелгән ике сананы сажлатып, өс кеше килеп туҡтаны. Уларҙын. береһе — төлкө тун, ҡама бүрек кейгәне — Моратша. Уның һимеҙ ҡыҙыл бите, ялпаҡ танауы һыуыҡҡа тағы ла нығыраҡ ҡыҙарған. Янындағы аҡ сәлләле, күк тышлы кәзәкей тун кейгән мулла менән улар ипләп кенә сананан төштөләр. Уларҙан алда үҙ санаһынан һикереп төшкән лавкасы Дәүләт, тунының көмөш төймәләрен ысҡындыра-ысҡындыра, әллә ниҙәр һвйләп килә, ялағайланып, Моратша старшинаға сананан тешергә ярҙамлаша. Ана, Үмәр ҡарт өҫтөнә кәзәкей, бүрек кенә кейгән дә, аҡ ыштанынышң балаҡтарын өлтәңләтеп, ҡунаҡтарға ҡаршы сыҡты. Уларҙы әйҙәләп алып инеп китте. Әхмәҙи, аттарҙы башынан алып бороп, һарай алдына кәртәгә алып

йнде лә, эркелешеп торған йәш егеттәргә туғарырға ҡушып, өйгә югерҙе.

Өй эсендә ҡыран-ҡыйҡыу килделәр, күрәһең. Аҫмалы лампаның тәҙрәнән төшкән яҡтыһында күләгәләр йылпылданы. Ишек төбө бала-саға, бисә-сәсәләр менән тулды. Ҡайһыһы ярҙамлаша, ә ҡайһылары былай ғына ҡарап торалар.

Гөлйөҙөм быларҙың бөтәһенә ҡарап ултырҙы ла:

— Эй Яланбикә, ашанылар бит башты, харап иттеләр, ҡотолоп булманы инде, — тине.

Яланбикә дуҫының башын күкрәгенә ҡыҫып әүрәтте:

— Ҡайғырма инде, Иөҙөкәс, ҡайғырма. Хәҙер сығырһың да китерһең. Ана, әллә кемдәр килә.

Ҡаранғы соланға ике кеше шыптырҙашып килеп инде. Ҡыҙҙар ҡуркышып ырғып торҙолар. Ләкин уларҙав алда Хәмдиә ашығып килеп инде лә уларҙы тынысландырҙы.

— Ағайындар ризалыҡ һорарға киләләр, — тине.

Алдан Әхмәҙи, унан Иомағужа килеп инделәр. Иомағужа, урындыҡ янына яҡын килеп:

— Иә, туғаным Гөлйөҙөм, атаң биргән ергә — Моратша бай улы Сәйетғужаға хәләл ефетлеккә барырға риза булаһыңмы? — тип һораны.

Гөлйөҙөм ендәшмәне. Иомағужа һорауын ҡабатланы, яуап булманы. Шунан Әхмәҙи уның салғыйынан тартты.

— Әйҙә, киттек, — тине.

Улар муллаға ҡыҙҙың һорауға яуап бирмәгәнен әйттеләр. Ул был яуаптың бик урынлы булғанына риза булған төҫ менән башын эйҙе лә: «Өндәшмәү — ризалыҡ ғәләмәте», — тине. Шунан ул әғүзе бисмилла менән башлап никах уҡырға кереште. Өй эсен тантаналы бер тынлыҡ баҫты. Ҡыҙыл ашъяулыҡты уратып ултырған ҡоҙалар, ҡунаҡтар, Үмәр ҡарт, Әхмәҙи — бөтәһе лә, баштарын эйеп, бер һүҙен дә аңламаған ғәрәп һүҙҙәрен, мулланың күҙен йомоп ҡалғып-ҡалғып уҡыған ойот-кос тауышын тәьҫирләнеп тыңлап ултыралар. Ә был һүҙҙәр ир енесенең ҡатын енесенә ҡарағанда юғарылығы, ир кеше дүрт ҡатын алырға хаҡлы булып, буласаҡ ир — Сәйетғужаның әле Гөлйөҙемдөң өҫтөнән тағы өс ҡатын алырға ирекле икәне тураһында һөйләйҙәр ине.

Никах уҡылып, доға ҡылынғас, Үмәр ҡарт, ашъяулыҡ еҫтөндәге бер сәйнүк һыуҙы алып, шаршау аҫтынан



бисәһе яғына бирҙе. Дин китаптары буйынса был — «никах һыуы» — бөтә ауырыуҙарҙан дауа ине.

Өй арттары, ишек төптәре, тәҙрә буйҙары ҡыҙыҡһынған халыҡ менән тулып китте.

Бер аҙҙан Хәмдиә килеп инде лә ҡыҙҙар алдына һалмалы ит ултыртты.

— Ашағыҙ, никах ашы, — тине. Үҙе Гөлйөҙөмдөн, битенә әсәһе биреп .ебәргән никах һыуын һөрттө. Уның. янып барған бит алмаларын еүеш ҡулы менән һыйпап,. ҡолағына:

— Исхаҡ килеп китте. «Яр буйында Ғәлиҙәр тирәге төбөндә көтәбеҙ, сыҡһын да тура төшһөн», — тип әйтергә» ҡушты, — тине, шыбырҙап ҡына.

Был хәбәрҙән Гелйөҙөмдең йөҙө аҡ ҡағыҙ кеүек апаҡ булды. Ҡапыл боролоп Яланбикәгә ҡараны. Яланбикә, үҙенең көпеһен ҡабаланып сисеп, уға кейҙерҙе. Яулығын бәйләне.

Хәмдиә тағы ла ныҡ һаҡлыҡ менән:

— Гөлйөҙөм, шикләнерҙәр. һыуға барған кеше бул. Көйәнтә-силәк ал да, мәке янында ҡалдырырһың,—тине.. Үҙе ашығып ҡунаҡлы өйгә югерҙе.

Гөлйөҙем, ҡалтыранған ҡулдары менән кейенә һалып, еңгәһе әҙерләгән көйәнтә, силәктәрҙе алып, тышҡа сыҡты.

Көн буйы сыҡмай ейҙә ултырыуҙан, ашамай илауҙан, көсле тулҡыныуҙарҙан уның хәле бөткәйне. Тышҡа сығыу менән башы әйләнеп китте. Аяҡ быуындары ҡалтыраны. Бөтә кеше тик уны ғына ҡарап торған кеүек булды. Йөрәге ашығып һукты. Ләкин уның кененә әллә» нисә үтеп йөрөгән ҡарлы һуҡмаҡтан аяҡтары үҙенән-үҙеатланылар. Ул ярға еттем тигәндә, баҫҡыста бер ҙуркәүҙәле ҡара кейемле кеше осраны. Гөлйеҙөм, тертләп,. силәктәрен шалтыратып төшереп ебәрҙе. Ҡотлояр үҙенең ҡалын тауышы менән:

— Ҡурҡма, туғаным, әйҙә, югер!—тине.

Гөлйвҙөм, тик ошо һуңғы һүҙҙе генә көткән кеүек,. көйәнтә-силәктәрен аяғы менән тибеп ситкә тәгәрәтте лә* йән-фарманға яр аҫтына югерҙе. Уға ҡаршы ҡулдарьга. йәйеп килгән Айбулат уны, ҡосаҡлап күтәреп альщ, санаға ултыртты. Күсерҙәге Исхаҡ, ҡабаландырып:

— Иә, тиҙерәк, тиҙерәк! — тине.

Күҙ асып йомғансы булмай, пар туры аттар еңел сананы елдереп алып киттеләр.



Ырғыҙҙын, тигеҙ ялтыр юлы менән жыйылдап киткәс тә, Айбулат Гөлйөҙөмдөң ҡар яҡтыһында тағы ла ағыраҡ күренгән йөҙөнә текләп ҡараны. Уға эҫе тынын бөрктө, йерәгенән сыҡкан тауыш менән:

— Гөлйөҙөм, ҡурҡма инде, тынservлан!—тине.

Гөлйөҙөм, хәлһеҙ йылмайып, үҙенең һалҡын битен Айбулаттын, зҫе сикәләренә һөйкәп, уға һыйынды. Айбулат уны бала ураған һымаҡ итеп, башынан алып итекле аяҡтарына тиклем елкән ҡара толоп менән нығытып ураны.

Исхаҡ дилбегә ҡағып аттарын ҡыуҙы ла артта ҡалған ауылға ҡараны. Шунан саналағы дуҫтарына ҡарап ҡыуаныслы көлгән тауыш менән:

— О, киттек, берәү ҙә күренмәй, — тип хәбәр итте, сабып барған аттарға: — Әйҙә, осопалып барығыҙ, хайуандар! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

2

Был ғүмерҙә ғөреф-ғәҙәттә булмай торған, дингә лә, законға ла һыймай торған ғәжәп хәл бөтә ауылдың иҫен китәрҙе.

Ин, тәүҙә Хәмдиә барып ҡәйнәһенен, ҡолағына шыбырҙаны:

— Ҡәйнәм," мин аш алып барғанда ғына Гөлйеҙөм иламай-нитмәй һейләшеп ултыра ине, әле туҫтаҡ алайым тип барһам, Яланбикә генә ултыра. Гөлйөҙөм әллә ҡайҙа сығып киткәнсе... — тине. .

Муйыл, килененең был һүҙҙәренән ҡото осоп, ҡулындағы сынаяҡ аҫтын төшөреп ебәрҙе лә, аңламаған һымаҡ:

— Ә?—тип ҡуйҙы.

— Гелйеҙем әллә ҡайҙа булған тим, ҡәйнәм!

— Уй хоҙайым, ауыҙыңдан ел алғыры! Бар, ҡара ҡайҙа булһын ул?!

Ләкин ул, Хәмдиәнең ҡуҙғалғанын көтмәйенсә үк, үҙе кулдәксән сығып югерҙе. Аҡылдан яҙған кеше һымаҡ, ишеккә ҡаҡлыға-һуклыға, Хәмдиәләр өйөнә барып инде, Яланбикәгә ташланды. Яланбикә ҡурҡышынан ырғып торҙо.

— Ҡайҙа Гөлйәҙөм? Ҡайҙа, күрмәнеңме ни? һин бергә ултыраһьщ дабаһа! Ҡайҙа барам тине? Ни тип сығып китте? Ҡасан сыҡты? Ниңә сығарҙың? Ниңә бергә

сыҡманың? — Ул, үҙенең ни һөйләгәнен дә белмәгән кеүек, һорауҙар яуҙырҙы.

Яланбикә:

— һыуға китте, — тип кенә әйтте лә, башҡа бер нәмә -лә өндәшмәй, башын баҫкан көйө тора бирҙе.

Хәмдиә, Муйыл артынан килеп инеп, уны тынысландырырға тырышты:

— Ҡәйнәм, тукта әле, бик ярһыма, берәй яҡҡа ғына •сыҡҡандыр, һыуҙа булһа, хәҙер ҡайтыр, ҡәйнәм!

Ләкин әбей уға асыу менән екерҙе:

— Ҡыҫылма миңә, ҡара йылан! һинең генә эшеңдер -әле, белмәмеш булып тораһың, юха! Күҙ нурындай һаҡларға ҡуштым. һиңә ышанған булдым бит, алйот! Эй хоҙайым, ҡайныңа ни тип яуап бирәм инде? Бар, ни ҡа;рап тораһың, эҙләп алып ҡайт! — Ул, ярһыуына сыҙамай илап, урындыҡ ситенә ҡоланы.

Хәмдиә, унын, янына ултырып, уны әүрәтә-әүрәтә, Яланбикәгә:

— Бар, ағайынды алып кил! — тине.

Яланбикә, итегед ҡуңалтаҡ ҡына кейә һалып, Хәмдиәнең көпөһөн башы аша бөркәндё лә ҡунаҡлы өйгә чогерҙе.

Әхмәҙи, ҡоҙаларға һурпа бирергә әҙерләнеп, һалманан бушаған табаҡтарҙы шаршау артына шылдырып ултыртты ла, ҡашаяҡ яғында берәү ҙә күренмәгәс, соланға сыҡты. Ике елкән еҙ самауырҙың соланға тулған ҡара төтөнөнә сәсәй-сәсәй:

— Әсәй, Хәмдиә, ҡайҙа киттегеҙ? һурпа бирегеҙ! — тип бушлыҡҡа ҡысҡырҙы.

Яланбикә, югереп килеп:

— Әхмәҙи ағай, һине еңгәм тиҙ генә ҡайтһын әле,— тип ҡалды.

Әхмәҙи шикле тауыш менән:

— Ниңә, ни булған? — тине лә соландан тышҡа •сыҡты.

Яланбикә, был ҡурҡыныс хәбәрҙе ҡапыл әйтергә ҡурҡып, тура яуап бирмәйенсә:

— Муйыл еңгәм дә шунда, илай, — тине.

— Ә, илай, тиһеңме? Ниңә, ни булған? — Ул Яланбиясәгә яҡынырак килде. Яланбикә аҙ ғына арткараҡ ҡалды ла ашыҡмай ғына:

— Гөлйөҙем әллә ҡайҙа булған, — тип меңгөрҙәне.

Әхмәҙи был хәбәрҙе алдан уҡ көткән кеше кеүек:



— Ни эшләп әллә ҡайҙа булған, ҡасып киткәнме әллә? — тип һораны.

Яланбикә, уға яуап биреп тормайынса, ҡапыл боролдо ла үҙҙәренен. өйөнә ҡарай югерҙе.

Әхмәҙи, илашып сыр-сыу килгән ике бисә янына барып инеп, күҙҙәрен асыу менән уйнатты:

— Тегендә ҡоҙалар һурпа көтә, һеҙ ни нәмә эшләгс бында буҙлашып ултыраһығыҙ?

— һиңә һурпа ҡайғыһы! Ана, Гөлйөҙөмдө әллә ҡайҙа ебәргәндәр. Яланбикә: «һыуға барам»,— тип сыҡҡайны, ти. Әллә ҡайһыһы муйынын бороп мәкегә һалғандыр инде. һыуға барырға кем ҡушҡан уға, бынау килендө әйтә күр! — Әбей тағы ла сеңләп илай башланы.

Был хәбәрҙән һуң Гелйөҙөмдө Айбулат алыш китеүенә Әхмәҙиҙед шиге ҡалманы. Был турала Хәмдиәнең белмәүенә лә ышанманы. Гөлйөҙөмдө Моратша улына биргәнгә атаһына ҡаршы булһа ла, никахтан һун. эштек былай килеп сығыуына ул ҡаты ғәрләнде. Тештәрен асыуланып ҡыҫып:

— Иә, етәр, күп сыуылдашмағыҙ! Ауылдан сығып китмәһә, мин унын елкә сәсенән һөйрәп алып ҡайтырмын. Сәғәт эсендә ошонда булыр. Сыуылдашып йәүкәләмәгеҙ!—тип екеренде. Бисәһенә асыу менән ҡарап:

— Әңҙә, йәһәт бул, ҡоҙаларға һурпа бирә һалырға кәрәк! — тине.

Хәмдиә, иренең һүҙен тыңлап, унын менән бергә сыҡты. Әхмәҙи тышҡа сығыу менән уны йоҙроҡлап тәгәрәтә һуғып ебәрҙе. Хәмдиә сүмәксеп барып ҡарға тәгәрәне лә асыу менән:

— Ни эшләйһең, ен! — тине.

— Ни эшләгәнде күрерһең, дуңғыҙ. Белмәмеш була, эт! — Әхмәҙи урынынан торған Хәмдиәне тағы һуғып ебәрҙе.

Ләкин Хәмдиә был юлы бирешмәне, йығылманы» Иренә ҡаршы екеренде:

— Әйҙә, Гөлйөҙөм асыуын минән ал, алйот! — тине. Үҙе алдан китте.

Ҡунаҡ өйөндә әҙерләнгән бер ҙур ҡаҙан һурпаны ҡорот менән ҡатыҡлап, туҫтаҡтарға ҡойоп, иренә бирҙе. Ире, эстән ярһыһа ла, ҡоҙалар алдында сырайын һытмаҫҡа тырышты.

Атаһынын:

— Был ни был, мыштырҙап, оҙаҡлап киттегеҙ? — тип щыбырҙап асыуланыуына ла өндәшмәне.

Ҡунаҡтар уны-быны һиҙмәнеләр. Ҡурай уйнап, йырлашып, хәҙрәт, Дәүләт купец төп ҡоҙа менән һөйләшеп, .рәхәт көлөшөп, сәй эсеп бөткәнсе тыныс ултырҙылар. Ләкин был тыныслыҡ шунан да ары һуҙылманьь Әбейҙең •болокһоп илап ҡайтып, шаршау артына инеүе, Әхмәҙиҙең ҡапыл сығып юғалыуы, килендең; урыҡ-һурыҡ килеп, сәй әҙерләүенең рәте булмауы — бөтәһе лә Үмәр ҡарттын, күҙенән ысҡынманы. Ул эштең ниҙә икәнен тешөнә һалып аптырап ҡалырға өлгермәне, был хә-. бәр ишек алдына йыйылған малайҙар, йәш егеттәр аиш тшҙаларға килеп етте, йәшен тиҙлеге менән бөтә ауылға •таралды.

Теп ҡоҙа, асыуынан ҡобараһы осрп, ат егергә ҡушты. Мулла, ул-был итеп өгөтләп ҡараһа ла, унын, һүҙен тынлаған кеше булмағас, кейенде лә, тамаҡ ҡырып, таяғын ҡулына тотоп, өйөнә шылды.

Әхмәҙи йәштәр һәм ағай-энеһе ярҙамы менән бөтә ауылды зыҡ ҡуптарып эҙләне. Көйәнтә-силәктәрҙең яр •буйында ятып ҡалыуынан, Гөлйөҙөм әллә үҙен-үҙе мәкегә ташланымы икән, тип шикләнептә ҡуйҙы.

• Шуға күрә яр аҫтына фонарь яндырып төшөп ҡаранылар. Тик һуңынан, унда ҡар еҫтөндә ярылып яткан яңы сана эҙҙәрен күргәс кенә, унып ауылдан сығып киткәнен белделәр.

Ҡамсы тотоп сапкан биш-алты һыбайлы, был эҙ артынан өс-дүрт саҡрым барғас, эҙҙе өс юл сатында юғалттылар. Юлдар әле улай, әле былай уҙғанлыктан, унын ҡайҙа боролғанын белеп булманы.

һыбайлылар, өмет өҙөп, кире әйләнеп ҡайтканда, Дәүләт купец, ҡыҙып-туҙып, башың ҡайҙа ҡуйырға белмәй ҡаңғырып ултырған Үмәр карттан түләгән мәһәрҙе, малды кире дәғүәләп ултыра ине.

— Битте был тиклем оятка ҡалдырырға булғас, ундай ҙур урын менән ҡатнашмайҙар ул! Ҡыҙындын, илдәданы киткән, атағы сыккан икәнен белә тороп, һин атай кеше үҙ саманды ҡарарға, үҙ тиндәревде ҡарарға кәрәк ине. Бына Моратша бай: «Бирелгән бөтә мәһәр аҡсаһын, башка бирнәләрҙе бөгөн үк кире ҡайтарһын да, бер сәғәт тә тормай ҡайтып китәм, ә ҡалғанын ҡайҙа барып һейләшергә үҙем белермен, минең старшина икәнде онотмаһын!» — тип ҡыҙа. Беребеҙгә лә яҡшылыҡ булмаҫ



инде. Ҡайҙан һуң беҙ яусы булып. тығылдыҡ әле, хурлығы ни тора! Ҡана, Үмәр ағай, мин тик шул йомош менән генә килгәйнем, — тине Дәүләт.

Ләкин Үмәр ҡарт әллә ҡасан был аҡсаны тотоп бөтә' яҙған: никах мәжлесенә тотҡан, муллаға саҙаҡа биргән,. мал алып һуйған, хәҙер барыһы етмеш һумлап ҡына аҡсаһы ҡалған ине. Уға ҡайғы еҫтенә ҡайғы еҫтәлде.. Ҡыҙының ҡасып китеү хурлығы өҫтөнә хәҙер уны бурыс түләү, Моратшаның ҡурҡытыуҙарынан нисек ҡотолоу хәсрәттәре ҡаплап алды. Ул урындыҡ ситендә, аяҡ-ҡулдарын һалындырып, хәлдән тайып ултыра.

Ул ошо бер-ике сәғәт зсендә әллә нисә йыллыҡ ҡартайҙы. Елкәһе бөгөлдө. Бая ғына шатлыҡ менән ялтыраған маңлайы хәҙер әллә ни тиклем тәрән йыйырсыҡтар. менән һырланды. Ул емөтһөҙ тауыш менән:

— Инде, ҡустым, үҙең белмәгән ни хәл бар? Ул тиклем аҡсаны хәҙер генә ҡайҙан таба һалып бирәйем, ана бит, ни саҡлы расход түктем. Ҡоҙа ҡайтмай торһон, бәлки, ҡыҙ табылыр... — тине.

Дәүләт мыҫҡыллы келдө.

— Моратша байҙын. һинең расходында нн эше бар» унып? Ҡыҙын, ҡайтты ни, ҡайтманы ни, хәҙер унщ бертингә лә кәрәге юк. Әйҙә, старшина балаһын ташлап,. "көтөүсегә сыҡкас, юлы таҡыр булһын. Байға ҡыҙтабылмаймы? Булмаһа, судка бирһә лә, һинен, ҡыҙынды. бөтә мал-ҡаралдыларын. менән тарттырып алдыра ала бит ул. Унын үҙ хекемө үҙ ҡулында. — Ул бер аҙ ендәшмәй ултырғағщан һуң: — Таң атҡансы табырға тырыш,— тине лә күк буҫтау тундың ҡама яғаһын ҡымтып, һаулашмай-нитмәй, ишекте шарт ябып сығып китте.

Үмәр ҡарт, төштә күргән кеүек кенә булш, әле генәгеүләп ултырған ҡунаҡтарҙың эҫеһе лә һыуынмаған урындарына ҡарап ҡатты. Унда иҙелгән мендәрҙәр, сите йомшартылған буй һуҙма юрғандар, биҙәкле кейеҙҙәр, аҫмалы лампа ташлаған түңәрәк күләгә эсендә, ташландыҡ нәмәләр кеүек, аунап яталар. Әйтерһең, Үмәр ҡарттың шундай өмөттәр менән кеткән бәхете күҙ асып йомғансы ғына унын түренә килеп ҡунған да, нимәнәндер ҡурҡкан ҡош кеүек, ҡанатын ялпылдатып, осоп сығып та киткән. Ниндәй кешеләр менән ҡан ҡатнаша ине бит, ә?! Ул быларҙың бөтәһенә ғәжәпләнгән кеүек башын» сайҡап ҡуйҙы ла һаҡалы буйлап тәгәрәгән эҫе йәш берсөктәрен ҡулы менән һыпырҙы.

Был төндө был ике семьяныщ күҙенә йоко инмәнё. Өйҙәгеләр халыктың тәҙрәнән килеп ҡарауҙарынан, инеп-сығып төрлө хәбәр таратыуҙарьтаан аптырап, шәмде һүндереп, ҡараңғыла ҡайғырыштылар.

Әхмәҙи һаман да өйгә ҡайтып инмәй, әле урамда, әле яҡын кешеләренә инеп, югереклэп, ни эшләрен белмәй йөрөнө. Хәмдиә, үҙенең өйендә йыйылған ике-өс апһыны менән әкрен генә һейләшеп, көрһөнешөп ултырҙы. Ул ҡайнын да, ҡәйнәһен дә, Гөлйеҙемдө лә, Әхмәҙиҙән нахаҡ тукмалғаны өсөн үҙен дә йәлләй. Өнһөҙ генә илап ала. Хәҙер Гөлйөҙөмдөң Айбулат менән китеүе бөтә ауыл өсөн дә асыҡ ине.

Тауыш-тын бер.аҙ баҫылып, төн уртаһы ауғас, Үмәр карттың тәҙрәһен иплэп кенә сиртгеләр. Ул тертләп китте. Әбейенә сығып ишек асырға ҡушты.

Был Тимерғәле ҡарт ине. Ул, өйгә инеп, аҡрын ғына сәләм бирҙе, хәл һорашты.

Ҡайғынан тауышы ҡарлыҡкан Үмәр ҡарт:

— Эй ҡорҙаш, хәлдең ниһен һорайһың инде! Утка һалды бит йеҙе ҡара, биткә ҡара яҡты бит, сусҡа бала, ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ! Уй алла... — тине.

Тимерғәле ҡарт уны әүрәтте:

— Ҡуй, ҡорҙаш. Инде ҡарғап ни сыға? Ҡарғышын, төшөп ҡуйыр. Ни әйтһәң дә, һиңә бала бит.

Ләкин Үмәрҙең был һүҙҙәрҙән асыуы көсәйҙе генә:

—• Ҡаты ҡарғышым тешһөн, мәлғүнгә. Иөҙөн күрмәйем, кафырҙыщ. Ҡайтып тупһама баҫмаһын, ике донъяла изгелек күрмәһен. Ата-әсә хөрмәтен белмәгән ләғнәт балаға минән фатиха шул... — Уның тауышы ҡалтыраны, һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә һаҡалы буйлап тәгәрәп төшкән күҙ йәштәре артынан үкһеү тауышы ишетелде.

Тимерғәле ҡарт уны ҡыҙғанды. Шунда уҡ ҡуркышынан унын, күҙ йәшле ата ҡарғышын туктатырға ашыкты:

— Ҡуй, ҡорҙаш, ҡуй. Әйтмәгәнен, булһын! Ул ни эш, күҙ йәше түгеп, үҙ балаңды ҡарғайһың? Бер ни ҙә булмаҫ. Мин бына Ныязғол байҙан килдем, ул мине ошо турала һәйләшергә ебәрҙе. Бөтә мәһәрен түләһен дә Моратшаны кире ҡайтарһын, ҡыҙҙы үҙебеҙ туйлап алабыҙ, тии әйтергә ебәрҙе.

Ләкин ҡыҙған ҡарттын. быға ҡолаҡ һалғыһы килмәне.



— Яңы иҫенә төшкән икән Ныязғолдоң! Башта уҡ әҙәмгә һанап үҙе яусылатҡан булһа, был көнгә, был хурлыҡҡа төшмәй инек. Уға хәҙер бик еңел, «түләһен», имеш. Мин ҡайҙан алайым ти туҙҙырған аҡсаны? Шәриғәт ни әйтә быға? Мулла һиңә уҡыған никахты кире һүтә аламы ни? Ҡыҙ хәҙер үҙ ҡулығыҙҙа булғас, килеп һейләшеүе еңел шул! Минең Айбулат менән мәңге килешәсәгем юҡ. Әйҙә, бөтә донъямды тартып алһындар, хәйерселәп сығып китәйем, хәҙер инде бынан да артыҡ хурлыҡ булмаҫ! — Ул тыны эсенә һыймай ярһыны. һүҙҙәр үҙҙәренән-үҙҙәре сәселделәр.

Уның ҡыҙып-туҙғанын Тимерғәле оҙаҡ көттө. Иренең ҡайғыһына көс биргән кеүек, ул аҙыраҡ туктауға, әбей керешге:

— Үҙҙәре шул көнгә төшһөндәр, үҙҙәре шул хурлыҡҡа ҡалһындар, ҡайнаға, үҙең дә ҡыҙ аҫырайһың әле, бына алла үҙ алдыңа килтерһен. Яҙмыш ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрей ул.

Тимерғәле ҡарт Муйылдың был һүҙҙәренән тынысһыҙланды.

— Ҡуй әле, Муйыл килен! Ул ни тигән ҡарғыш ти? «Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат бәйләнә», тигән. Мин һуң һинен ҡыҙынды яусылауҙан башҡа ни зыян эшләнем? Хурлыҡ тип ни, алла яҙғаны шулдыр инде, беҙ ҙә алда ни булғанын күрербеҙ. Бына әле шуның яйынан килдем. Ныязғол бай үҙе ебәрҙе. Мәһәрен кире ҡайтарһын, тулмаһа, үҙем бирермен, яҙ арендаға алған еренең срогын оҙайтырмын, ти. Моратша артынан көл һибеп ҡалһындар, ти. Мин ни, илсегә үлем юҡ тигәндәй, килдем. Алдығыҙҙамын.

Үмәр ҡарт уйға ҡалды, баҫылыңҡыраны, уны ҡаты аптырашҡа ҡалдырған аҡса мәсьәләһе аҙыраҡ сиселгәндәй булды.

Ул арала тағы ике кеше килеп инде. Уларҙың береһе Әхмәҙи, икенсеһе Ҡотлояр ине. Улар башта ҡарттар һүҙен тыңланылар.

Әбей улынан: V

— Табылманымы? — тип һораны.

Әхмәҙи, керһөнөп:

•— Юҡ, әсәй, — тине.

Ҡотлояр ҡарттарҙың бер аҙ тынысланғанын көттө лә Үҙ уйын әйтте.

— Инде, ҡарттар, һүҙ көрәштереп эш сығара торған ваҡыт үтте. Бына хәҙер эште үҙебеҙсә яйларға кәрәк. Булмаһа, ана, Моратша бай пар атын волоскә саптырҙы, тиҙәр. Урядник килтертә башлаһа, эш ҙурға китер. Үмәр ағай, һин дә беҙҙең һүҙҙе аңла ла ҡуй. Ныязғол бай ыщғайлағанда, әйҙә, бөтәһенә күн. Ул да киреләнһә, дуңғыҙҙан бер бөртөк ҡылды ла ала алмай ҡалырбыҙ. —• Ҡотлояр кинәнгән төҫ менән келөп өҫтәне: — Йәштәр ни, улар ике аҡсарлаҡ кеүек остолар инде. Уларҙы, ете ҡат күк өҫтенә менеп, ете ҡат ер аҫтына төшөп, шәм менән эҙләһәң дә — табалмайһың. инде. Ҡыҙ егет ҡулында, — тине.

Был көлеүҙән Үмәрҙең тағы ла асыуы ҡабарҙы. Ләкин Ҡотлоярҙың һүҙенен, дерөҫлөгө уға ҡыҙып китергә ирек бирмәне.

Ул тик ғәрләнгән баҫынҡы тауыш менән:

— Эйе, хәҙер һеҙ иркен һөйләшәһегеҙ инде, — тине.

Тимерғәле ҡарт Ҡотлоярҙың ҡырҡыулығын йомшартырға тырышты:

— Иркен һөйләшеүҙән түгел, кемден. ағай-эне менән яманлашҡыһы килә. Беҙ һиңә: «Ҡыҙҙы тәүҙә бирмәгәйнең, хәҙер ул беҙҙең, ҡулда», — тигән уй менән һине үсәйек тип килмәнек. Эште яҡшылыҡ, татыулыҡ менән бетөрәйек, тип килдек. Ҡана, ҡорҙаш, әйтер һүҙегеҙҙе әйтегеҙ ҙә, беҙ ҙә үҙ юлыбыҙҙа булайыҡ.

Аҡрынлап баҫылған дауыл кеүек, Үмәр ҡарттын. да асыуы аҡрынлап кәмене. Бик оҙаҡ ошондай һүҙ керәштереүҙән һуң, башҡа юл ҡалмағанын белгәс, ул, үҙенең асыуын баҫырға тырышҡандай, кәслөк менән, тешләнеп риза булды:

— Ярай, күнермен. Дүрт яғындан килтереп ҡыҫҡас, күнмәй, атаңа бараһыңмы! Әгәр минең ҡулымда мәһәргә алған аҡса ғына теүәл торһа ла, мин ҡалай һейләшергә белер инем. Ныязғолона ла, Моратшаңа ла төкөрөр инем мин. Хәлен. булмағас, кемгә асыуланаһыщ!

Ҡотлояр ҙа, Тимерғәле лә униң һүҙен элеп алып киттеләр.

— Бына, бына, күптән шулай тиҙәр уны! Әйҙә, хәҙер үк Ныязғолға барабыҙ, аҡсаны ҡулға алып ҡуй ҙа, иртән Моратша бай менән ҡайҡайып һөйләшерһең. һин үҙ алдыңа старшина булһаң, мин үҙ өйөмдә старшина тиерһең.



Улар эште тиҙ тоттолар. Иртәгеһе кен кискә Моратша бай, мәһәр а^ҡсаһын кире алғанда, бөтәһен дә эттән алып эткә һалып һүкте. Мулланың, әллә ҡайҙан фәтүәләр табып: «Хәҙер Үмәр ҡыҙы Гөлйөҙем һинең улыңа хәләл ефетлеккә ярамай, сөнки ул хәҙер сит егет ҡулында нәмәхәрәмгә әйләнде, уны яңынан алған хәлдә лә ике ай ғиҙҙәт һаҡларға, һәм һеҙгә шул мөддәт эсендә сабыр итергә тура килә», — тип һөйләүенә асыуынан ярыла яҙҙы. Эште былай ҡалдырмай, окружной судҡа бирәсәген, мөфтөйгә яҙып мулланың указын һалдыртып аласағын әйтеп, бармаҡ янап ҡайтып китте.

Ныязғол үҙенекен итте:

Ул яңы һайлауҙарға тиклем Моратша менән бер һелкешеп алып, халыҡ алдында уны күҙҙән төшөрөргә күптән бер мөнтөк эҙләп йөрөй ине. һис көтмәгәндә килеп сыҡҡан был әҙер сәбәпкә ул ихлас йәбеште. Әбейенең, һүҙенә төшөп, тауышһыҙ ултырып ҡалмағанына ҡыуанды.

Пар атта килеп төшкән ҡыҙыл танаулы урядникте ул үҙе сығып ҡаршы алды:

— Ә, һин, Иван Иваныч, тиҙ килдең. Молодец, дуҫлығыңды күрһәттең. Әйҙүк, әйҙүк.

Ул уны өҫтәл янына ултыртты. һыйланы. Эштен, ниҙә икәнен һөйләп бирҙе. Терлө закускалар менән араҡы ҡуйҙы ла, һыйҙың бының менән генә ҡалмаясағын белдереп, мәғәнәле күҙ ҡыҫты.

Урядник, бер стакан араҡыны һуғып алып тамаҡ ҡырғас, риза булған төҫ менән мыйыҡтарын һыпырҙы. Шунан ул:

— Ҡурҡма, Ныязғол. Закон үҙебеҙҙең ҡулда. Окружной судҡа мин Моратшанан алда барып өлгерәм. Унда минең ныҡ таяу бар, — тине, үҙе Ныязғол һымаҡ уҡ күҙ ҡыҫты. Улар икәү бергә эсеп, ухылдашып көлештеләр.

Урядник китте.

...Боҫо боролдап торған майлы ҡурҙаҡ, һары майлы, баллы сәй янында ултырған мулланы ла Ныязғол үҙ һүҙҙәрен табып шымаланы.

— йә, хәҙрәт, эш һиндә инде. «Үткән эштән төш яҡшы» тигәи мәҡәл булһа ла, беҙ уны үҙебеҙсәләп, һин •әйткәндәй, китапсалап алып, берәй яйын табайыҡ инде. Ир һүҙен ерҙә ҡалдырма. Миңә бьщда Айбулаттын, кәләш алыу-алмауында бер зыян да, файҙа ла юҡ. Тик бына нр намыҫы ҡиммәт. Уныһын һиңә һөйләп тора тор-

ғаны юҡ инде. Моратшаны үҙен, беләһең, минең ҡан дошман. Әгәр ошо юлы ул минән еңелеп ҡайта икән, хәбәр бөтә ун алты ауылға таралып, унан көләсәктәр. Шуның бер мөздәм булып ҡайтҡаны кәрәк ине, — тине Ныязғол.

Мулла уны тиҙ аңланы:

— Эйе, эйе, мулла Ныязғол. Әйтерен, бармы, китаптан ҡараштырып ҡарайыҡ. Хәҙер инде, алланың ҡушыуы буйынса, ҡыҙ Моратша улына ярамай, нәмәхәрәм булды. Уны кире тарҰып алғанда ла, ике ай ғиҙҙәт һаҡлатып, көттөрмәй хәлебеҙ юҡ. Тик бына закон яғы... — Мулла икеләнде.

Ныязғол уға ауыҙ асырға ла ирек бирмәне:

— Ул яғын ҡайғыртма, мулла, ҡайғыртма. Ул яғын беҙ Иван Иваныч менән булдырабыҙ уны. Һин шәриғәтенде генә бел. Нисек булһа ла, мөрйә ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыҡһын.

Мулланы санаға ултыртып өйөнә оҙатканда, Ныязғол һүҙ ыңғайы килтергән һымаҡ итеп:

— Әйткәндәй, хәҙрәт, мин быйыл ғөшөргә тип йөҙ бот иген арнап ҡуйғайным. Берәй ваҡыт тапҡанда ат ектереп ебәрт, — тине.

Мулла уға йомшаҡ йылмайҙы:

— Алла риза булһын, алла риза булһын! Доға ҡылырмын. Ат ебәртермен, — тине.

## «НУЖА КИЛҺӘ, ТАРТЫП АЛА»

1

Ҡотлоярҙың бәләкәс кенә кирбес өйө, ныҡып тултырған кеүек, халыҡ менән тулған. Ҡарттар түрҙән теҙелгәндәр. Йәштәр урындыҡ ситен тултырып ултыралар. Ишек төбендәрәк ваҡ малайҙар.

Тимерғәле бабай, һирәк һаҡалын һыйпай-һыйпай, уйланып һөйләнә:

— һай, һай, ауыр хәл килеп сыкты. Көтөлмәгән нужа. Алла үҙе уңын бирһен инде, бик ауыр...

Ҡотлоярға күптән түгел генә дошман булып йөрөгән Үмәр ҙә бөгөн уны оҙатыу кисенә килмәй ҡалмаған, сөнки ул кешене һуғышҡа оҙатыуҙы үлемгә оҙатыу менән бер күрә, шуға күрә Ҡотлоярға йәлләү ҡараштары ташлап һөйләнә:



— Эйе, ни эшләмәк кәрәк, был эштәр бик ҡурҡыныс эштәр шул. Беҙҙең ҡайғылар ҡайғы булмаған икән, бына хәҙер баш ҡайғыһы тыуҙы.

Үмәр хәҙер Гөлйөҙөмдөн, ир бала булмауына, йыл буйы ҡайтып күренмәһә лә, һуғышта булмауына шөкөр итә. Шуның артынан уҡ, Әхмәҙие бар икәнен хәтерләп, ҡото оса, тәрән уфылдай.

— Япон беҙҙән ни таптырам ти икән? — тип һорай Саттар ҡарт. Ул да йышылып бөткән таҡыяһын артҡа шыуҙырып ебәреп уйлана.

Әпләс ҡарт, был турала һорашып та тормай, үҙенсә хәл итә.

— Ни япон булһын, үҙебеҙҙен. батшаның эшелер әле. «Өрә белмәгән эт өйөнә ҡунаҡ килтерә», ти. Ул шунда сит илдәр араһына барып ҡыҫылғандыр, ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәктәй булып.

— Улай ҙа булып бөтмәҫ. Япон үҙе башлай бит.

Әпләс риза түгел, шуға һүҙен бирмәй:

— Ай, ҡуйһаңсы, Саттар ҡорҙаш, батшаларҙы ни, уны береһен ал да береһен һуҡ, ботонан ал да ергә һуҡ. Улар араһына инеп, яҡлашып торорға ла тура килмәй.

Әпләстең был һүҙҙәренә барыһы ла көлөшәләр.

Ҡотлояр унын. һүҙен ҡеүәтләй:

— Бына, исмаһам, Әпләс ағай бик дөрөҫөн әйтте. Әгәр беҙ Николай батшаның ботонан алып ергә һуҡһаҡ, үҙе бер байрам буласаҡ, һуғыш та туктаясаҡ.

Саттар ҡарт тағы ла үҙенсә еңешә:

— Батша булмаһа, халыҡ, кетөүһеҙ һарыҡ һымаҡ, туҙышып китер ҙә, уларҙы кем йыйыштырыр?

Быға ҡаршы кешеләрҙең күбеһе геүләй:

— Юҡ инде, ағай, халыҡ һарыҡ булмай ул. Улар үҙҙәрен-үҙҙәре ҡарарлыҡ булғандар инде.

— Әллә халыҡтын, бөтәһе лә беҙҙең кеүек һантый тиһеңме? — тип ҡыҙа Әпләс. — Донъяның ҡайҙа табан ағып ятканын беҙ белмәгәс тә, уны белгән укымышлы кешеләр тулып ята хәҙер.

— Ҡайҙа һуң уларың? — тип ҡыскыра Саттар.

— Ҡайҙа, имеш. Бер ҙә алыҫтан эҙләй торғаныбыҙ юҡ. Бик йәш кенә булһа ла, үҙебеҙҙең Айбулат бар, тик ул өйҙә генә юҡ, ул һинә һейләп бирер ине.

— Эй, йәштәр һөйләр инде, улар донъяла күпме генә йәшәгәндәр.

— Аҡыл йәштә түгел, башта, — тине Тимерғәле.

Ҡотлояр Айбулатты маҡтауҙан үҙен маҡтағандай эреләнә:

— Беҙҙең, Айбулатмы? Ул ғилем тоғонок ауыҙын яңы ғына систе әле. һау булһаҡ, беҙ унан күп нәмәләр ишетербеҙ әле, — ти ул.

Был кешеләрҙең ҡайһы берәүҙәренә яңы хәбәр булып ишетелә.

— Айбулат, тиме?

— Шулай тисе.

Әпләс, үҙенен, был туралағы фекеренен бик дөрөҫ икәнен нығыткандай, тауышын күтәрә биреп:

— Шуны әйтеп ултырам да мин, — ти.

Үмәр ҡарт, үҙенең кейәүе Айбулаттын, исеме сыҡҡас, берәй һүҙ ҡыҫтырып, уның бер туған ҡайны булғанлығын иҫкәртеп үткеһе килеп ҡуйғайны, ләкин әле Айбулат менән бөтөнләй килешеү яһалып бөтмәгән булыуы оронсоҡланы, шуға күрә ул тамаҡ ҡырыу менән генә сикләнде.

Мәғфүрә, ҡашаяҡ якта шаршау артында илай-илай, иренә юл аҙығы бешерә. Уға Шәһиҙә әбей бауырһаҡ тшрҡып ярҙамлаша. Хәҙер ул Мәғфүрә менән бик әшнә йәшәй, унын. холкон бик ярата, «эскерһеҙ, асыҡ күңелле», тип маҡтай. Тәүҙә ул Мәғфүрәгә «кыҙым» тип өндәшә торғайны, ә хәҙер инде, Айбулат Гөлйеҙ&мдө алып киткәне бирле, улар бер-береһенә «коҙағый» тип өндәшәләр.

Шәһиҙә әбей, соҡалаҡтағы самауырға ағас һалып маташҡан Диләгә: «Бешеп ҡуйма, балам», — тип кәңәш бирә лә Мәғфүрәне әүрәтә:

— Илама, ҡоҙағый, илау менән бер нәмә лә эшләп булмай ул, — ти.

— Бынамы ир-егеттәрҙең ҡаны ҡойолор инде. Беҙҙең ауылдан Ғәббәс, Шәйхи, Ғәҙелгәрәй, Ҡотлояр. Тащкүстәндән алты кеше.

— Волостән барлығы ҡырк алты кеше тиҙәр, — тип ирҙәр шаулашып алдылар.

Уларҙы тағы ла моңһоулыҡ баҫа.

— Хоҙай тәғәлә сәфәрҙәрен ҡыҫкартһын нңде. Ни эшләйһең бит, яҙмыш шулай ҡушҡас,— ти Саетар ҡарт.

Ҡотлоярҙың тыныс иркен тауышы, был яоцһоулыҡка йән өрөп терелткәндәй, айырым яңғырай:

 — Эй ағай-эне, алдан моңаймай торайыҡ әле. Барып ҡарайыҡ, күҙ күрер, унда беҙ үҙебеҙ уйлашып ҡарарбыҙ әле.

'___Уйларға бирһәләр... „

Ҡотлояр бирешмәй:

— Уйлағанда кешенән һорап уйламайһың инде ул.

Уларҙың бөтә һүҙҙәрен ишек артында тыңлап торған кешеләй, Айбулат ҡапыл килеп инде лә ҡыҫкырып сәләм бирҙе.

Өй эсе тағы ла гөжләп китте.

Ҡотлояр, урынынан һикереп тороп, ҡунаҡты ҡыҫкырып сәләмләп ҡаршы алды:

— Бына кәрәк булһа, һау ҡайттығыҙмы? .

Айбулат бик иркен итеп һаулыҡ һорашты, бөтәһе менән ҡуш ҡуллап күрешә башланы.

Мәғфүрә, югереп тышҡа сығып, Гөлйеҙөмдө алыц инде. Шаршау артынан булһа ла, уның шыбырҙағаны ишетелеп тора ине.

— Әйҙә, әйҙә, килен, ҡотло аяғың менән ин.

Гелйөҙөм Шәһиҙә инәһе менән ҡосаҡлашып күреште. Әбей уны:

—• Уй балаҡайым, һау ҡайттыңмы? Сисен, өшөмәнеңме? — тип һораша-һораша яратты.

Ирҙәр яғы йәнле әңгәмәгә әйләнде.

Ҡотлояр һаман да ҡыҫкырып һөйләне:

—• Әйттем бит, ҡарттар, юҡҡа моңаймайыҡ, тип. Бына беҙгә туй шатлығы үҙе килеп инде. — Ул Айбулатты ҡулынан етәкләп, ҡайны янына килтерҙе:

— Давай, Айбулат, ҡайның менән күреш инде. Бына, ҡоҙа, беҙҙең ҡасҡалаҡтар ҙа табылды, кейәүенә доғанды бир, ә күренешен ул һуңынан бирер. Үпкәләштәр ҙә шуның менән бетһөн, — тип ул беренән-бере ҡыҙыу бойороҡтар биреп ташланы.

Тимерғәле ҡарт ярҙамға әҙер тора ине.

— Ниндәй үпкәләш булһын, һүҙ ҡуйышҡанбыҙ, ҡан ҡатышҡанға йыл тулды, үпкәләр, кенәләр бөттө инде,— тине ул.

Айбулат көтмәгәндә килеп сыҡҡан, туйға оҡшаған, ләкин туй булмаған был йыйылышта үҙен нисек тоторға белмәйенсә бер аҙ уйланып ултырҙы. Ҡайнр Үмәр менән күрешкәндә, бёрәй нәмә әйтеп, тауыш сығарырмы икән, тиеберәк шикләнгән ине, ләкин ул шикле уйы ла таралды. Сөнки Үмәр ҡарт күрешкәндә: «Бәхетле бул, күп йәшә», — тип теләне. Ләкин Айбулатты былар ғына

тынысландырманылар. Ҡотлоярҙың, һуғышҡа китергә әҙерләнеп тә, үҙен ҡунаҡҡа йыйыйынған кешеләй тотоуы уны борсой ине.

Ҡотлояр ҡустыһынын, был хәлен тиҙ үк анлап алды һәм уны ирәбеләндерерлек итеп:

— Бына шулай, ҡустым, Ҡотлояр ағаң да япондарҙы туҡмарға китергә ең һыҙғанып ултыра инде, — тип көлдө.

Айбулат аҙыраҡ күңелләнде:

— • Шуны ишетеп ашығып ҡайттым. Үҙем тураһында ниҙәр булғанын да ныҡ белмәнем, көтмәнем, — тине.

Ҡотлояр, дөйөм шау-шыуҙан файҙаланып, Айбулатҡа аҡрын ғына яуап бирҙе:

— Ул турала мәсьәлә бөттө. Тимер һыуынды, ел дә юҡ. Беҙҙең, ул туралағы һүҙҙәр, һуғыш хәбәре килеп сығыу менән, ҡарағоштан ҡурҡҡан турғайҙар һымаҡ, таралып .бөттөләр. Ныязғол да ул эште тырышып йөрөп осланы шикелле. һеҙ хәҙер ни, мин ҡайтҡансы, беҙҙә енгәң менән тора бирегеҙ.

Айбулат яңы хәбәрҙәр һейләргә ашыҡты:

— Ағай, йөрөй торғас, мин Кузьмин утарына тағы барыщ сыҡтым әле.

— Шунан. Киленде ҡайҙа ҡалдырып йөрөнөң һун?

Айбулат оялыңҡырап көлдө.

— Икәүләшеп инде, — тине.

— Әһә, шулай тиген.

— Тегә Дашка [illegible] ҡаршы алды.

Быға тиклем шаулашып ултырған кешеләр, һүҙҙән туктап, уларҙьвд һүҙҙәрен тыңлай башланылар.

— Әллә ни беткән эшем булманы. Баярға Самар ҡалаһына иген оҙатышырға кешеләр кәрәк икән, яллandым да, шундағы үҙемден. ҡаҙаҡ иптәшем Истебай менән икәүебеҙгә дүрт ат ҡыуып киттек. — Айбулат, арьяғын дауам итергәме, юҡмы тигән һымаҡ, тирә-яғына ҡарап алды.

Ҡотлояр, нығыраҡ ҡыҙыҡһынып:

— Иә, йә, һөйлә, унда кемдәрҙе осраттың? — тине.

— Дядя Гришаны күрҙем.

— Иә, йә, шуны ишеткем килеп, ҡолағым ҡарпайып ултырам да. — Ул Айбулат янына урындыҡ ситенә шыуып ултырҙы.—Ни хәбәрҙәр һөйләй изге ауыҙҙан.



— Улар үҙҙәренен, заводында ла стачкаға әҙерләнеп яталар. Шуға күрә беҙҙең менән бик оҙаҡ ултырып һөйләшерлек ваҡыты булманы. Шулай ҙа байтаҡ ғәжәп хәбәрҙәр һөйләп өлгерҙө. Хәҙерге көндә Рәсәй эштәренең ҡайҙа, ни эшләп ятҡандарын һөйләп килеп, һуңғьГкөндәрҙең иң ҙур изге хәбәренән шуны әйтте. РСДРП-ның болыпевистик комитеттәре етәкселегендә төрлө ҡалаларҙа эшселәрҙең стачкалары башланған.

Әпләс ҡарт та Айбулатҡа яҡыныраҡ шыуҙы. Кәзә һаҡалын ике-өс рәт һыйпаштырып ҡуйғас, һорау бирергә булды:

— Сташка тигәндәре ни була һуң ул, балам?

Айбулат есөн Ҡотлояр яуапланы:

— Стачкамы, ул, бына заводта булһын, фабриктә булһын, бик күмәк эшселәрҙең, бер төптән һүҙ ҡуйышып алып, бетәһе бер юлы эш ташлауҙары була. Улар асыу итеп эш ташлайҙар ҙа хужалары алдына үҙҙәренең кәрәкле талаптарын ҡуялар.

Әпләс асыҡ төшөнә, бүтәндәр ҙә аңлайҙар.

Үмәр ҙә был юлы бик мөһим тоҫ менән һүҙгә ҡушыла:

— Был инде беҙҙең. Асҡарҙың Златоусттағы эш ташлауҙары һымаҡ була инде. Унынһын яҡшы беләбеҙ ғуй.

— һуғыш тураһында һорашманыңмы?

Башҡалар ҙа был һорауға ҡушылдылар:

— Эйе, эйе, һуғыш тураһында бер нәмә лә һөйләмәйме ул кеше?

— һуғыш тураһында ни, һаман да шул бер һүҙҙе һөйләй инде. «Был һуғыш капиталист, помещиктәргә генә кәрәк, башҡа берәү есөн дә кәрәкмәй», — ти. Әле бына һуғыштың сығыуының бащы ла шунан икән: байҙарға үҙҙәренең тауарын, малын үткәрергә ҙурыраҡ баҙарҙар кәрәк, шуға күрә улар Ҡытайҙы үҙ ҡулдарына алырға тырышалар. Ә тегенән япон ебәрмәй. Шунан талаш китә икән.

Айбулатты ипләп кенә бүлеп, Тимерғәле һорау бирә:

— Байҙарға баҙар кәрәк булһа булыр инде. Унса байлыҡты ҡайҙа ҡуйһындар? Ә һуң һуғышты байҙар иғлан итмәй бит әле, батшалар иғлан итә.

Быға тағы ла Ҡотлояр яуап бирә:

— Батша ана шул байҙар яғында шул. Уларҙы ғына ҡайғырта ла. Беҙҙең һымаҡ ябай халыҡтар — тере ҡорбан.

Ыйыылған кешеләр ҙә Айбулатҡа һорауҙар яуҙыралар. Айбулат бөтә һорауҙарға ла асыҡ яуап бирә, үҙе белгән яңылыҡтар тураһында һөйләй.

Мәғфүрә Ҡотлоярға сәй елгөргәнен белгертте. Карттар сәйгә ултырҙылар. Йәштәр таралыштылар.

Мәғфүрә, Шәһиҙә һәм Гөлйөҙөм өсәүләшеп аршау артында сәй эстеләр.

Мәғфүрә, тыныс һыҙланып:

— Ҡоҙағый, килендәр килеп төшкәс, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы саҡырып алырға ине лә, нисек булыр икән? — тине.

Әбей уны ҡырҡа тыйҙы:

— Ауыҙыңа ла алма. Улар үҙҙәре саҡырырға тейештәр. Балалары һау ҡайтты, саҡырһындар. Һиндә ҡунаҡ ҡайғыһы түгел инде хәҙер, баш ҡайғыһы. Бына хәҙер Муйылбикә киленгә үҙем барып һейөнсе алам әлё. Һеҙҙе лә саҡырырға ҡушам, — тине.

Бик оҙаҡҡа һуҙылған был киске ултырыштағы кешеләр, бик күп хәбәрҙәр һөйләшеп, сәй эсеп, һаулашып таралыштылар.

2

Иртәгеһенә үк Ныязғол Айбулатты еаҡыртып алды, Ул һаман да үҙенең түрендә яҫтыҡҡа сумып ултыра ине,

Айбулаттың сәләмен ул бик аҡрын ғына ҡабул итте, тешен ҡыҫып ҡына яуап бирҙе. Күҙенең ҡабағы аҫтынан тексәйеп текләне лә:

— Йә, шәп йөрөп ҡайттыңмы? — тине.

• — Бик һау, бик шәп йөрөп ҡайттым, ағай, үҙегеҙ; һау торҙоғоҙмо? — тип Айбулат ашығыс яуап бирҙе лз шунда ултырғысҡа барып ултырҙы.

— Ниңә тура беҙгә килеп төшмәй, киленде ситкә алып төштөң?

— Әллә, уныһын уйлап торманым инде.

— һе, уйлап торманым. Беләһеңме, һин мине күпме расходҡа һуктьвд? Өс йөҙгә барып төштөң. — Ныязғолдон, тауышында ярһыу бар ине.

— Беләм, ағай, рәхмәт. Мин дә буш ҡалдырмам, эшләп булһа ла түләрмен. Әгәр ҙә элекке минең ерҙе^ шунан хеҙмәттәремде иҫәпләгән саҡта, минең дә һеҙҙән аяған эшем юк бит.



Айбулаттың тыныс тауыш менән биргән был яуабы Ныязғолдоң асыуын ҡабартты. Ул хәҙер бер-береһенә булған бурыстар тураһындағы һүҙҙе аша төшөп, икенсе яҡтан нығыраҡ һуғырға булды:

— һине Самарҙа булған тип ишеттем.

— Эйе, булдым, ағай, Кузьмингә иген оҙатыштым.

— Шунан?

— Шунан шул. Ул миңә бойҙайлата түләне.

— һиңә нисек түләне тип һорамайым мин. Самарҙан ниндәй һуғыш хәбәрҙәре тейәп ҡайттың?

— Бәй, ағай, һуғыш хәбәре менән донъя тулған инде, мин дә ишеткәнемде һөйләнем.

— Кит, йөҙө ҡара, ипләп һөйләш. Әллә һин кешенең никахлы кәләшен урлағас та, мин һине яҡлашып, судтан ҡотолдороп алып ҡалғас та, донъяла һиңә сәпсим закон юҡ тип, иркенләп киттеңме?

Айбулат, бер нәмә лә булмаған һымаҡ, тыныс ине.

— Бөтә Рәсәй һөйләп ятҡан хәбәрҙе ни, кем һөйләмәй ултырһын? — тине ул.

Ныязғолдоң бите ҡыҙара бүртте. Урынынан ырғып тороп, ҡулын артҡа ҡуйып, кейеҙҙәр өҫтөндә бер ары, бер бире йөрөй башланы. Айбулатҡа яҡыныраҡ килеп әрләне:

— Етте тим һиңә, баш-баштаҡ! Ыстудент булғанһың икән, сусҡа, ҡыҙыл ауыҙ булғанһың. Ҡотлоярҙың өйөндә, күмәк кеше араһында, батша хәҙрәтенә тел тейҙереп һөйләгәнһең.

Айбулаттың был күренештән әллә ниңә бик нык көлгөһө килә, күңеле бик кинәнеү менән елкена ине. Ул, тағы ла төҫөнә иғтибарһыҙлыҡ биреп:

— Уида бит, ағай, күмәкләп йыйылғандар ҙа, мине йә һөйлә әле> әңгәмә бит әле тип ҡуштылар, — тине.

— Танҡанһың әңгәмәне. Утыҙ тештән сыҡкан хәбәр утыҙ ауылға тарала. Ә һин, ахмаҡ, батша тураһында ауыҙыңды иркенләп йәйеп һөйләргә тотонғанһың.

Айбулаттын, тағы ла Ныязғолдо ҡыҙҙырғыһы килде:

— һиңә Саттар ҡарт алып килеп еткергәндер инде. Башҡа ниндәй «утыҙ теш» булһын. Ул бик ихлас тыңлап ултырғайны, — тине.

— Кем әйткәнен һин тикшермә. Мин үҙем беләм. Мин һиңә шуны нығытып киҫәтеп әйтеп ҡуям: икенсе таптыр ундай хәбәрҙәрҙе һөйләгәненде мин ишеткән булмайым. Әгәр ҙә ишетһәм, үҙенә үпкәлә.

Айбулат бүтән өндәшмәне.

Ныязғол, аҙыраҡ асыуы баҫылғас, Айбулатка яңы бойороҡтар бирҙе:

— Мин дә оҙаҡламай Самарға иген оҙаттыра башлайым. һин шунда оҙатышып йөрөрһөң. Киленде лә үҙебеҙгә алып килеп ҡуй. Әле һин һеҙҙең турала ғауға бөткән икән тип иркенләмә. Моратша үҙе старшина ваҡытта был ыҙғышты ташламаясаҡ. Үҙенде бына тотор ҙа һуғышҡа оҙатыр, шул ваҡытта мин һиңә тағы ла кәрәк булырмын, — тине Ныязғол.

Айбулат Ныязғолдон, Самарға йөрөү тәҡдименә ихлас риза булды. Ныязғолдоң Моратша менән ҡурҡытыуы бер сәбәп һымаҡ ҡына булһа ла, Айбулат уға иғтибар итмәне. Ә Самарға барып Григорий Ивановичтәрҙе күреп йөрөү мөмкинлеге уға башҡаса шатлыҡ бирә ине.

3

һуғыш булған һайын ергә ғәжәп бер ауырлыҡ тарала. Был ауырлыҡ кешеләрҙә лә, малдарҙа ла, хатта бөтә тәбиғәттә лә һиҙелә. Ҡалын булып ямғыр болоттары ҡалҡһа — һуғыш төтөнө килеп еткән һымаҡ, ҡояш ҡыҙарып сығып, ҡыҙарып байыһа — офоҡ буйлап һуғыш ялҡындары тарала һымаҡ тойола. Кешеләрҙең һөйләгән һүҙҙәре лә, йырлаған йырҙары ла ошо ауырлыҡтан талсыҡкан шикелле һәлмәк булалар.

Иренен, ситтә көтөү көтөп йөрөп, өйҙә бергә тороуҙан бигерәк, башҡа тороуҙарына Мәғфүрә әллә ҡасан күнегеп бөткән ине инде. Ул йыл әйләнәһенә бер ҡайтып күренмәһә лә, Ҡотлоярын өҙелеп һағынғаны юҡ. Ә хәҙер унын. китеүенә ни бары тулыр-тулмаҫ алты ай. Ә Мәғфүрәгә ул алты йыл буйы ҡайтмағандай оҙаҡ тойола. Ул нимә генә эшләргә тотонһа ла, Ҡотлоярҙы юҡһына.

Етмәһә, Айбулат менән Гөлйөҙемдө лә Ныязғол, үҙенә алып, эшенә егеп ҡуйҙы. Ярай әле Айбулат, ваҡыт табып, Мәғфүрәгә дисәтинә ярым бесәнде сабып биреп китте. Хәҙер ул шуны күбәләп, йыйыштырып йөрөгән була. Ҡырға сыҡканда Диләһен дә алып сыға, бәләкәс булһа ла, иптәш бит әле, тип уйлай.

Кисә кис, шулай итеп, Мәғфүрә, үҙенең бесәнен күбәгә тарттырып йөрөп, бик һуҙға ҡалып китте. Ай ҙа ҡалкып яктырҙы. Мәғфүрә, эшен бөтөреп ҡайтырға уйлап, аҙыраҡ хәл алырға тип, юл ситенәрәк туғарған ат-



арбаһы янына барып ултырҙы. Күп тә үтмәй, бесән тейәлгән ике арба юлдан акрын ғына шығырҙап үтеп китте. Мәғфүрә уларҙын, кемдәр- икәнен танып өлгөрмәне, алдағы йөк өҫтөндәге берәүһе бик моцго оҙон яңы көй менән йырлап ебәрҙе.

Мәғфүрә ул йырҙың һүҙҙәрен ишетә алманы. Ә унын. тсушымтаһы, үҙенән-үҙе килеп, күңелгә һеңгән һымаҡ, бөгөн дә иҫенән еыҡмай йөрәген әрнетә.

Нужа килһә, тартып **ала,**
Илтеп Манжурға һала.
Тик ауыр хәл сит илдәрҙә,
Сит ерҙәрҙә ерһетә...

Ошо көй иҫенрн сыҡмағанға, Мәғфүрә ҡайғылы, сенки был йырҙар ҙа, Ҡотлоярҙын, Порт-Артурҙан яҙған хаттары һымаҡ, йөрәген һыҙлата ине.

Ул да күптән түгел:

Япундар туп аталар,
Порт-Артурҙы ваталар,
Ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы **ҡулһыҙ**
Тилмерешеп яталар,—

тип йырҙар яҙып ебәргәйне.

## САМАРКАНЫ ҮТКӘНДӘ

1

Самарка йылғаһыныц күпере янында йырып үткеһеҙ сират. Күперҙең өҫтөндә генә түгел, арғы яҡ башында ла, бирге яғында ла тулы йөктәр, бушаған арбалар, аттар, дөйәләр, кешеләр мыжғып торалар, күҙ күреме ерҙә ябырылып яталар. Күперҙә хәрәкәт туктalғанға байтаҡ ваҡыт үтте. Тәртип булдырыу, йөктәрҙе иплэп сығарыу тураһында уйлаусы ла юҡ шикелле. һәр кем үҙе алданыраҡ сығып ысҡыныу яғын ҡарай, ҡыҫкырыша, ир.ешәләр, ә эш унын. һайын, туҡталып, оҙаҡка тартыла.

Айбулат менән Сәйетколдоң бойҙай тейәгән йөктәре лә, тәртиптән сығып, күперҙен, ике яҡ ситенә табан тайпылышҡандар, аттар уҙалы-ҡаҙалы һырнығышып баҫҡандар ҙа арттағыларҙын. ҡыҫырыҡлауы арҡаһында ҡамыттары, елкәләренән сығып китерҙәй булып шыуып, уларҙың баштарын үргә ҡаҡайтҡандар. Аттар шуға

асыуланып, яндарында ҡатар торған бүтән ят аттарҙы тешләп ҡыуырға ынтылып, уҙҙаренә тағы ла ҡыйынлыҡ тыуҙыралар, сыйылдашып, кешнәп, тауыш ҡуптаралар.

Айбулат үҙенен. йөгө өҫтөндә ултырып бер талай көтһә лә, өмөтлв ҡуҙғалыш күренмәгәс, үрәсәгә баҫып, уҙҙаренең обоз төркөмөнән булған башҡа йөктәрҙе һәм кешеләрҙе күпер өҫтөндәме, әллә сығып өлгөрҙеләрме икәнен күрергә тырышып ҡараны, ләкин береһен дә күрә алманы. Ул шунан үҙ йөгө өҫтөндә ултырған Сәйетҡолға:

— Сәйетҡол ағай, һин тороп тор, мин алғараҡ барып ҡарайым әле, — тип, ҡайҙа йөктәр өҫтөнән, ҡайҙа күпер тәрәге эргәләп, алға табан китте.

Күперҙең Самарға сыға торған ауыҙында ғына аты туғарылған бер йөк бойҙай арҡыры тешөп ултыра ине. Йектө урынынан ҡуҙғатырға төрле яҡтан үрәсәгә йәбешкән, тәртәнән тартып маташҡан кешеләр араһында Айбулат, Бөрйән ауылыныҡы Алтынбай менән Зөфәрҙе таныны ла, улар янына баҫып, арбаны этергә ярҙамлаша һәм һораша башланы:

— Ни булды, Алтынбай, был кемдеке? — тине.

Алтынбай иламһырау ҡатыш асыулы ине, ул:

— Ни булһын, ана, күрмәйһеңме, атымды дөмөктөрҙөм, — тине.

Айбулат иғтибарлап күҙ һалып, күперҙән сығарып, Самарка янына һөйрәп ташланған ҡола атты күрҙе. Ул, аунаҡларға уйлап ятҡан һымаҡ, дүрт аяғын да тарбайтып һуҙып, башын ҡалҡыта биргән кеүек ята ине. Айбулат, һаман да ни булғанын аңламай, Зөфәргә ҡараны. Зөфәр:

— Алтынбай әҙерәк ҡыҙыулыҡ итте, — тине. — Аты сығынланы ла, ары бармай, бер улай, бер былай тайҡалай. Халыҡ ни, әрләй, ҡыуа, туғарып алып булһа ла юл бирергә ҡуша. Шунан ул туғарып та алды, ат ни, бахыр, беләме, һаман артҡа сигенә.

Зөфәрҙең һүҙен Алтынбай үҙе бөтөрҙө:

— Шунан дуғаны алдым да ҡаҡ маңлайына тондорғайным, тәгәрәне лә үлде, — тине. -

— Бына һиңә. Мал беләме ни, бына алйот! — тине Айбулат.

Улар арбаны ла ситкә һөйрәп сығарҙылар. Аҙыраҡ юл да асылды, күперҙәге бөтә йөктәр, арбалар, пробкаһы ысҡынып, сиректән атылған ҡымыҙ һымаҡ, бер голы атлығып, тыҙылышып алға ынтылдылар.



Сәйетҡолдоң да, Айбулаттың да аттары ошо ағынға •кушылып килеп еттеләр. Айбулат Сәйетҡолға ла, Зөфәргә лә, күперҙән сыҡҡас, уңға боролоп туктарға ҡушты. Үҙе бер бурыл аттын. башынан алып алдан китте.

Улар шулай бер-бер артлы барыш, оло юлдың бер яғында туҡталдылар. Айбулат:

— Иә, был Алтынбайҙың йегөн бер нәмә эшләтәйек инде, — тине.

Зөфәр атын ситкәрәк тартып, башын шаҡарҙы ла:

— Мин дә шуны әйтәм әле, — тине.

Улар бер аҙ кәңәштеләр ҙә, Алтынбайҙың бойҙайлы тоҡтарын өс-дүрт йөккә бүлеп тейәп, унын, буш арбаһын күперҙән алыҫ түгел бер харчевнягә ҡалдырып, үҙҙәре йөктәре янында йәйәүләшеп, ҡалаға үрләй башланылар.

Был күңелһеҙ мәшәкәттән бушағас, улар үҙҙәре тураһында һөйләшә башланылар. Айбулат Алтынбайҙы йәлләне.

— Бахырҙын. яңғыҙ атҡынаһы әрәм булды бит. Игене кемдеке, — Духловтыҡымы әллә Расторгуевтыҡымы?

— Духловтың игенен тейәгән булғайныҡ та, — тине Зөфәр. — Әле беҙҙең бик күп кешеләр алдан киттеләр. Барлығы утыҙлап йек, ә һеҙ кемдең игенен тейәгәнһегеҙ?

— Беҙ Ныязғолдан. Беҙҙең дә. унлаған йөк алдан китте.

— Мин әле быйыл тәүләп кенә киләм. Баҙарҙың рәте бармы икән һуң?

— Баҙарҙың рәте киткәндер инде, үткән йәкшәмбелә көскә һатып ҡайтҡайныҡ.

Айбулат көлөп ҡуйҙы.

— Рәте китһә ни, беҙгә һыныҡҡа һылтау, ҡалала ни хәлдәр булып ятҡанын күреп ҡайтырбыҙ, — тине.лә Зефәргә һынаулы ҡараш ташланы. ,

— Эйе, уныһы ла бик ҙур эш, әлбиттә. Мин дә Яйыҡтан яңыраҡ ҡайттым. Беҙ укыған мәҙрәсә ябылды.

— Ә, ысын, һин бит, Зөфәр, шәкерт, унда укып ята инең, ни эшләп мәҙрәсәгеҙ ябылды һуң?

— Билдәле инде, революция.

Айбулат, быға аптыраған һымаҡ, Зөфәргә ҡараны:

— Революцияһы революция ла һуң, ә Мотиғулла хәҙрәт мәҙрәсәһендәге шәкерттәргә революцияның ниндәй шауҡымы ҡағылырға мөмкин?

Зөфәр ҡапыл ҡыҙып яуап бирҙе:

— Юҡ инде, Айбулат, улай яңылыш ҡарарға ярамай. Хәҙер революция бөтә Россияны ҡаплап алған. Уны кем нисек аңлай, ,нисек көрәш алып бара, шуныһын аңлай белергә кәрәк. Беҙ, шәкерттәрҙең ярлы-ябағайҙары, уҡытыу методтарын фашлап, хәҙрәттәр, байҙарға ҡаршы сыҡтыҡ та, талаш китте. Шунан мәҙрәсәне яптылар.

...Уларҙың ҡыҙыу әңгәмәһен Сәйеткол ҡысҡырып бүлде:

— Айбулат, ҡайҙа боролабыҙ. Казанскийгәме?

— Юҡ, ни эшләп Казанскийгә булһын, Хлебный площадкә борол!

Дуҫлашып алған егеттәрҙен һәр береһе үҙ уйына сумып бара ине. Уларҙың хөрриәт тураһында һөйләгән баяғы һүҙҙәрен тыңлап барған Алтынбай:

— һеҙгә хөрриәт ҡайғыһы, ә миңә ат ҡайғыһы, — тине.

Айбулат уны йыуатты:

— Ни эшләтәйек һуң, Алтынбай, атыңды үҙең һуғып йыҡҡанһың бит. һин, атһыҙ ҡалдым, тип хөрриәткә ҡул һелтәмә әле. һин аТhыҙ ҡалдың, ә мин үҙ ғүмеремдә ат эйәһе була алғаным юҡ. Быға кем ғәйепле? Бына беҙ байҙарға ҡаршы һуғышырға әҙерләнәбеҙ, ә үҙебеҙ шул ҡәһәр һуккан байҙарҙың игенен ялланып ташып йөрейбөҙ. Бына ошо тормоштағы дөрөҫ булмаған ҡыйыш юлдарҙы юнәтеп, тура бер эҙгә һалып ебәрергә кәрәк. Шунда беҙ үҙебеҙ ҙә рәхәт йәшәрбеҙ.

Алтынбайҙа ат ҡайғыһы көслөрәк ине. Ул шуға күрә, һөйләшкеһе лә килмәй, ҡул ғына һелтәне лә ары китте.

2

Улар, ҡалаға инә барған һайын, ундағы ғәҙәттә була торған тәртипте күрмәнеләр. Баяғы күпергә һыймай торған кешеләр кеүек, ҡайһы бер тыҡрыҡтарҙа, урамдарҙа геүләшкән, ҡысҡырышкан күмәк тауыштар яңғырай. Ҡайһы бер оло урамдарҙан Волгаға табан сабышып үткән жандармдар ҙа күренә, ә ҡайһы бер урындарҙа ябай кейемдәге һыбайлылар осрайҙар, улар йөк менән барған кешеләрҙе туктатып һорашалар ҙа ары китәләр.

Айбулаттар барлығы алты йөк бойҙай менән Хлебный площадкә етеп туктанылар. Был тирә-яҡ урамдарҙан ҡалкыу урында һәр ваҡыт иген йөктәре теҙелеп тора торған иген баҙары бөгөн буп-буш ине. Сәйеткол, алдағы аттарҙы туктатып ҡуйып, Айбулаттарға ҡаршы ынғайланы.



Айбулат менән Зефәр Мурзин дә баҙарҙың буш икәнен күреп, уларҙан алда киткән йөктәрҙең дә ҡайҙа икәнен төшөнмәйенсә, аптыраңҡырап һөйләштеләр.

— Был ни хәл был, ҡайҙа киттеләр һуң әле беҙҙекеләр? — тине Айбулат.

Зөфәр, үҙенең быйыл беренсе тапҡыр килеүе сәбәпле, бөтә маршрутты Айбулатка тапшырғайны.

— һеҙ беләһегеҙ инде. Мин ни, һеҙ ҡайҙа — мин шунда, — тине.

Сәйеткол:

— Алламорат бай, баҙарҙа алыусы булмаһа, Соколов тирмәненә алып барырға ҡушты, тигәйне, әллә шунда киттеләрме икән, ә? — Ул башындағы меҫкен бүркен уң яҡ ҡолағынараҡ ҡыйшайта биреп уйланды.

Улар дүртеһе бер йөк янына йыйылдылар ҙа, йөктәр килеп сығыр тип көткән ҡиәфәт менән, тирә-яҡҡа ҡарандылар.

Шул арала Дворянский урам яғынан биш һыбайлы былар янына сабышып килеп етте һәм, ҡамаған һымаҡ итеп, дүртәүһен әйләндереп туктанылар, ә береһе улар янына яҡын килеп:

— һаумыһығыҙ! Ҡайҙан килдегеҙ? — тине.

— Имелдекеләр, — тип батырланып яуап бирҙе Айбулат, сөнки улар башта быларҙы жандармдармы икән тип шикләнгәйнеләр, ә улар ябай ғына кейенгән'эшселәр булып сыҡтылар, был һөйләшеп торғаны иһә дядя Гриша цехында бергә эшләүсе Никитин ине.

Никитин Айбулатҡа иғтибарлаңҡырап ҡараны ла:

— Ә, Айдаров, һинме ни әле был? С приездом! — тине һәм уға яҡын уҡ килеп, ат еҫтенән эйелеп, ҡул бирҙе.

Айбулат тағы ла күңеллерәк яуапланы:

-г- Рәхмат, Роман Борисович. Ни эшләп беҙҙе былай бик хөрмәтләп ҡаршы алдығыҙ әле? — тине.

— Шулай кәрәк, иптәш Айбулат. Быны революция талап итә. һеҙҙе Никитин генә түгел, — ул ҡалған дүрт һыбайлыға һулаҡай ҡулын йәйеп күрһәтте, — эшселәр Дружинаһыныщ дружинниктәре ҡаршы ала. Хәҙер шуны әйтегеҙ инде, был игендәр ҡайһы баярҙан?

Айбулат, үҙҙәре алып килгән йөктәрҙе күрһәтеп:

— Бына был дүрт йөк Ныязғолдан, ә анауҙары Духловтан, ә бына был Мурзин тигән егет,— ул Зөфәргә күрһәтте, — ошо йектәргә хужа, — тине. — Таныш булығыҙ.

Был тәкдимдән һуң Зөфәр Никитингә яҡын килеп ҡул бирҙе, фамилияһын әйтте лә һорау бирҙе:

— Кем игене булыуы һеҙгә ни есен кәрәк?

Никитин уға иғтибар менән ҡаранып

— Шуның өсөн кәрәк, хәҙер бына барығыҙ ҙа тәртип менән аллы-артлы теҙелегеҙ ҙә бөтә игендәрегеҙҙе Соколов тирмәненә алып барып бушатығыҙ, — тине ул.

— Ә нисек инде ул, Роман Борисович, иген тапшырыу өсөн беҙҙе оҙатыусылар булырға тейеш, аҡсаһын улар бирәләр бит, — тине Айбулат.

Никитин Айбулаттың был һорауын оҡшатманы. Уға тағы ла яҡын килеп, ләкин бөтәһенә лә ишеттерерлек күтәренке тауыш менән асыҡлап бирҙе:

— һин башлы егет бит, Айбулат, бөгөн әйткәнде ни эшләп төшенмәйерәк тораһың әле? Мәсьәлә былай тора: мин, әлбиттә, бөгөн Соколовтың иген закупщигенә әйләнмәгәнмен. Мин бөгөн һеҙҙең янға һәм һеҙҙе ҡаршы алырға эшсе депутаттарҙың Самар Совете исеменән килдем. Шунын, өсөн мин аҡса ла түләп тормайым, ә һеҙҙе оҙатыусы «әфәнделәр» бөтәһе лә хәҙер тирмәндә. һеҙ ҙә тиҙерәк барып етергә тырышығыҙ, бына ике һыбайлы иптәш һеҙҙең менән бергә барыр, — тине.

Никитин, уң ҡулын баш кейеменә күтәреп, пока,' тип һаубуллашты ла, ике һыбайлыға Айбулаттарҙы оҙатырға ҡушып, үҙе менән ике һыбайлыны эйәртеп, тағы ла Дворянский урамға табан юрттырып сығып китте.

Айбулат менән Мурзин:

— Әйҙә инде, былай булғас, беҙ игенде бик уңай һатабыҙ түгелме һуң? — тип, көләшә-көләшә, Сәйеткол менән Алтынбайҙы ла ҡуҙғаттылар.

Сәйеткол был эшкә аптыраһа ла, бошонмай ине. Алтынбай, ҡайғыһы яңынан яңырғандай, мыжыщ башланы:

— һеҙгә әллә бик күңелле инде, көлгән булаһығыҙ. Ә мин ни зшләйем? Аттан да яҙҙым, Духлов та обоз хаҡын түләмәҫ инде. Ни эшләргә һуң былай булғас? — тип урынынан ҡуҙғалғыһы килмәй торҙо.

Айбулат менән Мурзингә уны икәүләшеп ҡоҙаларға, димләргә тура килде.



Улар тирмәнгә барып еткәндә, унда митинг бара ине. Иөҙәрләгән буш арбалар янында, төрлө яҡтан килгән обозсылар бер урынға йыйылып, бейек әрәндәк үрәсәһенә баҫып һөйләүсе ораторҙы тыңлайҙар ине.

Айбулат, ораторҙы күргәс тә, ҡыуаныслы тауыш менән Мурзингә:

— Ана, Григорий Иванович, үҙе һөйләй, — тип хәбәр итте.

Мурзин, үҙенең йектәрен дә онотҡандай булып, ораторға ҡарай-ҡарай, алға атланы. Унын һүҙҙәрен асығыраҡ ишетергә тырышты.

— ...Бына шулай, крәҫтиән туғандар. Батшалыҡты ҡолатмай тороп, беҙгә тулы ирекке ирешеү мөмкин түгел, сөнки батша беҙҙен. ҡанды эсеп байыусы фабриканттар, заводчиктәр яҡлы. Ул, сынйырҙағы эт һымаҡ, шуларҙыщ файҙаһын күҙәтә. Батша һеҙҙең ҡанды эсеп байыусы помещиктәр яҡлы. Шуға күрә помещиктәрҙең һәр береһе меңәр десятина ер биләй, ә крәҫтиәндәрҙең меңләбенә бер десятина ер биләмәгән урындар күп. һеҙ быша хәҙер шуны аңларға тейешһегеҙ. Батшанын. манифесе. күҙ буяу, батшаның манифесе — ҡапкан ғына ул. Ул манифесте яҡлаусылар шул уҡ помещиктәр һәм либералдарҙын, ҡойроҡтары булған кадеттәр, эсерҙар, меньшевиктәр һәм башҡалар. Беҙ, болыневиктәр, шунын өсөн, «долой самодержавие», тип барабыҙ, беҙ, большевиктәр, пролетариат диктатураһы есөн керәшәбеҙ, ә һеҙ, крәҫтиән туғандар, беҙҙен, көрәшкә һәм үҙегеҙҙен, хоҡуктарығыҙ есен булған керәшкә беҙҙен. менән, эшселәр менән, бер юлдан барырға һәм ныҡлы ярҙам күрһәтергә тейешһегеҙ.

Бына бөгөн Кузьмин баяр ҡул аҫтындағы ауыл хужалығы эшселәре үҙҙәренен. намыҫлы керәшсе икәнлектәрен күрһәттеләр, улар Кузьминден, игенен, бесәнен, үҙҙәре конфисковать итеп алып, астар араһында бүлделәр, шул уҡ ваҡытта, утыҙ биш йөк иген килтереп, беҙгә ярҙам күрһәттеләр.

Ораторҙыщ һүҙен бүлеп, бөтәһе лә геүләп ҡул саба башланылар.

Халыҡ шаулашҡан арала Григорий, тйрә-яғына ҡарап, кемделер янына саҡырып алды. Үҙе һүҙен тағы ла дауам итте.

— ...һеҙ килтергән игендәрҙе беҙ, Самар эшселәре депутаттары Советенең уполномоченныйҙары булыу си-

фатында, конфисковать итеп алабыҙ һәм уны восстаниелә көн-төн көрәш алып барған эшселәр файҙаһына тотасаҡбыҙ. Улар асығалар, ләкин көрәште бер минутҡа ла һүрелдермәйҙәр. Уларҙың геройҙарса көрәше тағы ла нығыраҡ көсәйә бара. Тағы ла ҡабатлайым, беҙ үҙ иркебеҙҙе үҙебеҙ яулап алмаһаҡ, уны бер кем дә алып бирәсәк түгел. Быға күптән түгел генә булып үткән «Ҡанлы йәкшәмбе» фажиғәләре, күптән түгел генә булып үткән «Потемкин» восстаниеһе, — һәм бөгөнгө көндәге Мәскәү восстаниеләре беҙҙең өсөн, ялҡынлы факелдәр һымаҡ, юл күрһәтеп торалар. Онотмағыҙ, иптәштәр, синфи көрәштә тик беҙҙең большевиктәр юлы ғына тулы еңеүгә алып барып сығарасаҡ. Үҙегеҙҙең ҡан дошманығыҙ булған баярҙар менән иҫәпләшергә ваҡыт!

Халыҡ тағы ла геүләне. Ҡайһылары, арбаларын шалтыратып, тарала башланылар.

Айбулат дядя Гришаға күренмәй китә алманы. Митингеләһөйлйүселәр бөтә башлаған та, Айбулат янына ҡурҡып, аптырап ҡобараһы осҡан Алламорат килеп:

— Ни эшләйбеҙ инде, Айбулат, беҙ ҡайтҡас, Ныязғол ағайым беҙҙе ни эшләтә инде? — тип зарланды.

Айбулат ҡул ғына һелтәне:

— йә, ерле юкка ҡотоң осҡан икән. Ҡурҡма, бөтәбеҙҙе лә аҫып ҡуймаҫ әле, — тине лә Алтынбай менән Һөйләшеп торған Мурзинде саҡырҙы.

— Әйҙә, Зөфәр, дядя Гриша янына, — тине ул.

Улар икәүләшеп уның тирмән ҡапҡаһы эсендә бойороҡтар биреп торған еренә барып күрештеләр. Григорий Иванович, унда йыйылған иген килтереүселәрҙең Алламорат һымаҡ ҡурҡҡандарына ҡарап, үҙ янындағы Никитингә:

— Бына был егеттәрҙең бетәһенә лә (уларҙың барлығы ете кеше) хужаларына күрһәтеү өсөн үҙ ҡулың менән яҙып, документ өләшеп бир, —• тине.

Шунан үҙенең янында торған икенсе бер япырай һаҡаллы, мыҡты кәүҙәле, үткер бер крәҫтиәнгә әйләнеп, уға күнелле йылмайып:

— Ә бына Кузьминдән килгәндәргә ундай яҙыуҙың кәрәге юҡ, — тине.

Теге һаҡаллы крәҫтиән:

— Шайтаныма кәрәк. Әгәр беҙҙең, уй барып сыҡһа, бер-ике көн эсендә тағы ла шул тиклем килтерәсәкбеҙ! — тип ғорур яуапланы.



Ошо һөйләшеүҙәрҙән һун, Григорий Иванович Айбулатҡа ла йылмайып һүҙ ҡушты:

— Ә һинә, «башҡорт улы», нимә кәрәк?

Айбулат бик батыр теҫ менән:

— Минә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ана, Ныязғолдоң приказчиге һыҡрап йөрөй, уға бирегеҙ, ә мин, һеҙгә кәрәк булһа, башҡа ярҙамды тырыштырырмын, — тине.

Был яуапҡа Григорий риза булды, аҙыраҡ уйланды ла:

— Айбулат, ысынлап та һинә минең бер бик меһим йомошом бар, — тине. Ул Айбулаттың еңенән тартып ситкәрәк алып китте. — һин, әлбиттә, аттар менән килден, инде, нисә атың бар?

— Минен. ҡулда ике ат бар.

— Ике ат — бик яҡшы. Әгәр ҙә аттар бишәү булһа һәм һинен менән бер-ике ышаныслы иптәштәрен. дә булһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Беҙ, бөген төндән дә ҡалмай, Казанский менән Кәрәждән беҙҙен, Трубочный заводка ҡорал күсерергә тейешбеҙ. Булдыра алырһын,-мы? — Григорий Айбулаттың күҙенә тура текләне.

Айбулат аҙ ғына уйлап иҫәпләне лә:

— Булдыра алырбыҙ, Григорий Иванович, — тине.

— Ә нисек уйлайһыҫ?

— Миндә ике ат. Духлов игенен килтереүселәрҙән бер бик яҡшы иптәштә ике ат, шунан беҙҙең менән килгән тағы бер кешенен, үҙен алып бармаһаҡ та, атын алырға була, — тип һөйләп бирҙе.

Григорий Айбулаттың төпле һүҙҙәренә тағы ла нығыраҡ кинәнде. Уның арҡаһына еңелсә генә һуғып:

— Рәхмәт, Айбулат, әйҙә, әҙерләй башла! Тик бер кем дә белмәһен. һинең иптәшең ышаныслымы?

— Ышаныслы. Уральскиҙән ҡайтты, үҙебеҙҙен. Имел егете, Мурзин.

— Бик яҡшы, һин хәҙер үк беҙҙен квартираға бар. Вася менән ҡасан, нисек эшләргә ныҡ һөйләшеп, эште төйнәп ҡуй. Аттарың менән был башҡа обозсыларҙан айырыла алһаң, уңай булыр ине.

— Уныһы ла була, беҙҙең фатир Казанский,9. Сафиуллин дворында.

— Улай булһа, бигерәк тә яҡшы. Беҙҙән ни бары биш-алты квартал. Әйҙә, һыҙ! — тине Григорий.

Айбулат үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр үҙендә күтәренке рух, дәртле ғорурлыҡ һиҙеп, дядя Гришаның приказдарын үтәргә ашыҡты.

Айбулаттың бөтә ғору-рлығын, дәртен тигеҙ бүлешкәндәй, яңы дуҫы Зөфәр ҙә уныщ менән ҡатарҙан ашығып атлай ине.

## ЯЛҠЫН ЙӘЙЕЛӘ

### 1

Айбулат менән Зөфәр Самарканы бергә үткәндәш бирле бик тиҙ һәм яҡындан дуҫлашып киттеләр.

Улар ҡатар үҫеп сәскә атҡан йәшлектәренең бер-йәмле ваҡытында осраштылар ҙа бер-береһенә ярҙамға^ үҙ белгәндәрен уртаҡлашырға, халыҡ араһында таратырға ашыҡтылар.

Самарҙа улар Вася Сергеев менән өс көн буйынса, төрлө юлдар һәм төрлө ауырлыҡтар аша үтеп, ҡорал» ташыу заданиеһен үтәнеләр.

Дядя Гриша уларҙы оҙагканда ҡулдарын ныҡ ҡыҫ-, ты. Уларға аҡыллы кәңәштәр биреп, эштәрендә уцыштар теләне.

Айбулат менән Звфәр Григорий Ивановичтән кәңәш менән яҡшы теләк кенә алып китмәнеләр. Уларҙың ҡуйындарында Волгин биргән воззваниеләр ҙә бар ине,

...Айбулат, бөтә аттарҙы Сәйетколға тапшырып, үҙе Зөфәр менән Бөрйәнгә төшөп ҡалды.

Зөфәрҙең әсәһе уларҙы бик ихлас ҡаршы алды. ҡунаҡ итергә тырышты. Зөфәр сәй янында ҡалала ҡурҡыныс һәм ауыр хәлдәр булып ятҡанын, үҙе өсөн бер тин дә аҡса эшләй алмай ҡайтканын һөйләгәс тә, унын, атаһы Мырҙаян,-һирәк һоро һаҡалын һыйпап, аҙыраҡ уйланды ла:

— Йә, ярар инде, балам. Ни эшләмәк кәрәк, һау булайыҡ,—тине. Тағы бер аҙ уйлағас: — Ҡала эшселәренә лә ашарға кәрәк бит, — тип өҫтәне.

Өйҙә ныҡ яуап бирергә тура килер, тип шыртлаған егеттәр, был эштән былай уңай ҡотолғас, еңеләйеп киттеләр ҙә Волгин менән һөйләшеп ҡайтҡан эштәрен бойомға ашырырға ашыгктылар. Үҙ эштәренә керештеләр.

Улар ике-өс көн эсендә икәүһенә йөҙҙән артыҡ прокламащш күсереп яҙып алдылар.



Айбулаттын, яҙыуы Зөфәрҙекенә ҡарағанда асыҡ *та,* матур ҙа ине. Улар береһе яҙғанын икенсеһе алмашып уҡып төҙәттеләр. Айбулат уҡығанда, Зефәр тыңланы, Зөфәр уҡығанда, Айбулат тыңлай ине.

«Бөтә донъя пролетарийҙәре, берләшегеҙ!»

«Россия социал-демократ эшселәр партияһының Өфө ленинсе комитете исеменән:

Крәҫтиән халҡына ер кәрәк, крәҫтиәндәргә иркенлек кәрәк. Быны крәҫтиәндәргә кем бирер һуң? Батша хөкүмәтеме? Юҡ. Батша хөкүмәтенен, эше һәр ваҡытта шул халыҡты ҡыҫыу һәм йәберләү генә булды. Батша хөкүмәте ин, яҡшы ерҙәрҙе баярҙарға ҡырҡып бирҙе, әммә крәҫтиәндәргә, саҙаҡа биргән шикелле, ерҙе аҙ ғына бирҙеләр.

Крәҫтиәндәрҙең ерҙәре булмаһа, ирektәре бармы һуң? Ул да юҡ. Улар һаман баярҙар, дворяндәр, земский начальниктәр, исправниктәр, становойҙар, податной инспекторҙар һәм шулар кеүек башҡа түрәләр ҡулында торалар.

Һеҙ, крәҫтиәндәр, ауыр хеҙмәт менән тапҡан нәмәнен, бөтәһен дә һеҙҙән батша хөкүмәте менән дворяндәр, баярҙар тартып алып бөтөрәләр. Улар йылдан-йыл халыҡты фәҡирләндерәләр. Улар, халыҡтыщ муйынына ултырып ҡанын эсергә еңел булһын өсен, уны ҡараңғылыҡта тоттолар, иҫерттеләр.

Ваҡыт уҙған һайын халыҡтыщ тормошо насарлана барҙы, халыҡ фәҡирләнде. Йотлоҡ бик йыш була башланы. Ер, көсө бөткәнгә, игенде насар ундыра башланы, әммә ерҙе ҡарарға, яҡшыртырға крәҫтиәндәргә мөмкин түгел, сөнки уның аҡсаһы юҡ, бетәһе батша хөкүмәте менән дворяндәрҙең тулмаҫ кеҫәләренә киткән.

Фәҡирлек һаман артты. Ас-яланғас, ғазапланған, йөҙәгән һәм йәберләнгән халыҡ баш күтәрә. Батша хекүмәтенен, золомон бынан ары күтәрергә хәл ҡалманы.

Күп ерҙәрҙә крәҫтиәндәр батша хөкүмәте менән көрәшергә күтәреләләр. Уларҙыщ түрәләр ҡулында ҡол булып торғолары килмәй.

Улар ер өсөн көрәшәләр. Көндән-көн уларҙын. һандары арта. Ауыл артынан ауыл, волость артынан волость йәбергә, золомға ҡаршы күтәреләләр. Күптән бирле халыҡтын иркенлеге өсөн көрәшеүсе ҡала эшселәренә ҡушылалар.

Оҙаҡламай халыҡтың залимдәр менән һөйләшер көнө етер. Халыҡ — крәҫтиәндәр менән ҡала эшсел&ре ул. Уларға ҡаршы байҙар, помещиктәр, фабриканттар, купецтәр генә. Халыҡты еңергә мөмкин түгел.

Улар (фабриканттар, купецтәр, байҙар), мәмләкәттә власть батша хөкүмәте ҡулынан күп ғүмер мыҫҡыл ителгән халыҡ ҡулына күсһә, ул ваҡытта талай ҙа, йәберләй ҙә алмаясаҡтарын аңлайҙар. Шуға күрә улар власте, халыҡ ҡулына аҙ биреп, күберәк үҙ ҡулдарына алыр өсөн батша хөкүмәте менән мәслихәткә инергә ашығалар».

...Айбулат менән Зөфәр^ ошондай прокламацияларҙы байтаҡ ауылдарға таратып, бик күп кешеләргә уҡып ишеттерҙеләр. Йәштәрҙең аҙ-маҙ уҡый белә торғандарының ҡулдарына биреп, ишетмәй ҡалған кешеләргә уҡырға ҡуштылар.

Үткер йәштәрҙед ҡайһы берҙәре бындай прокламацияларҙы тотош ятлап алып, уны ҡыҙығып тыңлаған иптәштәренә лә, ололарға ла һөйләйҙәр ине.

Тик бына Таллыҡ ауылында уларҙы хәҙрәт ишетеп ҡалып, үҙенең улы Ҡәүигә ҡаты иҫкәртеү яһаны.

— Бында, дәжжәл һымаҡ, халыҡты ҡотортоусылар йөрөп яталар икән, һин уны күрмәйһең икән. Иғтибар кәрәк. Хәҙерге заман — донъяның аҙған заманы. Китаптың: «Әҙәмдәр араһында шайтандар кеше һүрәтенә инеп йөрөрҙәр, имеш», — тигәне бына ошо инде, — тине ул.

Был хәбәр тиҙ үк старостаға ла барып етте. Уныһы икенсе яҡтан ҡыҙып сығып, стеналарға йәбештерелгән прокламацияларҙы үҙе йөрөп йыртып ташланы.

Был ваҡытта Айбулат менән Зөфәр ауылдың иң арғы осондағы Айбулатҡа апай тейешле кешегә барып ҡайтырға әҙерләнәләр ине. Урамдан югереп ҡайтып ингән Заһит көлә-көлә хәбәр һөйләне:

— Айбулат ағай, кисә мин йәбештергән яҙыуҙы староста олатайым килел йыртып алды. Ул ныҡ йәбешкәйне. Шунан староста олатай тырнағына шырау керетте лә, ул уны һурғансы, мин уның янына тағы икенсеһен йәбештерҙем. Ул, ҡапыл әйләнеп, яңынан йәбештерелгән ҡағыҙҙы күрҙе лә, ҡото осоп, ҡыекырып ебәрҙе: «Ләхәүлә, ләхәүлә, тфү, тфү, был шайтан эше икән, шайтан эше икән», — тип югерә-атлай хәҙрәткә китте. Эй, беҙ малайҙарға әңгәмә булды ла инде. Тәгәрәшеп көлөштөк.



## 2

Егеттәрҙең планы буйынса ин, аҙаҡҡы ауыл Айҙаҡай ине.

Айбулаттың янында ят ҡунаҡ бар икәнен күргәс, уны ҡаршы алырға сыҡҡан Гөлйәҙөм, оялып, соланға килеп китте. Ул арала ашығып сығып килгән Мәғфүрә, ҡунаҡтын. бик йәш кеше икәнен күреп, тартынып тормайынса, ҡаршы алды. Улар менән күрешеп һөйләшә-һөйләшә, арбалағы кейеҙ-фәләндәрҙе күтәрегГөйгә инеп китте лә өйҙә Гөлйөҙөмгә самауырҙы ҡуя һалып ебәрергә> ҡушты:

— Килен, сәйевде ашыҡтыр. Бик ҙур ҡунаҡ килгән. Ул минен, Бөрйән ауылындағы Мырҙаян ағайымдың улы икән. Танымай ҙа торам, күптән күрмәгәс ни, үҫеп киткән. — Үҙе лә тиҙ-тиҙ генә түрьяҡты йыйыштырыш алды.

Айбулаттың Самарҙан ҡайтмай әллә ҡайҙа оҙаҡ йөрөүенә эстәре бошоп торған Гөлйөҙөм менән Мәғфүрәгә бик ҙур шатлыҡ тыуҙы. Улар, бер-берeһен бүлеп, хәбәр һөйләнеләр. Гөлйеҙөм, шаршау артынан шыбырҙап:

—• Бында ҡайнағалар ҙа, еңгәмдәр ҙә һине әрләйҙәр.' Өлкән ҡайнаға һине Самарҙағы һуғышта ҡатышып йөрөй икән, улай бик ҡулы ҡысытһа, мин уның урынын табырмын тип, зыҡ ҡуба, ә бәләкәй ҡайнаға: «Ҡайтыпкүҙемә генә күренһен, мин унан өс йөҙ бот бойҙайҙы һығып таптырам», — тип аҡыра. Ҡурҡып торабыҙ, — тине.

Айбулат Гөлйөҙөмдө йыуатты:

— Ҡурҡма, ниңә ҡурҡаһыщ? Кем кемдең боғаҙына» алыр әле, уныһын алдан һөйләмәһен, — тине.

Мәғфүрә Ҡотлоярҙын, яраланғандан һуң яҙған хатынан башҡа хат булмауына көйөнөп һөйләне:

— Әллә инде, яраш та булған тиҙәр, кешеләр һуғыштан ҡайтҡылап ята, ә беҙҙең кеше юҡ, — тине ул. Шунаш Айбулатҡа иғтибар менән ҡарап торҙо ла Гөлйөҙөм һөйләгән хәбәрҙе нығытты:

— Алламорат Самарҙан ҡайтып тешөү менән унда булған хәлдәрҙе түкмәй-сәсмәйг һөйләгән, уға бер нәмә& лә булманы. Сәйетколдо, һинен, менән ҡалып оҙаҡлад йөрөгәне есен, Имай бик ныҡ туҡмап ташлаған, бахырҙы.

Айбулаттың бик ныҡ асыуы килде.

— Ни эшләп ул тукмалып ҡарап тора икән, берәй таш менән Имайҙың май башына ҡундырмай.

— Ул йыуашты беләһең бит инде.

Улар шулай хәл белешеп һөйләшеп ултырғансы, Гөлшөҙөм сәй әҙерләп өлгөрттө. Бер-ике сынаяҡ сәй эсеүгә, .Исмәғил югереп килеп инеп, хәбәр һөйләргә кереште.

—• Айбулат ағай, Ныязғол ағайҙарға ситтән ҡунаҡтар килеп тешге.

— Кемдәр?

—> Береһе Таллы ауылындағы үҙенең ишан ҡоҙаһының улы Ҡәүи. Шунан тағы бер йәш мулла бар. Әллә, -уныһы ҡайҙандыр.

Мәғфүрә лә Исмәғил хәбәрен нығытты:

— Эйе, бая теш ваҡытында килделәр. Ныязғол ҡайшаға хатта үҙе аяғүрә тороп хөрмәт итте. Күрәһең, анау йәш муллаһы бер бик ҡәҙерле нәмәлер. Бигерәк шуныһының һүҙен тыңлайҙар. Иртәгә сход та йыйҙырмаҡ булалар шикелле.

Быға тиклем уларҙың, хәбәрҙәрен тыңлап, һүҙгә ҡатшашмай ултырған Зөфәр, был һунғы хәбәрҙе ишеткәс, -ҡыҙыҡһынып һүҙгә ҡушылды:

— Бына, Айбулат, ишетәһеңме, теге реформистәр жилеп сыҡҡандар икән, — тине.

— Ниңә теге тиһең, әллә бер-бер ёрҙә уларҙы һин дә осратҡайның мы?

— Бәй, тап ошоларын осратмаһам ни, башҡаларын ;күп күргәнмен. Ундай байҙар тәрилкәһен ялап йөрей "торған аумаҡай тоҡомдар Яйыкта ла тулып яталар, ә тәп тамырҙары Өфөлә уларҙың.

Айбулат Мурзиндең был һүҙҙәренән һуң ҡапыл ҡа-'балана башланы.

— Улайһа, беҙ эште һуҙмайыҡ әле, — тине. Ул тиҙ тенә урынынан тороп, Исмәғилде янынараҡ саҡырып -алды ла үҙенең сейҙә элеүле торған көпе кеҫәһенән ҡалын бер нисә прокламация сығарҙы:

— Мә, ҡустым, хәҙер генә Хөсәйенде тап та ошо •яҙыуҙарҙы йәбештереп сығығыҙ, — тине.

Исмәғил йәлтелдәп ярҙамлашырға кереште.

— Ярай, ағай, хәҙер, — тине ул.

— Тукта, ана еңгәң ҡамыр һап бирер. Бер кемгә лә күрһәтмә. Күберәген мәсет ҡапҡаһы тирәһенә, оло урамдағы ағас ҡапҡаларға йәбештерерһең.



— Беләм дә инде, ағай. Анау ташҡа баҫылған руссз яҙылған ҡағыҙҙарҙы ҡайһылай яҡшылап йәбештергәйнем әле, — тине Исмәғил.

Уға Гөлйөҙөм бер туҫтаҡ шыйыҡ арыш ҡамыры иҙев ҡулына тотторҙо. Исмәғил сығып та китте.

Мурзингә Исмәғил бик оҡшап ҡалды.

— Ҡайһылай теремек малай. Бик булдыҡлы, — ти» йылмайҙы.

Айбулат уны өҫтәп маҡтап ҡуйҙы.

— Бик яҡшы, шәп егет буласаҡ ул малай. Унын, Хөсәйен тигән иптәше бар, уныһы ла шулай, бик уңға» бала. Үткәндәге ҡағыҙҙар тип, теге «Крестьяне, к вам наше слово»ны әйтә ул.

•— Руссаны укый белеүсе лә юҡтыр ул?

— Русса түгел, башҡортса укыусы ла һирәк тә бит, ни эшләйһең. Шулай ҙа файҙаһыҙ ҡалмай. Был юл менә» эш итеүҙең бик файҙалы бер яғы бар, — Айбулат хәтерләп келөп ҡуйҙы. — Шул русса прокламацияны күргән кешеләрҙең ни яҙылғанын белгеһе килә бит инде. Тимерғәле олатай ин. башта инде.Ҡарап-карап торған да писаргә киткән. Уға барған да:

— Әйҙә әле, ҡустым, укып ишеттер әле, — тип писарҙе алып килгән. Быларҙы күреп башҡалар эйәргән. Писарь ни;тырышып-тырышып укып, мәғәнәһен һөйлә№ бирә икән. Халыҡ шулай итеп, бик күп йыйылып киткән. Беҙгә ни шул ғына кәрәк. Мин дә араларына инеп киттем дә бер ыңғай бөтәһен тәржемәләп һейләп бирҙем^ Бик яҡшы булып сыҡты.

— Ул да ҙур эш булған, — тине Мурзин.

— Ә һуң кешеләр быны бер ай буйына ауыҙҙарышан. һалмай һөйләнеләр, ә һөйләүселәр араһында, һүҙ ыңғайы килтереп, ҡушылып һөйләү бик яйлы сыға.

Улар иртәгә буласаҡ сходҡа ҡайһылай итеп әҙерләнеү тураһында кәңәшкә керештеләр. Зөфәр ситтән килгән ҡунаҡтар халыҡ араһына сығып йөреүсе реформистәрҙең батшаға ла ярап, баярҙар, фабриканттар күңелен дә күреп, әле революцион кврәш алып барған эшселәр, крәҫтиәндәрҙең мәнфәғәттәрен бөтөнләй юҡҡа сығарырға тырышыусы аумаҡай вәкилдәре икәнен һейләп бирҙе.

Айбулат Мурзиндең был һүҙҙәренән ҡыҙып ҡуҙғалды;

— Сход була ҡалһа, Зөфәр, давай һин дә, мин дә уларҙың йөҙҙәрен йыртырлыҡ итеп ҡаршы сығайыҡ, — тине ул.

— Унытһы тәғәйен инде ул, Айбулат. Әллә беҙ уларҙы мөкиббән китеп тыңлап ултырырбыҙ тиһеңме? Күҙҙәренә төртөп һөйләрбеҙ. Бында беҙҙе яклап һөйләүселәр ҙә •булһа, бик яҡшы булыр ине.

Уларҙыщ был кәңәштәрен Әхмәҙи килеп инеп бүлде. Унын, менән күрешеп, һаулашҡанса булмай, Исхаҡ менән Сафа килеп инделәр.

Улар яңы ғына Покровка ауылынан ҡайтып тешкәндәр ҙә, Айбулаттын. ҡайтканын ишетеп, бында югертәндәр.

Исхаҡ, күрешеп, һаулашып бөткәнде лә көтмәй:

•— Эй, Айбулат, һин генә өйҙә булманың, беҙ Покровка менән Кузьминдә зыҡ ҡуптыҡ. Ауыҙыбыҙ тулы хә-"бәр! — тип һүҙгә кереште.

Айбулат, бик ҡыҙыҡһынып, янған күҙҙәре менән бөтәһенә лә ҡарап:

— Йә, йә, һөйләп ташлағыҙ! — тине.

Исхаҡ бүркен сисеп урындыҡҡа һалды, көпөһөнөң яғаһын ысҡындырып ебәреп, һике ситенә ултырҙы. Әхмәҙи үргә сығып, аяҡ салып ултырып, Мәғфүрәнең ҡыҫтап-ҡыҫтап димләгән бер сынаяҡ сәйен алдына алып, уны ҡоя тормайынса, Исхаҡтыщ һүҙенә ҡолаҡ һалды. -Сафа, өҫ-башын да сисенмәй, асыуланған кеше һымаҡ -ҡаштарын тексәйтеп, ике ҡулын кеҫәһенә, тыҡкан кейө иҙән уртаһында баҫып тора ине.

— Беҙ ни, әлеге һинең менән һөйләшкәнсә, Кузьмин угарына законһыҙ ҡушылып киткән үҙебеҙҙең ерҙәр тураһында берәй эш сығарып булмаҫмы икән тип, шул яҡта йөрөп әйләнергә сығып киткәйнек. Унда беҙгә тик-.лем өлгерөп яталар. Беҙ ни уйлап йәрегәнде әйткәс, улар: «Нинә әле йәһәннәм аҫтында тигәндәй, алыҫтағы -кан заман юғалған ерҙе юллап маташаһығыҙ? Барығыҙ, Расторгуй менән Ныязғолдан башлағыҙ. Бындағы ерҙәр үҙебеҙгә лә етмәй әле», — тиҙәр. «Әгәр ҙә был яҡтан башҡа берәй ярҙам өмөт итһәгеҙ, пожалуйста», — тиҙәр.

Айбулат Исхаҡтын. һүҙен бүлде:

— Тиҙәр ҙә тиҙәр, тиһең. Кемдәрҙе күреп һөйләштен Шуң?



• — Кем тип ни, бетәһе лә шунда. Покровкалар ҙа барғандар, Ивановкалар ҙа ҡушылып алғандар, Кузьминделәр ҙә шунда. Улар һәр бер ауылдан үҙҙәренен, вәкилдәрен һайлап ҡуйғандар, шуны әллә нindәй генә комитет тип йөрөтәләр. Эште ошо комитет йеретә. Комитет башында һуғыштан яңыраҡ ҡына ҡайтҡан бер үткер кеше тора икән. Моряк тип йөрөтәләр. Волгин дә бер генә кенгә килеп китте. һине һорашты. Ни эшләп һаман ҡайтмай йөрөй икән, ти. Ул күберәк иген еләшеү, Самарға иген тейәтеү менән булды ла китеп тә барҙы.

— Шунан?

— Шунан, шул. Улар шулай итеп Кузьминден, Селекле буйындағы участкаларын үҙ-ара бүлешеп яталар. Унын -келәттәрендәге игендәрен үҙҙәре лә бүлешеп ташыйҙар, Самарға ла оҙаталар.

Исхаҡтың һүҙен Сафа бетерөп ҡуйҙы.

— Самарға иген тейәгәндә, беҙ ҙә ярҙамлаштыҡ. Әллә ҡырҡ-илле йөк китте. Беҙгә лә бишәр бот биреп ҡайтарҙылар.

Мурзин Айбулатка ҡараны ла:

— Бына, исмаһам, был ысын, йәнле хәрәкәт, — тине.

Айбулат, уйланып, баш һелкте:

— Эйе, ысын, йәнле хәрәкәт. Бик дөрөҫ, — тине.

Хәҙер улар үҙҙәренә ни эшләргә кәрәклек тураһында уйға төштөләр. Шул турала һүҙҙәр күбәйҙе, фекерҙәр алға тәгәрәне.

.3

Айҙаҡайҙағы сход тыныс һәм мөһабәт тантана менән асылды.

Ныязғол староСта аяҡтарын ике яҡҡа ҡаратып арҡыры баҫып, ҡайҡая биреп, алдан китте. Халыҡ йыйылғасыраҡ Ҡәүи мәхдүм менән ят ҡунаҡ мулла ла барҙылар. Халыҡ йыйылып бөткәс кенә, Айбулат менән Зөфәр ҙә килеп инделәр.

Сход өйө итеп быйыл Ҡаҙанҡап Абдулланың өйөн алып ҡуйғайнылар. Уныщ өлкән ағас өйөнөн, түрьяғы бөгөн халыҡ менән шығырым тулы. Элек сходҡа ҡарттар ҙа урта йәштәгеләр генә килә торғайнылар. Хәҙер йәштәр ҙә, хатта үҫмер малайҙар ҙа йөрөй башланылар. Өҫтәл тирәһендә Ныязғол, Шиһап мулла һәм ҡунаҡтар ултырғандар. Ә бүтән кешеләр кем ҡайҙа — шунда урынлашҡандар.

Айбулат менән Зөфәр килеп ингәс, сотник Саттар жарт, үҙе ултырған мейес эргәһендәге эскәмйәнән тороп, -урын күрһәтте.

—• Әйҙә, ҡунаҡ улым, Зөфәр шәкерт, ултыр! — тине.

Зөфәр үҙе ултырғас, аҙыраҡ шыуып, Айбулатҡа ла урын бирҙе.

Сходты Ныязғол үҙе башланы. Ул Айбулаттың ҡайтҡанын ишетмәгәйне. Әле уның бында килеп инеүенә лә, ҡайтҡас, үҙенә барып күренмәүенә лә бик ээһәрләнеп асыуы ҡабарҙы. Ләкин бында оло, ят ҡунаҡтар алдында ул, һүҙ ҡуҙғатып, сер бирергә теләмәне. Шуға күрә, ул сырайын да һытмай ғына, хатта аҙыраҡ йылмайған төҫ, йомшаҡ тауыш менән сходты асты.

— Ағай-энеләр, туғандар, беҙ бөгөнгө кендә, бик ҙур үзгәрештәр яһап ягкан бөйөк инҡилап заманында, йыйылышып һейләшеп алыуҙы тейеш таптыҡ. Үҙебеҙҙә, аллаға шекөр, тыныслыҡ әле. Быныһына ҙур шөкөрана ҡылайыҡ та бының арьяғына иҫән-һау ғына ошо кәсәфәттәрҙән ҡотолоп ҡалыуҙы теләйек.

Бына ошондағы изге мосолмандар уйы менән беҙгә Өфө яғы башҡорттарынан бик мөғтәбәр кеше булған мөфтөй хәҙрәттәре Мөхәммәтьяр әфәнде Солтанов духовный собрание исеменән «Нәсихәт» ебәргән. Бына юшоно укып сығыуҙы беҙ алыҫ ерҙәрҙе яҡын итеп килгән хөрмәтле Ғәйнулла муллаға тапшырабыҙ. Ул һөйләп •бөткәс, һүҙҙе үҙебеҙҙең Ҡәүи мәхдүмгә бирербеҙ. Ул да •бик алыҫ ерҙәрҙә, Ырымбурҙа, Өфөлә булып ҡайтҡан, аҡыллы ғилемдәрен тыңлап, үҙебеҙсә уйыбыҙға альш ҡуйырбыҙ. Ғәйнулла мулла, рәхим итегеҙ, —• тине лә, маңлайындағы бөрсөк-бөрсөк сыҡкан тирҙәрен ҙур һоро -кулъяулыҡ менән һөртөп алып, ул урынына ултырҙы.

Ныязғолдоң һейләү һәм ҡыланыуҙарын ҡарап ултыра торғас, Айбулаттың бик ныҡ көлтөһө килде. Ул эсенән, «ҡара һин уны, «ғалимдәр» менән бер кис үткәргән-•ͼ шулай телгә оҫтарып киткән, ахыры», тип уйлап ҡуйҙы. Айбулаттың был кәйефен аңлап алған Зөфәр уның ҡолағына:

— Быларҙың бетәһен аҙағына саҡлым тыдлайыҡ, шунан үҙебеҙ башларбыҙ, — тип шыбырҙаны.

Ғәйнулла мулла элекке муллаларға ҡарағанда ла "каршыраҡ ғәҙәт менән ҡаласа кейенгәйне. Уның өҫтендә яҡшы буҫтауҙан тегелгән ҡара йөббә, башында ҡупшы ҡара ҡасим бүрек, аяғында ялтыр ситектәр һәм улар



өҫтөнән ҡырлы балаҡтарын һалып ебәргән ҡара буҫтау салбар ине. Ул үҙен дә, элекке муллалар һымаҡ, башыш баҫып, күҙен йомоп түгел, ә ҡаланын, бер үткер сауҙагәре һымаҡ, еңел һәм көйәҙ тота. Бындай төҫ, кейем„ ҡыланыштар Шиһап муллаға бик оҡшап бөтмәй, күңелен ҡытрайтһа ла, Ғәйнулланың мөфтөй янынан килгәк' булыуы уға бетенләй аҡлама бирә. Ә бына ишан хәҙрәтулынын шулай артискәрәк оҡшатып ҡыланыуын Шиһап мулла бер ҙә яратманы. Әгәр ҙә ул быларҙы бынаш бер өс-дүрт йыл элек күргән булһа, «мәлғүндәр», тип[1] әрләүҙән тартынмаҫ ине. Ә хәҙер... заманаһы шулайға^ китте шул! Сабыр итергә тура килә. Шиһап мулла үҙенең ошо күңелһеҙ уйҙарын иҙәнгә текләп ослап ҡуйҙы„ «йә, ярай, ни булһа ла, был йәштәр мосолмандар өсөк изге ниәт менән йөрейҙәр», тип күңелен тынысландырҙьЬ ла Ғәйнулланың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалды.

Ғәйнулла, Ныязғол һымаҡ, төҫөнә йомшаҡ йылма--йыу сығарып, нәҙек тауышын ҡөрьән укыу көйенәрәк; һалып һөйләй:

•— ...Мосолман ағай-энеләр!

Мин һеҙгә тәү башта батша хәҙрәттәренен, манифесетураһында һөйләп үтәйем. Был манифест беҙгә һәм бетә» халыҡҡа иркенлек бирә, беҙгә бик күп изгелектәр вәғәҙә* итә. Был манифестең үҙе тотошлай мосолман телендә„, йәғни төрөксәгә күсерелеп баҫтырылған. Ул элек үҙегеҙҙә укылған икән. Шуға күрә, беҙ бөгөн батша хәҙрәттәренең һаулығына доға ҡылайыҡ, ул оҙаҡ йәшәһен.

Ғәйнулла үҙенең ошо кереш һүҙен байтаҡҡа һуҙыго һөйләне лә, ҡулына «Нәсихәт»те алып, укый башланы::

«...ләкин манифестең беренсе матдәһенә уҫал ниәт* менән бащҡа мәғәнә биреп, байҙарҙын. малдарына, ер һәм һыу кеүек милектәренә зарар итергә, йәғни шәриғәг һәм закон тыйған эштәрҙе эшләүгә мосолмандарҙы ҡотортоусылар барлығы ишетелде. Үҙебеҙҙең файҙабыҙ; өсөн булған манифесте әһле ислам хата аңлап, боҙотс эштәргә файҙаланыу мөмкин тип аңламаһындар. Үҙ көрәштәренә, уларҙың йән һәм тәндәренә, ер-урмандарына; зарар килтерергә батырсылыҡ итмәһендәр. Был турала ҡотортоусылар булһа, уларҙың һүҙҙәренә ышанмаһын--Дар».

Айбулат, Зөфәргә әйләнеп ҡарап:

— Төшөнәһеңме, ниндәйерәк нәсихәт? — тине.

г\»*

Зөфәр бик серьез һәм асыулы төҫ менән Ғәйнуллаға текләгән көйө:

— Бик төшөнәм, матур һайрай! — тине.

Уларҙың бик аҡрын булмаған был шыбырҙауҙарын мейес эргәһендә ултырған йәштәр асыҡ ишеттеләр, күрәһең. Улар араһынан әллә ҡайһыһы, ҡысҡырып тороп, яйлап ҡына:

— Бына кәрәк булһа һинә нәсихәт! Шул да булған икән нәсихәт!— тип һуҙып ҡуйҙы.

Унын һүҙенән ул тирәләге йәштәр бер юлы көлөп ебәрҙеләр.

Ныяҙғол, улар яғына бик асыулы ҡараш ташлап, орошорға тип әйләнгәйне, ләкин ҡалаларҙа һуңғы ваҡыттарҙағы былдай сығыштарҙа халыҡтан әрләнергә өйрәнеп беткән Ғәйнулла мулла был тауышҡа ғына иғтибар итмәне. Ныяҙғол, унын, тыныслығын күреп, үҙен тыйҙы. Шулай ҙа Ғәйнулла мулла, ҡулындағы биш-алты битлек ҡағыҙҙарҙың яртыһын тигәндәй аша төшөп, һүҙен ҡыҫҡартырға тырышты. Оҙаҡламай ослап та ҡуйҙы:

— ...Бөтә кешелек донъяһына ислам итәғәте мотлаҡан булыуы менән мәшһүр. Кешенең эске һәм тышҡы хәлдәрен әйләндереп алыусы динебеҙ беҙгә мөһим вазифалар йөкләтә: Әлсолтан салла аллаһо фильарз, йәғни күк батшаһының күләгәһе булған ер батшаһына ла шул уҡ итәғәт итеүҙе йөкләтәлер.

Ләкин тәәссәфкә ҡаршы, мосолманса яҙылып тороп, мәсет ҡапҡаһына йәбештерелгән прокламациялар беҙҙе бик ҡаты тәшүишкә һала. Сенки был эштәр беҙ мосолмандарҙын. берлеген һәм батшаға итәғәтлелеген боҙалар. Шуға күрә мосолмандар үҙ араһында бер-береһен былдай эштәрҙән тыйырға тейештәр. «Нәсихәт» беҙгә шулай тип өйрәтә. Ә инде «тыйылмаған кешеләр һәм, киреһенсә, ҡотортоусылар була икән, ундайҙарҙы правительство ҡорал көсө менән тыясаҡ».

Халыҡ барыһы бер юлы геүләшә башланы. Ҡайһылары Ғәйнулланың һүҙҙәрен йөпләй, күрәһең:

— Эйе, алла һаҡлаһын, — тиҙәр.

Ләкин Айбулаттар яғында ултырған йәштәрҙен, һүҙе башҡа:

— Бик шәп нәсихәт алып килгәнһең икән!

— Күрҙек нәсихәтенде. Хөрриәтте ҡорал көсө менән баҫтырыуҙы хуплаған нәсихәт үҙеңә булһын!



Ныяҙғол, асыуланып, ҡара көйөп, халыҡты тыйырға тырышты:

— Был ниндәй тәртип боҙоу тағы, тик кенә ултырып булмаймы ни, сит кешеләр барҙа оят кәрәк, — тип ҡысҡырҙы.

Ныяҙғол Айбулатҡа асыулы күҙҙәрен уйнатып текләй. Ләкин Айбулат менән Зөфәр, үҙҙәре ҡуйышҡан һүҙ буйынса, тыныҫ ултыралар. Улар Ҡәүиҙен, һөйләгәнен дә ишеткеләре килә. Бер аҙҙан сход тынысланды.

Ныяҙғол да тирен тағы бер ҡат ҡоро ҡулъяулығына һөртөп алды ла, асыуҙан ҡалтыраған тауышын тынысландырырға тырышып:

— Хәҙер беҙҙең Ҡәүи мәхдүм нотоҡ һейләйәсәк. Ул да бына әле генә бик ҙур мәҙрәсәне уҡып бөтөп ҡайтҡан уҡымышлы кешебеҙ. һис бер шауламай, ихлас тыңлайыҡ инде. Ул һөйләгәндә оронсоҡлаусы булһа, сходтан етәкләп сығарып ебәрәм! — тип, баяғы шаулашҡан яҡҡа ҡарап, бармаҡ ҡағып ҡуйҙы.

Ҡәүи, урынынан тороп, башындағы йондоҙлап сигелгән ҡара бәрхәт таҡыяһын, ҡупшылаңҡырап ҡуҙғатып, сикәһенәрәк шыуҙырҙы ла, бөтә кеше өҫтөнән күҙ йөрөтеп алғас, һөйләй башланы.

— Ағай-эне, мосолмандар! Беҙгә әле генә Ғәйнулла әфәнде батша хәҙрәттәренен, манифесе тураһында һөйләп үтте. Мин ул турала күп ҡағылмайым. Ләкин был манифестең бөтә Россия халҡы өсен һәм беҙҙең мосолман халҡы өөөн дә күп изгелектәр биреүе хәҡиҡәт. Йәғни шуны ғына әйтеп үтергә лазым табамын ки, беҙ быға тиклем ихтилалдың башланған ваҡытынан алып барыбыҙ да дөйем хәрәкәт менән барған булһаҡ, хәҙер был батша хәҙрәттәренең манифесенән һуң, беҙ үҙебеҙҙе яңы һәм яҡшы донъяға сыҡканбыҙ тип фараз итеп, йәғни шулай тип иҫәпләп, тыныс тормошҡа күсергә тейешбеҙ. Бының өсөн ни кәрәк? Бының өсөн мосолмандарҙыӊ дәйөм берлеге кәрәк. Хәҙерге Өфө ҡалаһында «Мосолмандар иттифаҡы» тигән бер ойошма төҙөлдө. Был ойошманың теләге мосолмандарҙың үҙ-ара барған талаш, тартыштарын бөтөреп, татыулыҡ менән, берлек менән йәшәүҙәрен алға һөреү. Әле бына ишеттегеҙ, манифестә лә ирҡенлек тураһында яҙылған. Беҙ ошо йылдарҙағы ихтилал арҡаһында өлгәшкән ирекле һәм тигеҙлекте үҙебеҙгә ҙур ғәнимәт белеп, талаш-тартыштарҙы бөтөреп, тыныс торорға тырышайыҡ. Әгәр ҙә беҙ, ошо

«Мосолмандар иттифаҡы» күрһәткәнсә, үҙ-ара аңлашып берләшһәк, бик ҙур реформалар яһап, мәҙәни тормошҡа күсәсәкбеҙ. Шуға күрә бөтә мосолмандар берләшеп эш ҡылырға тейештәр...

Ҡәүи мәхдүм, ошо турала бик оҙаҡ һөйләп, Государственный дума тураһында ла бер талай һүҙ бутап. үҙенең телмәре елле сыҡһын тип, ахыры, ҡулдарын алға һуҙып:

— «Иттифаҡтыр берләшеү, йыйылып бергә серләшеү!» — тигән лозунг менән һүҙен бетөрөп, үҙенән бик риза булған төҫ менән, урынына барып ултырҙы.

Был юлы уға ҡаршы ла, ыағай ҙа бер нәмә тип тә өндәшеп шауламанылар. Сәнки тыңлаусыларҙың күбеһе «иттифаҡ»тың ни тигән һүҙ булыуын тешөнмәй ине. «Иркенлек, тигеҙлек, берлек» кеүек һүҙҙәрҙең ҡапыл ишеткән сакта ҡолаҡҡа яғымлы яңғырауы ҡайһы бер кешеләрҙең мейеләрен сыуалтып ташланы. Ә баяғы ҡыҫкырыусылар Айбулат менән Зөфәрҙең һүҙен кетөп тындылар.

Ныязғол, сходты ябырға уйлапмы, үҙе һөйләргә уйлапмы, урынынан тороп, ҡулын күтәргәйне, Зөфәрҙең ҡуҙғалғанын күреп:

— йә, йә, бына беҙҙең тағы бер укымышлы шәкертебеҙ бар әле. Ул да беҙгә үҙ нотоғон әйтһен әле, — тине.

Зөфәр һүҙен:

— Ағай-эне, туғандар, —• тип башланы. — Бына күрәһегеҙ, беҙгә, беҙҙең Ырғыҙ буйына, бик күп аҡыл һәм кәңәштәр тейәп, Өфө әфәнделәре килеп тешкәндәр. Беҙ улар ҙың һүҙҙәрен иғтибар менән тыңланыҡ һәм бик яҡшы аңланыҡ. Хәҙер улар беҙҙе, беҙҙең яҡ кешеләренең һүҙҙәрен тыңлаһындар. Беҙ, әлбиттә, был әфәнделәрҙе, бик насар кешеләр, тип яманлай алмайбыҙ. Сөнки был кешеләр үҙҙәре ҡалалағы татар буржуйҙары һәм татар-башҡорт байҙары, руханиҙәренең заказдарын үтәп йөрөүсе приказчиктәр генә. — Кешеләрҙең ҡайһылары мышылдап көлөп ҡуйҙылар ҙа тағы тынлай башланылар.— Был приказчик әфәнделәр, бында беҙгә килеп, былай ҙа өсләтә иҙелеп, быуаттар буйына артта ҡалған башҡорт халҡынын. ин, нык иҙелгән ярлыларының әле генә ҡояш яҡтыһына -асылырға әҙерләнгән күҙҙәрен тиҙерәк томалап ҡуйырға ашығып килгәндәр!

Ныязғол, бик ҡаты тамаҡ ҡырып, бөтә ултырғысы менән дыңғырҙап әйләнеп, Зөфәргә ҡарап ултырҙы.



Зөфәр һүҙен дауам итте:

— Манифесте һеҙҙең маҡтамай хәлегеҙ юҡ. Сөнки -ул һеҙҙен байҙар, капиталистәр синыфына бик йәтеш тура килә. Манифест тураһындағы мәсьәлә беҙгә көн •асеүек асыҡ. 17 октябрь манифесе — ҡапҡан ул, тоҙаҡ ^ул. Манифестең биргән вәғәҙәләре, «граждандар ирке», тигән һүҙҙәре батша хөкүмәтенең үҙен ҡыҫымға алған эшсе-крәҫтиәндәр восстаниеһенән ҡотолоп тороу өсөн -гөҙөлгән буш вәғәҙәләре ул. Был манифест тураһында хәҙерге ваҡытта халыҡ араһында, беләһегеҙме, ниндәй йыр, ижад итеп, йырлап йөрөйҙәр:

Батша ҡуркты ла сығарҙы манифест,
Үлгәндәргә — ирек, тереләргә — арест.

Бына был йырҙы һеҙ әфәнделәр генә түгел, беҙҙең бөтә йәш егеттәр ҙә аңлайҙар.Ә һеҙ шуны аңлай тороп, хәҙрәттәрҙең сайҡап эсергә биргән бетеүендәй итеп, «нәсихәт» ҡосаҡлап килеп еткәнһегеҙ. һеҙгә бының өсөн хужаларығыҙ ҙур наградалар бирерҙәр. Ләкин бында иҙелгән крәҫтиәндәр һәм ҡалаларҙағы көн-төн б'арған ҡанлы восстаниеләрҙә ысын ирек өсөн йән асыуы менән көрәшкән пролетариат һеҙҙе мәңге ҡарғар һәм бик ҡаты үс алырҙар.

Ныязғол, ораторҙың күҙгә бәреп әйткән хаҡ һүҙҙәренә сыҙамай, урынынан тороп, ҡапыл ҡул һелтәне лә:

— Етәр, шәкерт, күп һөйләйһең! — тип ҡысҡырҙы.

Ләкин үҙен бик мәҙәни һәм аҡыллы күрһәтергә тырышҡан Ҡәүи, асыуҙан күгәргән ирендәрен йылмайтып, Ныязғолға өндәшмәҫкә ишара яһаны.

Зөфәр былай ҙа һүҙен бетөрөргә яҡынлағайны.

—• һеҙ әфәнделәрҙе беҙҙең стеналарҙағы прокламациялар тәшүишкә һалған икән, ғәжәп түгел. Бик якшы булған. һеҙ үҙегеҙҙең ярлы халыҡ теләгән иреккә тәш-үишле ҡарашығыҙ менән үҙегеҙҙең йөҙөгөҙҙө генә асаһығыҙ. ,

Зөфәр ҡапыл туктап урынына ултырҙы ла Айбулатҡа ҡараны. Ҡуйышҡан һүҙ буйынса хәҙер Айбулат һөйләргә тейеш ине.

Айбулат, урынынан тороп, иҙән уртаһынараҡ сығып баҫты. Ныязғол үҙе, Зефәргә ҡаршы һөйләргә әҙерләнеп торғанда, Айбулаттың әҙерләнеүенә аптырап:

— һиңә ни кәрәк тағы? — тине.

Айбулат, унын күҙҙәренә туп-тура ҡарап, мыҫҡыллы тауыш менән:

— Миңәме, миңә бына ситтән килгән ҡунаҡ әфәнделәр менән һөйләшеп ҡалырға кәрәк,— тип яуап бирҙе.

— һуң, һүҙҙе һорап ал!

— Бир!

Мейес янындағы йәштәр барыһы бер юлы көлөп ебәрҙеләр.

Айбулат уларға шауламаҫҡа ишара итеп ҡул һелтәне лә һөйләй башланы:

— Ағай-эне, туғандар! Беҙҙең алдыбыҙға килеп, бегенгә кендә барған ҡатмарлы сәйәсәт тураһында һөйләп торған оратор әфәнделәрҙең нотоҡтарынан беҙ ниндәй мәғәнә аңлайбыҙ? Беҙ уларҙы үҙебеҙҙең иҙелгән крәҫтиәндәргә файҙалы эштәрҙе аңлатыусылар итеп нисек ҡабул итәйек? *

Иң тәүҙә йәш хәҙрәт Ғәйнулла әфәндегә яуап: беҙгә ул бик ҙур «нәсихәт» алып килеп сыҡкан. Рәхмәт инде онотмағас!

Йәштәр яңы тағы ла келөп ебәрҙе.

Айбулат, уларға иғтибар итмәй, һөйләүендә булды:

— Был «нәсихәт» беҙҙең кеүек иҙелгән, интеккән ярлы халыҡ өсөн буш та кәрәкмәй. Сенки ул беҙҙең өсөн бик зыянлы нәмә. Сөнки беҙ, байҙарҙың, баярҙарҙың еренә, һыуына, малына, фабриканттарҙың, заводсыларҙың байлыҡтарына ҡағылмайынса, һәйбәт кенә, тәтәй генә булып йөрөйөк тип, бер-беребеҙҙе димләшеп, әпәүләшеп тора торған кешеләр түгелбеҙ һәм һеҙ әфәнделәрҙең нәсихәтен тыңлап, һеҙ күрһәткән юлға төшөп китәсәгебеҙ юҡ. Быны емөт тә итмәгеҙ! Беҙ, киреһенсә, үҙебеҙҙең. ер-һыуыбыҙҙы тартып алып, эш кәсебеҙҙе урлап байыған байҙар, баярҙар, фабриканттарға ҡаршы ҡаты көрәшкә сыҡканбыҙ һәм ошо көрәштә еңмәйенсә туктамаҫҡа тип, бил быуып керешкәнбеҙ. һеҙ, әфәнделәр, быны бик ныҡ хәтерләп ҡалығыҙ.

Инде килеп, шуны ла әйтәйек. Ғәйнулла мулла мөфтөйҙән, диниә наЗаратынан килһә, беҙҙең Ҡәүи мәхдүм, Өфөләге байҙар. тәрилкәһен ялап, уларҙың мәнфәғәтен алға һөрөүсе, үҙе әйткәнсә, «Мосолмандар иттифаҡы» ойошмаһынан килеп тәшкән бер бәндә.

Ҡәүи түҙмәне:

— һнн, ҡоҙа, шәхескә ҡағылмай һөйлә,— тип һүҙ ҡыҫтырҙы.



Айбулат уға боролмайынса ғыШа яуап бирҙе:

— Мин хәҙер ана шул Ҡәүи мәхдүмдең беҙгә Нөйләгән «иттифаҡы» тураһында аңлатып китәйем:

Донъялағы һәр бер милләттә булған кеүек, беҙҙең татар-башҡорт халҡында ла синфи айырмалыҡтар бар. Бөтә донъя халҡы, динен, милләтен айырмайынса, терлө синыфтарға бүленгән һымаҡ, Россия мосолмандары ла төрлө синыфтарға бүленәләр. Мәҫәлән, мосолмандарҙа, бер яҡтан, баярҙар һәм капиталистәр, икенсе яҡтан, крәҫтиәндәр һәм ялланып эшләй торған эшселәр бар. Хужалыҡ мәнфәғәттәре бер булған кешеләр бер синыфҡа инәләр. Эшсенең теләге хужаның теләгенә ҡапмаҡаршы була. Бына шуға күрә лә һеҙ тәкдим иткән «Мосолмандар иттифаҡы» тигән бер генә фирҡәгә бетә мосолмандар ҙа инә алмай.

Хәҙер был фирҡәнең ниҙән ғибарәт икәнен ҡарайыҡ.

Ғәйнулла реплика ташланы:

— Унын ниҙән ғибарәт икәнен беҙ аңлаттыҡ. Ә һеҙ рустарға эйәрмәксе булаһығыҙмы? — тине.

— Был фирҡә шунан ғибарәт. Ғәйнулла мулла беҙҙе рустарға эйәреүҙә. ғәйепләй. Дереҫ, бик дөрөҫ. Беҙ рустарға, уларҙың алдынғы кешеләренә эйәрәбеҙ. Ә һеҙҙең «иттифаҡы» тигән фирҡәгеҙ телдә генә мосолмандарҙыҡы, ысынында ул капиталистәр яҡлы.

Ҡәүи түҙмәне:

— Дөрөҫ түгел, юҡты һөйләй, тәрәнгә керә! — тип ҡыҫҡырҙы.

Айбулат уға табан боролдо, ун, ҡулы менән бер нәмәне ярып айырған кеүек, уға ҡарата һелтәп һөйләне:

— Бик дереҫ, бик аңлайбыҙ, Ҡәүи әфәндекәй! Тәрәнгә керәбеҙ, һеҙҙең кеүек еҫтән шымартмайбыҙ.

Ныязғол бик асыуланып урынынан торҙо һәм, ике ҡулы менән дә Айбулатҡа һелтәп:

— Тукта, һөйләмә, ташла, тим! Бына яр аҫтынан яу сыҡкан! һиңә ни ҡалмаған? Ни тип оялмай ҙур кешеләргә ҡаршы тел күтәреп тораһың, мәлғүн! — тип ҡыҙып ҡыҫҡырынды.

Айбулат һейләүенән бер аҙға ғына туҡтап, Ныязғолдоң ярһыуы баҫылғанын кеттө.

Исхаҡ, Әхмәҙи, Тимерғәле ҡарт барыһы бер юлы:

— һөйләһен Айбулат. Тыйма уны!

— Староста, оронсоҡлама әле, һөйләһен!

— һөйлә, һөйлә, Айбулат! — тип ҡыскырҙылар.

Айбулат дауам итте:

— Ағай, һинең мине сходта һөйләүҙән тыйырға бер хаҡың да юҡ. Әле генә ишеттең бит, манифестә лә кешегә ирек бирелгән, «иттифаҡы»ғыҙ ҙа «йыйылышып һөйләшергә» ҡуша. Һин ана шул үҙегеҙҙең дәлилдәрегеҙгә ҡарап ҡына булһа ла, минең һөйләүгә ҡаршы килмә! Мин кәрәгемде әйтеп бөтмәй туктамайым! — тине.

Ныяҙғол ҡунаҡтарға аптырап ҡараны. Улар уға «һөйләһен» тигән ишара менән баш эйҙеләр.

Айбулат дауам итте:

— Хәҙер минең һүҙем күп ҡалманы. Мәсьәлә ҡыҫҡа һәм асыҡ. Беҙҙең, Ырғыҙ буйына килеп, беҙҙең яңы ғына аңдары уянып килгән ярлы крәҫтиән халҡыбыҙҙың башын ҡаңғыртып йөрөүсе мулла-монтағай, иттифаҡсы кадеттәр, реформасы әфәнделәр бөгөндән үк ҡайтып китһендәр. Улар беҙҙең ихтилал менән алға барған тормошобоҙға ҡаршы төшөп маташмаһындар.

Исхаҡтар тағы ла элеп алып киттеләр. Шау-шыу ҡупты.

Ныяҙғол, урынынан һикереп тороп, Айбулатҡа ынтылды.

— Етер, тим, хәҙер ҡыуып сығарам. Мәлғүн икәнһең. Минен, ес йөҙ бот игенде ҡайҙа олаҡтырып ҡайттың, шуны һөйлә, оялмаһаң! Өндәшмәгән һайын шашаһың1

Айбулат ҡыҙманы:

— Уны ла һөйләйем. Ул игенде беҙ ирек яулап ятҡан ҡала эшселәренә тапшырҙыҡ. Һин, ағай, ишеткәнһендер, Кузьмин утарынан игенде ҡалаға иллешәр йекләп оҙаталар. Бегөнге кендә Кузьмин тирәһендә халыҡтың ниҙәр эшләп ятканын ишетмәгән булһаң, барып күр. Ниңә һин Сәйеткол ағайҙы эт урынына туҡманың? Шул турала һин яуап бир!

Сходтың рәте китте.

Талаш былай конкрет төҫ алғас, вәкилдәр ҙә урындарынан ҡуҙғалдылар. Бөтәһенә таныш һәм яҡташ булғаҒ Ныяҙғолдоң ҡоҙаһы Ҡәүи бирешмәгән төҫ менән тыныс ултырырға тырышһа ла, был тирәгә тәүләп килгән Ғәйнулла мулланың төҫө ап-аҡ булғайны. Ул эсенән, «был вәхшигә оҡшаған башҡорттарға ышаныуы ҡыйын, бик ныҡ ҡыҙҙырһаң, үҙеңде ботарлап ташлауҙары бар, улар мәңге суҡмарлы халыҡ», тип уйлап ҡурҡа ине. Ул, Ҡәүи янынараҡ шыуып ултырып, уны сығып китергә саҡырҙы.



Мейес янындағыларҙың барыһы бер юлы шаулайҙар, Саттар сотник, улар янына барып:

— Бар, бар, сығығыҙ инде, сығығыҙ! Сход бөттө, сход ябыҡ,— тип өгөтләй.

Мурзин, урынынан тороп, барыһына күҙ йөрөтөп алғас, бөтәһе лә, ни әйтер икән, тип уға ҡаранылар.

Зефәр тыныс һәм бер аҙ тантаналы итеп Ныяҙғолға ҡарап ендәште:

— Ныяҙғол ағай, күрәһен. бит, халыҡ нимә таптыра? Һин ошо йыйылышта үҙеңдең ныҡ һүҙеңде биреп, халыҡты тынысландырырға тейешһен.

Ныяҙғол уға һораулы ҡараш менән ҡараны.

Зөфәр бармаҡтарын бөгә-бөгә иҫәпләне:

— Беренсенән, һин Айбулаттан бойҙай таптырыу түгел, уға ҡырын күҙ менән ҡарарға ла хаҡың юҡ. Хәҙер ул янғыҙ түгел. Икенсенән, Сәйеткол һин туҡмағандан һуң ҡуҙғала алмай ята. Һин уны үҙеңә ҡунаҡҡа саҡырып алып ғәфү үтен дә быҒаса эшләгән хаҡын да, тик ятҡаны өсен дә түлә. Сөнки быңдай эш ябай эш түгел, суд еҫе сығып тора.

Йәштәр быға шаулашып ҡушылдылар:

— Быңа, быңа шулай кәрәк! Дөрөҫ!

Зөфәр уларҙы аҙ ғына кеттө лә дауам итте:

— Өсөнсөнән, был ҡунаҡ әфәнделәр бүтәнсә, был тирәләге халыҡ араһында томан һибеп, баш ҡаңғыртып йөрөмәһендәр, яҡшы саҡтарында оҙат. Төшөндөңмө?

Ныяҙғол ишек төбөн ҡаплап алған әзмәүерҙәй мыҡты егеттәргә, мейес янында, иҙәндә тулып торған башҡа кешеләргә ҡарап, уларҙың берәүһенен, дә үҙенән бер тамсы ла ҡурҡмаясаҡтарын һәм уны тыңламаясаҡтарын төшөндө. Шунан ул ҡунаҡтарға ҡараны. Ҡунаҡтар иһә, баштарын түбән баҫып, уға ҡарамай торалар ине. Ныяҙғолдоң, уларҙың был ҡиәфәттәрен күреп, эсенән асыуы ныҡ ҡабарҙы. Уларға, «эй, хәсрәт, күшеккән тауыҡтар», тип ҡысҡырғыһы килде.

Мөйешкә үк күсеп, таяғына таянып тик торған Шиһап мулла ла ҡунаҡтарға йәлләү ҡатыш күҙ һалды. Шунда уҡ тағы ла унын, асыуы килеп, эсенән, «дин юльшда йөрөгән мосолмандар, имеш, тубыҡтарығыҙ теҙәнләп, ҡошҡа оҡшап тораһығыҙ шунда, ҡурҡаҡтар», тип кейөндә. Ә мейес янында ғорур баҫып торған Айбулат менән Зөфәргә ҡарап, Шиһап мулла тешһеҙ уртта-;

рын тағы ла нығырак эскә тартып зәһәрләнде, «был ахыры заман дәжжәлдәренең коткоһонан Мөхәммәт ғәлейәссәләмдең үҙе лә котола алмаҫ», тип уйланы ла үҙ уйынан үҙе куркып китте.

Ныязғол, был юлы уҫаллык менән бер эш тә барып сыкмаҫын аңлап, киәфәтен дә, тауышын да үҙгәртте. Ситтән килгән әфәнделәр алдында үҙен кәмһетеү уға еңел түгел ине. Шуға күрә ул сходты башлағандағы һымак, кәүҙәһен турайтып, түшен кәпәйтә биреп, тыныс булырға тырышкан тауыш менән:

— Иә, ярар инде, ағай-энеләр, «туй үпкәһеҙ булмаҫ» тигән шикелле, үпкәләштек тә, әйтештек тә инде. Йәштәр генә бына былай ҙа һөйләшеп хәл итергә мөмкин булған мәсьәләләрҙе ғауға куптарып ҙурайтыпг ташланылар. Хәҙерга таралайык. Кунактарҙы оҙатайык. Шунан үҙ-ара һөйләшеп килешербеҙ — тине.

Ләкин Айбулат риза булманы:

— Юк, ағай, улай өҫтән генә тотоп шымартмайык, берәмләп һөйләп бир.

— Ни нәмәһен берәмләйем тағы? — тине Ныязғол. Ул тағы комһарҙы. .

Мурзин уға яуап бирҙе:

— Баяғы беҙ куйған өс мәсьәләне берәмләп асыкла. Ныязғол есөн быныһы сиктән ашкан нәмә ине. Кунак әфәнделәр араһында бала-сағанан әмер һымак талаптар ишетеүе уның ғәрлеген кабартты. Ләкин ул үҙенең төплө уйы менән хәҙергә нисек тә котолоу юлын эҙләне. Тағы ла тыныс булыу яғын һайланы:

—. Эй, туғандар, әйтеп торам ғуй. Кунактарҙы оҙатайык.

Кемдер берәү унын, ынғайына, «кыуайык^ тиген», тип кушылды.

Ныязғол быға ла иғтибар итмәҫкә тырышты. ,

— Эйе, кунактар китһен, шунан үҙ-ара һөйләшербеҙ. Әйткәндәй, анау иген мәсьәләһе тураһында мин уны һүҙ ыңғайы килгәнгә күрә генә әйттем. Булмаһа, ул өс йөҙ бот иген, алла рәхмәте менән, мөлкәтемдең хәйере булһын. Сәйетколдо ул тиклем нык тукмағаным юк. Әгәр ҙә аҙырак рәнйеткән булһам, уныһын да һөйләшеп килешербеҙ,— тине. Ныязғол кара тиргә сумды. Тағы ла һоро кулъяулығын сығарып битен, маңлайын, муйынын һертте.



Бындай шау-шыулы, куркыныслы һәм күңелле сход Дийҙакайҙың ғүмерендә беренсе тапкыр булғандыр. Сходтын, шундай шау-шыулы әңгәмәһендә бөтә кешеләр, әллә ниндәй бер бик көслө ташкында каклығып үргә күтәрелгән һымак, күтәренке рух менән шаулашып, геүләп киттеләр.

Карттар телдәрен сыртлатып аптырайҙар.

— һай-һай, замана кайҙа табан китте! Йәштәрҙе әйтсәле, әйтерһең» көн һайын сходка йөрөйҙәр, байынтүрәһен бар тип тә белмәйҙәр ҙәбаһа! һай-һай!..

— Батшанан куркмағас, башка ниенән куркһындар? Минен, картатайым бахыр, «батшаға бакмаған», тип орошкан була торғайны мине. Бына быларҙы күрһә, ни тип әйтер ине икән, ә?

— Шулай кәрәк тә шул. Баҫынкыны тапалап китергә йөрөүселәр күп була ул. Күрәһең бит, кайҙан-кайҙа акыл өйрәтергә тип килеп еткәндәр. Анау йәш мулланы әйтәм, үҙе муллаға ла окшамаған!

Тимерғәле эсенә һыймаған шатлык менән мактана:

— Бына, исмаһам, үҙебеҙҙең Айбулат, күрһәттеме үҙен егетең! Хатта Ныязғолдо калтыратты.

— Дерөҫ, ауыҙына шайтан төкергәнме ни.

Айбулаттыщ кайныһы Үмәр, бөгөн үҙе майҙан тоткая һымак, ғорур:

— Бәй, дереҫ һүҙгә ни еткән! Ул бит, беҙҙең Айбулат кейәү, ярлы-халыкты яклап, дөрөҫлөккә бара. Шуға күрә лә ул күҙгә тура бағып әйтә лә шул!

Тимерғәле Зөфәр менән дә ярылып мактана:

— Ә һуң, корҙаш, уның иптәше, иптәше. Мырҙаяндың улын, Зөфәрҙе әйтәм: кайһылай ярып һалды. Бер ҙә, Өфенән дә, мөфтөйҙән дә килгәндәр, тип тайшанып торманы. Ай, үҫәләр беҙҙең балалар, аллаға шөкөр.

Әхмәҙи, Сафа, Исхактар янына ла бик күп кеше йыйылған. Улар тағы ла кыҙыуырак һөйләшәләр:

— Иң элек ерҙән башларға кәрәк. Ана бит, ана Покровка, Ивановкалар һүҙҙәрен һүҙ иткәндәр. Беҙгә лә Ныязғолға нығырак йәбешергә кәрәк. Расторгуйға ла иртәгәнән дә калмай барып тотонайык. Нимәһен карап торорға.

Малайҙар бер йыр откандар ҙа шуны күмәкләп такмаклайҙар:

Батша куркты ла сығарҙы манифест,
Үлгәндәргә — ирек, тереләргә — арест.

# ӘСЕ БУРАНДАР

1

Сходка йыйылып һөйләшеү — үҙе бер ғәҙәткә әйләнеп китте. Көн һайын тигәндәй, саҡырып тороуҙы ла көтмәйенсә, ерһеҙ интеккән утыҙ-ҡырҡлаған кеше йыйылалар ҙа иртәнән кискә тиклем ер тураһында дау алып баралар.

Мәсьәләнең иң үткере булып: революция бара икән, крәҫтиәндәрҙең берәүһе лә ерһеҙ ҡалырға тейеш түгел тигән мәсьәлә тора ине. Шуның буйынса улар үҙҙәренең практик пландарын ҡуялар: бөгөндән үк сығырға ла үҙҙәренен дөйөм ерҙәрен бөтәһенә лә тигеҙләп бүлергә, уның артынан уҡ Ныязғол менән Расторгуевтағы ерҙәрҙең, бөтәһен дә конфисковать итеп алырға тип баралар.

— Тигеҙләп бүлгән саҡта, ярлыларға ғына тигеҙләргә. Ә байҙарға бер десятина ла бирмәҫкә кәрәк.

— Ысын, шулай кәрәк. Бай үҙе ярлыларға килеп ялынһын.

Быңдай ғауға бер Айҙаҡайҙа ғына түгел, бөтә тирә-яҡ ауылдарҙа ла, буран уйнағандай, геүләп тора.

Хәҙер инде сходка халыҡты Ныязғол саҡыртмай, ә халыҡ үҙе йыйылышып ала ла Ныязғолдон. Үҙен саҡырта һәм уға:

— Һин беҙҙең староста кеше, эштең төбенә төшөнөргә лә, беҙ ҡуҙғатҡан мәсьәләне хәл итергә лә ярҙам итергә тейешһең,— тиҙәр.— Әйҙә иң башта үҙеңдә беҙҙең күпме ер ята, бөгөндән сығып бүлешәйек,— тиҙәр.

Ныязғол тәүҙә ыҡ-мыҡ итә:

— Һун миндә ер булһа, аренда хаҡы түләнә бит. Кемгә түләп бөтмәгәнмен, бөгөн түләйем,— ти.

— Кәрәге юҡ, түләмә. Десятинаһы 50 тин дә булдымы аҡса! Һин бит уны Расторгуевҡа десятинаһын 20 һумдан биреп файҙа итеп ятаһың.

— Төптө оятын, юҡ.

— Ул турала һейләп тә тормайбыҙ. Хәҙер яңыса эшләйбеҙ. Ер — халыҡтыҡы, крәҫтиәндеке. Ышанмаһаң, ана яҙып йәбештерелгән, уҡып ҡара,— тиҙәр.

Ныязғолдо ана шулай, көн дә быуынына төшөп, әрләйҙәр. Үҙҙәренең, ғүмер буйынса ерһеҙ интегеп, нужа күреп күтәргән ауырлыҡтарын бер юлы уның еҫтенә һелкеп ташларҙай булып ынтылалар ине.

Ңыязғолға был турала бик күп уйларға, бик күп эштәр тураһында халыҡтың ынғайына һыпырырға кә^



рәк ине. Ә халыҡ ҡыҙған. Унын, ыҙыр-мыҙырын кетмәй. Булһа, бөгөн булдыраһың, булмай икән, үҙебеҙ ҙә беләбеҙ, тип кенә тотоналар ҙа, Ныязғолдоң йәнен алғандай итеп, хәлен бөтөрәләр. Ул инде Өфө ҡунаҡтарын да оҙатты, булған бурыстарын да түләп бөттө. Ҡайһыларын ҡунаҡҡа ла саҡырғыланы. Ләкин быларҙйң береһенең дә бер файҙаһы ла теймәне. Улы Имайға кәңәш итеп ҡарағас, ул уға старосталығын ташларға кәңәш бирҙе. Ләкин Ныязғол быға риза булманы. Ҡулында аҙыраҡ көс тә булмағас, хәҙер үк йомарлап ташларҙар, тип ҡурҡты. Әле былай, исмаһам, тегендә-бында йөрөп ҡайта ла халыҡҡа берәй яңы вәғәҙә алып килә, хөкүмәт шулай ҡушты, фәлән-төгән тип, бер аҙға тиклем үҙенә тын алып торорлоҡ дәлил таба. Ул, ҡасан булһа ла үҙенә бер ярҙам булырын һиҙгән кеүек, ваҡытты һуҙырға тырыша ине.

Айҙаҡайҙар бер көндө, Ныязғолдо бөтөнләй иҫтән сығарып ташлағандай, сходка ла саҡырып тормайынса, үҙҙәре йыйылышып геүләштеләр ҙә, бер унлаған кешенең өҫтөнән Айбулатты башлыҡ итеп һайлап, ер бүлергә сығып киттеләр. Улар, өс кен буйы йөрөп, Кәсәүнәй буйлап, Ҡылғанлы һыртынан аша төшөп, Ҡаратанау итәгенә тиклем булған иген сәселә торған, хәҙерге кендә Ныязғолда арендала булған ерҙәрҙе бүлеп ташланылар. Халыҡҡа тағы ла күңеллерәк булып китте. Өшөгән, туңған тәндәренә, йән кергән кеүек, йылы булып китте. Дүртенсе көн дә шулай үтте. Ләкин кискә табан донъяны баҫып киткән әсе буран уларҙы Айҙаҡайға ҡайтырға мәжбүр итте. Ләкин ер бүлеүселәр бойоҡманылар. Ҡайтҡанда уҡ сход өйөнә йылынырға инделәр. Солаңдағы селек һеперткене ин. тәүҙә Тимерғәлегә бирҙеләр:

•— Әйҙә, олатай, ҡағын, юҡһа һине бигерәк көрт баҫҡан,— тине Айбулат.

Тимерғәле, ҡағынып бөтөп, һеперткене Әпләскә бирҙе.

— Мә, инде һин ҡағынып ал, йәштәр бирешмәҫ, көтерҙәр әле,— тине ул.

Әпләс ысынлап та өшөгән, унщ ауыҙ тирәләре күмкүк булғайны. Ул шунда ла йылмайған булып:

— Эсең өшөмәһә, бураны ни ҡыла? — тине.

Улар сход өйөнә тулдылар. Ҡайһылары йылы мейескә арҡа терәне. Уларҙың хәҙер ҡысҡырыша торған эштәре лә юҡ. Ә үҙҙәренең ғәҙәттәре буйынса ошонда

аҙыраҡ йылынып алып, өйҙәренә таралмаҡсылар ине. Соланда тәмәке тартып ҡалған йәштәрҙән Сафа менән Исхаҡ килеп инделәр ҙә:

— Ныяҙғол был яҡҡа табан килә ята,— тип хәбәр иттеләр.

Тимерғәле бик тыныс ҡына:

— Килә бирһен,— тине.

Ныяҙғол килеп инеү менән һәйбәтләп сәләм бирҙе. Ҡарттар уның сәләмен ҡаршы алдылар.

Ныяҙғол ошолар араһында йөрөп ҡайтҡан төҫ менән, бик үкенгән һымаҡ итеп:

— Ай әттәгенәһе, бынау буран сығып китеп белдөрҙө ләбаһа, ерҙе бүлеп тә бетәһегеҙҙер инде, күп ҡалмайҙыр ҡалыуын,— тип, бетәһенә лә күҙ йөрөтөп алды.

Уның был ҡарашынан Айбулаттың эсен һыуыҡ алған һымаҡ булып, йәне ҡыҫырайҙы. Ҡулдарын артҡа ҡуйған көйө, ныҡ иғтибар менән Ныяҙғолға текләп, уның тағы ла ниндәй төлкө хәйләһе менән килгәнен аңларға тырышты.

Ныяҙғолға Әпләс ҡарт яуап бирҙе:

— Бөтөүен бөтмәнек әле. Ләкин буран тип тороп булмаҫ инде, аҙыраҡ көн асылдынмһә, эштә булырға кәрәк,—тине.

, Ныяҙғол тағы ла аҡыл бирҙе:

— Ни нәмә тип ошо һыуыҡта билдән ҡарҙа батып йөрөмәк кәрәк. Ер ни, ул ҡораҡлы юрған түгел дә инде, уны кем, ҡайҙа һөйрәп алып китер тиһең. Яҙған булһа, яҙға, алла бирһә, сыҡтыҡ — бүлдек.

Ләкин ер бүлеүсе вәкилдәрҙең барыһы ла быға ҡаршы ине.

— Яҙҙы көтөп тороп булмай инде. Ҡар булһа ни, беҙ ҡарға аптырайбыҙмы? Уның ише ҡышты ауға йөрөп тә үткәрәһең ул.

— Эйе ләбаһа, ҡар ғына беҙҙе тыя алмаҫ.

Ныяҙғол үҙенең һүҙе үтмәгәнен күргәс, урынынан ҡуҙғалды.

— Уныһы һеҙҙең эшегеҙ инде,— тине лә, тыныс ҡына һаулашып, ҡайтып китте.

Юлда Ныяҙғолдоң асыуы ҡабара барыуынан тыны ҡыҫылды. Ысынлап та ерҙәр шулай итеп уның ҡулынан ысҡынып ҡуйһа, харап бит. Нисек керешкәндәр. Ҡарты, йәше — барыһы бер һүҙҙәләр.



Ныяҙғол үҙенең һуңғы ваҡыттарҙа күргән мәшәҡәт, яфаларынын иң ҙур ғәйепле кешеһе Айбулат икәнен бик яҡшы төшөнә ине. Ул Айбулаттың былай итеп, үҙенең өҫтөнә ташланырлыҡ булып, тиҙ үк елгөрөп еткән ир-егет булыуына бик ғәжәпләнә. Әгәр ҙә ул Айбулаттың сходта һөйләгәнен ишетмәгән булһа, әле һаман да уның тураһында, ябай бер малай тип, унын, үҙенә булған мөнәсәбәтен дә ағай-эне үпкәләшеүе генә тип, бик еңелгә һанар ине. Ә хәҙер ул Айбулатҡа тел менән ҡағылһа ла, бик һаҡ ҡағыла. Ә инде ул сходтарҙа тороп һөйләй башлаһа, йәнен ҡулына ала, эсенән һаман да бер әйтемт де ҡабатлай: «һе, яр аҫтынан яу сыҡҡан, көтөү кетөп йөрөп тә, кеше шулай үткерәйер икән!» — тип аптырай. Бөтәһенән бигерәк Айбулаттың русса менән политиканы яҡшы белеүе унын, ихтыярын быуа ине,

Ныяҙғол эсенә һыймаған асыуы ыңғайына елтерәп атлап бара торғас, уйына килгән бер яңылыҡтан ҡапыл шатланып китеп, ҡылт туҡтаны. Ул үҙенең маңлайына үҙе уң ҡулынын, осо менән сәрт иттереп һуғып: «Ай, маубаш мин, маубаш. Ни эшләп мин шуны алдан уйлай белмәгәнмен, һуң бит Айбулат быйылдаЪ да ҡалмай действительный хеҙмәткә китергә тейеш тәбаһа»,— тип, аҡылдан яҙған кеше һымаҡ, урамда бер үҙе ҡысҡырып һөйләнде лә, шатлыҡты йылмайып, тағы ла шәберәк атлап өйөнә ҡайтып китте.

## 2

Айбулат йәше буйынса киләһе яҙ айҙарында ғына һалдатҡа алынырға тейеш булһа ла, ҡыштың ин, әсе буранлы айында уға «Дүрт көн эсендә Николайскийгә килеп явиться булырға» тигән саҡырыу ҡағыҙы килеп төштө.

Айбулат, метрика буйынса әле уға китергә тағы бер нисә ай тулмағанын әйтеп, Ныяҙғол менән талашты.

Ләкин Ныяҙғол бик тыныс, хатта йәлләгән тауыш менән, ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп ебәреп, аптыраған булды:

— һуң, ҡустым, мин ни хәл генә итәйем инде, өйәҙ белә бит. Мин бик бәләкәй кеше,— тип ҡуйҙы.

Айбулатты оҙатырға ярты ауыл йыйылды. Бөтәһе лә бошондолар. Тимерғәле ҡарт:

— Бына шулдыр инде: «Етемден. ауыҙы ашҡа тейһә, танауы ҡанай», — тигәне. Улым Айбулат арҡаһында беҙ

ҙә бер яҡты көн күрербеҙме тигәйнек, уны ла тартып алалар,— тип зарланды.

Әпләс тә, асыулы итеп:

— Эт этлеген итте инде,— тине,— йәше етмәгән баланы һалдатҡа алдыртыу Ныязғол эше инде был,— тине.

Әхмәҙи ҙә ҡыҙа:

— Ғәрлеге ни тора, ул хәҙер ендем тип маһаялыр әле.

Айбулат бөтәһен дә йыуата, үҙе нык тора:

— Иә, ағай, олатайҙар, ҡустылар, юҡҡа бошонмайыҡ. Мин китте тип, башлаған эште ташламағыҙ. Хәҙер эш юнгә һалынды. Үҙегеҙ күмәкһегеҙ. Бер Ныязғол ҡайҙа бара. Тик уныц хәйләһенә ышанып, тоҙағына эләкмәгеҙ,— тип өгөтләне.

Айбулат санаға ултырыр алдынан, уның янына Әхмәҙи килеп:

—*1* Кейәү, белмәйем, эштәр нисек булып бөтәр инде, Кузьмин утарына карательный отряд килеп төшкән, ти. Башында Кузьминдең улы Виктор икән, ти,— тине.

Айбулагка был хәбәр бик ауыр бәрелде.

— Кем һөйләй? — тип һораны ул.

— Ҡаҙанҡаптың улы менән Дәүләт купец шул яҡҡа барып ҡайтҡандар икән. Шулар һейләй,—тине Әхмәҙи.

Айбулат бер аҙ уйланып торҙо ла:

— Был хәбәр ысын була торған булһа, ҡайнаға, һе? хәҙергә бер ергә лә сығып йөрөмәй тороғоҙ. Ныязғолға ышаныс юҡ, ул да саҡыртып килтерер. Уның ҡайҙа, ни эшләп йөрөгәнен дә күҙҙән ысҡындырмағыҙ. Был турала халыҡҡа ипләп аңлат, ҡапыл һөйләп, паникаға бирелмәгеҙ,— тине.

Үҙенең Айҙаҡайҙарын был хәлдә ташлап китеү Айбулат өсән бик ҡыйын ине. Шуға күрә ул санаға менгәс тә аяғөҫтө торған кейе.

— Ярай, туғандар, олатайҙар, һау булайыҡ. Ауыр көндәр була ҡалһа, миңә хат менән белдертә тороғоҙ. Мин дә, бәлки, яҙҙан ҡалмай ҡайтып килермен,— тине,

3

Юл ыңғайында Айбулат, Зөфәр менән күрешеп китергә уйлап, Бөрйән ауылына туҡталды.

Баҡтиһәң, Зөфәр ҙә һалдатҡа саҡырылған, китергә әҙерләнеп тора икән.



Ул Айбулатты күреп бик ҡыуанды. Ләкин күңеле бик бошонҡо ине. Күрешеп-һаулашыу бөткәс тә, Звфәрз

— Ҡуй инде, Айбулат, билгә һуҡтылар бит, малай, дядя Гриша тураһында ишеттеңме?

— Юҡ, ни булған?

— Ҡулға алғандар.

Айбулат, йөрәге ярһып, урынынан торҙо.

— Кем әйтә?

— Алтынбай әйтә. Ул бөгөн генә Самарҙан ҡайтып төште. Духлов игенен оҙаттыра башлаған икән дә, ул шунда ат ҡыуып барған. Васяне күргән. «Ҡайтҡас та, был турала Айҙаровты йә Мурзинде күреп әйт»,— тип әйтте, ти.

— Бына һиңә батша .манифесенең тағы бер ялған ,вәғәҙәһе асылды. Имеш, «кешенең шәхесенә теймәҫкә» шул булалыр инде. Тағы кемдәр ҡулға алынды икән?

— Ул тиклемен белмәй. һорашманым, ти. Беләһен. бит инде уны, ике моңһоҙоң береһе. «Вася мине күргәс тә таныны», тигән була. Уның ун, ҡулы һаман яраһынан теҙәлмәгән. икән. Аҡ яулыҡ менән муйынына аҫып йөрөй, ти.

Айбулатты бик ҡаты ҡайғы баҫты. һүҙҙән туҡтап, тәрән уйға батты.

Зөфәр Айбулатты ла, үҙен дә йыуатырға тырышты.

— Уларҙы ҡулға алыу менән оҙаҡ тота алмаҫтар ҙа ул. Беҙҙең Волгин төрмәлә ултырып ҡала торған ке-: шеме ни! Иптәштәре уны тиҙ үк ҡотҡарырға тейештәр.

— Белмәйем шул,— тине Айбулат— Беләһеңме, Зөфәр, юлда саҡта минең башыма ниндәй уй килгәйне. Мин әйтәм: «Ниңә әле батшаға баш эйеп, һалдатҡа китеп торорға, юлда төшөп һине алайым да Самар яғына икәүләп сығырбыҙ ҙа китербеҙ. Ә унда дядя Гриша менән күрешеп, уларҙың берәй эшселәр дружинаһына инеп алып, яҙға табан улар менән бергәләп сығып, был тирәлә ҡорал менән эш итә башларбыҙ, шунһыҙ бер ни ҙә сыҡмай», — тигән уйға килгәйнем. Былай булғас, булманы инде хәҙергә.

Зөфәр ҙә, һалдатҡа бармау тураһында уйлаған саҡта, тап шул уйға туҡтағанын әйтеп:

— Хәҙергә булмаҫ шул, Айбулат,— тине.

Айбулат түҙмәне. Бик ауыр һәм тәрән итеп уфтанып көрһөндө, ике ҡулы менән ике сикәһен нык ҡыҫып тешләнде. Уның йөрәген ғүмерҙә булмаған бер әсе әрнеү

ҡапланы. Ул, ошо әрнеүҙе баҫырға тырышҡан кеүек, баҫынҡы тауыш менән:

— Барыбер, ҡасан ғына булмаһын, беҙ еңербеҙ. Тик хәҙергеһе бик ауыр...— тине.

— Бик ауыр, бик үкенесле, Айбулат,— тине Зөфәр.— Эште ҡыҙыуыраҡ тотманыҡ. Бының был яғына беҙгә ҙур һабаҡ булыр.

Иртәгеһен был ике дуҫ һалдатҡа киттеләр.

## ЯҢЫНАН БАЙҘАР ТУПҺАҺЫНДА

### 1

йәйләүҙә өс көн буйы йыйынға әҙерләнделәр. Сөнки был йыйын — Ныязғолдоң енеү көнө бетә тирә-яҡ дуҫтарҙы шатландырырлыҡ, дошмандарҙың эсен яндырырлыҡ шәп булырға тейеш ине.

Үткәндәге, бынан өс йыл элекке, һайлауҙар ваҡытында, донъяһы буталып китеп, Ныязғолдоң бик күп теләк һәм ниәттәре боҙолоп беткәйне. Ә хәҙер инде бөтәһе лә ыңғай китеп ултыра. Хәҙергә донъя тыныс. Шуға күрә ул, бөтә ихласын һалып, быйылғы һайлауҙа старшина булып ҡалыуҙы бик ныҡ итеп алдына алды.

Волоскә старшина һайлауға бер йыл ҡалды тигәс тә, ул үҙенең бөтә политикаһын, оҫталығын юлға һалып, байлығын йәлләмәй, һигеҙ ауылдан йыйыласаҡ һайлаусы кешеләрҙе, мирәйеттәрҙе үҙ яғына ауҙарырға тырышты. Ауылдарҙың ҡайһы берәүһенә ҡунаҡҡа барҙы. Икенсе, өсөнсе ауылдарҙан үҙе, пар аттар ебәреп, ҡунаҡтар алдыртты. Ундағы старосталарҙың ҡайһы ырыуҙан, ҡайһы яҡтан, кемгә яҡын, кемгә ят, кемгә дуҫлыҡ йәки дсшшанлыҡ һаҡлауҙарын, уларҙын. ни нәмәгә мохтажлыҡтарын, ниндәй теләктәре барлығын әллә нисә төрл© юлдар менән яйлап тикшереп осона сыҡты ла шул эҙҙән үҙ теләген үткәрә барҙы. Старосталарҙан ул ҡайһы ауылда нисә кеше һайлауға ҡатнаша ала, кемдәрҙен, был иҫәпкә инә алмауҙары тураһындағы һандарҙы ҡулына төшөрҙе. Үҙенең Айҙаҡай ауылындағы был һанды ул яҡшы белһә лә, Ҡаҙанҡап староста менән Дәүләт, Саттар мирәйеттәрҙе ейенә ҡунаҡҡа алып ҡайтып, бөтә ауылда нисә кеше тулы надел тота, нисә кешенен. ере ярты душ, күпселегенең бәтөнләй ере булмауын иҫәпләтеп, туҡһан һигеҙ хужаньщ егерме һигеҙләбе генә тулы надел ер эйәләре булып, ҡалғандарының, был һанға инмәйенсә, һайлауға ҡатнаша алмаясаҡтарына бик ҡәнәғәт булды. һайлаусыларҙың күп булмауы Ныязғолға һыйлау, майлау, дуҫлашыу, алдаштырыу өсен еңелгә килә ине.



Ә Ныязғолға ҡатнашып, уның ыңғайына ятып кит-: кән бындай кешеләр үҙҙәренә тапшырылған ролде бик оҫта уйнанылар. Улар ҡайҙа булһалар ҙа, ошо туралағы бик күп хәбәрҙәрҙе, хуплап, ҡабартып тараттылар.

— һай, һай, старшиналар менән яғанан алыи һелкешерлек булғас, күрәһен, Ныязғол байҙың оло ерҙәрҙә таяныстары барҙыр инде. Становой үҙе килеп ҡунаҡ була бит. Улы губернаторҙын. бер туған кейәүенә барып төшеп йөрөй, тй. Ҡыҙын" Самар купецтәре улдарына һораталар икән, тик әле, укытам тип, бирмәй, ти, Ишан хәҙрәт Ныязғолға бер туған ҡоҙа бит, ул да әллә ниндәй доғалар укып ярҙам итәлер әле. Әйтмә инде, хәҙер уның дүрт яғы ҡибла бит,— тигән ғәләмәт терлө сыбар хәбәр* ҙәр тулып китте.

Хәҙер инде шул көткән көн килеп етте. Өсенсө көн инде, ауылдың хәлләләренән генә һайланған унлап кеше, волоскә китеп, старшина һайлашып яталар. Старшиналыҡҡа бөтә волостән бер нисә кеше күрһәтелгән. Шулар араһында Ныязгол менән Моратша ла бар. Ныязғол шунда китер саҡта үҙен оҙата сыҡҡан бисәләренә:

— Алла ниәткә еткерһә, һейөнсе алырға алдан сапҡын ебәртермен, әҙерләнеп торорғоҙ,— тигәйне.

Рәхимә менән Ғәзимә, байҙыд шул ҡушыуы буйынса, йәйләүҙәге бөтә кешене тын алырға бирмәй югерттеләр.

— Ана, ҡымыҙығыҙ ҡыҙнап ултыра, йышыраҡ бешегеҙ, әйттереп тормағыҙ!

Гөлйөҙөм, Мәғфүрә, Хәлимәләр, алмашлап-алмашлап, алты-ете күнәк һыйышлы оло кебеләрҙе ҡара тиргә төшкәнсе бешәләр ҙә йылға буйына, тәкәләр һуйылған ергә, ҡарын алырға гогерәләр.

— Айбулат, анау дүртенсе тирмәне ҡалҡыуғараҡ күсереп ҡороғоҙ. Унда ҡаланан килгән түрәләр булыр. Урталағы тирмәлә ҡарттар, муллалар булыр. Ситкеһендә ҡатын-ҡыҙҙар ултырыр. Анау аҡ тирмәлә ҡыҙҙар ҡайтыуына урын әҙерләргә кәрәк.

— Килендәр, йәһәтерәк ҡаҙан аҫырға әҙерләнегеҙ, тиҙ-тиҙ булығыҙ, мыштырҙамағыҙ!

— Айбулат, мин әйткәнде онотма, ауылға ат саптыр...

Рәхимәнең бындай бойороҡтары бик күп. Уныщ янында көн буйы тыңлап торһаң да, бер туктауһыҙ әйтеп торасаҡ. Ә Айбулатҡа быларҙыщ береһе лә кәрәк түгел. Ул йылдын-йыл буйы, көнө-төнө тау һымаҡ ауыр булып елкәгә баҫып торған кешегә хеҙмәт итеүҙән, кешенең теләгенә ярауҙан йөҙәп бөткән. Рәхимәнен юпәләй торған йомшаҡ тауышынан да, Ғәзимәнең бурсылдауынан да, Имайҙың екеренеүҙәренән дә йонсоп, ыйыҡ булып бөткән. Уның башындахәҙер тик бер генә вайым — нисек кенә булһа ла был нужанан үҙен дә, Гөлйөҙөмдө лә ҡоткарып алып, насар ғына булһа ла үҙалдына донъя ҡороу ине.

Айбулат бегөн шул уйҙарҙы башынан сығара алманы, хәл итергә тырышты. Шуның өсөн ул, Рәхимәнең дә бер яңғыҙ ултырған ваҡытын тап итеп, үҙенен, уйын һөйләп бирҙе:

— Өлкән еңгә, был арала ағайымдарҙың өйҙә йыйылған саҡтары була. һин шулар менән беҙҙе башҡа сығарыу тураһында һөйләшеп ҡарасәле. Мин дә, үҙалдыма йорт ҡороп, бала-сағаны урынлаштырып ҡуйырға кәрәк, тип уйлайым. Ер тураһында ла әйт, ни уйлайҙар икән.

Айбулаттын, был һүҙҙәренән Рәхимәнең иҫе китте.

— Бына һиңә кәрәк булһа! Ишетмәһәң ишет! һеҙгә ни нәмә етмәй тағы? Тамағығыҙ тук, еҫтегеҙ бөтөн. Ул ни тигән башҡа сығыу? Аҙыраҡ уйлап ҡарарға кәрәк, килен .алғанда һиңә ярҙам итмәнекме? Икәүегеҙ ҙә шыр яланғас инегеҙ, кейем бирҙек. Мәһәргә киткән ике-өс йөҙ һум аҡса ҡайҙан килде тиһең. Үҙең һалдатҡа киткәс, килен, бала-сағаң һаман беҙҙә тамаҡланды. Ундай туҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе ауыҙыңа ла алма. Аш хаҡын хаҡларға кәрәк.

Рәхимә аҙаҡкы һүҙҙәрен әйтте лә, үҙенең Айбулатҡа булған вәғәзен бөтөргән тоҫ менән, кейеҙ буйлатып ике аяғын да һуҙып ебәрҙе, ике ҡулын ике тубығы өҫтөнә һалып, иҫәнләп ҡуйҙы.

Айбулат та кейеҙ ситләп ҡырын яткан урынынан ҡуҙғалманы. Тыныс тауыш менән:



— Өлкән еңгә, улай итеп, тамаҡ хаҡын хаҡка иҫәпләгән саҡта, нисәмә йылдар эшләүгә әллә ҡасан хаҡы сыҡкандыр инде. Икәүләшеп эшләйбеҙ бит,— тине.

Рәхимәнен, был һүҙгә тағы ла нығыраҡ иҫе китте.

— һай, һай, нисәмә йылдар эшләйбеҙ, имеш. Биш йыл да, ун йыл да эшләрһегеҙ. Эш тип, таш ҡырҡканын. бармы? Ағайың ишетмәһен. Унын, холкон беләһен. бит. Бынау йылдарҙы һеҙҙен, арҡыры башланған Моратша старшина менән булған талаштан башы ҡатып йерей. Быйыл бигерәк тә мәшәҡәтле йылы. Аҙ расход сыға тиһеңме ни? Бер көндө ауылдың һайларға бара торған дығалдарына утыҙ-ҡырҡ тәңкәлек сәй-шәкәр, тауар өләште. Өйәҙҙән килгән түрәләргә ике-өс тәкә һуйҙык. Әллә ни тиклем аҡсалата түкте. Өс түрәгә унар аршындан күк буҫтау, бисәләренә тип, һигеҙәр аршын ебәк биреп ҡайтарҙы. Бөтәһе лә бер кеҫәнән сыға бит ул. Имаметдинде лә күреп тораһын, ҡалала йерөүҙән бушамай, анау Быҙаулыҡтағы дауариштәре һатыуҙан килгән файҙаны үҙ кеҫәләренә тығалар, тип асыуланып ҡайта. Ер тураһында минен. эшем юҡ. Бирһә — ана тора, бирмәһә — ана тора. Земскийгә барып, әллә ниндәй ер эштәре ныҒыттырып йөрөйҙәр бит ана. Ағайың, исмаһам, бер мең десятина ғына булһа ла, һатып ала алмаммы тип йөрөй, уның аръяғында ни уйлай торғандыр,— тип Рәхимә тауышын тынысландырып кәңәш бирҙе.— Берүк, ундай юҡ-буш уйҙарҙы аҡылыщдан сығар, Айбулат. Килен һәйбәт, егәрле. Бөтә өй эшенә елгөрөп тора. һин үҙең тағы анау Асатай, Истебай ҡаҙаҡтар һымаҡ ялсы түгелһең, үҙ кешебеҙһең. Анауы бола сыҡкан замандарҙа әллә ниндәй урыҫ-улаҡка эйәреп, бөтә ауылды беҙгә ҡаршы ыҙғытып йерөнөң, йә унан ни таптың? — Рәхимәнең тауышы болоҡһоулы күтәрелде.— Ул саҡтарҙы уйлаһаң, сәсеңүрәтора. Ярай инде, һин ул заманда йәш инең. Хәҙер ике-ес бала атаһы булып -^араһың. Беҙ һаман да шул үҙ кешебеҙ тип, ситкә ҡаҡмайбыҙ. Яҡшыраҡ ҡулғамытлыҡ итергә тырыш. Бына, алла бирһә, ағайың эстәршенә булып алһын да, шуны геүләтеп туйлайыҡ. Бөгөн барыһы ла килеп төшөрҙәр. Ауылға барып ҡайт, унда ыстансаға пар ат ебәрт. Имаметдин ҡайткан бул-: һа, бөгөн бында килмәй ҡалмаһын. Ҙур йыйын була, тиген. Киленде лә ҡалдырмаһын. Әсәйен, шулай ҡушты, тиген. Өйҙө анау Ҡаҙаҡай килеп ҡарап торор, йәһәт йөрөп әйлән. Эй, онотоп барам, ҡыҙҙар бүлмәһендәге

оло көҙгө менән бәләкәй тунәрәк өҫтәлде үҙең һаҡлап ҡына алып кил. Асатайҙы ебәрһәк, ул ватып ҡуйыр, алабарман нәмә. Ҡайтышлай Үмәр ҡоҙа менән Муйыл-бикә ҡоҙағыйға инеп әйтеп сыҡ, килһендәр. Бында йомошҡа кеше етешмәҫ, улар ҙа аҙыраҡ ярҙамлашырҙар, тиҙерәк булығыҙ.

Айбулаттың төҫе асыу менән ҡомһарҙы. Рәхимә менән һүҙ көрәштереп тороуҙың файҙаһы юҡ ине. Уның аҙаккы бойороҡтары ла Айбулаттың бер ҡолағына инеп, икенсе ҡолағынан сыкты. Уны ғәрлекле ауыр уй алды. Йөрәге һығылып, тынын ҡыҫып һукты. Ул Рәхимәнең бөтә һүҙҙәрен тыңлап .та тормайынса, ашығып тирмәнән сыкты ла, тиҙ генә күк атты такта арбаға егә һалып, юлға сыкты.

Юл таҡыр, эҫе һүрелгән, һауа бик тын. Ямғыр еҫе лә бәрелгән һымаҡ була. Айбулат арбаға ҡырын төшөп ятты ла, күк аттың дилбегәһен ҡуҙғата биреп, күккә ҡараны. Тәшлөктән түбәнгә һарҡкан ҡояшты ҡалын ҡара болоттар ҡаплап алғайны. Айбулат быға айырым иғтибар менән текләне. Ямғыр буласағын билдәләне. Шунан һуң ҡояштың еүеш, матур йәшел яланды нисек йылы иркәләйәсәген күҙ алдына килтереп, тыны иркенәйгәндәй булып, тәрән уфтанып кәйефләнде. Уға, ни өсөндөр, 7<ояштың болот аҫтында мәңге ҡалмай, бик тиҙҙән яңынан ялтырап килеп сығыуы, бер ҙур өмөт һымаҡ, күңелле ине.

Күк ат һертелдәп кенә юртып барып Айҙаҡайға боролғайны, Айбулат уны уңға ҡайырып, Расторгуев утарына табан юнәлдерҙе. Сөнки бөгөн числоның ун бише — Михаилгә барырға вәғәҙә биргән көн ине.

## 2

Рәхимә бында ҡалғандарға боролдо.

— Мәғфүрә килен, бынау оло балаҫты аҡ тирмәгә алып бар. Анау ҡыҙҙар ҡайҙа китте әле? Шул Диләне ,булһа ла ҡушығыҙ, исмаһам, анау ике еҙ самауырҙы ағартһын. Унан һуң ул ҡыҙҙарҙы арыулап кейендерергә кәрәк. Диләң бигерәк тә ялбырап, албаҫтылай булып йөрөй. Шуның башын йыуып тарап, берәй таҙа күлдәк кейҙерһәнсе!

— Бүтән күлдәге юҡ шул. Ки';ә кис йыуып ятайым тигәйнем, һабын булманы.



Мәғфүрә ҙур, ауыр, ҡыҙыл төҫлө, эре биҙәкле балаҫы көскә күтәреп, тирмәгә алып китте:

Рәхимә ошо тирмәләр уртаһында баҫып алған да, тирә-яҡка әйләнгеләп ҡаранып, һаман йомоштар ҡуша, хеҙмәтселәр менән һөйләшә.

'— Иә, Диләнең күлдәге булмаһа, ана, Хаяттың берәй йыуылған күлдәген биреп торормон. Әсәһе килеп төшкәс кенә сүселдәмәһә. Бигерәк ашығыс булды шул. һайлауҙары бөгөн бөтә, имеш, ти, бит. Дуҫ-дошман араһында хур итмәһен инде хоҙайым... Әллә ни эшләп һаман сапҡыны юҡ бит әле.

Гөлйөҙөмгә дүрт һарыгк түшкәһен, ботарлап, биш ҡаҙанға бүлеп һалып бешерергә ҡуштылар.

— Ҡыҙҙар ҡайҙа китеп юғалдылар әле шулар? Ҡушығыҙ шуларҙы, исмаһам, самауырҙарҙы ағартһындар.

Дилә менән Хаят, үҙҙәренең бер көнгө ыҙғыштарын күптән онотоп, ҡыуаҡтар араһында югерешеп уйнап йөрөйҙәр ине. Улар, Мәғфүрәнең саҡырған тауышын ишеткәс тә, хәҙер югереп килеп еттеләр.

Мәғфүрә Диләгә өлкән еҙ самауырҙар менән еҙ тастар, еҙ ҡомғандар бирҙе. Бер туҫтаҡ әсе эркет ҡуйҙы, юкә йыуғыс тотторҙо ла, ныҡ ышҡып, һәйбәтләп йышырға ҡушты.

Дилә, зш ҡушылғанға ҡыуанып, күҙенә төшөп йөҙәткән сәстәрен бысраҡ ҡулдары менән һыйпай-һыйпай, эшкә кереште.

Быны күреп торған Хаят та ҡалышҡыһы килмәй, ҡыҙығып:

— Өлкән әсәй, мин дә самауыр ағартышайым әле,— тине.

Рәхимә уға:

— Ҡуй, ҡуй, юҡ менән булма! Өҫ-башың бысраныр, ҡулың ярылыр, ҡарап ҡына ултыр! — тип рөхсәт итмәне.

Диләнең бик оҙаҡ маташҡанын күргәс, Гөлйөҙөм ваҡыт таба һалып, үҙе самауырҙарҙың ағармай ҡалған ерҙәрен тиҙ генә ағартты ла, камфаркаларын, табансаларын ҡыҙҙарҙан күтәртеп,- барып, йылғала йыуҙы. Уның артынан ҡыҙҙар менән бергә Тимербулат та мыжҡылдап эйәрҙе. Дилә, уны әле әүрәтеп, әле орошоп, үҙенсә өлкәнлек итте. Улар аллы-артлы теҙелешеп тирмәгә ҡайттылар.

Тирмәлә Рәхимә ҡыҙҙарҙы үҙе кейендерҙе.

Дилә, Хаяттың ике ҡат итәкле иҫке күлдәген кейгәс, әллә ни алғандай булып ҡыуанды. Тыны бөтөп югереп әсәһе янына барҙы ла, күлдәгенен. итәктәрен тотҡолап, әйләнеп тулғанды.

— Әсәй, ул был күлдәкте миңә әллә бөтөнләй бир^ ҙеме икән, ә, әсәй? — тине.

Әсәһе, унын, башынан һыйпап:

— Юҡ, балам. Ҡунаҡтар киткәнсе кейеп торорға. Кеше килгәс, Хаят күлдәге тип әйтеп ҡуйма. Хаятты әсәһе килеп ороша башлаһа: «Рәхимә инәйем үҙе кейҙерҙе бит»,— тип әйт, әрләп ташлар,— тине. Шатланып югереп киткән ҡыҙы артынан ҡайғылы йылмайып ҡалды.

Хаят әллә нисә төрлө күлдәктәре араһынан күкһел ебәк күлдәген һайлап кейҙе. Ойоҡто ла шундайҙы кейергә уйлап эҙләй башлағайны, Рәхимә:

— Йә, ярар, һандыҡты болартма инде,— тип, аҡ ойоҡтар менән ҡара туфлиҙәр кейҙерҙе. Унын сәсен үҙе тарап, бармаҡтарын төкөрөп һыулай-һыулай, йәшел ебәк таҫма менән ҡыҫып, сикәләп үрҙе.

Хаят үҙенең иҫке һары таҫмаһын Диләгә бирҙе.

-— Мә, һин дә сәсенде таҫмалап үр,— тине.

Мәғфүрә ҡыҙынын. ҡалай тәңкәләрҙән ситенә ҡортбаш теҙеп яһалған быҙау телендәй генә иҙеүсәһен уға һалындырғас, Хаят та ҡыҙыҡты.

— Өлкән әсәй, мин дә һаҡал һалайым әле, ҡайҙа минең һаҡалым? — тип, кире югерҙе.

Рәхимә уға тағы ла:

— Уй, ҡыҙ йораты! һаҡал ниңә кәрәк бынау эҫелә,— тип орошһа ла, өс йоҙаҡлы, дүрт тотҡалы, эсен аҫыл кейемдәр менән нышып тултырған һандыҡты сәғәт һуккан һымаҡ даңғылдатып асып, Хаяттын. ынйы, мәрйен, көмөш тәңкә, аҫыл суктарҙан яһалған һаҡалын сығарып бирҙе.— Мә инде, елкән шатлыҡ көнө һалынып йөрөһөн, үҙ тигәнеңсә бул. Барығыҙ, ҡыҙҙар, ана, ауыл яҡ һыртынан һыбай ҡалкһа, миңә килеп хәбәр итегеҙ.

— һыбай килә, һыбай килә, өлкән әсәй, һыбай килә!

Рәхимә ахылдап тирмәнән сыҡты, икенсе тирмәнән Ғәзимә күренде. Мәғфүрә, Гөлйеҙөм, эштәрен ташлап, ҡарай башланылар. Тирмә тирәһендәгеләр бөтәһе лә, ҡулдарын маңлайҙарына ҡуйып, юлға, алыҫтан күренгән ҡараскыға текләнеләр.

Рәхимә менән Ғәзимә ярым шыбырҙап һөйләнделәр:,



— Шатлыҡлы хәбәр алып килһә, аҡ ҡорбан салыр инек...

һыбайлы елеп килеп етте. Ҡара тиргә батҡан күк саптарҙың өҫтөнән күбектәр оса. Ҡырпыулы бүрек кейгән, ситенә ҡыҙыл соға тотҡан ҡара буҫтау кәзәкейле, билен ҡыҙыл ебәк билбау менән быуған, йәшел ебәк тотҡан күк салбарлы, бейек ҡара итекле егет эйәрҙән һикереп тештө. Ул ҡапыл күҙҙәрен ҡыҫып, йәйенке танауын тағы ла йәйеңкерәп, аҡ тештәрен күрһәтеп, киң йылмайҙы.

— һейөнсө, инәйҙәр, һейөнсө!— тип ҡысҡырып ебәрҙе ул.

Байбисәләр сыр-сыу килеп ҡалдылар.

Рәхимә ҡыуанысынан ни эшләргә белмәне. Тулҡынланған тауыш менән:

— һөйөнсеһенә байтал, улым, ҡола байтал. һейлә, улым, ни хәбәр бар? — тине.

Егет ашығып, һүҙҙәрен йота-йота:

— Ныяҙғол олатайым старшина булды. һайланды! — тине.

Бисәләр тағы ла нығыраҡ сыулаштылар.

Рәхимә егеткә ни биреп, ни ҡуйырын белмәй, өлтөрәп, уны тирмәгә алып инде.

— Әйҙүк, улым, әйҙүк, юғары сыҡ, телеңдән ҡыуан, һүҙендән һейөн, үҙен шул дәрәжәгә ет!

Егет түрҙәге урынға ултырып алғас, Рәхимә:

— Кем улы булаһыщ, ҡайһы ауыл? — тип һораша башланы.

— Мин Өсүҙән буйы, Ҡыпсаҡ ауылы, Байсура түрәнен, улы Ҡотлобай булам.

— Әйтәм, ерле тауышың атайың тауышына оҡшап тора. Бик беләм, бик беләм. Әсәйең Ҡашҡат ауылынын. Ваһап байҡыҙы. Иәшерәк сакта йәйләүҙә осраша торғайныҡ. Хәҙер халыҡ йәйләүҙе ташлағас, осрашмағанға күп йылдар булып китте. Шунын улы булаһын, икән. Бик күркәм улы бар икән. Рәхәтен күрһен.

Рәхимә менән Ғәзимә егеттеҡышыҙ менән, сәй менән һыйлай-һыйлай һөйләштеләр. һораша торғас, әллә ҡайһы нәҫел-тоҡомдарҙан уратып килеп, Ғәзимәнең атаһы менән был егеттен, әсәһенен, ҡартатаһы туғандан туған булып, егет унын яҡын ғына ҡустыһы тейешле лә булып сыҡты. Быға улар тағы ла яҡыныраҡ күреп шатланыштылар ҙа Ныяҙғолдод Ҡотлобайға олатай түгел, ҡарт

булһа ла, бәке бирергә тейеш булған яҡын еҙнә икәнен аныҡлап ҡуйҙылар.

Егет үҙенең күргән-белгәндәрен һөйләне:

^- Эй, унда әңгәмәләр бик күп булды. Зыҡ ҡуптылар. Ныязғол еҙнәм менән Моратша бай кеүек үҙҙәрен старшиналыҡҡа һайлата торған кешеләрҙе бер яҡ ситкә ҡуйып, шарҙы уларға күрһәтмәй һалалар икән. -

— Ул шар тигәне нәмәкәй була һуң ул? Уны ҡайҙа һалалар?

— Бәй, унда бер сыйырсыҡ ояһы һымаҡ итеп яһал-: ған бер йәшник була икән. Шуны уртаға бүлгәндәр ҙә ике яғына шул шар тигән ағас йомғаҡтар һыйырлыҡ тишектәр яһағандар. Кем ыңғай һайлай, уң яҡҡа шар һала, кем ҡаршы, һул яҡҡа.

— И алланың хикмәте!

•— Йә шунан?

•— Шул. Ыңғай яҡҡа кем күберәк шар һалһа, шул старшина булып үтә икән. Беҙ йыйылышып ҡарап торҙоҡ. Күсербай" ауылының Моталай тигән кешеһе Моратша бай яҡлы икән. Ныязғол еҙнәмде һайлаған саҡта, ул бер шарҙы алып тороп асыуланып, һулаҡай яҡҡа шаҡылдатҡансы бәрҙе лә, үҙе: «Мә, Ныязғол, үтерһең, үтмәй ни!» — тип ҡуҡырайып атлап киткән булды. Кешеләр көлөштөләр. Ҡайһылары ирәгешеп китәләр, мәрәкә!

Байбисәләр ҙә был мәрәкәгә рәхәтләнеп көлөштөләр. Егет дауам итте:

— һайлау бөткәс, Моратша бай, асыуынан ҡып-ҡыҙыл булып, повозкаһына ултырып, саң бор̌котоп ҡайтып китте. Ныязғол еҙнәмде бөтә ауыл старосталары, мирәйеттәре һырып алғандар, маҡтайҙар, хуплайҙар. Шунак Ныязғол еҙнәм атайымдыщ ҡолағына әллә нәмә шыбырҙаны ла мине бында һеҙгә саптырҙы. Үҙе шундағы бөтә халыҡты йәйләүгә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Урядниктәр ҙә, тағы әллә кемдәр ҙә бар. Кеше күп, илле-алтмышлап барҙыр.

Рәхимә был хәбәрҙең бара торғас былай, ҙурайып китеүенән тағы ла ныҒыраҡ хафаға төштө, тағы ла нығыраҡ ашыҡтыра башланы.

—• Ай алла, Ғәзимә, М&ғфүрә килен, был ғына тәкәләр нигә етә? Тағы бер өс-дүртте һуйыйыҡ. Әҙәм оятына ҡалырбыҙ. Юҡ тигәндә лә, илле кеше булыр әле. Йә, анау Айбулаты ла оҙаҡланы. Уй әттәгенәһе, әллә ерән



тыу бейәне һуйыр инек. Мәғфүрә килен, Асатайҙы ҡайтар әле, тиҙ генә өс өлкән һарыҡты тотоп килтерһен. Бына ҡустым, ҡунаҡ булһа ла, мал һуйышырға ярҙамлашыр әле. Ҡана, йәһәт булайыҡ!

Ҡотлобай Рәхимәнең был һүҙҙәренә ҡушылып, үҙе лә ашыҡтырҙы. Тирмәнән сығып, тирә-яҡҡа ҡаранды.

— Була ул, апай. Ҡайҙа, килтерһендәр, хәҙер һуйып ташлайбыҙ уларҙы,— тине.

Мәғфүрә Диләне һыу буйына Асатайҙы ҡайтарырға югертте лә үҙе ҡомғандарға һыу тултыра башланы.

Рәхимә һаман бойора ине:

— Мәғфүрә килен, тәкәләрҙен, башын, түштәрен үҙең ет инде. һап-һары булһындар. Бүтәндәр булдыра алмаҫтар. Ҡурайсылары тиҙерәк килеп етһә ярар ине. Имаметдинем ҡайтып өлгерәме инде, юҡмы? Бигерәк ҡыҫтауға килде шул. Исмаһам, Үмәр ҡоҙа менән Муйылбикә ҡоҙағый ҙа килеп етмәнеләр. Әйтеп ебәреп тороп, ниңә оҙаҡларға кәрәк инде! Айбулаты ла китте лә батты.

Рәхимә тағы ла:

— Йәш килен, йәш килен, бынау ҡара сурнайынды йыуындырып, өҫтөнә берәй арыу нәмә табып кейҙереп ебәр! Ана, ҡайКылай бысранып, лаҡашып бөткән, сусҡа балаһы. Кеше килгәндә бер ерҙә бер бысраҡ булмаһын. Кемден, йәйләүе — шуныщ йәйләүе. Ныязғол йәйләүендә сер бирерлек булмаһын.

Гөлйеҙемдөң, алтынсы ҡаҙанды ҡайнатып сығара алмай, тоҡанмай, быҫҡып ятҡан ҡыр тиҙәге аҫтына утҡа өрөп тора-тора биттәре ҡып-ҡыҙыл булғайны. Рәхимә бөйкәс, ул малайыныщ еҫ-башын ҡарарға ҡыуышҡа табап китте.

Баянан бирле тирә-яҡты күҙәтеп ятҡан Ҡотлобайҙы ла ул абайламаны, битен дә ҡапламай, алға табан ҡарап бара ине. Уны яҡындан ғына күргән Ҡотлобай Гөлйөҙөмдөн; һылыулығына иҫе китте. Хатта ҡырын ятҡан еренән тороп, аяҡ салып ултырып, текләп, уны әллә ҡайҙа тиклем оҙатты. Эсенән: «Был кем кәләше икән? һай, һай, аҫыл һөйәк, һылыу ҡатын»,— тип һоҡланды. Бер аҙҙан тирмәнән килеп сыҡҡан Ғәзимәнән:

— Апай, бынау «йәш килен» тигәнегеҙ кемден, йәмғәте ул? — тип һораны.

Ғәзимә Гөлйеҙөм киткән яҡҡа ҡарап алды ла:

— Эй, анау киленде әйтәһеңме? Ул ни, беҙҙә ялсылай торған Айбулаттын, ҡатыны,— тип яуап бирҙё.

Ҡотлобай тағы ла әллә ни тураһында һорашмаҡсы булһа ла, үҙенең Гөлйөҙөмгә һоҡланған уйын Ғәзимә Ьщеп ҡалыр тип, үҙен тыйҙы.

Төмҫәй генә турҫыҡ, ҡап-ҡара сәсле, сөм-ҡара күҙле Тимербулат әсәһенә бирешмәҫкә тырышты. Ул үҙенең мәте балсыҡтан яһап алған аттарын, һыйырҙарын ҡарайып ярылған ҡулдары менән ҡосаҡлап, үҙҙәренең ҡыуышына ҡарай югерҙе.

Гөлйөҙөм уның артынан тыны тарыға-тарыға ашығып барып етте лә, ороша-ороша сисендереп, яурын баштары, терһәктәре ямалған ҡыҙыл сыбар күлдәк менән, тубығы ямалған, уңып бөткән буйлы ыштан кейҙереп, бысранмаҫҡа ҡушты:

— Таҙа ғына йөрө, бысранма! Олатайҙар киләләр,— тине.

Тимербулат әсәһенең һүҙҙәрен әле уның ҡыҙарған битенә, әле ҡара сатин кәзәкейе еҫтөнән быуған ҡыҙыл билбауына ҡарай-ҡарай тыңланы ла, үҙенен, иңер бауын бәйләгәндә, ҡаштарын йыйырып:

— Олатайҙал ниңә киләләл? — тип һораны.

— Ҡунаҡҡа киләләр.

— Ниңә ҡунаҡка киләләл?

— Ит ашарға ҡунаҡҡа киләләр, ҡымыҙ эсергә.

— Әсәй, мин дә ит ашайым, әсәй, асыҡтым.

— Ҡунаҡтарҙан ҡалғас, ашарһың. Ит бешмәгән әле.

Ләкин Тимербулаттың ундай киң сәбәптәрҙе тынлағыһы ла килмәне, мыжкылдап иларға йәтешләнде.

— Әсәй, асыҡтым, ит бил.

— Мыжыма тим, ҡалғас, ашарһың.

— Асыҡтым, әсәй-й-й...

Гөлйөҙөм уға ҡыуыш төбөндәге бәләкәй ағас һандыҡтан ҡатып күгәреп бөткән икмәк һыныҡтары алып бирҙе. Тимер, быға ғына риза булмайынса, тағы ла ниҙер әйтеп, әсәһенең салғыйына йәбешеп, шыңшырға тотондо. Ләкин Гөлйөҙөмдөн, ваҡыты бик тығыҙ ине. Ул улын иплэп кенә этте лә, биленән өҙеп киҫеп алған тулҡаҡҡа бөгөлөп, ергә ултырҙы. Ул сытырайышып тешләнде, ыңғырашмаҫка тырышып күҙҙәрен йомдо. Бер аҙ ваҡыттан, тулғағы аҙыраҡ ысҡындырып торған арала хәл алып, тәрән тын алды ла.

— Бар, балам, бысранмай ғына йере, йәме! — тип, Тимербулаттын, башынан һыйпаны ла эшенә башланы.



Ә Тимербулат әле генә кейгән таҙа күлдәгенең итәгенә мәте аттарын тағы ла тейәп, бер ҡулы менән итәген берөп тотто ла, икенсе ҡулы менән икм«к ҡатыһын ваҡ. ҡына аҡ тештәре менән кимерә-кимерә, талдар араһына инеп китте.

Ғәзимә Мәғфүрәне үҙ тирмәһенә саҡырып алып йомоштар ҡушты:

— Бауырһаҡты арыулап, күкәйгә генә баҫып бешерегеҙ, һары майға ғыша. Туң май бауырһаҡтың тәмен ала ул. Йәш киленгә әйт, анау бер күнәк һыйышлы ҡаҙанды бәләкәй усаҡҡа ултыртһын. Һин ҡамыр әҙерләгәнсе, май ирей торор. Бауырһаҡты үҙем ҡырҡмаһам булмаҫ. Бик оҙаҡ маташаһығыҙ. Баҙҙан май, варениеләрҙе алып сығып, миңә алып килеп бирегеҙ. Үҙем самалап бирермен.

Мәғфүрә, йәһәт атлап барып, Гөлйөҙөмдө эшенән бүлдереп булһа ла, уның менән ашығып баҙға табан китте.

Баҙҙың әҙәм көсө етмәҫлек ауыр, ҡалын ҡапҡасык Гөлйөҙөм ҡорһағына терәп күтәрергә аҙапланғанда, Мәғфүрә үҙе тиҙерәк йәбеште:

— Ҡуй, килен, күтәрмә, эсеңде имгәтеп ҡуйырһың? Ҡана, үҙем,— тине.

Гөлйеҙәм уңайһыҙланып ҡыҙарҙы ла Мәғфүрәгә серен әйтте.

— Еңгә, бөгөн билемдән бик нык ала. Кистән дә ҡалмам, ахыры. Оят була инде, бындай ғәләмәт саҡта...— тине.

Мәғфүрә лә тынысһыҙланды:

— Эй аллам. Иплэп кенә йөрө инде. Айы-көнөң тулһа, оят тип әллә ни эшләп булмай ул. Күп булһа, Ғәзимә һөйләнер. Унын, ғәҙәте бер бөгөн түгел инде.

Улар шулай, оҙон көндөн. таң иртәһенән алып киске һарҡыулыҡҡа тиклем, өлкән һуғышҡа әҙерләнгән ғәскәр кеүек, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй, байбисәләрҙещ бойороҡтарын үтәнеләр.

Бына бетә эш яйға һалынды кеүек. Ауылдан өҫтәл, кеҙгө, оло көрәгәләр, яҡшы араҡылар менән тулы бишалты кәрзинкәләр тейәп, Айбулат егеп киткән күк атта Хөсәйен килеп төштө.

Рәхимә унан Айбулаттың үҙе ҡайҙа икәнен һорағас, Хөсәйен унын. кис менән бик һуң ғына киләсәген әйтте.

Рәхимә быға донъя бөлгәндәй булып ярһыны.

— Бына кәрәк булһа! Ни эшләп улай итеп, эт эткә, эт ҡойроҡка тигәндәй, үҙенә ҡушылған йомошто һинә тапшырып йөрөй?

Хөсәйен ендәшмәй ат туғарыуында булды.

Рәхимә һаман ярһый ине:

— Иллә баш-баштаҡ беҙҙең был Айбулат, иллә үҙе тигәнсә йөрөп ята. Бынауындай ҡыҫтау саҡта!

УлЛөҫтәлдәрҙе бәләкәй аҡ тирмәгә ҡуйҙыртып, ултырғыҫтар теҙҙертеп, өҫтәлгә көҙгө ҡуйып, селтәр ашъяулыҡтар яптырып ҡуйҙы. Шунан ғына, бер аҙ асыуы •баҫылғандай булып, тынысланды.

— Был тирмә ҡаласараҡ булһын. Имаметдин менән урыҫ ҡунаҡтар ултырырҙар. Хөсәйен, ҡыҙҙар бегөн ҡайтмаймы ни?

•— Юҡ, берһегәнһөҙ ҡайтмайҙар, ти.

— Ни эшләп кенә оҙаҡлайҙар икән, ҡолонсаҡтарым. йә анау ир балаларҙы алып ҡайтманылар. Бынау шатлыҡты күрмәй ҡалырға ярамай уларға. Имаметдин ҡа•сан киләм ти икән һуң?

— Оҙаҡламай барам, яҡшы әҙерләнһендәр, ҡала ҡунаҡтары алып киләм,— тине.

— Уй хоҙайым, улары кемдәр икән тағы! Беҙҙен. ни, башҡортса ғына әҙерләнгәнде Имаметдин ератһа ярар ине. Әллә ни ҡаласа ти ҙә ҡаласа ти. Ҡаланы кем барып күргән дә кем белгән! Килен үҙе алданыраҡ килһәсе һуң. Ул ҡала күргән кеше, нисек-нисек итергә өйрәтер ине. Анау Миңлекәйе ағайың менән шунда түрәләр янында урапғышып ҡайтмай бит, ни барҙыр инде уға ул тиклем!

Ғәзимә лә Рәхимәнең был борсолоуҙарын бүлеште:

— Әйтмә инде, апай, ҡуштанланып йөрөйҙәр шунда :£ ире янында. Ә бындағы мәшәҡәттә эше лә юҡ!

Рәхимә, усаҡтар янына табан китеп, йомоштар ҡушты:

— Ҡанағыҙ, килендәр, бынау тирмә күләгәһенә генә кейеҙ түшәп, ашъяулыҡ йәйеп, иттәрҙе тешөреп килтерегеҙ. Хөсәйен, ҡулынды йыу. Ҡунаҡ ҡустым, Ҡотлобай, һин дә ултыр әйҙә, Ғәзимә, үҙен, дә кил, ит турап алайыҡ, йәш килен, һалмаларынды ҡырт^а башла!

Улар, Мәғфүрә түшәгән ҙур аҡ кейеҙ өҫтенә түңәрәкләшеп әйләнеп ултырып, бөтәһе лә үткер бысаҡтар алып, уртаға ултыртылған оло табаҡтарҙағы боҫо борлап ултырған эре һарыҡ боттарын, билдәмәләрен, оса, түш майҙарын турарға тотондолар.



Ул арала килеп еткән Үмәр ҡарт менән Муйылды ла арбанан төшөү менән эшкә ҡуштылар.

Гөлйеҙөм атаһы менән әсәһен бик күптән индё күрмәй һағынған булһа ла, өҙәләнеп килеп әсәһенең муйынынаташланғыһы килһә лә, уны булдыра алманы. Былай ҡыланыу килен кеше өсөн бер ҙә килешкән эш түгел ине-Ул әсәһенә ипләп кенә атлап барып, унын, менән ҡосаҡлашып, әле уң, әле һул яурындарына башын һалып күреште. Муйыл да ҡыҙын ныҡ һағынғанлығын кешеләргә» белдермәҫкә тырышты. Уны баштан-аяҡ күҙ йөрөтөп ҡараны ла, йәлләп, күҙҙәрен икенсе яҡҡа борҙо. Тимербулаттың ҡайҙа икәнен һораны.

Гелйөҙем унын, ҡайҙа икәнен дә уйларға ваҡыть* булмағанын хәтерләп:

— Әллә тағы, берәй ерҙә уйнап йәреймө икән,— тигв тирә-яғына ҡаранып ҡуйҙы ла тағы үҙенең эштәре артынан ашығыга китте.

Улар күмәкләшеп ит турай башлауға, тал араһынага Асатай, сырылдатып, ҡысҡыртып, һыңар ҡулынан ғына күтәреп, бетә өҫте шыйыҡ батҡаҡҡа буялып бөткән Тимербулатты алып сыҡты.

— Гөлйөҙөм енгә, малайың һыуға бата яҙҙы бит! Ми». күреп ҡалмаһам, батҡайны,— тине Асатай.

— Ни эшләп? — Бетәһе лә ҡапыл уға боролдолар.

— һыуға тайып төшкән дә, үҙе үрмәләй, үҙе һама» эскә табан бара. Ярай, ярҙың текә ере түгел. Бил тиңен^е батҡан да, бер ҡулы менән талға йәбешеп, ярмашып, ахылдап сығырға маташа. Үҙе иламай бит әле,— тип Асатай көлә-көлә Тимербулатты ергә төшөрҙө. Ул> икенсе ҡулындағы оҙон сыбыртҡыһын ҡыуыш артына ырғытты ла, билендәге билбауын сисеп ташлап, ҡомған. менән ҡул йыуырға тотондо.

Рәхимә Тимербулатты ла, Гөлйөҙөмдө лә орошоп ташланы.

— Уй, йөҙе ҡара бала! Ҡайһы арала унда төшегг елгөргән! Ярай, б*атмағанһың әле. йәш килен, һинә шунь» ҡарап кейендер, тигәйнем бит. Ниңә шул әйткәнде ти?. генә тыңлай һалмайҙар икән!

Ғәзимә Тимербулатҡа һыңар күҙе менән аҫтан ғына[1] ҡараны ла:

— Уға ни булыр тиһең, ташҡа талау тейәме. Батһа> тағы, йерөмәһен тертәнләп,— тип бупылданы.-

Бай ҡоҙағыйҙарҙың был ризаһыҙлығынан, бигерәк тә Ғәзимәнең яман һүҙҙәренә, Муйылбикәнең бик ныҡ •асыуы килде. Ейәнен янына саҡырып әүрәтергә лә ҡуҙ•ғалманы, ул арала Гөлйөҙөм дә, югерә-атлап килеп етеп, улын етәкләп >алып китте.

Рәхимә һаман ҡабаландырҙы:

— Иә, ҡуйығыҙ, йылдам ғына турайыҡ! Өлгөрмәй ҡалырбыҙ. «Ит тураған табыштыр, унан-бынан ҡабыш-тыр» ти, әйҙә, һоғонғолап ултырығыҙ. Айырым ашты ҡу=«аҡтарҙан алда өлгөртеп булмаҫ.

Ләкин бындай тәртипһеҙлекте берәү ҙә эшләмәне.

Ҡунаҡтарға туралмай тотош өләшелә торған һыйлы (һөйәктәр үҙалдына, туралған ит, ҡаҙылар үҙалдына, табаҡтарға тултырылып, аш урыны әҙерләнгән тирмә•нең кирәгәһе эргәләп, иҙәнгә теҙелде. Уларҙын, өҫтәрен ҡыҙыл шаҡмаҡлы ашъяулыҡтар менән ябып, тураусылар үҙҙәре турағандан ҡалған һөйәктәрҙе мөнйөп, ҡулдарын ялап, Асатай менән эйәреп ҡайткан һорлан менән Шонҡарға ла, иттәре һылып алынған тулярһыҡтарҙы ырғытып, урындарынан торҙолар.

Тәкәләрҙең башы менән түштәренең майҙары һыҙырылып әйләнеп торған ҡойҡаларын ипләштереп, бөтәүләй тенә айырым табаҡка һалып ҡуйҙылар. Былары бик ҡәҙерле ҡунаҡтарҙың өлөшө ине.

3

Йәм-йәшел булып йәйелеп яткан йомшаҡ сәхрәнең аҙ ғына ҡалҡыу булып күтәрелеп, күккә тоташҡан һы•маҡ күренгән горизонтынан өс ат еккән өҫтө ябыҡ ҡара ттовозка ҡалкты. Баштарын сайҡап килгән ике яҡ ситкә •егелгән пар ҡара күк, урталағы ажарланып елгән ҡара ҡүк айғыр әллә ҡайҙан уҡ бынын. Ныязғол повозкаһы •икәнен күрһәтә ине.

Кемдер берәүҙең:

— Ана, киләләр! — тип ҡыскырып ебәреүе булды, шунда уҡ бөтә йәйләү аяҡка баҫты.

Йөрәктәренә сыҙамаған елгер аттар ухылдашып килеп туктанылар. Күсер Хәйрулла һикереп төштө лә, аттарҙың башынан алған Асатай менән баш һелкеп һаулашып, /икәүләп ат туғарырға керештеләр.

! Килеүселәрҙе ҡаршы алырға күмәк кеше эркелеп •сыкты.



Повозканан, бөтә мөһабәтлеген һаҡлап, Ныязғол сыҡты. Ул өҫтөнә йәшел соға елән кейгән, билен көмөш ҡәмәр билбау менән быуған. Аяғында гамбург ситектәре менән американский галоштар. Башында ситенә ҡондоҙ=ҡама тоткан яҡшы бүрек. Ул ашыҡмай ғына башын' уңлы-һуллы бороп, бөтә йәйләүгә күҙен ташланы. Уның-бөтә йөҙө бәхетле йылмайыу, бөтә килбәте еңеүҙән кил^гән ләззәт менән ҡапланған, күҙҙәрен эрелек һөҙгән. Ул, башын юғары күтәреп, яурындарын аҙыраҡ ҡайҡайтып,, аяҡтарын арҡыры баҫып, оло тирмә эргәһенә йыйылған кешеләр янына табан атланы.

Рәхимә башындағы аҡ кешмир яулыкты төҙәткеләп^ ҡыҙыл бәрхәт кәзәкейенең һыҙғанған ендәрен тешөрөп,. хөрмәтле йылмайып, ҡартын ҡаршы алды.

Ныязғол иң элек унын менән һаулашты:

— һаумы, байбисә, йорт-ер, мал-йән именме?

Рәхимә ашыҡмаған, баҫалҡы һәм буйһонған, шул ук ваҡытта үҙенең дәрәжәһен тешөрмәҫ бер тыныслыҡ менән:

— Аллаға шөкөр, бтәһе лә һау, теүәл. Бөгөн бына ҡунаҡтар килеүгә әҙерләнгән булдыҡ. Алты баш тәкә> һуйҙырттым, йөҙ илле күнәк ҡымыҙым бар. Аш-һыу әҙерг етерлек,— тине.

Бай унын, аш-һыу еткермәй, сер биреп бер ваҡытта ла хурлыҡка ҡалдырмаҫына күптән ышанған. Шуға күрә, ул был турала ентекләп тә тормай, үҙенә ҡаршы килгән Ғәзимә менән һаулаша. Ул арала унын һөйәр ҡыҙы Хаят ҡуйынына ташлана:

— Атай, миңә нимә алып ҡайттын?

— У минен, өлкән ҡыҙыш! һиңә мин әллә ниҙәр алып ҡайттым, Бар, ана бәләкәй әсәйевдән барып ал, — тине Ныязғол, унын маңлайынан үбеп, башынан һыйпап, повозка яғына күрһәтте лә Ҡотлобайға боролдо.

Хаят ҡанатланып әсәһенә югерҙе.

һылыу, нәҙекәй йәш бисә Миңлекәй билдән өҙөп, ерҙән һөйрәлтеп теккән өс итәкле йәшел ебәк күлдәк, уртаға ярып тараған ҡуңыр сәстәре өҫтөнән сукайтып ҡына кейгән ынйы ҡалпаҡ, ҡулдарында сылтыраҡлы алтын беләҙек, муйынына таҡкан алтын сәғәт сылбырҙары менән ялтырап, бейек ботинкаларыныщ осон ғына күрһәтеп, еңел атлап, ҡулына әллә ниндәй төйөнеоктәр күтә^реп, ҡыҙына көләп килә.

— Абау, ҡыҙым, һағындыщмы? Әйзә, мин һиңә әл

лә ниҙәр алып ҡайттым, әйҙә, ҡыҙым! — тип, ул, бер ҡулы менән ҡыҙын етәкләп, көндәштәре менән һаулашты ла ире артынан тирмәгә ынғайланы.

Ул һәр ваҡыттағыса шат, күңелсәк, ләкин эрелеген юғалтмаған төҫ менән тирә-яҡҡа әләнләп ҡарап, борғоланып атлап барыһы менән һаулашып үтте. Ул тик башҡортсалыҡ-мосолмансылыҡты күрһәтер есән генә ябынған яҫы укалы ҡыҙыл атлас еләнде үҙенә ҡаршы килгән Мәғфүрәгә тотторҙо ла, ҡалпаҡ[1] өҫтенән шыуып тешеп барған аҡ ебәк яулыкты теҙәткеләп, Мәғфүрәнең һаулашыуына йылмайып, сүтелдәп яуап бирҙе: *

— Бик иҫән ҡайттыҡ. Үҙегеҙ һау торҙоғоҙмо? Йәйләүҙе ҡайһылай матур ергә ҡорғанһығыҙ. Бик, бик матур! Иәш килен, һаумы!

Гөлйеҙөм йәйләүгә килгәс, Мәғфүрә, үҙен аҙмы-күпме иркендә хис итеп, иркен тын алып ҡалғандай булғайны. Хәҙер, былар килеп төшөү менән, уны тағы ла ниндәйҙер тартыныу, ҡурҡыу ҡаплап алды. Туҡалдың былай ҡыйыу һаулашыуына ла йеҙе ҡыҙарып, йөрәге шыу итеп ҡалды, тауышын да сығарыр-сығармаҫ яуап бирҙе.

— Бик шәп әле,— тине лә уға арты менән үк боролдо.

Гелйөҙөм бер ҡалаҡ юғалған өсен дә донъя ҡуптарып әрләй торған Ғәзимәгә ҡарағанда ла Миңлекәйҙән шикләнеңкерәй, ул уның йылмайып ҡушкан һүҙенең дә ысын күңелдән булмайынса, ниндәйҙер яһалма икәнен тоя. Ул үҙе лә асыҡ аңламаҫтан, тоҙактан һаҡланған ҡош кеүек, Миңлекәйҙән һаҡланды, итәк-еңен йыйып торорға ғәҙәтләнде. Сөнки Гөлйеҙөм уның тураһында Мәғфүрә менән Айбулаттан да, башҡаларҙан да бик күп насар ҡылыҡһыр ишеткән. Мәғфүрә һәр ваҡыт: «Айһай, уның юхалауына ышанма, улмы, ул — йылан аяғын ҡиҫкән. Шундай хәйләкәр ҡылйыуғыс. Үҙе лә шул аҡһаҡ •сауҙагәр Шәрәп мишәр ҡыҙы шул. Ныязғол ҡайнаға Николайскийгә үтеп-һүтеп йөрөгәндә күҙләгән. Уның әле тағы унан оло йәмһеҙ бер апаһы булған, шунан ул ошо өлкән ҡыҙҙы тәүҙә икенсе бер кешегә димләп алып бирешкән дә быныһын үҙенә алған. һырттан һыйпау тигәндә, иренә ҡуштанлыҡҡа тигәндә, аллаһыу! Ә саҡ ҡына бер нәмә булдымы, төймәне лә дөйәләй яһап, иренә >ошаlслап бара. Килгән сағында йәш кенә, йыуаш ҡына ине. Балалары ла күбәйеп, ире үҙе менән ҙур ерҙәргә йөрөтә башлағайны, телкө кеүек үткерәйҙе лә китте. Ул •өйҙә тик Рәхимә еңгәмдән генә шерләй. Ул булМаһа, хәҙер бәтәһенең түбәһенә менергә әҙер тора»,— тип һөйләй.

Айбулат унан да яманыраҡ итеп ҡылыҡһырлай:

— Ул ҡарты янында булһа ғына шулай ҡуштан. Саҡ ҡына аулаҡ ҡалһа, ҡәйнеш тигән булып, йылмаңлап, үҙе килеп бөйөргә тертә. Ситтән матурыраҡ ҡунаҡтар килһә, беҙҙе күҙгә лә алмай.

Был хәбәрҙән Гелйеҙөмдөң иҫе китте. Ҡатын кешенең үҙ иренән башҡа кешеләргә күренеүенә, ҡурҡмай," өркмәй түрәләр менән һөйләшеп йөреүенә аптырай. Бигерәк тә уныщ, руссаны һыуҙай эсеп, сатылдап һөйләүе уны ғәжәпләндерә.

Оҙаҡламай ауыл яғынан йәнә бер пар ат күренде. Быны ла шулай ҡаршыланылар. Ялт итеп торған ҡара кырандас менән яҡшы пар туры атта биеәһе Фариза менән Имай килеп төштө.

Имай атаһына ҡарағанда күп усал, ҡаты, һаран. Ул ҡара быжыр битле, оҙон мыйыҡлы, ауыр ҡарашлы бер әҙәм. һимеҙлектән бхГттәре ике сикәһенән һалбырап кинәйеп түбән төшкән. Маңлайы терпе кеүек текә ҡырҡкан ҡаты сәстәре янында ослайып блрып бетә. Көмөрөрәк киң яурынына тоташҡан ҡалын елкәһе, ҡыҫҡа ҡара жакетенең яғаһы аша сығып, әллә нисә һыр булып ҡатланып ята. Уның жакетенең яғаһы ла, атаһының яғаһы кеүек елән яғаһы булмайынса, киртләсләнеп тегелгән. Бер ваҡыт мулла, никрут Әхмәзиҙең, Ҡотлоярҙың шул формаға тегеп кейгән яғаларын күргәс: «Ай, йеҙө ҡаралар, кафыр булғанһығыҙ икән, яғаларығыҙ киртләсле, инде урыҫҡа оҡшап, башығыҙға картуз кейеп йөрөгеҙ тағы, оялмай»,— тип әрләгәс, улар: «Бәй, хәҙрәт, Имайҙың, бөтә яғалары шулай ҙабаһа, ниәшләп уға әйтмәйһең, мәсеткә лә индерәһең, әрләмәйһең дә»,— тигәндәр икән, мулла бер ҙә аптырап ҡалмаған: «Ул ҡалала йөрей торған кеше, купецтәргә ундай кейем хәләл, ә һеҙгә харам»,— тигән. Шунан бирле бөтә ауыл йәштәре араһында беркейем тектерергә- булһалар: «Ниндәй яға ҡуябыҙ, хәләлдеме, харамдымы?»— тип көлөшәләр ине.

Имай кырандастан төшкәс, кешеләр менән атаһы һымаҡ берәмләп һаулашып уа торманы. Тотош ҡына, береһенә лә ҡарамай ғына, теләр-теләмәҫ кенә һаулашты ла, итектәрен ялтыратып атлап, тирмәгә юнәлде.

һуңғы йылдарҙа Фариза ла, ҡалаға йөрөп, үҙгәреп, шымарып китте. Бәләкәй сағынан етемлектән килгән ба-

çалкылыҡ унын ҡайны-ҡәйнәләрен үҙ яғына ауҙарған. Ире менән ике араларында бер ҙә татыуһыҙлыҡ һиҙелмәй. Төçкә, буйға, аҡылға тура килгән был бисә, Имайҙың бөтә яман ҡылыҡтарынан күҙ йомоп, баш эйеүҙән башҡаны белмәй ине. Бындай уңайлы, тыныс ҡатын Имайҙың да күңеленә яткан да, унын бер балаһы ла булмауына ҡарамай, әле булһа икенсе бисә алмай тора бирә.

Мәғфүрә Фариза тураһында ла Гөлйөҙөмгә һөйләгәне бар: «Иренә ярағас ни, уға береһе лә һүҙ тейҙерергә баҙнат итә алмай шул. «Ир ҡакканды — мир ҡаға» тигәндәр бит, ире тиңһенмәһә, ҡатыш кешегә бөтәһе лә хужа була ул. Был байлыҡка ни атаһынан ҡала Имай баш бит инде. Бөтә ҡала эштәрен, иген эштәрен ул йврөтә. Ҡайһы бер саҡта атаһы менән дә һүҙгә килеп, сәкәләшеп, үҙ тигәненсә эшләп ҡуя ул. Шулай булғас, ҡалай итеп Фаризаға һүҙ тигеҙһендәр».

Ғәзимә менән Миңлекәй уға теш ҡайрап-ҡайрап ҡуялар ҙа, Рәхимә еңгә аралай шул. «Киленем килендән бүләк. һүҙ тигеҙмәгеҙ. Тик бына, алла ҡушып, бер ир бала ғына табып бирһә ине, юҡ бит. Анау ярлы Сәйетҡолға алты бала биргәнсе, исмаһам, берәүһен булһа ла беҙгә һыйлаһа, ни булыр ине һуң, ни эшләйһең. Алланыщ эшенә ҡыçылып булмай шул»,— тип кенә кейләп ҡуя ла, тегеләрҙең тыны сыҡмаç була ла ҡала.

Фариза, йәш ҡәйнәһенең күлдәге һымаҡ, билдән еҙәп теккән күк күлдәген, аҡ бүртмәс ебәк яулығын, бейек дағалы осло морон ботинкаларын сисеп ташлап, нисек кейенеү тураһында елкән ҡәйнәһенә кәңәш итте. Рәхимә уға үҙенсә аҡыл бирҙе:

— Был ҡала кейемдәрең килешмәç, һигеҙ ауылдан ҡунаҡ йыйыла. Ике ай буйы ҡалала иркенләп йөрөп туйғанһыңдыр инде. Үҙебеҙсә теккән кейемдәр алып кей. Мәрйә булған, тип әйтә күрмәһендәр. Йәш ҡәйнәңә нисек тә килешә уға. Кейен дә ана тегеләргә һалма ҡырҡыш.

Фариза, уны иғтибар менән тыңлағас, баяғы дүрт тоткалы оло һандыҡтан йәшел атлас күлдәк, ҡыҙыл бәрхәттән тешле ука баçып теккән елән, көс еткеһеҙ ҡашмау, йәшел семәрле ситек менән галоштар кейеп сыҡты ла Мәғфүрәләр янына килеп һалма ҡырҡышырға тотондо.

Был әүерә-сәүерә шатлыҡтар ваҡытында Гөлйеҙөмдөң атаһы менән әсәһе, бер кемдән дә абайланмағав



көйөнсә, будка артында күләгәлә ултырҙылар. Уларҙыщ килгәненә күп заман үтһә лә, уларға тамаҡ ялғатыу тураһында ҡайғыртыусы булманы. Гөлйөҙөм генә уларҙы йәлләп ҡарап ҡуя ла бер нәмә лә эшләй алмай. Тимербулат оләсәһенең алдына ятып йоҡлап ҡалған. Дилә •өҙлөкһөҙ ҡушылған ваҡ йомоштарҙан бушамай югерге-: ләй. Ә Хаят ата-әсәһе, ағай-еңгәһенең ҡайтыуҙары, бүләктәре, тәмле күстәнәстәр шатлығы менән, Диләне әллә ҡасан онотоп, аҡ тирмәләр араһында иркәләнеп югерә, әле атаһы, әле әсәһе янына барып һырлыға, төрлө хәбәрҙәр һөйләй, күлдәктәре, яңы уйынсыҡтары менән маҡтана.

4

Ҡунаҡтар килгәнсе тип ашыҡ-бошоҡ эсеп алған сәйҙән һуң ата менән ул, аҡ тирмәлә аулаҡ ҡалып, эш тураһында һөйләшеп алдылар.

Ныязғол, түрҙәге яçтыҡка һүҙыла биреп арҡа терәп, аяҡтарын һоноп ултырҙы. Ул, башындағы бүркен алып, уҡа йондоҙло ҡара бәрхәт таҡыяһын төҙәткеләп, нәҙек мыйыҡтарын һыпырып, иртәнән бирле күңелен ҡытыҡлаған шатлыҡ хәбәрен улына үҙ ауыҙы менән әйткеһе килеп, унын был тирмәгә килгәнен көттө. Имай оҙаҡ көттөрмәй килеп инде, еçтәл янындағы көҙгегә ҡаршы ҡуйылған ултырғысҡа ултырҙы. йыуан бармаҡтары менән сәстәрен үргә ҡарай һыйпаны.

— Йә, иçән-һау йөрөп ҡайттыңмы, унда эштәр нисек? Бында мине старшина итеп һайлап ташланылар! — Ныязғол ҡыуаныслы йылмайып, улының ҡарашында ла шатлыҡ билдәһе эҙләп текләне.

Ләкин Имай ул тиҙ йылмая торған алсаҡ йөҙлө кешеләрҙән түгел. Ул, ултырғысында һалмаҡ боролоп, атаһына ҡараны ла, бер аҙ өндәшмәй текләгәндән һуң:

— Ишеттем, яҡшы эш, әлбиттә. Бигерәк тә быйылғы йылдарҙа һинең старшина булыуың бик мөһим буласаҡ. Хәҙер ҙур ҡалаларҙа малдын, иттен, бигерәк тә беҙҙеке һышаҡ яҡшы тоҡомло булмаған малдың, хаҡы бик түбән. Хәҙер иң кәрәге—иген. Әгәр беҙ, ерҙе тағы ла икеләтә, өсләтә арттырып, ауыл хужалығы машиналарын юлға һалып, ҡалаға күберәк иген оҙатһаҡ, унын доходы малды-ҡы ише генә булмаясаҡ,— тине Имай.

Улынын, атаһына ҡарата булған был йәнһеҙ мөнәсәбәтенә Ныязғолдоң кәйефе бик ҡаты ҡырылды. Ул

нисә йылдар буйы, ни тиклем көс һалып, ҡан боҙоп, ағай-энеләр менән аралашып барып, бөгөн ошо дәрәжәгә иреште. Ә унын берҙән-бер ир ҡорона тулған улы, исма-һам, аҙыраҡ шатланып, бер-ике йылы һүҙ ҙә әйтә белмәй. Туп-тура эшкә бәйләй, эшкә күсә. Эш ҡасыр тиме икән. Хәҙер кемгә һөйләп шатлыҡ бүлешәһең инде. Анау ваҡ малайҙар менәнме — улары ла өйҙә юҡ. Ул, үҙенең ошо үпкәле уйҙарынан ысҡынырға тырышып, тамаҡ ҡырҙы ла, бер аҙ ендәшмәй ултырғас, үҙ фекерен ҡуҙғатт-ы.

— Игенен белмәйем, быйыл Яйыҡка бер-ике гуртовой ҡыуырға кәрәк. Хаҡы төшөнкө тип, унса кетөүҙәрҙе һатмай, ҡайҙа ҡуяһын,? Артабан...

Ләкин Имай уны тағы ла бүлде:

— Юҡ, атай, мотлаҡан игенгә һәм ҡалалағы сауҙаға күсергә кәрәк. Игенде мөмкин булған тиклем машина менән эшләтергә. Яҡшы сорт орлоктар алдыртам. Хәҙер игенгә сит илдән һорау күп. Оҙаҡламай беҙҙең тирәлә тағы ла бишнәккә ер һатыласағын ишеттеңме әле, атай?

— Ҡолағыма салынып ҡалғайны, ысын булһа. Ерҙе нн, беҙҙең башҡорттарҙан урыҫ баярҙары алып бөтөрөр инде, беҙгә ни генә эләгер тиһең. Расторгуй, Духлов, Макар, Кузьмин баярҙар ҡарға кеүек ябырылалар ҙа, уларҙан артмаҫ.

— Бына шунын есен дә эште алдан башларға кәрәк. Ауылдарҙа кемдәр үҙ ерен вечнийгә һатырға уйлағанын белеп алып, задатка-фәлән биреп ҡуйырға ла аҡсаны хәҙер үк туплай торорға кәрәк. Бынау һеҙҙең ҡунаҡ һыйлауҙарығыҙ төптө файҙалы эш түгел. Ғүмер уткәреү генә. Күберәк аҡса менән алдырырға кәрәк.

— Ай, улым, беҙҙең ерҙә унынһы ла бик кәрәк унын. Майһыҙ ҡалаҡ ауыҙҙы йыртa бит ул. Беҙҙең башҡорт кешеһе менән ҡунаҡлашмай тура килмәй шул.— Ныязғол, урынынан тороп, ултырғыска килеп ултырҙы.

Имай бер ары, бер бире йөрөй башланы.

, Ҡарт, икеләнгән һымаҡ, бер аҙ уйланып ултырҙы ла бик әкрен тауыш менән:

— Аҡса тиһән, уны табырға була ул. Әгәр минең бер эшем барып сыҡһа, улым, крәҫтиәндәр есөн асылған ер банкыһындағы йөҙ егерме алты мең алтын минең ҡулда буласаҡ, алла бирһә,— тине.

Имай атаһына ғәжәпләнгән, һоҡланған ҡараш ташланы.

Ныязғол үҙенең һүҙен нығытҡандай итеп:



— **Эйе, эйе, йөҙ** егерме алты **мең. Уны нисек алыуы** тураһында һуңынан һөйләрмен. Бегөн, күрәһең, ваҡыт тығыҙ. Приставты киләһе йәкшәмбегә саҡырып ҡайттым. Бөгөн киләсәк ҡунаҡтар әле ваҡ-төйәктәре генә. Ә киләһендә дығал кузырҙар буласаҡ. Ҡунаҡһыҙ булмай. Үҙегеҙҙең ҡалалағы эштәрегеҙ нисек бара?

— Былай арыу бара. Ләкин күңелдәгесә түгел. Вәли Агапичтәрҙең ярты йылға илле мең доход. Беҙҙең ҡырҡ һигеҙ мең генә.

Был хәбәрҙән атаһының күҙҙәре янды.

— Ай, улым, әлхәмделиллә," тиген. Шунан яҙмайыҡ.

— Юҡ, атай, башҡаларҙан бер генә аҙым да артта ҡалырға ярамай. Уҙҙырырға тырышыу кәрәк!

— Әллә үҙен, шунда күсеп, эш итә башлайһыңмы?

— Әлегә күсмәйем, йышыраҡ барырмын. Ундағы управляющий арыу кеше, ышаныслы. Бында, баяғы әйткәнемсә, иген эшен ныҡ юлға һалырға кәрәк. Шуны яҡшылап алып барырҙай кеше табырға кәрәк ине.

— Айбулат нисек булыр икән, бик үткер бит ул.

Имай атаһына күҙҙәрен аҡайтып ҡарап яуап бирҙе:

— Атай, һин ҡайһы саҡта бик ғәжәп һүҙ һөйләйһең. Әле бынан нисә генә йыл элек Айбулаттың бөтә тирә-яҡ ярлыларын эйәртеп алып башыңды юғалта яҙғанын онотаһың. Уға тағы ышанмаҡ булаһың,.

Ныязғол ҡул ғына һелтәне:

— Эй, ул үткән йылдарҙы уйлап торһаң, Айҙаҡайҙа баҫып торорға урын тапмаҫһың. Булды ла үтте. Хәҙер, аллаға шөкөр, донъя тыныс, Айбулат ни ҡыла ала? — Ныязғол хатта иҫәнләп ҡуйҙы.

Имай атаһының был ғәмһеҙлегенә аптырап баш һелкте.

— Хәҙергә, дереҫ, донъя беҙҙең ҡулда. Ә һин аҙыраҡ шуны ла уйлап ҡара: ул ваҡытта А-йбулаттың һәр бер һүҙенә халыҡ йәрхәмикалла тип, унын артынан утка ла, һыуға ла инергә әҙер торған сағында, уны һалдатка оҙаткан булмаһаҡ, күрһәтә ине ул беҙгә күрмәгәнде!

Ҡарттың тағы ла артыҡ иҫе китмәне. Ул бөгөнгө ҙур енеү шатлығын һис бер ундай күңелһеҙ иҫтәлектәр менән күләгәләткеһе килмәй ине. Шуға күрә ул, хатта еңелсә көлөп, ҡул һелтәне:

•— Үткән эштән төш яҡшы, улым. Ана бит, ул ваҡытта Айбулаттар беҙҙе өтөп ашап барғанда ла нисек ҡотолоу юлын тапҡанмын. Хәҙер, бөтә власть үҙ ҡулыма'

инеп торған саҡта, ни тип унан көн элгәре алдан шөрләп ултырайым, ти? Хәҙергә мин һаман да Ныязғол бай, старшинамын. Айбулаттар һаман ялсы әле. Шулай ҙа ул бик тоғро, һинең энәңә лә ҡағылмай инде. Үҙе бик күпте белә, һалдаттан шундай үткерәйеп ҡайтҡан, ә грамотныйлығы ни тора? Әгәр ҙә ул беҙҙең ыңғайға ауып, берәй эшебеҙҙә управляющий булып эшләһәме, мин уны бер һүҙһеҙ шундай эшкә ҡуйыр инем. Тик ул һаман да үҙенең эрелеген ҡуймаған күренә, тыңламаҫ.

Имай урынынан тороп уҡ китте.

— Кәрәкмәй, атай, кәрәкмәй! Айбулат әллә, һинә эшләп йөрөгәс тә, баш эйгән тип уйлайһыңмы? Ул, әлбиттә, ҡараҡ түгел, әгәр ябай ҡараҡ булһа, үҙе лә яҡшы булыр ине. Уның менән һейләшеп тә, килешеп тә булыр ине. Ул тик нужаһы кеслө булғанға ғына беҙҙә эшләп йөрей. Ә халыҡ менән эш башлаһа, эренән башлай торған кеше. Һин шуны онотаһың, атай.

Ныязғол улының һүҙенә риза булдымы әллә үҙенең һәйбәт кәйефен юҡ-бар менән боҙғоһо килмәнеме, тағы ла ҡул һелтәне.

— Йә, ярар, уныһы ла дөрөҫ. Риза булһа, шулай йомош-юлға йөрөһөн, булмай икән, үҙ юлын ҡараһын. Бала-сағаһы ла күбәйеп бара, тамаҡ яуы ғына арта. Яҡшы приказчик яллаһаҡ, ул уҙҙырыр,— тине.

5

Уларҙың һүҙен тыштағы сыр-сыу бүлде.

Юлдың саң туҙанын һауаға күтәреп, ҡунаҡтар килеп тула башланы: һыбайлылар, пар атлылар, тройкалылар, ҡатынлылар, буйҙаҡтар — йәйләү, һабантуйҙағы кеүек сыбарланды.

Дүрт тирмәлә есәр, дүртәр табындан йыйылышып ултырған халыҡ, бай әҙерләгән һыйға мәс булып, геүләшә. Муллалар, суфыйыраҡтар ултырған тирмәлә әңгәмә пәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр тарихе, алланың сикһеҙ көсө тураһында бара. Үҙҙәре, һимеҙ иткә, көслө ҡымыҙға иҫереп, баштары иҫәңкеп, әлһерәгәндәр.

Рус түрәләре һәм ҡайһы бер дини ғәҙәттәрҙән артыҡ ҡурҡмай торған башҡорт түрәләре йыйылған тирмәлә башҡаларына ҡарағанда күп шау-шыулы. Бында ит, ҡымыҙ өҫтөнә ҡаланан ҡайтҡан ҡыйбатлы араҡылар бар. Йәшеренеп эсеүҙән, бара-бара, асыҡҡа күсеп, «яңы



старшина һаулығына» ура ҡысҡырып, сәкәштереп, аяғөҫте ҡалҡып эсәләр. Улар араһында Имай ҙа һүҙсән, уйынсаҡ. Иван Иванович үҙе менән алып килгән гармунсы Сашанан гармун тарттырып та, ҡурайсы Суранан ҡурай уйнатып та, йәштәрҙе алып кереп бейетеп тә зыҡ ҡубалар.

Бындағы был шау-шыу араһында Айбулаттың ҡайһы арала ҡайтып килеп кешеләргә аралашып киткәнен бер кем дә абайламаны. Бейеү ярышында ул бер кемде лә алдына сығарманы. Ул башта, Ҡотлобайға ҡаршы төшөп, Сура ҡурайсы тартҡан «Салҡау» көйөнә бейене. Ҡотлобай Айбулаттың әле бейөргә таянып, әле ҡул болғап, әле аяҡ алмашлап тыпырҙап, бер салҡайып, бер эйелеп, орсоҡ кеүек зырлап әйләнеп яһаған һынылыштарына нисек булһа ла яуап бирергә тырышты. Шунан Айбулат уға бер мыҫҡыллы йылмайҙы ла, гармунсы Сашаға эйәк ҡағып, русса көйҙәр уйнарға ҡушты. Саша «Барыня»не еҙҙөртөп уйнап ебәрҙе. Айбулат баҫып торған еренән ҡапыл һикереп ырғып, бик күп төрлө русса кәлинкәләрҙе һуктыра башланы.

Был тирәгә еткәс, Ҡотлобай биреште, шулай ҙа үҙенен. еңелгәнен муйынына алғыһы килмәне. Иҫереүенән дә ғәрләнеп, уттай ҡыҙған битен Айбулатҡа яҡын килтереп, түште кереп, ҡалай етте, шулай баҫып, уны ҡыҫырыҡлай башланы. Ләкин Айбулат еңгәйне инде.

Ҡунаҡтар Айбулатты яҡлап геүләнеләр:

— Иллә, Айбулат, булдырҙың!

— Молодец, парень, молодец!

Ишек төбендә йыйылышып ҡарап тороусыларҙың берәүһе:

— Әлләлә, Айбулат, шулай! — тип кенә башлағайны, башҡалары ла:

— Әйҙә баҫ, өҙә баҫ та иҙә баҫ! Байсураның малайын! — тип гармун ыңғайына күмәкләп, һамаҡлап алып киттеләр.

Шунан ғына Ҡотлобай үҙенең еңелгәнен аңлап, Айбулатҡа ашарҙай булып аҡырайып ҡараны ла түргә, үҙ урынына, китеп ултырҙы.

Өсөнсө тирмәләге уртаса хәлле, күберәк Айҙаҡайҙан йыйылған ҡунаҡтар араһына Үмәр ҡартты ла ултырттылар.

Өсүҙәндән килгән данлы ҡурайсы Сура менән, Ырғыҙ буйында дан тоғкан йырсы Йәнйегет бөтә тирмә-

ләргә йөрөп уйнап, йырлап, был тирмәгә лә килеп инделәр. Ҡарттар уларҙы шаулашып, әйҙәнләп ҡаршы алдылар ҙа түргә уҙҙырып ултырттылар. Уларға һәр ҡайһыһы үҙ ҡулынан ҡымыҙ эсерергә тырышып, тусТаҡтарын һуҙҙылар.

— Иә әле, Сура, минең ҡулымдан эс1

— Эсегеҙ әле, оҫталар, тамаҡтары^ғыҙ кипкәндер,— тинеләр.

• Оҫталар, уларҙың һәр ҡайһыһынан, хәтерҙәрен ҡал-\ дырмаҫлыҡ берәр' йотом эсеп, эйәһенә кире һуҙғас:

— Иәгеҙ, аҙаматтар, һеҙгә ниндәй көйҙәр йырлайыҡ? — тип һоранылар.

— «Урал»ды йырлағыҙ, «Урал»ды!

— Юҡ, уны беҙ теге тирмәлә ишеттек. «Буранбай»ҙы йырлатайыҡ!

— Түгел, башта башҡортса «Эрзәринйә»не йырлаһындар!

— Булмаһа, үҙҙәре теләгәнде!

Ҡара кәзәкей кейеп, ҡыҙыл билбау быуған, төҫкә һылыу урта йәштәрҙәге Сура түңәрәк бейек ҡама бүркен маңлайынан аҙ ғына артҡа күтәрҙе лә, башын салҡайта биреп, оҙон ҡыр ҡурайының бер башынан өрөп ебәреп, бармаҡтарын уның тишектәренә ҡуйып, «Рзәринйә» көйөн уйнап ебәрҙе. Ул бер ҡат уйнап бөтөп, икенсене башлағанда, Йәнйегет тә үҙенең киң кеслө күкрәк тауышы менән ҡушылды:

Сәҙе генә буйы, ай, бүтэгә,
Ат аяккайҙарын күтәрә,
Иыр йырлау зекер, тәсбих түгел,
Тик аҙыраҡ күңелде күтәрә...

Ҡарттар геүләп көй күтәрҙеләр:

— Ваһай икән, мәрҙәс!

— Вәс, вәс, вәс!

Сәҙе генә буйы, ай, аҡ татыр,
Ат аякҡайҙарын аҡһатыр.
Беҙҙең генә уйнап, көлгән ерҙә
Күк үләндәр үҫмәй ҙә күп ятыр.

— Ана шулай икән!

— Һай, ғүмерҙәр шулай уҙа икән!



6

Гөлйөҙөм бик көсөргәнеп кенә йөрөп маташһа ла, һуиғы көйәнтә һыу килтергәндән һуң,, хәле бөтеп, үҙенең ҡыуышына барып тәгәрәне. Димгел-димгел матҡып тотҡан тулғаҡ, өҙлөкһөҙгә әйләнеп, түҙергә ирек бирмәне.

Ҡунаҡ һыйлауҙын, ин ҡыҙыу мәлендә унын. юғалып киткәнен тиҙ үк абайлаған Рәхимә Мәғфүрәнән:

— Йәш килен ҡайҙа юҡ булды? Бынау йылҡы ите һалған ҡаҙаны ҡайнамай тора бит, ите һерәүләнә ләбаһа индё,— тип һораны.

Мәғфүрә Гөлйөҙөмдөң хәлен әйткәс, Рәхимә рязаһыҙ төҫ менән:

— Бына тапҡан ваҡыт! Улай булһа, үҙен. йәһәтләңкерә, Хәлимә киленде ҡуш! — тине.

Уларҙың һейләшкәнен ишетеп ҡалған Ғәзимә:

— Уй әрпеш, һөнәрһеҙ, эштең ин. ҡыҙыу сағында, «яман һыйыр ярға быҙаулай» тигәндәй...— тип асыуланды.

Гөлйөҙөм төнө буйы аҙапланды. Күҙгә ут күренерлек итеп алған әсе тулғаҡтан унын, маңлайынан шыбыр тирҙәр аҡты. Ул ҡысҡырып ебәрҙе:

— Эй аллам! Берәүгегеҙ ҙә юҡмы ни шунда? Әсәй! Уф, йәнем сығып бара бит!

Унын тауышына бер генә минутҡа килеп киткән әсәһе уның эсен һыйпап ҡараны ла:

—• Юҡ әле, балам, тыуымға әйләнмәгән. Тыныс ҡына ятып тор, ҡысҡырма, сабыр итергә тырыш,— тине.

Ул, Мәғфүрә янына килеп, эш араһында ғына һөйләп алды:

— Белмәйем, ҡоҙағый, бик ҡаты ауырый. Балаһы арҡыры ғына килмәһә ярар ине. Ауыр эштән бик йыш була ул,— тип шикләнде.

Тик тан, атып, ҡунаҡтарҙың байтағы ҡайтып, ҡалған бик яҡындары тирмәләргә таралышып йоҡлап бөткәс кенә, Муйылбикә кейәүенә ҡыуышҡа ҡайтып йөрөмәҫкә ҡушып, үҙе ҡыҙы янында ҡалды.

Тағы ике-ес аҙаплы сәғәт үткәс, иҙәнгә түшәлгән йәшел бесән өҫтөнә тыуған ҡыҙ баланы ҡулына алып, Муйылбикә үҙе кендек инәһе булды. Мәғфүрә менән икәүләп Уны йыуындырып, әсәһенең күлдәк аламаһына биләп

ҙын. бөтә ҡырыҫ уҫаллыҡтарына ҡарамай, ярата ине. Ул уның йомшаҡ һүҙҙәренә, иркәләтеп йылмайыуына бәләкәйҙән күнегеп киткән. Уны күберәк Мәғфүрә еңгәһенә •оҡшата. Уның тураһында күп ваҡытта кешеләргәҙед:

— Төҫкә тиһәң төҫө, буйға тиһәң буйы, ҡылығы тиһәң ҡылығы бар. Имай уның ҡырҡып ташлаған тырнағыша ла торорлоҡ түгел. Шуға күрә лә ул Фаризаның ярлы, етем ҡыҙ булыуына ҡарамай, һигеҙ ауылдан һайлап, атаһын еңеп әйттергә бит. Тик бына бала-сағанан тына бәхете юҡ, алла бирмәгәс, — тигән һүҙҙәрен күп ишеткән. »

Шуның есөн микән, күптән аяҡ баҫмаған был өйгә килеү менән Фаризаны осратыу Айбулатҡа күңелле хәл •булды. Ул уның менән хатта көлөп, шаяртып күреште:

— һау ҡайттым, еңгә, үҙең һау тораһыңмы?

— Бик шәп, бик шәп, ҡәйнеш. Ҡайтҡаныңа ҡан заман, килеп хәл дә белмәйһең. Ҡалай ҙурайып, ир ҡорона тулып киткән булғанһың.

Айбулат яуапҡа аптыраманы:

— Мин ни «Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр хәл белә бара» тигән мәҡәлде еңгәм онотмағандыр •әле, тип көтөп яттым. Ә һин һыуға үткәнеңдә лә боролоп ҡараманың. . . *.

Фариза, тигеҙ тештәрен күрһәтеп, ысын күңелдән •көлдө:

— һин, телдәр, яуап табырһың инде, әйҙә ин. Ҡайным өлкән өйҙә. Ағайың Фйҙә юҡ, Сәргәйҙә. Самауырға һала һалайым, оҙаклап киттем. — Ул, еңел атлап, соландың арғы осондағы ишектән аш өйөнә сығып китте.

Айбулат ҡалын кейеҙҙәр менән көпләнгән еҙ тотҡалы ауыр ишекте тартып асып өйгә инде. Ләкин тупһанан •аша атлау менән уның төҫө ҡомһарҙы. Кетөү ҡатыш ниндәйҙер күңелһеҙ бер тойғо менән аҡрын ғына сәләм •бирҙе.

Байрамдағы кеүек матур итеп йыйыштырылған был өлкән ейҙөң түрҙәге тәҙрәһе янында Ныязғол биттәре һарғайып бөткән әллә ниндәй бер ҡалын китапты аҡтарып, нурҙары ҡайта башлаған күҙҙәрен ҡыҫып, үҙенән алыҫ тотоп укып маташа:

«...Әгәр кем ирсә, тигән, үҙенең малы һәм мелкәтенең, тигән, һәр дайым артып барғанын теләсә, ул кеше үҙеиең байлығының, тигән, ундан бер өләщөн, йәгнн, тигән, ғөшөрөн, ә... тигән, саҙаҡа итеп биргәй. Ул. бәндәнең



донъяда йөзе аҡ булып һәм ахирәт көнөндә дә йезөндә> иман нуры балҡып ҡәбердән ҡубарылғай, тигән... Пәйғәмбәремез Мөхәммәт салла аллаһы ғәләйәссәләм димеш дерки... тигән...»

Урындыҡҡа түшәлгән ап-аҡ кейеҙҙәр, әйләндереп һалынған йәшелле-күкле сатин юрғандар, күпертеп өйөлгән эре мендәрҙәр араһында, ҡара бәрхәт кәзәкейе,. балыҡ һүрәтле көмөш ҡаптырмалары, йондоҙло ҡара бәрхәт таҡыяһы менән, ул үҙен тәхеттәге хан кеүек хис итеп ултыра. Ул, илле бишкә яҡынлашҡан булыуына ҡарамайынса, әле йәштәр кеүек ныҡ. Сәсендә бер бөртөк тә аҡ гоҡ. Түңәрәк һаҡалына сал кермәгән. Ҡаштары ла ҡап-ҡара булып япырайып ята. Еп кеүек ке^ә ҡалдырып ҡырылған нәҙек мыйығы ла ҡатындар ауыҙына оҡшаған йоҡа ирендйре еҫтөндә ҡарайып һыҙылып ята.. Ул китабын яйлап түбән тешөрҙө лә, ашыҡмай ғына башын ҡаҡайтып, танау буйлатып Айбулатҡа күҙ һалды. Шунан һуң яйлап һорау биргән кеүек итеп:

— Вәғәләйкүмәссәләм, — тине. — Ә, һин икәнһең,, Айбулат батыр, йә, нихәл? — Ул, китапты ҡулына кире алып, ауыҙ эсенән генә йыбырҙап уҡырға тотондо.

Айбулат:

— Бик шәп әле, ағай, үҙең һау тораһыңмы? — тине-Уның «батыр» тигән мыҫҡыллы һүҙенән ғәрлекле уңайһыҙланып, башҡа өндәшмәй тороуында булды.

Ул былай тороуҙын. килешмәгәнен белһә лә, бәләкәй малай һымаҡ, кире сығырға ла булдыра алманы. Юғари уҙып кейеҙ ситенә ултырыр ине, Ныязғол: «Әйҙә, ултыр», — тимәгәс, ҡалайтып әрһеҙләнеп барып ултыраһың. Бер килгәндә эште өҙөп ҡайтмаһан, тағы шулай итеп баш һалып килергә кәрәк бит тип уйланы ул.

Ул шулай уйланып торғанда, Ныязғол тағы мөңгөрәй башланы.

Айбулат быны үҙенә өндәшәме икән тип ялт итеп әйләнеп ҡараһа, улай булмай сыҡты. Ныязғол тағы уҡый ине:

«...Әгәр-дә ки аның, ул кешенең, мөлкәте һәм дә байлығы боғдай, арпа кеби иген жимешләрендин булса, ун батма-нға бер батманын хәергә биргәй, тигән... Әгәр дә> ки ул байлыҡ хөрмә жимешләрендин, алмадин һәм, тигән... ә ... ни... ни... тигән... инжир, тигән (уныһы ниндәйемеш була икән тағы, мулланан һәм Имаметдиндән һорарға кәрәк әле...) тигән...».

һалдылар ҙа Гөлйөҙөмдөң һау ҡотолғанына ҡыуаныштылар.

— Ярай инде, иҫән-һау, башынан башҡа булды, хәйерле булһын!

— Ҡыҙ бала булған икән шул. Ҡыҙҙың тулғағы шулай оҙаҡ, шулай ҡаты була ул.

—• Ҡояш сыҡҡанда тыуҙы бит әле, Көнбикә тип исем ҡушырбыҙ.

Мәғфүрә тиҙ генә югереп барып, Айбулатты уятып, һөйөнсө һораны.

— Запас, һөйөнсө, ҡыҙың бар! һөйөнсө!

Тал төбөндә күҙҙәрен йоҡо алмай борсаланып яткан Айбулат тиҙ үк һикереп торҙо.

— һөйөнсөһөнә бер яулыҡ! — тип көлде.

Уның Гелйөҙөмдө барып күргеһе килһә лә, ғәҙәт буйынса килешкән эш булмағас, урынына кире ятты.

Мәғфүрә бер оло туҫтаҡ ҡалған һурпаны йылытып, ҡатыҡлап алып Гөлйөҙөмгә зсерҙе лә Муйылды ашыҡтырҙы:

—• Ҡоҙағый, әйҙә, килен ятып торор. Беҙ анау һауытһабаларҙы тегеләр тормаҫ борон йыуа һалып алайыҡ. Хәлимәләр һыйыр һауырға киттеләр,— тине.

## 7

Ныязғолдоң был старшина булыу байрамы өс көнгә һуҙылды. Өсөнсе кис, ҡунаҡтар йоҡлап бөтөп, йәйләүҙе тынлыҡ баҫты. Көн болотло, ай яҡтыһы бик тоноҡ ҡына төшә. Айбулат үҙенең йылҡы көтөүен Ырғыҙ буйындағы ҡылғанлы типһенгә таратып ебәргән. Көтөү, ошо тынлыҡка сумған һымаҡ, өйөр айғырының һирәк-һаяҡ ушҡырыуынан бүтән тауыш сығармай.

Айбулат янына йәйләүҙәге Ныязғол туйынан бигерәк, уны күргеләре килеп, дуҫ-иштәре килделәр. Улар хәҙер бетәһе лә, бәләкәй саҡтағы ат һаклаған малай саҡтарын иҫкә тешөргән һымаҡ, тау итәгенең һәҙәгенә күмәкләшеп ултырғандар ҙа, бик ҡыҙыҡлы һәм күңелле хәбәрҙәр һөйләшәләр. Тауҙың текә яҡ ҡалҡыуында Истебай ултыра. Ул ҡолаҡсынын ҡулына нығ ҡыҫып тоткан да, Айбулатҡа текләп, уның һәр бер һүҙен йотолорҙай булып тыңлай. Асатай ҡырын тешөп яткан. Бая ғына шаян бейеү көйҙәре, моңло йыр кейҙәре уйнаған ҡурайсы Сура -ҡурайын оноткан һымаҡ, артына ташлаған да, ҡулдарын ҡаушырып ултырып, Айбулатты тыңлай, Хөсәйен йөҙтүбән төшеп яткан. Йәнийегет менән ҡатар ултырған ес кеше уларҙы әйләндереп теҙелгәндәр.

Айбулат өсөнсе көнгө, Расторгуев утарында, Михаилдә йыйылышып һөйләшеп ҡайткан хәбәрҙәрҙе үҙенең ошо иптәштәренә һөйләй ине.

Айбулаттың ошо хәбәрен ҡеүәтләгән һымаҡ, көньяҡта, Расторгуев утары артындағы тау итәгендә, бик ҙур ут ялҡыны күтәрелде. Быны башта күреп ҡалған Кәнйегет:

—• Бәй, ана, ут сыкты ла инде,— тип ҡыуанып ҡысҡырып ебәрҙе.

Улар бөтәһе лә, урындарынан. һикерешеп тороп, янғынды ҡарай башланылар. Ләкин уларҙын, береһе лә, башҡа ут сыҡкан ваҡыттарҙағы һымаҡ, һүндерергә югермәнеләр. Бөтәһе лә өндәшмәй текләнеләр.

Был тынлыкты Асатай боҙҙо:

—> Бына, исмаһам, Михайлалар шәп итә. Молодец!^ Ул шулай ҡапыл ҡысҡырып иптәштәре яғына боролдо.— Ә беҙ һун, шулай итеп ауыҙ асып ҡарап торайыҡмы ни, ә, Айбулат ағай?

Айбулат бик т^шыс яуап бирҙе:

—• Әле генә ошо турала һейләштек тәбаһа, ниңә шул тиклем ҡысҡыраһың һуң?—тине.

— Бик дөрөҫ эш, туғандар,— тине Сура.— Әлегә ҡысҡырышып йөрөүҙең бер ҙә кәрәге юк. Акрын ғына, яйлап ҡына «ҡыҙыл әтәсте» йомошҡа ҡушырға кәрәк,— ул ерҙә яткан ҡурайын ҡулына алды ла, уйнарға әҙерләнгәндәге кеүек, ауыҙына ҡабып, хупылдатып өрөп ҡуйҙы.

Йәнийегет унан да былай йәнләнде:

— Булды, Моратша сусҡаның минен ер кәртәмә көслөк менән сығып һалған ейөнөң көлен күккә осормаһаммы! Тап эшем шул ғына булһын! — Уның күҙҙәре ҡыҙып ялтырайҙар ине.

Улар бик ҡыҫка ғына хушлаштылар.

Айбулат кетөүҙе Асатай менән Истебайға тапшырҙы ! ла Йәнийегет, Сура менән бергә тирмәгә китте. *

Ҡунаҡтарҙың ҡалғандары ла, шулай иплэп кенә ҡайтыщ, бер кемде лә уятмаҫка тырышып, йоҡларға яттылар.

## ЙӨҘӘК АШЫ

1

Марттың үткер еле, ҡар битен ашап, ваҡ ҡына шаҙ-ралар яһай, белендермәй генә иретә. Ҡояш нурҙары тәҙ-рә үтә йылы һирпәләр. Өй артындағы муйыл ҡыуағының ҡыу ботаҡтарына теҙелгән биш-алты турғай, ниҙер су-тырлашып, бер осоп, бер ҡунып, сыр-сыу киләләр. Өй алдының көньяҡ мөйөшөндәге яңғыҙ өйәңке ботағына ҡағылған сыйырсыҡ ояһына ла ҡайһы бер турғайҙар, парлашып инеп-сығып, ояны ошонда, әҙергә ҡорғанда нисек булыр икән тигән һымаҡ, сыулашып һөйләшәләр. Күрәһең, йәшерәктәренен, был яҡшы ояға күҙҙәре тешһә лә, олораҡтары риза булмайҙарҙыр, йә үҙҙәре шунда инеп ултырғылары килеп талашаларҙыр. Кем белә инде, улар әллә былтыр яҙ булып үткән ваҡиғаларҙы хәтерҙә-ренә төшөрөп, был эштең файҙаһыҙ булыуын иҫбат итҙ торғандарҙыр. Сөнки улар былтыр ҙа шулай иртә генә килеп, ошо сыйырсыҡ ояһына урынлашып ҡарағайны-лар ҙа, сыйырсыҡтар былтыр көҙ киткән ерҙәренән ҡай-тып килеү мечән уларҙы сырылдатып ҡыуып сығарҙы-лар. Ә бит турғайҙар былтыр ни хәтлем күмәктәр һәм ниндәй туктар ине. Быйыл уларҙың күбеһе ҡыштың әсе һыуығында астан ҡырылып бөттө. Әле лә ана бер нисәү-һе ҡанаттарын һәлберәтеп, баштарын эскә тартып, көш-кәйеп кенә ултыралар, бахырҙар. Ашарға ем юҡ — ас-лыҡ. Былтыр ҡыш тауыҡтарға һибелгән емдәрҙән, ик-мәктән булһын, бик мул өлөш тейә торғайны. Ә быйыл ул тауыҡтарҙын. үҙҙәре лә юҡ, хужалары ашап бөткән-дәр уларҙ-ы.

Юлия тәҙрәгә ҡарап уйлана. Ул ошо турғайҙарҙың эштәрен дә ҡарай, ҡыйыҡтан тамған һирәк тамсыларға ла күҙ һала. Ләкин Юлияның уйҙары әллә ҡайҙа алыҫ-талар.

Уның күҙ алдына үҙенең тыуған ауылы, унда үткәр-гән бик ауыр балалыҡ көндәре килә. Ул атаһын хәтерлә-мәй. Сөнки ул, атаһы үлгән сакта, барлығы ес кенә йәш-тә ине. Үҙе иҫ белгәндән алып, Юлия ағаһы Григорийгә бауыр баҫкан, гел } ның менән бергә йәшәгән. Бына ошо-ноң кеүек яҙғы йылы көндәрҙә Юлия, тышта еүеш ҡарҙа батып уйнап, һыуланып инһә, әсәһе ороша, ә Григорий яҡлаша торғайны. Әсәһе ҡыҙына һыуыҡ тейеүҙән ҡурк-



ҡандыр инде. Хәҙер әсәһе ҡайҙалыр инде, ул да асығамы якән. Нисо хатына бер яуап алғаны юҡ. Ул, бәлки, тағы кешеләргә няня булып киткәндер, бәлки, асыҡмайҙыр ҙа, балалары есөн ҡаты ҡайғыралыр инде. Бигерәк тә Григорий уныщ ҡарт йөрәген һыҙлата торғандыр.

Григорийҙен, алыҫ Нарымский крайына һөргенгә оҙа-тылыуына ла оҙаҡламай дүрт йыл тула. Март айы аҙа-ғының ошондай еүеш, ҡар ҡатыш ямғырлы көнө ун ике иптәше менән бергә уны конвойҙар Самар вокзалынан алып киттеләр. Григорий оҙатыусыларға:

— Ярай, дуҫтар, туғандар, ҡайғырмағыҙ, беҙ оҙаҡҡа китмәйбеҙ, был беҙҙең ваҡытлы сигенеү генә,— тине, үҙе вагонға менеп киткәнсе, ҡул һелтәп хушлашты.

Юлия башта үҙенен, был яҡ ауылдарға бер ҙә килге-һе килмәгәнен дә уйлап алды. Үҙе телен белмәгән башҡорт халҡы, етмәһә, крәҫтиән хужалығы эше. Бында масса араһында партия ҡушкан подпольный эштәрҙе алып барыуҙа үҙен бер нисек тә эш күрһәтә алмаҫ кеүек булып хис итә ине ул. Уның шулай икеләнеп, үҙенә-үҙе ышанмаусылыҡ менән интеккән сағында иптәш Никитин уға аталарса теплө аҡыллы, практик тәжрибә менән һу-ғарылған большевистик кәңәш бирҙе:

— Юлинька, мин һине бик яҡшы аңлайым. Үҙең ҡай-нап үҫкән, үҙен, өсөн бер туған булып бәткән Трубочный заводты ла, Самарҙы ла ҡалдырып киткең килмәй инде. Ләкин хәҙерге моменттә Самарҙағы эшселәр араһында эш алып барыу түгел, ҡаланың үҙендә ҡалырға ла һиңә ярамай. Күреп тораһың, беҙҙен, партия члендәренә ҡу-йылған тоҙаҡтар әле бик көслө. Бишенсе йылғы «үтә революционер» булып күкрәк ҡағып йөрөгән бик күп бәндәләр кире реакцияға боролдолар. Уларҙың күбеһе либералдар йырын йырлайҙар, ҡайһылары шпионлыҡ эше менән тамаҡ туйҙыралар, кисә дуҫ күреп йөрөгән иптәштәрен бөгөн жандармдарға тотоп- бирәләр, үҙ тире-ләрен һаҡлайҙар.

Юлия, уға ҡаршы төшөп:

— Ә һуң, Никитин иптәш, һеҙ үҙегеҙ ҡалаһығыҙ, Вася лә ҡала бит әле,— тип ҡарағайны.

Никитин уға:

— Юлия, әйткәнде тыңла, һине «ҡара исемлеккә» кертеүҙәре тураһында асыҡ мәғлүмәтебеҙ бар. Был — факт. һин барасаҡ волость ауылы икегә — яртыһы рус-тарға, яртыһы башҡорттарға бүленә. Был һиңә бик уңай-

лы буласаҡ. Шунан килеп, Юлия, хәҙерге көндә беҙҙең партияның тоткан юлын һин беләһең: революция эше туктalып торорға тейеш түгел. Тәрән подпольенән алып, мөмкин булған бөтә донъя легаль ойошмалар аша ла эште алып барырға, халыҡтың ваҡытлыса ғына төшкән революцион рухын күтәрергә кәрәк. Хәҙерге ваҡытта крәҫтиәндәр араһында Столыпин сығарған отруб законына ҡаршы булған күтәрелеш көсәйә башланы, бәрелештәргә барып еткән ерҙәр бар. Ә беҙҙең большевистик ярҙам уларға, ҡараңғы төндә яҡтыртҡан факел һымаҡ, кәрәк. Һинең медсестралығың бик ҡулайлы эш. Фамилиянды Волгина көйө ҡалдырырға ярамаҫ. Уны үҙгәртеп, һиңә паспорт һәм рекомендация хаты яһап бирербеҙ,— тип ейрәтте.

Хәҙер Юяияның бында килеп эшләй башлағанына инде йылдан артты. Тәүҙә ул волостең рустар яҡ яртыһында медсестра булып эшләй ине. Хәҙер «Кызыл крест» асҡан ашханаларҙа медсестралыҡ эшен алып бара. Ул ашхана башҡорттар яҡ яртыла булыу сәбәпле, Юлия торорға ла бында күстё. Хәҙер ул бындағы халыҡ менән шундай өйрәнешеп китте, уларҙы үҙ туғандары кеүек күрә. Улар ҙа Юлияны бик яраттылар. Былай ҙа ҡунаҡ һөйеүсе кешеләр, Юлия кеүек яғымлы, ярҙамлы ҡыҙҙы ысын күңелдән хөрмәтләйҙәр. Ниндәй генә кәңәштәре булһа ла, уға баралар. Кем генә сирләп китһә лә, уға мөрәжәғәт итәләр. Тирә-яҡ ауылдарҙан да дауаланырға йөреүселәр була тора. Ундайҙар Юлия дарыуынан тәҙәлеп китәләр ҙә үҙ ауылдаштары араһында: «Бына, исмаһам, бер духтыр. Бер генә ҡарағайны, бер генә шешә дарыу эсергәйне, йөрәгемдең сире ҡул менән алып ташлағандай булыш баҫылды»,— тиҙәр ине.

Юлия, үҙенең ошо уйҙарын бүлеп, өй хужаһының ҡатыны Шәмсиәгә боролоп ҡараны. Шәмсиә, ҡулындағы орсоғон бер ҡулында юғары тотоп, икенсе ҡулы менән һауала зырлатып әйләндереп ебәреп, йомшаҡ һарғылт дөйә йөнөн һуҙып-һуҙып иләй ине.

Юлия баштараҡ, башҡорттарҙың ҡабаға бәйләмәйенсә, ҡулдарында ғына тотоп иләүҙәрен бик сәйер күреп көлә торғайны. Хәҙер инде ул үҙе лә шулай иләй белә. Былай итеп, башҡорттар әйткәнсә, «ҡаҙакса иләү» тиҙерәк тә була һымаҡ тойола.

Шәмсиә, Юлияның үҙенә ҡарап торғанын абайлап, уға көләм:һөрәп күҙ һирпте лә, үҙен ғәйепле һымаҡ итеп:



—' Эй, Юля, һиңә әйтергә лә онотҡанмын, Сәғди ағайың иртәгәһеҙ ҡайта алмауын һиңә әйтергә ҡушып китте. Ерле онотҡанмын,— тине.

Юлия был хәбәргә башта аптыраңҡырап ҡалды:

— Нисек, миңә бер нәмә лә әйтмәнеме ни ул?

—• Ул һиңә әйтеп китәм тип, ике тапҡыр волость өйәнә барҙы. Ни эшләптер, һине осрата алмаған. Ә бөгөндән ҡалһаң — «юл өҙелә, эш тарҡала», тине. Һиңә лә шулай итеп, еҙәп әйтергә ҡушып китте.

—• Ә...— тине Юлия, уйланып.— һыбай ғынамы?

—• һыбай ғына. Унан арбала килербеҙ,— тине.

—• Ярай улай булһа, бик яҡшы. Шәмсиә, мин ашханаға барып киләйем дә сәй эсербеҙ. Аҙаҡ аръяҡҡа, Украинкаға, сығып килергә кәрәк булыр. Аптеканан күп кенә дарыуҙар алып ҡайтырмын.

—< Ярай, ярай, Юля, бар. Мин сәй әҙерләп торормон.

Һыртҡы урам тып-тын. Был урамдың ике яғы буйлап ярлыларҙың балсыҡтан эшләнгән тәпәш кенә өйҙәре теҙелгәндәр. Был өйҙәрҙәге кешеләр, ояһынан сығырға ҡурҡып ятҡан йомрандар һымаҡ, аслыҡтан, һыуыҡтан, тышҡа сығырға ҡурҡып, бөршәйешеп ултыралар.

Юлия ошондай өйҙәрҙең бишәүһен үткәс, ауылдың урта урамындағы ашханаға алып бара торған тар тыҡрыҡҡа боролдо ла уның арғы башынан сығып килгән Ишбулдыны күрҙе. Был — һигеҙ-туғыҙ йәштәрҙәге бер етем малай ине. Ул бик йонсоу. Арҡаһы, салғыйҙары туҙып, ялбырап бөткән тиртуны асылып, Ишбулдының ябыҡлыҡтан һейәктәре сукайып беленеп торған түшен күрһәтә. Уның күҙҙәре аслыҡтан шешмәкләнгән, ҡарашы ла ауыр.

Ишбулды ҡулындағы балсыҡ киҫәге һымаҡ ҡап-ҡара бер нәмәне ҡабып тешләп ҡуя ла икенсе ҡулындағы тутығып бөткән ҡара ҡалай һауыт эсенә күҙ һала. Күрәһең, ул был йөҙәк ашын да хәҙер үк күтәреп эсеп ҡуйырға уйлай ҙа, аяҡтарына үтеп барған һыуыҡҡа сыҙамайынса, алға ынтыла.

Ишбулдының ата-әсәһе, бер һеңлеһе ғинуар уртаһында уҡ астан шешенешеп үлделәр. Ә февр*алдә генә асылған был «Ҡызыл крест» ашханаһы ла күп файҙа күрһәтә алманы. Уның төрлө иген ҡалдыҡтарынан, кукурузлан бешерелгән икмәге лә, күгәргән тары ярмаһынан тоҙһоҙ һыуҙа бешкән ейрәһе лә аслыҡҡа ныҡ борлоҡҡан тәнде нығыта алмайҙар.

Ошо ашхана өҫтөнән медсестралыҡ исеме күтәреп тә, уны аҙ ғына ла яҡшыртыуға табан үҙгәрттерә алмауы өсөн Юлия үҙен бик ныҡ ҡыйынлыҡта тоя ине. Ул был турала начальствоға әллә нисә тапҡыр яҙып та, барып та, һөйләшеп талап итеп тә ҡараны, ләкин уға һәр ваҡыт бер генә яуапты бирҙеләр: «Ниндәй аҙыҡ ебәрәләр, шуны бешертәбеҙ».

Юлия Ишбулдының -кулындағы икмәген, һауытындағы өйрәһен ҡараны ла:

— һин, туғанҡай, был икмәкте ашама, эсең ауыртыр. Әйҙә, беҙгә бар ҙа, миң һиңә унда үҙем ҡатыҡ эсерермен, йәме,— тине.

Ишбулды, әле икмоккә, әле Юлияға ҡарап, ҡарайып ярылған яланаяҡтарын алмаштырып, ҡарлы ерҙән ҡара батҡаҡлыраҡ ергә күсте лә,ҡуҙғалманы.

— Иә, ниңә туктаның, бар, беҙгә бар!

—• һин юк бит.

— Хәҙер ҡайтам, Ишбулды, бар тиҙерәк, һыуыҡ! —• тине Юлия. Шунан ғына Йшбулды ҡуҙғалып китте.

Уның артынан ҡарап ҡалған Юлиянын. йәлләү ҡатыщ асыу менән төҫө боҙолдо. Тимәк, аслыҡ үҙенең тырнаҡтарын был баланьщ тәненә лә батыра башлаған икән, тип әрнеүле уйланды ул. Уның кисәге икеләнеүенән бер нәмә лә ҡалманы. «Ни булһа ла булыр, мәсьәләне тиҙерәк хәл итергә, ҡулдан килгән ярҙамдың береһен дә аямаҫҡа»,—тип ҡарарланы.

2

Уның кисәге икеләнеүе ошо бер ҙур мәсьәләгә бәйле ине. Ул мәсьәләне ауылдың уға яҡынлашып, дуҫлашып бөткән унлаған кешеһе Юлия алдына ҡуйҙылар.

һәр ваҡыт Сәғди янына килеп йөрегән Янғол кисә кис менән дә уға инеп ултырҙы. Ул килеп инеү менән:

— Здравствуй, Юливанна! — тине.

—• Здравствуй, здравствуй, Янгул!

Янғол кеҫәһенән махорка сығарып тәрөргә булғайны, ҡағыҙы булмай сыҡты. Юлия уға бер бит ҡағыҙ табып бирҙе:

—• Ну, ни хәлдәр бар, Янгул, бөгөнгө аш нисек?

Янғол Шәмсиәнең усаҡтағы күмеп ҡуйған ҡуҙын ҡутарып сығарып, тәмәкеһен тоҡандырҙы ла Сәғдигә лә



һуҙҙы. Шунан ул Юлияға бик тура текләп көләмһөрәне лә үпкәле тауыш менән яуап бирҙе:

—. Юливанна, асыҡкас, ни булһа ла йотток инде. Ә минен Ҡашҡар ҡабып та ҡараманы.

Сәғди ҙә ҡушылды:

—• Аш тип исем ҡуша торғаны ла юҡ инде. Эт тә, сусҡа ла ашамаҫ, ашаһа ла, аш булмаҫ.

—• һуң ни эшләйһен, инде, Сәғди ағай? Мин начальстволар менән бик күп ирәгештем, ә улар ҡыймылдамайҙар ҙа.

— һиңә, Юлия Ивановна, ни эшләргә лә кәрәкмәй. һин тик беҙгә, беҙҙен, ойошкан кәңәшебеҙгә генә риза бул. Беҙ мөгәзәйҙәге игенде алабыҙ ҙа өләшәбеҙ. Асыҡҡан халыҡтщ бөтәһе лә шуны ғына һөйләй,— тине Сәғди.

һәр ауылдьщ үҙенең төрлө кәрәк-яраҡка, халыҡ файҙаһына тотолорға тейеш булған иген мәгәзәйе бар. Унда һәр йыл һайыш кешеләр үҙ игендәренән елөш сығарып һала баралар ине. Үткән көҙ мөгәзәйгә өҫтәп һалыу түгел, өйгә итәкләп алып ҡайтырлыҡ та иген үҫмәне. Көҙҙән сәскән арыш та ужым булып, ҡурпылап йәшәреп китә алманы. Ә яҙғы арыш бер ҡарыштай ғына ҡалкты ла, өҙлөкһөҙ өргән ҡоро ел көсөнә башын эйеп, саңға әйләнеп борҡолдап яткан күкшел тупраҡка һынып ҡойолдо. Шунан бирле кем ни етте, шуның менән тамаҡ ялғаны. -Малы бар малын ашаны. Хәллеләр, байҙар үҙҙәренең элекке йылғы запастары менән йәшәнеләр.Малы ла, игене лә булмаған иң ярлылар астан ҡырыла ине.

Ошо астан интегеүселәр мөгәзәйгә һалынған игенден, хәҙер ошондай кәтөлмәгән хәлдәрҙә файҙаланылырға тейеш икәнлеген һейләп ныҡышалар. Старшина, старосталар был турала үҙҙәренә ҡуйған мәсьәләне ҡырҡа кире һуктылар, орлоҡка торһон, тинеләр.

Шунан улар Юлия Ивановнаның (ул «Ҡыҙыл крест» вәкиле булғанлыҡтан) начальствоға мөрәжәғәт итеүен һоранылар. Юлияның был мөрәжәғәте лә бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Земначуға: «Был хәҙер неприкосновенный сәсеү орлоғо, һис тейергә ярамай»,— тип яуап ҡайтарҙы. Был аҙаҡкы яуап халыҡтщ асыуын сигенә еткерҙе.

—> Сәсергә, имеш! Кем бай, шул сәсә. Уларҙыщ орлоҡ запастары үҙҙәренеке күп. Ә ярлылар ҡырылып бөтөп бара!

— Тейергә ярамай, имеш! Беҙгә генә тейергә ярамай. Ә йылдың-йылы байҙар үҙҙәре файҙалана,— тип ҡыҙҙылар.

Хәҙер инде улар, һис бер нәмәгә ҡарамайынса, мөгәзәйҙе үҙҙәре ватып аласаҡтарын әйттеләр.

Юлия бына шуның өсөн был кендәрҙә бик оҙаҡ уйланды. Уларҙың кәңәшенә ҡушылып, мегәзәйҙе асырға кәңәш итһәң, күп кеше язаға тартыласаҡ. Әгәр кәңәш бирмәй, кире ҡаҡһаң, йеҙләгән кеше астан ҡырыласаҡ. Сәғди менән Янғол хәҙер Юлияға ҡаты үпкәләү менән ҡарай башланылар. Юлия уларға ҡаты язаға эләгеү ҡурҡынысы тураһында әйткәс, улар ҡул ғына һелтәнеләр.

— Эй, барыбер үлергә, ятып ҡалғансы, атып ҡал,— тинеләр.

Бегөн Янғол бик асыулы ине. Юлияның һәр һүҙенә тигәндәй дәлил табып ҡаршы яуаплай, үпкәләй.

— Юлия, үҙең бит һаман да: «Ҡала эшселәре кеүек бер һүҙле булып, бер табандан тороп көрәшергә кәрәк. Шунда ғына эш уңышлы була»,— тип өйрәтәһең. Ә хәҙер эштә үҙең оҙаҡҡа һуҙаһың,— ти.

Сәғди уны ҡеүәтләй:

— Юливанна, һин, әгәр ҡурҡһаң, ҡатышма. Беҙ ҙә ойошоп тормайбыҙ, һәр кем үҙе барыр ҙа үҙенә урлап ташыр.

Юлия Сәғдиҙең был һүҙҙәренән көлгөһө лә, ғәрлеге лә килеп ҡыҙара.

— Юҡты һейләмә, Сәғди ағай, ҡурҡыу тигән ғәҙәт минең тәбиғәтемдә юҡ. Мин ҡурҡһам, тик һеҙҙең бөтәгеҙҙең әрәм булыуығыҙҙан ғына ҡурҡасаҡмын!

— Уныһын да яҡшы беләбеҙ,— ти Сәғди.

— Белгәс, ярай. Ә ул иген һеҙгә барлығы бер айлыҡ аҙыҡ ҡына бит, ә артабан?

Улар тағы киләсәктәге мөмкинлектәрҙе һанайҙар:

— һин, Юливанна, уның өсөн аптырама. Был аҙыҡ бер генә айға етһен, ти. Шунан ана тора яҙ ҡояшы. Тау биттәрендәге ҡарҙы оҙаҡламай ҡояш ашап бөтә лә, шундағы йомрандар ояларынан сыға башлай. Тук сағында ғына унан ерәнгән булабыҙ. Ә асыҡҡан саҡта йомран да бик яҡшы аҙыҡ.

— Унан һуң ҡар бөтөү менән үк тәмез моронлап сыға. Уныһы үҙе бер үҙәк ялғарлыҡ аҙыҡ була. Уның арты ҡуҙғалаҡ та ҡалҡа башлай,— тип өҫтәне Янғол.



Уларҙың шулай ныҡышыуҙары Юлияны ҡырҡа ҡарарға килтерҙе.

Ул үҙенең ошо икеләнеү ҡыйынлығын үткәргән сағында, ағаһы Григорийҙе лә күҙ алдына килтерҙе, уйы менән булһа ла уға кәңәш итте. Ә Григорий һәр ваҡыттағы үҙенен, яй һәм һалмаҡ һүҙе, кәләс йөҙө менән Юлиянын, яурынына ун, ҡулын һалып һөйләгән һымаҡ булды:

«һин, Юлинька, бер ваҡытта ла икеләнеп торма. Уфтанып ултырма. Халыҡ файҙаһына кәрәкле яуаплы эш күҙ алдыңа баҫҡан икән, һин уны ҡайғы итеп ҡаршы алма, ә боевой задание итеп ҡаршы ал. Халыҡҡа кәңәш ит, өйрәт, ҡайғыларын таратырға ярҙам ит, уларҙын, ауыр хәлдәрен күрәһең икән, уларҙы унан ҡотҡарырға ҡырҡа юлдар эҙләп тап та мәсьәләне тиҙ хәл итеү яғын ҡара. һин бит медсестра. Бишенсе йыл йәйендә, беҙҙең восстаниеләрҙә жандармдар беҙҙекеләрҙе атып яралағас, һин әле бәләкәй генә көйөнсә лә күпме ашығыс ярҙамдар эшләнең. Хәтерлә әле. Хәҙергә беҙ бергә түгелбеҙ, ләкин беҙҙең эштәребеҙ, беҙҙең большевистик көрәшебеҙ һәр ерҙә, һәр ваҡытта бергә ул. һиңә астан үлергә яҡынлашҡан ярлылар ҡул һуҙа икән, был уларҙың беҙҙең эшкә булған ҙур ышаныстарын күрһәтә. Туғаным, көрәш, бирешмә. Халыҡ һине онотмаҫ».

Ошо уйланыуҙары, ағаһы менән булған хыяли кәңәштәре Юлияның күңеленә ҙур еңеллек бирҙеләр. Ул, ошо хыялына яуап итеп, Пушкиндең «Себергә» шиғырын моңло, баҫынҡы, ләкин өмөтлө ғорурлыҡ биргән тауыш менән уҡып ҡуйҙы.

Сәғди, мәсьәләнең практик яҡтарын юлға һалыу өсөн, ауылдар ара^һында бәйләнеште нығытырға сығып китте.

## 3

Сәғди үҙе менән бергә ҡуйы мыйыҡлы, оҙон буйлы мыҡты бер кеше алып килде.

Улар икәүһе лә Юлияға ҡул биреп күрёштеләр.

Шәмсиә, ашыға-ашыға, уларға аш әҙерләй башланы. һүҙ, ғәҙәттәгесә, яҙғы һауа, бысраҡ юл тураһында башланды. Юлдьщ бик ауырға әйләнеп, ҡайһы урындарҙа ап*арынын, билдән батып киткәнен һөйләп алдылар ҙа бысранған әҫ-баштарын таҙартырға керештеләр, ҡулдарын йыуҙылар.

Ситтән килгән ҡунаҡ сәй янына килеп ултырғанда, бүркён генә түгел, таҡыяһын да сисеп ташлап, сал ингән сәстәрен ике ҡуллап артка һыйпап килеп ултырҙы. Уның был ҡыланышы Юлияға ғәжәберәк тойолдо. Ул үҙенең был яҡка килгәне бирле танышып ҡатнашҡан, дуҫлашҡан кешеләре араһында быңдай руска оҡшаған кешене осратҡаны юҡ ине. Был кешенең руссаны таҙа, иркен һөйләүе лә, үҙен ҡалалағы эшселәр кеүек тотоуы ла Юлияны уға һынаулы ҡараш ташларға мәжбүр иттеләр. Ул, үҙенең был ғәжәпләнеүен белдермәҫкә тырышып, иғтибарһыҙ ғына күҙәткән һымаҡ булһа ла, ҡунаҡ та үҙ сиратында Юлия Ивановнаға һорау ҡатыш йылмайыулы ҡараш ташланы:

—* һеҙ, туташ, был ниндәй беҙҙең руска оҡшаған башҡорт икән тип, аптырайһығыҙ шикелле,— тине.

Юлия, уңайһыҙланып, аҙыраҡ ҡыҙарҙы ла дөрөҫөн әйтте:

—• Эйе шул. Бына ҡарап торам да русса һөйләүегеҙ ҙә бик яҡшы.

• —' Шунан, яланбаш сәй эсәм!—Ҡунаҡ ҡалын тауыш менән көлөп ебәрҙе.

Уның был һиҙгерлеге, күптән таныш, хатта дуҫ кеше кеүек ябай мөғәмәләһе Юлияны бөтенләй күңелләндерҙе.

Ул да көлөп яуап бирҙе:

—' Уныһы ла бар. һеҙҙең халыҡ яланбаш йөрөүҙе, мыйыкты оҙон ебәреүҙе бик ҙур гөнаһка һанай бит,— тине.

Улар, шулай итеп, сәйҙе иркен әңгәмәләр менән үткәрҙеләр. Хәҙер инде Юлия был кешенең Айҙаҡай ауылынан икәнен, уның бала сағынан уҡ рус араһында йылҡы көтөүсеһе булып, действительный хеҙмәтте лә үткәреп, рус-япон һуғышында йөрөп, Порт-Артурҙа яраланып, Красноярскиҙә лазареттә ятҡанын, унан сығыу менән, ҡалалағы ҡоралды восстаниеләрҙә ҡатнашып, бик күпте күргән, күпте ишеткән, күпте белгән революцион настроениеле бер кеше икәнен белеп алды. һөйләшә торғас, Юлия был кешенең Григорий менән дә таныш, хатта бер ваҡыт дуҫтар булғанын ишеткәс, ысын күңеленән шатланды.

Ҡунаҡ Юлияның бөтә ҡыҙыҡһынған һорауҙарына ихлас яуап бирә, үҙенең башынан үткән бик күп төрлө ваҡиғаларҙы ҡушып, ҡыҙыҡ итеп һөйләй ине. ~



Юлия, был ҡунаҡтың исеме кем икәнен башта уҡ һорамағанын иҫләп:

—| Ә һеҙҙең исемегеҙ кем һуң әле, ағай? — тине.

—ч Минең исемме? У, минең исемдәр бик күп! — Ул тағы ла ҡалын тауыш менән ҡыҫкырып көлдө.

Уға Сәғди ҙә ҡушылып келештө лә:

— Уның исеме «Япон»,— тине.

Юлия, уларҙың икәүһенә лә ышанмаған көләмһерәү менән ҡарап, кеттө.

—< Юҡ, Юлия туғанҡай, былай ул: минең исемдәрҙең ин тәүҙә мулла ҡушҡаны — Ҡотлояр,— ул бармаҡтарын бөгөп һананы,— халыҡ араһында «Урыҫ Ҡотлой», ә инде япон һуғышынан ҡайтҡандан бирле кешеләр просто «Япон» ти ҙә ҡуялар!

Был һуңғы исем Юлияға бик ҡыҙыҡ тойолдо. Ул ҡыҫҡырып көлөп ебәрҙе лә:

—• Ну, һеҙ японға бөтөнләй оҡшамағанһығыҙ бит! — тине.

— Оҡшамағанмын да ни, Порт-Артурҙы япондарға биреп ҡайтҡас, асыуҙары килгәндер инде, күрәһең. «Пускай үҙе лә япон булһын» тигәндәрҙер, ахыры! — Ул тағы күңелсәк итеп келеп алды ла шәшкеләгр сәйен һемерҙе: —. Илден, ауыҙын тыйып буламы ни,— тип өҫтәне.

Юлия уйға ҡалды, уйлап яуапланы:

—' Эйе, батша ла бит халыҡтың, «бөтһөн батшалыҡ» тигән талаптарын, «йәшәһен революция» тигән изге һүҙҙәрен ишетмәҫ өсөн, уларҙың. ауыҙын Порт-Артур менән томаларға теләгәйне лә, уның был мәкерле ниәте үҙенә ҡаршы әйләнде,— тине.

—' У, бөтә ғәрәсәт шунан көсәйеп китте лә инде. Тик шуныһы йәл, Юлия Ивановна, революцияның, осона сығып бөтөп булманы. Беҙҙең ярлы халыҡ өсөн ниндәй нурлы еметтәр тыуғайны. Беҙ бит ул сағында ни, Ульянов-Лениндең: «Падение Порт-Артура — начало падения самодержавия»,— тигән һүҙҙәрен күңелебеҙҙә лә, телебеҙҙә лә тәсбих итеп йөрөй инек бит. Бына ошоно эшләп бетә алмай ҡалдыҡ.

Сәғди ҙә һүҙгә ҡыҫылды:

—> Николашка тәхетенән ҡоламау түгел, революцияны ла баҫтырып ҡуйҙы бит. Бына шуныһын мин әле булһа аңламайым.

—; Ә ул Николашка, япон һуғышында еңелеп, үҙе ултырған ботаҡтың һынып барғанын һиҙеп ҡалды шул.

Япон менән, унының бөтә һорағандарына риза булып, хурлыҡлы яраш яһай һалды ла үҙенең Рәсәй халҡы менән һуғышырға кереште. Булмаһа, әллә ҡасан бөткәйне унының «ҡушбашы».

Юлия тағы ла асыҡланы:

— Был революцияны баҫтырыуҙа бер батшаныя ғына көсө етәсәге юҡ ине. Бында, революциянан үҙ кәрәктәрен алып тынысланған һәм эшсе-крәҫтиәндәрҙең революцияһынан ҡото осҡан либераль буржуазия, кадеттәр батша менән берләшеп алып, ҡара реакцион роль уйнанылар. Бөтә меньшевиктәр, эсерҙар һәм экономистәр, йыйылып алып, уларҙың тирмәненә һыу ҡойорға керештеләр.

— Ниңә, ул ысынлап та шулай. Бына, күренеп тора. Столыпин законы ғына үҙе күрһәтеп тора,— тип ҡыҙып һөйләй башланы Ҡотлояр.— Бына һиңә отрубҡа ер бирәләр, пожалуйста, хәлеңдән килһә, йөҙәр десятина һатып ал да, әйҙә, бөгөндән баяр бул! Хәлеңдән килмәй икән, үҙеңдең аҙаҡҡы ереңде һатып аша ла, аяғыңа сабата кейеп ал да эш эҙләп сығып кит! Ул бик яҡшы ике юл күрһәтеп ҡуйған, ихтыярың: йә һин баяр, йә зимагор, һайлап ал!

— Өсөнсө тура юл да бар әле, бик теләһәң, ят та астан үл, — тине Сәғди, асыулы көләп.

Ҡотлояр уны асыуланып тыйҙы:

—. һин юҡты һөйләмә, Сәғди! Аяҡ һуҙып ятып үлеү ир-егеттең һөнәре түгел ул. Хәлдән килгәнсә яулашырға кәрәк.

—< Асыуҙан ғына әйтелә лә ул. Быға тиклем ҡарап тик торғаныбыҙ юҡ әле. Элекке йыл һуң, байҙарҙың күпме мелкәтен ҡыҙыл әтәстән ялаттыҡ. Моратшаның ғына биш кәбән ашлығын, ете кәбән бесәнен Йәнйегет ағай менән бер төндә өттәк.

Ҡотлояр тауышын түбәнәйтте.

—• Бына быныһы яраны. Үлеү егетлек түгел ул, үс алыу егетлек ул. Быныщ менән генә әллә ни эш ҡыйрата алмаһаҡ та, үс алып ҡалдыҡ.

—• Ниңә, ул да ярай. Моратша отрубҡа сығып бурап ҡуйған яңы өйөн һала алмай, ауылға кире ташып алды.

Төн уртаһы еткәнен Сәғди иҫкәртте:

—• Ҡотлояр ағай, Юливанна, әңгәмә бөтмәҫ, эш көтмәҫ. Үҙебеҙҙең бөгөнгө эш тураһында һөйләшәйек,— тине.



Улар өсәүләшеп байтаҡ кәңәштеләр.

Ҡотлояр менән Сәғди Юлияға үҙҙәренең бик күп практик пландарын һөйләнеләр.

Ҡотлояр Ырғыҙ ташҡан саҡта, дүрт ауылдың волоскә бара торған юлын ташҡын өҙәсәге тураһында һөйләп, мөгәзәйҙәрҙәге игенде бүлеүҙе шул ташҡын көндәренә тура килтерергә тәҡдим яһаны.

Юлия үҙенең бер көнгө Сәғдигә һөйләгән фекерен ҡабатланы:

— Эш төндә башланһын. һәр ауылдыщиңышанысл ы кешеләренән биш-алты йә унлап кешене һайлап алырға ла, эштең ниҙән торғанлығын аңлатып, шул ауыл эсендә булған бетә яуаплылыкты шуларға тапшырырға кәрәк, Улар араһынан да иң төпле һәм иң ышаныслыһын һайлап алып, эштең бөтә ойоштороу яғын уға йөкләтергә кәрәк.

Ауылдарҙы йөрөп сығыу Ҡотлоярға тапшырылды. Тик был эште башлар алдынан кәңәште Айбулат менән ныҡ төйөнләргә кәрәклеген әйттеләр.

Ҡотлояр был бурысты өҫтөнә алды:

—• Әлбиттә, иң тәүҙә Айбулат менән һөйләшергә инде. Уның был арала өйҙә юҡлығы билгә һуғып тора. Ләкин улар оҙаҡламай ҡайтыр. Беҙҙең. ауылда башҡа күҙ терәрҙәй кешеләр ҙә байтаҡ әле: Асатай, Исхаҡ, Тимерғәле ағай, йәштәрҙән Хесәйен...

Сәғди:

—• Ундай ныҡлы егеттәрҙе һәр ауылда табып була. Юл ыңғайы Ташкүстәнгә инеп сыҡтым, әҙер торалар,—• тине.

Юлия тағы ла үҙенең кәңәштәрен әйтте:

—• Был эш, үҙегеҙ беләһегеҙ, бик дауыл эш. Бында, бәлки, бөтә өйәҙ начальстйоһы күтәрелеп килер. Шуның өсен дә барлыҡ ауылдарҙың да ярлылары бер һүҙле булһындар. Бер кемдең дә исемен атамаһалар, бик яҡшы булыр ине. Шунан артабан, иген еләшеү бик ашығыс үтергә тейеш. Шунын, өҫтөнә ин, меһиме — бөтә эш бөтә ауылда бер төн эсендә эшләнһен. Берҙән, волоскә ашығыс хәбәр итеүҙән ташҡын һаҡлаһа, икенсенән, хәбәр «илеү менән бер урядник тә бер стражник әллә нисәгә бүленә алмай, аптырап ҡалырлыҡ булыр.

—• Дөрөҫ, бик дерөҫ, Юлия,— тине Сәғди.

— Ә улар әле ҡасан ике йөҙ саҡрымдағы Николайскийгә сапҡын ебәртеп стражниктәр алдырғансы, халыҡ-

тың тамағы туйып, хәл йыйып алырҙар. Ә ауылдарҙағы старосталар, байҙар ҡаршы сыҡһалар ҙа, күпселек бщ решмәҫ тип уйлайым,— тине Юлия.

— Юҡ, ҡайҙа ул бирешеү, беҙҙә «ас кешенең асыуы ҡаты» тигән мәҡәл бар. Уларҙы хәҙер дөрөп ташларҙар.

— Шуның менән бөттө шикелле,— тине Юлия.— Эйе, кешеләрҙе бер исем дә әйтмәү тураһында бик нығытығыҙ!

— Уныһы була. Тыңларҙар, Инде, Юлия туған, һинә кәңәштәрең өсөн ҙур рәхмәт. Әгәр ҙә беҙҙең был эш барып сыҡһа, халыҡ үлемдән ҡотолһа, үҙебеҙ эләгеп бөтһәк тә, һине бирмәбеҙ.

— Биреу түгел, яңылыш эләгеп ҡуйһаң да, һис шикһеҙ, ҡоткарасаҡбыҙ,— тинеләр Ҡотлояр менән Сәғди.

Юлия, уңайһыҙланып, яуап бирҙе:

— Юҡ, туғандар, һеҙ минең турала, үҙе өсөн ҡурҡа икән, тип уйлай күрмәгеҙ. Бында бер генә кешенең дәбашы юғалырға тейеш түгел. Шул яҡты нык ҡарағыҙ.

— Барыбер, Юливанна, иң элек һине һаҡларға тейешбеҙ,— тине Сәғди.

## «САМСЫПАЛ»

### 1

Волость йорто ҡылыс таҡкан еҙ төймәле стражниктәр менән тулып китте.

Быға тиклем эштең былай аҡрынлап ҙурая барыуына иғтибар итмәҫкә тырышып, «мөгәзәйгә ҡараҡтар төшкән» тип кенә протокол яһап ҡуйған урядниктең төҫ& бөгөн ап-аҡ булғайны. Ашығыс хәбәр итеүгә пар атта килеп еткән Ныязғол старшина ла урядникте тынысландыра алманы. Киреһенсә, ул үҙенә еткерелгән хәбәрҙәр буйынса, был мөгәзәй эше бер ауылда ғына түгел, ике ауылда ла түгел, ә бөтә волостә булырға оҡшағанын һөйләп, урядниктең ҡайғыһын арттырып ҡына ҡуйҙы.

Хәҙер бына эш приставҡа барып етте. Хәл бик мөшкөл ине.

Становой пристав, ҡалын быялалы күҙлектәрен ялтыратып, мөйөштәге өлкән әҫтәл артында ултыра. Уның былай ҙа оло күҙҙәре күҙлек быялаһы аша тағы ла аҡайыңҡырап күренәләр. Ул, алдындағы протоколға йыуантыҡ бармағы менән төртөп, урядниккә ҡараны:



— Был ҡараҡтар эше түгел,— тине ул, тауышын күтәрмәйенсә. Уның һайын урядниккә ҡурҡыныс була барҙы.

— Эйе, Вашеблагородие! — Урядник башын эйего яуапланы.

— Ә һеҙ ҡайҙа инегеҙ?

— Беҙ өйҙә инек, Вашеблагородие!

— Һеҙҙең күҙегеҙ ҡайҙа ине һуң?

— Бик яҡшы тыныслыҡ ине ауылдарҙа, Ваше...

— Тыныслыҡ! — Пристав тағы ла өҫтәлдәге прото*^ колдарға күҙ һалды.

— Ә шулай ҙа һеҙ кемдәрҙең эше булыр тип уйлайһығыҙ? Ҡараҡҡа оҡшамайҙар?

Урядник ҡурҡып йылтаңлаған күҙҙәре менән Ныязғолға ҡараны.

Ныязғол ултырғыста ҡайҡайып, арҡаһын терәп ултырған урынынан еңел ҡалҡып, приставҡа табан эйелде..

— Вашеблагородие, ғәфү итегеҙ, рехсәт итегеҙ! Ҡайһы бер сотниктәрҙең минең ҡолаҡҡа төшөрөүҙәренә ҡарағанда, был эштә фельдшерица Маштакованьщ ҡатна* шы барға оҡшай.

Пристав та урынынан ҡалҡты. Күҙлеген сисеп, кеҫәһенән ҡулъяулығын сығарып һертте лә, үҙенең ҡапыл аптырағанын баҫып, тыныс тауыш менән ҡаршы төщтө:

— Бының булыуы һис мөмкин түгел. Маштакова бик благородная һәм бик культурная барышня. Яҡшы медик. Тоҡтомалға улай кешене ғәйепләргә ярамай.— Ул, бер» аҙ туктап, уйланып торҙо ла:— Быға ниндәй дәлилең барһуң? — тип өҫтәне.

— Вашеблагородие, миңә сотник Саттар һөйләне. Бер көндәр самаһы элек беҙҙең Айҙаҡай ауылының Япон тигән кешеһе ошонда булған. Шул...

— Тукта, тукта. Ниндәй япон? Ҡайҙан килгән ул?-

— Ғәфү итегеҙ, был япон ысын япон түгел ул, япо» һуғышынан ҡайтҡас, уға шундай ҡушамат биргәндәр. Ул электән үк батша власенә ҡаршы кеше. Уны студентлеккә лә яҙылған, тиҙәр. Алыҫыраҡ булһа ла, миңә ағайэне тейә. Ләкин мине бер ваҡытта ла тыңламай ул.

Пристав Ныязғолдон, һөйләгәнен сырайын һытыш тыңланы. «Юҡты һөйләй, үҙен ғәйептән ҡотҡарырға тырыша. Ниндәй наҙанлыҡ, студенттен, кем икәнен дә аңламай. Бер ҡарт һалдаттың нисек студент булыуы мөмкин икәнен дә күҙ алдына килтерә белмәй был старшина.

Күрәһең, студенттәрҙен. элекке революцион хәрәкәте был ишәктең ҡолағына инеп ҡалған да, шуны бутай инде»,— тип уйланды.

Ныязғол һаман һөйләй ине:

— Ана шул Япон, йәғни Ҡотлояр, ошонда килеп Сәғдиҙә ике-өс көн ятып киткәндән һуң, оҙаҡламай, ошо мажаралар башланғанлығы аңлашыла. Әле беҙ Иван Иванович менән бөтә ауылдарҙы йөрөп сыға алманыҡ. Ырғыҙ ташҡыны тотто, Ә бына Айҙаҡайға кеше ебәртеп, у»ы саҡыртырға була.

Пристав папиросын тоҡандырҙы ла унының баҙлаған утына ҡарап ултырҙы. Унының күңелһеҙ уйҙары оҙонға һуҙылып китте: «...Тағы башлана, күрәһең, был болалар... Аслыҡ, был — факт. Аслыҡтан мөгәзәйгә бер нисә ҡараҡ төшһә, бер ғәжәбе лә булмаç ине. Бындай уголовный эштәр өсен язалау тураһында һис тә баш вата торғаны юҡ. Ә бына тотош бер волостен, бер юлы был эшкә йәбешеүе бер ҙә тәбиғи эш түгел. Бик күп нәмәне аңлатҡан ҡурҡыныс эш. Сөнки бында ниндәйҙер төптән уйлап, •ойошоп эшләү һиҙелә. Тимәк, кемдер ҡотко бирә. Ҡотҡо — ҡараҡлыҡҡа тартмай, политикаға тарта... Маштакова, Маштакова... Юҡ, бында унының һис бер ҡатнашы -булырға мөмкин түгел. Ул беҙҙең рус барышняһе. Унының •саф күңелле ҡыҙ икәнен күҙҙәре әйтеп тора. Шунда ла...» — Ул уйын бүлде.

— Ә тағы кем, Сәғди, тиһегеҙме?

— Эйе, Сәғди, Вашеблагородие!

— Кем һуң ул?

—• Ул ни, Вашеблагородие, бер кем дә түгел,— тип •ҡабаланып яуап бирҙе урядник.— Ауыл кешеһе. Маштакова унының өйөндә фатирҙә тора. Ул Сәғди үҙе бер оҫта плотник. Өйен,дә үҙе бүрәнәнән яҡшылап һалған. Шуға күрә Маштакованы шунда ҡуйыуҙы мәғҡүл күргәндәр.

Пристав тағы бер аҙ уйланып алды: «Тағы Юлия Маштакова. Сәғдиҙең өйө яҡшы булғанға, уны шунда -ҡуйғандар. Дөрөҫ, уны арыуыраҡ фатиргә урынлаштырыу тураһында үҙем лично яҙып ебәргәйнем. Сөнки М.аштакованың ҡулында рекомендательный хат бар ине. Унда «Самойлов кейәүе Мединскийҙең үтенеүе буйынса...» тип яҙылған ине. Ә Самойлов тирәһенән булыуы һис тә генә ваҡ-төйәк мәсьәлә түгел. Самойлов — ҙур завод хужаһы. Юҡты һөйләмәһендәр был ахмаҡтар. Фатир хужаһы Сәғди... Был да бер нәмә лә аңлатмай. Ә бы-



нау Япон тигәндәрен саҡыртып һуҡтыртырға кәрәк. Эш шунан башланһа башланыр, ә Маштакованан түгел».

Становой пристав ошо уйҙар менән бер ҡарарға килеп үҙен тынысландырҙы ла, ауылдағы шик һалған бөтә ирҙәрҙе саҡыртып, берәмләп допрос ала башланы.

Староста ауылдын, ситенән башлап, ир-аттың береһен дә ҡалдырмай волость ейөнә саҡырырға ҡушып, үҙенен, десятниктәрен югертте.

Килгәндәренең исем-фамилияларын ҡысҡырып, волость ейөнә индерә торҙолар.

Становой пристав волость ейөнөн, ике ишегенә лә ике яҡлап ҡоралл стражниктәр баҫтырып ҡуйған. Улар приставтың ҡушыуы һәм урядниктен, ымлауы буйынса, допростан сыҡҡан бер кешенең арҡаһына ике яҡтан ҡамсы менән һуғып торорға тейештәр ине. Унлап кеше инеп сыҡты инде. Уларҙың ҡайһылары нисек яуап биреүенә ҡарап, йә һуғылып, йә һуғылмай сығалар ине.

Ун беренсе кеше булып Янғол инде.

Пристав үҙе допрос ала. Русса белмәгәндәр менән Ныязғол аша һөйләшә:

— Фамилияң кем?

— Янғол.

— Исемең?

— Янғол.

—• Атайыңдың исеме?

— Янғол.

—> Юҡ, юҡ, исемең тип әйтмәйем, атайыңдың исеме кем, тим?

Янғол, яурындарын һелкетеп, аяҡтарын алмаштырып, күҙҙәрен уйната, Ныязғолға ҡарай, унын, яуап биргәнен көтә.

Ныязғол унын, былай ҡыланышына урттарын асыу менән эскә тартып, күҙҙәрен алартты ла приставҡа боролдо:

— Вашеблагородие, ғәфү итегеҙ, ул руссаны үҙе лә бик яҡшы белә. Тик һейләгеһе килмәй. Өйөнән ярты тоҡ бойҙай сыҡты. Фамилияһы Әпәләев.

— Так, Әпәләев, һиңә бойҙайҙы кем бирҙе?

—•Үҙемдеке.

— Юҡты һейләйһең. Бойҙайҙың булғаны юҡ. Үҙең ас йөҙәгәнһең?

— Дөреç, ас йөҙәгәнмен. Семьям да ас.

— Шуға күрә мөгәзәйҙән бойҙай алдыңмы?

— Мөгәзәйҙекен алманым.
— Тура яуап бир.
— Тура, Вашеблагородие, бик тура.
— Һеҙҙе кем башлап алып барҙы?
— Ҡайҙа?
— Мөгәзәйгә, бойҙай алырға.

Янғолдоң асыуҙан йөҙө ҡыҙарҙы. Ул үҙе лә абайлашаҫтан, ғәрләнгән тауыш менән:

— Сам! — тип екерҙе.
— Ишекте кем асты?
— Сам.
— Тоҡтоң ауыҙын кем тотоп торҙо?
— Сам.

Пристав яҙып ултырған ҡәләмен өҫтәлгә ырғытып, тауышын күтәрҙе:

— Яҡшылап яуап бир. Юғиһә язалатырмын!

— Бик яҡшылап яуап биреп торам. Сам сыпал, сам язял, ишшу сыплю, ишшу возьму. Мөгәзәй ҙә наш, хлеб тә наш. Сам сыпал и все!

Становой пристав тағы ла ниҙер яҙып ҡуйҙы ла урядниккә бойорҙо.

— Был «самсыпал»ға егерме ҡамсы всыпать, — тине, шул ыңғай Янғолға ҡул һелкте:

— Бар, сыҡ!

Янғол өй ишеген тупһаһы аша атлаған ыңғайға, ике стражник ике яҡтан бер юлы ҡамсылары менән арҡаһына тарттылар. Янғол секунд эсендә уң яҡтағы стражниктең ҡамсыһын тартып алды ла, солан ишеге янында торған стражниктәргә уңлы-һыңлы һелтәп, баҫҡыстан ҡуян кеуек сыпсан һикереп төшөп китте.

Был хәлде көтмәгән стражниктәрҙең икәүһе Янғол артынан югерешеп килеп тешкәнсе булмай, ишек алдында эркелешеп торған утыҙлап кеше, Янғолдо тиҙ үк уратып алып, уларға юлды бикләнеләр.

Бер кем, бер нәмә тип тә өндәшмәне. Тик бөтәһе лә күҙҙәрен төмһәйтеп, стражниктәргә текләнеләр.

Ул арала урядник сығып:

— Сәғди Япаров! — тип ҡысҡырҙы.

Был исемде ишеткән халыҡ араһында тағы ла өнһөҙ тыныслыҡ тыуҙы. Ҡайһы берәүҙәре:

— Сәғди, һин инеп торма,— тип шыбырҙанылар.



Ләкин Сәғди уларҙың бөтәһен дә тынысландырғандай бер ҡараш ташланы ла яйлап атлап баҫҡыстан менеш китте.

— Фамнлияң кем?
— Япаров.
— Исемен?
— Сәғди.
— Ниңә мөгәзәйҙе боҙҙоң?
— Боҙғаным юҡ.
— Игенде кем башлап алды?
— Һис тә белмәйем, Вашеблагородие.
— Игенде халыҡҡа кем өләште?
— Ҡайҙан беләйем, кем өләшкәнен. Үҙҙәре алғандыр.
— Тура яуап бир!
— Бер ниндәй ҙә игенде белмәйем. Теләһәгеҙ, тағы ла өйемә барып тентегеҙ, бер ус та бойҙай юҡ.

Пристав уға текләне, өндәшмәне. Ысынлап та, тентеү ваҡытында һис бер бойҙай әҫәре сыҡманы. Шулай ҙа ул тағы бер һорау бирергә булды.

— Ҡотлояр ниңә һеҙгә килгәйне һуң?
— Башмаҡ алырға.
— Ниндәй башмаҡ?
— Ҡыҙыл.— Сәғди, үткер ҡара күҙҙәрен генә мыҫҡыллы келдөрөп, әле становой приставҡа, әле Ныязғолға ҡарап алды.

Становой ҡыҙып ҡысҡырҙы:

— Дурака валять итеүеңде ташла! Булмаһа, хәҙер яткырып һуктырам!

Сәғди бүтәнсә өндәшмәне. Тик тороуында булды.

Сәғдиҙең үҙен тыныс тотоуы приставтың күңеленә шик һалды.

Бының өйөнән бойҙай сыҡкан «самсыпал»ға ҡарағанда ла уҫалыраҡ кеше булыу мөмкинлеген уйланы. Ә был уй тағы ла Юлияны күҙ алдына килтерҙе. Эштең былай тәрәнгә инеп китеп барыуын уның күңеле бер ҙә тартмай ине.

Ниндәй ҙур революция пожарын баҫтырып тыныслап торғанға әле бик аҙ ғына һанлы йылдар үткән. Уның өҫтөнә ул бөтә губернала маҡтаулы, күренекле приставтарҙың береһе булған Жулидовский станында тағы ла крәҫтиән болалары башланған икән тигән атаҡ сығыуҙан бигерәк тә нык ҡурҡа ине.

Ул шулай итеп уйлана-уйлана ҡағыҙын яҙып туктаеы ла, Сәғдигә ҡарап:

—' Бар, сыҡ,— тине.

Сәғди сыҡҡанда, бер стражник тә ҡамсы күтәрмәне. Унын, шулай һуғылмай сығыуына ишек алдындағы •бөтә кеше лабырҙап китте.

—• Ни тине становой?

—• һуҡманылармы?

— Нимә тип яуап бирҙең?

Уларҙың бөтәһенең йөҙөндә лә ҡыуаныслы йылмайыу -бар ине.

Был ҡыланыштарҙы тәҙрәнән күҙәткән пристав шунда уҡ үҙенең шикле фекеренең дөрөҫ икәнен асыҡланы. Тимәк, бында эш тиген түгел, тине ул үҙенә.

Ә Сәғди үҙенең «котолоп» сығыуына ҡыуаныу -урынына, тәрән уйға ҡалып, ҡаштарын төксәйтеп йыйырып, оло юлға ҡараны: унан оҙаҡламай Ҡотлояр килергә тейеш. Ә уның тураһында төпсөп һорашыуҙары бушҡа түгел. «Әллә берәйһе ошаҡлап та өлгерҙөмө, әллә былай ғына төһмәт итәләрме?» — тип уйлап ҡуйҙы ул.

Сәғди бик ашығып ҡына өйөнә ҡайтты ла үҙен ҡаршы алған Юлия менән Шәмсиәгә ишетеп ҡайтҡан хәбәр^ҙәрен һөйләне.

Уғаса булмай, унын артынан ЯнРол да ахылдап килеп ;инде.

—• Сәғди ағай, минән допрос алған саҡта, пристав урядник менән һөйләшкәндә лә, Ныязғол менән һөйләшкәндә лә әллә висә тапҡыр Маштакова тигән фамилияны сығарҙылар. Ни турала икәнен аңғармай ҡалдым,— •тине лә, боролоп, бөтәһенә лә һораулы ҡараны.

Юлия өндәшмәне.

Сәғди:

—• Унынһы насар. Минән Ҡотлояр ағайҙы һорашты. •Ә ул килеп еткәнсе, алдан ҡаршы алып хәбәр иткән яҡлпыраҡ булыр.

—• Бәй, мин хәҙер үк ҡаршы югерәйем.

—• Бар улай булһа, Әсмәнде ал да, Ҡомлотауҙың. -арғы битлегенә үк барып көтөгөҙ. Уның янында саҡыра барыусы сотник Саттар булһа, берегеҙ бер хәйлә табып уны албырғатырға тырышығыҙ, икенсегеҙ Ҡотлояр ағайға хәбәр һөйләр,— тине Сәғди.

—• Ярай, ағай,— тип Янғол ашығып сығып югерҙе.



Тешкә хәтлем бик тыныс һорауҙарға ғына оҡшаған был допрос эше төштән һуң шау-шыулы, күҙ йәшле, ҡанлы ғәрәсәткә әйләнде.

Пристав Жулидовский үҙе тәрәнерәк шикләнгән кешеләр менән яңынан ныҕыраҡ һөйләшеүҙе һәм уларҙы> язалауҙы һуңғараҡ ҡалдырып, хәҙер өйҙәренән бойҙай,. ҡурмас, күҙә ©йрәһе табылған семьяларҙан башлап, бөтә» асыуын шуларҙан алырҙай булып, ҡәһәрле һуҡтырыуғ» кереште.

Волость ишек алды туҡмалып интеккән ирҙәр, уларҙы яҡлашырға югереп килеп еткән ас, хәлһеҙ семьяларыгменән тулып китте.

Бер кем дә бер кемдең дә исемен атаманы. «Үҙе№ барып алдым, мегәзәй ишеге мин барғанда асыҡ тор» ине». тигән кеүек яуаптан үтмәнеләр. Унын һайын приставтың ҡаны ҡыҙа ине.

Юлия Ивановна үҙенен. дарыу ҡумтаһын күтәреп килеп етте лә яраланғандарҙы бәйләй, дауалай башланы..

Янғолдоң энеһе һуғылырға ятмаҫҡа тырышып стражник менән айпалашҡанда, уның күҙе аша битен, маңлайыш ҡамеы.менән ярып ебәргәндәр. Ҡан, тауыҡ салғандағы һымаҡ, сорлап сәсрәй. Юлия уны бүрәнә өҫтенә' ултыртҡан да яраға әле йода һөртә, әле мамыҡ баҫа, эргәһендә ярҙамлашҡан Шәмсиәгә бинт тағатырға ҡуша^ тиҙерәк перевязка яһарға тырыша.

Юлия перевязкаһын яһап та бөтә алманы, урядник^ баҫҡыска сығып:

— Маштакова Юлия Ивановна, һеҙҙе пристав әфәнде саҡыра! — тип ҡысҡырҙы.

Юлия бөтә дарыуҙарын Шәмсиәгә тотторҙо ла, аҡ: халатына сәсрәгән ҡан тамсыларын усы менән һыпырып! һөртә-һөртә, волость өйөнә инеп китте.

Пристав үҙе генә ҡалғайны.

— Ә, һаумыһығыҙ, Юлия Ивановна! — Пристав хатта аяғеҫтө баҫып ҡул бирҙе лә, ултырғыс шыуҙырып,— ултырығыҙ,— тине.

Юлия һаулашты ла күрһәтелгән ултырғысҡа ултырҙы.

Пристав ҡулындағы папиросын һурҙы ла, тәкәллеф-, ле йылмайыш:

— һеҙ, туташ, бөтөнләй үҙ ролегеҙгә инеп эшкә тотонғанһығыҙ, һуғыштағы һымаҡ,—• тине, үҙ һүҙенән үҙе кетерләп көлөп ҡуйҙы.

Юлияның йөҙөн ҡапыл ҡараһыуҡыл ҡыҙыл ҡапланы һәм шунда уҡ ап-аҡка әйләнде. Ул тауышын бик тыныс, тигеҙ итергә тырышты. Асыуҙан ҡалтыраған ҡулдарын •өҫтәл аҫтына төшөрөп, тубыҡтарына таянды.

— Ни эшләйһең инде, Макар Васильевич, әҙәм балалары бит, йәл,— тине.

Пристав үҙе лә бик йәлләшкән һымаҡ, йомшаҡ тауыш менән:

— Эйе, эйе, йәл,— тип һуҙып һөйләнде лә, тәҙрәгә ҡарап, тағы ла папиросын һурҙы.

Юлия уның был йомшаҡ тауышына шул тиклем нәфрәтләнде, шунда уҡ уйына килгән «Да, пожалел волк кобылу, оставил хвост да гриву» тигән мәҡәлде саҡ ҡына әйтеп ысҡындырманы. Үҙен кесләп тыйып, бүтән һүҙҙәр әйтте.

— Иәл, бик йәл шул. Астар бит улар, бик астар. Ике ай эсендә генә был ауылда ҡырҡ өс кеше шешенеп үлде,— тине.

— Ашхана асылған бит уларға.

— Уның ашы хайуандарға ла яраралыҡ түгел. Был турала мин һеҙгә нисә тапҡыр яҙғайным, Макар Васильевич.

— Шуның менән ни тимәксе булаһығыҙ?

— Исмаһам, һуктырмағыҙ, язаламағыҙ. Күпме кеше яраланды, ҡан түкте инде! — Юлия тауышын ярһып күтәрҙе.

Приставтың да тауышы ҡороланды:

— һеҙ быны минә үҙегеҙҙең медфельдшерица булыу йәһәтенән тәкдим итәһегеҙме әллә башҡа төрлө фекерегеҙ бармы?

— Макар Васильевич, медфельдшерица булыу йәһәтенән мин туранан-тура һеҙгә буйһонам. Шулай булғас, тәкдим итергә, хатта кәңәш* бирергә лә минең хаҡым юҡ. Ә кешелек яғынан мин һеҙҙән уларҙы язаһыҙ ҡалдырыуығыҙҙы үтенеп һорар инем. Орошоп ҡына ҡуйһағыҙ ҙа, улар тыңларҙар ине...— Юлияның тауышы ҡапыл ҡалтырап өҙөлдө.

— Шулай,— тине пристав. Папиросын тағы бер тапҡыр оҙон итеп һурҙы ла Юлияға ҡараны.— һеҙ мине тартҡаным өсөн ғәфү итегеҙ, туташ, бөгөн бик нык нервничать итергә тура килде.

— Пожалуйста, тартығыҙ,— Юлия күҙҙәрен түбән төшөрөп яуап бирҙе. Сөнки приставтың был ялған тәкәллефенә уның шул тиклем асыуы килде, уның үпкәләре күкрәккә һыймағандай булып ҡабарып, тынын ҡыҫалар ине.

Пристав Юлияның был хәлен абайламаймы әллә үҙенең психологик оҫталығын ҡулланыу өсөнме, бер көрһөнөп алып, Юлияны бик үҙ күргән төҫ менән хәбәрҙәр һөйләй башланы.

— Бына бит, барышня, аңһыҙ халыҡ менән ни эшләмәк кәрәк? һеҙ уларҙы орошоп ҡына ҡуйырға ҡушаһығыҙ. Ә уларҙы орошоу ғына түгел, туҡмап тор, улар үҙҙәренекен итә бирәләр. Бигерәк тә крәҫтиән халҡы шундай халыҡ. Ә инде был башҡорт халҡы бигерәк тә кире, үҙһүҙле, законға буйһонмаған халыҡ ул. Үҙҙәре бик ялҡауҙар. Араларында бар ана Ныязғол старшина һымаҡ тырыштары. Ләкин ундайҙар хәҙергә бик аҙ әле. һеҙ йәлләргә ҡушаһығыҙ. Дөрөҫ, кешелек, йәлләү барыбыҙҙа ла бар ул. Ләкин үҙеңдең. еҫтөнә йөкләтелгән вазифаны үтәгән саҡта, личный тойғоларға бирелеү һис яраған эш түгел. Уларҙы һин йәлләп торһаң, юғән теҙгендәрен аҙ ғына ысҡындырһаң, унан уларҙы тотоп алыуы ҡыйынға, хатта мөмкин түгелгә әйләнә. һеҙ йәш, күп нәмәне аңлап еткермәйһегеҙҙер. Унан һеҙгә, бындағы алыҫ мөйөшкә, әлбиттә, ишетелмәйҙер, крәҫтиән балаларының баҫылыуына нисә генә йыл үтте. Хәҙер инде Россияның байтаҡ ерҙәрендә отруб мәсьәләһе менән тағы ла күтәрелештәр ҙә бәрелештәр була башланы. Бына нисек бит ул, Юлия Ивановна. Былар өҫтөнә ҡала эшселәренең дә һәр ваҡыт ҡуҙғалышҡа әҙер була башлаған-дарын да уйлаһаң...

Приставтьвд шулай вәғәз һымаҡ байтаҡ ваҡыт һөйләгән һүҙенең ҡайһы береһен тыңлап, ҡайһы береһен ишеткеһе лә килмәй уйға батып ултырғай Юлия, һ-уңғы һүҙҙәрҙе ишетеүгә, башын ҡапыл күтәреп, йылы оҫҡон сәскән ҡуйы һоро күҙҙәре менән уға ҡапыл һирпеп ҡараны. «Күтәрелеш, эшселәр хәрәкәте, крәҫтиән балалары» тигән һүҙҙәр ниндәйҙер бер көс менән, Юлияны йоҡонан уятҡан кеүек, килеп бәрелделәр. Ул нык ҡыҙығыу менән приставтың ҡалын күҙлек быялаларына тура текләне лә уның бындай хәбәрҙәрен аҙағына тиклем ишеткеһе килеп тулҡынды.

Ләкин, ҡарт төлкө һымаҡ, хәйләкәр пристав Юлияның был хәрәкәтен үҙ иғти.барынан ысҡындырманы. Уйы-;

нан: «Әһә, бына нәмә унын, йәш йөрәгенә тура ҡағыла икән...» — тип күҙҙәрен мыҫҡыллы көлдөрҙө лә, ауыҙына йөҙөк йәшергән шикелле, һүҙенән туктаны. Ул да баяғы Юлия кеүек үҙенең ни уйлағанын ҡыскырып әйтмәне, эсенән тынды.

Юлиянын, ауыл халҡы яҡлы икәнендә лә һәм был иген өләшеү эшендә ҡатнашы барлығында ла уның шиге ҡалманы. Шулай ҙа эште әкренләп тикшерергә булды. Сөнки уның өйәҙҙәге кабинет өҫтәле эсендәге Самарҙан килгән «Самойлов кейәүе нәҫеле» тигән ҙур авторитет һүҙҙәрҙе эсенә алған күк конвертле ҡыҫҡа хат уның күҙ алдынан китмәне.

Пристав тағы тыныс тауыш менән һорау бирҙе:

— Маштакова туташ, һеҙ был башҡорттарҙың бынДай тәртипһеҙлек сығарып, баш-баштаҡлыҡ яһап, иген талап йөрөүҙәренә нисек ҡарайһығыҙ? — тине.

Юлия бер минут та уйланып торманы. Алдан, әллә ҡасан әҙерләгән яуаптай итеп, бик асыҡ һүҙҙәр менән яуап бирҙе:

— Вашеблагородие, мин бында башҡорттарҙан бер бик дөрөҫ мәҡәл ишеттем. Ул «Ас кешенең асыуы ҡаты» тигән мәҡәл. Мин үҙем дә хәҙер был мәҡәлдең бик тапҡыр икәнен яҡшы төшендем инде.

Пристав Жулидовский Юлияға бүтән һорау бирмәне. Ул уға һытылған һәм ағарынған йөҙ менән боролдо ла:

— Һеҙгә китергә мөмкин. Башҡа мин һеҙҙе тотмайым, — тине.

Юлия сығып баҫҡыс болдорона баҫҡан көйө тирәяғына ҡаранды. Ишек алдындағы кешеләрҙең бөтәһе лә таралып бөткәйне. Шәмсиә лә юҡ. Ике стражник бүрәнәгә ултырып тәмәке урайҙар. Ҡояш байыған, ҡараңғы төшөп килә. Көн йылы. Әллә ҡайҙан, ҡапыл болдор аҫтынан килеп сыҡкан һымаҡ, Ишбулды килеп сыҡты ла Юлия янына югереп менде:

— Юлә апай, һине өйгә ҡайтырға ҡуштылар,— тип шыбырҙаны.

— Кем ҡушты?

— Ағайҙар ҡушты. Тиҙ ҡайтһын, тинеләр.

Юлия баҫҡыстан тештө лә Ишбулдыны етәкләп урамға сыҡты.



## 2

Өй эсен энер ҡараңғылығы ҡаплағайны. Өс ир кеше һөйләшеп ултыралар. Шәмсиә усаҡ тирәһендә шәм тоҡандырып маташа.

Юлия бында ултырыусыларға берәмләп күҙ һалырға елгөрмәне, өҫтәл эргәһендәге ултырғыстан бер мыйыҡлы кеше ҡалҡып:

— Юлия, һаумы,— тине, күрешергә ҡул һуҙып, киң йылмайҙы.

Юлия бер аҙ аптырап ҡарап торҙо ла:

— Ах, Айбулат...— тип, ҡаушаулы, шатлыҡлы ҡыскырып, ҡулын һуҙҙы.— Һин шулай олоғайып киттеңме ни? — тип йылмайып һораны.

— Мин шулай олоғайып киттем, Юлия. Һин дә ҙур үҫкәнһең бит.

— Бына ҡасан, ҡайҙа осраштыҡ. Ҡотлояр ағай һеҙҙең, хәлдәр тураһында һөйләгәс, мин оҙаҡламай барып күрергә лә уйлап ҡуйғайным инде. Күрге килә, бик күрге килә ысын дуҫтарҙы.

— Әйтмә лә инде, Юлия. Мин ни, Маштакова тигән ҡыҙҙын, һин икәнен белһәм, күптән килеп ҡунаҡҡа алып ҡайтыр инем. Фамилияң үҙгәргән бит. Күрәһең, семья тормошон, да үҙгәргәндер инде?

Быға ҡаршы Юлия һул ҡулы менән үҙенен, ауыҙын ҡапланы ла, уң ҡулын күтәреп, Айбулатҡа бармаҡ янаны. Айбулат күҙҙәрен ҙурыраҡ асып, ҡаштарын күтәрҙе. Ул аңланы.

Юлия һүҙҙе үҙгәртте.

— Һинең дуҫың Вася хәҙер Трубочныйҙа эшләй, Маруся фабрикала. Һин уларҙы күптән күргәнең юҡтыр әле?

— Күптән, Юлия. Өс йыл була инде. Мин уларҙың хәлен, һеҙҙең бөтәгеҙҙең дә хәлегеҙҙе тетя Дашанан һорашып, белешеп торам. Уны мин йыш ҡына күрәм, Яйыҡҡа барған һайын уға туктап йөрейөм. Һинен турала гел Юлия тип кенә һөйләйбеҙ ҙә шунын, менән бөтә.! Һуңғы ваҡытта ул да һинең ҡайҙа икәнende белмәй ине.

— Мин уға хат та яҙам да, ала алмай, күрәһең.

•— Юҡ, алғаны юҡ.

— Васянең улы үҫтеме?

— Үҫә. Хәҙер уның ҡыҙы ла бар инде.

— Беҙҙен. хәҙер өсәү инде.— Айбулат көлөл ҡуйҙы.—

Юлия, мин һине гел шулай, сыҡкан ҡойроғондай ғына һары сәсле томоҙ ғына бәләкәй ҡыҙыҡас көйө күҙ алдына килтерә инем.

Юлия көлөп яуапланы:

— Хәҙер ҙур үҫтем инде. Ул ваҡытта минә ун дүрт йәш тирәһе ине, хәҙер егерме бер.— Юлия ҡапыл бойоҡто.— Григорий Нарымский крайҙа, семьяһы ауылда, — тип өҫтәне ул.

Айбулат та көрһөндө:

— Беләм, Юлия, барыһын да беләм. Өмөт өҙөргә ярамай, яңынан көрәшәсәкбеҙ, Юлия, бойоҡма.

Юлия, тағы ла борсолоп:

— Айбулат, һин дә допросҡа килденме? — тип һораны.

— Юҡ әле. Хәҙергә минә ҡағылманылар. Бына үҙебеҙҙең ауылға барғас, йәбешерҙәр инде. Староста Абдул бик нык теш ҡайрап йөрөй. Ныязғол да бер-ике ажғырып алды. Ләкин күҙгә күренгән бер дәлил дә булмағанға аптырап торалар.

— Ниңә килден һуң?

— Мин Ҡотлояр ағайҙы алып килдем, унан да бигерәк һине күреп сығырға кәрәк икәнен белеп килдем.

— Ә, Япон ағайҙымы, ул ҡайҙа һуң?

— Допросҡа инеп китте. Аттарҙы ауыл осондағы бер өйҙә йәшереп ҡалдырҙыҡ.

Улар шулай һөйләшкәндә, тышҡа сығып киткән Сәғди менән Янғол килеп инделәр. Сәғди Шәмсиәгә сәйен ашыҡтырырға ҡушты.

Улар сәй тирәһенә йыйылғансы, ҡабаланып атлап Ҡотлояр ҙа килеп инде. Ул бөтәһе менән һаулашты. Юлияға ҡул биреп күреште.

— Ну, туғандар, эш хөрт,— тине.— Ҡараңғы ныҡыраҡ төшөп, ил аяғы әҙерәк һил булыу менән беҙгә Айҙаҡайға һыҙырға кәрәк. — Ул итектәрен сисеп ташлап, урындыҡ өҫтөнә менде, сәй янында үҙенә күрһәтелгән түрҙәге урынға аяҡ еалып ултырҙы.— Юлия Ивановнаға бында ҡалырға һис ярамай, беҙ уны ла алып китәбеҙ,— тип еҫтәне Ҡотлояр.

Юлия хатта тауышын күтәреп ебәрҙе:

— Юҡ инде, туғандар, был турала ауыҙығыҙҙы ла асмағыҙ. Ниңә мин китергә тейешмен, әле генә приставта допроста булдым. Ул минә бер ни тип тә бәйләнмәне.

Сәғди менән Янғол да Юлияны яҡланылар.



— Юҡ, Юливаннаны ебәрмәйек, бер ни ҙә булмаҫ. Беҙ уға бер кемде лә яҡын ебәрәсәгебеҙ юҡ.

— Беҙгә уның бик күп ярҙамы тейҙе. Ул булмаһа, ни тиклем кеше астан үлер ине. Ул беҙгә әле лә бик кәрәк буласаҡ.

Айбулат һүҙгә ҡыҫылманы, был көрәштең аҙағын көтөргә булды.

Ҡотлояр сәйен ҡабаланып йотто ла шәшкеһен шалт иттереп батмусҡа ултыртты.

— Килен, сәйенде ҡуйыраҡ ҡой әле,— тип үтенде һәм иптәштәренә боролдо.

— Һеҙ улай итеп' миңә ҡырҡа ҡаршы төшкәнсе, минең был фекерҙең сәбәбен һорашығыҙ. Шунан ары Айбулат ни әйтер, шуны тыңлағыҙ. Мин бит әле генә ҡунаҡтан түгел, допростан сыҡтым.

— Эйе, эйе, Ҡотлояр ағай, һөйлә,— тине Юлия.

— Тегеләр, өсәүләшеп — пристав, урядник, Ныязғол, ас бүреләр һымаҡ күҙҙәрен яндырып, өҫтәл әйләнәһенә ултырып алғандар. Мин баҫып торам. Шунан улар мине ашарҙай булып, ҡыҫымға алдылар. Береһе артлы икенсеһе тепсеп һораша, мин яуап бирә торам. Пристав менән урядниккә нисек тә килештереп яуаплай алдым. Ә анау ҡороғор Ныязғоло, тыуған көндән башлап миңе белгәс ни, аҙ ғына шылдырып әйткәнде лә өҙә тотоп тик ултыра. Бына ҡәһәр һуҡкан бәндә! Етмәһә, миңә ағай тейеш, имеш! Ярай, уныһы чорт с ним. Мине тота ла алмаҫтар, тотоп та эш ҡыра алмаҫтар. Бына Юлия Ивановна тураһында ҡаты төпсөүҙәре мине бик ҙур хафаға һалды, әйләндерә лә уның исемен килтерёп сығаралар, тулғандыра ла уның исемен килтереп сығаралар. Мин инде уны танымауым тураһында йөҙ ҡабат әйттем уларға. Ә уларҙың, тел тебө һаман беҙҙе бергә бутауға бара. Бына ни өсөн Юлияға бында ҡалырға ярамай. — Ҡотлояр һүҙен бөтөреп,сәйен һемерҙе.

Юлия уның был һүҙҙәрендә әллә ни шик күрмәне:

— Йә, ул тиклем нимә булған? һорашһындар. һорашырҙар ҙа тынырҙар.

— Юҡ, Юлия, улай ғына түгел шул. Мәҫәлән, һигеҙ ауылдан биш-алты йөҙ кеше генә был эшкә ҡатнашкан булһын. Ә был тиклем һорау, туҡмауҙарға түҙмәй, шуларҙың эсенән ике-өс кеше генә беҙҙең исемде әйтеүе бер ҙә ғәжәп булмаҫ. һине ейрәтеү, әлбиттә, беҙгә, уҡымаған кешеләргә, бер ҙә тоҫ түгел. Шунда ла мин һиңә

йәш яғынан оло булып өйрәтәм. Ә үҙең. аҡыл, белем яғынан, әлбиттә, беҙҙән күп олоһоң. Шулай бит?

— Улай уҡ түгел дә, Япон ағай.

— Тукта, тукта, Юлия Ивановна, һин тағы шуны уйла: беҙ, быдағы халыҡ, астан бөйҙәй урлағанбыҙ, и все. Ну, тотһондар, туҡмаһындар. Уҙа барһа, яҫтыҡ-юрғандарҙы, самауырҙарҙы талап алырҙар. Шуның менән эш бөттө. Ә инде, Юлия, һине ҡулға алып ҡуйһалар, беҙ ҡарап тора алмайбыҙ инде. Приставын да, урядниген дә, кәрәк булһа, Ныязғолон да, башҡаларын да бер епкә теҙеп Ырғыҙға ырғытырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Бына бит эш ҡайҙа китәсәк!

Ҡотлоярҙың был ысын күңелдән һөйләгән һүҙҙәре Юлияны болоҡһотто. Ул өндәшмәне. Бер аҙҙан ул Айбулатҡа һораулы ҡараш ташланы.

Ҡотлояр, Сәғди, Янғол соланға сығып тәмәке тартырға тотондолар.

Айбулат менән Юлия өҫтәл янында икәүһе генә ҡалып кәңәштеләр.

Айбулат Ҡотлояр фекере яҡлы ине. Ул Юлияға:

— Юлия, мин Ҡотлояр ағайҙы тыңлағандан һуң ошо уйға килдем: ул дөрөҫ хөкөм йөрөтә. һиңә рәхмәт. Халыҡ та шуны әйтәсәк. Тамаҡтары ныҡ туймаһа ла, үҙәктәре ялғанды уларҙың. Хәҙер ас үлемдән ҡотолдолар инде. Әгәр һине бында белеп ҡалһалар, Ҡотлояр ағай әйткәндәй, беҙ эште ҙурға ебәрһәк, унын, файҙаһынан зыяны күп буласаҡ. Шулай.түгелме, Юлия?

Юлия тәрән уйланды: «Ысынлап та, уны ҡулға алһалар ҙа, ул бер нәмә тураһында ла һөйләп, бер кешене лә тотторасағы, уларға хыянат итәсәге юҡ. Әгәр уны Самарға оҙатып, эште губернскийҙә тикшерә башлаһалар, подпольеләге иптәштәре ни әйтер, ә Никитин ни тиер? Ул ни тиклем тырышып Юлияны был тирәгә эшкә ҡуйҙы. Тимәк...»

Айбулат, унын. уйын ослағандай итеп:

— Юлия, күп уйланма. Халыҡ өсөн аҙмы-күпме эшләнең. Ә быныщ аръяғында һин кире ҡайтып, ундағы иптәштәр менән күрешеп, хәлде һөйләргә, уларҙын, күрһәтмәләре буйынса эш ҡылырға тейешһең,— тине.

Юлия тағы ла Айбулатҡа күҙҙәрен тултырып рәхмәт ҡарашы ташланы. Уға ҡулын биреп күреште. Күҙенән мөлдерәгән йәштәре тәгәрәһә лә, ул Айбулаттан оялмаңы. Уның йөрәге әллә ниндәй бер юға-ры, таҙа, саф дуҫлыҡ,-мәңгелек ышаныс менән тулҡынып тибә ине.

— Ярар,— тине Юлия,— һеҙҙе тыңлайым. Беҙҙең киләсәк ҙур эштәр ҙә шундай бөйөк дуҫлыҡ менән үтһен,— тине.

Айбулат Юлияның ҡулын ҡыҫып күреште:

— һис шикһеҙ, шулай үтәсәк, Юлия.

Соланда тәмәке тартыусылар килеп инделәр.

Ҡотлояр, Юлия менән Айбулатҡа ҡарап:

— Йә, эш ниҙә ҡалды? — тине.

— Юлияны алып китәбеҙ,— тине Айбулат.

— Булды. Бик яҡшы,— тине Ҡотлояр.— Шунда уҡ Янғолға әйләнеп бойороҡ бирҙе:

— Бар әле, ҡустым «Самсыпал», аттарҙы егеп ҡуйығыҙ. Беҙ бынан йәйәүләп кенә барырбыҙ.

Ҡотлоярҙың был һүҙенән бетәһе лә ҡысҡырып келеп ебәрҙеләр.

Сәғди:

— Бына, Янғол, һиңә бер ҡушамат та яһап ҡуйҙыҡ инде! — тип көлдө.

Янғол быға айырыуса кинәнде.

— Бик шәп. Ниңә! Әлбиттә, самсыпал.

Улар тағы бер ҡабат көлештеләр ҙә, Янғол йүгереп сығып китте.

Юлия нәмәләрен, йыйыштырып, сумаҙанға тейәне. Үҙенең артыҡ күренгәндәй күлдәк, яулыҡ кеүек нәмәләрен Шәмсиәгә бирҙе:

— Иҫтәлек булһын,— тине ул.

Юлияға бауыр баҫып өйрәнгән Шәмсиә түгелеп илай ине.

Иртәгеһенә иртә менән Юлияны тағы ла допросҡа саҡырып килгән десятниккә Шәмсиә:

— Ул өйҙә юҡ. Аръяҡҡа әптиккә дарыу алырға сығып китте,— тип яуап бфҙе.— Көтөп ултырығыҙ, тиҙ ҡайтыр ул,— тип өҫтәне.

Был ваҡытта яҡшы пар туры ат еккән Айбулат менән Юлия Самарға яртылыҡ юлда булған Подъемный тигән ҙур ауылға барып еткәйнеләр инде.

## УРАҠ ӨҪТӨ

### 1

Бынан ике йыл ғына элек Айбулат менән Гелйөҙөм, улдым-талдым менән Ныязғол байҙан сығып, үҙҙәре-

нең ҡарлуғас ояһындай бәләкәс кенә балсыҡ өйҙәрендә үҙалдарына йылы донъя ҡорҙолар. Уларҙың Ныязғол тураһында: «Шул тиклем хеҙмәт күрһәткәс, бер ҙә буш ҡул итмәҫтәр әле, арыу өй һалып, бер-ике баш мал эйәртеп сығарыр, үҙе йотоп киткән ике душ ерҙән дә өлеш сығармай булмаҫ»,— тигән төрле емөттәре барыһы ла бушҡа сыҡты.

Бер кендө ҡаланан Имай бик асыулы ҡайтты. Уның асыуына тейерлек байтаҡ сәбәптәр ҙә йыйылып киткәйне. Әллә була торған, әллә булмай торған эш артынан атаһының бөтә донъяны бирән-талан килтереп йөрөүенә лә унын, ышанысы бик аҙ. Ярай икән, дуҫ күреп ышанған кешеләре уларға яҙҙырған малдарҙы кире ҡайтарһалар... Бишнәктәр зыҡ ҡуба башлаһалар, эш судка китһә. Судты ла еңеп булыр, ә «Йомабаевтар хөкөмгә тартылған -икән» тигән хәбәр үҙе ниндәй хурлыҡ. Ҡарт был хәлдәр менән иҫәпләшергә уйламай. «һөйләмәгәйҙәре, эшем генә эш булһын, күҙ күрер»,-— ти. Етмәһә, шундай эс бошҡан саҡта барып, күңел асып йөрөй торған Наташа ла был барыуҙа, ниңәлер, тырыҫ-мырыҫ килде. Бүләккә алып барған ебәк күлдәк оҡшаманы. Ҡыҙыл, имеш. «Мине әллә башҡорт бисәһе тип уйлайһыңмы? Вкус белмәйһең, минең күҙҙәрем зәңгәр, шуға күрә миңә аҡһыл күк күлдәк кейергә кәрәк»,— ти. Шайтан беләме ни ниндәй күҙгә ниндәй күлдәк кәрәген. Киләһе юлы шундайҙы алып киләм тигәс, тағы ла киреләнә. «Кәрәге юк»,—ти. Киткән саҡта ла, ҡасан киләһең, тип муйыныма һарылыу урынына бик һалҡын ғына ҡул биреп күреште.

Имайға юлға сыҡҡанда эсеп сыға торған коньяктын, ләззәте лә был юлы файҙа итмәне. Ул кырандаста иреп, ҡалғып ҡайтыу урынына, әле ары, әле бире әйләнеп, күсер Сәйетҡолдоң теңкәһенә тейеүҙән бушаманы.

— Шәберәк ҡыуала аттарҙы, һыйыр!

Сәйеткол ҡыуаланы.

— Ниңә ул тиклем елдерәһен, ипләберәк! Булмаҫ һин малайҙан, ҡыуып сығарып, бүтәнде алыуҙан башҡа эш ҡалманы.

Сәйеткол ҡайһылай итеп уның ыңғайына була алмай, ҡайтып еткәнсе, ҡара тиргә төште.

Айбулат Сәйетҡолға ат туғарышырға тотондо.

Имай пальтоһының ҡаракүл яғаһына муйынын тартҡан көйө үҙенен, баҫынҡы тауышы менән ниҙер мөңгөр-. ҙәп һораны. Айбулат ишетмәне.



Имай уға:

— һиңә әйтәм бит, кейеҙ ҡолаҡ! — тип ҡысҡырҙы.

Айбулат унын кемгә ендәшкәнен дә төшөнмәгән көйө:

— Ни нәмә тиГ, кемгә әйтәһең? — тине.

— һиңә әйтәм, ҡолағыңа кейеҙ ҡапланыңмы әллә?

Айбулаттың асыуы ҡабарҙы:

— һин ауыҙыңа йөн тыҡканһың! Юнләп һөйләш, кеше һымаҡ! Тамаҡ 'төбөң менән аҡырма! — тине.

Тәкәббер Имайға шул етә ҡалды. Ул асыу менән ҡомһарып, Айбулатҡа тағы ни тип бәйләнергә һүҙ тапмағандай булып, ашығып атлап баҫҡыстан менеп китте.

Сәйетколь:

— Иллә шәп иттең, Айбулат ағай, миңә көн буйы мыжып теңкәмде ҡоротто, ләғин,— тине.

— Ә һин нимә унан ҡурҡып торҙоң? Сыбыртҡыщ үҙ ҡулыңда, юл буйына һыу эскеһеҙ итеп ярып алып ҡайтмай шуны!

Сәйетколь бығa рәхәтләнеп көлдө лә:

— Ысын! — тине.

Иртәгеһен иртәнге сәйҙән һуң Рәхимә Айбулатты үҙенә саҡырып алып орошорға йәбеште.

— Ни эшләп ул тағы Имаметдин ағайыда ҡаршы тел күтәрәһең? Оятың ҡайҙа? Аш менән атҡанға таш менән атаһың икән.

— Еңгә, мин уға ни әйткәнем?

— Нисәмә йыл буйы эт көтөүендәй семьяң менән беҙҙә тамаҡ туйҙыраһың, рәхмәт юҡ.— Ул шулай теҙеп китте.

Айбулат тағы кире һукты.

— Әйтеп торам дабаһа, мин уға бер нәмә лә әйтмәнем. Үҙе енләнеп.ҡайтҡан да, барыбыҙға бер юлы аҡырып йәбеште.

— Ҡуй, ҡуй, Айбулат, миңә һейләмә. Мин Имаметдинде лә беләм, һине лә беләм. Ул һеҙҙең ише кеше түгел. Ошо йортто, донъяны ҙурайтам тип, көнө-төнө эш артынан саба, йоҡо төҫө лә күрмәй. Ә һеҙ бында, «эт һимерһә, эйәһен тешләй» тигәндәй, туйып ҡотораһығыҙ. Бер-бер ғауға сыҡһа, башында һин, дәжжәлдәй булып, барыһын ҡотортоп алаһың да йөрөйһөң! Ана, Асатайың Да, Истебай ҡаҙағың да һин тип ах итәләр, ә төп хужаны тыңлап йөрөүҙе белмәйҙәр!

Айбулат, ғәҙәте буйынса, бөгөн дә Рәхимә менән һүҙ көрәштереүҙең кәрәкһеҙ икәнен уйлап, уның был һүҙҙә-

ренә яуап та бирмәйенсә өйҙән сығып китергә ҡуҙғалғайны, ләкин Рәхимәнең аҙаҡҡы һүҙҙәре уның асыуын килтерҙе.

Рәхимә:

— һеҙ Имаметдингә тиң дә түгелһегеҙ, уға ҡаршы тел күтәрергә хаҡығыҙ ҙа юҡ. Ул.хужа кеше. Әгәр бик талашҡығыҙ килһә, ана тора Ҡотлояр, ана тора Истебай, Асатайҙар, үҙ-ара ыҙғыша бирегеҙ! — тине.

Айбулат ярһып, ләкин ҡысҡырмай яуап бирҙе:

— Ҡотлояр ағай менән беҙ ғүмерҙә талашҡаныбыҙ юҡ. Мин унан яҡшылыҡтан башҡа бер'нәмә лә күрмәнем. Башҡалар менән дә беҙҙең татыулыҡ боҙорҙай бер үпкәле эшебеҙ булғаны юҡ. Ә һинең Имайың нисә йылдар үҙенә хеҙмәт иткән кешеләргә оялмай аҡыра, уларҙың ҡанын эсә. Беҙ өндәшмәгән саҡта, ул тешен генә ҡыҫһын. Улай итеп ул үҙенең көсөн һыҙшай алмаҫ. Үкенер, һуң булыр,— тине.

Рәхимә асыуынан, аптырауынан урынынан һикереп үк торҙо. Ҡайҙалыр сығып китергә әҙерләнде. Үҙе һаман /ҡыҙаине:

— Ана бит, ана. Күҙгә ҡарап тороп миңә тел әйтәһең, башҡаһына ни һан. Былай булһа, бергә лә тороп булмаҫ. Имаметдин белеп әйтә шул: «Ҡуйынығыҙҙа йылан аҫырайһығыҙ»,— ти. Ысын шул, ҡайһылай ҡаты сағаһьвд!

Айбулат Рәхимәнең һәр ваҡыттағы йомшаҡ тауышы, аҡыллы ҡуңыр күҙҙәренең был тиклем зәһәрле төҫ алыуың тикшергән төҫ менән, нәфрәтле ғәрләнеү менән ҡарап торҙо ла, ҡапыл әйләнеп, ишекте шарт ябып сығып китте.

Ишек алдында самауыр келө ҡағып торған Гөлйөҙөм:

— Әй, ни булды? — тип һораны.

— Ни булһын, һаман шул кеше әрләп, талауҙан бушамайҙар. Нәмәләрҙе йыйна ла Мәғфүрә еңгәмдәргә ташы. Шунан өйҙө таҙартып үҙебеҙгә күсербеҙ,— тине. Үҙе ашығып әллә ҡайҙа ҡапҡанан сығып юҡ булды.

Гөлйөҙөм башта бер үҙе аптырап ҡалды. Ҡайһылай итеп нәмәләрҙе йыйырға белмәй, байбисәләргә әйтергәме әллә үҙем генә ендәшмәй ташына башларғамы, тип уйланды! Үҙе тура һорамаһа ла, Рәхимә берәй нәмә әйтер әле, тип уйлап, өйгә кире инеп һауыт-һабаларҙы йыйыштырырға кереште.



Сығып китергә йыйынған Рәхимә, унын янында бер аз туҡталып:

—- Ана шул, йәш килен, Айбулат минең һейләп бөткәнде тыңлап торманы, асыуланып сығып китте. һиңә һүҙем юҡ, хеҙмәт күрһәттең. Айбулат менән һис тә килешеп булманы. Ул һаман үҙ һүҙен бирмәй икән, башҡа сығығыҙ инде. Бының был яғында баш эйеп, ҡаршы һүҙ әйтмәҫ булһа, тора бирегеҙ,— тине. Ул үҙенең һүҙҙәрен нығытҡандай итеп, ишекте ҡаты ябып сығып китте.

Был хәлдән һуң Гөлйөҙем дә тиҙ айныны. Аш өйөнөң урындыҡ мәйөшөндәге һандыҡ өҫтөнә йыйған кейеҙ, юрған, ике яҫтыҡ, ике мендәр, балаларының ваҡ-тейәк нәмәләрен, әсәһе биргән бәләкәй генә самауырҙы •—бөтәһен йыйып бер урынға өйҙө лә, үҙ уйынан: «Ни булһа ла яҡшыраҡ булыр. Үҙ ояң. Ас тамағым, тыныс ҡолағым»,— тип ҡуйҙы. Был уйҙан уға күңелле лә кеүек тойолдо. Бөтөнләй үҙ иркең.

Гөлйеҙөм, ошо шатлыҡлы ихтыярҙы ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышҡан һымаҡ, сәғәт эсендә бөтә әйберҙәрен Мәғфүрәгә ташып бөттө.

Гөлйөҙөм йыйынғанда, нәмәләрҙе урлап китә күрмәһен тип, мейес янындағы һикегә килеп тексәйеп ултырған Ғәзимә әленән-әле һүҙ ысҡындырып торҙо. Ул Гөлйөҙемгә тура әйтмәһә лә, килене Фаризаға һүҙ ҡушҡан булып төрттәрә ине. Гөлйөҙөм аҙаҡҡы төйөнсөгвн бәйләгән саҡта, Ғәзимә:

— Бына, күсәрхандарҙы ҡара әле. Ике-ес көн буйы ташырҙармы тиһәм, сәғәт тигәндә бөтәләр бит.

— Аҙ нәмәнең ни, рәхәт шул,— тип яуапланы Фариза.

Гелйөҙөм асыу менән Фаризаға:

— Шул рәхәтте һеҙ күрһәгеҙ икән инде! — тине.

•— Ниңә, мин һине үпкәләтәйем тип әйтеүем түгел, йәш килен, күнелеңә ауыр алма,— тине Фариза.

— һин дә кешене үпкәләтмәй мыҫҡыл итергә өйрәнден, шул, хәҙер үҙевден, «һаҫыҡ апанды» ҡыҙы икәнеңде оноттон,! — тине Гөлйөҙөм.

Фариза ҡып-ҡыҙыл булды.

Ғәзимәгә шул етә ҡалды.

— Ана, өндәшмәҫ килендең теле ҡайһылай әсе. Ҡалаҡ-малаҡты теүәлләмәнең, урлап тыҡҡандыр әле,— тине.

Гөлйеҙөмдөн, ғәрлегенән күҙенә йәш килде.

— Кеше ҡоно беҙгә кәрәкмәй. Килешкән һеҙгә килешһен. Ҡара йәштән төшөп һеҙгә эшләнем, һеҙ ағыу сәсеп оҙатаһығыҙ! Кеше ҡоно һеҙҙе лә күпкә ебәрмәҫ әле! — тине Гөлйөҙөм һәм ҡалған нәмәләрен күтәреп сығып китте.

Ул тиҙ генә өйөнөң бикле тәҙрәләрен асып ташлап, усағына ут яғып ебәрҙе. Әсәһенә барып аҡ балсыҡ, бер күнәк эркет һыуы алып килеп, ейөнөн, эсен аҡларға тотондо.

Әсәһе уларҙың башҡа сығыу хәбәренә бик ҡыуанды, ҡыҙына эркетен күтәрешеп килде.

— Ярар, яҡшы булған. Исмаһам, ҡурҡмай-еркмәй үҙ балама тип, ҡунаҡҡа барып йәйрәп ултырырмын. Анау ҡарундарға барып, ҡайһыһы ни әйтер икән тип, уларҙың бүре кеүек аҫтан ҡарап биргән аштарын тамағымды төйөлтә-төйөлтә йотҡансы, ҡоро сәй булһа ла ҡыҙымда иркенләп эсермен. Мал-фәлән бирәләрме икән һуң, исмаһам?

•— Юҡтыр, әсәй, ҡайҙа ул! Бирер булһалар, улай итеп яманлашмаҫтар ине. Бирмәҫ өсөн шулай итәләрҙер...

Өй йыйыштырып бетөүгә, Үмәр, Тимерғәле килеп инделәр.

Муйылбикә уларҙың ни эшләп йөрөгәндәрен һорашты:

•— Ни бар, әллә берәй ергә барып килдегеҙме?—тине, Үмәр екереи яуапланы:

— Эй, анау муллаға кәңәшкә тип барғайныҡ та. Ҡайһылай итәйек, мулла, балалар Ныяҙғолға күп кес түгеп эшләнеләр, маңлай тирҙәре үксәләренә ағып төшкәнсе улар өсөн тырыштылар. Хәҙер килеп уларҙы бер нәмәһеҙ ҡыуып сығаралар. Берәй аҡыл бирмәҫһегеҙме, тигәйнек. Юҡ, ти, ҡайһылай итеп шундай өлкән әҙәмдәргә аҡыл биреп ҡыҫылаһың, үҙҙәре белерҙәр әле, фәлән-төгән, ти. Мин уға: «Был эш шәриғәткә һыямы ни, һин теләһәң Ныяҙғолдо өйрәтергә булдыра алаһың, ул үҙе, дерөҫ, закон башындағы кеше, ә шәриғәттән, диндән уҙып бер ҡайҙа ла китә алмаҫ», тим. «Ҡуй, ҡуй, Үмәр ҡоҙа, ҡарт башың менән көфөр һөйләмә, шайтан ҡотҡоһона 'Үөшмә, аллаһы тәғәлә: «Бирәм тигән ҡолома, сығарып ҡуйырмын юлына, бирмәйем тигән ҡоломдан, тартып алырмын ҡулынан», — тип әйткән. Булмаҫтың арты-



нан һин дә йөрөмә, мин дә йөрөмәйем», ти. Бар, һин уның менән һөйләш!

Тимерғәле көлөп ҡуйҙы.

— һин уны әйтәһең, мин уға: «һин дә, мулла, ғәҙеллеккә тартмайһың, Ныяҙғол беҙҙең, ҡулдан күпме тартыш алды инде. Минең генә ни тиклем еремде тотоноп, аренда хаҡын бирмәй китте, был алла биргән булып сығамы? һин дә ҡул ҡуйып ултырғас, ул иркенләмәй, кем иркенләһен?» — тип ҡыҫымға алғас: «Ярай, ярай, Тимерғәле, минең ашығыс юлым бар»,— тип тиҙерәк китмәк менән булде.

— Ҡуй, шуларҙы ауыҙға алып һөйләп тормайыҡ,— тине Үмәр, иҙәнгә төкөрөп ҡуйҙы.

Оҙаҡламай Айбулат, Әхмәҙи, Ҡотлояр шаулашып килеп инделәр. Ҡарттар менән һаулаштылар. ..

— һу, яңы тормош ҡотло булһын! — тине Ҡотлояр.

Айбулат уға ҡаршы көлөп яуап бирҙе:

— Яҡшыраҡ телә, Ҡотлояр ағай, «яңы байҙың яңы өйө» тигән бул, исмаһам.

Уларҙы Үмәр бүлде:

— Әле шуны һөйләп ултырабыҙ, донъяла дөрөҫлөк тигән нәмәнең әҫәре лә ҡалмай бара бит.

— Нинә улай тиһең, ҡоҙа? — тип һораны Ҡотлояр.

Үмәр менән Тимерғәле үҙҙәренең баяғы муллаға ба^рып йөрөү хәбәрҙәрен ҡабатланылар.

Айбулат менән Ҡотлояр уларҙың үҙҙәренә асыуландылар.

— Тапҡанһығыҙ икән эш! Муллаға барып хәйер һорап йөрөргә һеҙгә кем ҡушҡан һуң?

— Әҙәм көлдөрөп йөрөгәнһегеҙ шунда!

Тимерғәле бирешмәҫкә тырышты.

— Ятып ҡалғансы, атып ҡал, ни эшләп өндәшмәҫкә кәрәк?

— Ай, ҡуйһаңсы, Тимерғәле ағай,— тине Ҡотлояр.— Атҡанһығыҙ инде, харап! Мулла ни ул.Ныяҙғолдоң манара башына ҡуйылған ҡараекыһы бит. Теге минең Михайланың баҡсаһында ҡарғаларҙы өркөтөргә ҡуйған ҡараҫҡы бар бит, шуның һымаҡ. Мулла мәсет башынан халыҡты өркөтә, Ныяҙғол емеш йыя.

Үмәр ҙә, аптырағас, көлөп ҡуйҙы:

— Инде һин табырһың инде, ҡоҙа,— тине.

Айбулаттың көлгеһө килмәй ине. Шуға күрә ул:

— Юҡ артынан, ғәрләнмәйенсә, муллаға тағы ла барып йөрей күрмәгеҙ. Ятып ҡалғансы, атып ҡалыу ундай булмай ул. Ваҡыты килер, сәсрәтеп атырбыҙ! — тине.

— Йә, ярай, ярай, кейәү. Беҙҙе, ҡарттарҙы, орошмағыҙ инде. Үҙебеҙсә яҡшылыҡ итәйек тигәйнек бит инде. Булмаһа, төкөрөп ҡуяйыҡ. Кеше күҙ йәше бер ваҡытта ла юғалмай ул. Һинең хәләл көсөң, уларҙың харам тамаҡтары. Ана, минең күк байталды ал. Һыйырығыҙ бар. «Илдә сәпсек үлмәй», тиҙәр. Көн күрерһегеҙ әле. Аяҡҡулығыҙ һау булһын! — Ул тәрән көрһенеп ҡуйҙы,

Бер нисә көн үткәс, улар ей ҡотларға ҡунаҡ саҡырып алдылар. Өй ҡотлап, Гөлйөҙөмдең әсәһе бер кейеҙ, еңгәһе аҫлы-өҫлө ике сынаяҡ, Мәғфүрә бер өлкән ҡоштабаҡ, Тимерғәле менән Сәғиҙә ике туҫтаҡ, Шәһиҙә әбей бер бик матур сәй сәйнүге бүләк иттеләр. Әхмәҙи ике боттай он күтәреп килде. Үмәр үҙенең һөргән еренән бер әсминник ер күрһәтеп:

— Шунда сәсеп ал. Балаларҙың бәхетенә үҫеп китһә, аҙ булһа ла, тамаҡлыҡ булыр,— тине.

2

Айбулат менән Гөлйөҙөм быйыл үҙҙәренең ғүмерендә беренсе башлап сәскән ярты десятина ерҙәрендә иген эшләйҙәр. Улар үҙҙәренең дә, Үмәр ҡарттарҙың игендәрен дә арлы-бирле эш итеп алып, ҡалған ваҡытты байҙарға ялланып урып, өҫ-башҡа кейем яһамаҡсы булып ашығалар ине.

Ҡыҙыл эңер таң аллығы менән бергә ялғана, көн тенгә тоташа. Ял итеү, туйғансы йоҡлау тураһында уйларға ла ваҡыт юҡ. Айбулат көн дә, урып алып ҡайтҡан көлтәләрен бушатып та бөтә алмайынса, сисенмәгән көйгә урындыҡҡа ауа. Оәй яһағас, Гелйөҙем уны тартҡыслай-тартҡыслай көскә уята:

— Йә, тор инде, сәйеңде эсеп йоҡла. Төш ваҡытынан бирле тамағыңа бер нәмә ҡапҡаның юҡ. Ҡарының асҡандыр, тор, тим!

Айбулат йоҡоло күҙҙәрен саҡ ҡына асҡан көйө, ятҡан еренән ҡырын ғына әйләнеп, терһәгенә таяна ла, ике сынаяҡ сәйҙе ашығып һемереп, тағы ла йоҡлап китә.

Гөлйөҙөм уны һаман уята:

— Бына, аҙыраҡ ҡаймаҡ ашаһаңсы! — тип инәлә. Ләкин Айбулат ҡабат уянмай.



Гөлйеҙөм үҙе лә көн буйы ураҡ урып арыған. Ҡайтып, һыйыр һауып, тамаҡҡа әҙерләп, балалары менән булашҡансы, төн уртаһы етә. Тағы иртә торорға кәрәк. Ул самауырын бер яҡ ситкәрәк шылдыра, шәшкеләрен ашъяулыҡ менән ҡаплай ҙа, Айбулат менәй балалары араһындағы буш урынға мендәр ырғытып, башын һалып йоҡлап китә.

Гөлйәҙем күпме ваҡыт серем иткәндер, ул тешөндә, йөк өҫтөндә ҡайтып килгәндә күк бейәнең дилбегәһен • ҡағайым тигәнсе, күк бейә, арбаныҡапыл шаҡарып, көлтәһе-ние менән Гелйөҙөмдө Ырғыҙ ярынан ауҙарып ебәрҙе, имеш, тип күреп, ҡапыл тертләп уянды, Унын йөрәге леп-леп итеп йыш һуға. Ял итеп әлгермәгән тәне ҡыҙып янып бара.

Гөлйөҙем тешөнән ҡурҡып уянһа ла, ваҡыттың иртә булыуына ҡыуанып, ырғып торҙо. Айбулатты уятты.

— Һин, тор, таң яҡтырып киткән. Көлтәңде бушата һал,—тине.

Айбулат һикереп торҙо. Урынына төшөп киткән таҡыяһын алып кейҙе. Ике ҡулы менән битен_ныҡ итеп ыуалап һыйпап, ҡыҫҡырып иҫнәне, быуындары шытырҙағансы, ныҡ итеп кирелде лә, соландағы һәнәген ҡулына тотоп, һырткы кәртәгә сыҡты.

Таң яңы матур булып алланған. Ситән һырлығып үҫкән алабута, кесерткән, дегәнәк япраҡтарында эре ысыҡ тамсылары ялтырайҙар. Иртәнге саф һауаға ерҙән саҡ ҡына дымлыҡ бәрелеп, тынды еңеләйтә.

Урамдан егермеләп йөклө арба шығырҙап үтте. Был НЫЯЗРОЛДОН, машина менән һуҡтырып өлгөртеп, игендең хаҡлы сағында ҡалаға оҙата торған яцы бойҙайы. Арттағы арбаларҙың береһендә Асатайҙың тауышы. Ул алдан барғандар менән ни тураһындалыр ҡыҫҡырып һөйләште лә, кетөүҙәге ғәҙәте буйынса, оҙон бер көйҙө һыҙҙырып ебәрҙе.

Кәртә эсендә Гөлйөҙөм һыйырын ороша:

— һәукәш, һәукәш! Бегөн ни күрҙең һуң! Ҡойроғоңдо сәпелдәтмә! Битте әсеттергәнсе һуғаһың. Кәзә һөтөндәй һетең юҡ, сыпрандарға беләһең!

Унын артынан йоҡа силәккә тез-тез итеп бәрелгән һөт тауышы ишетелә башланы.

Гелйеҙөм шулай итеп, Айбулат келтә бушатып, ат еккәнсе, һыйырын кетөүгә ҡыуып, өйҙәге эштәрҙе бөтә һалып, балалары өҫтөнән йоҙаҡланы. Ул Шәрифә апа-

һына ей аскысын югертеп алып барып ташлап, сепрәккә уралған ике ураҡты, ҡатыҡлы көршәкте, таҫтамалға урап алған сөсө икмәген алды ла фургонға менеп ултырҙы.

Күк бейә, әллә ҡасан өйрәнеп бөткән юлы менән башын сайҡап барып, ыҙан буйлап боролдо ла үҙҙәренең еренә барып туктаны. Айбулат үрәсә аша һикереп төштө лә, ҡатығын түкмәҫкә тырышып, Гөлйеҙемгә тешөргә ярҙам итте.

Уларҙан өсенсө ыҙанда Тимерғәле ашлығы. Улар өйгә ҡайтмай ятып урғанға күрә, ырамлы уралар. Бик иртә тороп тотонғандар, ахыры, әллә ни тиклем ер алғандар.

Гөлйөҙөм, быны күргәс, кенләшкән кеүек булды:

—• Иә хоҙайым, бынау Сәғиҙә еңгәмдәрҙе әйтәм, ысыҡҡа ла ҡарамай, таң ҡараңғыһынан тотонғандар микән, ике ал сығып та ташлағандар. Беҙҙең ни ваҡ балалар менән булашып көн үтә, уларҙан тиҙ генә йырынып китеп буламы. •

Айбулат ат туғара-туғара яуап бирҙе:

— Сыҡһындар, беҙ ҙә барыбер бөгөн бөтөрәбеҙ. Ике-өс көн тапатһаҡ, унан өйҙө бикләп, тәҙрәләрҙе ҡапларбыҙ ҙа, ялланып сығып китербеҙ. Тимербулатты усма һалырға өйрәтербеҙ. Ана, Сәхипкирәйҙәр ес йәнгә бер йомала десятина ярым урғандар, ти. Десятинаһы биш һум, ашау байҙан, ти.

Айбулаттың был һүҙҙәренә Гелйөҙөм уйы менән: «Беҙ ҙә улар кеүек ялланып бер өстө урһаҡ, ун биш һумлап аҡса тейә. Өйҙәге үҙебеҙҙең ашлыҡ теүәл тора. Үҙебеҙгә, балаларға өҫ-башлыҡ була», — тип уйланды ла, ошо уйҙарын ослаған кеүек:

—• Яумай ғына торһа инде,— тип ҡуйҙы.

Улар ашап-эсеп торманылар, үҙҙәренең ошо ниәттәрен тиҙерәк булдырырға тырышҡан шикелле, еңсәләрек тиҙ генә кейә һалып, ашығыш урырға керештеләр.

Ашлыҡтың уңған йылы. Ураҡтың һәр бер аймауына бер усма. Ҡоро, һығылып, һынып бара.

Айбулат менән Гөлйөҙөм икәүһе лә бик шәп ураҡсы. Улар ураҡ урған саҡта ҡулдары ҡулға теймәй. Улар әле лә шулай йәһәт эшләп ас ал сығып ташланылар. Шунан ғына ашарға ултырҙылар.

Улар янына Тимерғәле килде.

—• Алла ҡеүәт бирһен!

— Улай булһын, олатай!



—• һаулыҡмы?

— Бик һаубыҙ әле, үҙегеҙ һаумы?

— Аллаға шөкөр.

—| Олатай, әйҙә беҙҙең менән ҡатыҡ эсергә ултыр,— тип Айбулат уға урын күрһәтте. Үҙе түбән шыуҙы.— һеҙ бәтәһегеҙме әллә, олатай?

—' Зсмәйем, балам, рәхмәт, ҡуҙғалма. Бөгендән ҡалмаҫка тырышҡайныҡ та, әллә инде.— Ул башындағы ҡайыш һымаҡ йышылып беткән ҡара таҡыяһын алып, уның менән тирләгән саңлы битен, керле елкәһен һыпырҙы, уны яңынан маңлайынараҡ төшөрөп кейҙе лә, Айбулаттың тәртә күтәреп яһаған ҡыуыш күләгәһенә килеп, ике тубығын ҡосаҡлап ултырҙы.

—• Бик ауыр, улым. Быйыл әллә ни бик ныҡ бирешелде бит әле. Йәш заман түгел шул. һеҙҙең кеүек саҡта мин һәр һыуһынға сирек десятина урып ҡуя торғайным. Хәҙер әллә ни, әллә ҡартлыҡ, әллә заман ауыр шунда. Борон ни, ер-һыу иркенерәк саҡта, ваҡ-сыбыр мал аҫырап, йәйге эш ваҡытына ике-өс тәкә һуйып, ит ашап, һурйа эсеп эшләй торғайныҡ. Хәҙер ул юк. Бына ерҙең күбеһен бишнәккә һатканы бирле, тамаҡ иткә түгел, һөткә лә туймай башланы. Шунан ҡайҙан көс булһын. Етмәһә, Сафураһы ҡулын ҡырҡып ҡуйҙы. Әллә кемгә оҡшап, сәпәп ура бит, алйот бала! Ә сәпәп урһаа, ҡул ҡырҡылыусан була ул. Әйтһәң дә белмәй. Әсәһе өйҙән бушамай. Исхаҡ, ситтән ялсылар килеп тулып, эш хаҡы арзанайып китмәҫ борон тигән булып, ҡабаланып Ныязғолға ялланды. Кеше күбәйһә, ул да буш хаҡка эшләтә башлай. Бына шуға ыратып булмай ҙа ҡуя.

— Улай ҙа үҙебеҙҙең игенде башҡарып бетөп, ураҡка ялланырға ла өлгөрербөҙ әле.

—• Өлгөрмәгән ҡайҙа ул. Ныязғолдоң игене ни донъя ерен ябып ята әле. Анау Ҡарамалы типһәнендәге тигеҙлеккә үҙе саба торған машина төшөргән, ти. Ул сабып йөрөй, ти, ә унан һуң игенде бесән шикелле итеп күбәләһәң дә, келтә шикелле итеп бәйләһәң дә була, ти. Ен кеүек эшләтә, ти. Әле шулай булғанда ла, бынау йыуалытау бите, Ҡырлас морон башы, Ҡупасай күле янындағылары әле... и...—• Тимерғәле ағай тауышын һүҙып, ҡулын алыҫка һелтәне.

Айбулат, уны тыңлағанда, үҙенең әллә нигә лә Ныязғолға барып ялланмаясағын уйланы.

Гөлйөҙөм, Тимерғәле ағайҙан тартынып, яулығын түбән төшөргән көйө ашаны ла, шыбырҙап ҡына:
— Йыйыштырайыммы? — тип һораны.
—• Ал, йыйыштыр, туйҙым,— тине Айбулат.
Гөлйөҙөм ҡалған икмәк һыныҡтарын, ашъяулыҡҡа урап, ҡыуыш төбөнә һалды. Көршәгеи сайҡап түңкәрҙе.
Айбулат менән Тимерғәле лә урындарынан торҙолар.
—• Ярай, балалар, бөтерә һалайыҡ. Ана Хисамиҙекеләр кисә үк беттөләр, — тине. Ул билен ыуалай-ыуалай үз» ҡыуышына ыңғайланы.
Айбулат, уға ҡарап тороп, уны бик йәлләне.
—• Урып бөтәйек инде, олатай. Ә тапатҡан саҡта мин дә һеҙгә ҡулғамытлыҡ итермен. Күк бейәне лә ҡушырбыҙ,— тине.
—• Ярай, ярай, яҡшы һүҙеңә рәхмәт, улым. Иөҙәтте бит бына биле, ҡороғоро.— Тимерғәле ағай тағы ла туй-•. таңлап атлап китте.
Айбулат тағы ла ҡартты йәлләп һөйләнде:
— Ҡарт быйыл әллә ни биреште шул. Исхаҡ бер егәрле генә кәләш алып ебәрһә, әллә был ҡарт та бер түргә менеп, рәхәтләнеп ултырыр ине.
—• Нишләп һуң әле ул һаман буйҙаҡ йөрей икән? һөйгән ҡыҙы ла бар шикелле?
—• Эйе, бик еңел һинә. Мал, аҡса ҡайҙа? Хәҙер ҡыҙҙар ҙа ҡыйбатайып китте.— Айбулат Гелйеҙөмгә ҡарап көләп ҡуйҙы.—• Барыһы ла һинен. менән минең кеүек була алмайҙар шул. Беҙ генә ул һыпыра һуғып ҡастыҡ та киттек!
Гөлйөҙөм дә келдө:
—' Эйе, барыбер бвтә кешенән ҡыйбат түләнең дә инде!
— Уныһын икәүләп бит.

3

Ҡояш төшкөлөкжә еткәндә, унщ ҡыҙыуынан ялан ялҡынға әйләнде. Иген баҫыуҙары, еҙ келәмдәр кеүек ялтырашып, күҙ;әрҙе сағылдырып көйрәп ята. Эҫелектән ирендәр кибә, тамаҡ сатнап ауырта башлай. Мискәләрҙәге иртә менән килтереп ҡуйған боҙҙай һыуыҡ ҡоҙоҡ һыуҙары хәҙер ҡайнарға етешеп эҫергән. Көлтә аҫтына ер соҡоп ултыртып ҡуйылған айранлы көршәктәр ҙә йылынғандар. Был айранды күпме эсһәң дә һыуһынға



теймәй. Тик нисек тә б,улһа, кискә тиклем түҙергә, һыулап башҡа ябынған яулыҡтарҙын. һыуын әйләнгән һайын алмаштырып, яндырып барған ҡыҙыулыҡҡа сыҙап, ура бирергә кәрәк.
Ошо йәһәннәм утында интегеп йөрөгән ураҡсылар киң яландың төрлө еренә төрлөсә һибелгәндәр. Уларҙын, -ҡайһыһы алыҫтан ҡарағанда уртаса ҙурлыҡтағы һары аласанан да елкән күреамәгән үҙенен, буйһыҙат игененде, Айбулаттар һымаҡ, ике-өс кеше булып суҡанлайҙар. Былары—• тиҙерәк кенә үҙ игенен йыйыштырып алып, ялланып китерг.ә ашығыусылар. Ҡайһы бер киңерәк загондарҙа бнш-алты кеше эшләгәне күренә. Улар инде ауылдың урта хәллер&ктәре. Иҫән-һау үҙ игендәрен генә йыйып алып, тамаҡлыҡ яһап, бәлки, өҫ-бащка ла арттырырбыҙ, тип уйлаусылар.
Артабан инде, Ҡырлас тауҙын, көньяҡ һөҙәгенән башлап, һары диңгеҙ кеүек тулҡынып, сиге ҡайҙа икәне күренмәгән иген яланы йәйелеп ята. Был Ныяҙғолдоң ауыл кешеләренән әкренләп, оҫталап, арендаға, шунан вечныйға әйләндереп, үҙенә юҡ-бар хаҡҡа ғына күсереп бөткән ерҙәре. '
Был ерҙәрҙең арғы башы әллә ҡайҙа, күҙ күреме ерҙән ҡушарлашып күгәреп күренгән бейек Ҡушуба тауҙан да ары үтеп китә. Ундағы ураҡсыларҙың да күбеһе бер нисә йылдан бирле ерҙәрен һатып, ерһеҙ ҡалып, «бишнәк» исеме күтәреп алған башҡорттар.
Бьшда уларҙан башҡа ла бик күп алыҫ ерҙәрҙән күп терле халыҡтар йыйылған. Рустар ҙа, сыуаштар ҙа, татарҙар ҙа бар. Уларҙың ҡыуыштары, сатырҙары ла, күсеп йөрегән сиған көймәләре һымаҡ, терле ҙурлыҡталар һәм сыбарҙар. Улар һәр кем үҙ өйерө, үҙ ауыл кешеләре менән твбәкләшеп урынлашҡандар. Улар ошо сикһеҙ йәйелгән иген ҡырышда һәр бер кеше ес-дүрт ҡоластан ал бүлеп алғандар ҙа, ҡайһыһы алдараҡ, ҡайһыһы арттараҡ ҡалып, теҙелешеп, баштарын ҡалҡытмай алға шыуалар, тан, ҡараңғыһынан төн уртаһына тиклем ураҡ уралар.
Ныяҙғолдоң приказчиге Алламорат көн һайын ике тапҡыр һыбай үтеп, урылған ерҙең таҙалығын тикшерә. Иртәнсәк ҡояш ҡалҡҡанда, кис ҡояш батҡанда эре, ауыр бойҙай башаҡтары ҡалын ҡамыл араһьшда ялтырап күренеүсән булалар. Ураҡсыларҙың һәр береһе ошо күнелһеҙ мәлде ихтыярһыҙ көтөп ҡаршылай. Әгәр ҙә бе-

рәүҙең урған ерендә биш-алты башаҡ ҡалһа, Алламорат һағыҙ кеүек йәбешә, эт кеүек ларһылдай:

—> Хәҙер үк йыйып алығыҙ. Юҡһа хаҡығыҙҙы кәметәм, биш һум урынына өс һум,— тип ҡысҡырына.

Был шелтәләргә эләккәндәр, баштарына һуғылған Нымаҡ, тиҙ-тиҙ эйелеп, үҙҙәренең урған ерҙәрендә эҙләнә, сүпләнә башлайҙар. Ҡайһылары был эшкә үҙҙәренең бәләкәй бала-сағаларын ҡушалар. Ула.р приказчик килгәнгә ҡәҙәр үк, аяҡтарын ҡамылдан йырттыра-йыртты-ра, башаҡ сүпләйҙәр ҙә ата-әсәләренә килтереп бирәләр.

Ураҡсылар өсөн бетә ауыр, оҙон йоманың иң ҡыҙыҡлыһы йәкшәмбегә ҡаршы шәмбе көн кис була. Ул кендө ирҙәр үҙҙәренең ураҡтарын көндәгенән иртәрәк ташлайҙар ҙа, күлдәк-салбарҙарының аламаларын ялпылдатып, шаулашып, төркөмләшеп, Ныязғолдоң яланға ултыртып ҡуйған йәшел будкаһы янына ашығалар.

Будка эсендә, үҙен тәхеттә ултырған батша һымаҡ хис итеп, Алламорат ултыра. Ул бөгөн башҡа көндәрҙәге кеүек асыулы түгел. Ҡаҡса таҡыр башына ҡара таҡыяны ҡырын кейеп, ҡыҙыл сатин күлдәгенең ендәрен терһәгенә тиклем һыҙғанып, счет төймәләрен уйната, хәйләкәр күҙҙәрен ҡыҫып, эре һары тештәрен күрһәтеп йылмая. Шунан бик эре генә ҡиәфәт менән башын артҡараҡ саңҡайта биреп:

—• Заһидуллин Шәйдулла! — тип, танау буйлатып ҡына ҡысҡырып ҡуя.

Исеме сыҡҡан кеше өтәләнеп будка тәҙрәһенә барып өңөлә. Башҡалар ҡояшҡа янып ҡарайып, ябыҡлыҡтан сикә һөйәктәре сурайып сыҡҡан биттәрен алға һуҙып, үҙҙәренең сираттарын көтәләр.

Ләкин арҡа-билдәрҙе һыҙлатып эшләп, ҙур өмөтлө хыялдар менән көткән был эш ялдары бик самалы — бер нисә тәңкә лә бер нисә тин генә була. Ураҡсыларҙын, бик баҫалҡы, күндәмдәре йәки эсмәй, тартмай торған ҡарттары, был тиндәрҙе бәртекләп һанап, әллә нисә ҡат сепрэккә төйнәп, салбар кеҫәләренең иң төбөнә һалып ҡуялар. Щунан улар бер нисә тин, йәки бер һум ғына сығарып, бер-ике ҡаҙаҡ ит, берәй әсмүхә шәкәр, бер нисә мыҫҡал сәй алып, йомаһына бер тапҡыр булһа ла, семьяһы менән итле һурпа, шәкәрле сәй менән һыйланып, иртәгеһенә тағы ла шундай тиндәрҙән «хазина» йыйыр өсөн таң ҡараңғыһынан, билдәрен б^гөп, ура башлайҙар.



Ураҡсылар араһында ҡайһы берәүҙәре, бөтә ғүмерҙәрен ялланып эшләп үткәргәндәре, эшләп байыуҙан күптән өмет өҙгәндәр. Ундайҙар эш ялы алғас, йәшел будканан тәүҙә ваҡ-төйәк ашау-эсеү нәмәһе, шунан, аҙыраҡ һөйәк-һаяҡты йомшартырға тип, берәр бутылка аҡбаш араҡы ла алып китәләр.

Башҡорттар төбәге расчет алған саҡта, Сафаның, Әхмәҙи менән Ҡотлоярҙың сираты бергә тура килде.

Әхмәҙи бисәһе менән үҙенә тейгән дүрт һум һикһән тинде һанап алғас, ҡаҙаҡ ярым ит, ярты ҡаҙаҡ монпаси менән генә ҡәнәғәтләнергә уйлағайны.

Унын артынан торған Ҡотлояр, шаяртып:

—• Ҡоҙа, ниңә берәр бутылка аҡбашты алмайһың, әллә ҡоҙағыйҙан ҡурҡаһыңмы? — тип кәлдө.

Әхмәҙи быға ла ҡарамаҫ ине, тирә-яҡтағылар ҙа Ҡотлоярҙы йөпләгән һымаҡ келөштөләр. Бигерәк Сафа ҡуймаңы:

—• Әйҙә, әйҙә, Әхмәҙи, ал берҙе, мин дә алам, йырлашып ултырырбыҙ,— тине.

Әхмәҙигә алырға тура килде.

Башҡалар ҙа алдылар:

—• Әйҙә инде, байлыҡ бер айлыҡ, һаҡлап ҡына тотһаң, ярлылыҡ мәңгелек,— тип, үҙҙәренен, нужаларынан үҙҙәре көлә-көлә стандарына юнәлделәр.

Ҡотлоярҙың былай ҡайтыуына Мәғфүрәнең эсе ҡырһа ла, тыштан белдермәҫкә тырышты. Диләгә тиҙ үк һыу кйлтерергә ҡушып, үҙе өстағанға аҫып ут яҡты.

Йәйҙең ҡыҫҡа һалҡынса төнө яланды ҡапланы. Көн буйы эҫегә әлһерәгән ураҡсылар был һалҡынса һауаны тәрән һуланылар.

Ҡотлояр, күлдәк иҙеүен ысҡындырып ебәреп, итәген елпетте:

—• Эх, көндәҙ ҙә шулай булһасы, үҙе лә урылыр ине, — тине. Мәғфүрә бешергән итле ҡуйы тукмас алдынан араҡы бутылкаһын асып, ҡоршаулы сынаяҡҡа мөлдерәтеп ҡойоп эсте, бер ахылдап, ситкә ҡарап тын алды ла аш ашарға керешге.

Мәғфүрә унын иҫереп китеүенән ҡурҡып:

— йә, һин самалап ҡына. Юҡһа ашай ҙа алмай йоҡлап ҡала төрғанһың,— тине.

— Ниңә, мин бүтән эсмәйем.

Ашап-эскәс тә унын йәне тыныслаҡманы. Ул, Мәғфүрәгә сәй әҙерләргә ҡушып, хәҙер генә әйләнеп килергә 

булып, Әхмәҙи янына, унан кемдәр менәндер күмәк йыйылышып, ҡурай, йыр менән шаулашып, әллә ҡайһы алыҫ төбәктәргә китеп юғалдылар.

Мәғфүрә уларҙың был китеүҙәре оҙаҡҡа икәнен белгәнгә күрә, сәйгә уны көтөп торманы. Хәмдиә менән Сафа бисәһе Сабираны саҡырып килтереп, өсәүһе һөйләшеп ултырып, оҙаҡ итеп сәй эстеләр,

—• Шәкәрле сәй тә.мле шул. һинеке монпаси ҙә алған икән, Мәғфүрә еңгә.

— Алған. Бик тәмле монпаси. Ҡушып эсегеҙ,— ти Мәғфүрә.

Сабира зарлана:

— Эй алам, был ирҙәрҙе, ни тип шул ағыуҙы эсәләр икән? Иртән ул ауыртҡан баш менән эҫелә нисек урмаҡ кәрәк.

—• Әллә инде, ҡороманы бит шул йәшел будкаһы ла. Ҡоҙаң минә, күлдәк алырһың тип, өс тәңкә ҡалдырҙы ла, ҡалғаны кеҫәһендә китте. Эсеп бөтмәһә ярар ине,—- тине Мәғфүрә.

— Ярай һинә ҡалдырған әле. Беҙҙеке бөтәһен дә алып китте. һораһаң, әрләй. Ҡуй инде, беҙ ҙә донъяла торабыҙ тип, торабыҙ инде шунда.— Сабира зарланып туҡтай би-рҙе лә, алыҫтан килгән тауышҡа ҡолаҡ һалып: — Ишетәһегеҙме, ҡайһылай геүләшәләр. Гармун уйнайҙар,— тине. •

Мәғфүрә менән Хэмдиә лә тыңлап:

—• Эйе шул, бал ҡорто бала айырғандағы кеүек зыулайҙар.

— Самар яҡтан килгән мишәр бурлаҡтары араһында һәләк тигәнсә оҫта скрипкасы бар, шуны тыңларға . китҡәндәрҙер әле беҙҙекеләр.

—• Шулай, ти, шул. Эй, бер генә ишетһәң ине, исмаһам.

Алыҫтараҡ бер ҡыуышта илаған бала тауышына кемдер уянып, уны орошто ла әүелдәп бәүетеп йоҡлатырға кереште.

һуңға ҡалып ай ҡалкты.. Уның яҡтыһында бейек оҙон ҙураттар бер йәнһеҙ хыяли ҡала кеүек булып килеп ҡалҡтылар. Улар арьяғындағы рустар станынан көсле хор менән йырланған «Дубинушка» йыры был серлелекте тағы ла көсәйтте. Башҡорт бисәләре телен аңламаһалар ҙа, был йөрәк тулҡындырғыс көйҙөң тәрән моңон уйға батып, ҡалғып-ҡалғып тыңланылар.



Мәғфүрә уйланып:

— Нишләһендәр инде, һәр кем үҙенсә зарлана, үҙенсә күнел аса шул,— тине.

Әсәләренең һүҙен дә, алыҫтағы йыр-моңдарҙы ла тынлап, йоҡламай ятҡан Дилә:

— Әсәй, ҡара әле, йондоҙ атылды,— тине.

— Ярар, балам, ҡысҡырма, укын. Бер кешенен, ғүмере беткәндер, — тине әсәһе.

## УТ АРБАҺЫ

Бәләкәй генә енел автомобиль. Ул кин. яландың тигеҙ юлынан, күнһел шар һымаҡ тәгәрәп, артынан оҙон аҡ саң ҡойроғо ҡалдырып, ауылға яҡынланы. Ололар бот сабып хайран ҡалдылар. Иәштәр ҡыҙығып килеп уның ҡанат, тәгәрмәстәрен һыйпап ҡарайҙар. Унын, үҙен-үҙе атһыҙ йөрөтөүенең серен тикшерәләр. Уға яҡын килергә ярамаған ҡатын-ҡыҙҙар бала-сағаларынан ишетеү буйынса — ут менән йөрөй, ти, «Ут арбаһы» икән, тип исем ҡушып ҡуйҙылар.

Уның рулендә тулған ай кеүек ялтырап көләп Ныязғол бай үҙе ултыра. Түргә Миңлекәйҙе, гимназияла уҡыған ҡыҙы Фатиха менән тағы бер ҡала ҡыҙын ултыртҡан. Улар, бөтә ғүмерҙәрен ошо машинала ғына йөрөп үткәргән кеүек, бер иркен маһайыу менән тирәяҡҡа иғтибар итмәй генә, алтын беләҙекле ҡулдарын ихтыяр ҡуйып, аҡ ебәк шәлдәрен ҡалпаҡ аша елбәгәй һалып ҡына йылмайып ултыралар. Оло урыҫ ауылдарын үткәндә Ныязғолдо таныш купецтәре ҡаршы сығып алалар. Улар менән ҡул биреп күрешеп, баштарын сайҡап апты.рашҡандан һуң, уларҙы өйҙәренә алып инеп ҡунаҡ итәләр. Сәй янында Ныязғол уларға был машинаның оит илдән килгәнен, бензин менән йөреүе, көсө, тиҙлеге тураһындағы бетә хикмәттәрен һөйләгәс, мендән артыҡ түләп алғанын әйтеп, уларҙың тағы бер тапҡыр иҫтәрен китәреп ҡуя.

Айҙаҡайға ҡайтып етеп уны бер килке шаулатыи алғас, Ныязғол бер кемде лә индереп үҙенә оронсоҡламаҫҡа ҡушып, түр бүлмәгә үтеп диванға ятты.

Ул юлдан арыған булһа ла, йоҡоға талманы. Артҡа ҡалған эштәрҙең ҙурлығы, ҡатмарлылығы һәлмәк ауырлыҡ менән уны баҫып алды ла, ул шуларҙы нисек тә сейәләтмәй осона сығырға пландар ҡороп, уйға ҡалды.

Миңлекәй бисәләр янында яңы ҡаланан килгән уҡытыусы менән көндәштәрен таныштырҙы. Был уҡытыусы, ире Ҡазан ҡалаһында үпкә ауырыуы менән үлеп, үҙе йәше тулмаған бала менән етем ҡалғанын, хәҙер уҙҙәрендә тороп, балалар уҡытырға һөйләшеп килгәнен һөйләне.

—' Исеме Зәйнәп. Бик һәйбәт, баҫалҡы. Анау балалар тыртаңлап урамда югергәнсе, исмаһам, уҡып, өйҙә ултырырҙар. Иәштәре уҙып китһә, унан ҡалалағы ҙур уҡыуға инә алмай ҡалырҙар.

Ғәзимә:

•— Балаһы йәшерак икән, илаҡ булыр инде,— тине.

Миңлекәй ул турала алдан уйлағайны.

—• Үҙен анау ҡыҙҙар бүлмәһенә ҡуйырбыҙ ҙа, Диләкәйҙе бала ҡарарға алырбыҙ, әле балаһын апаһына ташлап ҡалдырҙы, көҙһөҙ алып та килмәҫ әле,— тине.

Атаһының Самарҙан һуҡкан ашығыс телеграммаһын алыу менән, шул көне кис үк Имай ҙа Быҙаулыҡтан ҡайтып төштө. Ашау-эсеү мәшәҡәттәре бөткәс, залдағы диванда улар икәү генә ҡалдылар.

И,май, үҙенең ғәҙәте буйынса, һүҙҙе тәүҙән үк эш тураһында башланы.

— Атай, мин игендең яртыһын тиерлек оҙаттырҙым.

— Хаҡы нисек?

—• Арыу. Был йома эсендә беҙҙеке тирә-яҡтағыларҙан алдын бара.

—• Ярағән. Минең дә эштәр юнәлеп бөтөп бара тиерлек. һине ашығыс ҡайтарыуым да шул, бергә кәңәшеп, ҡайһы бер эштәрҙең осон тейнәп ҡуйыу ине.— Ул туҡтап уйланды. Түңәрәк һаҡалыш уң ҡулы менән һыпырып ҡуйып, тағы дауам итте.— Өсөнсө йылғы банктан ауыл хужалығы ҡоралдарына тип алынған йөҙ егерме алты мен. һумдың түләү срогы яҡынланы. Уны процентттәре менән түләй башлаһаҡ, үҙеңә мәғлүм, быға тиклем булған аҙаптар юҡка сығаса-к. Байтаҡ ерҙе лә ҡулдан ысҡындырырға тура киләсәк. Шуның өсөн уны хәҙергә бөтөнләй түләмәҫкә кәрәк.

— Ә ни эшләмәк булаһың?

— Минең быға тиклем һөйләшкән, килешкән һәм алған ерҙәрҙе йыйғанда, үҙебеҙҙең башҡорттарҙан вечныйға алынған ер мең ярым десятина, һинең алғандарыц ике меңгә яҡынлай. Бөтәһен дүрткә иҫәпләйек. Наделе



хекүмәт хаҡы менән мең һум торһа, мин уны мал-тыуар, ˛әй-шәкәр кеүек нәмәләр өләшеп, ике йөҙ һум самаһына ҡалдырҙым. һин дә үҙ иҫәбеңдән шул саманан сыҡмайһындыр, тип уйлайым.

—| Бишнәктәр эше менән мәсьәлә күптән билдәле инде. Уны яйлап уйларбыҙ. Бынау банк мәсьәләндә мин аңламайым. Минеңсә, уны түләмәйенсә эш барып сыҡмаҫ. Ниңә тиһәң...

Ныязғол уны бүлде:

—' Юҡ, улым, һин тәүҙә тыңлап бөт. һинең ни әйткәнеңде беләм. Эште берәй производствоға капитал һальщ башларға ти торғанһыңдыр. Уныһы ҡасмаҫ. Шуның өсөн алдан сара күрергә кәрәк. Ул ерҙәрҙең хаҡын, бая әйткәнемсә, һаман шул саманан арттырмайынса отсрочка менән түләргә. Ул ғына ла түгел, земначтың кәңәше буйынса, уның да өстән бер елөшөн генә күрһәтеп, ҡалға^ нын бер кемгә лә белдермәҫкә кәрәк. Хәҙер ситса, сәйшәкәр һымаҡ нәмәләрҙен, хаҡы көндән-көн тешә бара. Нәмәләтә түләү ул наделде тағы ла арзанайтасаҡ. Быныһы шулай. Икенсе бер өлкән эш, әлеге банк мәсьәләһе. Мин малдың яртыһын һатылған итеп, ҡура-кәртәләр менән Расторгуев исеменә яҙҙырҙым.

Имай, нык аптырап, ҡапыл атаһы яғына боролдс Уның төпһеҙ ҡырҡыулыҡка ҡоролған пландарынан йөҙөн һытты. Ҡарт һаташа башлаған ахыры тип уйлап,, ҡул һелкте. Ҡараңғыла уның йөҙөн күрергә тырышыг? текләне.

—• Эйе, яҙҙырҙым. Бында әллә ни ғәжәп эш юҡ. Анау урылып бөтмәгән дүрт йөҙ десятина игенде Покровкалағы лавкасы Ивановҡа билдәләнем. Бик ҡулайлы, тоғрокеше. Уның менән иртән нотариуска барып яҙышабыҙ. Ә ҡалған, бишнәккә алынған ерҙән башҡа, ер, бөтә малкөтеүҙәрен һиңә бүлеп биреп, һине башҡа сыҡкан[1] итеп күрһәтәм. Башҡа ваҡ мал, ике йорт, һарай.келәттәр анау ваҡ балаларға аталған.

— Улары ниңә кәрәк һуң?

—< Шуға кәрәк, улым, мине оҙаҡламай, түләү срогьв етеү менән, банкрот булған итеп иғлан итәсәктәр. Минең түләрлек хәле булмаған бай икәнлегем тәғәйенләнгәс^, ҡулда булған байлыҡты яҙырға тейештәр. Ә һеҙгә бүленеп бирелеп бөткәс, байлыҡ минеке күренмәй һәм уға тейә дә алмайҙар.— Ныязғол тағы туҡтап уйланды.

Имай атаһының был тнклем аҡылдар менән эш ҡороуына тағы ышаныс менән ҡарап һоҡланып өлгөрмәне, Ныязғол дауам итте:

— Шунан килеп өсәнсө мәсьәлә шул, ошо хәлдәр *капҡас, миңә бер-ике йәки өс .ай төрмәлә ултырып сығырға тура килер.

Имай өсен быныһы сиктән тыш- ине. Ул урынынан һикереп тороп китте:

—• Белмәйем, атай, һин аҡылдан яҙаһыңмы, әллә минең аҡылым етмәйме? Быныһы бигерәк сиктән тыш инде. Әллә кемдәргә ышанып байлыҡ тапшыр, шунан үҙебеҙ .айырылған булайыҡ, етмәһә, төрмәгә кер, имеш. Хурлығы ни тора. Улар һин уйлағанСа бик шыма барып сығыр тиһеңме? Закон бар бит әле. Булмаҫ, атай. Мин бындай эштәргә ҡул ҡуя алмайым.

—• Как рас мин аҡылдан яҙмағанмын. Ә һин мин һөйләгәндәрҙең төбөнә яҡшылап төшен. Иҫәпләп ҡара. Шуның есөн бөтә серҙе һиңә бәйнә-бәйнә һөйләп ултырам. Мин юҡ саҡта ла һин шул юлда тор. Ер хәҙер ҡыйбатая •бара. Башҡорттарҙа хәҙер һатылырлыҡ ер ҡалманы. Арендаға биреп тә күпме мөлкәт йыйнап була. Уның бер мең десятинаһын һатҡанда ла ике йөҙ мең файҙа ҡала. •Ә бер-ике ай термә менән йөҙ егерме алты мең кеҫәнән сыҡмай. Судтан һуң бер десятинаһына бер һум урынына 13-әр тин генә түләргә ҡала. Закон тиһең. 1Дул законға таянып эш итәм дә мин. Закон ни ул беҙҙең өсен ҡоролған. Уны файҙалана белергә генә кәрәк. Бында закондан тыш бер нәмә лә эшләнмәй. Был турала мин прокурор, земнач, судьялар менән алдан һөйләшеп бөткәнмен. Адвокаттың бөтә губернала бер тигәнен яллағанмын. Ул батша алдына барып һөйләшһә лә, төкөрөгөн сәсеп һөйләйәсәк. Улар был эштәрҙе үҙҙәре үтә күреп торалар. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһына үҙ өлөштәрен кәрәгенсә бирергә тура килә.

Имай яуап ҡайтарманы. Тәрән уйланды, Ныязғол уныҡуҙғатты.

—• Бөгөн, бер әңгәмә булһын тип, автомобиль алып ҡайттым әле. Уны һин дә йөрөтөргә өйрән дә, Быҙаулыҡҡа, Самарға ат менән һайтылдағансы, ике-ес сәғәт эсендә ялт итеп бараһың да инәһең. Йәш әсәйең менән Фатиханы ултыртып алып киткәйнем, тәүҙә ҡурҡып сәрелдәштеләр, һуңынан өйрәнеп киттеләр, тешөрөп тә бул-



май.— Ул, кетерләп, кинәнеп көлдө лә ишеккә табан атланы.— Хаҡын яйлап түләргә. Әйҙә сығып күрәйек.

Башҡа ваҡыттарҙа яйына тура килмәгән мәсьәләл» атаһын ҡыра еңеп ташлай торған Имай, бөгөн унын, был артыҡ ҡурҡыныстар еҫтөнә ҡорған ниәттәренең алтынлы ауырлығына еңелгән һымаҡ, әллә атаһы әйткәнсә, ул уйҙарҙың төбөнә төшөргә тырышыпмы, атаһы артынан һүҙһеҙ уйланып эйәрҙе.

Оло таш һарайҙын, алдында байыған ҡояштың ҡалдырған ал нурында уйынсыҡ кеүек матур күгелйем машина ялт итеп ултыра ине. Улар ике яғына ҡара-ҡаршы баҫтылар. Имай ҙа, ҡулына уйынсыҡ биргәс, үжәтләнеүенән туҡтаған бала һымаҡ, уның ялтыр ҡанатын һыйпап ҡарап, төҫөнә йылмайыу әҫәре сығарҙы. Рулде борғослап, фара күҙҙәрен һыйпағас:

— Бик һәйбәт нәмә алғанһың,— тине.

—• Бик яҡшы. Шуға алдым да. Американский форд. йөрөтөргә һине үҙем өйрәтермен.

— Мин йөрөтә беләм ул. Элекке йыл Быҙаулыҡта ейрәнгәйнем.

— Улай булғас ни, эш тә бөттө. йөреп ҡарайһыңмы әллә?

— Юҡ. Иртәгә.

Улар, һейләшә-һөйләшә, автомобилдең йомшаҡ диванына ҡатарлап менеп ултырҙылар.

Имай тауышын түбәнәйтеп һүҙ башланы:

—• Быҙаулыҡта, быйылдан ҡалмай һуғыш сыға, имеш, тигән хәбәр ныҡ таралған.

— Мин дә күп кешенән ишеттем. Асыҡ әйтергә ярамаһа ла, ныҡ әҙерлек бара икән. Шуға күрә лә мин үҙебеҙҙең эштәрҙе ашыҡтырам. — Ул шыбырҙап дауам итте.— Самарҙа фабрикант Самойлов менән рестораңға барғайныҡ. Ул ни: «һуғыш сыкһа, беҙҙең эш ходка китә, ти. Хөкүмәт һуғыш заказдары менән беҙҙе күмәсәк. Әгәр ҙә еңеп тә ташлаһаҡ, унда инде беҙҙең алға китеүҙе тотоп та тыя алмайһын»,— ти~ Яҙ башында. уның фабригендә эшселәре забастовка яһап, бик күп зыянға һуккандар икән. Мәскәү, Баку эшселәренең дейем забастовкаларына ҡушылып, донъя ҡутарғандар. Полиция саҡыртып, ҡайһыһын ҡулға алып, ҡайһыһын эштән ҡыуып, көскә баҫтырҙым, ти. Әгәр ҙә һуғыш сыға ҡалһа, уларҙың күбеһен һуғышҡа оҙаттырып бер аҙ аҡылға ултыртыр

янек, ти. Завод тирәләрендә эш бик хәтәр икән. Алла ҡушмаһын!

—• Ул һәр ерҙә шулай инде. Петербургта ни улар меңләп эшсе эш ташлай ҙа демонстрация яһай икән. Социал-демократтар юл башлайҙар. Барыһын да газетаға гәҙмаһалар ҙа, хәбәр етеп тора. Крәҫтиәндәр менән дә >бйк күп бәрелештәр булған. Әлдә беҙҙең тирә тыныс әле.

—1 Бына шул-шул. Шуның өсөн дә һин мин юҡ саҡта ;һис берәүһе менән дә ҡаты ҡағылма. Эште гел көйләп, яйлап, ағай-эне, ҡоҙа-ҡоҙағый тип, тура килгәндә арлы-•бирле ярҙам иткән булып бөтөрөргә кәрәк. Юғиһә, алла !һаҡлаКын, халыҡ ҡупһа, уйнатмай ул. һуғыш сыҡһа, уныһы икенсе эш. Ҡотлояр, Айбулат, Байғара ауылының Мшмырҙа балалары кеүек тел-тешлеләре һуғышҡа ҡыуылһалар, ҡалғандары уныщ, ҡалай итһәң дә, күнерҙәр. Тик бик һаҡ булырға, иплэп эшләргә кәрәк.

Улар ай ҡалҡҡансы шыбырҙаштылар. Тирә-яҡ, ишек .алды тын ҡалды.

Баҫҡыстан ҡомған тотоп төшкән Рәхимә, улар янына килеп, көйләп, иркәләп һүҙ ҡушты:

—• Бына кәрәк булһа, ни эшләп улай оҙаҡ ултыра-4]ығыҙ, ҡайтығыҙ, сәй өлгөргән. Көтеп-көтөп һеҙҙе әллә ҡайҙа киткәндәр тип, әле йәсих укып алайым тиһәм.

Тәүҙә Имай, унан Ныяҙғол өйгә киттеләр. Ныяҙғол торсығы менән туктап һейләшә-һөйләшә ҡайтты:

— Сәй эсергә өлгөрөрбеҙ әле, әсәһе. Ҡомғанында ^һыу ҡалһа, мин дә тәһәрәт яңыртып алайым. һейләшеп чситеп аҡшамды онотканмын. Ҡаза итермен инде.

Рәхимә, йәһәт етәләнеп, ҡомғанын ҡартына бирҙе.

—• Мә, мә, ай хоҙайым, һинең ғәҙәтең шул була торған. Донъя ҡыуып, намаҙ-ныяҙыңды ла онотоп ташлай-'һың. Исмаһам, оноттом тип, ҡыскырып әйтмәй, эстәң тенә тәүбә тип әйт тағы. Үҙең хәҙрәткә ултырған мөрит-'һең.— Ул ҡартын байтаҡ вәғәзләнә. Ләкин Ныяҙғолдоң 'башҡа уйҙар менән шөғөлләнгән башы был вәғәзгә ар-тыҡ борсолманы. Ул көлеп кенә:

— Йә, ҡарсыҡ, юҡҡа көймә әле. Бына хәҙер тәһәрәт алып барыһын бер юлы укыйым да, аллаһы тәғәлә үҙе 'берәй ергә ҡуйыр әле. Уны ҡыскырып әйтмәһәң дә һула-ҡай яурындағы фәрештә әллә ҡасан гөнаһ дәфтәренә 'яҙып ҡуйҙы инде.— Ул, ошолай һөйләнеп, йыуынырға керешә. Рәхимә әбей унын һүҙҙәренән ҡурҡып:

— Әстәғфирулла, әстәғфирулла, үҙең ярлыҡа, раб-



бым,— тип шыбырҙап, ҡартын теге донъя утынан ҡот-ҡарырға ашыҡты.

## ҺУҒЫШ

### 1

Эҫе кендөң ут тулҡындарында Гөлйеҙөм менән Айбулат нык арыныла р. Ике ал сыҡҡанда уларҙың^ игендәре урылып бөтә ине. Ләкин арҡанан, биттән аккан әсе тир, тәнде әсеттереп, мунса сабынып сыҡкандағы һымаҡ, 'яндырып, күлдәктәрҙе тәнгә йәбештерҙе. Гәлйөҙөм, келтә аҫтындағы муйынлы көршәктең йылынған айранын әленән-әле һемерә, Айбулатка:

—• Мә, эс,— ти. Айбулат йотлоғоп эсә, ямаулы күлдәген асып арҡаһын елләтә лә, тағы ла урырға керешәләр..

Улар шулай төштән һун өсәнсө туктап, аҙаҡҡы көршәк айранды эсеп торғанда, ауылдан яланға киләторған оло юлдын, саңын борһолдатып, бер һыбайлы күренде.

—• Был ни был, бер һыбай йән-фарман сабып килә.

Гөлйөҙөм дә уны шул арала күреп алды:

— Ни булды икән, әллә ауылда ут сыҡҡанмы икән?

Ул арала Тимерғәле ҡарт, үҙ загонының икенсе башынан быларға аптырашлы ҡараш ташлап:

—• Айбулат улым, анауы килгән ҡараҫҡы бер һыбайлы түгелме һуң? Ни эшләп улай ҡабаланып саба икән?—". тип ҡысҡырҙы.

• —• һыбайлы шул, олатай, прикащик түгелме икән?

— Булмаҫ, был эҫелә ул ни ҡарап йөрәһен. Ауылда* ут-фәлән сыҡмаһа ярар ине...— Тимерғәле ҡарт, маңлайына ҡулын ҡуйып, сырыш биттәрен тағы ла сыйырың-ҡырап һыбайға ҡарап ҡатты. Хәҙер инде уны бөтә ураҡсылар ҙа күрҙе, һәр кем үҙ эсенән: «Ут ҡына сыҡмаһа • ярар ине», — тигән ҡурҡынысһы уй менән унын килеге , еткәнен тынысһыҙланып көтә башланы.

һыбайлы игенден, юлға һуғып яткан башындағы Хәйбүш ҡыуышына туктаны ла, ҡулдарын болғай-болғай,. ниҙер ашығыс һөйләй һалып, тағы ары сапты. Тағы туктаны. Тағы' әйтте. Тағы сапты. Ләкин унын ҡағыльга киткән бер кешеһе ут сыҡҡандағы кеүек ашығып ат-арбаға йәбешмәй, баҫҡан урынында, ҡаҡҡан ҡаҙыҡ кеүек^

. ҡатып ҡала. Айбулаттар был хәлдән тағы ла аптырап тсалдылар.

һыбайлы елеп килеп Сураштар янына килеп туктағас, Айбулат:

— Бәй, был сотник Мулдаҡай бит,— тине.

Уға яуап биреүсе булманы. Күк ат, башын салыҡлап, моронон килеп, арҡаһындағы күбектәрен сәсрәтеп, ҡойроғон үҙ еләнә елберҙәтеп, Айбулат янына килеп «тте.

Мулдаҡайҙың бите ҡара тиргә янған. Танау тишектәре киңәйгән, хәле бөтөп, өнө быулыҡҡан кеше кеүек ахылдап, үҙе ҡурҡыныс хәбәрҙе тиҙерәк әйтә һалып, •ашығыс ҡасырға тигән һымаҡ, һүҙҙәрен ҡабалан һөйләне:

— Айбулат ҡусты, хәҙер үк ауылға ҡайт. Староста ҡайтара, һуғыш сыҡҡан, тиҙ бул. Бер минут тормай ҡайтып ҡал, һуғыщ сыҡҡан, һине лә һуғышҡа алғандар. .Хәҙер атыңды ек тә, әйҙә.

Айбулат ни тип һорарға ла өлгөрмәне, күк ат, ул .арала ушҡырып ебәреп, артабан сабып бара ине инде.

Был хәбәр Айбулатты йәшен уты кеүек һукты. Ул -баҫҡан урынында ҡуҙғалмай, һыны ҡатып ҡалды. Урағын шул тиклем ҡыҫыш тотҡан, хатта уның һабындағы һырлы биҙәк уска батып инеп киткән ине. Аяҡтарҙы, -әйтерһең, Мулдаҡай ауыр таш менән баҫтырып китте. Быуындар тарҡалған һымаҡ хәлһеҙләнде. Тел кәрмәлхән кеүек тотлоҡто, ҡороп китте.

Гөлйөҙөм урағын ергә төшерөп ебәрҙе. Уның төҫе .ағарҙы. Аҡрын ғына Айбулат янына барып, Мулдаҡай һүҙҙәренә ышанғыһы килмәгән бер эске тауыш менән:

— һуғыш сыҡҡан тиме, юҡтыр ҙа,— тине.

Был тауыш Айбулатты һеңгәҙәгән хәленән айнытты. Ул, бер нәмә лә аңламаған һымаҡ, күҙҙәрен Гөлйөҙөмгә ташлап, оҙаҡ ҡараны. Бер нәмә лә әйтмәйенсә, тамаҡ ҡырҙы. Ҡулындағы урағын көлтәгә арҡыры һалды ла, һалмаҡ баҫып, ҡыуышҡа ыңғайланы. Ул, унда нәмәнән •башлап китергә белмәгән һымаҡ, арбаға барып йәбеште, ҡамыт-дуғаны тәртә араһынан ситкә алып ырғытты. Атты еккеһе килмәй икеләнеп, бүтән ураҡсыларға ҡараш ташланы.

Халыҡ урыуҙан туктаған. Ҡайһыһы йыйылып һөйләшә. Ҡайһыһы ат егә, ә ҡайһы берәүҙәре, Айбулат кеүек, аптырап баҫып тора.



һуғыш!.. Үҙенең мәғәнәһенә ут, ҡан, үлем дәһшәттәрен тултырған был ҡәһәрле бер генә һүҙ бөтә кешеләрҙен. мейеһенә ҡурҡыныс ағыуын югертте.

Был — ҡурҡыныс, ләкин һис бер юл менән дә ҡотолоу мөмкин булмаған ҡаты законлы сигнал, электр тогьв һымаҡ, бөтә әҙәмдәргә бәрелеп, уларҙын, бетә ихтыярҙарын параличләне. һәр кем шунан иҫәңгеп, ни эшләргәбелмәй ине.

Гөлйөҙем, илай-илай, нәмәләрен төрә башланы. Айбулат үҙәктәге ҡоҙоҡ янында себенләп торған атын алыгг килеп егә башланы.

Улар янына Әпләс ҡарт килде. Ҡайғылы, аптырашлыз тауыш менән:

— Айбулат улым, әллә һин дә бармы? — тине. Арыған быуындарын шытырҙатып ергә сүкәйҙе.

— Барһың ти бит Мулдаҡай ағай.— Айбулат дилбегәһенең осон әллә нисә көрмәп, әллә нисә систе. Әйтерһең, ул был бәләкәс кенә эште ғүмерендә беренсе тапҡыр> эшләй ине,

Ҡарт үҙалдына үҙе рәнйегән кеүек һөйләнде.

— Ҡайҙан сыҡты инде тағы был афәте. Әй, алланың: хекемө. Уттай эш ваҡытында. Ҡайһы батша менән ҡайһы батша һуғыша икән һуң, ҡороғорҙар,

— Әллә инде. . .

— Былай булғас, беҙҙең Ишморатҡа ла сират килеп' етер инде. Ул һинән ике йәш ярымға ғына кесе бит. һе,. хоҙаның хөкемө. Ана Шабал баярға беҙ арыш ташыған йылды яҙ һин донъяға килдең. Ә Ишморат шунан икейыл үтеп өсөнсө йыитдын, яҙында һыу ташҡан сакта тыуҙы. Килен, һин, ҡайтҡас, еңгәңә әйт, иртәгә иртүк: килеп етһен. «Ул-был булғансы, нгенде йыйыштыра һалып алырға кәрәк, тип әйтте ҡайнаға», тиген, йәме.

Айбулат менәң Гөлйөҙөм, атты аҡрын ғына атлатып,. ҡайтырға ыңғайланылар. Ҡарт улар артынан тағы ниндәйҙер йомоштар әйткәс, Айбулатты әүрәтеп аҡыл өйрәтте:

— Бик бошонма, балам. Хоҙай яҙмаған эш булмаҫ. Бәлки, ҡотолоп ҡайтып та килерһең. Ҡаралған саҡтаг «Минең башым әйләнеүсән, эҫегә, йәйәү йөрөргә ярамай»,— тип әйтеп ҡара. Ундағы духтырҙарҙың күңеленӘ' мөһөрбанлылыҡ килһә, ҡотолдороп та ҡуйырҙар. Игендеҡулалмашлап булһа ла йыйыштырып алырбыҙ ҙа ул,. тик һинең башын, иҫән-һау ҡотолһон инде.

Улар янына билен ыуалап Тимерғәле ағай туйтаңлап килде. Ул да, үҙе китергә әҙерләнгән һымаҡ, ҡабалана ине:

— Исхағымды ни эшләттеләр икән. Ҡайтайым әле,— тине.

Ҡояш тауға һарҡканда, бөтә ялан буш ҡалды. Теҙелгән ҙураттар, өйөмгә һалып өлгөрмәгән көлтәләр, сәселеп ятып ҡалған усмалар, боҙолмаған буш ҡыуыш, йыйылмаған тағандар, бөтәһе лә бер шомло тынлыҡка ҡалып, яуҙан ҡасҡан илдең ҡалдығын хәтерләтәләр.

Әпләс бабай ҡара янған ҡалай сәйнүген сәй ҡайнатырға аҫып, был өлкән мәсьәләнең серенә тешенөргә тырышҡан һымаҡ, ике ҡулын баш аҫтына ҡуйып, ҡыуыш күләгәһенә салҡан төшөп һуҙылып ятты. Ул бик арығайны. Үҙе кеүек яңғыҙ-яры ҡалған ҡарттар янына ла барғыһы килмәне, урағын тоторға ла ҡулы күтәрелмәне.

## 2

Иртә менән йәнле әҙәм ҡалмаған кеүек тыйыс ятҡан ауыл кис менән гөжләп китте.

Түшенә ялтыр миҙалдар таҡкан старшина Ныязғол ике ҡоралды кеше менән тройкала килеп төштө. Улар бер нисә ауылды үткәндәр ахыры. Туғарылмаған ҡара туры аттар, Ныязғол ҡапҡаһы төбөндә күперектәре сығып ушҡырып, сапсынып торалар.

Был түрәләр, Ныязғолдоң өйөнән сығып, сход өйөнә киттеләр. Улар артынан, сәлләһен кейеп, йәшел таяҡка таянып, мулла килде. Ул, тамаҡ ҡырып, башын түбән баҫып, мөһабәт атлап килеп инде.

Халыҡҡа ҡарап:

— Әссәләмәғәләйкүм,— тине. Ныязғол уның сәләмен алды ла, шыуып, өҫтәл янынан урын бирҙе.

Халыҡ, өйгә^инеп, урындыҡҡа, иҙәнгә, мейес эргәләренә теҙелде, солан тулды, кешеләр ишек алдына зркелде. Уларҙың бетәһе лә әле һаман үҙләштереп бетә алмаған «Ярман менән һуғыш сыҡкан» тигән хәбәрҙең бушҡа сығып, уның яңылыш икәнлеген ишеткеләре килеп, һөйләшмәҫкә, шауламаҫка тырышып көттөләр.

Староста, купец Ҡаҙанҡап Абдулла, ишектән бер инде, бер сыҡты. Бөтә эштең төбө хәҙер тик уның үҙен-



дә генә һымаҡ ҡиәфәт менән кешеләр өҫтөнә етди ҡараш ташлап, клтәсәк кешеләрҙе теүәлләне лә тағы өйгә инеп китте.

Халыҡты ҡырҙан йыйып ҡайтарырға тапшырылған десятниктәр, сотниктәр арып, хәлдән тайҙылар.

Ныязғол, мөһабәт төҫ менән тороп, һуғыш тураһында иғлан итте:

— Туғандар, ағай-энеләр, Герман батшаһы беҙҙең Әрәсәйгә ҡаршы һуғыш асҡан. Беген бына батша хәҙрәттәренән ашығыс фарман килде. Илде, ватанды һаҡларҙай аҙамат егеттәрҙе иртәгәнә» ҡалдырмай һалдатҡа оҙатырға, тигән. — Ул байтаҡ ҡына һөйләп, алынғандарҙың исемлеген укыны ла, уны старостаға тапшырып, ниндәйҙер өҫтәлмә бойороҡтар бирҙе. Шунан ары улар киттеләр. Айҙаҡайҙан ҡыуыласаҡ ун һигеҙ кеше эсендә Айбулат үҙ исемен, Әхмәҙи исемен, Дәүләт купец улы Ғимрандың, тағы әллә кемдәрҙең, үҙенә яҡындарҙың, дуҫтарҙың, яттарҙың исемдәрен ишетте.

Түрәләрҙе оҙаткас, староста маңлай тирен һөртә-һөртә дауам итте:

— Иртән иртәнге сәғәт етелә ошо исемдәре күрһәтелгән егеттәргә сход өйө янында булырға. Бөтә ауылдарҙан волоскә йыйылып, шунан Николайскийгә приемға китергә,— тип һүҙен бетөрҙө.

Йыйылған халыҡ ниҙән тотоп һүҙ башларға, кемгә һорау бирергә, был ҡаты хәбәрҙең серенә нисек төшөнергә белмәне. Ураҡтан ҡайтҡандарҙыщ саңлы, тирле биттәре аптырау ҡатыш аңламаған төҫ менән ҡапланды. Көлтә бәйләүҙән тишелеп бөткән ыштан, салбар тубыҡтарындағы ямауҙар, ураҡта туҙған еңдәр аламаһы ялпылдашып түбән һәлберәнеләр.

Һәр кемдең уйында тик: «һуғыш сыҡкан, батша ҡушҡан, таң менән шунда китергә», — тигән өҙек, айырым, тимер кеүек ҡаты бойороҡто күрһәткән һүҙҙәрҙән башҡа нәмә юк ине. Аталар, әсәләр, ҡатындар, балалар, туғандар — бөтәһе лә үҙҙәренең яҡын кешеләренең, ҡәҙерлеләренең, ут-ялҡынға ырғытылған бесәй балаһы һымаҡ, һуғыш уты эсенә ырғытылырға тейеш икәнлектәрен аңланылар ҙа, күҙ йәштәрен йота-йота, шуға әҙерләнә башланылар.

Иртәнсәк китеүселәр, аҙаҡҡы өмөт булған алла ярҙамын һорарға мулла янына инеп, хәйер биреп, доға

алдылар. Мулла үҙенең серек ҡарағай өйөнөң төпкө мөйөшендә таяғын янына һейәп ҡуйыш, нәҙек оҙон кәзҙ һаҡалын һыйпап, вәғәз, нәсихәт бирҙе:

— Бына, ил аҙаматтары, беҙ әүәл аллаға, шуна» батшаға. буйһонғанбыҙ. Батша хәҙрәттәре, үҙенең бет^ ҡул аҫтындағы халыҡтарын кафыр дошман яуынан ватанды һаҡларға саҡырып, фарман ебәргән. һеҙ, ирмен тигән егеттәр, йеҙгә ҡыҙыллыҡ килтерергә тырышмағыҙ. Батша хәҙрәттәренә тоғро хеҙмәт итегеҙ. Кафыр дошмандан үс алып ҡайтығыҙ. һуғышмаҡ борон-борон замандан ҡалған. Пәйғәмбәрҙәр ҙә һуғышҡан, сәхәбәләр ҙә һуғышҡан. Барыһы ла алла ярҙамы менән дошманын еңер булғандар. һуғышта вафат булғандар, шәһит китеп теге донъяла һис бер сәәлһеҙ ожмахҡа инеп, мәңге рәхәт йәшәгәй, илаһи амин!

Өйҙә Гөлйеҙөм Айбулатты юлға әҙерләгән нәмәләре менән ҡаршы алды. Бер таба сесә лкмәк, бер табаҡтай бауырһаҡ, бер йомғаҡ май, унлап баш ҡаты ҡорот һалған киндер тоҡсайҙы тотоп, улар өҫтөнә бер ҡат күлдәкыштан һалып тора ине. Кисәнән бирле илауҙан унык күҙҙәре ҡыҙарып бөткән. Әле ниндәйҙер уйға ҡалғап. Айбулаттың килеп инеүе менән, оноткан ҡайғыһын иҫенә төшергән кеүек, уға ҡарап бер аҙ торҙо ла, тағы сеңләп илап ебәрҙе. Юлға әҙерләп торған Айбулаттыи. күлдәге менән битен ҡапланы.

Айбулат уны тынысландырырлыҡ бер һүҙ ҙә тапманы.

— Атай, ҡасан ҡайтаһың? — тип муйынына аҫылынған улының маңлайынан үпте.

— Тиҙ үк ҡайтырмын, улым, әсәйендең әйткәнен тыңлап йөрө,— тине.

Тимербулат бүтән һорау бирмәне. Илаған әсәһенә ҡарап, көрһөнөп ҡуйҙы.

Тәҙрәнән Әхмәҙи ҡысҡырҙы:

— Кейәү, әйҙә. Староста көтә. Ат әҙер.

Быны ишеткәс, Гөлйеҙөм иренең муйынына аҫылынды.

— Эй хоҙайым, ҡасан ғына күрешербеҙ инде.

Гөлйәҙөмдөн илауы, малайынынщ һүҙҙәре Айбулаттын, йерәген һыҙлатты. Ләкин ул, тамағына төйелгән төйендө йотоп, уларҙы әүрәтте:

— Етәр, Гелйеҙөм, илама. Бер мин түгел бит, ил менән. Илама. БалаЛарҙы якшы ҡара, етемһерәтмә.



Игенде үҙең урып бөтә алһаң, мин тапамаға ҡайтып өлгөрә алмаһам, кешеләр менән берлекләшеп, берәй нәмә эшләрһең. һатма, тамаҡлыҡ булыр. Кем белә бит, бәлки, ҡайтып та килермен. Урак̒ка яллана торма.

Айбулат был һүҙҙәрҙән һуң нәмәләрен ҡулына тотоп, бср ҡулы менән малайын етәкләп урамға сыкты.

Гөлйөҙем, ҡыҙын эйәртеп, сәңгелдәктәге йәш балаҺын күтәреп алып, түгелеп илап, оҙата китте.

Мәсет тирәһендә халыҡ ҡара ҡором кеүек эркелгән. Юл буйы тулы парлап та, яңғыҙлап та еккән арбалар, кырандастар. Китеүселәр, оҙатыусылар әкрен генә барған арбалар артынан йәйәү атлайҙар. Илаш, һыкташ, үкһеү. Өҙәләнгән һүҙҙәр, егөт-нәсихәттәр менән гөж киләләр.

Старостаның, ҡурҡыныслы, ауыр айырылыу минутын белдергән тауышы бөтәһен дә туҡтатты. Ул үҙенең иң алда барған пар атының дилбегәһен улына тоттороп, кырандастан тештө. Башындағы ҡама бүркен алып, кеҫәһенән ҡыҙыл ҡулъяулыҡ сығарып, маңлай тирен һөрттө. Ҡара бәрхәт ситле күк кәзәкейе еҫтөнән быуған ҡыҙыл ебәк билбауын ҡыҫынҡырап бәйләй-бәйләй, ялпаҡ битендәге бөтә йыйырсыҡтарын йыйып, халыҡҡа күҙ ташланы:

—• Әйҙәгеҙ, егеттәр, ултырығыҙ аттарығыҙға, юҡһа һуңлап китербеҙ, — тип ҡысҡырҙы.

Китеүселәр, аҙаҡкы тапҡыр күрешеп, оҙатыусыларҙың сыр-сыуы аҫтында арбаларға, кырандастарға таралып ултырҙылар.

Аттар тәүҙә атлап, унан юртып, ауылдан сығып киттеләр. Оҙатыусылар, улар артынан ауыл осондағы Сәхиптауҙы ашҡанса эйәреп барып, уларҙыщ ҡаралары күҙҙән юғалғанса ҡулдарын болғап, илашып тороп ҡалдылар.

Хәмдиә менән Гөлйөҙөм, Сәғиҙә әбей, Көләй, Шәрифә әбей, Мәғфүрәләр, тағы ла әллә кемдәр бала-сағаларын етәкләп, өйҙәренә ҡайттылар. Уларҙың бөтәһендә лә күҙ йәше. Яуапһыҙ һорауҙар. Бигерәк тә әбейҙәр телдәң өҙөләләр:

— Эй хоҙайым, ҡырау һуҡтымы, тупалам тейҙеме, был ни эш был, раббым.

— Иәш балаларҙың баштары китеп утҡа ташлана бит, илаһым.

— Япон һуғышында ни тиклем кеше юғалып ҡалды. Ғәббәс бахыр, Иҙаҡай ҡоҙа, Мәсәлим... Шуның кеүек булмаһындар инде.

—• Ҡуйсы, юкты һөйләмә. Бынауындай саҡта, фәрештәнең амин тигән сағына тура килмәһен.

—• Аптырап әйтәм тағы. Ауыҙыщдан ел алһын. Ҡайтырҙар, алла бирһә... Бөтә ауылдан да шулаймы икән?

—• Бетә ауыл тиһең, бөтә волость, бөтә Әрәсәй, тич әйтә ти Абдулла староста. Унын үҙ улы ла китте бит.

—• Ул эләкмәç әле, атаһы түрәләр менән бер нәмә итер әле,— тине берәүһе.

—• Ер ябып бараларҙыр.инде.

Шәрифә әбей үҙенсә ҡайғырҙы:

—• Ҡуй инде, бахырҡайҙар. Ныязғолдоң Яйыҡҡа ҡыуған ғуртауай һарығы һымаҡ, ҡыуҙы ла алып киттеләр. Сей ауыҙ балалар бит әле.

Кемдер төйлег&п яуапланы:

—• Әйтмә инде. Беҙҙең Хәйрулла шулай бит. Анау Әбделмәндәр ни, өс йыл уйнап ҡайтҡандар. Улар беләләр инде. Алла күрһәтмәһен инде... Берүк берәүһе лә эләкмәй ҡайтып килергә яҙһын.

— Шулай булһа ниһен әйтәһең унын. Нәфел ураҙалар тотоп, аҡ ҡорбандар салыр инек.

Ирҙәр араһында донъя күргәнерәктәре, япон һуғышында йөрөп ҡайтҡандары уйҙы тағы ла тәрәнерәктәч йөрөтәләр.

—• Ни етмәй, ни нәмә бүлешеп һуғышалар икән был батшалар, ә?

—' Батшалар улар ерҙәре артып күбәйгән һайын, байыған һайын ҡомағайланалар ти, бит. Ергә талашып, үҙҙәре туйһа ла, күҙҙәре туймай, имеш, ти. Уларҙың һәр береһе «батшаларға батша булам» тип тырыша, имеш, ти.

— Үҙҙәре һуғышмай инде улар, ғәскәрҙәрен ҡараҡаршы һала ла ҡуя инде. Кем еңә. Үҙҙәре хатта үпкәләшмәй ҙә, ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа саҡырышып йөрөшәләр, имеш, ти, ул.

—• Бына ҡомағайҙар. Ныязғол һымаҡ, байлыҡтан туймайҙар икән, әкиәт.

—• Хекөм үҙ ҡулдарында булғас ни, ни тиһә, шуны эшләй ҙә ҡуялар шул инде.

—• Етәрегеҙ, ҡуй. Староста әйтә, ни ти, кем дә кем



батшаға тел тейҙереп һөйләй икән, шунда уҡ баструкка йә һуғышҡа оҙатыла, ти.

—. Әллә! һейләргә лә ярамай икән шул.

—, Ярамай, ярамай, Әпләс ағай, ярамай.

## БАСТРУК

Рәхимәгә ғүмерендә быңдай ҡаты ҡайғы күрергә тура килгәне юҡ ине. Нурын сәсеп торған ҡояшты ҡаплаған •ҡара болот һымаҡ, уны ла ҡайғы болото ҡаплап алды. Нисек итеп, унын бөтә ғүмерендә, хатта бөтә донъяны әйләндереп алған һуғыш заманында ла уны бер генә тапҡыр ҙа алдамаған яҡты яҙмыш, бөгөн килеп, бөтә ышанысын алып ҡасты икән?..

Ул ошо уйҙар менән намаҙ уҡырға тотондо. Шул уйҙар менән намаҙ уҡыны. Намаҙын әллә нисә тапҡыр яңылышты. Ул шайтан ҡотҡаһона төшәмдер тип уйлап, әлхәмдене яңынан башлап, сүрәләрҙе лә ҡабаттан уҡыны. Ләкин нисә генә башлаһа ла, һаман бер уй унын бөтә аҡылын баҫып алып, хәсрәт ауырайған һайын, аллаға нығыраҡ һыйынырға кәрәк тигән диндең ҡаты ҡағиҙәһен боҙоп ташлай ҙа, икенсе юл менән ағып барып, әллә ҡайҙа .үҙе лә күрмәгән ҡаланың тимер рәшәткә тәҙрәле һары йортона алып китә. Унда зар булып, унын ғүмер иткән ире Ныязғол, ҡайғылы күҙҙәре менән моңайып, һалам өҫтөндә ас ултыра. Бына ошо һүрәт унын түшәгән намаҙлығы еҫтөнә йәйелеп төшә лә намаҙҙы оноттора. Шуға күрә лә ул ысынлап та был хәлден. аллаға ғибәҙәттән баш тарттыра торған иблес эше булыуына асыуы килә лә яңынан уҡына башлай.

Рәхимә өсен иң ауыры, үҙенең был хәлен өйҙәгеләрҙең береһенә лә белдермәү, улар алдында, йорттоң Ныязғолдан ҡала икеисе башы булғанлыҡтан, бик тыныс теҫ менән сабыр итеүҙең төп үрнәге булып торорға кәрәк булыу ине.

Ул бегөн киске йәсих намаҙын, Ғәзимәнән башҡа, би-: сәләр бүлмәһенең мөйөшөндә бер үҙе уҡыны. Оҙаҡ илап, доға ҡылды. Эсендәге зарын бушатҡандан һуң, тирәяҡтағыларҙы тынысландырырға тырышып, нәсихәт әйтте:

—1 Ярар, бик борсолмайыҡ. Алланың рәхмәте бик киң. Урыҫ ҡулдарында бик оҙаҡ зарлатмаç. Алла үҙенең

иң яраткан бәндәһенә, һынар өсөн, хәсрәт ебәрермен тигән. Атайығыҙҙы төрмәгә алған кешеләрҙең үҙҙәренең баштары шунда сереһен. Иртән аҡ ҡорбан нәҙер әйтеп, муллаға барып саҙаҡа бирәйек. Етем, ярлы-ябағайҙарҙы саҡырып, аш-һыу менән һыйлайыҡ.

Ләкин уның йоҡоһо тыныс булманы. Өс ай буйына өҙлөкһөҙ Янеп йөҙәткән яуыз төш тағы ла ҡабатланды. Әллә ниндәй күк кейемле, ялтыр төймәле стражниктәр килеп инделәр, имеш тә, уның ҡартын арестант итеп алып киттеләр, имеш. Ныязғол өнөндә өйҙән сыҡҡанда: «Хуш булығыҙ, ҡайғырмағыҙ, тиҙ ҡайтырмын»,— тиһд лә, төштә һаман үкереп илай, имеш. Уның тауышынан ҡурҡып, уянайым тигәндә генә, бер көнө Имайға килеп киткән земский начальниге күҙлектәрен төҙәткеләп, мыйығын һыпырғылап, уң ҡулының бармағындағы ҡалын алтын балдағын ялтыратып, бик шат теҫ менән, теге өйҙең түрендә бейеренә таянып, шарҡылдап көлөп тора, имеш. Рәхимә уға яҡын килеп: «Знаком, Ныязғол старшинаны был эштән ҡоткар инде»,—• тип үтенә, имеш тә* земнач башҡортса тешәнмәгәс, тағы ла нығыраҡ ҡысҡырып көлә, имеш. Рәхимә көн дә тигәндәй ошо төштән ҡара тиргә төшөп уфлап уяна ла, укынып, һулаҡай "11 яғына төкөрөп, әйләнеп ята. Шунан таңға тиклем күҙҙе йоҡо алмай ине.

Бейек йорттон, түбәнге ҡатында ла ес бүлмә. Эске баҫҡыстан тешөү менән уң яҡта оло мейес. Унда хеҙмәтсе ҡыҙ Лена төрлө тәмле еҫтәр сығарып төшкө аш әҙерләй. Урталағы бүлмәлә, оло тәҙрә ҡаршыһына ҡуйылған өҫтәлде әйләндереп ултырып, байҙың дүрт балаһы укый. Укытыусы Зәйнәп уларға китаптан шиғыр күсереп яҙырға ҡушҡан да, үҙе башындағы елбәгәй һалған йәшел бүртмәс яулығыныщ сасаҡтарын ҡулында уйнатып, ишек аша күренгән өсөнсө бүлмәләге яңы кешеләргә ҡарап, тәрән уйға баткан. Улар унда ун биш-егермеләгән кеше. Уларҙы өс көн элек Яйыҡ ҡалаһы яғынан Имай килтертте. Улар һуғышҡа алынмайҙар, шулай эшкә ҡыуылып китеп, байҙарға хеҙмәт итәсәктәр икән. Ҡалын көпөләрен, ялтыр бейек бүректәрен сисмәй, иҙәндә бербереһенә һейкәлешеп ултыралар.

Улар үҙ-ара ниҙер лыбырҙашып һөйләшеп тә, ирешеп тә алалар. Ләкин ғүмерҙә ҡаҙаҡ халҡын күрмәгән Зәйнәп уларҙын, ни һөйләгәндәрен аңламай. Анау ситтә ултырғаны төҫкә бик йәш, һүҙгә лә ҡатнашмай, әллә ҡай-



һы ере Зәйнәптен. яңғыҙ энеһе Әхмәткә оҡшап ҡуя. Әхмәт иҫенә тешһә, Зәйнәптен. эсе һыҡрап, һыҙлап китә.

Һунғы көндәрҙә был өйҙә, ҡаты ауырыу яткан һымаҡ, аҡрын һөйләшеп, һүҙҙәрен әйтеп еткермәй, ыщлап, күберәк уфтанып йөрейҙәр. Тик Хаят ҡына үҙенен, энеһе Мәхмүт менән өҙлөкһөҙ сырылдашып, талашып, шаярып, юҡка-барға шарҡылдап келөп, һикерәңләп йөрөй. Уға әсәһе әллә нисә тапҡыр екереп ҡараһа ла, ул^ шунда уҡ онота. Янынан ҡотора башлай. Әле лә Зәйнәптең матурлап ҡына күсереп яҙырға ҡушып биргән дәфтәреи үҙенсә бороп, ситтәрен йомарлап, ҡәләм осон ауыҙына ҡабып ултыра. Зәйнәп уны тәшкө ашҡа сығармай ҡалдырам, тип ҡурҡытһа ла, Хаяттың уға артыҡ иҫе китмәй. Ә мөғәллимә шунан да ҙур яза бирә алмай. Сенки күҙ й&шле ғауға китә. Ә Минлекәй бер ватштта ла балаларын ғәйепләмәй: «Ярай, абыстай, балаларҙы йеҙәтмә инде»,— тип кенә ҡуя. Ике ҡыш улар араһында ҡайнашҡан Зәйнәп бөтәһенен, дә ҡылыҡтарын белеп еткән. Гел ыңғайҙарына тороп, күпме ҡаның боҙолһа ла, теш ҡысып түҙеп, ярарға кәрәк. Башҡаса ҡайҙа бараһыщ? Апалары үҙҙәре саҡ көн күрәләр. Хат яҙыуҙарына ҡарағанда, еҙнәһен, ауырыған өсөн, заводтан ҡыуғандар. Ә бәләкәс улы Шәүкәт өҫкө ҡатта тыныс ҡына йоҡлай. Уның янында һәр ваҡыт Диләкәй ултыра. Иоҡонан уянһа, ашата, тышҡа алып сығып китә. Бик ипле, аҡыллы балз ул Диләкәй, Былтыр ике-өс ай, кистән кис кенә, баланы бергә алып ултырған саҡта уны укырға-яҙырға өйрәгкәйне. Хәҙер инде һәр ваҡыт ул үҙе Зәйнәптән тырышыптырышып өйрәнә. Уҡыуҙы еңел укый. Күберәк яҙышырға тура килмәгәнгә, яҙыуында хаталар бар. Мәғфүрә кеҙ көне килеп, бала ҡараған есен мөғәллимә укытһа, бер хаҡ та кәрәкмәй тигәйне. Былай ҙа әллә ни хаҡ бирел булмай. Айына бер һум аҡсалата, иҫке-моҫко кейем. Унын укыуына нығыраҡ иғтибар бирергә кәрәк.

Зәйнәп шулай үҙенен. бәләкәйҙән кешегә хеҙмәт итәитә укып кеше булғанын ғына уйлай башлағайны, уныщ уйҙарын баҫҡыстан тешкән аяҡ тауыштары бүлде.

— һаумыһығыҙ, мөғәллимә абыстай!

— Здравствуйте!

Зәйнәп яуап бирергә өлгөрмәне, Имай, унын, артынан урядник. күк фуражкаһының.каты кокардаһын, һары еҙ төймәләрен, март ҡояшынын, тәҙрәнән төшкән нурына ялтыратып, алға атлаиы. Зәйнәп урынынан тороп, улар-

^ға ике ултырғыс шыуҙырҙы. Үҙе өҫтәл янына балаларға 'ҡарап баҫты.

Улар икәүләшеп, уҡыусыларға төрлө һорауҙар биреп, уларҙы русса һөйләштерергә тырыштылар. -

Имай, таҡтаға аҡбур менән цифрҙар яҙып, Хаяттың хисап белемен тикшерҙе:

—' Иә әле, туғаным, уҡы әле ошоларҙы! — Ул бөгөн ни өсөндөр ҡыҫҡырып өндәшә, йыш көлә, ғәҙәтендә булмаған ҡиәфәттә шаярып һөйләшә ине.

Хая.т йөҙгә тиклем булған һандарҙы яңылыша-яңылыша уҡып бирҙе.

Имай уға:

—> һәй, ялбыр, насар иҫәпләйһең, күберәк уҡы,— тине лә,— йә әле, Мәхмүт ҡустым, бына Иван Ивановичкә беҙҙең батшаның һәм семьяһының исемдәрен һөйләп бир әле,— • тине.

Мәхмүт ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы. Йәмшек танауын бер-ике тартып, йәшкелт күҙҙәрен уҡытыусыға ташланы.

Зәйнәп уға йомшаҡ йылмайып йөпләне:

—' Уҡы, уҡы, ятланың бит, беләһең,— тине.

Шунан Мәхмүт ашыға-ашыға, болоҡһоған тауыш менән һүҙҙәрен ҡылҡынып йота-йота, һөйләп бирҙе:

— Наш великий царь самодержавец его величество Николай второй Романов. Его наследник высокоблагородие Алөксей Николаевич Романов. И его жена...

Мәхмүт, бороп ебәргән машина һымаҡ ҡабалан бытырҙап, батшаның ҡыҙҙарына тиклем һанап теҙеп сыҡты ла, тағы нығыраҡ ҡыҙарып, башын еҫтәлгә эйҙе.

Быныһы урядник күңеленә бик оҡшаны. Ул йылмайып тамаҡ ҡыра биреп, ҡалын тауыш менән Мәхмүтте маҡтаны.

— • Молодец, молодец, Ныязғолович. һинән киләсәктә якшы офицер сығыр,—ул мыйы-ктарын һыпырғылап урынынан торҙо. Ул Зәйнәпкә ҡарап хушлашты ла ҡуҙғалды.

Имай туғандарына бармаҡ янаны:

—* Ҡарағыҙ, якшы уҡығыҙ. Имтиханға күп ҡалманы. Үҙем ҡайтып имтихан яһатам. һабағын белмәгәндәрҙе ҡалаға алып бармайым, —ул уҡытыусыға ла боролдо: — • Якшы тырыштырығыҙ. Бигерәк тә руссаларын нык тикшерергә кәрәк.



Зәйнәп, бөтәһенән бигерәк, ошо йәш байҙан тартына ине. Ул уның менән бик һирәк осраша. Осрашҡанда уның янынан үткәисе тыны тарыға. Был юлы Имайҙың уға тура ҡарап һөйләүенә ул тағы ла нығыраҡ уңайһыҙланды. Тауышын саҡ сығарып, уға яуап бирҙе:

__, Ярай. Кәңәшегеҙгә рәхмәт. Хәлдән килгән тиклем тырыштырабыҙ,— тине.

Улар сығып киттеләр. Зәйнәп, еҫтөнән бер ауыр йөк төшкән һымаҡ, иркенләп тын алды. Урядник башта Имай менән, шунан Миңлекәй менән бик оҙаҡ һөйләшкәндән һуң ҡайтып китте. Быларҙың ни һөйләшкәндәренең араһына инергә русса белмәгән Рәхимәнең был серлелектән эсе янды. «Эй илаһым, был донъяла ниҙәр генә ҡубып ята икән, мин генә белмәйем», — тип уйланды. Ахыры, түҙмәй, улының бүлмәлә яңғыҙ ҡалғанын авдып тороп, уның эргәһенә килде.

— Нп хәбәр бар, балам, атайыңдан бер-бер хәбәр бармы әллә?

— • Артыҡ борсолорлоҡ нәмә юҡ, әсәй. Әле бына урядник өйәҙҙә булып ҡайтҡан. Атайым янында булған. Бик һау йәшәй, ти. Үҙе лә хат яҙып ебәргән бына.— Рәхимә иламһыраны. Күҙендәге мелдөрәгән йәшен төшөрмәҫкә тырышты:

— Таш бүлмәлә һалам еҫтөндә ята^мы икән?

Имай уны көләп тынысландырҙы:

—> Юҡ, ни эшләп улайтып ултырһын. Ул ат ҡарағы түгел дә инде. Уны айырым йылы яҡты бүлмәлә карауаттар ҡуйып урынлаштырғандар. Ашау-эсеүен айырым етовар әҙерләй, ти. Дуҫ-иштәре килэп-китеп йөрөйҙәр, ти. Тик үҙен генә сығарып йөрөтмәйҙәр икән. Иртәгә иртүк бәләкәй әсәйемде алып китәм. Аҙыҡ юнләгеҙ.

— Эй, раббымдан булып тиҙерәк ҡотолһа ярар ине.

—> Шуны ашыҡтырырға барабыҙ. Кешегә һөйләнмәгеҙ.

— Ҡайҙ^ инде ул һөйләнеү.—Рәхимә, тағы ниҙер һорашҡыһы килеп, улына текләне. Ләкин ул инде үҙенең алдындағы ҡағыҙҙар өҫтөнә эйелгәйне. Имай әсәһен йыуатырға башҡа һүҙҙәр эҙләмәне. Был уныңса мөмкин дә түгел ине. Атаһы менән ике арала булған бөтә серҙе — банкка бурыс түләмәҫкә, бишнәктәрҙән алған ерҙе тулыһынса күрһәтмәҫкә булып, ошондай хурлыҡлы төрмә юлын һайлағандарын әсәһенә нисек һөйләмәк кәрәк? Ул алланан ҡурҡып, бәндәнән оялып ҡото осор. Ә бына

йәш әсәй Миңлекәй, ул бөтөнләй икенсе эш. Ул укыу-яҙыу белмәһә лә, ирҙәр йөрөткән эштәрҙең бөтә йейҙә-рен, төйөнд&рен һиҙеп, абайлап, һәр урында үҙенең үткер аҡылы, донъя күргән зирәклеге менән ярҙамлашып тора.

Имай һуғыш башланғанға тиклем атаһының был уй-ҙарына ныҡ ҡына ҡаршы торһа ла, һуғыш сығыу менән үҙе лә риза булды. Хәҙер, уның уйынса, Ныязғолдоң, тормәлә ултырып, уңышлы ҡотолоуы башҡа ваҡыттарға ҡарағанда күп еңел ине. Сенки бөтә өйәҙҙә генә түгел, губерна дәүмәлендә тиерлек күҙгә күренгән байҙар эр-гәһенә ингән был байҙың күҙенә начальствоның күбеһе сүп һалырға баҙнат итмәйҙәр. Киреһенсә, улар үҙҙәре лә ошо буръяҡ һыуҙа балыҡ тотоп ҡалырға тырышалар. Ә Ныязғол ҡотолдиһә, уларға үҙҙәре күтәрә алғанса өлөш сығасаҡ. Икенсе яктан, хәҙер ауыл һәм башҡз тирә-яктағы кешеләрҙең үҙ ҡайғылары көсле. һәр кем-дең тиерлек берәр йә икешәр-өсәр кешеһе ҡайҙалыр ут эсендә ҡан түгә. Ныязғолдоң хәле тураһында йә йәлләп, йә әрләп тигәндәй берәй төрле хөкөм йөрөтөргә лә айы-рым ваҡыт та, илтифат та юк. Уның термәгә алынғая. тигән хәбәрен ишетһәләр ҙә күбеһе: «Йә, һыуға батмаç, утҡа янмаç, уларға ни булыр тиһең, уларҙың кеçәләре ҡалын, теләһәләр ике донъяны бер юлы һатып алырҙар. Әле бына Имайы, сакыцэтылһа ла, һалдатҡа эләкмәне бит. Бына беҙҙекеләр, бахырҙар, ҡул-аяғын бәйләп аҡыртып алып киткән һарыҡ һымаҡ китте лә юғалды-лар», — тип ҡул һелтәйҙәр ҙә үҙ хәсрәттәренә керешә-ләр.

—< һинең улыңдан киткәне бирле хат юк шикелле?

—• Юҡ, Үмәр ҡоҙа. һыуға баткан кеүек зымзыя юк булды ла ҡуйҙы.— Ҡарттың тауышы ҡалтырай ҙа һүҙе бүленә. Ошо хәлдәрҙе күптән үлсәп ҡарап мейеһенә урынлаштырып ҡуйған Имай бөгөн тағы ла тынысыраҡ ине. Рәхимәгә лә ошо тыныслыҡтың тәьçире тейгән ке-үек, Имайҙың емөтлө һүҙҙәренә ҡыуанып, алпан-толпа» атлап, аçкы өйгә төшеп китте. Иң тәмле, иң һыйлы аҙыҡ-тарҙан уға күстәнәс әҙерләтергә кереште.

# ИКЕНСЕ КИÇӘК

## ЕРӘН ҠАШҠА

Иәй аҙағыныщ һуңғы көндәре. Урмандың ҡарағусҡыл йәшел һә.м һарғайып өлгөргән япраҡтары, күпереп ят-ҡан матур балаç һымаҡ, тауҙарҙы ҡаплай. Хәҙер ҡояш байығас та, тау биттәрен йәй көнөндәге кеүек үтә күренә торған зәңгәрлек түгел, ә аҡһыл еүеш томан баçа ла энерҙе һоро яһай. Ә иртә менән йә ҡуйы асыҡ, йә ап-аҡ ҡырау килтерә.

Шундай энерҙең береһендә Тимерғәле ҡарттың ишек алдына ерән ҡашка ат менгән, ҡара тирәсле бүрек кей-гән, ҡыҙыл билбау быуған күк көпөлө, гамбург итекле — Сафура кейәүе Заһит килеп төштө. Усаҡ тирәһендә ҡай-нашҡан Сафураның уны күреү менән йерәге шыу итеп китте. Уның шатлыҡтанмы, ҡуркыуҙавмы икәнен үҙе лә уйлап торманы. Иөҙөнә ҡапыл сыҡҡан эçе ҡыҙыллыҡты ҡулы менән һыйпаны ла, яулығын төҙәтте. Мейескә йә-бештереп ҡуйған бәләкәй көҙгөгә тиҙ генә күҙ һалып, һыҙғанған еңен тешөрөп, беләктәрен ҡапланы. Бер ҡы-ҙарып, бер ағарып, соланға ыңғайланы. Ишек алдына сыҡһам кеше күрер тип, ул кейәүен соланда ғына ҡаршы алды. Уның әле дүртенсе генә килеүе ине. Заһит ҡараң-ғылы-яктылы соланда кәләшенә йылмайҙы.

— Ҡайнымдар өйҙәме? — тине.

—> Юҡ. Берәү ҙә юҡ.— Сафура, кейәүе ҡулынан эйә-рен алып, алдан атланы.

Өйҙә, ысынлап та, йән эйәһе юҡ ине. Заһит мейесте уратып ҡашаяҡ яғына үтте.төшөрелгән шаршау ситенә урындыҡҡа ултырҙы. Сафура, унын. янына барырғамы, юкмы тип икеләнгән һымаҡ, ҡыйыуһыҙ күҙ тешөрҙе лә,

урынынан ҡуҙғала биреп тукталды. Заһит быны аңлап алып, тиҙ генә урынынан тороп кәләшен ҡапыл ҡосаҡланы. Сафура бынан тағы ла нығыраҡ оялып, артҡа тартылды:

—1 Ана, атайым килә,— тип шыбырҙаны.

Тимерғәле ҡарт, ишек алдында торған тирле аттав кейәүе килгәнен белеп, соландан уҡ тамаҡ ҡырып инде. Түрбашҡа менә-менә:

— Ҡыҙым, ашың өлгөрәме? — тине.

— Хәҙер елгерә.

— Әсәйенде ҡайтарырға кәрәк. Ана Х&мдиә еңгәндәр ейе артында ләпелдәшеп ултыралар.

Ул арала, еҙнә күрергә тип, югерешеп килеп еткән бәләкәй ҡыҙҙарҙы Сафура әсәһенә югертте:

—• Барығыҙ, әсәйем ҡайтһын. Еҙнәм килгән, тип әйтегеҙ,— тип шыбырҙаны.

Сәғиҙә ҡарсыктың да быйыл ҡайғылары береһенәнбереһе ҙурайып китте. Улы Исхаҡ та, быйыл илла-алла менән кәләш алып бирәбеҙ тип торғанда, һуғышҡа ҡыуылып китеп барҙы. Өлкән ҡыҙы Яланбикәнең дә кейәүеи оҙаттылар. Хәҙер унһы ике бала, ҡарт ҡәйнәһе менән кен итергә ҡалды. Исмәғиле һаулыкҡа туймай, тапманан йөҙәй. Инде килеп, кинйә ҡыҙы Сафураны күҙ нуры кеүек һаҡлап ҡына янында тотkoho килә. Шуның өсөн Заһит килгән һайын, алып ҡасып китмәһә ярар ине тигән уйҙан унын йерәге ҡуба. Кейәү ҡайтып китеү менән тағы яңынан килгәнгә тиклем күңеле тынысланып тора ла, үҙ тңңәбейҙәре араһында үҙе тураһында үҙе:

—' Кеше ҡартайған һайын бала йәнле була тигәндәре шулдыр инде,— тип көлөп йөрөй.

Әхмәҙи өйө артында теҙелешеп һөйләнеп ултырған ҡатындар янына ҡыҙҙар югереп килеп:

" —• Сәғиҙә инәй, ҡайт, еҙнәм килде,— тиеүҙәре унын ҡотон алды. Ул, ҡапыл һикереп тороп, үҙе лә абайламайынса:

—• Еҙнәм, ти? Кем ул еҙнән? — тип аптыраны.

Бисәләрҙең:

— Аhа-аhа, Сафуранын, кейәүелер, бына юҡка башьвд ҡаңғыра,—• тип көлеүҙәренән һун. ғына, ул да көлемһөрәп:

— Әй әттәһе, мин маубаштың ни, шул инде. Алйотланып, ни Нөйләгәнемде лә белмәйем,— тип өйөнә ҡайтып китте. .



Өй артында бисәләр һүҙҙәрен оҙайттылар:

— Маубаш булмаҫ ерҙән маубаш булырһыщ. Бынаулайтып хәсрәт уты йотоп ултырғас...

—< Ҡуй инде, баштары иҫән-һау ҡайтһа ғына ярай ҙа. Ни булырын кем белә...

Сәғиҙә өйөнә ҡайтып еткәнсә уйланды: Сафураны юкка ғына ашығып быйыл биреп ҡуйҙык. Хәҙер уны ни тиклем теш-тырнаҡ менән тартһан да, кеше кешеhе үҙенә булмай инде. Китһә, бигерәк ҡыйын булыр шул. Бирмәһәң дә ҡалайтаhыщ, ир балалар йылдан-йыл һуғышҡа китеп баралар. Ҡыҙ бала ни ул, ун алтынан уҙhа, ҡарг ҡыҙ була башлай. Ҡәҙере китә. Шунда ла ул бармаҫҡа тырышҡайны. Атаhы ҡуйманы. Солтан Таллы ауылынын. ҡәҙерле кешеhе. Әллә ни байлыҡтары булмаhа ла, балалары тәүфиҡле. Өлкән семья булhа ла, татыу торалар. Уртансы улы Заһит башҡа балаларына ҡарағанда ла унған, күҙе ҡара таный икән тип Тимерғәле Сәғиҙәне күндерҙе.

Сафураны биргән саҡта ҡалым алырға, ҡуй һуйырға һейләшкәйнеләр. Туй үткәрелгәс, Солтан ҡарт, ике йыйынды бер юлы үткәреүе ауыр, ҡалымы көҙгә ҡалһын, киленде алабыҙ тип ашыҡмайбыҙ, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар күңелдәрен тыныс тотһондар, тип әйтеп ебәргәс, былар ҙа риза булғайны. Ләкин һуңынан ике ҡара-ҡаршы ғәскәрҙең полководецтәре араһындағы көрәш һымаҡ, береhенбереhе отторопь ҡуймаҫҡа тырышып яhала торған сәкәшеүҙәр ике ҡоҙағый араhында өҙлөкhөҙ дауам итә торҙо.

Заһиттен, әсәhе Иомай әбей:

—' Заманалар ауырайып китте, ҡоҙалар ҡыҙҙыщ башын биргәс, аяғын тартмаhындар, ҡалымды ята-тора бирербеҙ, киленде барып оҙатып алайыҡ, донъялар үҙгәрҙе, тыныслыҡ бөттө. Ир балаларҙыщ башына ауыр бәлә төштө, бөгөн күҙ алдында, иртәгә әллә ҡайҙа. Килен бөгөндән эшкә лә кәрәк. Оҙатып бирергә риза булмаhалар, барыбер ҡасырып алдырабыҙ, һуңынан үпкәләштән булмаhын,— тип әйтеп ебәрә ине.

Сәғиҙә лә үткәннбарғанды ҡотҡармай, яуап ебәрә тора:

— Ҡоҙағыйға сәләм әйт. Ҡалым бирмәй тороп, килен алабыҙ икән тип уйҙарына ла килтермәһендәр, ауыҙҙарын да асмаһындар. Мин кинйә ҡыҙымды теләһә ҡалай ғына йортҡа төшөрөргә уйлағаным юҡ. Ҡалым бирәбеҙ

тип өҫтәренә алғас, хәҙер ни нәмәһенә кире тартҡылайҙар. Минең уҙ һөйәгем үҙемдән ауыр түгел, ейөмдә ултыра бирер. Борон ҡыҙҙар есәр йылһыҙ оҙатылмай торғайнылар әле. Әгәр ҙә беҙҙән риҙалыҡһыҙ алып ҡасып| китә торған булһалар, үҙҙәре абай булһындар, ун доға-Ц лы ҡоҙа менән баҫып барып ҡалым алырбыҙ, тип әйтэЦ тиген. Берүк бер һүҙен дә төшөрөп ҡалдырмай еткерә.| күр,—тип әйтеп ҡала.

Аш, сәйҙән һуң Заһит Гөлйөҙем еңгәһе янына килде. Айбулат уға әсәһе яғынан яҡын ғына ағай ине. Өйҙә Гөлйөҙөм бала-сағаһы менән генә. Малайҙар менән бесәнлектә йоҡларға тип көпө-мендәрҙәр һейрәп сығып килгән Тимербулат Заһитте ҡыуанып ҡаршы алды.

—1 Ағай, ҡасан килдең?

—| Яңы килдем, ҡустым, яңы. Мин әйткәнде эшләнеңме әле, юҡмы?

—' Юҡ.— Тимер ҡыткылдап көлдө.— Сафура апайым «еңгә» тип әйттенибәң, асыулана. Йә күнәге менән баштан аша һыу ҡоя, йоҡлағанда килеп еп менән сырмап бәйләп ташлай. «Икенселәй еңгә тип әйтмәҫһеңме, балдаҡ һорамаҫһыңмы?» тип ныҡыша ла, шунан, һорамайым тиһәң генә, аяҡ-ҡулды сисә.

— Эй егет, егет. Бер еңгәнде лә еңеп, көмөш балдағын талап ала алмағас, ҡайһылай итеп ҡәйнеш булып йөрегән булаһың! — Заһит ҡустыһын шаяртып ирештерҙе.

—' Ул өлкән бит, аҙыраҡ үҫәйем әле, мин уны...— Ул, көлә-көлә, урамдан саҡырып ҡысҡырған иптәш малайҙары янына югерҙе.

Гөлйөҙөм уларҙың был әңгәмәһен көлөп тыңлап торҙо ла һаулыҡ һорашып бөткәс тә:

—1 Ағайыңдан яҙ башынан бирле хат юҡ. «һуғышҡа индек», тип яҙғайны, һаман хәбәре юҡ,— тип илап ебәрҙе.

Улар оҙаҡ һөйләштеләр. Заһит Гөлйөҙемдө әүрәтте:

—- Ила-ма, еңгә, бер ул ғына түгел, ил менән бит. һау йөрөһә хаты ла килер, үҙе лә ҡайтыр. Игенде. йыйыштырып бетә алдыңмы?

—' Юҡ әле, ташылмаған. Ярты десятина ғына. Ташыһаҡ, нисек тә бергәләшеп тапатыр инек.

Ул бер аҙ тынысланғас, Заһит үҙ хәбәрен әйтте:

—> Еңгә, мин һиңә ҙур йомош менән килдем. Миң нисек тә булһа, бөгөн төндә Сафураны алып китер уй



менән килгәйнем. Киләһе ҡыуылыуҙа минең ыылғылар сираты. Мин ҡалмам инде. Минен, кеүек -һау-таҙа кешеләргә ҡотолоу юҡ,—• ул үҙенең һаулығына үкенгән кеүек ҡайғылы көрһөндө.— Әсәйем дә: «Исмаһам, киленде алып килеп күрһәтеп кит»,— тип илаулай. Бында ҡайнымдар асыуланыр инде.

— Сафура үҙе ни ти һуң?

Заһит иркәләп келде:

— Ул минен, һүҙемде тыңлай инде.

Гөлйөҙөм быға кинәнде.

— Тыңлаһың шул. Хәҙер уға һинән дә яҡын кеше юҡ инде, яратҡас.

Заһит еңгәһенең был һүҙҙәренең ысынлығына, Сафура менән үҙ араһындағы яратышыуҙың тәрән мәғәнәле булыуына шатланды. Уны бөгөн ейенә алып ҡайтып, бөтөнләй үҙенеке икәнлегенә ышанғыһы килде. Шулай ҙа уның эсен бошорған бер уйҙы еңгәһенә әйтмәй түҙмәне:

—• Еңгә, уны алып ҡайтһам да минән тороп ҡала бит инде,— тине.

һөйә белә торған Гөлйеҙөм Заһиттең был һүҙҙәренең ысын күңелдән күҙ йәше аша әйткән һүҙҙәре икәнен аңланы. Уны ныҡ йәлләне. Айбулат та китер алдынан кис уны -ҡыҫып ҡосаҡлап: «Ҡалаһын, бит»,— тип өҙелеп әйткәйне. Ул кис Гөлйөҙөм уныщ ҡосағында өнһөҙ һығылып иланы. Айбулат иламаны. Аҙаҡ, бөтә яратҡан йөгрәктәрҙә була торған сәбәпһеҙ көнләшеү булғанын белдереп: «Гелйөҙөм, мин һиңә ышанам, һылыуым, шунда ла, йәнекәйем, һаҡ бул»,— тигәйне. Заһиттең һуңғы һүҙәренән ул үҙҙәренен, дә һуңғы айырылыу минуттарыныц бетә хәрәкәттәрен йәнле хәтерләне. һаҡлыҡ менән генә:

—• Ҡайғырма, Заһит. Сафура һәйбәт бала ул. һине онотмаҫ. Көнләшмәйһендер бит? — тип һораны.

Заһит әле күреп тә, һөйөп тә туймаған йәш дуҫы Сафураның айырылып ҡалыу ауырлығын ниндәй һүҙҙәр менән атарға белмәй ине. Гөлйөҙөмдөң: «Көнләшмәйһеңдер бит», — тип әйтеүе унын, ошо билдәһеҙ борсолоуына яуап кеүек булды:

—> Көнләшеү нисек булалыр, белмәйем, еңгә,— ул бер аҙ тукталып уйланды.—Сафура матур бит ул, күҙ һалыусылар булыр инде,— тип өҫтәне.

Гөлйөҙем уны был күңелһеҙ уйҙарҙан ҡотҡарырға тырышты. Уйынға һабыштырҙы.

—' Шулай шул. Мин һинә йәмһеҙ ҡыҙ димләмәнем. Үҙең килеп тәҙрәнән бер күҙ һалыу менән: «Еңгә, шунан башҡаны алмайһыш»,— тип сат йәбештең бит!

Заһит күңелләнеп көлдө:

— Эйе шул, еңгә, рәхмәт. Ул турала һинә үпкәм кж. Хәҙер инде, еңгә, нисек булһа ла уны алып китергә ярҙам ит. Беҙ киткәс, ҡайным менән ҡәйнәмде тынысландырырға тырыш. Миңә тик уны өйгә алып барып китеүем генә кәрәк. Унан оҙаҡламай Сафура бында килер, ике арала йөрөр.

Гөлйеҙем вәғәҙә бирҙе:

— Ярар, ҡәйнеш, ҡулымдан килгәнде аямам, әбей, ул ҡыҙыу булһа ла, бер ҡатлы була торған. Асыуланып әллә ҡайҙа китмәҫ. Донъяның ни рәүешле икәнен үҙе лә күреп тора бит.

— Бөгөн үк алып китәйем, ә?

Ләкнн Гөлйөҙөм уға икенсе терлерәк кәңәш бирҙе:

—• Юҡ, бөгөн ярамай. Килгән көндө үк алып китеү килешмәҫ. Өсөнсө көнгә ҡалдырһаҡ, ҡарауылларҙар. Иң уңайы икенсе төн булыр. Киткәндә беҙгә килерһегеҙ. Насар булһа ла беҙҙең арба бар, шуны егерһегеҙ. Үҙем оҙатырмын.

Заһит кен буйы ҡәйенйеңгәләре менән өйҙән-өйгә йөреп ҡунаҡ булды. Ингән бер өйҙә ҡоймаҡлы сәйҙән һуң аҙаҡҡы шәшкене эскәс, шул өйҙә булған ҡыҙҙарҙын, балдыҙҙарының һанына, яҡынлығына ҡарап, ун тинлек, йәки ун биш тинлек көмөш тәңкәне сынаяҡ аҫтына һалып түңкәрҙе. Ул бүләкте шаршау арьяғында көтөп торған ҡыҙҙар, ҡунаҡтар сығып китеү менән сынаяҡты асып, тәңкәне алып ҡыуандылар:

— Әһемкәс, ун биш тин. Ҡыя сапҡан, — тип һикерәндәштеләр ҙә, шунда уҡ беҙ менән сүкеш алып, тәңкәнең бөркәт башынан тишеп, түштәренә таҡтылар.

Гөлйөҙөмдөң аҡыллы кәңәше Заһит менән Сафура өсөн бик уңышлы сыҡты. Тәүге төндә шикләнеп эҫкелле ятҡан Сәғиҙә әбей икенсе төн тыныслап тәрән йоҡоға сумды. Иәштәр ошо мәлдән файҙаланып китеп тә-барҙылар.

Иртәгеһенә илап, ярһып бөткән Сәғиҙә әбей янына Гөлйөҙөм килде. Сәғиҙә әбей ҡыҙының ҡасып китеүендә Гөлйөҙөмдөң ҡатнашы булмай ҡалмағанын яҡшы белә. Сөнки ул Заһиттең барып йөрөгән иң яҡын еңгәһе. Шуға күрә, Гөлйеҙөм килеп һаулыҡ һораһа ла, шул ғәҙәттәге асыҡ йөҙ менән көлеп һаулашыу урынына, турһылдаҡ тауыш менән:



—• Бик арыу әле,— тине лә, йыуған һауыт-һабаларын келәт янындағы һикегә түңкәреү һылтауы менән, Гөлйөҙемгә арты менән эйелде.

Гөлйеҙөм быны яҡшы аңланы. Әбейҙең яйын көтөргә булды.

Сәғиҙәне, һары сәсле булғаны есен, бәләкәстән «һары ҡыҙ», йәш килен сағында «һары килен», «һары еңгә», хәҙер инде «һары инәй» тип йөрөтәләр ине. Ул был ҡушаматҡа өйрәнеп бөткән. Шулай өндәшеүселәргә бер ҙә асыуланмай. Шунда ла олоғайғас, үҙенең исемен әйткәнде арыу күрә, асыуланған сағында ла йомшаңҡырап китә.

Гөлйөҙөм башта унын. быдай арҡа биреүенән уңайһыҙланып баҫып торҙо. Сәғиҙәнең аҡ һары йөҙө илауҙан ҡыҙарғайны. Аҡ яулығы аҫтынан туҙып сыҡҡан яртылай ағарған һары сәсе маңлайының яртыһын ҡаплаған. Төргән еңенең уң яғы терһәгенә тиклем төшкән. Бөрмәһенә ҡыҫтырған күлдәгенең һулаҡай яҡ итәге ысҡынған. Һәр ваҡытта йыйнаҡ, таҙа, ыҡсым тип танылған был «һары әбей»ҙең былай туҙынып китеүе Гөлйеҙөмгә бик йәл тойолдо. Бөтә ей эшендә Сафураға һалынып ейрәнгән әсәнең был ҡайғылы тоҫ, ғәрләнгән асыу менән ҡойлоғошоп, бөксәнләп йөрөүенең ҡыйынлығында Гөлйөҙөм үҙен ғәйепле һиҙҙе. Ул, Сәғиҙәнең кисә кистән ҡойоп ҡалдырған эркет тоғон күтәреп, һарҡҡан ҡоротто урынынан шыуҙырырға маташҡанын күреп, тиҙ генә уға ярҙамға ынтылды.

—• Ҡана, Сәғиҙә ҡоҙағый, икәүләп күсерәйек.

Әбей унын был ярҙамына ҡаршы килмәне, ләкин өндәшмәне. Гөлйөҙөм уныщ ҡорот тоҙларға уйлап тоҙ төйгәсөн эҙләгәнен абайлап:

—• Ана, мейес һикәлтәһендә бит,— тип аласыҡ келәтенең асыҡ ишегенән эскә күрһәтте.

Әбей уны, алып килеп, табаҡҡа ауҙарған сей ҡорот өҫтенә һипте лә баҫырға керешеп китте. Гөлйеҙөм тукмас таҡтаһын алып сығып ҡорот йәйергәәҙерләне. Улар икәүһе ҡара-ҡаршы сүкәйешеп ултырҙылар. Сәғиҙә артыҡ түҙә алманы. Тәрән уфтанды ла таңҡылдап илап ебәрҙе.

—• Бутаһынан айырылған буҙ дөйәләй булып, буҙлап ултырам инде бына. «Әсә күңеле балала, бала күңеле

далала», тигәндәре ысын шул. Иә инде, ҡайһылайтып мине тере ҡул итеп китте Сафурам.— Ул, һүҙенән туктап, сәпәгән бер баш ҡоротон таҡтаға ҡуйып, ең остары менән йәшен һөрттө. — Ҡыҙ бала ни, кейәүгә биргәнсе генә һинең ҡулыңда шул ул. Бирҙең—бөттө. Балаһын осорған турғай кеүек, ояңда сырылдап ултыраһың да ҡалаНың. Сепейең оса ла китә. Быйыл бигерәк ҡарғышлы йылым булды, күрәһең, Исхағым ут эсенә китте. Яланбикәһе анаулайтып етем ҡалып ултыра. Инде быныһы. Был тиклем дә ҡыу томшоҡ булып ҡалырмын икән, хоҙайым. Быйылға бирмәйек тип, ни тиклем ҡаңғылданым, юҡ, үҙ һүҙен һүҙ итте бит. Эш ҡайһылай емерелеп ята. Иген тапалмаған, бесән ташылмаған, ҡура ябылмаған, тиҙәк өйөлмәгән, ҡуй инде, ҡартайғанда курәсәгем булғандыр инде. Ҡоҙаларға мәңге ризалығым юҡ, һүҙемде йыҡтылар. Ҡалым бирерлёк хәлдәре булмағас, ни тип берәүҙең кинйәһенә йәбешәләр. Урыны сығыр ине әле ҡыҙыма, маҡтаныуым түгел, минең балаларымдың, төҫ-һындары бар. Эш яғына килгәндә лә алдарына кеше сығарғандары юҡ, кесе йәштән беше баш булын үҫтеләр.

Әбей оҙаҡ һөйләнде.

Ул бер аҙ тынысланғас, Гөлйөҙөм уны әүрәтте:

—> Заманы бит, ҡоҙағый. Бөгөнмө, иртәгәме, Заһитте лә ҡыуалар, ти. Киткәнсе, ейемә төшерөп китәйем тигәндер шул.

Сәғиҙә Гөлйөҙөмдең был һүҙҙәренән тағы бер ҡабынып алды.

—• Ана шул, һинең дә ҡатнашың барҙыр тип уйлағайным да. һин дә йәш көйөңә йылан аяғы киҫкәнһең.

—> Эй, ҡоҙағый, ҡатнашы бар тип ни, ул алып китергә булғас, минән башҡа ла алып китә инде ул.

Тимерғәле ҡарт та, өйҙән сығып, һүҙгә ҡатнашты:

—' һин, әсәһе, ҡуйһаңсы шул дыуылдауыңды. Күпме һөйләһәң дә шул бер хәбәр. Ҡыҙ баланы ҡулда аҫырауы үҙе йер хәтәр эш. Хәйерле булһын.— Унын тауышы арығайны. Маңлайындағы йыйырсыҡтары тағы ла тәрәнәйеп ҡатланғандар. Арыған күҙҙәре бер нөктәгә текәлгәндәр. Ҡарсығының ҡайғылары уға ла еңел түгел ине.

—' Мин һиңә йөҙ ҡабат әйттем бит, сит ауылға бирмәйек тинем. Үҙебеҙгә кейәү индереп кенә алайыҡ тинем. Бынау Зөлҡәрнәй ҡалай уңайлы егет ине. Бынамын



тигән ике эш ҡулы була ине. һин ни, әҙәм әйткәнде тыңлайһыңмы ни!

Гөлйөҙөм, Тимерғәле ҡарттан тартынып, аҙаҡҡы һүҙгә ҡатнашманы. Ҡарт та, Сәғиҙәне үҙ ихтыярына ҡуйыуҙан башҡа юл ҡалмағанын белгәнгә күрә, һүҙен оҙайтманы.

Ишек алдында яткан арба кукрәгенен, сыбыҡтарын балта менән юнғылаштырып урындарына ҡуйып, һелкетеп ҡараны ла, шешендерергә тип йылғаға һалған тәгәрмәстәрен алырға китте.

Кискә табан Сәғиҙә лә тынысланды. Аш бешереп, Гөлйөҙөмдө, Муйылды, Шәрифәне, Үмәр ҡартты саҡырҙы. Был ҡунаҡ ашы уларҙың кәнәш йыйылышы теҫөн алды. һүҙ тағы ла Сафура менән Заһиттән башланһа ла, әбей ҡыҙманы. Тик үпкәләгән тауыш менән:

—• Ошолай булырын белгәс, Гөлйөҙөм килен, (бер өйрәнгәс, ҡоҙағый тип әйтмәйем дә) миңә лә әйтһәңсе һуң. Кәңәшһә, үҙем дә ҡаршы килмәҫ инем. Исмаһам, Сафураһы ла белгертмәне бит әле. һай, һай, был замандағы йәштәрҙең үткерлеген ҡара! Ҡайһы арала һандыкты аҫкан, ни ике арала кейемен төйнәгән. Беҙ бахырға борон уларҙы белеү ҡайҙа ти? Мин үҙем бер ҡат кулдәк, кәзәкей менән ҡасып китеп, әсәйемдәр ике йыл килеп күрмәнеләр, еҫтөм эт алғыһыҙ булып туҙып йөрөнөм. Хәҙерге балалар бигерак шылмаяҡ шул.

Ҡунаҡтар ҙа был юлы йәштәр яҡлы булдылар:

—• Иә, ярар, хәйерле булһын. Бәхете булһын да һау булһындар.

—< Хәҙер донъяһы шулай ҡыҫырыҡҡа ҡалып китте шул. Улар үткерләшмәй нишләһендәр.

Тимерғәле үҙ нужаһын ҡыҫтырҙы:

—' Бына тапамды ҡалайтабыҙ инде, тапамды. Ямғырға ҡалмаһын ине инде.

—• Юҡ инде, һыуға ҡала күрмәһен. Барлы-юҡлы ризыҡтан яҙып ҡалырбыҙ.

Аҙаҡтан Тимерғәленең бер аты, Гөлйеҙөмдөн. һәм уның атаһы Үмәрҙең аттарын ҡушып, алмашлап, бөтәһенең дә игенен тапатып алырға булдылар.

Иотәгеһенә ес-дүрт өй бергәләшеп, Гөлйөҙөм, ваҡ балаларын әбейҙәргә тапшырып, Тимербулатты ат ҡыуырға алып, ҡарт-ҡамҡылар менән тапам эшенә тотоноп киттеләр.

## ҺЫУҒА БАШЛАҒАНДА

Таһира, ҡояш сығыр алдынан йоҡоһонан тороп, тышҡа сыҡты. Тирә-яғына ҡаранып, оҙаҡ кинәнеп иҫнәне. Шул арала ситән кәртә мөйөшөнән ерән ҡашҡаның ман,-лайы күренде. Таһира бит йыуырға тип алып сыҡҡан ҡомғанын тәгәрмәс тапамаһын өсөн ситкәрәк ҡуйып, үҙе килеүселәргә ҡаршы ынғайланы. Ҡыуаныслы йылмайып:

— Килен ҡотло булһын! — тине.

Заһит, ар|банан һикереп төшөп, еңгәһенә еңгән теҫ менән күҙ ташлап:

—• Улай булһын, еңгә. Ана, апһыныңды алып килдем,— тип яуапланы.

Таһира уның был ҡиәфәтенең кәләшкә китер алдынан үҙен үсектереп әйткән һүҙҙәренә яуап икәнен аңланы. Сөнки ул Заһиткә күптән инде: «Эй, һинән ни сыға, кәләш алып ҡасыу ҡайҙа ул малайға»,— тип, төрлөсә мыҫҡыллап, теңкәһенә тейә ине. Улар шулай өнһөҙ генә маһайыштылар ҙа, Таһира Сафураны эйәртеп өйгә алып инде. Ҡашаяҡтан урындыҡ ситендә урын күрһәтте.

— Ултыр, килен,—• тине.

Сафура, Гөлйөҙөм өйрәтеүе буйынса, йеҙенә шәүләһе төшөп торған һары яулығын, теҙәтеп, тағы ла түбән төшөрөңкөрәне лә, алдына ҡарап тик кенә ултырҙы.

Таһира, ҡыуанысынан югергеләп инеп, ҡәйнәһен уятты.

—< Ҡәйнәм, тор, Заһит киленде алып ҡайтты,— тине.

Быны ишетеү менән Солтан ҡарт та урынынан һикҫреп торҙо. Аҡбашына йышылып беткән таҡыяһын кейеп, иңер бауҙары, киң еңдәре һәлберәп торған аҡ күлдәге. өҫтөнә салғыйҙары һалынып төшкән ҡара сатин кәзәкейен кейеп, үҙе теккән бейөк ҡуңыслы күн ҡаталарын ҡыптырҙатып, ишек алдына сыҡты. Ҡартлығына ҡарамай ялтырап торған күҙле, түңәрәк аҡ һаҡаллы, еп кеүек сирткән мыйыҡлы Солтан, танауын йәлпәйтеп йылмайып, ат туғарып, арбаһын тартып урынлаштырып йөрөгән Заһит янына килде:

— һау ғына ҡайттыңмы, балам? — тине ул.

Заһит уға ҡарамаһа ла, тауышында бер ҙур хөрмәт менән:

—• Арыу әле, атай,— тине.

Улар эш тураһында һөйләшеүгә күстеләр. Ә өйгә өл-



кән байрам төҫө инеп китте. Сәй ваҡыты еткәндә инде бөтә ауылға:

—• Заһит кәләшен алып ҡайтҡан икән.

—• Бөгөн таң менән килгәндәр, ти. Нисек икән, төҫкәбашҡа арыумы икән? Барып күрергә кәрәк әле, — тигән хәбәр таралды. Үҙ төбәктәренең бала-сағаһы, йәш-ел«енсәге, бисәләре, әбейҙәре иртәнге сәйҙә ошо яңы ваҡиға менән ҡайнаштылар.

Күршеләр үҙҙәренең ҡыҙҙарына:

— Бар, анау Заһит ағайың еңгәнде алып ҡайтҡан, барып күрегеҙ, йөҙөк бирер,— тип ебәрәләр ине.

Ағай-эне тейештәрҙен, бетә ҡыҙҙары үҙҙәренсә ҡупшыланып, кейенеп, киләсәктә үҙҙәрен кейәүгә ҡушып таҫтар ала торған, кейәүгә ҡасырыша торған, оҙатылып килһә, арбаға кейәү янына ултырткас, ҡолағына йылы һүҙҙәр менән кәңәштәр бирә торған, әлегә үҙе лә балалыҡ дәүеренән сыҡмаған ун ете йәшлек еңгәләрен күрергә ашыҡтылар. Сафураның ҡәйнәһе Иомай »бей был эреле-ваҡлы ҡыҙҙарҙың һәр береһен һәр төрлө һүҙҙәр-табып иркәләне, шаяртып орошто.

— Сафыя ҡыҙым, ни эшләп улайтып оялып шымтайыш торған булаһың? Бар, еңгәң ҡаршыһына бар, күреш!

— Хәҙисә, һин һуң әле: «Еңгәм килгәс тә йеҙек һорап алам», — тип шәбәйә инең дәбаһа, әле ни эшләп улай мөйөш!кә һырыҡтың?

—| Бынау Зәлифәһе ни оҙаҡлап китте әле, тинтәк.

Ҡыҙҙарҙың ҡайһыһы башын баҫып, ҡайһыһы яулыҡ остары менән ауыҙҙарын я^бып, һаҡал, сәс тәңкәләрен сылтыратып, соландан өйгә инер-инмәҫ булып өймәкләшеп, оялышсыға торалар. Ҡайһы бер ҡыйыуыраҡтары Йомай әбей һүҙенә:

— Юҡсы, оялмайбыҙ,— тиһәләр ҙә, үҙҙәре ҡыга-ҡыҙыл булалар. Ләкин улар күпме генә тартынһалар ҙа, барыһының да күҙҙәре шаршау аръяғында һике ситендә бойоғоп ултырған йәш еңгә яғына югерәләр. Ә уны тиҙ генә күреү мөмкин түгел ине.

Иомай әбей үҙенән-үҙе риза төҫ менән, бейек күкрәген кәпәйтеп, ҙур эш ҡуптарған командир һымаҡ, эре атлап өйгә бер инде, бер сыҡты. Өлкән килененә ҡыҙҙарға эсерергә сәй ҡайнатырға, көлсә бешерергә ҡушып, Үҙе күптән ошо көнгә тип әҙерләп ҡуйған бер ҡаҙаҡтай монпаси, әсмүхә сәйен һандыҡтан сығарып, түрбаш яҡҡа мейес соҡалағына ҡуйҙы. Иәш килен, бала кеше,

белеп еткермәй, үҙенең йөҙөктәрен алып килмәһә-маҙар тип, үҙе әҙерләп ҡуйған бер бау йөҙөктәрен сығарып кеҫәһенә һалып торҙо.

Ул арала баянан бирле килеп етмәй әбейҙең эсен бошороп торған ейәнсәре Зәлифә килеп инде. Ул әллә нисәмә ҡабат төрлөк тотҡан ҡыҙыл сатин күлдәк кейгән. Ике ҡат нәҙек ука уртаһышан тәңкә теҙгән йәшел бәрхәт кәзәкей эсенән өлкән һаҡал һалынған. Уртаға ярып майлап шымалап тараған һарғылт ҡуңыр сәсенең йыуан толсшдары өҫтөнән есәр ҡат тәңкә теҙелгән сәстәңк^ таҡҡан. Ҡул бармаҡтарының ҡайһыһына берәр, ҡайһыларына икешәр ҡат итеп йөҙөк, балдаҡтар, әллә нисэ төрлөнән ике беләген тултырып беләҙектәр кейгән. Олатаһы тегеп биргән дағалы ҡара итектәр, туң майға клтырап, баҫҡан һайын шығырҙап торалар. Ул аҡкоба алһыу битле, әҙ генә ҡапысыраҡ йәшкелт һоро күҙҙәр өҫтөнән һыҙылған ҡуңыр ҡашлы, киңсә танаулы, һәр ваҡыт йылмайып көлөргә әҙер торған ҡалынса ҡыҙыл иренле, ҡыйыу, шаян Зәлифә — Солтан ҡарттың ауылғз оҙатҡан ҡыҙы тегенсе Тутыяның яңғыҙ иркә ҡыҙы, Таллының ҡупшыларынан ине.

Зәлифәнең ашығып үткәнен тәҙрәнән күреп өлгермәнеләр, ул йылдам атлап, ҡупшы баҫып, ялтырап көлөп инде лә тирә-яҡҡа ялтаңлап -ҡаранып:

— Ҡайҙа, еңгәмде күрәйем әле!—тине.

, Шуны ғына көтөп ултырған Иомай әбей, уны ҡапыш ҡыҙҙырып алып китте:

—• Ни эшләп тәүҙә һаулыҡ һорамайһың? Еңгә күрер булғас, шулай йоҡлап яталар тиме? Ҡорттай башыщ менән наҙлана беләһең, һай-һай. Еңгәнде һыуға башлағанда уньщ яурынына көйәнтәне һин һалырға тейеш икәнен оноттоңмо әллә? Баянан бирле һине көтөп ултыраbыҙ.

Зәлифә оләсәһенең былдай орошоуҙарына күнегеп беткән. Ул уның ҡайһы яҡтан еңеләсәген йәки алданасағын алдан белә. Әле лә ул оләсәһенә һөйләп бөтөрго лә ирек бирмәне:

— Ай, оләсәй, ул тиклем ҡыҙма әле. Еңгәм килгәнен Заһит ағайым миңә яңы ғына барып әйтте бит. Яңы ғына ишеттем, оләсәй, шунда уҡ югерҙем. Юҡһа, алдан белһәм, ҡайҙа ул, таң, йондоҙо ҡалҡҡандан ҡапҡа төбендә булыр инем. Минен, дүрт күҙ менән кеткәнем дә шул ғына бит.



Иомай был телдәр ейәнсәренең һүҙенә тиҙ үк ышанды ла шул ыщғай уҡ Заһитте ятлайға орошоп ташланы.

—• Әйттем дә шул, Заһит оҙаҡлап бармай йөрөгәндер тинем дә. Хәҙер барам тигән булды бит. Ҡана, улай булЬа, тиҙ бул, көйәнтә-силәгенде әҙерлә, еңгәнде һыуға башлағыҙ. Ырғыҙҙың Суҡайтауҙы әйләнгән бөгөлөнә, һалҡын шишмәгә тиклем алып барығыҙ.

Зәлифә, оләсәһенен. орошоуынан тиҙ ҡотолоуына ҡыуанып, усаҡ янында көлсә бешереп булашҡан Таһира еңгәһенә күҙ ҡыҫты ла шыбырҙап:

—• Әйҙә, Заһит ағайым ҡайтҡас, оләсәйем уны уҡытһын әле балаҡасты. Миаә ул тан. менән үк барып әйткәйне, күлдәгемден. өҫкө итәген һырып бөтөп кейәйем тип, оҙаҡланым,— тип көлдө.

Таһира:

— Иә, хәйлә тоҡсайы! — тип уның яурынынан усы менән һөйөп һукты.

Зәлифә йәш еңгәһенә барып күреште. Шаулап *кьц*ҙарҙы йыйҙы. Силәк-көйәнтә әҙерләп:

— Оләсәй, китәйекме инде? — тине.

—• Барығыҙ. Еңгәнде уртаға алығыҙ. һыу алған көйәнтәне еңгәнденң уң яҡ яурынына күтәрт. Күтәрткән саҡта «төклө аяҡлы, ырыҫлы бул», тип теләк теләп күтәрт. Ҡайтҡанда ҡабаланмағыҙ. Лабырҙап һөйләшеп, ҡысҡырыш көлешмәгеҙ. Ипле генә йөрөгөҙ. Ҡайтып, еңгәң һыуын ҡуйғас та, һин уның биленән билбауын сисерһең. Шунан сәй эсербеҙ, йөҙөк еләшербеҙ.

Зәлифә хихылдап көлөп ебәрҙе:

— Атаҡ, оләсәй, унын, йолаһы ҡайһылай күп! Мин уларҙы онотоп бөтерөрмөн! Нимә тиһең, Ырыҫ әбей шикелле йөнлө аяҡлы бул, тип әйтеп телә тиһеңме?

Ҡыҙҙар пырхылдашып келөп ебәрҙеләр.

Иомай ейәнсәренең еңеллегенә тағы асыуланды:

—• Алйотланып торма инде! Был тиклем осоҡай булырһың икән! Кендек инәйеңә оҡшап, гел елбәҙәкләнеп тороу булмай ул.

—' Бөттө, бөтте, оләсәй, бөттө. Иҫемә төштө. Берәүһен дә онотмам, беләм. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар!

Ҡыҙҙар, шаулашып, Сафураны уртаға алдылар. Зә-,лифә көйәнтә менән алдан атланы. Сулпы тәңкәләре сылтырҙашып, оҙон, сыбар күлдәк итәктәре менән урам саңын һепертеп тәртипһеҙ теҙелгән көйө ауылды сығып, һыу буйына киттеләр..Хәҙер инде ҡыҙҙар үҙҙәре араһына

да аҙыраҡ иркенләп битен асҡан Сафураны тикшереү күҙенән үткәреп, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шыбырҙаштылар:

—> Еңгәм ҡалай матур. Бите ап-аҡ.

— Ҡашы ҡыйылып тора.

—' Ҡалай ҡупшы атлай, Фәрхинур апайым һымаҡ,. юрғалатып баҫа.

—' Эйе шул. Ауыҙы бәләкәс көнә.— Эй, шулай матур-булһаң ине!

Ҡайһылары уның күлдәк итәктәре, яулыҡ биҙәктәре, йөҙөк ҡаштары, итек дағаларына тиклем тикшереп, уны еңгәләр араһында иң матурҙарына индереп ҡуйҙылар.

Сафура ла уларҙы һаҡ ҡына күҙәтеп, ҡайһыларын, бигерәк тә бер өҙлөкһөҙ әңгәмә табып, һөйләп көлдөрөп барған Зәлифәне нык оҡшатты. Ҡайһы берәүҙәренә әҙе-рәк эйәләш|Кән кеүек булыш, күҙ һирпеп ҡарап та алды. Уның оялсан ҡараған күҙҙәренән. һирпелеүенән ҡыҙҙар тағы ла бер яңылыҡ таптылар:

—> Керпектәре оҙон булып нур яуҙырып тора.

— Күҙҙәре көләс,— тип шыбырҙаштылар.

Улар Ырғыҙҙың Суҡайтауҙы әйләнеп боролған ерҙең салҡып, көмпәйеп, әкрен аҡҡан эре тулҡынлы, йәйен ба-лыҡтар аҫырапятҡанҡумырыҡлытәрәнярының яғаһына һалынған берләм юлдан төшөп ҡом ҡатыш ҡырсынташ-лы йәйпе ситенә, Мостаҡ ҡарттың балыҡ ҡармаҡлап ултырған ҡамышлыҡтары эргәһенә килеп сыҡтылар.

Бабай, аяҡ тауыштарын ишетеп, малайҙар киләме икән тип асыуланып, йәпрәйгән ҡалпағы аҫтынан ҡыҙҙар яғына боролоп ҡараны. Ләкин унда уйнап-көлөп килгән ҡыҙҙар икәнен күргәс, тешһеҙ ауыҙынасыпкөлөп ебәрҙе.

—> Ай-бай, ҡыҙҙар икән. Зәлифә ҡыҙым, Заһидулла киленде алып ҡайттымы әллә?

—> Эйе, олатай, эйе. Еңгәм килде, уны һыуға башлар-ға алып килдек.

—> Яраған, бик яраған. Ҡотло аяғы менән килһен!

— Олатай, һинең балыҡтарыңды ҡырһыҡтырмаһаҡ, ошонан һыу алайыҡ тигәйнек. Алыҫыраҡ булһын тип, юрамал ошонда килдек.

— Ярай, ала күрегеҙ, балыҡтар һеҙҙән ҡасмаҫтар ул. Ҡыҙҙарҙан балыҡ ҡырһыҡмай. Бына малайҙар ғына кидмәһендәр. Уларҙың күләгәһе төшөү менән балыҡ ҡа-са ла бетә.

Ҡыҙҙар бабайҙың яҡшы һүҙенә кинәнделәр. Уға һәр береһенең бер йылы һүҙ әйткеһе килде.



— Олатай, Кәрим ағайым, һуғыштан ҡайтып, кәләш алып килдениһә, уны ла ошолай алыҫҡа һыуға башлар-быҙ, йәме?

Ҡарт яратыу, иркәләү күҙҙәре менән ҡыҙҙарға ҡараге торҙо ла, тәрән көрһөндө:

—• Әллә инде, балалар. Кем белә бит. Хоҙай ҡушып^ һау ҡайтһа ғына ярар ине. һуғыштьщ эсендә йөрей бит. Мин бында япа-яңғыҙ һупайып ултырам.— Ул, янында-ғы ҡыҙҙарҙы оноткан гсеүек, үҙ уйына сумып, тыныс тул-ҡындарға ҡарап ҡатты. Унығ һыу ситенә теҙеп сәнокә» биш-алты ҡармағыньщ арғыһы әллә нисә сиртте. Ҡал-ҡыуыс всөнсө тапҡыр инде тәрән-тәрән сумып сыҡты, Быны күреп ҡалған ҡыҙҙар барыһы бер юлы ҡыуанды-лар:

—> Олатай, олатай, ана сиртте, сиртте балыҡ. Ола-тай, тарт!

Бабай, урынынан ҡапыл тороп, сирткән ҡармаҡ яны-на ашыҡты. Уны ашығыс тартып сығарып, ярға һуҡты. Ҡыҙҙар уның артынан югерештеләр. Ярты аршындан да-оҙон яҫы ҡорбан балығы, ҡойроғо менән башын тәгәр-мәсләндереп, ялпылдап тулап ята ине.

Ҡыҙҙар тағы ла нығыраҡ ҡыуаныштылар.

—• Ҡайһылай ҙур, ҡара әле, Зәлифә, табан.

—' Табан шулай буламы? Ҡорбан тин,!

— Эйе, ҡорбан. Батмус хәтлем бар, ҡара әле!

—• Төкөрөп ҡарағыҙ, күҙһенмәһен. Икенселәй эләк-мәҫ.

Ҡарт ҡармаҡтан бальtҡты ыҫҡындыра-ыҫҡындыра һөйләнде:

—> Әйттем бит ана, балыҡ ҡыҙ балаларҙан ҡурҡмай-ул. Ана эләкте. Әллә нисә һынағаным бар, ҡурҡмай ул ҡыҙҙарҙан.

Ҡыҙҙар ҡарт тирәһендә тағы бер тиклем сыуылдаш-тылар, һөйләшеп көлөштөләр ҙә, Зәлифәнең силәктәргә-һыу алғанын күреп, уныщ эргәһенә эркелделәр.

Зәлифә^һыуҙы көйәнтәһе менән күтәреп, оләсәһе өй-рәткән теләктәрҙе бутай-бутай ҡабатланы ла, Сафура-ның уң яҡ яурынына һалды. Үҙе көлөп еңгәһенә ҡараны:

—' Шулаймы икән, ошо әбейҙәрҙең йолаларын бел-мәйем дә мин,— тине.

Сафура был һөйкөмлө, илгәҙәк бикәсенен. былай йом-шаҡ шаяртыуына ҡаршы, үҙенең теҙеп ҡуйған ынйы

ш

кеүек аҡ тештәрен күрһәткәнсе, асыҡ йылмайҙы. Ирәбеләнеп китеп:

—•• Шулайҙыр инде,— тине.

Улар был ҡараш осрашыуынан үҙҙәренен. ғүмерлек дуҫ булыу билдәһен күрҙеләр. Сафура ла үҙенен, илен ҡалдырып аҙашҡан ҡаҙ сепейе кеүек етемлек хисен ошо минутта онотоп торҙо. Ят. илдә, ят кешеләр ҡулында, ҡайны-ҡәйнә, апһындар араһындағы киләсәк ауыр тормоштон, ире менән булған алдағы билдәһеҙ ғүмер ҡуржыныстарының ауыр шәүләһен ошо ҡайғыһыҙ күҙҙәр| ҡапыл тараткан кеүек булдылар. Зәлифә лә үҙенә йәш •яғынан тиң еңгәһен яҡын дуҫ күрҙе.

Сафура йоморо яурындарына һалынған биҙәкле ҡыҙыл көйәнтәне, унын ике башындағы ҡуш аҡ силәктәрҙе^ йыуҙың бер тамсыһын да сайпылтмай бәүелтеп, сымыры] •атлап, ҡыҙҙар уртаһында өйгә ҡайтты.

Ҡайтҡас та Зәлифә унын билбауын систе. Ҡыҙҙарҙы сәйгә ултырткас, Иомай әбей, Сафура килтергән йөҙөктәрҙе ҡыҙҙарҙын яҡындарына, ятырағына, олорағына, йәшерәгенә һәм башҡаларына ҡарап, көмөш, еҙ, ырыҡты, ҡашлы, ҡашһыҙҙарын өләште. •

Иң яҫы, үҙенән ҡаш сығарып һуғылған «Сафура» тип яҙылған ҡара биҙәкле йеҙөк Зәлифәгә тейҙе.

Сафура кискә табан ҡырҙан ҡайтҡан Заһит ҡустыһы Мостафа үҙе менән күрешкәс тә, Гөлйөҙөм өйрәтеп ебәреү буйынса, уға ҡулындағы яҫы көмөш балдаҡты сисеп бирҙе. Мостафа уны урта бармағына кейеп, ҡыуанып, маһайған төҫ менән әсәһенә күрһәтте. Аулаҡ ҡалғас, Зәлифәгә күрһәтеп уны үсектерҙе:

—' Бына минеке ниндәй, ә һинеке?

Уға ҡаршы Зәлифә тағы ла нығыраҡ эреләнде:

—' Бына, еңгәм минә үҙенең исеме яҙылғанын бирҙе 'шул. Үҙе ҡойҙорткан. Ә һинеке ҡырҡтартмасынан һатып -алынған балдаҡ. Көмөш тә түгелдер, бына күрерһең, «ҙаҡламай еҙе сығыр әле. Уйт, маҡтанған булаһың!

Иәш килененең килгән кендән үк белекле рәүештә гөрөф-ғәҙәтте һаҡлауына, бигерәк тә уларҙың һүҙен тынлап ҡасып килеүенә Иомай әбейҙең күңеле бөттө. Ул киленде твшкән ыңғайына маҡтарға ярамағанын белһә лә, киске сәй ҡайнағанға тиклем, йома буйы яғалланып ^ултырған самауырҙың, табансаларҙың яп-ялтыр булыш йышылғанын, солан иҙәненең таҡыр итеп һеперелгәнен 1сүреп, ҡартына булһа ла әйтмәй түҙмәне:



— Алла бирһә, был киленебеҙҙән уңырбыҙ ахыры^ Өлкән килен кеүек белдекһеҙ, йыбытҡы булмаҫҡа оҡшай,—тине. ,

## КӨҘГӨКИС

Ҡыраулы һалҡын кис. Күктәге ярты ай, нимәнелер.-кыуып тоторға тырышҡан кеүек ашығып, болоттарға ҡаршы йөҙә. Аҡлы-ҡаралы күбек һьшаҡ болоттар унысщ хәлһеҙ нурын ҡаплайҙар ҙа, иғтибарһыҙ шыуып, алға үтәләр. Ауыл тын, ҡайғылы. Кешеләр тәпәш өйҙәрҙен. быулы йылыһына һырлыҡҡандар. Тик ауылдын, арғы осонан ғына гармун ҡатыш йыр тауышы ишетелеп ҡала.

Заһит хәҙер ейләнгән кеше, урамда йырлашып "йөрөмәй. Унын гармун янындағы урынын хәҙер Мостафа алған. Заһит атаһы менән әсәһенен, мейескә арҡа терәп» ултырып һөйләшкән һүҙҙәрен тыңлай. Таһира ҡашаяҡ, яғында бейәләй бәйләй. Сафура шылтыратмаҫҡа тырышып, ҡашаяҡ йыуа. Бишле лампанын, яҡтыһы ике яҡты ла бик һаран яҡтырта. Күҙгә ҡоко төйөлә. Заһиттең тиҙерәк кәләше янына, йылы юрған аҫтына сумғыһы килә-Ләкин һүҙ үҙ тураһында барғас, ул арығанын да, йоҡоһон да еңергә тырышып, ҡарттарға ҡарап ултыра.

— Эш бөттө тиергә ярай инде. Бынау һаламын ташып алып йән тынды бит әле.

—< Тиҙәк тә хәҙер һарай эсендә. Һыуланыу ҡурҡынысы юҡ.

—> Инде Заһидулла менән Мостафа өй нигеҙен балсыҡ менән күмеп ташлаһалар...

—' Киләһе йома көнгә ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙы ҡунаҡҡа саҡырып ебәрәйек. Ҡара тәкәгә арыу ғына ит ҡунғандай күренә. Шуны һуйырбыҙ. Ҡаҡ ит тә бар. Кеш& менән ҡан "ҡатнашҡас, ара боҙолмаһын. Үпжәләп яталарҙыр. Заһидулланы ҡайны менән күрештерербеҙ.

Солтан ҡарт әбейенең кәңәшен яҡшы күрҙе.

,—• Эйе, был һүҙең бик аҡыл. Юнләп алайыҡ. Заһитте ҡайнына күрештергәндә анау минең ҡырмыҙы сапанды яптырырбыҙ. Инә •цнын ҡалайтырбыҙ икән?

— Берәй сатин күлдәк алырға лырышырбыҙ. — һүҙ. бер аҙ өҙөлдө. Йыр менән гармун уларҙың тәҙрә тебөнәетте. Күмәк көслө йәш тауыштар «Герман һуғышы» көйөнә йырлайҙар ине.

Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа
Күк үләнде буйлатып,
Батша кафыр һалдат ала,
Иәш егетте илатып.

Эй алма бит, алма бит,
Алма биттәр ҡала бит,
Алма биттәр ҡалмаҫ ине
Беҙҙе батша ала бит.

Күпер аҫты күк томан,
Күпһенмәгеҙ, күп тормам.
Бөгөн бында, иртән унда,
һағынғанда мин булмам...

Егеттәр үтеп киггеләр. Гармун моно тәҙрәлә сеңләне.

Ҫолтан ҡарт бер нисә тапҡыр тамаҡ ҡырып алдыД -^ Унынһы ул да. Бынау набор тигәндәре етте бит ә^ тағы, ҡороп киткерҙәрҙең. Бөген аҡшамдан ҡайтышлай; •старостаны күргәйнем, егерме бирҙәгеләрҙе ҡыуырға-l әмөр була, тип тора. Оҙаҡламай аныҡ хәбәре килер, һеҙ- .< ҙен. Заһит тә шуныц эсенә инә инде,— тине. Ҡарт был:; Ъүҙҙәрҙе алдына ҡараған көйө, йырға ҡушылған кеүек, _уйланып һөйләнде.

Заһит ялт итеп бер атаһына, бер әсәһенә ҡараны. Арҡаһы эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Бөтә кәүҙәне баҫкаи "тәмле йоҡо ҡапыл осто. Тамаҡҡа таш кеүек төйөн тө- 'йөлдө.

Әбейҙең дә был яуыз хәбәрҙән бөтә быуыны талды.

—• Эй аллам, бөтмәҫ бәлә булды лабаһа, ҡороп киткер. Берәүһе ҡан эсендә йерөгәс, тағы ни кәрәк инде •был убыр старостаға. Яман хәбәр килтйргән ҡоҙғон кеүек ҡаңкылдап, әйләнгән һайыш «һуғышҡа» ти ҙә килә. Берәүҙе биргәс, етте, быныһын ебәрмәйем тиһәнсе 'һуң? — Ул, ҡыҙып, бите буйлаған ике бертөк йәшен һул •гкуллап таҫтар осо менән һөртеп алды.

—1 Староста тип ни, бер униң ҡулынан килә торған "эш тиһещме ни? Земский ҡуша. Земскийгә юғарынан ҡа- :ғыҙ килә.

—' Минә тимәгәйе, эте ҡушһын! Мин бер баламды өс йыл буйына һуғышҡа һалып ҡуйғанмын. Арьяғын һора- 'маһындар. Юғары ултырғандары алйотмо икән ни, ке- •шенең ике-өс балаһын бер юлы алырға. Кеше, яңы ғына жилен алып, бер ҡыуаныс күрәйем тигәндә, имеш, улар тағы ҡыуалар!



Әбей өлкән улы киткәс, башҡаларҙан ишетеп тә, уға эшләй алмай ҡалыуына үкенгән нәмәләрҙе иҫенә төшөрҙө. Волосле ауылдағы фиршелгә барып ун биш-егермеһум төртһән,, кешене боҙоп, һалдатҡа яраҡһыҙ итеп алыст -кала, имеш, тип һейләгәйнеләр. Ул улына боролдо. Аҡрын тауыш менән:

—• Заһидулла, әллә анау, Сөнғәт һьшаҡ, фиршелг* барып бер-бер нәмә эшләтеп ҡарайһыщмы, балам? Шуныщ менән бик күп кеше ҡотола, ти, бит,— тине.

—' Әсәй, унан да ҡаты зәғифләнеп ҡалалар бит. Исмаҡ ни, тәмәке һыуы эскән дә, хәҙер күкрәге ҡыҫып, эшкә ярамай, ҡан төкөрөп йерөй, ти. Иә һаңғырау, йә һуҡыр яһайҙар. Байратшбай ауылыньщ Ғиззәт тигәнгӘ' фиршел беләгенә дарыу ҡаҙап, хәҙар бөтә кәүҙәһе шешеп киткән дә, үлергә ята, ти.

Иомай әбей ныҡышманы. һау-таҙа улынын. тура үлемгә барып инеүен дә, өйҙә һуҡыр ҡалып һәрмәләнеп^ йәки аҡһап йерөүен дә, шешенеп ятыуын да башына һыйҙыра алманы.

Уларҙын, был ауыр һөйләшеүҙәрен ҡарт бүлде:

—• Заһидулла, һин таң менән бер-ике бот он ал да, Әзүрнәйгә барып һатып, ваҡ-төйәк алып ҡайт. Ҡоҙаларҙы алып киләйек, һине күреп ҡалһындар. Әбей, уры» һалығыҙ. Иртәрәк ятайыҡ.

Улар ятып ут һүндереүгә, урамдағы егеттәр кире әй.- ләнеп йырлап үттеләр.

Приемға барып ингәс,
Китеүҙәре тиҙ генә.

Тимерғәле ҡарт менән Сәғиҙә әбейгә үпкәләп, кенәҡыуыш торорға ла ваҡыт ҡалманы. Улар саҡырыусы булып килгән Мостафаны, йәш ҡоҙа тип, ҡайҙа ултыртып, ни менән һыйларға белмәй өлдөрләштеләр. СәғиҙӘ' ҡунаҡҡа барырға бигерәк тә ихлас әҙерләнде. Шәһиҙәәбейҙең яңы ғына йоллоҡлаған ситеген, Гөлйөҙөмдең галоштарын бара һалып алып килде. Уны ла ҡабаландырып йомошҡа ҡушты:

—1 Ҡоҙаса, тиҙ генә барып бауырһаҡ бешереш әле. Бик ҡыҫтауға килде бит әле, йәһәт бул.— Үҙе, һүҙе бетөр-бөтмәҫ, Мәғфүрәнең сыбар яулығын һорап торорға югерҙе.

Унан ҡайтып килеп:

— Ҡунаҡҡа ауыл ебәрһә барырһың, тигәндәре шул ана. Өҫкә-башҡа күрше-тирәң бирмәһә, барырһың, барнай ни. Анау ҡыҙҙарҙың өҫ-башын ҡарайым тип, үҙемә €р нәмә лә эләкмәне шул,— тип һөйләнә ине.

Ул ҡартын да онотманы. Уның өҫ-башын ҡараштырып, ҡуңыслы күн ҡаталарын туң май менән майлап, саң баҫҡан таҡыя бүректәрен ҡаҡҡылап кейҙерҙе. Шунан әллә нәмәне генә оноткан һымаҡ уйланып торҙо ла, югереклэп сығып, сыттан бер ун биш башлап ҡорот, йәй буйы йыйыштырған майынан ике йомғаҡ май индереп, бөтәКен бер тоҡсайға төйнәне. Өс һарыҡтың берәһен һуйып алып барырғамы тип уйлаһалар ҙа, күршеләре быға жәңәш бирмәнеләр.

— Зәһит тиҙ китмәҫтәй булһа, үҙҙәрен саҡырып ҡайтырһығыҙ ҙа, шунда һуйырһығыҙ. Барын бер юлы туҙҙырмай торoғoҙ,— тинеләр.

Гөлйөҙем Сәғиҙәгә үҙенең ҡыҙыл күлдәген бирәйем тип ҡараһа ла, ул ҡаршы төштe:

— Ҡуй, ҡуй, улайтма инде. Унда һин кейеп барып йөрөгән күлдәкте таныйҙар бит ул, етмәһә, төҫө ҡыҙыл, ҡарт кешегә килешмәгәнде,— тине.

Ошо әҙерлектәр беткәс, күк атты таҡта арбаға егеп, яҫтыҡ, юрғандар һалып, Сафураның нәмәләрен һары ҡалайлы тәпәш һандыҡҡа тейәп, уға тейгән урын-ерҙёз һалып, ҡунаҡҡа киттеләр.

Был арала һағынып елгөргән Сафура әсәһен ҡаршы алыуға уҡ ҡосаҡлап күреште.

Ни тиклем белдермәҫкә тырышһа ла, әбей ҙә булдыра алманы:

— Ҡолонсаҡҡынамды!..— тине лә сеңләп илай башланы.

Улар килеп төшөүгә Зәһит, күренмәҫкә тырышып, келәт артына йәшенде. Уны һуңынан, ҡунаҡ күрергә йыйылған кешеләр алдына атаһының күнә сапанын ҡулына готтороп индерҙеләр ҙә, мөйөштә ултырған ҡайны алдыща алып барып:

— Ҡоҙа, бына кейәүең, фатиханды бир,— тинеләр.

Зәһит сапанды ҡайнына ябып күреште лә, оялып, ҡыҙарып сығып китте. Унан һуң уны Сәғиҙә әбей янына алып инделәр. Ул ҡәйнәһе алдына инә туны итеп ун аршын күлдәклек һалып күрешкәс, әбей Зәһиттен, арҡаһынан һөйөп яратты:



— Ярай, ризамын. Бәхетле, ғүмерле булығыҙ,— тине.

Ошо йолаларҙан һуң Зәһит ҡайны-ҡәйнәһенә күренев йөрөй башланы.

Ваҡытлы шатлыҡтар ҙа оҙаҡҡа барманы. Ике-өс көн утеү менән старостаньщ: дүрт көн эсендә Николайскийҙә булырға тигән әмере был ҡыуаныстарҙы ла селпәрәмә килтерҙе.

Тағы ла йыйылдылар. Тағы ла илаш китте. Ике йыш ярым буйынса әллә ни тиклем кеше оҙатып, ҡайғыға; күнеп бөткән кеүек күренһә лә, халыҡ түҙмәне. Бигерәк. тә әсәләр һыҡтанылар.

Зәһит, ат егеп ҡуйғас, бөтә өй эсе менән күрешепсыҡты. Ҡарттар мөңгерҙәшеп уньщ һау йөрөп тиҙ ҡайтыуын, һуғышҡа эләкмәүен теләнеләр. Зәһит бисәләр' яғына сыҡты. Әсәһе менән күреште.

Иомай әбей түҙә алмайынса, таңҡылдап һөйләнеп^ ҡысҡырып илап ебәрҙе:

— Уй алла, был баламды ла ут ауыҙына алып барыге ташлайҙар инде... Ни эшләйек икән?..

Сафура, үҙенең йәш килен булып, тартынырға тейеш икәнен дә онотто. Өй уртаһындағы таяуҙы ҡосаҡлап үкһене. Ул кисәнән бирле сытырайып түҙеп йөрөһә лә, түҙмәне. Ҡара күҙҙәренән тәгәрәгән эре йәш тамсылары, оҙон керпектәре буйлап, алһыу биттәренә тәгәрәнеләр. Уны муйынынан ҡосаҡлаған Зәлифәнең, әйтерһең, бер ваҡытта ла шаян ҡыҙ булғаны юҡ. Ул, эсендәге бөтә ҡайғыға быуылып, Сафура менән бергә илаша.

Зәһит, сиратлап күрешеп, кәләше янына килде. Сафураны мәңге күрмәҫтәй булып йотлоғоп ҡараны, ҡулдарын ҡыҫты. Сафура уның күкрәгенә ауҙы.

Зәһит, быларҙың берәһен дә күрмәҫкә тырышҡа» кеүек, тышҡа ашыҡты.

Урам тулы кеше. Халыҡтың күберәк эркелгән ерендә-мулланың аҡ сәлләһе лә күренә. Ул үҙенең әллә ҡасанятлап бөткән вәғәзен ҡабатлай.

— Батша әғзәм хәҙрәттәренә үҙ ватаныбыҙҙы һаҡлар өсөн... бөтә көсегеҙҙе сарыф ҡылығыҙ. Кафыр дошмандың өҫтөнән ғалип улып ҡайтһағыҙ, барса исламхалҡы мәғрүр улғай... Бында ҡалыусылар һеҙҙен сәләмәтлектә ҡайтыуығыҙҙы аллаһытәғәләнән теләп торғайбыҙ. Амин...

Уньщ тауышы эс бошорғос мығырҙаҡ. Уны, тәү мәлдә киткәндәге һымаҡ, йотолоп тыңламайҙар. Хәҙер уға бөтә

•өмөттө бәйләп хәйер биреүсеçәр ҙә һирәк. Үҙәктәренә үгеп бөткән йәштәр үҙҙәренен, бөтә йөрәк ярһыуҙарын •белдергән йырҙар менән гармун моңо аçтында иғтибар-Зшҙ алға атлайҙар:

Казарма ишеге быяла, ҡаты япһац ыуала,
Ыуалмағай, утка янһын, ғәзиз баштар юғала.
Приемдын, ишегенең тоткалары еҙ генә,
Приемға барып кергәс, китеүҙәре тиҙ генә.

Ырҙар, аҡтыҡҡы бәхилләшеү һымаҡ, оҙатыусылар-lҙың йөрәген һыҙлатты. Улар тағы ла ныҕыраҡ үкһенеләр. Арбалар алыçайҙы. Ары киткән һайын йыр тауышы -әкренәйҙе. Бара-бара бөтөнләй һүнде.

Юлда саң баçылды. Ҡояш байыны. Ауылдағы шаушыу ҙа тынды. Тышҡы ҡайғы, эске хәсрәткә әйләнеп, -күкрәккә ултырҙы. Кешеләр үҙҙәренен, кендәлек мәшәҡәттәренә карештеләр.

Биш-алты көндән буш арбалар әйләнеп кире ҡайттылар. Тағы бер ҡатлам йәш килендәр, йәш кәләштәр, һалдатка исеме күтәрҙеләр.

Сафура әсәләре менән ауылға ҡайтҡыһы килһә лә, ҡәйнәһе уны ебәргеһе килмәй, ҡоҙайғыйынан үтенде:

— Килен тороп торһон инде. Икәүһе бер юлы сығып «киткәс, бик ҡыйын булыр бит. Күргәндәй булайыҡ. Бауыр баçайыҡ,— тине.

Сәғиҙә лә күнде:

— Эйе шул, балам. Бер аҙҙан ҡоҙағый менән барырһығыҙ. Кешенән дә якшы түгел. Китеп етмәç борон тартаҡлап ҡайтып та еткән тиерҙәр.

## ҺАЛДАТКАЛАР

1

Диләкәй хәҙер үҙ төбәктәрендә һалдаттарҙан килгән хаттарҙы укып, уларҙың ҡатындарына, әсәләренә хат яҙышып биреүсе булып китте. Үткән ике ҡыш эсендә аҙлап, бала ҡараған арала булһа ла мөғәллимәнән укыуы, йәй кендәрендә үҙенән-үҙе укып-яҙырға ейрәнеүе уға байтаҡ белем бирҙе.

Яҙ көнө, мөғәллимә Зәйнәп үҙе ҡалаға ҡайтып киткән сағында ла уға бик күп татарса китаптар ҡалдырып •киткәйне. Ул уларҙы үҙе әллә нисәшәр ҡат укып, Ғабдулла Тукайҙың байтаҡ шиғырҙарын ятлап та алды. ^Мәжит Ғафури шиғырҙарын ул инде үҙе генә укып, ятлап ҡына түгел, иптәш ҡыҙҙарына ла укытты. Әсәһе, ҡайһы саҡтарҙа ҡыҙының былай гел укып ултырыуына зсе бошоп, орошоп та ала:

— Ҡуйһаңсы шул аҡка текләп, күҙ нуры бөтөрөп ултырыуынды! Әллә ниндәй тәкәй таҡмаҡтары табып .алаһын, да... исмаһам, эш ҡараштыр! — ти.

Ләкин Диләә әсәһенен, был һүҙҙәренә бер ваҡытта ла үпкәләмәне, китап укыуын да ташламаны.

— Әсәй, мин бетә эште эшләп бөттем инде. Әсәй, тыңлап ҡара әле, бына бер бик ҡыҙыҡ ерен укыйым,— ти торғайны.

Ул китаптары араһынан «Таһир—Зөһрә», «Буҙ егет», «Кәзә менән һарыҡ», «Шүрәле» кеүектәрҙе эҙләп алып әсәһенә, уның янына килгән бисәләргә укыш, уларҙы йә илатып, йә көлдөрөп, таң-ғәжәпкә ҡалдырып ҡуя. Шунан Мәғфүрә лә, асыуын онотоп, Ныязғолдар эшенә сығып китә.

. Киткән һайын ул Диләгә:

— Атайың ҡайтып килһә, тиҙ үк мине барып ҡайтар. Быҙауҙы эсерергә онотма. Ҡатыҡты ойот, тиҙәкте сәпәп ҡуй,— тип терлө йомоштар ҡушып китә.

Диләкәй был эштәрҙе тиҙ үк емертеп эшләп ташлай, һыуға ла барып ҡайта.

Ләкин атаһын йәй буйы көтһәләр ҙә, әсәһен ҡайтарырға югерергә тура килмәне. һуғыш башланғандан бирлеураҡ эшен ташлап, тағы ла үҙенең йылҡы көтөү эшенә тотонған Ҡотлояр быйыл йәй буйына бер ҡайтып әйләнмәне.

Диләкәй укыуҙан, эштән бушаған сағында бик күп хаттар яҙҙы. һалдаткалар уны әүрәтеп, иркәләп, ирҙәренән килгән хаттарҙы укып биреүен һорайҙар. Дилә Үҙе лә инәлтеп тормай. Башта ул хаттарҙы бик әкрен генә укый торғайны. Ә хәҙер, уларҙың һәр береһенен, ҡулъяҙмаһына төшөнеп алып, тиҙ үк укый. Элек: «Мәғфүрә килен, ҡыҙ баланы юҡ һөнәргә ейрәттерәһең. Аҙып китеүе бар. Быға тиклем ниндәй ҡыҙ яҙыу яҙған? Намаҙлығын белһә, шул еткән. Ныязғолдоҡоларҙы инде һөйләп тора торғаны ла юҡ. Яртылай мәрйә булып беткәндәр. Шуларға эйәртеп ҡыҙ баланы әрәм итәһең», тигән әбейҙәр хәҙер Диләгә килеп етәләр ҙә: «Балаҡайым, улыма — Сәлимгәрәйгә хат яҙып ҡына бир әле,

ҡыҙым, сауап булыр. Күҙеңдән һөйөнөрһөң»,— тип, камзул, кәзәкей кеҫәләрендә йөрөп, йомарланып, керләнеп бөткән ҡағыҙҙарын сығарып Диләкәйгә һуҙалар.

Мәғфүрә ҡыҙынын. зирәклегенә, унын укымышлы булып китеүенә ҡыуанып бөтә алмай. Унын. һайын укытыусы Зәйнәптең: «Апа, ҡыҙың бик үткер, уны укыуҙан тыйма. Әгәр ҙә мөмкинлек булып, уға Хаяттарға тейгән укыу тейһә ине, бына тигән кеше сығыр ине»,— тигән һүҙҙәрен иҫенә төшөрә, эсенән уға бик күп рәхмәттәр укып, киләһе көҙгә тағы килһә ярар ине, тип уйлай.

Диләнең һыуҙан ҡайтканын көтеп ултырған Гөлйөҙөм ҡулындағы хатты уға һуҙҙы:

— Бына, ағайыңдан хат бар, укып ишеттер. Шунан уға хат яҙырбыҙ,— тине.

Диләкәйҙен үҙенен дә сығып барған ҡыҙыҡ хәбәре бар ине:

— Ярар, еңгә, хәҙер,— тине ул. Үҙе силәктәрен һикегә ултырта-ултырта: — Әсәй, Ныязғол олатайым әллә ниндәй бер ҡыҙыҡ машина алып ҡайтып ултыртҡан. Бер урыҫ кешеһе унын янында, әллә нәмәләрен борғолап, ҡарап тора. Машинаның эсенә бесән ырғыталар ҙа, ул бесәндәр кирбес булып тупылдап сығып торalарсы. — Ул, тирләп ҡыҙарған битен һыйпап, оҙон ҡара сәс толомдарын артҡа ташлап ахылдай.

Гөлйөҙөм менән Мәғфүрә унын. был йөрөшен дә, хәбәрен дә оҡшатманылар.

Әсәһе:

— Йөрөйһөң тағы шунда! Әллә ниндәй ер сигенән йыйылған хәбәр ташып. Ир-ат араһына барып йөрөргә ир бала булдыңмы? Килешмәгәнде,— тине.

Гөлйөҙөм:

— Бөтмәҫ Ныязғолдон. шайтан арбалары, ен машиналары. «Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй». Беҙҙекеләр һуғышта ҡан түгә, баш һалалар, улар бында аҡса йыялар,— тип ҡушылды.

Диләкәй, күңелһеҙләнеп, үҙен аҡларға тырышты:

— Унда бер мин генә түгел дә инде. Хәҙисә лә, Бибикамал да, Сәхибә лә бар ине. Юл ыңғайы ғына боролоп ҡарап торҙоҡ.

— Йә, ярар. Ҡана, тиҙерәк хат укы. Бахырҙан күптән инде хат юҡ ине,— тине Мәғфүрә.

— Өс ай тулып килә инде,— тине Гөлйөҙөм.



Дилә хатты укырға тотондо:

«Әссәләмәғәләйкүм, вәғәләмәнләдәйкөм, сезки ғизЗәтле вә хөрмәтлү улып торғучы минен, күҙ нурындай күргән хәләл ефетем Гөлйөҙөмгә, хәләл ефетең Айбулаттин бик сағынып, бик сарғайып күбдин күп сәләмдәр күндереп, сезгә саулыҡ теләп ҡалам. һәм күҙ нурҙарым улым Тимербулатҡа, сейөклө ҡыҙларыма бер күрергә зар-интизар булып, күп сәләм күндереп, саулыҡларын теләп ҡалам. Вә һәм дә Ҡотлояр ағайым менән енгәмә барыһына айырмайынса күп сәләм күндереп, изге теләктәрен өмөт итеп ҡалам. Вә йәнә ҡәләм тибрәтеп хат язучы сөйөклө туғаным Диләфрузға күп сәләмләремне күндереп, күп рәхмәт укып ҡалам. Иәнә барса ағай-энe, ауыл ҡарттарына айырмай күп сәләм күндереп ҡалам.

Беҙҙен, тарафтан хәл-әхүәл һорай ҡалһағыҙ, бөген дә сау-сәләмәтбеҙ. Ул тарафта һеҙҙең дә сәләмәт йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам.

Мәғлүм булһын, хат яҙа алмай оҙаҡлап киттем. Сәбәбе — хәҙерге көндә ун, аяғым ранен булып лазареттә ятам».

— Уй алла, бахырҡайым,— тип ҡысҡырып ебәрҙе Гөлйөҙем. Унын. күҙҙәренән йәш тәгәрәп китте.

Мәғфүрә лә ах итте:

— Ҡуйсы, ҡуйсы, бахырҙы. һуғыш бит ул, уйнатмай. Диләкәй укыуын дауам итте:

«һаратау ҡалаһында ятам. Юлда бик оҙаҡ килдек. Яраһы бик ҡурҡыныслы түгел. Тубыҡтан түбән пуля үтте. Әхмәҙи ҡайнаға менән һәр ваҡыт бергә булдыҡ. Мин ранен булғас ҡына айырылыштыҡ. Уға хат яҙғанда минән сәләм яҙығыҙ. Адресемде ебәрегеҙ. Әле аяғым һыҙлағанға күрә, оҙаҡ ултыра алмайым. Шулай ҙа минеа всөн бик ҡайғырмағыҙ. Больнистән сыҡкас, тура килһә, өйгә лә ҡайтып китермен. Әгәр инде өйгә ҡайтырға тура килмәһә, Самарға төшеп сығырмын, тип уйлап торам. Самарҙан хат алып торам. Юлия Ивановна хаттан өҙмәй, рәхмәт яуғыры. һуңғы хатында Васяның дә еңелсә ранен булғанын яҙғайны. Хәҙергә шулай. Киләсәктен. хәйерле булыуын көтәбеҙ.

Бер-ике йыр яҙып ҡуяйым:

Әрмеләргә барып сәс ебәрҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Хаҡ яҙмышы беҙгә ҡушкан микән
Тыуған илде ҡайтып күрмәгә.

hоро шинель, яҫы ҡайыш
Ҡыҫа нәҙек билемдә.
Ҡара сәсем ағарһа ла,
Онотмамын илемдә.

Хуш, хуш, һау булығыҙ.
Яҙылды 1916 йыл, 25 сентябрҙә.
Яҙыусы Айбулат Айдаров».

Хатты укып бөткәнсә Гөлйеҙем менән Мәғфурә илашып ултырҙылар.

— Өс йыл буйы интегеп йөрөүе етмәгән, аяғы яраланып ята инде хәҙер,— тине Гөлйөҙөм.

— Исмаһам, йәне һау ҡалһын инде,— тип йыуатты уны Мәғфүрә.

— Әйтерең бармы, үҙе тере ҡайтһа, ризамын. Үҙ балаларына үҙе баш булып торор ине.

Улар шулай байтаҡ һөйләшкәндән һуң, Гөлйөҙөм үҙе әйтеп тороп, Диләнән хат яҙҙыртты:

— Яҙ инде, Диләкәйем, иң әүәле үҙе кеүек күп итеп сәләмен ҡуй.

Дилә күп хат укыуҙан әллә ҡасан ятлап бөткән, үҙе лә, хат яҙыусыларҙын. үҙҙәре лә аңламаған ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән сыбарлап бөткән татарса ҡатыш хатты тиҙ үк яҙып ташлай:

«Әссәләмәғәләйкүм, вәғәләмәнләдәйкөм, сезки бәнем тәндә яным бәрәбәрендә күргүче хәләл ярымға безки хәләл ефетең Гөлйөҙөмдин бик сағынып вә бик сарғайып, бер күреп сөйләшергә зар вә интизар булып... вә һәм д҈ә ғәзиз балаларындин... вә һәм дә...»— Ул Айбулаттын, сәләм яҙған кешеләренән генә яуап сәләме түгел, Гелйеҙөмдөң теҙеп әйтеп тороуы буйынса, ауылдың яртыһынан тигәндәй, оҙон сәләмдәрҙе ҡуйып бөтөп, «вә кинә үземездин хәл-әхүәл улына ҡалса...» тип аръяғына теҙеп алып китте.

Гөлйөҙем хатты, һәр ваҡыттағы ғәҙәте буйынса, бик оҙон яҙҙырҙы. Балаларынын үҫкәнен, үҙенең күргән нужаларын, ала һыйырҙың ауырып, йәй буйы һөттә аҙ биргәнен, шулай ҙа Айбулаттың ҡайтыуына май, ҡорот, ҡыҙыл эремсек йыйып ҡуйғанын, быйыл иген сәсә алмағас, ҡыҙыл башмаҡты һатып иген алғанын, кемдәрҙән хат килеп, кемдәрҙән хат килмәгәнен, Ныязғолдоң әллә ниндәй яңы машиналар килтертеп тултыртканын, үҙенең яҡшы төштәр күреп, унын тиҙ ҡайтыуын өмөт итеп йөрағандарын — барыһын да, барыһын да яҙҙырып, йыр менән бетөреп ҡуйҙы:



_Арғы яҡта туратым,
Бирге яҡта һаратым.
Ошо ай бөтөп, киләһе айға
Ҡайтыр микән һалдатым.
Мәсет манаралары,
Манара аралары.
Ҡәһәр һуҡһын, ләғнәт төшһөн,
Ярашмай-батшалары.

Хуш, хуш.
Ҡәләм тибрәтеп хат яҙыусы туғаның Дилә булыр.
Яҙылды 1916 йылда, октябрҙең 5-дә».

Гөлйөҙемден, хаты яҙылып бөтөүгә Хәмдиә килеп инде.

— Эй, ҡайһылай яҡшы тура килдем әле,— тип щатланды ул.— Ҡоҙасаҡайым, Диләкәй, ҡоҙаңа ла бер-ике ауыҙ һүҙ генә яҙып бир инде. Оҙон яҙҙырмайым, үҙенән хат булмағас, һаулыҡты ғына белгертәйек. Айбулат кейәү унын янынан киткәс, уға хат яҙып биреүсе лә юҡ инде. Үҙенең ҡулы белмәгәс ни, ҡыйын шул.

Гөлйөҙөм дә ағаһы тураһында ҡайғыртышты.

— Исмаһам, янындағы урыҫ иптәштәренән урыҫса булһа ла яҙҙырһасы һуң. Ағайым бигерәк йыуаш шул.

Диләкәй инәлтмәне. Тиҙ генә яҙып бирҙе лә:

— Әҙрисен бисергә алып барып яҙҙыртырһың,— тине.

Ләкин Хәмдиә быға яҡын да килмәне:

— Ҡуй, ҡуй, кәрәкмәй, шул тоҙ күҙ Мырҙағәлигә бараммы һуң. Бер көнө лә күҙен тондороп миңә шикаңларға итә, хәшәрәт. «Бәйләнеп ултырма, яҙһаң яҙ, яҙмаһаң, ана бисәң генә килһен, эшенде таптыртайым», — тип ажғырғайным: «Алла, харап икән, еккегә өйрәнмәгән байтал кеүек тибә»,— тип көлгән булды ла яҙып бирҙе.

— Шулай итәме, алланын, ҡәһәре төшкән! — Гөлйөҙөм асыулы аптыраны.

— Шулай итә шул, сәгерәй күҙ, оялмай ҙа ҡул һала бит. Әллә асыуланып берәй нәмәһен юрамал яңылыш яҙҙымы икән, шул хатымды алғанына яуап булманы.

Хәмдиә илай-илай көлөп, тағы бер ҡат яман итеп писарҙе әрләп алды ла, Диләне күндерҙе.

— Ҡабат уға аяҡ баҫмам, тигән һүҙем бар, яҙ, ҡоҙасаҡайым, Сабираның Асатайға яҙҙырған хаты барып еткән бит. Әҙрисен һин яҙҙы, ти.

Дилә русса харефтәрҙе бөртөкләп ҡыҫкырып укыйукый күсереп яҙҙы:

— Дей-ст-вующа-я армия, 117-ый Ярос-лавскин полк — 7-ая ро-та, 2-ой взвод. Асыл-гаре-еву.

Үҙе тирләп беште лә рәхәтләнеп көлде:

— Уф аллаҡайым, хат яҙыуҙан да оҙаҡ булды,— тине.

Дилә үҙенең был яңы белеменә ысын күңелдән шат ине.

Гөлйөҙөм дә:

— Улай булғас, ағайыңа ла һин яҙ ҙа ҡуй. Мине әллә ҡайҙан кеше эҙләтеп йөрөтмә,— тине лә үҙенең ҡулындағы конвертен тотторҙо.

Хәмдиә:

— Рәхмәт, Диләкәй. Ни теләһәң, шул алдыңда булһын. һыльг/ кейәүгә! — тип теләктәр теләп, ҡайтырға урынынан торҙо.

Кейәү тигән һүҙҙәрҙән оялып ҡыҙарып, Дилә әсәһенә күҙ һалды, уның Гелйеҙөм менән һөйләнеп, быларҙың һүҙен абайламағакын күргәс, тынысланды ла:

— Юҡты һөйләмә! — тип келдө.

— Бер ҙә юҡ түгел, туғанҡайым, барыһы ла буласаҡ эштәр,— тип Диләне иркәләп арҡаһынан һөйҙө лә ҡайтып китте.

Унан аҙаҡ Гөлйөҙөм дә ҡайтырға юнәлде.

Мәғфүрә уны, соланға оҙатырға сыҡкас, еңенән тотоп туҡтатты ла:

— Тукта әле, килен, һиаә бик ҙур хәбәр бар әле.

Гөлйөҙөм ҡапыл сусып китте.

— Уй аллаҡайым, ниндәй хәбәр тағы?

— һинең менән миңә түгел дә, бына әлеге Сәғиҙә ҡарсыҡтарға, сөй өҫтөнә туҡмаҡ.

— Йә?

— Яланбикәнең ҡайны-ҡәйнәһе уны тиҙ үк килеп алһындар, тип әйтеп ебәргәндәр. Клсә Ҡаскын ауылынан Ҡунаҡбай ағайым баҙарға барышлай төшөп үтте. «Берәүҙең бер аманат сәләме. Туғаным булһаң да, әйтәйем инде, тине. Берүк ата-әсәләренә еткер, ҡыҙҙарының хәле насар. Буйында булғанын да белмәгәндәр. Килгән ҡунаҡтарға сәй ултыртып ҡарап йөрөгән дә, ҡәйнәһенә хәҙер инәм тип кенә әйтеп сыҡкан. Шул сәғәт эсендә һыуыҡ ҡурала бәпесләп, үҙе баланың кендеген ҡырҡып, шунда ятҡан, ти. Сәй-маҙар эсеп бөтөп, ҡунаҡты оҙатып, ҡәйнәһе уны эҙләй сыҡһа, хоҙаның хөкөмө, ир баланы ҡулына алып, аптырап был ултыра, ти. Килеп алһын-



дар, ер-һыу ҡоротоп, гөнаһына. батып, әҙәм мәсхәрәһендә ултырыр хәлебеҙ юҡ, тип әйтеп ебәрҙеләр»,— ти.

— Эй, бахыр ғына,— тине Гелйөҙем, аптырап.— Ни булды икән, нишләп кенә юлдан яҙҙы икән, йыуаш ҡына кеше ине,— тине. Уның бәләкәй саҡтан килгән йән дуҫы өсөн йәнә бик ауыр.

— Эйе шул, килен. Ундайҙар хәҙер бик күбәйеп бара, ти, бит. Таллы ауылыньщ Орҡоя тигән бер һалдатка ла, шулай ире юкта йеклө ҡалып, уны төшөрәм тип мышаяҡ эскән дә, бахырҙын, бөтә тәне ҡара янып барып үлгән, ти. Ишан: «Был зина эше бик ҡаты гөнаһ, илдән бәрәкәт китер, ямғыр яумаҫ, иген үҫмәҫ»,—тип уны зыяраттың тышына ҡуйҙырткан, ти. Шул ук Таллылағы минең Нурйыһан әхирәт тә шул хәлгә төшөп, шырпы башы иҙеп эскән дә, хәҙер бер туктауһыҙ эсе үтә лә ҡоҫа, ашай ҙа, эсә лә алмай, ти. Ҡылтамаҡ булып үлер, әҙәм булмаҫ, тип һөйләйҙәр, ти. Бахыр, ул да йәш кеше түгел дә бит, яҙмыштыр инде. Барып күреп хәлен белермен тигәйнем әле, ултыртып алып барыусы булһа.

— Ҡуй инде, еңгә, әрәм була бит әҙәм баштары,— Гөлйөҙөмдө ауыр һағыш алды.

Улар соландан сыҡкан саҡта Тимерғәле ҡарт, билен һыйпай-һыйпай, халыҡ ағылған яҡҡа, бесән бәйләткес машинаны күрергә китеп бара ине.

Гөлйөҙөм менән Мәғфүрә уны тағы ла нығыраҡ йәлләп ҡуйҙылар.

— Бахыр, һаулығы юк, бөксәнләп йерөй шул. Иә Исхағынан ярты йыл буйы хәбәр килмәй.

— Нисек кенә барып әйтермен инде был хәбәрҙе, тел әйләнмәй бит әле,— тине Мәғфүрә.

2

Был ғәжәп машинаны күрергә барған кешеләр уны себен кеүек һырып алғайнылар.

Машинаның яҫы ҡайышлы тәгәрмәстәре дыуылдап әйләнәләр. Ҡаҙаҡ егеттәре, урта йәштәге ирҙәре, сапандары өҫтөнән билдәрен быуып, баштарындағы ҡырпыулы бүректәрен арткараҡ кейеп, иҙеүҙәрен ысҡындырған кейе, күҙҙән аяҙ һалкынына ҡарамайынса, ҡара тиргә батып, һауаға быу күтәреп эшләйҙәр.

Теҙелеп торған эре эҫкерттәрҙән бесәнде машинаға һала торалар, ә ул әллә ҡайҙа инеп китеп, ҡыҫып бәй-

ләнгән эре йәшел кирбес була ла, шыуып барып сыға. Уларҙы алып ситкә ырғыта баралар. Сарсынбай тигән ҡаҙаҡ килгән кешеләрҙең ниндәйҙер һорашыуҙарына бик белгән төҫ менән ниҙер әйтеп аңлатайым тип ҡулдарын һелтәгәнсә, бесән кирбестәре өйөлөп тә китте.

Приказчик Алламорат быға тура килеп:

— Уй, арҙа ҡаҙаҡ, аңшайма, эшенде ҡара! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Сарсынбай уға ишеттермәй генә ҡаты һүгенде лә, кирбестәрҙе тағы ла ашығыс ырғыта башланы. Приказчик үҙенән-үҙе риза төҫ менән, итек ҡуңыстарын ялтыратып, ике ҡулын ҡыҫҡа пальто кеҫәһенә тығып, яйлап баҫып, машина буйлап китте.

Йыйылған халыҡ хайран ҡалды:

— Ҡайһылай йыйнаҡ була, ә!

— Эйе, туҙмай ҙа, һыуланмай ҙа.

Староста Ҡаҙанҡап Абдулла үҙ байлығы менән маҡтанған һымаҡ маһайҙы:

— һай, һай, был Ныязғол байҙы әйтәм, бигерәк ҙур урындар, өлкән кешеләр менән эш йөрөтә бит, әй. Был бесәнде бер бик ҙур генерал һуғыш аттарына бәйләттертә,— ти.

Кемдер яуапланы:

— Шунда китә, ти, шул. Унда ат тигәнең күптер инде.

— Хисапһыҙ индеул.

Өсөнсө берәү быларҙың һүҙен йөпләмәне:

.— Хисаплыға ла ҡалыр инде. Өс йыл буйы ҡырылыуға. Беҙҙекеләрҙең бер ҙә алға барған эше юҡ, ти, әлТ.

— Төрлөһө булыр инде. Пулшәне лә биргәс.

— Балтыҡтан да кире сиктек, тип яҙған, ти, әле Ғәли бажа.

— Рәт китте инде. Ни еткермәк кәрәк унса ғәскәргә.

— Ныязғолға бының. өсөн ҡаҙна күп аҡса түләйҙер әле.

— Түләмәй, бушҡа эшләтә тиһеңме? Ә хеҙмәт сәпсим буш төшә инде уға. Ҡаҙаҡтар һуғышҡа алынмағас, уларҙы шулай төрлө ергә эшкә ҡыуалар икән шул.

— Шулай, ти, шул. Әле бынау аҡ сапанлыһы менән бер көндө һөйләшкәйнем. Ике улымды окоп ҡаҙырға оҙаттылар, ти.

•— Был һуғыш Ныязғол бәхетенә генә булды ахыры.

Ысынлап та, Ныязғолға һуғыш ауырлығы теймәне.



^май әллә ҡасан фронтта булырға тейеш булһа ла, военнач менән һөйләшкәндән һуң, стройҙан тыш һуғыш хеҙмәтендә һаналып, Ъ1рымбурҙа урынлашты ла, бисә-^ен янына алдырып, бесән, иген кеүек һуғыш заказдары үткәреп тыныс ята бирҙе. Ҡыҙы Фатиха ла ағалары янында Ырымбур гимназияһында укып ята. Ваҡ балалары өйҙә укыйҙар. Өйҙә лә тыныслыҡ. һуғыш йылдары унын өсен бөтә теләктәренен, эшкә ашыу йылдары булып китте.

Унын. төрмәлә ятып ҡайтыу ваҡиғаһы ла хәҙер онотолоп бара. Унда ул, биш ай ғына ятып, ҡотолоп ҡайтҡан көнө менән еңел атлап иртәнге намаҙға барҙы. Ул унда ауыл ҡарттарынын, бөтәһе менән ҡуш ҡуллап күрешеп, бик һағынып, нужа күреп ҡайтканын һөйләп, намаҙ артынса бөтәһенә лә хәйер өләште. Кис мулланы, Абдулланы һәм шундағы үҙенең сере һыйғандайҙарҙы саҡырып алып һыйланы. Уларҙан ул ситһенмәне. Быға тиклем тирә-яҡ ауылдарҙа унын төрмәлә булыуын ишетмәй ҡалғандарҙыщ булмауын үҙе яҡшы белгәнгә күрә, хәҙер ул хәбәргә үҙ файҙаһына яраҡлы дөрөҫ ағым биреп ебәрергә тырышты.

— Шулай, ағай-эне. Ризыҡ булғас, алла яҙғанын күреп, ситкә сәселгән ризыкты йыйыға ҡайттым. Донъяла дуҫтан дошман күп. Дуҫ-иш ташламағас, дошмандар япҡан нахаҡ бәләләрҙән биш ай эсендә ҡотолоп ҡайттым. Алланың биргәненә шөкер.

Дуҫтар баштарын сайҡап хупланылар:

— Бәрәкалла, бәрәкалла.

— Әйтерен. бармы.

— Ысын шул.

— Беҙ ҙә бик шатланабыҙ.

Ныязғол эштен, нисек булғанын өҫтән-мөҫтән генә һөйләп, бөтә ғәйепте банкыла ултырған урыҫ начальниктәренә япһарып, уларҙың башҡортто, мосолмандарҙы күрә алмаусылыҡтарынан килеп сыккан бәлә итеп, үҙенен. «һөттән аҡ, һыуҙан "пак» икәнлегенә ышанДырып ҡуйҙы.

Шулай итеп, был ҙур байлыкты ул үҙ ҡулында юҡка һаҡлап ҡалдырманы. Донъя ҡыуып мал арттырырға тағы ла ихласыраҡ дәрт менән, төн йоҡоларын ҡалдырып, эшкә кереште. Ул хәҙер элек үҙе менән эш алып барған компаньондарынан да уҙҙырып ебәрергә тырышты. Тирә-яктағы рус байҙарының доходтары күплегенән

көнләште. Ҡайҙа, ҡайһы эшендә генә һүрәнлек һиҙһә, шул урынға ынтылды. Юлға һалды. Әйләнгән һайын ҡалаға барҙы. Имайға етеп ҡайтты. Унын, аҡыллы кәнәштәре, ҡалала эш йөрөтә белеүе уға тағы ла ҙур терәк булды. Йөрөгән бер ерендә яңылыҡтар ҡутарып ҡайтты. Ауылдың осондағы ун ике тәҙрәһе оло урамға ҡараған ике ҡатлы, күк көмбәҙле матур йорт, уның тирә-яғындағы ҙур таш һарай, Таллы күл, тимер түбәле кухня, таш тимерлектәр, ҡалалағыса кранлап һалдырылған оло мунса, ялсылар йорто, иген машиналары, пар двигателе, тапам машиналары менән тулып ултырған киң ихаталар, оҙатылған меңәр бот игендәр ҙә уның күңелен тынысландырманылар. Ул хәҙер Кузьмин байҙың бесән бәйләтә торған машинаһы кеүек машина килтереп ултыртып, эшкә ҡушты. Машина килеүгә Йайыҡ яғынан оло фургондарға тейәлгән ике йөҙләп ҡаҙаҡ килеп төшөп, ихата һыртына ҡыуыштар ҡороп урынлаштылар.

Тимерғәле ҡарт, башҡалар менән бергә аптырашып йөрөп, өйөнә ҡайтты. Оҙаҡ йөреүҙән унын, биле тағы ла ныҡыраҡ ауыртҡайны. Өйөнә ҡайтып инеү менән Сәғиҙәгә бөгөндән дә ҡалдырмай һөлөк һалырға ҡушты. Сәғиҙә әмәлсе Барсын әбейҙе саҡырып кәңәшкәндән һуң, уньщ һүҙен тынланы.

Бареын әбей:

— Юк, Сәғиҙә, бөгөн шишәмбе көн, һәлек һалыуҙың бер файҙаһы ла булмай ул. Иртән шаршамбы көн, һәйбәтләп тороп һалырбыҙ, алла бирһә. һөлек арты яраһына ябырға тип кейәү үләне йыйып ҡуйғайным. Бешереп кенә ябырбыҙ. Ул яраны ла тиҙ еткерә, ҡанды ла тарҡатыусан була. Унын, бик шифалы сағында, май айында, ҡаҙаҡ урыҫы еренән барып йыйғанмын. Иртән һалырбыҙ, иртән,— тине.

Тимер ҡарт та быға күнде. Бик һыҙланһа ла:

— Ярар инде, улай көнө тура килмәгәс, бер көн кеткәндән әллә ни булмаҫ,— тине ул.

Иртәгеһенә мейестең түрьяҡ эргәһендә ҡартты арҡаһы менән яҡтыға ҡаратып ултыртып, Барсын әбей унын бетә биленә буйлатып һөлөк һалды. Өлкән йәшел бутылканан эре-эре ҡара юлаҡ һыртлы ҡуңыр һөлөктәрҙе сығарып, стаканға һалып, ҡарттың тәненә ҡапланы. Ас һөлөктәр, баштарын кәкәңләтеп, тәнгә йәбешәләр ҙә, һулҡылдап, ҡан һура башлайҙар. Барсын уларҙыщ туйып төшкән береһен табансала әҙерләп ҡуйылған ваҡ тоҙға баштарын төртөп ҡоҫтора ла, һығып, һыуҙа сайкап, кире бутылкаға төшерә бара. Үҙе һейләнә:

— Мин быларҙы йәй көнө Селекле күлдән үҙем барып тотҡайным. Унда ҡара һелөк тә Тсүп икән. Ҡапмаһа ярар ине, тип ҡуркып беттем. Ҡара һөлөк ҡапһа, тешләй ул. Улай ҙа йәбешмәне. Ҡайһы бер күлдең һөлөгө әллә ни эшләп әрсәнке була, тиҙ үлә. Бына быларҙы мин өсөнсә кешегә һалам инде, әле тик бишәүһе генә үлде. Утыҙ бише тере. Собханалла, тфү, тфү...

һүҙсән Барсын шундай үҙенең күргән-белгәндәрён, әмәлдәрен еҙлөкһеҙ һейләй-һейләй, оҙаҡ итеп Тимерғәле ҡарттың ҡанын һурҙыртты. Унын ундай хәбәрҙәре бик күп ине.

—• Бына бындай ҡандан килгән ауырыуҙарға тоҙло һыу ҙа бик файҙа итә. Ҡайһы ғына йыл әле, һуғыш сығыр йылы йәй инеме икән, хәтеремдә шулай ҡалған, Миңниса апайым, Хажғәле менән Ямал килен, Бикмырҙа, тағы кем бар ине һуң әле, иҫен. ҡороғоро, анау Басир ҡарт мәрхүмдең улы, кем һун, әле, атың бар булғыры...

— Насыйпты әйтәһенме?

— Эйе эйе, Насыйп. Шулайтып күмәкләшеп барып, тәкә һуйып бешереп ашап Әселекүлдә бер йома яттыҡ. Анау аҡһап йөрөгән Хажғәле лә һин дә мин. Теҙәлде лә китте. Миңниса апайым да, бына Тимерғәле ҡорҙаш һымаҡ, билдән сыҙамай торғайны, ана ул да шунан бирле һыҙланғаны юк. Тик Ямал киленгә генә әллә ни эшләп,, хоҙаның хикмәте, шифаһы теймәне бахырға. Шунан ҡайтҡас, бер йомалай ғына түшәктә ятты ла, эсенән ҡуҙғала алмай, янып-көйөп ауырып, донъя ҡуйҙы. Алланың рәхмәтендә булғыры. һәйбәт әҙәм ине. Эшмәкәр ине. Әҙәмгә зыяны булманы. Әйттем мин уға: «Ямал килен, мин әйтәм, күлгә төшкән саҡта һаҡ бул. Бисмилла әйтеп, текөрөнеп теш. Төшкәндә бер-ике бөртөк сәсенде өҙөп һыуға һал, эйәһе тотмаһын»,— тинем. Әллә бахырға шул күл эйәһе хаслыҡ итте инде. Барғанда арыу ғына барғайны. Ҡайтканда арбала ятып саҡ ҡайтып йығылды.

Ул арала һөлектәрҙең ин, аҙаҡкыһы туйып, йыуан булып, быҙырайып тәгәрәп төштө. Ҡарттың хәле бөтөп, хүҙ алды ҡараңғыланды, башы әйләнде. Төҫө ағарып, хәлһеҙ тауыш менән:

— Мин ятайым инде, бик арыным,— тине.

Гөлйөҙөм уның янына ултырып, иплəп кенə яурынына ҡул һалды:

— Яланбикə, əхирəт!

Ул, ҡапыл тертлəп, ҡасырға телəгəн кеүек, урынынан шыуҙы. Гөлйөҙемгə бер аҙ темһəйеп теклəп торғас, ҡапыл шарҡылдап көлөп ебəрҙе:

— Йə Йөҙөкəс, һин дə һыуға килдеңме? Әйҙə, ҡар һыуы тултырайыҡ, Йеҙекəс.— Ул балалар кеүек шатланып ҡулдарын сəпелдəтте. Ултырған көйə йыраҡаға табан шыуып, Гөлйеҙөмдө саҡырҙы.— Әйҙə, һыу алып ҡайтайыҡ. Ҡар һыуы тоноҡ. Сылтырап ағып ята. Тауҙан аға. Йырлашып ҡайтырбыҙ. һыу алайыҡ...

Гелйөҙем ҡурҡып болоҡһоуҙандер ҡалтыраны. Яланбикəнең аҡылдан яҙыуында шиге ҡалманы. Нисек итеп өйгə алып ҡайтырға, тип уйланды. Ул арала Яланбикə йыраҡалағы силəктəрен һыулы һымаҡ итеп, тырышып күтəреп алды ла, үҙе һөйлəп, үҙе көлə башланы:

— Гөлйөҙөм, ҡара əле, силəк гармун булып уйнай. Бейейбеҙме? Ҡара, ҡара, үҙе зыңғылдай.— Ул, силəккə ҡулдары менəн дыңҡылдатып һуҡҡылап, бейеү таҡмағы. əйтə башланы: «һəллəү, һəлилəү, һəлилəү, һəлилəү...» Ул тағы бер аҙҙан, эсе ауыртыуҙан сытырайып, кире ултырҙы.

— Йөҙөкəс, эсем бик ауырта шул. Бəпестəн һуң шулай булды,— ул туп-тура ҡарап аҡыллы кеше кеүек етди төҫ менəн зарланды.

Гөлйөҙəм Яланбикəнең үҙен танығанына ла, былай һөйлəүенə лə аптырап: «Әллə иҫе инəрле-сығарлы тигəндəре шул буламы икəн?» — тип уйланды.

— Мин улымды əле генə һəйбəтлəп ҡойондороп йсп<-ларға һалдым. һин күрҙеңме уны, минең улымды? Бик матур. Атаһына оҡшаған. Уның атаһы Хəсəн түгел, Мотаһар гармунсы.— Ул аҙаҡҡы һүҙҙəрен шыбырҙап ҡына əйтте лə, ниңə əйткəненə үкенгəн һымаҡ, ауыҙын тиҙ генə ҡулы менəн ҡаплап, балаларса ҡурҡҡан күҙҙəре менəн Гөлйеҙөмгэ теклəне.

Гөлйөҙөмдең уны йəллəүҙəн эсе өҙөлдө. Ҡурҡыуын бөтөнлəй онотто.

— Яланбикə, əйҙə ҡайтайыҡ, əхирəт, əйҙə.

— Ҡайтмайым. Әсəйем туҡмар. Хəсəн дə яратмаҫ. һин минең малайымды алып кил. Имгеһе килгəндер. Минең балаларым хəҙер күп. Барыһы ла матур, барыһы ла һөйкөмлө. — Ул тағы ла күңелленеп көлə баш-



ланы.— Әсəйем һыуға һал да ҡуй, тисе, һалмайым əле. Дтаһы күрмəгəн бит. Ул ҡушһа, һалырмын. Эйе бит, йөҙөкəй. Уға исем дə ҡушмаған булалар.— Ул, үпкəлəгəн кеүек ауыҙын күпертеп, ситкə боролдо.

Гөлйөҙөм уны һаман ҡайтырға димлəне. Көйəнтəсилəктəрен үҙе алып, Яланбикəне ҡулынан етəклəне.

— Әйҙə, əйҙə улың да унда. Әсəйең сəй эсергə тиҙ •ҡайтһын тине.

Яланбикə телəр-телəмəҫ ауыр, аҡрын атлап Гелйеҙөмдөң артынан эйəрҙе.

Гөлйеҙемдөн, ҡурҡыуы бөтһə лə, өшөгəн кеүек, тештəре шаҡылдап ҡалтырай ине.

Был ваҡиғаның шау-шыуы байтаҡҡа барҙы. Баланы мулла килеп күмеште. Унда атаһыҙ тыуған йəки исем ҡушылмай үлгəн балаларҙын, бөтəһенə лə дөйөм булған «Абдулла» тигəн исемде Яланбикəнең улына ла ҡуштылар. Яланбикəне ҡайныһы: «Хаяһыҙ, шуның есөн алла ҡарғаған»,—• тип əрлəне. Күб^һе йəллəнелəр: «Нишлəһен инде, бахыр. Дүрт аяҡлы ат та һөрлегə. Яңылышҡандыр. Шайтан юлдан яҙҙырғандыр. Балалары əрəм булып етем ҡалдылар. Аҡылына килһə лə, барыбер ире алмаҫ, нисек донъяла йəшəһен»,— тип төрлөсə уйлаштылар. Яланбикə, иҫкə килмəйенсə, ҡыш буйына өйҙə ултырҙы. Ире фронттан, был хəбəрҙе ишеткəс, үҙенең ата-əсəһенə: «Балаларҙы етем итмəгеҙ. Яланбикəне лə ҡаты ҡаҡмағыҙ. Беҙ ҙə бында эт типкеһендə, төрлө хəлдəргə осрап йөрөйбөҙ. Ҡайтҡас күҙ күрер»,— тип хаттар яҙа икəн, тип һөйлəнелəр. Лəкин ул хаттарҙың береһе лə Яланбикə ҡулына тешмəне. Төшһəлəр ҙə ул уларҙы аңламаҫ ине. Ул бирһəлəр ашап, бирмəһəлəр һорамай, һорауҙарға яуап бирмəй, моңайып тəҙрəгə ҡарап, яҙҙы еткерҙе. Яҙ башында ҡоро һəлдəгə ҡалып, атаһы, əсəһенен, йөрəктəрен өҙеп ятыуҙан уларҙы ҡотҡарып, апрелдең матур таңында йəн бирҙе. Унщ əсе тауышы менəн «əсəй!» тип ҡысҡырып ебəреүенə Сəғиҙə, йоҡоһонан ырғып тороп, уның янына килде. Яланбикə тирлəп, бышлығып, ҡулдарын башынан аша мендəргə ташлаған көйө эйəк ҡағып ята ине. Сəғиҙə: «Эй балаҡайым!» — тине лə ҡартын уятты:

— һин, тор əле. Ясин сыҡ. Яланбикə үтеп бара.

Тимерғəле, тороп ултырып, ясин уҡырға тотондо. Сəғиҙə ҡасандыр өҙөлөп һөйөп, һуңғы ваҡытта шул тиклем əсе хурлыҡ килтереп рəнйеткəн бал*аһын был сəғəт-

Барсын ҡабаланып яҫтыҡ бирҙе лә, Сәғиҙәне ашыҡтырҙы:

— Ҡана, тиҙ генә һурпанды өлгөрт. Кейәү үләне балыҡҡанмы, саҡ ҡына һыуыт та, һөлөк яраһына яба һалайыҡ.

Тимерғәле ҡарт түшәктә оҙаҡ ятты.

3

Яланбикәне кисә кис әсәһе ат менән барып алып ҡайтты. Уның янына хәл белергә барырға бер кем дә ҡыймаһа ла, Гөлйөҙөм шунда уҡ килеп етте. Ул үлек кеүек һары төҫтә, хәрәкәтһеҙ тонған күҙҙәрен аҡрыв йөретөп, Гөлйөҙөмдөң һаулашыуына ҡаршы, нәҙек, һыуыҡ бармаҡтарын биреп, ҡуҙғалыш яһаны. Тағы ла тынды. Гөлйеҙөм түҙмәне, илап ебәрҙе. Сәғиҙә әбей ҙә өндәшмәй бер аҙ торғас, алама сепрәктәргә уралып, ташландыҡ булып ятҡан балаға күрһәтте:

— Ана ята әҙәм хурлығы, — тине. — Күргән ҡайғылар ҡайғы булмаған икән, бына икән ул ысын ҡайғы, —- тип өҫтәне.

Улар башҡа бер һүҙ ҙә һөйләшмәнеләр. Гөлйеҙөмдөң берәй һүҙ әйтеп әүрәтергә лә, баланы асып ҡарарға ла батырсылығы етмәне. һылтау йомош итеп килгән тәрән табаны ғына алды ла, күҙенән ихтыярһыҙ тәгәрәгән йәштәрен һөртә-һөртә, ҡайтып китте. Ул тағы ла: «Әрәм була бит әҙәм баштары»,— тип уйланды. «Ыуалмағай, утҡа янһын, ғәзиз баштар юғала». Ниңәлер ошс йыр аҙағы уның телендә уралды. Яланбикә бик йәл ине,| Ни менән ярҙам итәһең..-.

Сәғиҙәләргә, Гөлйөҙөмдән башҡа, бер кем дә килмәҫ булды. Бер* йоманан артыҡ ваҡыт үткәс, бер көн та! менән Сәғиҙә югереп килеп Гөлйөҙөмдөң тәҙрәһен туҙемһеҙлек менән шаҡылдатты. Гөлйөҙөм сусып ырғып тороп! ишек асты. Сәғиҙә туҙған сәсе, алarған күҙҙәре менән Гөлйөҙөмгә йәбеште:

— Килен, балам, әйҙә әле. Яланбикә әллә ҡайҙа киткән.

Гелйөҙөмдөң быуыны бушап, ашығып кейенә башланы.

— Ни эшләп, ҡайҙа киткән?

Әбей хәлһеҙләнеп урындыҡ ситенә ултырҙы. Көскә сыҡкан тауышы менән:

— Белмәйем. Әйҙә әле, әйҙә. Балаһын һыуға һалған



па сығып киткән. Мин тышта әүерәләнеп йөрөп, күрмәй тсалғанмын. Бабай ята ине.

Гөлйөҙөм тыны тарығыуҙан көскә атлап килеп етте. ©йҙә берәү ҙә юҡ. Иҙән уртаһында тәрән ағас ялғаш. Ыуыу күҙенән. Ҡара сәсле, ап-аҡ тәнле ир бала, ауыҙын йыларға әҙерләнгән кеүек асып, күҙҙәрен сырт йомоп ята ине. Уны Гөлйөҙөм йәһәт кенә ҡулына алды. Ләкин бала <5ҙ кеүек һыуыҡ булып күгәргәйне. Ул уны һике ситенә алып барып һалды ла:

— Ҡайнаға ҡайҙа һуң? — тине.

— Эҙләп киткәндер.

Әбей мәғәнәһеҙ ҡараш менән ергә сүкәйҙе.

Гөлйөҙөм, әбей һүҙенән уны эҙләргә кәрәк икәнен хәтерләп, урамға сыҡты. Хәмдиәгә барҙы. Мәғфүрәгә •әйттеләр. Тиҙ арала был хәбәр таралып, ҡатын-ҡыҙ, шыбырҙашып һөйләшеп, эҙләшә башланылар.

Тимербулат, ҡулына югән.тотоп, тауҙан ҡайтып килә ине. Гөлйөҙөм улынан:

— Ҡайҙан киләһең, балам? — тип һораны.

— Атты тау ашырып ебәрҙем. Ату һаҙлыҡҡа китә <лө бара. Әсәй, Яланбикә апайым ни эшләп был ваҡытта тауға һыуға китеп бара? — Ул ҡар һыуына йөрөү ваҡыты ала ҡарҙа ғына булғанын белеп был ҡыҙыҡ хәлдән ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.— Квйәнтәләп тороп китеп барасы!

— Тукта әле, көлмә юҡҡа. Ҡайһы ерҙә осраттың?

— Ана Өсҡайынға етеп бара ине.

— Бар, улай булһа, һин ейгә балалар янына ҡайт. Мин унын, артынан барайым.

— Ни эшләп, әсәй?

•— Бар, бар, ҡайт, балам. Төпсөп торма. Ауырығандыр ул, барайым әле.

Тимербулат, маңлайын тексәйтеп, ҡаштарын йыйырып, ашыҡкан әсәһенең артынан һораулы ҡараш менән бер аҙ ҡарап торҙо ла ауылға төштө.

Яланбикә, кейәнтә-силәктәрен йыраҡаға ауҙарыш ташлап, аҡ ҡайынға арҡаһын терәп аяҡтарын һуҙған Да, тауҙы яңы күргән һымаҡ, аптырап ҡарап ултыра ине. Сәстәре туҙып төшөп яурындарын ҡаплаған. Яулығы эргәһендә ята, үҙе күлдәксән. Аяғында үксәһе тишелгән йөн ойоҡ. Уньвд ябығып кипкән тәне һалҡынға ҡужырайып ҡалтырап ҡуя. Ул Гөлйөҙемдөн, килгәнен абайламаны.

тәрҙә йөрәге өҙөлөп йәлләне. Тағы ни менән генә уға ярҙам итергә лә б*елмәйенсә тирә-яҡҡа ҡаранды ла, хәҙер һис нәмә эшләргә лә мемкин булмағанлыҡтан аптырап барып, ҡыҙының да үҙенә оҡшаған һары сәстәрев һыйпаштырҙы. Ҡайнар күҙ йәштәрен уның һыуынған йөҙөнә ағыҙҙы.

Яланбикәне үҙенең сабыйы янына күмделәр. Уны йыуышырға килгән бисәләр: «Ер күтәрмәҫлек ауыр гөнаһ эшләгән был бәндәһен алла үҙе кисерһен инде»,— тип теләнеләр.

## ҘУР ШАТЛЫҠ

Был хәбәрҙе ишетеү менән Гөлйөҙем иң тәүҙә Шәһиҙә инәһенә йүгерҙе.

— Инәй, һөйөнсе, инәй, һөйөнсө!

Әбей, бер үҙе тын ғына ултырған еренән, ишектең ғәҙәттән тыш шартлап ҡапыл асылыуынан терт итеп ҡалды. Ә Гөлйөҙөмдөң, яулығы шыуышып төшөп, туҙып киткән сәстәренән, әллә ни тиклем ҡар һөйрәп ингән быймаларынан тағы ла нығыраҡ ҡурҡып китте.

— Инәй, һөйөнсө!

— Ни бар, балам? — Әбей ҡулындағы бәйләмен кейеҙ өҫтөнә һалды.— Ипле бул, тын да ала алмайһың дабаһа, бер самауыр сәй һөйөнсеңә.

— Ысынды әйттең, инәй,— Гөлйөҙөм, урындыҡ ситенә ултырып, тәрән көрһөндө.— Тын да ала алмайым, йөрәгем сығып бара, батша төшкән, инәй. Хөрриәт!

— Ярабби хоҙайым, ысынмы?

— Ысын, инәй, батшаның тәхетен ҡолатҡандар!

Гөлйөҙөмдөң шатлыҡ менән янған күҙҙәре, ҡыҙарған бите һаташҡан кешё һымаҡ, илай-көлә һөйөнсө һорауы Шәһиҙә әбейҙе аптыратҡан булһа, хәҙер инде ул үҙе урынынан һикереп торҙо.

— Ярабби хоҙайым, ҡаты асыуланған саҡтарымд;; һине лә әрләй торғайным, рәхимең бар тигәндәре ысыц икән.— Ул, галоштарын яҙа-йоҙа кейеп, урындыҡ ситенә ултырҙы. Үҙе күҙенән тәгәрәгән йәштәрен дә һәртергә уйламаны.— Ярабби хоҙайым, демөктөргәнһең икән, ҡара йөрәкте!

Әбей үҙен ҡаплап алған шатлыҡ тойғоһона сумған» Ул, Гөлйөҙөм барлығын да онотҡан кеүек, ғибәҙәт ҡылғандағы һымаҡ, туп-тура алланың үҙе менән һөйләшә ине.



Бер аҙҙан ул:

— Кемдән ишеттең, балам, был елкән шатлыҡ хәбәрен? — тип һораны.

— Волостән Ҡаҙанҡап Абдулла ҡайтҡан. Шул һөйләне тип, миңә Мәғфүрә еңгәм әйтте.

— Эй алла, ҡыҙым, былдай һөйөнсөгә бер самауыр сәй нәмә генә ул. Ана ала быҙауым һиңә булһын. Шундай ҙур эш. Беҙҙең балаларҙың түккән ҡандары ерҙә ҡалмаған икән, беҙҙең теләктәр ҡабул булған икән, балаҡайым.

Әбейҙең дә, Гөлйөҙемдөң дә өйҙә түҙеп ултырырлыҡ хәлдәре юҡ ине. Улар икәүһе лә ҡабаланышып сығып, ейҙән-өйгә дуҫ-иштәренә ашыҡтылар.

— һөйөнсө, батша төшкән!

— һөйөнсө, батша юҡ!

— һөйөнсө!

— һөйөнсе, нмеш, мин иң тәүҙә ишетеп, үҙем күлдәк әйттем инде. Улым һуғыштан ҡайта бит инде. һуғыш бөтә бит инде.— Сәғиҙәнең бер ҡайғыһы ла ҡалмаған шикелле, шатлығы шундай көсле.

— Минең ирем ҡайта.

— Ә минең өс улым.

— Батша төшкәс, һуғыш та бөттө инде.

— Батшаның тәхетен ҡолатып төшергәндәр беҙҙекеләр.

Быға тиклем хәсрәт менән түгелгән әсе күҙ йәштәре эҙенән шатлыҡ менән тәгәрәгән йәш тамсылары ялтырай. Йөҙәр йыл буйы туңып ятҡан ауыр боҙ иреп шартланы һымаҡ. Халыҡтын, ошо ҙур шатлығы ҡанатланып осто ла бөтә Ырғыҙ буйьша таралды.

Имайҙың Ырымбурҙан ҡайтып төшеүе ейҙәгеләренә ҙур ҡыуаныс тыуҙырҙы. Барыһынан да бигерәк Рәхимә шат.

— һау ғына ҡайтып еттеңме, балаҡайым? Нишләп киленде алып ҡайтманың? Фатиха ла ҡайтмаған, хатығыҙ ҙа юҡ.

Имайҙың һалдат кейемендә булмауы ла уның әсәһен ҡыуандыра.

— Ярай әле, балам, ҡатҡан шинель һөйрәтмәгәндәр икән үҙеңдән. Үҙ кейемең булғас, күңелгә бик һәйбәт.

Имай әсәһенең өҙлекһеҙ һорауҙарына яуап биреп өлгөрә алмай.

— Шинель кейҙем, әсәй, әле ҡайтканда сисеп ҡалдырҙым. Киленең менән Фатиха икәүләп ҡайтырҙар, йә үҙем барып алырмын.

— һин тағы китәһеңме ни? Батша төшкән бит һуң. Был һорауға инде Имайҙың әҙер яуабы юҡ. Ул икеләнеп:

— Әллә шул, әсәй, эштәр нисек булып китер инде,— тине.

— Ҡуйсы, шулай тигән һүҙ буламы? — Рәхимә, көрһөнөп, улын һыйларға әҙерләнергә сығып китте.

Ныязғол да был арала бик күңелле йөрөй. Ул улының ҡайтыуына ысын күңелдән шат.

— һау йөрөп ҡайттыңмы һуң, улым?

— Бик шәп ҡайттым, атай. Үҙегеҙ ни хәлдә ятаһығыҙ?

— Беҙҙең хәлдәр ал да гөл ине әле. Зарланырлыҡ бер нәмә лә булманы. Эштәр ҙә туктап торманы. Хатта ла яҙғайным үҙеңә. Мөлкәт артһа артты, кәмемәне, аллаға шөкөр.

— Уныһы бик яҡшы, атай. Хаттарынды алып, төшөнөп торҙом.

— һуң һеҙ ни эшләп улай итеп, мәңге йәшәгән хөкүмәтте алмаштырып ятаһығыҙ әле? һуғышып-һуғышып, сит батшаларҙы еңеп ҡайтаһығыҙмы тиһәм әле мин, һеҙ үҙебеҙҙекен төшөрөп ташлағанһығыҙ.— Ныязғол һүҙен уйынға һабыштырып көлөп ҡуя.— Бына, үҙендеке үҙенә яу!

— Шулай иттеләр бит. Мин ни, үҙем һуғышты барып күрмәгәс, Петроградта булмағас, ни тип әйтәйем. Беҙҙең өсөн был хөкүмәт тә барыбер, яҡшы булырға оҡшай.

Ныязғол яйлап, һуҙып һөйләй:

— Әллә шул, улым. Бик барыбер ҙә булып бөтмәҫ шул. Анауы Михайла Романовты тәхеткә ултырталармы-ниме тигән хәбәр таралғайны. Уныһы ла барып сыҡмаған, күрәһең. Ул булғанда, пожалуй, барыберҙән һәйбәтерәк булыр ине.

— Петроград эшселәре ход бирәләрме һуң ундай эшкә. Ваҡытлы хөкүмәттән Гучков тигән берәү ошо турала митингелә сығып һөйләгән икән. Эшселәр уға ауыҙ асырға ла бирмәгәндәр, үҙен тотоп ата яҙғандар, ти. Әле был хөкүмәт үҙе урынлашып, нығынып ҡалһа ярар ине.

— Ниңә, әллә уның да ултырған урыны тепһәҙ шүмәнгә оҡшаймы?

— Исеме «Ваҡытлы хекүмәт» бит инде. Беҙҙең өсөн уныһы ла яман булмаҫ ине лә ул. Политикаһы ла арыу күренә. Еңмәй тороп һуғышты туктатмаҫҡа, тип ҡуя, ти, мәсьәләне. һаман да әлеге большевиктәр эште боҙалар бит. Улар был хөкүмәткә лә тыныслыҡ бирмәҫкә уйлайҙар, ти, шул.

— Йә, хөкүмәт хөкүмәт булыр әле ул. Большевиктәргә генә бирешеп тормаҫ. Ә Ырымбурҙа ниҙәр булып ята һун?

— Ырымбурҙа шул инде, революция шатлығы бара. Ул яҡ башҡорттар үҙҙәренә башҡа хөкүмәт төҙөргә булып, әллә ниндәй «Башҡорт халҡы союзы» тигән ойошма төҙөп яталар.

Ныязғол ҡыҙыҡһыныуынан урынынан уҡ тороп китте:

— Йә, бына быныһы бик ҡыҙыҡ. Бик ҙур хәбәр. Был инде, улай булғас, анау бишенсе йылдарҙағы Ҡәүи ҡоҙа ҡайтып төҙөп маташҡан иттифаҡ һымаҡ бер нәмә булалыр шул.

— Эйе, шундайыраҡ ойошма. Тик хәҙер эште ҙур күләмдә алып бармаҡсылар, күрәһең. Мин уларҙың был нәмәләрен төпсөп һорашманым. Быны ла әле китер алдынан Ҡәүи ҡоҙа килеп һөйләп ултырҙы. Ул хәҙер бик ҙур кеше булып киткән. Ундай эштәрҙән. уртаһында ҡайнай. Элеккесә малай һымаҡ та күренмәй. Ҙур интеллигент, иғтибарлы ҡала әфәндеһе булып киткән.— Имай, ниңәлер, ҡоҙаһының быңдай үҫешенә көнләшкән тауыш менән мыҫҡыллы көлөп һөйләне.

Ныязғол тағы ла нығыраҡ дәртләнде:

— Ул бик аҡыл эйәһе инде. Атайым ишан тип тартынып торманы. Урыҫсаға ла ныҡ уҡыны, әллә ниндәй партияға ла инеп алды, эсер тиме шунда. Хәҙер был эштәре барып сыҡһа ярар ине лә һуң. Теге ваҡытта Ғәйнулла мулла менән килгәндәрендә бер эш тә сығара алмай ҡайтып киткәйнеләр.

— Ул ваҡытта Айбулат менән Мурзиндең ҡотҡоһо халыҡты еңде бит. Ҡыуып тигәндәй ебәрҙеләр. һин дә, атай, йомшаҡ торҙоң ул саҡта.

— йомшаҡ торманым инде. Хәлдән килеүе шулай булды шул. Бына уларҙын, хәҙерге эштәре төплөрәк булырға оҡшай. «Башҡорт ойошмаһы» тигән һүҙ бик ҙур ул. Ҡәүи ҡоҙа һаман шунда йөрөһә...

— Ҡәүи ҡоҙа ғына түгел, әлеге Ғәйнулла мулла ла шунда ҡайнаша. Ул хәҙер муллалығын ташлаған.— Имай тағы ла, ниңәлер, келөп ҡуйҙы.

— Йә, ул да шунда тиң? Улай булғас, унда беҙҙең үҙебеҙҙең кешеләр бар икән дә. Ярай, ярай, бик ярай. Улар ҙа хәҙер аҡылды, тәжрибәне туплағандарҙыр инде.

— Аҡыллылар бар. Тик һаман да элеге бер һүҙ, большевиктәр ни әйтеп, ни ҡуйырҙар. Мәсьәлә шунда.

Ныязғолдоң шатлыҡ менән асылған йөҙө томан баҫҡан һымаҡ булды.

— Эйе, улым, был һүҙең ысын һүҙ. Тағы әлеге үҙебеҙҙең Айбулатты телгә алмай тура килмәй. Быйыл ҡыш Самарға килеп, әллә ниндәй партийный собрани^ләр яһап йөрөгән бит. Әлеге Волгингә килеп төшкән даМ әллә ни тиклем эштәр эшләп ташлағандар, ти. Батшз! төшөүҙең дә иң төп сәбәбе шуларҙың, большевиктәрҙеиц уҫаллығынан килеп сыкты шул.

— Шулай шул. һуң Айбулат өйөнә лә ҡайтып китмәнеме?

— Юҡ, ҡайҙа ул, бушамай, ти. Хат яҙған ейөнә. «һау булһаҡ, еңгән батыр булып ҡайгкас күрешербеҙ, үпкәләмәгеҙ», тип яҙған, ти, семьяһына. Күрәһеңме, Самарға килеп ятып, өйөнә килеп китергә ваҡыты юҡ. Әйтерһең, бер министр тип уйларһын.— Ныязғол асыуынан тҡыҙарҙы.— Әле теге Мурзине лә ҡайтып төшкән, ти.

— Сәпсимгәме?

— Әллә, уныһын белмәйем.

— Шулай, атай, хәҙер бик ныҡ уйлашырға кәрәк булыр.

— Уйлашырға тип ни, хәҙер һинең менән минең уйлашыуҙан зш бөтмәй шул инде. Бында яңы хөкүмәттең ҡатнашы кәрәк. Ул ҡатнашып, ер тураһындағы мәсьәләне берәй төрлө хәл итмәй тороп, элеккесә үҙебеҙ-ара эшләп ташлаһаҡ, халыҡты ғына ҡуҙғатыу була. Бына хәҙер беҙҙең ауылдар, батша төшкәс, хөрриәт булғас, ер бөтөнләй халыҡ ҡулына күсте имеш тә, берәүҙән дә эҙләп, һорап тормай ғына, бүлешеп алабыҙ, имеш, тип уйлайҙар. Ҡайһы бер хәленән килгәндәре быйыл яҙ сығып, беҙҙең анау Ҡушуба итәгенә һөрөп тә сәстеләр инде.

— Кемдәр һуң улары?

— Кем булһын, Сәйеткол, Сафа, Асатай, Ҡотлояр.

— һин бер нәмә тип тә ҡаршы торманыңмы?

— Юҡ, өндәшмәнем. Былары әле әллә ни ҡыйратырлыҡ түгелдәр. Бөтәһенә биш-алты десятина ер икән,



әйҙә, бына дөйем мәсьәлә ҡуҙғалғанда, беҙгә ныҡ торорға кәрәк.

— Кәрәген кәрәк тә бит, нисек итеп шул большевиктәр менән көрәште көсәйтергә инде. Бында Айбулаттар, Мурзиндәр, ә тегендә уларҙан да көслөрәк Нуриманов тигән кеше гол башлай.

— Унyһы кем, башҡортмо ул да?

— Башҡорт большевиге.

## АЛЫҪТАН ХАТ

### 1

Григорий Волгин, 1905 йыл- революцияһында актив ҡатнашҡанлығы өсен самодержавиенең ҡаты язалы төрмәләрен үтеп, Нарым крайында биш йыллыҡ һөргөн срогын тамамлап, Самарға, үҙенең тыуған заводына ҡайтып урынлашты. Ул һөргөндә тағы ла нығыраҡ сынығып, теоретик белемгә байып ҡайтҡайны. Ҡайтып төшөү менән ул революцион эшкә өсләтә арттырылған көс менән тотондо.

Юлия иһә, "башҡорттар араһында эшләгәндә ҡасырға мәжбүр булғандан һуң, бында, Самарҙа, хәрби госпиһталдә эшләй ине.

Айбулат, Саратовтағы госпиталдән сығып өс айлыҡ отсрочка алғас, ҡатыны, балалары янына ҡайтып торманы, ә Юлияныщ хаты аша Григорийҙең эшмәкәрлеге тураһында ишетеп, туп-тура Самарға килде. Ошонан башлап Айбулат Григорийҙен. уң ҡулына әйләнеп китте.

Ләкин Айбулаттың яраһы буйынса бирелгән өс айлыҡ отсрочкаһының ваҡыты аҙағына яҡынлашты. Ул хәҙер тағы ла Саратовҡа барып комиссиянан үтергә лә, тағы ла бер аҙ ял бирһәләр, ауылға ҡайтып килергә уйлай ине.

Ул китер алдынан кис менән Волгиндәргә килеп ингәндә Маруся лә, Юлия ла өйҙә инеләр. Айбулатҡа улар, үҙ семья члене кеүек күреп, эйәләшеп беткәндәр. Шуға күрә унын килеп инеүе уларҙа күңеллелек тыуҙыра ине.

Әле лә Маруся ишек асырға сыҡкас та:

— Ә, Айбулат, бик яҡшы килден, әле,— тип ҡаршы алды.

Айбулат уларҙың икәүһе менән дә һаулашты ла:

— Йә, ни есөн мин бөгөн яҡшы килдем әле, башҡа көндәрҙә насар килә инемме ни? — тип шаяртты.

Юлия әллә ниндәй ваҡ-төйәк өй эштәре менән төпкө бүлмәлә шыптырҙай ине. Ул бүлмә аша:

— Бына, тетя Маруся, эләктең,— тип көлдө.

Маруся улар ыңғайына уйын һүҙҙәр ысҡындырһа ла, уның эсе бошҡанлығы һиҙелә ине. Айбулат быны тиҙ үк аңлап алып:

— Иә, тиҙерәк һөйлә, Маруся, ни өсөн мин бик яҡшы килдем? — тине.

Маруся көрһендө.

— Шуның өсөн, Айбулат Айдарович, Васягә бик ныҡ ярҙам итергә кәрәк. Ауырыуы бик оҙаҡҡа һуҙылды,— тине ул.

— Дөрөҫ, Маруся, бик дөрөҫ. Уны бындағы лазареткә күсереү сараһын күрергә кәрәк.

— Беҙ ҙә шуны уйлағайныҡ шул.[1] Мин, һинең менән барып, ошо турала юлламаҡсы инем. Һиңә лә китер ваҡыт етеп ҡалды, нишләйбеҙ һуң?

Уларҙың һүҙҙәрен тағы шаҡылдаған ишек тауышы бүлде. Ишекте астылар.

Григорий Иванович ҡайтып инде. Уларҙың семья кәңәше тағы ла ныҡыраҡ ҡыҙып йите.

Айбулат Сызрандән Васяне Самарға күсереү мәсьәләһе тураһында бик күп мәшәҡәттәр менән йөрөп юллағанса, ес көн ваҡыт үтеп китте.

Бына ошо өс көн эсендә Романовтарҙың ес йөҙ йыллыҡ тәхете ҡолап төшөп, шуның тауышы бөтә донъяға таралып шаулай ине.

Вася Айбулатҡа танымаған шикелле, иғтибарһыҙ ғына күҙ тешөрҙә. Тик Айбулат бер нисә тапҡыр:

— Вася,,Вася, Сергеев,— тип өндәшкәс кенә ул, күҙҙәрен ҙурыраҡ асып:

— О, һинме ни Булатик? — тип ҡуйҙы ла хәлһеҙ ҡулын күрешергә һуҙҙы.

Айбулаттың йөрәге һыҡтап, дуҫын йәлләне. Бигерәк тә Васяның бынан ун биш йылдар элекке дуҫлыҡтарын күҙ алдына килтереп «Булатик» тип өндәшеүе Айбулатты ныҡ болоҡһотто.

— Вася, беҙ һине Самарға күсер§ү мәсьәләһен хәл иттек.

— Маруся килдеме?

( — Улар иртәгәнән дә ҡалмай килерҙәр. Юлия менән икәүһе килерҙәр.



Вася, арыған һымаҡ, күҙен йомдо. Уны оҙаҡ һөйләштереп арытырға ярамай ине. Ләкин Айбулат Вася өсөн бик ҙур һәм ҡәҙерле булған хәбәр — батшаны төшөрөү хәбәрен әйтмәй китә алманы. Ул, Васяның эҫе ҡулын үзенең һалҡынса устары эсенә алып, уға яҡын эйелде.

— Вася, ҡара әле, мин һиңә бик ҙур яңылыҡ алып килдем, Вася, ишетәһеңме?

Вася, тағы ла күҙҙәрен асып, башын Айбулатҡа бороп, һорау ҡарашы менән туҡтаны.

— Самодержавие долой, Вася.

Васягә, әйтерһең, һалҡынса йомшаҡ ел өрөп, уның ҡайнар тәненә хәл кертте. Ул бик тыныс күренгән төҫ менән яйлап йылмайҙы, тыны иркенәйгәндәй булып көрһөндө.

— Наконец-то...—• тине ул.

— Эйе, Вася, тәхет ауҙарылды инде, һин дә тиҙерәк төҙәл.

— Ҡасан?

— Кисә.

Вася тағы ла көлөмһөрәне лә:

— Төҙәләм, тиҙ үк төҙәлергә тырышырмын. Бигерәк тә Юлия ҡулында... Бигерәк тә ошондай шатлыҡта,— Вася бер аҙ уйланғас,— бигерәк тә... — тине лә, иҫенә бер нәмә төшкән кеүек бик асыҡ тауыш менән:— Ә власть кем ҡулында? — тип һораны.

— Хәҙергә Ваҡытлы хөкүмәт ҡулында, буржуйҙар ҡулында.

Васянен, әле генә килгән йәнле шатлығына болот күләгәһе һымаҡ күләгә тешкәндәй булды. Ул, ҡаштарын аҙыраҡ йыйырып, ҡайҙалыр алыҫҡа ҡараны:

— Ана бит ул, Булатик, шулай булғас, ни эшләп оҙаҡ ауырымаҡ кәрәк, ярамай, һис тә ярамай. Тимәк, беҙгә тағы ла ҡорал күтәреп һуғышырға кәрәк әле,— Васянен тауышы ҡапыл көрәйҙе. Палаталағы башҡа ауырыуҙар уға ҡарап:

— Бына беҙҙең, Сергеев-тә терелә башланы,— тип ҡыуанышып һейләштеләр.

Бик ауыр хәлләр палатаһы тип аталған унынсы палатаға баш врачы үҙе килеп инеп:

Айбулат уға борсолоп ҡарап:

— Ни булды, ни булды, ниңә шаулашаһығыҙ?— тине.

Ауырыуҙар һүҙҙәренән туҡтанылар.

^ • .Лчпатуғя бооолоп ҡарап:

— • Доктор, ауырыуҙарығыҙ шатлыҡтан терелерг яҡынланылар, шуға шаулашалар,— тип яуап бирҙе.

Врач, Айбулат янына яҡын килеп, күҙлеген ҡулына алда. Тиҙ генә эйелеп Васянең-һул ҡулын алып, пульсен һананы ла, Айбулатҡа ҡарап:

— Бына бит, һалдат, мин һеҙгә хәл белергә инергә рөхсәт иткәндә күп һөйләшмәҫкә ҡуштым. һеҙ инде бөтә халыҡтың йөрәген йыш һуҡтырған ҙур хәбәрҙе *лә*-ауырыуға әйтеп өлгөргәнһегеҙ, ахыры. Әгәр уны тулкынландырырға яраһа, мин һеҙгә алдан әйтмәгән булыр инем, йә үҙебеҙ кисә үк уның үҙенә әйтеп шатландырған булыр инек. Ярамай, бына хәҙер уның пульсе ниндәй йышайҙы, кискә, көт тә тор, температураһы тағы утыҙ туғыҙға һикерәсәк.

Айбулат врачтын, орошоуын урынлы тапты. Шуға күрә һүҙ көрәштереп торманы, Васягә ҡараған көйө тик ултырҙы. Ысынлап та, Вася тыштан тыныс күренһә лә, уның бик тәрән тәьҫирләнгәнен битенә бәреп сыҡҡан ҡыҙыллыҡ белдерә ине.

Вася күҙҙәрен ҡапыл асып врачҡа ҡараны ла, көлөмһөрәп:

— Ҡәҙерле доктор, зинһар тынысһыҙланмағыҙ. Минең хәл белеүсемде лә юҡҡа орошмағыҙ. һеҙ минец-тәнемде дарыулайһығыҙ, ә минең дуҫым, беләһегеҙме, минең унар йылдар һыҙлаған йәнемә дарыу бирҙе. Шулай булғас, һеҙҙең икәүегеҙгә лә мин ҙур рәхмәт әйтәм,—тине.

Айбулат Васянең был һүҙҙәренә ысын күңелдән ҡыуанды, врачҡа ҡарап:

•— Бына, доктор, һеҙҙең ауырыу хәҙер бик тиҙ төҙәләсәк,— тине.

Врач күҙлеген яңынан кейҙе лә, бер Васягә, бер Айбулатҡа ҡарап:

— Эх һеҙ, мировой философтар! — тине.— Шулай ҙа бөгөнгә етеп торор һеҙгә, бына теҙәлгәс, көнө-төнө һөйләшерһегеҙ,— тип өҫтәне. Ул хәҙер бик серьез ине.

Айбулат та урынынан торҙо.

— Дөреҫ, Вася, һиңә бик тыныс ятырға кәрәк. һиңә бит иртәгә юлға сығыу эше лә тора.

— Ярай, Булатик, рәхмәт, хуш.

Айбулат Васянең ҡулдарын тағы бер ҡат ҡыҫып һаулашты ла сығып китте.



2

Ул үҙенен, полкын өс-дүрт ай күрмәй торған арала^. ундағы тормош танымаҫлыҡ булып үҙгәргәйне. Айбулаттьвд ундағы бөтә иптәштәрен дә тиерлек алмаштырыпг бөтөргәндәр ине. Унда злекке йыуаш, йонсоу, бик аҙ һүҙле төмсәй кешеләр урынына: «Хәҙер дицгеҙ тубыҡтан», тигән кеүек уцайһыҙ, шаян, бер өҙлөкһеҙ шаулашып, ҡысҡырышып йерегән кешеләр тулып киткәйне. Улар ецеү шатлығы менән иҫергәндәр, улар өйгә ҡайтыу өмөтө менән ҡанатланғандар, шунлыҡтан шат кешеләргә-әүерелгәндәр.

Электән аҙ һүҙле, үткер аҡыллы, оҫта телле Титов.. та хәҙер бер туктамай һөйләп көлдөрөп, бетә полк һалдаттарын үҙ тирәһенә ойошторop алған. Айбулат үҙенен, уны элек бик яҡындан белмәгәненә аптырап ҡуйҙы. Титовтын, хәҙерге ваҡыттағы бер туктауһЫҙ алып барған егәрле эше, ниндәй генә формала булмаһын, тотош ялҡышлы большевистик агитация икәнен үтә күрҙе лә„ уның менән бик яҡындан дуҫлашып китте,

Титов Айбулаттан Самар, Саратов, Сызрань һәм бүтән бик күп Волга буйы большевиктәре, уларҙын, эштәре, бигерәк тә һалдаттар араһында алып барған эштәре-менән ныҡ танышып, үҙенен, бындағы белем һәм практикаһына көс арттырҙы.

Титовтын, күңелле, шаян ҡылыҡтары масса араһында сакта бик асыҡ, бик тәбиғи хәл булһа, үҙе яңғыҙ ҡалып, тәрән уйҙарға тешкән сағында йәки Айбулат менән-ҡалып һөйләшкән сағында, ул бик серьез төҫлө, хатт* асыу ҡатыш ҡайғылы була торғайны.

— Эх, иптәштәр, был әле беҙҙен, бөйак эштәрҙен,. башы ғына бит. Ә бынан ары бара-тора...— тип киләсәк; көрәште иҫәплә ине.

Күп тә үтмәне, Владимир Ильичтен. Швейцариянан* килгән «Алыҫтан хат»ы баҫылған «Правда» газетаһыг. килеп тешт. Унда яҙылған революция етәксеһенен, революциянын, үҫеше тураһындағы һүҙҙәре Айбулаттарҙын;. артабанғы көрәш юлдарын яҡтыртып ебәрҙе.

Айбулат, үҙ полкьша ҡайтып, үҙ часендәге Әхмәҙ№ менән күрешкәс тә, Әхмәҙи уға:

— Бынд4 ни, кейәү, эш бөттө, келтә йыйырға ғына ҡалды,— тип көлдө.— Ни тип тағы ла был фронтка үҙ

аяғың менән кире әйләнеп килдең? Туп-тура өйгә һыпырмай...

Ул, Айбулаттың Саратовта ғына түгел, Самарҙа ла булып, Айҙаҡайға ҡайтып әйләнергә ваҡыты булмағанын ишеткәс, тағы ла нығыраҡ аптыраны:

— Бына бер ғәжәп. Бала-сағанды ҡайтып курмәй, ни йәнең менән түҙҙең,— тине ул.

Айбулат үҙенең, Саратов комиссияһынан такы ла бер аҙ отсрочка булһа, ҡайтырға булыр тип уйлағанын, ләкин ул комиссияға барып еткәнсе тормоштоң бындайға әйләнеп китеп, уның был ниәте барып сыҡмағанын һөйләне.

— Батша төшкәс, уның комиссияһы һиңә ниңә кәрәк ине?

Айбулат, Әхмәҙиҙең әле булһа был эшкә тәшөнөп бөтмәгәнен аңлап, бер тамсы ла йзшермәй, уға зште төшендөрҙө.

Айбулат, Титов, Альков һымаҡ бик күп ир-егеттәрҙең еҫтәрендә партия йөкмәткән бурыстар бар. Шуларҙы көнө-сәғәте менән үтәмәй тороп, ауылға ҡайтырға ашҡыныуы, батшанан Ваҡытлы хөкүмәткә күсеп ҡалған иҫке армиянан дезертировать итеү генә түгел, ә үҙендең большевистик эшенә хыянат итеү булыр ине, тип һөйләне ул.

Айбулат ошо тәңгәлдә ҡайнағаһына байтаҡ һөйләяе, ябай миҫалдар килтерҙе. Ләкнн Әхмәҙи үҙ-үҙенде шундай ҡаты дисциплинаға ҡуйҙырта торған идеяның ҡайһы юғарылыҡта икәненә төшөнә алманы. Ул ике ҡулын йәйҙе лә үҙенсә хөкөм йөрөттө:

— һуң, кейәү, ҡыҫҡа ғына әйтәйек: батшаны ҡолатлыҡ, хөрриәт яҡланыҡ. Инде ни ҡалды? Хәҙерҙән үк үҙ ауылдарыбыҙға таралырға ла, ерҙе һәйбәтләп тороп бүлешеп алып, йырлап һабан һерөргә ҡалды. Шулай түгелме ни? Минеңсә, шулай.

— Инде ни ҡалды тиһеңме, ҡайнаға? Инде беҙҙең адда башланмаған һуғыш, еренә еткерелмәгән еңеү ҡалды әле.

— Улай булһа, был герман һуғышы ла бөтмәгәнме ни?

— Хәҙергә властә буржуйҙар, улар герман һуғышын туктатмаҫка уйлайҙар. Быға һин ни әйтәһең?

Әхмәҙи таҙартып ултырған мылтығын күтәреп ергә бәрҙе.

— Юҡ инде, кейәү, улай булһа, мин бынан кире һалдат түгел. Байҙар, помещиктәр именлеге өсен яңынан ҡав түгәсәгем юҡ. Иртәгә үк өйгә һыпырам. Бергә-бергә ҡайтыға китербеҙме әллә тип, һинең килгәненде көттөм, инде һин теләһәң ни эшлә.

Уларҙың һүҙҙәрен тыңларға тағы бер нисә татар һалдаты килеп ултырғайны.

Айбулат үҙенең бая ғына уҡыған Ленин хатын быларға ла укып ишеттерҙе. Аңлатып һөйләне. Был ултырыш киске ашҡа тиклем һуҙылды. һәр кем ошо алыҫтав килгән ҙур хаттың мәғәнәһен тикшерә, фекер йөрөтә ине..

Айбулат Әхмәҙигә:

— Бына, ҡайнаға, һин мылтығынды атып бәрҙең дә бит, уны тағы күтәрергә кәрәк буласаҡ,— тине.

— Әлбиттә, күтәрергә тура килер. Ләкин инде мин уны күтәрһәм, ваҡыты еткәс, кемгә ҡарата тоҫҡарға тура приказ булғас ҡына күтәрермен. Ә хәҙергә миңә ҡайтыуҙан башҡа бер эш тә юҡ, — тип яуап бирҙе Әхмәҙи.

Айбулат ҡайнағаһына ҡал-маҙар тип ныҡышманы. Сөнки ул уның ендәшмәҫ булһа ла, үҙһүҙле икәнен бел» ине.

— Ҡайтһаң ҡайт, ҡайнаға, унда ла аңлы һалдаттар кәрәк. Хәҙер беҙҙең ауыл да бутҡа һымаҡ ҡайнай торғандыр. Ҡайтҡас, үҙең күреп төшенөрһең. Бында ни булған, ни ишеткәндәрең де, Ленинден. хаты тураһында- (әгәр ҙә ишетмәгән булһалар) бәйнә-бәйнә һейлә, ошо һиңә большевиктәр ҡушкан боевой задание булыр, шуны онотма. Ни булғанын миңә яҙып тор. Дезертир-фәлән тип бәйләнеүселәр булһа, ҡулдарына эләкмә. Бала-сағалар*ға, бөтә ауылға сәләм әйт. Семьяларға күҙ-ҡолаҡ бул.. Зөфәр Мурзин дә хәҙер өйгә ҡайтҡан. Улай-былай төшөнмәгән мәсьәләләр тыуһа, уға мөрәжәғәт ит,— тине..

Иртәгеһенә таң ҡараңғыһынан Әхмәҙи һәм тағы ла унлап һалдат котомкаларын елкәләренә йөкмәнеләр ҙә, һаубуллашып, ҡайтыр юлға сығып киттеләр.

3

Уларҙы яңынан йыйып, ҡыҙыл вагондарға тейәп,, фронтка оҙаттылар. Ҡайһы фронт, кемгә ҡаршы фронт икәне һалдаттарға билдәһеҙ ине.

Эшелон башта ашыҡманы.

Айбулат ултырған вагонда Титов та, Альков та бар-.. Улар есәүһе лә Ярославский полктыщ үткер, большевистик агитаторҙары. Улар китергә йыйынған саҡта ла,,

далға сығыш вагонда барғанда ла, һалдаттарҙы фронтҡа ^барғас һуғышмаҫҡа, хәҙерге һуғыш, барыбер батша ваҡытындағы һымаҡ, буржуазия файҙаһын күҙәтеү өсөн *барғанлығын, Ваҡытлы хөкүмәт буржуазия политикаһын тотҡанлығын һөйләп, хәрби приказдарҙы үтәмәҫкә өндәй "барҙылар.

Эшелонды юлда бер кесерәк ҡала станцияһында туктаттылар. Йыуынып, сайынып алырға приказ булды.

һалдаттар, июль айының эҫе саңын борхолдатып, ҡалаға таралдылар. Улар берәмләшеп тә, икәүләшеп тә, күмәкләшеп тә урам тапанылар.

һалдаттарҙың был йөрөүҙәрендә бөтәһенә лә ғәжәп «булып күренгән нәмә — хәрби башлыҡтарҙыбд, элекке һымаҡ, бөтә формала, погонда, артыҡ эре ҡиәфәттә йөрөүҙәре ине. Генералдар, офицерҙәр, полковниктәр -булһын, батшалыҡ донъяһында һис бер үҙгәреш булмаған шикелле, ата ҡаҙ һымаҡ,кыйҡырая баҫып, башта:рын ҡаҡайтып, бик ғорур йөрөп яталар ине.

Быларҙы күргәс, һалдаттарҙың береһе:

— Әллә Николай үҙенең бөтә свитаһы менән бында жүскәнме? — тине.

— Иптәштәр, ысынлап та, бында беҙҙец полктың ҡайнар ҡулдары һуғышмағаны күренеп тора,— тип башта әңгәмәгә һабыштырҙылар.

Ҡайһылары:

— Эх иптәштәр, быларҙы ла аҙыраҡ ҡағып-һуғып алырға ине, улар ҙа ҡыҫаланың ҡайҙа ҡышлағанын белерҙәр ине,— тип ҡызырыҡланылар.

һәм, ысынлап та, кискә табан был бәрелеш килеп тә •сыҡты.

һалдаттар тротуарҙан үтеп барғанда бер офицер тап булған. һалдаттар, әлбиттә, честь бирергә уйламағандар ҙа. Етмәһә, береһе, офицер барған яҡ ситтән уртаға тайпылыңҡырап, уның күкрәгенә күкрәге менәи бәрелеп:

— Ах, поганая морда,— тип ысҡындырған. Киткән гшау-шыу, уларҙы шунда уҡ бындағы һалдаттар, офицерҙәр уратып алып, ҡайҙан, кемдәр, ни эшләп йөрөгәндәрен тикшереп, вокзалға киләләр. Китеп барған эшелон «кәнен беләләр. һалдаттарҙын, күбеһе таралған. Иплæберәк ҡараһалар, һәр вагондың һыртына аҡбур менәнэре... һәм яҡшы ҡулъяҙма менән лозунгылар яҙылып бөткән.

«Беҙ большевиктәр! Беҙгә һуғыш кәрәкмәй!»

«йәшәһен Ленин!»



«Даешь Петроград!»

«Долой грабительскую войну!»

«Йәшәһен большевиктәр!»

«Бөтә власть Советтәргә!»

Тегеләрҙен, күҙҙәре дүрт була. Ләкин улар ҡапыл* вагондар янында тауыш ҡуптармай, эшелон начальнигеФедоровты алып ҡайҙалыр инеп китәләр.

Шул саҡта Титов та, Альков та ҡайтып килделәр^. Тиҙ генә Айбулатты яндарына саҡырып алып, бик ашығыс рәүештә бөтә һалдаттарҙы йыя һалып, митинг асып-ебәрҙеләр.

Титов һалдаттарҙы бындағы хәл менән таныштырҙы., Был тирәлә офицер, генералдар бик төплө ултырып алып,. 'бөтәһе немецкә ҡаршы ебәреләсәк наступление' яҡлы., кешеләр булып, улар ошо турала бик ҡыҙыу эш алып[1] барыусылар икәнеи һөйләне.

Альков әллә ҡайҙан «Окопная Правда» г.азетаһының.. бер нисә яңы номерен алып килгән дә, башҡа вагондарға бирәр номерҙән өләшә һалды. Бер номерен Айбулатҡа биреп, үҙендә ҡалған аҙаҡҡы газетаңы укып сығып, һөйләп аңлатты.

— Күрәһегеҙ, иптәштәр, эштәр ҡатмарлана бара. Ваҡытлы хөкүмәттең халыҡты, эшсе-крәҫтиәнде, һалдаттарҙы алдауы кендән-көн асыҡлана бара. Хәҙер быларбеҙҙе маршевой менән оҙатырҙар, йә булмаһа, таратып,,. бүлгесләп бөтерерҙәр, иптәштәр. Хәтерләп ҡалығыҙ:: ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа капиталистәр, помещиктәр файҙаһыш күҙәткән ҡомағай һуғышҡа ҡаршы барырға! Иптәш Лениндең Апрель тезистәрен һәм уның хатын онотмағыҙ!

һалдаттар геүләшеп вәғәҙә бирҙеләр:

— Онотмабыҙ,— тинеләр.

Альковты тағы Титов алмаштырҙы.

Иптәштәр! Хәҙерге көндә VI партсъездың күрһәт^мәләре беҙҙең өсөн боевой лозунгыға әйләнһен. Съезд тап беҙҙең есөн манифест сығарған. Ошо манифест беҙҙе бына ҡайҙа саҡыра:

«Беҙҙең боевой иптәштәр, яңы һуғыштарға әҙерләнегеҙ! Провокацияға бирелмәйенсә, ныҡлы, батыр һәм. тыныс рәүештә кестәр туплағыҙ, боевой колонналарға теҙелегеҙ! Пролетарийҙәр һәм һалдаттар, партия байрағы аҫтына! Ауылдыщ иҙелгән кешеләре, беҙҙең байраҡ: аҫтына!»

Иртәгеһенә таң менән уларҙы тағы ла вагондарға тейәп оҙаттылар.

Был хәлдән Айбулаттың ғына түгел, бөтә полктың да бик нык асыуы килде.

— Балалар кеүек алдап, теләһә нисек, әллә ҡайҙа оҙатһындар, имеш.

— Әлбиттә, немец менән һуғышҡа, башҡа ҡайҙа булһын.

— Етмәһә, вагондарҙың тәҙрә-ишектәрен дә астырмай, аҡырышып торалар. Әйтерһең, беҙ арестанттар.

һис бер ерҙә юнләп туктамай елгән эшелон эсендәгеләрҙең йөрәктәре ҡәһәрле асыу менән ҡабарҙы.

— Инде бер уңайы килгәндә былай ғына ҡалдырмабыҙ, тинеләр.

Уларҙың бөтәһен дә фронгка, иң алдынғы һыҙыкка алып барып ауҙарҙылар.

Күп тә үтмәй, немец бомбаһы яуа ла башланы.

## ОКТЯБРЬ ТАҢЫ

Петроград ғәҙәттәге үҙенең дымлы күк томанына уранған. «Аврора»ның яңғыратып гөрһелдәп осҡан туп Аәҙрәләре, ошо томанды ярып үтеп, Ҡышҡы дворец тирәһенә төшәләр ҙә уны тамыры менән аҡтарғандай итеп >һелңетәләр.

Съезд делегаттары Смольныйҙың йөҙәрләгән бүлмәләрен, ҙур залдарын, оҙон коридорҙарын, хатта бөтә лшек алдын тултырып геүләшәләр, тарихи минуттарҙы үткәрәләр...

Төн уртаһы шулай үтте.

1917 йыл октябренең егерме алтыһы, сәғәт иртәнге «өс.

Советтәр контрреволюцияның аҡтыкҡы таянысы — Ҡышҡы дворецте ҡулдарына алдылар.

Төньяҡ фронт делегаттары, үҙҙәренә бер ҙур түңәрәк булып, Смольныйҙың, ишек алдына ҡараған бүлмәһендә геүләшеп һейләшәләр. Улар араһындағы Айбулат менән Исхаҡ та, бөтәһенә лә әҙер торған ҡиәфәт менән, үҙ-ара ни нәмә тураһындалыр һейләшәләр. Айбулат тыщыс һөйләшә. Исхаҡ ҡыҙыулыҡ итә, күрәһең. Ҡулындағы мылтығының төйҙәһе менән иҙәнгә туҡылдатып, ҡулын Злелтәп ала.



Уларҙың был һүҙҙәрен залдан ишетелгән тауыш бүлде. Делегаттарҙың бөтәһе лә залға ағылдылар.

Съезд Ленин ҡулы менән яҙылған ҡыҫҡа, көслө тарихи мөрәжәғәтте ҡабул итте:

«Эшселәргә, һалдаттарға һәм крәҫтиәндәргә!

Эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советтәренең. Икенсе Бөтә.Россия съезы асылды. Уға Советтәрҙең бик ҙур күпселегенән вәкилдәр килгән. Съезда крәҫтиәндәр Советтәренән дә байтаҡ делегаттар ҡатнаша. Соглашатель Үҙәк Башҡарма Комитетенең полномочиеләре беттө. Эшселәрҙең, һалдаттарҙың һәм крәҫтиәндәрҙең бик ҙур күпселегенең ихтыярына таянып, эшселәрҙең, һәм горнизондың Петроградтағы еңеүле восстаниеһенә таянып, съезд власте үҙ ҡулына ала.

Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылды. Ваҡытлы хөкүмәт члендәренең күпселеге арескә алындылар инде...»

Съезд геүләне. Ул, йәйге йәшенле ямғыр кеүек, ҡул сабыуҙар менән геүләй. Ура тауыштары, шатлыҡ тулҡындары Смольныйға һыймағандай булып алкына, үргә ынтыла.

Бөйөк Ленингә сәләмдәр яуа. Ул үҙенен. тыныс, мөләйем йөҙө менән съезға ҡарап йылмая, күҙҙәренән йылы нур һибелә.

Айбулаттың йөрәге күкрәгендә түгел, әллә ҡайҙа арҡа һыртында һуккан кеүек булып тарһылдай. Ҡара күҙҙәре ялтырай. Ниндәйҙер эрелек уның тоҡкол йөҙөнә һирпелгән. Ул, үҙенең иң ҡәҙерле кешеһе Лениндән күҙен ала алмай, ҡул саба.

Айбулат янындағы Исхаҡ та болоҡһоған:

— Айбулат, ҡара, Ленин,— ти.

Айбулат Исхаҡҡа боролоп та ҡарамай, ошо ҡәҙерле исемде бик нык һаҡлаған төҫ менән ярым шыбырҙай:

— Эйе, Исхаҡ, беҙҙең Ленин...— ти.

Мөрәжәғәт дауам итә:

«Совет власе бөтә халыҡтарға һис кисекмәҫтәи демократик ярашыу һәм бөтә фронттарҙа һис кисекмәҫтән ваҡытлы ярашыу яһарға тәкдим итер. Ул власть помещик ерҙәрен, удел һәм монастырь ерҙәрен крәҫтиән комитеттәре ҡарамағына түләүһеҙ биреүҙе тәьмин итер,

армияла тулы демократиялаштырыу үткәреп, һалдат хоҡуҡтарын яҡлар, производствоға эшселәрҙең контролен ҡуйыр, Учредительный собраниене үҙ ваҡытында еаҡырыуҙы тәьмин итер, ҡалаларға иген һәм ауылға ^беренсе кәрәк нәмәләрҙе килтереү тураһында ҡайғыртыр, Россияла йәшәүсе бөтә милләттәргә үҙ яҙмыштарын үҙҙәре хәл итеү өсөн ысын хоҡуҡ тәьмин итер.

Съезд ҡарар итә: урындарҙа бөтә власть эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр депутаттары Советтәренә күсә, улар ысын революцион тәртипте тәьмин итергә тейештәр ҙә.

Съезд окоптарҙағы һалдаттарҙы уяу булырға һәм ныҡ торорға саҡыра. Советтәр съезы, яңы хөкүмәт демократик ярашыу төҙөлеүгә ирешкәнгә хәтле, революцион армия революцияны империализмдең һәр төрле ҡул һуҙыуҙарынан һаҡлай алыр, тип ышана, демократик ярашыуҙы яңы хекүмәт бетә халыҡтарға туранантура тәҡдим итәсәк. Яңы хөкүмәт мөлкәтле синыфтарға реквизициялар яһау һәм налогтар һалыу буйынса ҡырҡа политика үткәреү юлы менән революцион армияны бетә кәрәк нәмәләр менән тәьмин итеү өсөн бөтә сараларҙы күрәсәк, шулай уҡ һалдат семьяларының хәлен яҡшыртасаҡ.

Корниловсылар — Керенский, Каледин һәм башҡалар — Петроградҡа ҡаршы ғәскәрҙәр ебәрергә маташалар. Керенский тарафынан алдау юлы менән ебәрелгән *бер нисә отряд восстание күтәргән халыҡ яғына сыҡты.

һалдаттар, корниловсы Керенскийгә актив рәүештә ҡаршылыҡ күрһәтегеҙ! һаҡ булығыҙ!

Тимер юлсылар, Петроградҡа Керенский тарафы•нан ебәрелә торған бөтә эшелондарҙы туҡтатығыҙ!

һалдаттар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, — революцияның -яҙмышы һәм демократик ярашыуҙың яҙмышы һеҙҙең "ҡулығыҙҙа.

Йәшәһен революция!»

Делегаттар бөтәһе лә аяғөҫтө тороп алҡышлайҙар — адөрәжәғәтте ҡабул итәләр.

Смольный герләй.

Тан. атҡан. Ҡояш сығышынан таралған' ҡыҙыллыҡ нурын кесәйтә, күккә үрләй. Петроград өҫтөндәге аҡ ; томанды таратып ҡыуа. Смольныйҙың аҡ стеналарына ла ошо ҡыҙыл таң ҡыҙыллығы тешә, уны алһыулай.

Смольный гөрләй.



Нисәмә тәүлектәр йоҡламаған делегаттарҙың, күҙенә йоҡо килеп тә ҡарамай. Улар ғорурлы еңеү шатлығы тулҡындарында йөҙәләр.

## СОВЕТӨЙӨНДӘ

Айҙаҡай ауыл Совете өйө итеп, Ҡаҙанҡап Абдулланың ике ҡара-ҡаршы һалынған ҙур ағас өйөнөн, урамға ҡарағанын алғандар. Хәҙер инде был өй, көнө-төнө тигәндәй, бер туҡтауһыҙ шаулап йөрөгән халыҡтан бушамай. Волостән килгән һәр кеше ин. тәүҙә шунда туҡтала. Көн һайын тигәндәй йыйылыштар, ултырыштар була. Айырым әллә ниндәй бер эш булмаған сакта ла, шунда ултырып һөйләшеү ғәҙәт булып киткәйне. Шуға күрә күп кешеләр иртәнсәк йоҡоларынан уянғанда: «Йә, бөгөн Советтә ниндәй яңылыҡтар бар икән», — тигән ҡыҙыҡһыныу менән уяналар.

Кисә кис Сәйеткол үҙенең һыңар ағас аяғы менән шаҡылдата баҫып барып инде. Бындағы кешеләр күңелле әңгәмәгә ҡерештеләр. Кис бик һуңлап китте.

Сәйегкол үҙ ваҡытында сәй эсергә ҡайтмай оҙаҡлағас, уның бисәһе Хәлимә, ирен йәһәт кенә ҡайтарырға булып, Совет өйөнә барғайны. Уны ҡаршылағы өйҙән сыҡҡан Ҡаҙанҡаптың йәш бисәһе Шәһәрбаныу күреп ҡалды ла:

— Ни эҙләп йөрейһөң, килен кеше? — тип һораны.

— Бына үҙе әллә ҡайҙа киткән дә, ошондамы икән тип, ҡайтарырға килә ятам,— тине.

Хәлимә Шәһәрбаныуҙың был һорауына бер ҙә уйлап тормайынса тура яуап бирҙе лә ҡуйҙы. Үҙе Совет ©йө ишегенә ыңғайланы. Ләкин Шәһәрбаныу Хәлимәнең ошо яуабынан, йомортҡанан йөй эҙләгәндәй итеп, тауышын күтәрә биреп, төрткө телләнеп дауам итте:

— Әйҙә, әйҙә, инеп ҡара, хәҙер үҙең беләһең бит, һәр бер аяҡка баҫҡан, ултырып шыуған беҙҙең өйгә ябырыла. һинен, сатаныn, да шунда булмай, ҡайҙа булһын, — тине.

Хәлимә хәҙер элекке йыуаш Хәлимә түгбл, ундайҙарға яуапһыҙ ҡалмай.

— Аһа, аһа, уның ниһенә аптырайһың, беҙҙең кешеләр Советкә килмәй, ҡайҙа барһындар? Сов.ет өйө ни эшләп һинең ейөн, булһын? Әллә һин һаман да, минең

Ҡаҙанҡабым староста имеш тә, старшина имеш, тип, бында килгән кешеләр һинен. эшенде эшләргә килергә тейештәр имеш тип, һаташып ултыраһыңмы?

Шәһәрбаныу ялған тауыш менән ҡыҫҡырып көлде лә:

— Ярар, хәҙер һинең ирең түрә булыр,— тине.

— Минең ирем әллә ҡасан түрә булған инде. Күрмәйһеңме әллә, ул ҡасандан бирле халыҡ милитсәһе. Ҡулында мылтығы. һинең ирең нисәмә йыл түрә булһа ла, мылтыҡты төшөндә лә күргәне юҡ.

Шәһәрбаныу Хәлимәне был тиклем телдәр булыр тип көтмәгәйне. Ул, элеккесә, ярлы-ябағай бисәләргә туйғансы ҡыҫҡырырмын да туҡтатырмын тип уйланы шикелле. Эш улай булып сыҡманы. һүҙ эйәрә һүҙ китте.

— Харап. Сатан түрә бисәһе булған да шәбәйгән! — тип тә ҡотола алманы Шәһәрбаныу.

Хәлимә уны иркенләп әрләне:

— Таптың һүҙ. Бик яҡшы, сатан булһын. Бына һин үҙең дә сатан ғына булһа ла берәй түрә бисәһе булырға бик теләйһең дә, булмай шул. Хәҙер һеҙҙекеләрҙе түрә итмәйҙәр. Хәҙер түрә тигәндең үҙе лә юҡ. Нәсәлник тә милитсә, берсәҙәтел дә сиклатар, вәт, белә белһәң. Ә һеҙ буржуй, һеҙ контрһығыҙ. Шуға эсең яна ла. — Хәлимә үҙенең ярһыуы баҫылғансы, үсе ҡанғансы әйтте лә, Шәһәрбаныуҙың тағы ла әллә ниҙәр тип ҡыҫҡырыуын тыңлап та тормайынса, шартлата баҫып, баҫҡыстан менеп китте. Ул ҡыҙыулыҡ менән болдорҙа ла дөрһелдәп атлап барып, ишекте ҡапыл тартып асып ебәрҙе лә, тупһа аша атлай алмай, шаҡ ҡатты: ейҙәң төпкө бүлмәһенән был яҡ бүлмәгә дүрт кеше сығып килә ине. Иң алдағы Ҡотлояр:

— Әйҙә, килен, тартынма! — тип ҡаршы алды.

Хәлимә кире сығып китергә лә булғайны, килештермәне. Өйгә инде лә, тиҙ генә мейес арьяғына үтте.

Ҡотлояр тағы ла:

— Шулай кәрәк, килен. Ҡаҙанҡаптың һылыуыныц кәрәген бирҙеңме әйтәгүр! — тип хахылдап көлөп ебәрҙе. Башҡалар ҙа уға ҡушылдылар. Үҙҙәре рәхәтләнеп көләләр, үҙҙәре Хәлимәне маҡтайҙар.

Сафа ла ҡушыла:

— Беҙҙең Хәлимә еңгә өндәшмәй генә әрәм булып йөрөй. Әгәр ҙә беҙ собраниелә уны һөйләргә ҡушһаҡмы, булыр-булмаҫ ораторҙарҙан уҙҙыра ул!



Әхмәҙи артыҡ көлмәй. Ысынға һабыштырып өҫтәп ҡуя:

— Көлмәгеҙ әле, ағай-эне, ысын шул, ул Шәһәрбаныуҙы әрләй, мин тәҙрәнән ҡарап тороп кинәнеп бетә алмайым. Ул, элекке кеүек, тауыҡ себешемде алғанһыц, тигән һымаҡ бисәләрсә ирешмәй бит, советте яҡлап, кулак бисәһең әрләй. Әле беҙҙең ҡатын-ҡыҙ собраниегә йөрөп өйрәнмәй ята әле. Бына шунда һейләйәсәктәр улар, тороп тор,— ти.

Сәйеткол ғына өндәшмәй, көлөп тик тора.

Был хәлдәрҙе һис көтмәгән Хәлимә оялышынан ер тишегенә инеп китерҙәй булды. Ҡотлояр, ҡайнаға башы менән, быға тиклем һейләшмәгән киленгә шулай итеп тороп ҡарап һөйләмәһә ни була икән. Бынау Сафа менән Сәйеткол ғына булһалар ҙа артыҡ оялып тормаҫ ине. Ә Әхмәҙи ағай инде ул берсәҙәтел булһа ла ҡайнаға тейеш кеше түгел. Өйрәнешеп бөткән күрше кеше. Ҡуй инде, хәҙер Ҡотлояр ҡайнаға менән һөйләшеп китһәң дә оят, һөйләшмәһән дә килешмәй, уның алдында шул тиклем ҡыҫҡырып ирешкәс...

Хәлимә ошо уйҙарға төшөп, тәрән хафаға батты.

Сәйеткол уның хәлен төшөнгәндәй булып ярҙамға ашыҡты.

— Йә, йә, бисәкәй, ул тиклем шыбыр тиргә төшөп оялма. Ҡайнағаңа барыбер күренеш бирҙең инде. Хәҙер инде, үҙең әйткәндәй, буржуйҙар заманы үтте.

Ҡотлояр был юлы келмәйенсә, ысынлап Сәйетколдо хупланы:

— Дөрөҫ, хәҙер килендәргә ҡайны, ҡайнағалар менән һөйләшмәҫкә тигән закон сәпсим беткән. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуғы ирҙәр хоҡуғы менән тип-тиң. Үлсәп ҡырҡкан шикелле — артығы ла юҡ, кәме лә юҡ,— тине.

Хәлимәнен, был турала бик күпте ишеткәне бар. Шунда ла оялта бит әле.

Ярай әле ирҙәр тағы ла үҙ-ара һейләшергә керештеләр.

Сәйеткол унын. янына килеп:

— Ниңә килгәйнең һуң? — тине.

— Бәй, ҡайт тиҙерәк. Самауыр һыуынып бөттө. Сәй эсер ваҡытты беләһең, ҡайтмай көттөрәһең. Етмәһә, ни тиклем мажара ҡупты. — Хәлимә шыбырҙап булһа ла, Сәйетколдо орошоп алды ла, тиҙ генә сығып китте.

Унын артынан Сәйегкол да ҡуҙғалды:

— Әй'=>, Сафа, ҡайтайыҡ, һиңә лә минен. менән юлайҡан бит,—тине.

Улар сығып киттеләр.

Ҡотлояр менән Әхмәҙи, яйлап ҡына тәмәкеләрев һурып, бер аҙ өндәшмәй ултырҙылар. Әллә ҡайҙа яҡынг| да ғына әтәс ҡысҡырып ебәрҙе.

— Бына һиңә кәрәк булһа, таң да ата,— тине Ҡотлояр.

— Ә беҙҙең эш бөгөн дә бөтмәне. Етмәһә, бесәнгә тешөр ваҡыт етте. Уны тиҙерәк халыҡҡа бүлеп бирергә кәрәк ине. Тиҙерәк ошо һайлау эштәрен үткәреп алһаҡ, аҙыраҡ ҡул бушар ине әллә.

— Ниңә аптырайһың? Бесән мәсьәләһен иртәгә буласаҡ ҫобраниелә хәл итеп алырбыҙ.

— Юҡ, аптырауҙан түгел. Бер собраниегә бөтә мәсьәләне тейәп тултырыу менән эш сыҡмаҫ. Ярлылар комитетен һайлау үҙе байтаҡҡа һуҙылыр. Продкум эштәре тураһында Мурзин ағай үҙе доклад яһай. һейләүт селәр ҙә күбәйә лә китә торған. Унан сабынды ла бында ултырып бүлеү менән эш бөтмәй, үҙебеҙгә сығып йерөргә кәрәк.

— Шул инде, Әхмәҙи, төп ике мәсьәлә. Ә яланда йөрөп сабын бүлеү эшенә ана шул беҙ һайлаған комбед члендәре һыҙғанып тотонорҙар. Тик бына Мурзин менән Мөғәллим һуңлап тормай килеп етһәләр, бик яҡшы булыр ине.

•— һуңламаҫтар. Мөғәллим Плаксиндә генә. Ул ундағы собраниене бөгөн үткәрешеп бетһә, таң менән бында буласаҡ. Биш саҡрым ерҙә ҡунып та ятмаҫ әле. Ә Мурзиндең урынбаҫары Сәғди ҡайтҡан булһа, ул да һуңламаҫ.

Ҡотлояр, урынынан тороп, бер кирелеп алды ла:

•— Ярар, Әхмәҙи, әйҙә ҡайтып, исмаһам, ҡояш сыҡҡансы бер тына йоҡлап алайыҡ, — тине.

Ауылды тулған ай яҡтыһы ҡаплаған. Унын һалҡын нурҙары тәҙрә быялаларында ялтырай. Ҡояш байышындағы ҡыҙыллыҡ һүнеп бөтмәгән, кәнсығыш яғынан таң алланып ҡалка башлаған.

йәйҙең йәмле тенө, саф һауаға таралған тәмле сәскә еҫтәре тәнде иркәләй, тыныс ял итергә саҡыра.



## 2

Ҡаҙанҡап Абдулла, киске намаҙын уҡып бөтөргә яҡынлап, эре ағас төймәләрҙән теҙелгән тиҫбеһен шыҡылдатып тарта ғына башлағайны, шаулашҡан бисәләр тауышы асыҡ тәҙрәнән уның ҡолағына инеп, иғтибарын тартып ебәрҙе. Ул, тиҫбеһенең нисәнселәр мунсағын тартҡанда яңылышып китеп, тыштан шартлап килеп ингән Шәһәрбануыға ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ни нәмәһе урамға сығып ирешеп йөрөйһөгөҙ? Өйҙә генә ирешергә булмаймы әллә? Намаҙымды ла боҙҙорҙоғоҙ, шайтан бисәләре,— тип әрләй башланы.

. Ҡаҙанҡап тәүҙә үҙенең ике бисәһе үҙ-ара ҡысҡырышып ирешәләр икән тип уйлағайны. Ул шуға күрә тағы ла:

— Апайыңа ҡаршы шулай итеп ҡаты тауыш күтәрәһеңме? — тип өҫтәне.

Шәһәрбануу, тыштағы асыуы тағы ла көсәйгәндәй бульға, ҡартынан да уҙҙырып ҡысҡырып яуап бирҙе:

— Ирешмәй ни, нишләп түҙеп тормаҡ кәрәк. Кем бит әле! Боронғо Ныязғолдоң ялсыһы Сәйеткол бисәһе лә кеше булып һүҙ һөнләгәс, ҡалай итеп ирешмәй тораһың.

— Нимә ти ул һиңә, ни булған?

— Нимә тигәндәре билдәле йнде: «Хәҙер һинен, ирен түрә түгел, минеке түрә, ти. һинең ирен мылтыҡты тота ла белмәй, минеке, исмаһам, аҡһаҡ булһа ла, ҡораллы түрә, милитсә, ти. һеҙ буржуй, һеҙ кулак, һеҙ кунтр»,— ти. Ҡуй инде, һинең есен ишеткән һүҙҙәрҙе тауыҡ та сүпләп бөтөрә алмаҫ. — Шәһәрбануу ғәрлегенән илап та ебәрҙе. — Ир булып ултыраһың шунда. Хәҙер инде хөрриәт, кешеләр советтән ҡайтмай, волоскә бара, депутатлыҡҡа яҙыла, бәлшәүниклеккә яҙыла. Ә һин өйҙән сыҡмай ултыраһың. Совет үҙ өйөндә бит, әллә ҡайҙа барып йөрөй торғаны ла юҡ. Мин дә һине староста кеше тигән булып, йәш ғүмеремде әрәм итеп, кендәш өҫтөнә һиҫә барған булдым. Минән егерме йәш олоһоң, аҡылың минеке хәтле лә юҡ. Бына ике бала ғына ҡулымды тота. Булмаһа, бөгөндән ташлап сығып китер инем!

Бисәһенен, шулай итеп бик күп һүҙҙәр менән үҙен әрләп туктағанын Ҡаҙанҡап ҙур түҙемлелек менән көттө. Бая уҡ иҫәбенән яҙған тиҫбеһенен, дә «аллаһы әкбәренме» әллә «әлхәмделилләһенме» Ьанап утыҙ өскә



еткереп туҡтағанын дә тикшерҙе. Уның да осона сыға алмағас, «собханаллаға» төшөп, тиҫбе төймәләрен шыҡылдатып ҡараны. Ләкин ул күпме тырышһа ла, был ғибәҙәт эше барып сыҡманы. Ул үҙенен, ике бисәһенең көн һайын ирешмәй ҡалмағандарын белә. Шуға күрә лә; «Йә, улар ни, ояға талашҡан тауыҡтар һымаҡ, сырҡылдашып ирешәләр ҙә баҫылалар. Бер аҙҙан һуң ҡараһаң, уларҙан да татыу кеше юҡ шикелле күренә. Был ирҙәр эше түгел», — тип кенә ҡарарға өйрәнгәйне. Ә бөгөн унын был ҡысҡырышҡа ла, Шәһәрбаныуҙың әсе телләнеп үҙен ғәйепләүенә лә, хурлауына ла бер юлы асыуы ҡабарҙы. Ул-бая уҡ йыйырға онотоп бөткән намаҙлығын һелкә күтәреп алып, урҙаға ырғытып элде лә тағы ла Шәһәрбаныуға аҡырып ебәрҙе:

— Йә, етте һиңә. Ни нәмәһе өҙмәйһең дә ҡуймайһың. Миңә кейәүгә барғаньщ ҡартайғас иҫеңә төштөмө ни? Алйот!

— Иҫемә теште шул. Әгәр минең тәүге ирем япон һуғышында үлеп ҡалмаһа, хәҙер бынамын тигән бәлшәүник булыр ине. Һинең һымаҡ кунтр булып өйҙә ултырмаҫ ине!

— Булған ти бәлшәүник. Исмаһам, миншәүник булыр ине, тип һейләш.

— Барыбер инде, һуғыштан береһе лә берәй син таҡмайынса ҡайтманылар. Минең ирем мәрхүм дә бик үткер ир ине. Хәҙерге көндә ул бәлшәүник була алмаған хәлдә лә, милитсә булыр ине. Шундай үткер ине ул!

— Ярар, ярар, үлгән һыйыр һәтле була ул. Һин уны ни хәтле маҡтаһан, да, илап буҙлаһаң да, тег.е донъянан кире алып ҡайтып стенаға һөйәп ҡуя алмайһың инде.

Уларҙың икеһенең дә аҙыраҡ эстәре бушағандай булып, ҡысҡырышыуҙан туҡтанылар. Һәр кем үҙ уйына ҡалды.

Шәһәрбаныу, түргә яҫтыҡ, түшәк, юрғандар ырғытып, урын һалырға әҙерләнә башланы. Бегөн унын көндәше ҡыҙына ҡунаҡҡа киткәндән ҡайтманы. Шуға күрә бөгөн, сират үҙенә булмаһа ла, Шәһәрбаныу ире янында ҡунырға тейеш ине.

Шәһәрбаныуҙың тауышы баҫылғас, Ҡаҙанҡап Абдулла әле генә унын ярып әйтеп һалған асыулы һүҙҙәрен, үҙенә ырғытҡан ғәйептәрен берәмләп тикшереп сыға торғас, ҡайһы бер урындарҙа бисәһенең хаҡлы икәнен муйынына алды: «Ысынлап та, төптәнерәк уйлап

карайаң, был хөрриәттен иң тәүбашлап сыкканына ике йыл тулып бара ята. Шунан бирле халык, кырмыҫка йыләүе һымак, кайнаша. Тоталар ҙа йыйылыш яһайҙар, митинг яһайҙар. Шунан еңгән як үҙенә окшаған власте яһап куя. Бында халыктың күпселеге кайһы якта булһа, шул енә килә. Дөрөҫ, Шәһәрбаныуҙы алған сакта мин дә ауылды жулымда тоткан староста инем. Ул вакытта һайлаусылар күп булмай ине. Уларҙы якшылап тороп һыйлайһын. да, волость тирәһендәге начальниктәргә лә мул ғына бирәһең дә, үтә лә китә инең. Шулай итеп барып бер өс ай старшина булып алдым бит әле. Әгәр ҙә батшаны колатып ташлап, власть үҙгәрмәгәндә, бәлки ошо көндә лә шунда ултырыр инем. Вакытлы хөкүмәттең дә минең старшиналыкка әллә ни зыяны теймәне. Тик әллә кайҙан анау Кәүи мәхдүмде Ныязғол алып килеп төштө лә, уныһы миңә, «һин манархист» тигән булып, мине тешөрөп ташлап, Саттарҙы комитет яһап куйған булды. Әйтәм ерле эш кыйратты Саттарҙары. Саттарҙы түгел, Вакытлы хөкүмәттең үҙен дә һыпыра һуғып төшөрөп ырғыттылар ҙа, ярлылар власть башына үҙҙәре менеп ултырыш алдылар. Хәҙер анау, Үмәрҙең борон заманда ауыҙ асып һүҙ һейләмәгән улы Әхмәҙи фронттан әллә ниндәй сәсән булып кайтып килде лә бына һиңә совет берсәҙәтеле. Бына һиңә яңы түрә. Бетә халыкты ауыҙына каратып тора. Эй алла... Етмәһә, әллә кайҙан «кулак» тигән бер исем кушып алғандар ҙа күҙҙе лә асырмайҙар. Ярай әле хәҙергә минең малым теүәл тора. Ошо ун биш-егерме баш аттан, унлаған һыйырҙан айырылмаһаң, бик якшы инде ул. Быйыл ана Ныязғолдоң бөтә ерен ауылға бүлеп, йорт файҙаһына бирәбеҙ тип һөйләнәләр. Бына ошондай сакта бик аптыраһаң, Ныязғолға кәңәшкә барыла торғайны. Хәҙер уныһы ла һис бер өйҙә тормай. Бер уйлаһан, уға ла асыу килә. Ул да артык хәйләкәр булып сыкты. Үҙе старшина булып килде-килде лә, бер заман капыл ғына үҙе урынына мине һайлатты. Ул, бактиһәң, батшаның колап бара ятканын һиҙгән икән. Шунан Вакытлы хөкүмәт килеп сыккайны, тағы ла мине кире димләп, старшиналығыңды ташла, хәҙер ярамай, үҙеңә аҙағы насар булыр, фәлән-төгән тип, Саттарҙы һайлаттырҙы. Ул да булмай сыкты. Унын, бер яраткан әйтеме бар: «Донъяның ағышы һыу ағышы менән бер, гел шуның яйына эште юнәлтергә кәрәк», — тигән була ине. Хәҙер бына «ағыш» тип



бео зә совет эшенә инеп китә алмай әле. Юк, хәҙер унын ике аркыры аяғының береһен дә был тирәгә баҫтырмай бәлшәүниктәрең. Ул әле тағы ла Самарҙа Кәүи коҙаһы мёнән әллә ниндәй эштәр куҙғатып ята, ти. Икәүһе лә «камус» хөкүмәте тирәһендә йөрөйҙәр икән. Ни эш сығарып кайтырҙар инде. Тик тормаһаң, була инде ул. Хәҙер шундай заман — кем еңгәндеке. Минең Шәһәрбаныуҙың да, катын кеше булһа ла, һүҙенең ысындары юк түгел. Тик ятаһың, ти. Уныһыла дөрөҫ. Тик ятыу ярамай. Ныязғол кайтһа, берәй нәмә эшләрбеҙ әле. Тик бына бәлшәүник булырға куша бит әле. Бисә тиһәң, бисә инде».

Каҙанкап Абдулла үҙенең был «бик тәрән» һәм «акыллы» уйҙарынан бик кәнәғәт булды. Ул, кинәнеп, хатта үҙалдына киң йылмайып, түңәрәк сал һакалын ике куллап һыйпап, күҙҙәрен емелдәтеп кыҫып, Шәһәрбаныу яғына боролоп ултырҙы. Ул тағы бер кат: «Шулай ҙа минең йәш бисә бик боевой, ирҙән дакуркмай, үҙ һүҙен сатылдатып һейләй, «түрә бул», тип әрләй. Бар һин уны!» — тип уйланды.

Унын кәйефе бөтөнләй якшырып китте. Ул Шәһәрбаныуҙың һаман өндәшмәйенсә кашаякта һауыттар шалтыратып йөрөгәненә бер аҙ карап ултырҙы ла:

— Шәһәрбаныу, әй, бисәкәй!.. — тип һүҙып көйләп, иркәләп ендәште.

Шәһәрбаныуҙың кәйефе төҙәлеү түгел, тағы нығырак боҙолғайны. Ул үҙенен. .уткән ғүмерен дә, һуғыштан кайтмай үлгән ирен дә, көндәшенән күргән нужаларын да бар уйынан кисереп, күҙ йәшен тыя алмай илай ине. Ул иренең нисә кабат өндәшеүенә:

— Иә, нимәһе тағы мөңөрәп ултыраһың? Ана урын һалғанмын бит, ят та йокла! — тип екеренде лә үҙе соланға, йоклап яткан балалары янына сығып китте.

## 3

Бөгөнгө йыйылыштың бик шау-шыулы, күңелле һәм унышлы үтәсәге алдан ук күренеп тора ине. Ауыл Советендә бөгөн дежурный ҙа берәү генә түгел, икәү. Улар — бәләкәйҙән айырылмай бергә йәшәп килгән ике дуҫ — Исмәғил менән Хөсәйен.

Уларҙың совет йыйылышына кешеләр йыйырға китеүҙәренә ярты сәғәт тә үтмәне, ашығып килеп хәбәр ҙә иттеләр.

— Булды, Әхмәҙи ағай, бөтәһе лә тиҙ үк килеп етәләр,— тине Исмәғил.

Оҙон таҡта' өҫтәл буйлап биш-алты кеше ултырған. Былар—совет активтәре. Улар үҙ-ара йә һөйләшеп ултыралар, ҡайһы саҡта өйҙә бер итеп көлөшәп алалар ҙа үҙ эштәренә эйеләләр.

Өҫтәлдең бирге башындараҡ Әхмәҙи ултыра. Ул тотош боролоп Исмәғилдән һораша:

— Кемдәр өйҙә юҡ?

— Бөтәһе лә өйҙә, ағай.

— Атайыңды, Әпләс ағайҙы алданыраҡ килһендәр тип әйтергә ҡушҡайным, онотмай әйттеңме?

— Әйттем, әйттем.

— Исхаҡ ҡайтып етмәгәнме?

— Юҡ, ағай. Бегөн таң менән ҡайтмаҡсы ине ул.

— Ҡайтмаҡсы ине лә, юҡ бит әле. Ярай.— Әхмәҙи өҫтәлгә кире боролоп өлгөрмәне, Хөсәйен шәпләп килеп инде. — Иә, һин, Хөсәйен, арьякты вис йөрөп сыктынмы?

— Вис, вис, ағай. Тик купец Дәүләткә, Алламоратҡа әйтмәнем. Был тирәнән Ҡаҙанҡап ҡалды.

— Ярар. Улар кәрәкмәй беҙгә. һеҙ үҙегеҙ ҙә алыҫ китмәгеҙ, ошо тирәлә булығыҙ,— тине Әхмәҙи. Үҙе, ҡулындағы ҡәләмен өҫтәлгә һалып, уны уң ҡул осо менән бер аҙ тәгәрәтеп, уйланып алды. Шунан ул: —Мурзин иптәш, ошо турала мин һинән төпсөп һорашмағанмын икән. Был комитет ярлылар комитете булғас, хәллеләр бөтөнләй инмәйҙәр инде? — тине.

Мурзин өҫтәлдең түрьяҡ башында газета ҡараштырып ултыра ине. Ул газетаһын өҫтәлгә һалып ҡуйҙы ла, артҡа тараған ҡалын сәсен һыйпап, ҙур ҡара күҙҙәре менән Әхмәҙигә тура теклəп ҡараны ла яуап бирҙе:

— һайлауҙың иң төп принцибе, был эшкә ярлы, актив халыҡтың үҙен ылыҡтырыу. Шулай булғас, беҙҙең һайлаған иптәштәр ысын күңелдән Совет власе яҡлы ысын күңелдән большевиктәр яҡлы ярлы кешеләр булырға тейеш. Ундай кешеләр урта хәллеләр араһындә ла юҡ түгел. Тимәк, улар араһынан да кандидаттар булырға мөмкин. Ә кулактар тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел.

Мурзин менән ҡатар ултырған Ҡотлояр мыйығын һыпырҙы ла, ниҙер иҫенә төшөрөп, пырхылдап көлөп ҡуйҙы.



Мурзин уға йылмайып:

___Йә, Ҡотлояр ағай, әйтеп көл, — тине.

Ҡотлояр ҡулындағы тартып ултырған тәмәкеһенең •калғаныш бер-ике һурҙы ла төпсөгөн мейес артына ырғытты. Шунан тағы бер көлеп ҡуйҙы: -

— Әйтергә уйлағанға көлгөм килә лә, — тине ул: — һеҙҙең һүҙҙе тыңлай торғас, минең иҫкә бер әңгәмә килеп тәштө. Мин бер көнө волостән ҡайтышлай Ташкүстәнгә төшкәйнем. Улар ҙа ошо ярлылар комитете тураһында кәдәш алып баралар икән.

Мурзин уны бүлде:

— Ҡасан тиһең, үткән дүшәмбе көнме?

— Эйе, есенсө көн, шул дүшәмбе көн була инде. Улар ҙа шул көнө иртә менән волостә һинең янда булып ҡайтҡандар икән. һайлау хәбәре сыҡҡас, беләһең инде, йыйылышҡа саҡырылғаны ла, саҡырылмағаны ла килеп тулып киткәндәр. Кандидаттар күрһәтеү бара. Улар үҙҙәренең Байрамбай тигән бер ипле генә кешене һайларға итһәләр, теге ҡыҙа ла кітә: «Ниңә мине ярлылыҡҡа һайлайһығыҙ, мин әллә ул тиклем үтә ярлымы ни?»— тип, ятып килеп үпкәләргә кереште. «Булмайым, бер нәмә лә булмайым», — тип ярһый. Кешеләр көлешәләр, ҡайһы береһе уны ороша: «Алйотланып үҙ ҡәҙеренде үҙең китәрмә, кешеләр һине әҙәмгә һанап телгә ала»,— тиҙәр. Волостән уполномоченный итеп Миша Фроловты ебәргәнһегеҙ икән, ул Байрамбайҙы егөтләй:

— Халыҡ һайлағас — тыңларға кәрәк, советкә эшләргә кәрәк. Үтә ярлы булмаһаң да бик бай ҙа түгелһең. Әгәр бай булһаң, беҙ һинең менән икенсе телдә һөйләшер инек, ти. Юҡ, тыңламай. Тағы ла күтәрелде лә китте. «Аллаға шөкөр, ике атым, ике һыйырым, ике десятина ерем дә, ике бисәм бар», тип теҙеп алдь^ ла китте. Халыҡ көлә башланы.

Ҡотлоярҙың хикәйәһе был ергә еткәс, Мурзин менән •Әхмәҙи ҙә, Баҡый ҙа ҡапыл көлөп ебәрҙеләр.

Әхмәҙи:

— Ҡуй, Ҡотлояр ағай, аҙыраҡ аша һуктырып ебәрһең, бисәләре тураһында әйтмәгәндер, — ти ҙә, үҙе тыйыла алмай көлә.

Ҡотлояр дауам итә:'

— Ысын, ысын, ни эшләп аша һуктырайым. Әйтәм 'бит, халыҡ тәгәрәп ятып келә. Ҡайһылары: «Хәҙер шу--лай бисәләр ҙә байлыҡҡа инә башлағанмы ни?» — тип

ҡысҡыралар. Миша Фролов уларҙы көскә, тәртипкә саҡырып, шаулауҙан туҡтатты.

Мурзин тағы бер тапҡыр көлдө лә:

— Михаил ҡайтһа бер һөйләй икән, һеҙҙең башҡорттарҙың имуществоһына бисәләр ҙә инә икән, ти инде ул.

— Әйтер, әйтмәй ни, үҙҙәре шулай итеп сыҡҡас.

— Уны һайламағандарҙыр бит? — тип һораны Мурзин.

. — Юҡ, һайламанылар, ул кешелә ниндәй пролетарский аң булһын инде.

—• Дөрөҫ иткәндәр. Ярлы булғыһы килмәй, тимәк, байырға иҫәбе ҙур,— ти Мурзин.

— Шулай була инде, күрәһең.

Уҡытыусы Баҡый өҫтәлдең бирге башында ашығып-ашығып исемлек төҙөп ултыра ине. Ҡотлояр һөйләп бөткәс, күтәрелгән көлкөгә ул да ҡушылды ла, яҙыуҙарын аҙыраҡ шылдырып, иптәштәренә ҡараны. Уның да бик йор һүҙле икәнен бетәһе лә яҡшы беләләр. Әле лә ул ни ҙә булһа бер һүҙ әйтеп көлдөрә инде, тигән төҫ менән уға йылмайып ҡарап көттөләр.

— Һин уны әйтәһең әле, Ҡотлояр. Мин дә Таллығабарғанда ошондай бер әңгәмәгә тап булдым.

— Иә, йә?

— Таллыға барҙым да, тура Рәшиткә төштөм. Унын ейөндә, йыйылыш барған шикелле, бер түңәрәк халыҡ йыйылған да ҡайһыһы һөйләй, ҡайһылары көлә, әҡайһы бер ҡарттары йәштәрҙе орошалар. Рәшит кенә өндәшмәй. Һиҙелеп тора, уның да бик келгөһе килә, ирендәрен тешләп үҙен тыйып ултыра. Мин дә ишектән үтмәй тыңлап торам. Башта эштең ниҙә икәнен дә төшөнмәйем. Ул былай булған икән: совет бик яҡшы эшләп ята. Ярлылар комитете тураһында сыҡкан декретте лә бик һәйбәтләп уҡып төшенөп, һөйләшеп ҡуйғандар. Һайлау йыйылышк шаршамбы көнгә тәғәйенләнгән. Эш бара бит инде, һүҙ юҡ. Тик шунда бер әңгәмә булып алған...

— Дөрөҫ,— тине Мурзин, унын һүҙен бүлен,— улар бик яҡшы үткәрҙеләр. Бөтәһенән дә алда улар тырыштылар, хәҙер бесәнгә лә төштөләр инде.

Уларҙың һүҙҙәрен^ килә башлаған кешеләр бүлде^ Улар араһында Үмәр, Әпләс ҡарттар ҙа бар, Сафа *ле*″ бар ине.

Әхмәҙи уларҙы ҡунаҡ ҡаршылағандай итеп, урыныЦ нан тороп ҡаршы алды.



— Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, юғары уҙығыҙ,— тине.

Улар, үргә үтеп, Мурзин менән күрешеп, ултырыша башланылар.

Әхмәҙи Исмәғилгә ҡарап:

— Һин әллә атайыңды ашыҡтырырға оноттоң инде, барығыҙ, йәһәтерәк булһын,— тине.

Исмәғил менән Хесәйен эске урамға төшкәндә, Тимерғәле ағай, уның оло улы һалдат Исхаҡ осранылар.

Алданыраҡ Тимерғәле ағай килә. Ул бөгөн өҫтөнә байрамдарҙа ғына кейә торған Заһит кейәүе ата туны итеп һыйлаған ҡыҙыл сапанын кейгән. Башында ла ҡара һырлы яңы таҡыя. Ҡаталары ла ялтырап майланған. (Бынынһын Сәғиҙә еңгә тырыштырғандыр инде.)

Исхаҡ арттараҡ. Ул йәшел гимнастеркаһын бик •купшылап, арттан билен бөрөп яҫы ҡайыш биллек быуған. Салбары күк галифе, итеге ялтырап тора. Ул ҡалын ҡара сәстәрен артҡа тараған да, уны йәшел һалдат фуражкаһы менән бик килештереп баҫып кейгән. Һалдат походкаһы менән, яурындарын арткараҡ ташлап, шыҡ баҫып атлап бара.

Исмәғилгә атаһы:

— Тағы ҡайҙа югерәһең? — тине.

— Һеҙгә Әхмәҙи ағай тиҙ килеп етһендәр, ти. Бая ла әйттем бит. Оҙаҡлайһығыҙ.

Тимерғәле ағай аҙымын йышайтты ла, Исхаҡка әйләнеп:

— Тиҙ бул, улым, көттөрмәйек,— тине.

Исхаҡ уға:

— Хәҙер, атай. Атлай тор, хәҙер ҡыуып етәм,— тине лә ҡустыһы янына туҡтаны.

— Кемдәр бар унда, Мурзин ағай килеп еткәнме һуң?

— Ул ни таң менән килеп етте инде. Ә һин яңы ғына ҡайттыңмы ни, ағай?

— Әле генә, әле генә. Сәй ҙә эсмәнем, ат та туғарып «лгөрмәнем. Һин ҡайта һалып туғар инде,— тине Исхаҡ. Ул да бик ашығып үтеп китте.

Тимерғәле ағай алдан ашығып китһә лә, Исхаҡтың артынан ҡыуып етеүен көтөңкөрәй ине. Уның йыйылыш•ка аҙыраҡ һуңланҡырап ҡалыуының сәбәбе лә Исхаҡтыщ ҡайтып төшөүен көтөүе булды. Үҙенең һалдатский Депутат улы менән Айҙаҡай урамынан ҡатар атлап барып, совет өйөнә икәүләшеп барып инеүҙе ни тигән дан-

лы эш тип уйлай ине Тимерғәле ағай. Был бер ҙә маҡтаныуҙан йәки ҡупырайыуҙан түгел. Ундай ғәҙәт элеккебайҙар ғәҙәте. Ә бына ошондай ҙур бәхетте дуҫтарына ла, дошмандарьща ла ялтыратып күрһәтеү үҙе ни тора. Унын улы, аллаға шөкөр, ирмен тигән егет — ҡыҙылгвардеец. Петроградта Керенскийҙе «Аврора» тигән караптан туп менән аттырып ҡыуған саҡта ул да, Айбулат та Смольныйҙың үҙендә булғандар. Һуғыштағы һалдаттар уларҙы депутат итеп һайлағандар ҙа әйткәндәр! «Барығыҙ, Петроградтын, үҙенә барып әйтегеҙ, беҙ әллә нигә лә буржуйҙар яҡлы буласағыбыҙ юҡ. Буржуй хөкүмәте тептө беҙгә төҫ хөкүмәт түғел һәм беҙгә ул буш та кәрәкмәй, тип һөйләгеҙ», — тип нығытып ҡушҡандар,

Тимерғәле ағай, үҙенең ошо ғорурлыҡ менән тулған шатлыҡлы уйҙарына эйәргән һымаҡ, елтәнләп атлай, ҡанат һымаҡ булып ике яҡҡа йәйелеп ялпылдаған сапан салғыйҙарын да ҡымтып тормай. Унын үҙ ғүмеренә аяҡтары менән интегеүе, биле һыҙлауы, әллә ҡайҙа, ҡул менән алып ташлаған кеүек юҡ булған ине.

Исмәғил менән Хесәйен, югереү йомоштары беткән шикелле булғанға, артабан аҡрынырак киттеләр.

Исмәғилдең, Исхаҡ ағаһы ҡайтканға айға яҡын ваҡыт булып килһә лә, бер ултырып унын менән һөйләшә алмағанына эсе боша. Ул унын үҙенә балаһынып ҡарауына ла хәтере ҡалынҡырай. Етмәһә, хәҙер ул Сафура туғанына ҡунаҡка китә лә, ике-ес кен юҡ булып тора. Был хәл тигенгә түгел. Унда Сафураның бикәсе Зәлифә ҡоҙасаһы бар шул. Исмәғил шуны ла төшенмәй тип уй*. лай микән? Юҡ инде, хәҙер уға ла ун һигеҙ тулды инде.

Исмәғилден. уйҙарын тынлап торғандай, Хөсәйен:

— Был Исхаҡ ағайым ҡасан кәләш ала инде? Еңгәм үлеп ҡалғанына ла күп була бит? — тип һораны.

— һуғыштан бушамағас ни. Инде бик оҙаҡ буйҙак йөрөй алмаҫ,— Исмәғил мәғәнәле көлөп ҡуйҙы.

— Ниңә улай тиһең, күҙләгәнме ни?

— Беҙҙен, Сафура апайымдың бикәсе Зәлифә ҡоҙасаға күҙе тешкән шикелле.

— Ә теге «сей ауыҙ малайҙарҙы мин күҙгә элмәйем| егеткә лә һанамайым» тигән ҡыҙмы?

Исмәғил тағы ла көлдө.

— Шул, беҙҙең наҙлы ҡоҙаса, минең ағайҙы күҙг? злгән инде, күрәһең.



Исмәғил ошо күңелле йәшлек дәүеренең матур карт иналарын, буласаҡ һылыу еңгәһен дә күҙ алдына килтереп, шәп-шәп атлап барып,-үҙҙәренең ҡапкаһына ингән саҡта, оло юлдан сабып тешөп килгән пар туры ат унын иғтибарын алды.

Исмәғил ҡапыл:

_- Хөсәйен, ҡара әле, былары кемдәр икән? — тип, «кыскырып, оло юлға бармағы менән төртәп күрһәтте.

Хөсәйен:

— Әллә, советкә булһа, хәҙер ҡыя юлға боролоп төшөрҙәр,— тип көтә башланы.

Ләкин пар аттағылар, туп-тура сабышып барып, Ныязғол тебәгенә инеп юғалдылар.

Исмәғилдең уйына ҡапыл шомлоҡ төштө:

— Хесәйен, был Ныязғол булыр,— тине.

— Ну, әллә шул контр микән?

— Бүтән кем булһын? Хәҙер советкә барып хәбәр итергә кәрәк.

— Әйҙә!

Исмәғил арата ҡапканы бер генә һикереп аша ырғып тештө лә тәҙрәнән әсәһенә ҡыскырҙы:

— Әсәй, атты һин туғар әле, минең ваҡыт юҡ. Туғар, йәме, әсәй! Бесәнгә ҡушырға үҙем ҡайтып етермен. һыуына торор!

Егеттәр совет ейөнә табан югерҙеләр.

## ШАНЛЫ ҠЫҘЫЛ ҒӘСКӘРҘӘР

### 1

«Иптәштәр, граждандар!

...Беҙҙең республикабыҙ өсөн критик момент килеп баҫты. Сит илдән һәм эстән дә рус һәм сит ил контрреволюционерҙәре беҙгә янайҙар.

Эшсе һәм крәҫтиәндәр нәмә өсөн шул тиклеМ күп ҡан түккән булһа, шуның бетәһе лә картаға ҡуйылды. Крәҫтиәндәргә — помещик ерҙәрен кире тартып алыныу, эшселәргә — капиталистәр иҙеүе аҫтына кире ҡайтыу, эшсе-крәҫтиәндәр власенә — ауҙарып тешөрөлөү, буржуазия власе менән алмашыныу ҡурҡынысы тора.

Эшсе-крәҫтиән депутаттарының бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитете армияға мәжбүри призыв тураһында ҡарар сығарҙы.

Россия Совет республикаһыныщ бөтә хеҙмәтсән синыфтарына, бетә зшсе һәм крәстиәндәргә ҡоралға йәбёшергә кәрәк».

Ошо мөрәжәғәт бөтә илгә таралды ла, Октябрь социалистик ҡояшы нурында йылынып өлгөргән бөтә халыҡтың йөрәгенә ҡайнар көс һалды. Мобилизация башланыр-башланмаҫ, доброволецтәр яҙылып китә башланы.

Самарҙыщ үҙендә һәм бетә губернаһындағы бөтә большевистик ойошмалар хәрби пункттарға әүерелде.

Василий Сергеев менән Юлия Ивановна, губерна реввоенсоветенен. ҡушыуы буйынса, Ырғыҙ буйына мобилизация һәм врачебный комиссия эштәрен ойоштороорға ебәрелделәр.

Николайский ҡалаһының урамдары ҡыҙылармеецтәр менән тулып китте. Унда иртәнән алып кискә хәтле урамдарҙа боевой марштар гөрһелдәй, раз-два командалары яңғырап тора. Әленән-әле йыр тауыштары яңғырай:

> Смело мы в бой пойдем
> За власть Советов,
> И как один умрем
> В борьбе за это.

Сборный пункт боронғо һалдат казармалары булған, бер кварталдай урынды алған оҙон аҡ кирбес йортта ине. Хәҙер унда военкомат та, врачебный комиссия ла һәм ҡыҙылармеецтәр төшәү өсен әҙерләнгән дөйөм торлаҡтар ҙа урынлашҡан. Был йорттарҙын, оло урамға ҡараған бер ҙур залында Юлия һәм тағы ике врач кисә генә комиссиянан үткәрелгән ҡыҙылармеецтәрҙен, эштәрен оформить итеп ултыралар ине.

Асыҡ тәҙрәнән «Шагом марш!» тигән команда ишетелде. Тимәк, иртәнге сәғәт алты. Ә хәҙерге ашығыс ғәскәри эштәр өсен ҡыҫҡа төндәр ҙа, оҙон көндәр ҙә етерлек түгел. Әле лә таң яктырып киткән. һөрөмләнә башлаған кәрәсин лампаларының кәрәге әллә ҡасан бөткән, тик улар һүндерелмәгәндәр әле.

Залдың арғы башындағы өҫтәл артында ултырған аҡ һаҡаллы ҡарт врач Никольский Юлияға әллә өсөнсө тапҡыр инде:

— һеҙ, Юлия Ивановна, ҡайтығыҙ инде. Тешкә хәтле ял итегеҙ. Ә беҙ Никифорыч менән ошонда ғына аҙыраҡ ятып, серем итеп алырбыҙ,— тине.



Юлия үҙенең аҙаҡкы папка яҙыуҙарын ҡарапбөтеп, тегеп, бәйләп шкафҡа һалды ла:

— Ярай улай булһа, хәҙергә хушығыҙ,— тип ҡайтырға сыҡты.

Ул оло урам тротуарынан көн дә ҡайтҡанындағы һымаҡ, бер өҙлөкһөҙ ағылып үтеп торған армеецтәрҙен. йырҙарын тыңлап, һүҙҙәрен үҙе эстән ҡабатлап, юл таҡталарына баҫып ҡайта. Ул шулай барып, үҙе тора торған урамға боролайым тигәндә бер яңы ят көй ишетте. Был часть байтаҡ алыҫ ине. йырҙың һүҙҙәре башта аңлашылмаһа ла, Юлия мөйөштә баҫып торған көйетыңлай башланы. Бына часть яҡынланы, һүҙҙәре лә> асыҡ ишетелә. Башҡорт егеттәре башҡортса йырлайҙар, ләкин көйө, боевой марш кеүек, еңел, күңелле, һүҙҙәре лә боевой ине.

> Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға,
> Иркенлек, тигеҙлек байрағы елберҙәһен алда.
> Шул ҡыҙыл байраҡты ҡыҙыл һөнгө менән һаҡларбыҙ,
> Ҡанлы һуғыштар булһа ла, ихтилалды яҡларбыҙ.
> Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға,
> Иркенлек, тигеҙлек байрағы елберҙәһен алда.

Юлия бик тәрән тулҡынланды. Арыуҙан, йоҡламауҙан талсығып арыған йөҙөнә ҡапыл ҡыҙыллыҡ ҡалҡып, тамағына төйөн төйөлдө. Йәш эркелгән күҙҙәре шатлыҡлы нурланды. Ул, үҙенә етеп килгән ҡыҙылармеецтәрҙең һәр береһенең йөҙөнә текләп, таныштарын эҙләне. Ул был частең Никольский комиссияһынан үтмәгән икәненә шиге ҡалманы. Сөнки уларҙың һәр береһен тигәндәй Юлия хәтерләп ҡала ине. Ул ни хәтле тырышып ҡараһа ла, уларҙы таный алманы. Сөнки улар бик шәп үтәләр, унын. яғына боролоп ҡарамайҙар ине.

Шул ваҡытта аҙаҡкы рәттәрҙең береһенән бер оҙон буйлы, шинель кейгән йәш кенә ҡара егет, ҡапыл стройҙан сығып, отрядтең командирен ҡыуып етеп честь бирҙе лә, ни тураһындалыр бик ашығыс һөйләп, иптәштәренән айырылып тороп ҡалды.

Был хәлдәрҙең бөтәһен дә иғтибар менән ҡарап торған Юлия ҡапыл аптырап ҡуйҙы. Теге егет туп-тура уға табан килә, үҙе аҡ тештәрен ялтыратып йылмая ине.

Ул килеп етеү менән:

— һаумы, Юлия апай,— тип ҡысҡырып һаулашып, күрешергә ҡул һуҙҙы.

Юлия тиҙ генә ҡул бирҙе, ләкин һаман да егеттә һораулы ҡарашын алмайынса, башҡортсалап:

— һеҙ кем булаһығыҙ һуң?— тип һораны.

— Эй Юлия апай, онотҡанһығыҙ, мин Ишбулды бит. Имелдән,— тип көлөп яуап бирҙе.

Юлия аптырау ҡатыш ҙур шатлыҡ менән:

—: Ах, һин, Ишбулды Байгузин туғанҡайым, ниндәй ҙур егет булғанһың!— тип уның менән тағы ла күрешеп, ҡулын ҡыҫып һелкте.

Ишбулды шатлыҡтан ҡыҙарынып көлә ине.

— Үҫтем, Юлия апай, ҙур үҫтем. һин башҡортса һөйләшеүҙе онотмағанһың, ә мине онотҡанһың!

Юлия уның һүҙенән тағы ла келөп ебәрҙе:

— Юҡ, Ишбулды, башҡорт телен дә, һеҙҙең бере-геҙҙе лә онотманым, хатта «самсыпал» ағай ҙа хәтеремдә. Тик ҡапыл танырлык түгелһең шул, ете йыл буйы үҫкәнһең дә үҫкәнһең. Ә ул саҡта малай ғына инең.

— Дөрөҫ, Юлия апай, малай ғына инем. Ул ваҡытта һин булмағанда, бәлки, үҫеү түгел, донъяла ла булмаҫ инем.

Егет был һүҙҙәрҙе бик серьез һәм Юлияға булған тәрән хөрмәт һәм рәхмәт менән әйтте.

Юлия Ишбулдыны ул ваҡыттағы ауыр иҫтәлектәрҙән ысҡындырырға уйланы:

— Иә, ярар, Ишбулды, үткән эштән төш яҡшы. Уларҙы онотайыҡ,— тине.

Ләкин Ишбулды ҡомһарып яуап бирҙе:

— Юҡ инде, Юлия апай, хәҙер бетә үткәндәрҙе оноторға түгел, э ул саҡтарҙың һәр бер көнөн иҫтә тотоп, шуның һәр сәғәтенең үсен алырға кәрәк буржуйҙарҙан. Әгәр ҙә бегөн мин теге становойҙы күрһәмме, бер генә пуля ҡундырасаҡмын. Теге ҡарун Ныязғол ҡулға эләкмәй йерей, уның менән иҫәпләшмәй китеп барыла. Иҫән-һау ошо мылтыҡ ҡулымда ҡайтһамы, у, Юлия апай!

Юлия Ишбулдының һүҙҙәрен бүлмәйенсә һоҡланып тыңланы ла, ул туҡтағас:

— Ишбулды туғанҡайым, бик дөрөҫ аңлайһың, бик дөрөҫ эшләйһең, йәшә, туғанҡайым!—тине.

Юлияның ошо һүҙҙәренән һуң ғына Ишбулды тағы баяғы күңелле хәленә ҡайтып йылмайҙы.

Шунан тағы Юлия:



— һеҙ һуң ҡайҙа оформить ителдегеҙ, ҡайҙан киләһегеҙ?— тине.

— Беҙ Имелгә йыйылдыҡ, шунан Глушицаға, ә бында кисә кис килеп еттек.

— Глушицала врачебный комиссия ойошторолғанмы әллә?

— Юҡ, Юлия апай, беҙ бөтәбеҙ ҙә добровольцтәр, коммунистәр һәм молодеждарбыҙ. Врачебный комиссияны не признаем, — тип өҫтәп көлөп ҡуйҙы Ишбулды.

— Иә, кемдәр бар һун. бында, күпһегеҙ ахыры?

— Байтаҡбыҙ. Бында әле яртыһы ла юҡ. Беҙ, беренсе яҙылыусылар, алдан киттек. Әлеге беҙҙең командиребеҙ Мурзин ағай. Самарҙа барыбыҙҙы ла йыйып мусульманский красноармейский полкка туплағас, ул комиссар була, ти. һинең бында икәнде лә ул әйтте беҙгә.

— Ул ҡайҙан белә?— Юлия был һорауҙы биргәндә тауышы аҙ ғына тулҡынып, төҫө ағарып китте.

Ишбулды уны абайламаны.

— Бәй, Василий Сергеев менән улар Глушицала бергә эшләнеләр. Әле мин һине танығас та уға әйттем, ул рөхсәт бирҙе.

— Ә...— тине Юлия. Ул Ишбулдының ашыҡҡанын да, уға оҙаҡларға ярамағанын да белә ине. Шуға күрә:

— Иә, Ишбулды туғанҡай, һин ашығаһыңдыр, иптәштәреңде ҡыуып ет, кискә күрешербеҙ. һеҙҙе лә шул беҙ эшләгән йортка ҡуйырҙар,— тине.

— Шулаймы, Юлия апай, ярай улай булһа, мин тегеләргә әйтһәм, эй ҡыуанырҙар инде. Унда бит бик күптәр һине белә. — Ишбулды ашыға-ашыға ҡул биреп һаубуллашты.

Ишбулды, югерә-атлап, шул арала күнегеп тә елгөргән хәрби походкаһы менән часен ҡыуып етергә ашыҡты.

## 2

Юлия Ишбулдынын. артынан ул юғары урамға боролоп инеп киткәнсе ҡарап, оҙатып ҡалды.

Уның инде арығаны ла, йоҡо баҫҡаны ла онотолғайны. Был осрашыу Ишбулдыныщ үткән бәхетһеҙ балалыҡ ғүмерен Юлияның күҙ алдына баҫтырҙы. Уның бөгөнгө

ирекле, бәхетле тормошон күрһәтеп, шатлыҡлы тулҡынландырҙы. Ошо кисерештәр өҫтөнә Ишбулдының Мурзин тураһындағы ҡыҫҡа ғына хәбәре лә ҡушылып, Юлияны тағы ла тәрәнерәк, тағы ла йөрәк талдырғыс уйҙарға, иҫтәлектәргә алып китте. Ул үҙенең ошо иҫтәлектәрен бер ҡабат ашыҡмай ғына күҙҙән кисереп сығырға уйлаған һымаҡ, яйлап ҡына атлап ҡайта башланы.

...Юлия үҙенен бөтә йәшлек һәм аңлы ғүмерен большевиктәр партияһы эшенә бағышланы. Ул был тормош юлына алдан әҙерләнеп, алдан уйлап, ниәтләп, йә булмаһа, әллә ниндәй ҙур вәғәҙәләр биреп аяҡ баҫманы. Нисектер, бик тәбиғи рәүештә тормоштоң ошо йәнле, бөтә кешелек бәхетенең иң юғары нөктәләрен үҙендә туплаған идеяның үҙәгендә ҡайнап йәшәгән һәм үҫкән кеүек, йәшәп үҫте. Ул үҙенең шәхси тормошон иң тәүҙә кейәүгә сығырға, балалар үҫтерергә, тигән ҡағиҙәгә бәйләмәне һәм уға бәйләргә тура ла килмәне. Унын, бөтә йылдары ошо ҙур эштең өҙлөкһөҙ талаптарын үтәү менән тулы булып, башҡа талаптарҙы артҡы планға ҡалдыра барҙылар. Ләкин Юлия ошо берҙән-бер тура һәм яҡты юлдың ҡайһы ерендә булһа ла, башҡа мәнфәғәттәр артынан боролоп туктап торорға, тигән фекерҙе башына килтергәне юҡ. Был әлегә бик күп ҡыҙҙарҙың аңында билдәле булмаған, киләсәктәге ҙур бәхеткә бәйле булған ышаныс ҡына ине. Унын ҡайһы бер егеттәр, хатта иптәш ҡыҙҙары ла уны тәкәбберлектә ғәйепләйҙәр ине.

Юлия уларға был ғәйептең дөрөҫ булмағанын нисек иҫбат итһен инде. Ул быға тырышманы ла. Унын беренсе тапҡыр яратып дуҫлашҡан Анатолийе бик йәшләй һуғышта үлеп ҡалды. Уларҙың семья тормоштары ойошоп өлгермәне. Юлияның шунан башҡа көслө һейеү тойғоһона бирелгәне юҡ ине. Ул яратыу, хөрмәт итеү тигән, бөтә кешеләргә, дуҫтарға, ағай-энегә, хатта бетә массаға булған тойғоно бик яҡшы белә. Ул уларҙы ысын күңелдән, туғандарса яратыу менән ярата, ярҙам итә һәм ошо мәнәсәбәт һәр ваҡыт үҙендә лә күңел шатлығы ғына тыуҙыра. Ә бына бер генә кешене һөйөү, бер генә кешегә ғашиҡ булыу, ул бөтөнләй башҡаса. Был әллә ниндәй бер ауыр бәхет, тип асыҡлай үҙенә Юлия. Шуға күрә унын янына барыуҙан уттан ҡурҡкан кеүек һаҡлана. «Ярай әле, исмаһам, минең был тойғомдо ул белмәй»,— тип тынның ынытыслана. Шул уҡ ваҡытта, ул киткәнсе күрмәй калмаһам ярар ине, тип шикләнә ине.



...Мурзин, Айбулат. Был ике кешенең исемдәре лә, үҙҙәре лә Юлия өсөн үҙенең ағалары Григорий, Вася кеүек бер туған һымаҡ булып бөткәндәр. Ул улар тураһында бәләкәйҙән — бишенсе йылдарҙан бирле ишетә килһә, Айбулатты ун беренсе йылдан, үҙе Имел волосендә эшләгән ваҡыттан, алып яҡындан таный, яҡын күрә, унын бетә семьяһы менән бәйләнеш тота. Ә бына Мурзин менән ул күптән түгел танышты. Быға ниндәй сәбәптәр булғандыр инде, Юлия ул турала тикшергәне юҡ. Тик ул ошо арала булған хәлдәрҙе генә уйлап ҡарай. Мәҫәлән:

1917 йылдын, сентябрендә, Самарҙа эшселәр депутаттары Советендә Ҡыҙыл гвардия уставын ҡабул иткән саҡта, Мурзиндең ҡайһы бер пункттарға төҙәтмәләр һәм өҫтәмәләр күрһәткәне есен уны күп иптәштәре хуплап телгә алғандарын ишеткәне бар.

Юлия тағы ла хәтерләне. Эйе, шул уҡ йылдың алтынсы октябре ине. Самарҙа большевиктәрҙен, губерна съезы асылды. Юлия ла унда яҡындан ҡатнашты, Мурзинде лә яҡындан күреп танышты. Юлия унының ундағы ялҡынлы сығыштарын һоҡланып тыңланы.

...Унан һуң, егерме икенсе октябрҙә, Октябрь восстаниеһенән бер нисә көндәр генә элек, губком һәм дөйөм ҡала комитете бюролары райондарҙан килгән вәкилдәр менән берлектә ултырыш үткәрҙеләр. Был ултырышта восстаниегә әҙерлек мәсьәләләре бөтә үткерлеге менән килеп баҫты.

Собрание ошо резолюцияны ҡабул итте:

«Волга көнө» газетаһын яптырырға, провокаторҙарҙы тоторға, киң күләмдә заем үткәрергә, ҡойроҡтарҙы бетөрөргә».

Ултырыштан һуң Мурзин, Григорий, Вася өсәүләшеп өйҙә ултырғанда ошо резолюция буйынса бик күп кенә фекер алыштылар.

Юлия уларҙын, һүҙҙәренән, большевиктәрҙен, был эше буржуазияның ҡаршылығын тыуҙырасаҡ, ә был ҡаршылыҡ массаларҙың активлеген күтәрер һәм шул ваҡытта диктатура иғлан итергә булыр, тигән мәғәнәне төшөндө. Мурзин райондан килгән вәкил булһа ла, был кендәрҙә Самарҙа ҡалырға тейеш ине.

Эйе, был ҙур ваҡиғалар, геүләп торған замандар үтте. Октябрь еңде. Яраш яһалды. Россия аҙыраҡ тын алды.

...Ун һигеҙенсе йылдың ҡышы ине. Мурзинде тағы лз, губкомға саҡырып алып, Имелгә волость комитете секретаре итеп ебәрҙеләр.

Был һуңғы килеүендә Мурзин тура Юлияларға төште. Улар уны, иҫке дуҫ итеп, бер туғандай күреп, шатланып ҡаршы алдылар. Уларҙа күңелле кистәр үткәрҙеләр. Үткәндәге, хәҙерге һәм киләсәк көндәрҙе күҙ алдына, килтереп һөйләштеләр.

Маруся менән Юлия, ҡунаҡ һыйлағандағы кеүек,. аш-һыу менән булаштылар. Ләкин Юлия, Мурзиндең ошо килеүендә күрешкән сакта, уны бик нык һағынғанлығын тойҙо. Ул үҙенең был тойғоһон бик ҙур ахмаҡлыҡ*ка* һанап, уны бөтөнләй еңер өсөн, Мурзиндең янына яҡын ултырып, унын. ҡатыны һәм балалары тураһында' ентекләп һорашты. Мурзин, әлбиттә, бер нәмә лә абайламаны. Рәхмәт әйтте лә, үҙенең бик һәйбәт ҡатыны, бик һөйкөмлө ике ҡыҙы тураһында бик ихлас һейләп бирҙе. Юлияның төпсөп һорашыуына яуап итеп, елкән ҡыҙының ун ике йәштә булып, ҡатынына оҡшағанын, бәләкәйенең ун йәштә булып, бөтөнләй үҙенә оҡшағанын күңелле йылмайып һөйләне.

Ләкин Юлияның был үҙен һыуытырға тырышып яһаған һөйләшеүе, киреһенсә, уның йөрәк яраһын ғына әрнетте. Мурзиндең балалары тураһында һөйләгәндәматур күҙҙәренең иркә нурланыуы, тауышының йомшаҡ ағышы, киң маялайынан тулҡынлы сәстәрен артҡа һыпырғандағы ҡыланышы — береһе лә Юлияның һөйөү менән ҡараған күҙҙәренән ысҡынманы.

Юлия аҙаҡ, үҙ булмәһендә яңғыҙ ҡалғас, туйғансьь иланы ла, үҙен-үҙе: «Бына тиле, бына илаҡ ҡыҙыҡай»,— тип орошто, был тойғоно башынан бөтөнләй алып ташларға, бьшың өсөн үҙен ҡулғл ныҡ алырға ҡарарланы..

Юлия үҙенең Набережныйҙағы квартираһында төшкә хәтле ошо иҫтәлекле уйҙарға ҡалып ултырҙы ла яңынан сборный пунктка китте.

Ул унда барып еткәндә, казармалағы бөтә армеецтәр сығып рәткә теҙелешәләр, колонна яһайҙар ине. Командирҙәре уларҙы, фамилияларын ҡыскырып, барлайҙар ҙа команда менән алып китә торалар. Был юлы улар урамға түгел, пункт артынан үткән һыртҡы юлға сығалар ҙа, яланға табан юнәләләр. Юлия уларҙың төштә» һуңғы занятиеғә — атышҡа бара икәндәрен уйланьи *



Щунан ул тиҙ генә үҙенен, эшләй торған бүлмәһенә инеп сыҡты. Унда Никольский генә ултыра ине. Ул:

— йә, Юлия Ивановна, аҙыраҡ хәл алдығыҙмы? — тип күҙлек аша ҡарап йылмайыпһораны.

— Ял иттем, Николай Маркович, арығаным бөтөнләй бөттө.

— Бик яҡшы,— тине врач. Бер аҙҙан тағы: —Юлия Ивановна, беҙгә сәғәт өстәрҙә тағы прием башларға кәрәк. Военком килеп әйтте. Ҡайҙандыр доброволецтәр килгән икән,—тине.

Юлия уны тыңланы ла:

— Ярар, мин улар янына барып киләйем дә, әҙерләнербеҙ,— тине.

Ундағы армеецтәрҙең геүләп һөйләшкән, көлөшкән тауыштары коридорға ишетелә ине.

Юлия барып күренеүгә, кемдер шатлыҡлы тауыш менән:

— Ана, Юлия Ивановна килде,— тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Юлия был тауыштың Ишбулдыныҡы түгел икәнен белһә лә кем әйткәнен айыра алманы. Сенки уны шул минутта уҡ һырып алып күрешә, һаулаша башланылар.

Юлия бөтәһенең дә ҡулдарын ҡыҫып күрешә, барыһын да танырға тырышып күҙҙәренә ҡарай, шатлыҡлы йылмайып хәлдәрен һораша ине. Ләкин был егеттәр бетәһе лә бер тиҫтер йәштәр булыуы, Ишбулдының: быныһы Исмәғил, быныһы Хөсәйен — Айҙакайский, был күрешкәне Ғәйсәр — Ташкүстәнский, ә быныһы, һин беләһендер, Имеләйский Мәсәлим,— тип теҙеп һөйләп тороуы ла Юлияға уларҙы танырға мөмкинлек бирмәне. Юлия шуға күрә тағы ла бер ҡабат уларға ҡарап, Мәсәли;м тагән егеттең Имеләйҙән булып та уны танымағанына аптырап, ул егеттең үҙенән:

— Мәсәлим, Мәсәлим, һин бәләкәй булғанһыңдыр шул, һис тә танымайым,— тине.

Юлия әллә ҡасан булып үткән был ваҡиғаларҙың һәр бер ентеген, әлбиттә, хәтерләмәй ине. Шулай ҙа ул күҙ алдына килтерҙе лә:

— Ә, иҫемә төште, һинең ике бәләкәс туғаның да бар ине,— тине.

• Быларҙың геүләшеүенә бүлмәнән бер олораҡ кеше сығып:

— Юлия Ивановна, беҙҙең Юлинька, һаумы? — тил өндәшеп ҡул һуҙҙы.

— Сәғди ағай, һаумы, һаумы! — Улар ҡулдарын оҙаҡ һелкеп күрешкәнсе тағы бергәү:

— Юлия Ивановна, таныш бул, һинең элекке танышың Самсыпал, — тип, хахылдап көлөп килеп, Янғол ҡул бирҙе.

Шатлыҡтан Юлияның йөрәге ярһыны. Бөтәһе лә шаулайҙар, көлөшәләр ине.

Улар, шулай шаулаша торғас, ишектең яңынан асылғанын да ишетмәнеләр. Иң тәүҙә Юлия ғына, абайлап, ишек яғына ҡапыл боролоп ҡарап көлөп тора ине.

Мурзинде күреү менән бетәһе бер юлы шаулауҙан туктап, бер дөйөм хәрмәт менән уға ҡарап ҡаттылар.

Мурзин Юлия янына атланы:

— Мин әле беҙҙең егеттәр тағы ниндәй митинг яһап яталар икән тип ашығып килһәм, һине күреп шулай шаулайҙар икән, — тип көлә-көлә һөйләнеп, Юлияға ҡул бирепп күреште. — һаумы, Юлия Ивановна! — тине.

Юлия шатлығынан тағы ла нығыраҡ ҡыҙарып китте. Ул, тауышы ҡалтырауҙан һаҡланып, бик ҡоро һөйләшергә тырышты.

— һаумыһығыҙ, иптәш Мурзин! Беҙҙең шаулашҡан тауыш шулай алыҫ ишетеләме ни?

— Бетә Ырғыҙ буйы яңғырай, — тип келдө Мурзин, Өҫтәл эргәһендәте Юлияға ҡаршы ултырғысҡа ултырҙы. — һағынғандар шул һине, Юлинька. Бик көттөләр. Ишбулды юлдан күҙен алманы.

Ишбулды үҙен Юлияның иң ҡәҙерле ҡустыһы итеп тойоп, шул хоҡук менән уның янына һырынып ултырған да унан күҙен дә алмай ине. Мурзингә ул:

— Юлия апайҙы күрмәй китәм икән тип ҡурҡтым шул, — тине. — Янынан ҡасан күрешербеҙ әле.

— Ҡасан, имеш, барып буржуйҙарҙы түбәләй һалып ҡайтабыҙ ҙа тиҙ генә күрешәбеҙ. Оҙаҡҡа ебәрмәйбеҙ, — тине Янғол.

— Тиҙ генәме, оҙаҡҡа һуҙылырмы, барыбер, беҙ уларға ҡалҡмаҫлыҡ итеп тондорасаҡбыҙ, — тип ҡуйҙы Ишбулды.

Юлия, уларҙың бөтәһенә лә ҡарап:

— Эй туғанҡайҙар, мин дә һеҙҙең ҡайтҡанды көтөп өйҙә ултырмам шул инде! Бәлки, бергә үк йөрөп һуғышырға тура килер, — тине.



— Улай булғас, бик шатбыҙ, Юлия Ивановна, бик шатбыҙ. һин тағы ла доктор булаһың инде беҙгә, беҙҙең часкә һора, Юлия Ивановна.

Мурзин уларҙың береһенә лә ҡушылмай, бөтәһенә лә бер эске яратыу менән янған ҡарашын ташлап, йылмайып тик ултыра ине.

Юлия унан:

— Ә беҙҙең Айбулат ҡайҙа һун, күптән бирле хаг та алғаным юҡ мин унан? — тип һораны.

— Ул Мәскәүҙә, Үҙәк Комитеттә, Вахитов иптәиь янында ине. Хәҙер унда татар-башҡорттарҙан мосолман-эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының бер ҙур батальоньв төҙөлдө. Ул тиҙҙән Самарҙа буласаҡ. Айбулат шунда булырға тейеш, — тине Мурзин.

— Ә, — тине Юлия. — Вася Глушицала инде, ул бында килмәй торғандыр.

— Юҡ, ул Землянка яғына китергә тейеш.

Мурзин, түш кеҫәһенән сәғәтен сығарып:

— Өсөнсе ярты, — тине. — Юлия, беҙҙең, егеттәрҙе лә "врачтарҙан ҡаратып үткәреп алырға кәрәк. Улар:: «Ниңә беҙгә врач, беҙ доброволецтәр», — тиҙәр ҙә, барыбер, ҡаралһындар, — тине.

— Ниңә, бик һәйбәт булыр. Был комиссия түгел; бит, — тине Юлия. — Ҡурҡмағыҙ, «негоденгә» сығармабыҙ берәүегеҙҙе лә, — тип көлдө.

— Ә беҙ сығарһағыҙ ҙа сыҡмайбыҙ, — тип кәлештөләр егеттәр.

Улар бөтәһе лә таралыштылар. Мурзин военкомаг янына барып килергә казарманың арғы башына китте. Юлия, Сәғди менән һөйләшә-һөйләшә, амбулаторияһы* яғына юнәлде.

— Сәғди ағай, күмәк һүҙгә әүрәп, һорашмай ҙа торам, Шәмсиә һаумы һуң? — тине.

— Шәп, шәп ул. Балалар ҙа үҫә. Ике малай, бер ҡыҙ..

— Яҡшы. Юл тура килһә, күреп сығам мин уларҙы..

— Күр, Юлинька, күр, — тине Сәғди. — Беҙ ҡайтҡансы һау торһондар инде семьялар ҙа. Тиф менәш ауырыштыра башланылар.

— Шулаймы ни?

— Эйе, эйе. Бына Мурзиндең ҡатыны тиф менән сирләп үлде. Бахырҙың ике ҡыҙы етем ҡалды.

Юлия болоҡһоуҙан ҡойолоп төштө. Башта, ни тип тә әйтә алмағандай, өндәшмәне, һуңынан:

— Күптәнме? — тине.

— Юҡ, бер йома ла юҡ әле. Мурзин шулай итеп, ғүшерлек иптәшен күмеп сығып китте. Шуға күрә, беҙҙе лә шрачтан үткәрергә тырыша ул.

Юлия Мурзиндең бер нисек тә үҙенең ҡайғыһын белдертмәгәненә аптыраны, унын һайын ул уны ныҡ йәлләдае, уға булған хөрмәте көсәйҙе,

Доброволецтәр иртәгеһенә таң менән китеп барҙылар. Тәүлеккә лә тулмаған был шатлыҡтар, өмөттәр, билдәһеҙ ҡурҡыныстар менән тулған сәғәттәр Юлияның -йөрәген тәрән тулҡынландырып үттеләр. Уларҙың киткән ҫаҡта:

Смело мы в бой пойдем за власть Советов,
И как один умрем в борьбе за это, —

шы йырлағандағы кесле тауыштары Юлияның ҡолағын-_да әле булһа яңғырай кеүек...

## «АЛЫШ КӘРӘКМЕ, АТЫШ КӘРӘКМЕ!»

Ырғыҙ быйыл яҙ, һис ваҡытта булмағанса, ҡотороп ташты. Ҡыш буйы таш кеүек булып туңған боҙҙар, яҙғы ҡояштың үткер нурҙарында яйлап ҡына, беленмәй генә •иренеләр ҙә бер көндө, һис кетмәгәндә, күтәрелеп тә киттеләр. Эре боҙҙар, шартлап, герһөлдәп ярылдылар ҙа, шаулап күтәрелеп, көньяҡҡа юл алдылар. Улар, ҡайҙа >юл алырға белмәй бер урында ейөрөлеп аптыраған ваҡ • боҙҙарҙы ла эләктереп, алға елтерәттеләр. Ырғыҙҙың ярҙарынан ике яҡлап ярып төшкән текә гөрләүектәр шыяланған ҡарҙарын ошо боҙҙарға ҡуша һалып, бергә-•бергә ағырға ашыҡкан һымаҡ, донъя шаулатып килеп ҡушылдылар ҙа, йылғаны ярҙарынан аша таштырып, күтәреп алып киттеләр. Типһенлекте күҙ күреме ерҙән Шыу баҫты.

Боҙ ҡарарға, бүрәнә тоторға йыйылған кешеләр, бе-^еһенен, тауышын икенсеһе ишетмәй, ҡысҡырышып һөй-.ләшәләр ине.

Төш алдынан Ныязғолдоң быуаһы гәпөрт итеп йырылды. Ул, көсле боҙҙарҙың емертеп этеүенә сыҙамай, үҙенең киҫәкләнгән ҡара балсығын, сыбай һайғауҙарын, тал сыбыҡтарын туҙҙырып, күҙҙән юғалды.

Был быуаның ҡасан быуылғанын да белмәгән йәштәргә уның йырылыуы ҡыҙыҡлы бер ваҡиға булып тойолдо. Улар, зыҡ ҡубып ҡысҡырышып, һайһылдаю келөшеп, яр башына югерештеләр.



— Ана һайғау бара, ана бүрәнәһе китте!

— Ана, ана, ҡара әле, Хөснулла, Хеснулла, тим, күрәһеңме, рке яҡ сите лә ишелде!

— Күрәм, күрәм, их әңгәмә, бер нәмәһе лә ҡалманы!

— Ҡара әле анау тау кеүек өйөлгән боҙ'өҫтендә бер»' бағанаһы сосайып китеп бара,— тип шаулаштылар.

Ололар аҡрын һөйләшеп аптыраштылар:

— Бына хикмәт, егерме йыл ятҡан быуа быйыл еңелде бит.

— Бик ғәжәп инде, боҙ сит-ситтән шыуа ла китә торғайны. Быйыл ҡуйманы бит.

— Ҡар ҡапыл ирене шул. Хәйерлегә булһын инде.

— Эйе, яйлап иреп, аҡрын ташһа, һыу ергә күберәк. һеңә. Урожайға булһын инде.

Бисәләр үҙҙәренсә хөкөм йөрөттөләр.

— Иллә яҡшы булды! Бала-сағаны һыу тирәһенә< ебәрергә ҡот оса торғайны. Исмаһам, ағын һыуҙа йөҙөрҙәр.

— Шулай булмай ни. Ул быуа Ныязғол байҙың һыйыр көтөүе есөн генә кәрәкмәһә, халыҡҡа ни, ана сығыш. Анау йылды ни, Хәлимә килендең уртансы улын мунсатапҡырындағы умырыҡ эйәһе тартып алманымы ни?

— һин уны әйтәһең. Былтыр минең Сибәремде сәсенән эләктереп саҡ сығарҙылар бит. Юҡһа бөткәйне.

Ныязғолдоң мунса тапҡырындағы эйәле төбәк, төпһеҙ төпкөл тигән, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаға хәтәр һалып торған был упҡын, күпер китеп һыу тартылғас, өңөрөгөасылып, ҡурҡыныcы бөтөп ҡалды. һыуы йәшелгә әйләнеп, еҫте күбек, аҫты ылымыҡ менән тулып, һаҫыҡ еҫ таратып ятҡан был быуа һыуы ағып бөтеп таҙарҙы. Ырғыҙҙың башы бынан өс-дүрт кенә километрҙа. Унан сылтырап ҡына сығып, йырлап ағып ятҡан көмөш һыу, иркен юл алғанға шатланған һымаҡ алҡынып, ялтырап аҡты ла, көньяҡҡа табан китеп, Пугачев ҡалаһына килә> торған пароходтарға ярҙамға ашыҡты.

Ныязғол, ғәҙәттә айырым етди мәсьәләләрҙе тынысхәл итергә булһа, залдағы йомшаҡ диванға, ерҙән түбәг» терәл/ән олр кеҙге ҡаршыһында йәйелеп ултырып уйлай[1] торғайны. Уйҙар ашығып югерәләр, тән ял итә. Көҙгө эсендә ҡара бәрхәт кәзәкейенең балыҡ һүрәтле көмөш ҡаптырмалары ялтырап, йомшаҡ ситектәрҙең ҡуныста-

ры аҙ ғына һырланып, ҡара таҡыя аҫтынан һыҙылған
ҡара ҡаштары кирелеп, эрелек менән янған тыныс күҙ-
ҙәр йылмайып, Ныязғолға ныҡ ышаныс биреп, уның һү-
>рәте — игеҙәге ултыра. Ул әле күҙен йомоп, әле аяҡта-
$>ын һуҙып ебәреп, әле ҡулын түңәрәк ҡорһағы өҫтөнә
ҡаушырып уйлай; асыҡ ҡарарға килгәс, бер иркенләп
•иҫнәп йылмая ла урынынан тора, йә булмаһа Миңлекәй-
:ҙе янына саҡырып, уның менән бер аҙ әңгәмәләшеп, күҙ-
гөләге үҙҙәренең шәүләләрен ентекләп тикшереп, көлө-
шөп, урындарынан ҡуҙғала торғайнылар.

Нисәмә йылдар буйынса шундай рәхәтлек, ләззәт
'биргән был поза уға бөгөн ярҙам итмәне. Ул уйҙарын
'бер нөктәгә тупларға ни тиклем тырышһа ла, улар ипкә
«илмәнеләр. Тарҡалып, сыуаланып, бер-береһенә ҡаршы
•килделәр ҙә, төйөндәр сиселмәне, алға тәгәрәмәнеләр.
3Зулдыра алмағас, ул ике ҡулын артҡа ҡуйып, залда
•ары-бире йөрөй башланы.

Был ни хәл? Ҡартлыҡмы? Арығанлыҡмы? Әллә
ймайҙың һуңғы ваҡытта атаһының бөтә теләктәренә
ҡаршы төшөп, кирегә һүтеп тороуымы, ул осона сыға
-алманы. Сөнки был сәбәптәрҙең береһе лә теплө түгел,
ул уларҙы теләгән минутында үҙенсә төҙәтә ала. Ләкин
•ул үҙенең үткер аҡылы менән, тормошта йыйған күп
тәжрибәһе, бөтә барлығы менән, үҙе һис теләмәгән, йә-
«е-тәне менән ҡаршы, шул уҡ ваҡытта һис бер көс менән
ҡире ҡаҡлыҡтырыу мөмкин булмаған бөйөк бер кестец
•үҙенә табан ауыр баҫып килгәнен хис итә ине. Эйе, ул
'бик ҙур көс. Ҡаты күк күкрәй, йәшен йәшенләй, ҡойоп
•ямғыр яуа. Болоттоң ҡуйылығынан, йәшендең үткерлеге-
нән, силәкләп ҡойған ямғырҙан шундай ҡурҡыныс була,
нбына-бына хәҙер, секунд эсендә йәшен уҡтары башыңа
тондорор ҙа, мәңгегә көл булырһың кеүек тойола. *Ул*
«ваҡытта тиҙ генә алланы иҫкә төшөрәһең, иҫтә ҡалған
<5өтә доғаларҙы уҡып уға һыйынаһың, унһщ берлегенә,
көслөлөгөнә, Мөхәммәттен. пәйғәмбәрлегенә иман килте-
рәһең. Изгеләрҙе мәҙихләргә лә онотмайһың. Щунан көн
•аяҙып, ҡояш ялтырағас: «Алла ярҙам итте, уның рәхмә-
те бик киң»,— тип уны яңынан бер иҫкә алып ҡуяһың.

Ныязғол йөрөүенән туҡтаны, диванға ултырып ҡара-
«ы. «Ә хәҙер? Алдында һис бер кәртәне белмәй, һис бер
тоткарҙы танымай алға ынтылған был ҡурҡыныс көстән
тсайҙа ҡасаһщ, кемгә таянаһың?» Уның хәтеренә кисә
зшске ваҡ, ләкин күңелһеҙ бер ваҡиға төштө. Уның иң



бәләкәс дүрт йәшлек телдәр ҡыҙы Фәүзиә, әллә ниндәй
балаларҙан отоп алған йырҙы тәтелдәп йырлап, бүрәнә.
өҫтөндә ултыра ине:

Алла тиҙәр, алла тиҙәр, ул аллаһы ҡайҙа, _ти.
Большевиктен. ҡоралынан ҡуркып ситкә тайған, ти.

Ул, балаһының таҡмағын әллә ниндәй шомло хәбәр-
һымаҡ күреп, асыуланды. Ғүмерендә бе.р балаһына
тырнаҡ менән сиртмәгән был атай ҡыҙының сикәһенә»
сәпәп ебәрҙе. Ҡыҙының үкереп илауына Миңлекәй юге-
реп сыҡты ла, балаһын әрсәләп алып, иренә екерҙе:

— Улни эшләүең тағы? Аҡылдан яҙҙыңмы? Әллә ү^
башыңа ҡотораһыңмы?— Миңлекәй ҙә ҡартына беренсе-
тапҡыр ҡаты һүҙҙәр әйтте. Ныязғол, ошо хәлде хәтер-
ләп, тағы тороп йөрөй башланы. «Ысынлап та, баланың
ни ғәйебе бар? Ул, тутыйғош һымаҡ, ни ишетһә, шуны;
ҡабатлай». Ул тәҙрә янына барып туҡтаны. Әллә ҡай-
ҙарға тиклем йәйелеп яткан уның донъяһы бегөн, уты.
һүнгән усаҡ һымаҡ, тып-тын ята. Ике молотилка, ҡарға
күмелеп, аҡ эҫкерт һымаҡ ултыралар. Элек уларҙыг
һалам менән ябып ҡалдыра торғайнылар. Быйыл күҙ үҙе
өйҙә тормағас, ҡараусы булмаған. Ялсылар ҙа бөттө.
Тамаҡ ялына йөрөгән бала-саға көн уҙһын тип кенә<
эшләй. Бесән бәйләткес күптән тутығып ята. Ун етенсе
йылды яҙ башы уҡ, батша төшкән хәбәрен ишетеп, бөтә-
ҡаҙаҡтар ҡасып ҡайтып бөттө. Уларын да рәтләп булыр-
ине әле, баш ҡайғыһы булмаһа. Ул, тәрән уфлап, тағЫ'
диванға гөрһөлдәп барып ултырҙы. Башын һыйпап, та-
ҡыяһын артҡа һыпырҙы. Күҙгөләге Ныязғол да, ҡоба-
раһы осоп, ҡашы, күҙе емерелеп уға ҡарап ултыра ине.
«Имай ҙа ыңғайға килмәй. Ауыл халҡына, ағай-энегә-
булһа ла, һыйыр таратып биргәс, тауыш-тындары баҫы-
лып ҡалғайны. Имайға әйткәс: «Юҡ менән булаһың.
Биш-алты кеше менән бөтә илдең ауыҙын тығып булмай"
ул. Иң яҡшыһы бөтә байлыҡты тупларға ла аҡтар ме-
нән йә Себер яғына, йә кеньяҡка китергә кәрәк, ти.
Шунан, берәй сит илгә китеп тороп, Әрәсәйҙә Совет
власе бетҡәс, кире ҡайтырға булыр, ти». Ул да йәш бул-
һа ла яңылышты. Ул ситкә ҡасыу ун һигеҙенсе йыл баш-
тарында яҡшы ине. Мәҫәлән, чехтар заманында ла, һис
юғы, Колчактар Ҫамарға яҡынлаған саҡ булһа ла ярай<
ине әле. Ул ваҡытта ул үҙе лә уларға ныҡ таянды.
Уларҙың власен мәңге торор шикелле күреп, ғәмһе^

ятты. Быҙаулыҡтың Вагапичтәр, Кузьмин байҙар һәм 'башҡа бик күптәр, сит илгә сығып китеп, аҡ һаҡаллы ҡарт булдылар. Ә беҙ— ахмаҡ! Колчак кире сикмәй был тирәлә оҙаҡ торғанда ла был тирәне большевиктәрҙән таҙартып була ине. Юҡ бит. Китте. Фәрите лә шул, ниндәй •булған егет ине. Колчак армияһында Себергә китеп юҡ *булды. Хаятты ла бик яратҡайны. Уға Хаятты биреп ;кейәү иткәндә, ни тиклем яҡшы була ине. «Бабай, һау булһам, онотмам», тине лә бит. Ҡайҙа инде ул. Булған бала ине. Ырымбурҙа кадетский корпус бөткән. Колчак дивизияһында полковник. Добровольный б.елогвардеец. ;Их... Хаты ла юҡ. Бер емөт булыр ине. «Большевиктең ҡоралынан ҡурҡып ситкә тайған, ти». Тфү!.. Ни эшләп әле был йыр һаман онотолмай, тел осонда урала?»

*Уның уйҙары, ары киткән һайын, өмөтһөҙ юл алды-.лар. Күңеле емөт менән тулы саҡтар елгә осто. Кире ҡайтмаҫтармы икән ни? Күптән түгел генә бит әле ул, батша төшкән херриәт менән елләнеп, Учредительный собраниеләргә барып йөрөнө. Уға унда дөйем күтәренке шатлыҡ менән ҡанатланып, башҡа байҙар кеүек, кәперәйеп йөрөргә тура килде. Ул, башҡалар кеүек үк, бөтә көсөн һалып эшкә керешә. Октябрҙә большевиктәр власте ҡулға алыу менән, уларға ҡаршы көрәшкә сыҡты. Терлө яҡтан илде ҡамап алған аҡ армиялар, интервенттәр бик ҙур көс ине. Уларға булған ышаныс, уларға булған таяныс шикһеҙ нигеҙле ине. Болыпевиктәрҙең былай^һәр ерҙә еңеп, төпләнә барыуҙары хәҙер бына шул ышанысты ,ныҡ ҡаҡшатты. Яҙ башында ғына ниндәй мыҡты егеттәрҙе вербовать итеп аҡтарға оҙатты. Ул Ырымбурҙа, Имай менән икәүләп, Колчак, Дутов вәкилдәре менән юсрашҡан саҡта, бөтә Николайский өйәҙен күтәреп эйәртеп килергә вәғәҙә биргәйне. Ул тырыштырып ойошторҙо ла бит, Фәрит вәғәҙә иткән ваҡытында уларҙы алырға килмәне. Баҡһаң, улар үҙҙәре кире сиккәндер икән. Ныязғолдоң ойошторған кешеләре лә бик аҙ булды шул. Бөтәһе ун бишләп кеше ине. Улары ла ҡыҙылдар менән •бәрелешкән саҡта, Гурьевтән дә үтә алмай ҡырылып' ҡалдылар. Башта ул, туп-тура иғлан таратып, кеше йыя торғайры. һуңынан ул да мөмкин булмай башланы. Ҡурҡыныс ине. Берәмләп кенә саҡырып димләне. Бирелгән өлкән вәғәҙәләр, офицерлек дәрәжәһе, бөгөндән үк Ныязғол кетеүенән тотонорға берәр баш ат уларҙың -бик аҙыш ҡыҙыҡтырҙы. Ҡайһы бер йыуаштары ҡыйма-



йынса, уйлап ҡарарға вәғәҙә биреп китһәләр ҙә, күбеһе^ туранан-тура ҡарышты.

— Юҡ инде, бер һуғыштан ҡотолоп торғанда, үҙең теләп яңынан китеп булмай инде,— тинеләр.

Ныязғолдоң:

— Аҡтар килгәс, барыбер мобилизовать итерҙәр, былай почетныйыраҡ була,— тип өгөтләүенә улар ньге торҙолар:

— Эй, уныһы булмаҫ инде. Аҡтар ҡайҙа ла, беҙ? ҡайҙа. Ҡойроҡтарын һыртҡа һалып ҡастылар!

— Ҡыҙылдар барыбер армияға мобилизовать итәләр,— тигәс, улар етди уйланып күҙгә тура ҡарайҙарг:

— Ә, уныһы икенсе эш,— тип ҡыҫҡа яуап бирәләр_ Ике-өс көн үтеүгә шулар уҡ Ҡыҙыл Армияға добровольный киткән, Чапайға ҡушылған тигән хәбәр ҡалдырып, ауылдан юҡ була барҙылар.

Ныязғолдоң башы ҡаңғырҙы. Ул тағы, йәһәт атлап^ залды мөйөштән мөйөшкә аҙымлап үлсәй башланы.

Бүтәне бүтән. Бынау Асатай һуң, Асатай! Кеҙгә« бысраҡта тифтән саҡ тороп ҡына армиянан ҡайтып килде. Өйөндә һыйыр мөгөҙенә элер нәмәһе, йорт малынав бесәйе лә юҡ. Ҡатыны тиф менән ята. Ике балаһы ас,. утынһыҙ туңып ултыра. Ныязғол, башҡаларҙы ятһыныгт,, улар менән һаҡланып, һүҙ урағытып һөйләһә, Асатайҙы үҙ күрҙе. Уға туранан-тура хәбәр һалды:

— Йә, энем, етеҙлегең бар. һуғыш һөнәренә өйрәнеп ҡайттың. Батырлығың тағы етерлек. Әйҙә, киләсәктә. бер кеше булып алайым тиһәң, добровольный яҙыл. Бөгөндән ат, семьяңа аҡса, аҙыҡ, Яйыҡҡа барып етеү менән баштан-аяҡ кейем бирерҙәр,— тине.

Әйтерһең, Асатайҙы бик ҡаты мәсхәрә һүҙҙәр менәа һүктеләр. Әйтерһең, битенә төкөрҙөләр. Ул ни тип яуапларға белмәй, телдән ҡалған кеүек, өнһөҙ ҡыҙарып,. ҡара янды. Ырғып тороп иҙән уртаһына баҫты. Ыскынған шинелен ҡымтып, теймәләрен ашығысәлде. Башындағы бейек күк папахаһын ныҡ тартып баҫа кейҙе лә, һике ситенә ике ҡулы менән таянып, Ныязғолға ырғып: ташланырға әҙерләнгән кеүек, күҙҙәрен ҡыҙыл ҡан баҫҡанса аҡырайып текләп, ухылдап торҙо. Шунан, бер аҙ хәл алған кеүек булып, тамаҡ төбөнән ҡысылып сыҡҡан, ҡарлыҡҡан тауышы менән:

— һин кем менән һөйләшәһең?— тине.

Ныязғол аптырап китhә лә, сер бирмәҫкә тырышып, йомшаҡ йылмайҙы. Мендәр өҫтөндә аҙ ғына ҡуҙғалып:

— Йә, ниңә ҡыҙаһың, ҡустым? Мин hине беләм, hин мине беләhең. Бында бер кем дә юҡ. Көслөк түгел, кәгнәш. Үҙеңә яҡшылыҡ,— тине.

Асатай уға hөйләп бөтөргә ирек бирмәне:

— Кем менән hейләшәhең, әйт!— тине.

— Асатай ҡустым менән. Атай урынында ултырып...

Асатай тағы уны бүлде:

— Шулаймы ни, ҡустыа булдыммы ни хәҙер? Туғыҙ йыл көтөүсе — хәйерсе Асатай булдым, әйҙә шулай ҡалhын! Мин hиңә бер ваҡытта ла ҡусты булғаным юҡ, булмам да!

— Ярай улай булhа, кем тим hуң?—Ныязғол тыныс «булырға тырышты.

— Минме, әгәр ишеткең килhә, мин младший командир Красной гвардии...

— Бик яҡшы, ҡыҙышмай hөйләшәйек. Улай командир ҙә булғас...

— Шул. Танымаhаң, таны! Мин hинең менән hөйләшеү түгел, йөҙөңә лә текөрмәйем. hин улай контр hүҙ hөйләргә мине алйот тип уйлама! Беҙ хәҙер беләбеҙ! hеҙҙең кеүек буржуйҙар менән арыҫландарса көрәшәсәкбеҙ. Абай бул. Атыш кәрәкме, алыш кәрәкме!— Ул ишекте шарт ябып сығып китте.

Был осрашыу Ныязғолдоң бөтә аҙаккы өмөтөн ҡаҡшатты. Хәлен алды. Ул эсенән: «Ах, ас бет, ҡайhылай әсе тешләй»,— тип мыҫҡыл менән көлөп тынысланырға уйлаhа ла булдыра алманы. Асыуынан ҡаиы ҡыҙҙы. Килеп сыҡмаҫ инде берәр аҡ отряд. тип тешләнде.

Унын шулай тынысланам тип уйлаған ғына сағында, онотолоп барған бер күңелhеҙ ваҡиға унын иҫенә, йәнле ҡартина кеүек, кисә генә булған эштәй булып килеп төштө. Үткән көҙ, ҡыҙылдар Уральск ҡалаhында ҡамауҙа яткан саҡта, ул ҡыҙылармеец башҡорт егеттәре араhына барып уларҙы димләп йөренә:

— Ҡустылар, hеҙ былай юкка ҡыялмағыҙ. Аҡтарға бирелегеҙ. hуңынан бер нәмә лә булмаҫ. Үҙем аҡтарға әйтеп яҡлашып алып ҡалырмын,— тине.

Улар башта өндәшмәнеләр. Ышаныcһыҙ, иғтибарhыҙ күҙ ташланылар ҙа үҙҙәренең эшендә булдылар. Бер көнө атыш баҫылғандан hуң Ныязғол казармала ҡыҙылармеецтәр күберәк йыйылған урынға барып, hаулыҡ



hорашты, кеҫәhенән сығарып, яҡшы папирос өләште. hүҙҙен, ғәҙәттәге башланыуы бөткәс, бер аҙ тынып торғандан hуң, ул үҙенең элекке тәҡдимен ҡабатлаиы. Ләкин уны бер кем дә юнләп элеп алып китмәне. Көнө-төнө оборонала йоҡоhоҙ талсығып, асығып арыған ҡыҙылармеецтәр йоҡомhораған төҫ менән, аяҡтарын hуҙған кейө ултырып ял итәләр ине. hүҙ еҙөлдө. Тик папиростың төтөн болоттары ғына пуфылдаған ауыҙҙарҙан сығыш үргә, ҡоромло стена, үрмәксе аулы түбә, мейөштәргә үрләнеләр. Ныязғол ашыҡманы, кеттө. Ҡыҙылармеецтәрҙең тартып бөткәне ергә төкөрөп, тәмәке төпсөген үксәhе менән баҫты. Тынлыҡты боҙоп береhе:

— Ағай, hин үҙең ҡайhы яҡтан булаhың?— тине. Ул бер бик етди, шул уҡ ваҡытта үткер, шаян, янып торған ҡара күҙле башҡорт егете ине. Ул, ике ҡулын шинель кеҫәhенә тығып, яғылмаған hыуыҡ мейескә терәлгән. Тауышы бик тыныс.

— Бәй, мине белмәйhеңме ни? Боронораҡ Ныязғол старшина ти торғайнылар. Хәҙер, әлбиттә, старшина түгел инде. Имел волосе, Айҙаҡай ауылы. Ә hин үҙең ҡайhы яҡ hуң? Таныгандай ҙа булам. Хәтерләй генә алмайым.

— Юҡ, мине күргәнең булмаҫ. Мин дә Ырғыҙ егете. Хужабай волосе, Бөрйән ауылы. Ишдәүләт тигән бер бик данлы тимерсене ишеткән булhаң, шунын улы булам. Элек ярлы Йосоп ти торғайнылар. Хәҙер hалдат Йосоп, большевик Иосоп тип йөрөтәләр.

Башта ысынға оҡшаған был яуаптың hуңынан Ныязғолдо көлөп сәнсеүгә әйләнеүенән, баштарын баҫып, стенаға hейкәлеп, сүкәйеп йоҡомhорап ойоғандар барыhы ла ҡыҙыҡhынып йылмайып ҡуҙғалдылар ҙа быларҙың hүҙҙәрен тыңланылар.

— Улай булғас, беҙҙең башҡорттар икәнhегеҙ.

— Дөрөҫ. Башҡорттарбыҙ. Ә hин Ныязғол старшина, башҡорт булғас, башҡортса көрәштең бетә ҡағиҙәләрен беләhендер әле.

— Белмәҫкә ни, бик беләм. йәш саҡта үҙем көрәшә торғайным, hин дә көрәшәhеңме әллә?

— У, маҡтаныуҙан булмаhын, Хужабайҙа мине йыҡҡан кеше булманы.— Йосоп, ҡулдарын кеҫәhенән сығарып, ҡоласын йәйеп ебәрҙе. Ькынлап та, ул мыҡты, батыр кәүҙәле, яурынтаҡ оҙон буйлы ине.— Улай булғас, көрәш ҡағиҙәләрен белгәс, hин инде, Ныязғол старшина,

көрәшкән саҡта аяҡ салып йығырға маташма! Ул бик ҙур хаинлек һанала.

— Дөрөҫ. Ләкин...— Ныязғол ҡулайлы һүҙ эҙләне.

— Дөрөҫ икәнен белгәс, аяҡ салма беҙгә.

Ныязғол ҡыҙарҙы. Иосоп дауам итте.

— Көрәшкәндә «эт йығылыш» тағы ла иҫәпкә инмәй. Ыыҡҡанда күтәреп һуғырға ла, арҡаһы менән зыңк иттереп бәреп төшөрөргә кәрәк. Янынан ынтылмаҫлыҡ булһын!

Армеецтәр шаулашып келөп ебәрҙеләр.

Ныязғол көслек менән йылмайҙы:

— Дөрөҫ, ҡустым, ул һүҙен дә дөрөҫ,— тине.

— Беҙ хәҙер билдән алышып торабыҙ. Күтәреп һуҡҡан саҡта аяҡ аҫтында оронсоҡлап йөрөүселәргә лә яҡшы уҡ эләгер.

— Афарин, ҡустым, телгә оҫта икәнһең.

— Беҙ — ҡыҙылдар. Беҙҙең телебеҙҙән дә килә, ҡулыбыҙҙан да килә.

Быға тиклем һүҙҙе уйын-көлкөгә һабыштырырға булып, тыныс булырға тырышҡан Ныязғол һуңғы һүҙҙәрҙән ағарынып китте.

— Хәҙергә ҡулығыҙҙан килгәне күренмәй ҙә күренеүен.

— Аҙ ғына сабыр итегеҙ. «Ашыҡкан ашҡа бешкән», ти.

Ныязғол был өҫтөнлөктө күптән онооторға теләһә лә, ул хәҙер уны асыҡ хәтерләне. Был хурлыҡтан ул шартларҙай булып, «йә, хәҙергә хушығыҙ» тип, казарманан сыҡты. Ул сығып баҫкыстан да төшөп өлгөрмәне, ҡырҡилле егеттең бетә йортто шаулатып, тәҙрә быялаларын зырылдатып, хахылдашып көлөшкән тауыштары ишетелде. Ул йортто әйләнгәндә, тәҙрәнен, ватыҡ елгөләренән:

— Иллә шәп иттең, йосоп!

— Әммә ҡыҙыҡ та булды!

— Ну килеште бохыйҙа! Ул туйған ҡандаланы бынан һытып сығарырлыҡ икән!— тигән береһенән-береһе әсе һүҙҙәр менән көлкө ҡатыш шаулаған тауыш унй оҙатты.

Ул яңынан диванға ултырҙы ла йоҙроғон ҡыҫып төйҙө. Сенки ул Уральскиҙә был взводты һәр ваҡыт күҙ алдында тотоп, аҡтар килеү менән ин, тәүҙә улар менәп хисаплашырға, бигерәк тә сәсән Иосопто тотторop аттырырға уйлап, көтөп йөрөнө. Ләкин күп тә, үтмәне, Чапа-



,£B дивизияһы, буран уйнатып килеп, Уральскиҙәге аҡтарҙыш блокадаһын еҙөп, ҡыҙылдарға ҡушылып, аҡтарҙы г^өрөп алып барып, һепереп түкте лә, донъя шаулатып ары китте. Уральскиҙәге дуҫ-иштәрендә башын һаҡлап ҡалған Ныязғол ипләп кенә өйөнә ҡайтты. Ләкин "ҡоралын ташламаны. Халыҡты ҡыҙылдарға, Совет власенә ҡаршы ҡотортоуын дауам итте. Ул әле бик күп эштәр күрһәтмәксе ине. Ә хәҙер бында ла Асатайҙар килеп саҡырыу ташлайҙар. «Алыш кәрәкмё, атыш кәрәкме, имеш. һе!..» Был осрашыуҙан һуң Ныязғол тынын эҫкә тартты. Асыҡтан-асыҡ йөреүҙе ташланы. Үҙенең йыйнаған кешеләрен төндә фургон менән оҙатты ла, ^ланғас ҡул менән бындай эштәргә ҡатнашыуҙың ҡурҡыныс була барғанын уйлап, туктап торҙо. Совет вла-<;енең ныҡ төпләнеүендә уның шиге ҙур ине. «Тик бер аҙ кетөргә кәрәк. Тағы берәй яҡтан берәй генерал ҙур армия менән килеп, тағы ла Самарҙы йәки Бызаулыҡты ғына алһа ла, был тирәлә ҡораллы отрядтәр туплауы «нел булыр. Тик ошо арала тик ятмаҫҡа, Ырымбур яғынамы, ҡайҙа булһа ла барып, бер-ике боевой офицер килтереп, ҡораллы отряд тупларға кәрәк булыр»,—• тип ҡарар итте.

Ул ошо планының тәртибен ентекләп өлгөрмәне, би•сәләр яғында шаулашып һейләшкән тауыш уның уйын бүлде. Ул, эште бөтөнләй ослағанға иҫәпләп, үҙе лә шул яҡҡа сыҡты.

— Рәхимә, Миңлекәй, ҡана, ҡайһығыҙ бар! Аш юндәгеҙ. Мин бөгөн, кисләтеп булһа ла, кейәү өйҙә саҡта, Таллыға барып киләм, хәҙрәт ҡоҙа ла ҡайтманымы икән.

Уның тауышына Рәхимә ашығып килеп инде.

— Әллә ҡайҙа йөрөйһегеҙ. Ултырып ^һөйләшер кеше лә юҡ. Ҡана, ҡыймылдағыҙ әле, мин юлға сығайым!

Рәхимә, ғәфү үтенгән тауыш менән, йылмайып, үҙен аҡланы:

— Хәбәр тыңлап оҙаҡлап киттем дә.

— Ни хәбәр бар?

— Айбулат ҡайтҡан икән. Бер көнө Тимербулаттан аҫҡы ейгә тиҙәк ¥ашыттырғайным. Шуның өсөн егерме тиҙәк бирермен тигәйнем. Әле, ахылдап, шуны һорап югереп килгән. «Тиҙ бул. Тиҙерәк бир. Атайым ҡайтты!»— ти.

Ныязғолдоң йөрәге тибеүҙән туктаған кеүек булды. Ул Рәхимәнең хәбәре беткәнсе биш үҙгәрҙе. Тыны бөтөп,

яғаһын ыҫҡындырҙы, йыш-йыш тын алырға тотоноп, ашығып тибә башлаған йөрәген ҡулы менән баҫып ҡарап, сикәләренә сыҡҡан бөрсөк тирҙе һыпырҙы.

Унын, был хәлен абайламаған Рәхимә дауам итте:

— Бик ябыҡ, ти. Әллә ҡайҙан советтән ат биреп оҙатып килтергәндәр, ти.

— Ҡайһы яҡтан ҡайтты икән?

— Самар яғынан, ти. Өлкән нәсәлник булып киткән, тип һөйләгәндәре ысынмы икән, билендә алтатары ла бар, ти. Тимербулаты ҡыуанысынан ут баҫып сәсрәп тора: «Тиҙ ҙә тиҙ»,— тип ҡабаланып, хәбәрен дә һөйләп бөтмәне, тиҙәген күтәреп югерҙе.

Ныязғолға, «ауылға бер полк ҡыҙылдар килеп тулды», тип әйтһәләр, бәлки ул тиклем үк ҡаушамаҫ та ине. Ләкин кҙмә-кҙ килеп сәнсешерҙәй дошманы булған Айбулат комиссарҙың ҡайтыуы унын быуынын ҡаҡшатты, хәлен алды. Үлем алдындағы һымаҡ, унын тыны быуылды.

## ӨЙҘӘ

### 1

Гөлйөҙөм, әсәләренән ҡайтып, кепөһөн сисеп сөйгә элде. Өй ҙә, иртәнсәктән бирле яҡмағанға, һыуынып киткән. Балалары өшөп, бөршәйешеп, алама юрғанға уранышып ултыралар. Тик Тимербулат ҡына, өҫтөндәге терһәк, салғыйҙары ямау менән сыбарланған аҡһыл бумазый кәзәкейенен төймәләрен ҡымтып элеп, ҡул тирмәне янына тубыҡлап ултырып, уны дыһырҙатып бойҙай тарта. Был бойҙайҙы кисә ул, совет ейөнә барып, ярлылар комитете өләшә торған игендән өс балаға тейгән өлөштө тоҡсайға һалып алып ҡайтҡайны. Кисә әсәһе уны ағас килелә төйөп, елгәреп, тәмле итеп күзә бешереп ашатҡайны. Иртә менән ике таба ҡурмас ҡурып, аҡ майға бутап ашанылар. Ҡалғанын тартып, киске ашҡа ыумас ыуып бешерергә кәрәк ине. Тик аш ҡатығына кемгә барыщ килергә инде? Тирә-күршеләге һыйырҙарһыуалып бөттө. Үҙҙәренеке февралһеҙ быҙауларлыҡ тугел.

Гөлйөҙөм килеп инеү менән өлкән ҡыҙы Әлфиә:

— Әсәй, асыҡтым,— тине.

Әсәһе уны аҙыраҡ орошоп алды:



— һөйләнмә юҡты. Уҫлаптай башын, менән бәләкәсте ҡотортаһың. Ул өндәшмәгәндә, һин уныщ иҫенә төшөрөп ултырма инде. Хәҙер бына ағайың тартып бөтһен дә тәмле итеп аш бешерербеҙ.

Ҡыҙ әсәһен бүтәнсә йөҙәтмәне. Үҙенең сәсенә йәбешеп уйнай башлаған туғаны менән айпашты.

— Ғәйшә, тием, тартма сәсемде, ауырттыраһың бит.

Ғәйшә тыңламаны, һаман уйнаны.

— Ах, ялбыр, мин әле үҙенден ҡырҡмышынды йолҡһам!— Ул уны юрамал ғына сәсенән тартып сырылдатты ла:— Әһә, шулаймы ни, тик ят,— тине.

Гөлйөҙем улынан:

— Улым, әллә бегөн укыманығыҙмы, иртә ҡайтҡанһың түгелме?— тип һораны.

— Ниңә, укыныҡсы. Укытыусы ағай: «Иртәгә волоскә собраниегә китәм, мәктәпкә килмәҫһегеҙ», — тине. Эй унда укыу ҡыҙыҡ. Ул беҙгә бер яҡшы йыр өйрәтте. Көйе лә яңы.

— Йә, ниндәй, йырлап күрһәт әле?

Тимербулат, тирмәнен ҡуйып тороп, йырлап күрһәтте. Ул әсәһенә туп-тура ҡарап, уйланып, һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп алды.

— Тукта, бына былай икән:

> һайра, һайра, эй һандуғас, һайра, йыбат, күңелем ас,
> һайра, йырла, асылһын гөл, сәскә атһын алмағас.
>
> Йәшәһен, йәшәһен, шанлы ҡыҙыл ғәскәрҙәр.
> Йәшәһен, йәшәһен, шанлы ҡыҙыл ғәскәрҙәр.

Гәлйөҙемгә көй ҙә, йыр ҙа оҡшаны. Улынын ҡыйыулығы, зирәклегенән унын күңеле йомшап китте. Ул, Тимерҙең янына ултырып, уны иркәләп һөйҙө.

— Эй балаҡайым, ҡайһылай тиҙ отҡанһың.

—- Матур йыр бит, әсәй, эйе бит?

— Бик һәйбәт, көйө лә еңел.

—• Беҙгә укытыусы ағай уны күсертеп яҙҙырҙы. Тәүҙә үҙе ҡара таҡтаға яҙҙы, беҙ ун-ан күсерҙек. Шунан үҙе йырлап күрһәтте. Уныщ тауышы ҡалын, гәрөлдәп трра. Беҙ отоп беткәс, һабаҡтан һуң мәктәп ишек алдында шул көйгә йырлап, марш баҫып йөренөк. Укытыусы ағай үҙе: «Раз-два»...—тип торҙо.

— Бәй, улай булғас, һеҙ ҡыҙылармеец булып бөткәнһегеҙ инде.— Гөлйөҙем улына ҡарап, ҡыуанып йылмайҙы.

— Эйе, ҡыҙылармееҫ булабыҙ шул. Ҡаҙанҡаптыҫ малайы Ырыҫбай шагом йөрөгәндә яңылыша ла яңылыша. Шунан укытыусы ағай әйтә, ни ти: «Эй, Ырыҫбай, көйҙө тыңлап ҡына, иптәштәрең кеүек, тапҡыр ғына баҫып өйрән. Улай аяғынды ла йөрәтөргә өйрәтмәгәө, ҡыҙылармееҫ тә була алмаҫһың, союз молодежға ла алмаҫтар»,— ти. Ырыҫбай шуға ауыҙыш бәлшәйтеп илап барған була.— Тимербулат ҡыткылдап көлөп ебәрҙе.

— Ә һин дөрөҫ баҫтыңмы һуң!*

— Дөрөҫ.

— Ҡана, тартып беттөңме? Көн кисәүләй.

— Хәҙер, әсәй, саҡ ҡына ҡалды.— Ул тағы ҡул тирмәнен дыһырҙатты. — Әсәй, беҙҙең укытыусы ла атайым кеүек коммунист икән.

— Әллә. Ҡайҙан беләһең?

— Бәй, үҙе әйтте. Анау ял кенө өс ауылдан да укытыусылар килгәндә нардомда собрание булды бит. Ул шунда һөйләгәндә: «Беҙ, коммунистәр, халыҡтың алдында беренсе булырға тейешбеҙ, беҙҙең. большевиктәр партияһы бетә иҙелгән халыҡҡа, эшселәргә, крәҫтиәндәргә, бөтә халыҡҡа авангард»,— тип һөйләне. Әсәй, ул авангард тигәне ни нәмә була икән ул, ә?

— Белмәйем шул, улым. Беренсе тип әйткәс, халыҡтың алдынан йөрөүсе тигән һүҙҙер инде ул. Үҙең унан һорашһаң ни була һуң?

— Дәрескә барғас, һорайыш әле. һәйбәт ул беҙҙең, укытыусы ағай. Әсәй, мин союзға яҙылайыммы, ә?

Гөлйөҙөм, ярлы халыҡты яҡлап, Ныязғол һымаҡ, халыҡты иҙеүсе байҙарға ҡаршы йәнен-тәнен аямай ҡан түгеп һуғышыусы Айбулат кеүек коммунистәрҙе бер туғаны шикелле ярата. Уларҙыҫ ниндәй ауырлыҡтарға ла ҡарамайынса ирек, тигеҙ хоҡуҡ, ярлы крәҫтиәндәр өсөн ер-һыу алып биреү есөн, уларҙы ҡурсып, көстәрен йәлләмәҥ тырышыуҙарына ул ихлас һоҡлана. Күңелендә уларға айырым бер хөрмәт, ныҡлы ышаныс һаҡлай. Уларҙын. был оло көрәштә еңеп сығыуҙарына аҙ ғына ла шикләнмәй. Шуға күрә ул Совет власе тураһында саҡ ҡына ҡыя һүҙ әйтеүсе булһа, ундайҙарға теш-тырнағы менән ҡаршы тороп, советте яҡлай. Ул йөрәгенең иң тәрән ере менән большевиктәрҙең бик ҙур бер хәҡиҡәтте килтереүселәр икәнен хис итә ине.

Унын һандығы тебөндә Айбулаттың фронттан яҙғаи бер хаты әле лә һаҡлана. һандыҡ ҡутарған һайын ул уны, юғалмаһын әле тио, билдәләп ҡуя. Айбулат ул хатында: «Ат саба тип, эт саба, эт саба тип, бет саба, Колчак саба тип, Юденич саба, Юденич саба тип, Деникин саба. Беҙ уларҙың ат кеүектәрен дүрт яҡҡа һөрләктөрөп йығабыҙ. Эттәренең ҡойроҡтарын киҫеп, олотоп, ҡыуабыҙ. Беттәрен тырнаҡ менән һытабыҙ. Сөнки беҙ, большевиктәр, бөтә эшселәр, бөтә крәҫтиәндәр, бөтә иҙелгәндәр менән бергәләшеп, үҙебеҙҙең, социалистик Ватан өсөн һуғышабыҙ», тип яҙғайны. Ул хәҙер Тимербулаттын, да шундай уҡ берәр боевой нәмәгә яҙылырға теләгәнен күреп эсенән ҡыуаныслы эреләнһә лә, был союз молодежи тигән ҡатмарлы һүҙҙе үҙе аңламағас, улына тура яуап би-рә алмай уйланды. Ул ни нәмә була һуң?.. «Унда яҙылғас ни эшләйҙәр?» — тип һорарға тағы ҡыйманы. Әсәй башы менән шуны ла белмәй икән, тип уйлар тип тартынды. Шуға күрә ул:

— Тороп тор, балам, атайыҫ ҡайтҡас инерһең,— тип кенә яуапланы.

Тимербулат көйһөҙләнде:

— Эй, улай оҙаҡ була. Ҡасан атайым ҡайта әле,— тип һуҙҙы.

— Нишләп оҙаҡ булһын? Тиҙ үк ҡайта ул.

— Ҡайҙан беләһең, әсәй?

— Бик һәйбәт төштәр күрә башланым. Гел атайынды күреп һөйләшәм. Өндәге кеүек асыҡ күрәм.

Ләкин Тимербулаттың унын, был дәлилдәре менән генә ҡәнәғәтләнгеһе килмәне.

— һин атайым киткәне бирле шулай күрәһең. Ә ул һаман ҡайтмай. Унан, хәҙер төшкә ышанырға ла ярамай әле. Анау үткән йома кис килгән Таллы укытыусыһы Рәшит ағай: «Ул төшкә ышанып, тәрлегә ҡарап ҡурҡып йөрөү борондан ҡалған нәмә, иҫкелек. Көндөҙ ни уйлайһың, төшкә шул инә. Кеше үҙе йоҡлаһа ла мейеһе эшләп ята, шул төш була»,— ти.

Гөлйөҙөм көндән-көн үҙенән күпте белеп үҫеп барған улы менән һүҙ керәштереүҙе урынһыҙ һиҙҙе һәм уны хәҙер тиҙ генә еңеп булмағанын да аңлай ине. Шуға күрә һүҙҙе артыҡ оҙайтмай, ҡаҙанын йыуып, һыу ҡойоп, ут тоҡандырып маташты ла улына:

— Йә, улай булһа, ана шул укытыусы ағайындар Менән һөйләш тә яҙыл,— тине. Тимер, ҡыуанып:

— Ярар, әсәй,-—тине.

— Иә^ тиҙерәк тартып бөтә һал, — тине лә тәрән көрһөндө. Үҙе усаҡ ҡаршыһында сүкәйҙе.

— Әсәй, ниңә уфылдайһың?

— Арып киттем. Ошо арала олатайың менән оләсәйеңде ҡарай-ҡарай йөҙәнем, ашарҙарына юҡ, ни ауырыуҙан баш ҡалҡыта алмайҙар.

— Олатайым төптө ишетмәй. Кисә мин барып ингәс: «Әсәйең ни эшләп оҙаҡлап китте, тиҙерәк килһен»,— ти. Мин:

— Өйҙә юҡ әле ул. Ҡайтҡас килер,— тип ҡысҡырам, ул һаман үҙенекен һөйләй: «Әсәйең ни эшләй?» — ти.

— Ҡолағы әллә асылыр ҙа ул. Тиф менән ауырыған береһе тигәндәй һаңғыраулана ла төҙәлә. Үлеп киткәндәргә ҡыйын. Оләсәйеңдең хәле бик насар. Әҙәм була алмаç, ахыры.

— Әсәй, эй куп үлде лә инде кеше.

— Күп шул. Түбәнге остан төшөп иҫәпләгәндә генә: һиҙәйәт, уның бисәһе, ослобаш Хәким, Ҡаҙанҡап Абдулланың ҡыҙы Хәҙисә, Зариф, һыулы күҙ Хәбир, Тау Харис, Хапаза әбей — эй алла, ике ай эсендә ни хәтле кеше ҡуйҙыҡ. — Гөлйөҙөм уларҙы һанап бөкләй барған бармаҡтарын яҙып, улына табан боролдо. — һин дә бик буталып, теләһә кемдә ҡунып йөрөмә әле.

— Ниңә, әсәй?

— Фиршел килеп киткән. Был ауырыу бик йоғошло, тип әйтә, ти. Бик һаҡланығыҙ. Йыш кер йыуығыҙ. Мунсаға барығыҙ. Хәҙер бер ҙә дарыу юҡ, барыһын да фронтҡа ебәреп торабыҙ. Унда ла еткереп булмай әле тип әйтә, ти. Әйткәнде тыңла, малайҙар менән китеп, теләһә кемдә ҡунма. Әле үҙебеҙҙә, алама булһаҡ та, таҙалыҡ бар. Йыш йыуынып-сайынырға һабыны ла, утыны ла юҡ бит әле уның.

•— Улай булғас, Ныязғол байҙарҙың берәүһе лә ауырымаç инде.

— Уларға ни, ташҡа талыу тейәме!

— Әсәй, мин хәҙер уларҙағы аласаҡ тиҙәкте барып алып киләйемме?

— Ҡуй, йөрөмә. Бегенгә сытыр ғына яғып торорбоҙ. һыуыҡ бурандар алда әле. Декабрҙең саҡ ун туғыҙы ғына бит.

— Бөттө, әсәй, мә. — Ул, тирмәнде урынынан шыуҙырып, уның тирәһенә ҡойолған, сәселгән ондо усы



менән ҡоштабаҡҡа һыпырып, әсәһенә бирҙе. Үҙе, ниҙер көйләй-көйләй, сөйҙәге муҡсайын алып, дәфтәрҙәрен сығарып, яҙышырға әҙерләнде.

Быны күргән туғандары тиҙ үк уның янына килеп еттеләр. Уларҙың да ҡағыҙ-ҡәләм алып сыймаҡлағылары килә ине.

— Ағай, мин дә яҙып ҡарайым.әле?

— Эйе, һиңә ҡалды тағы!

— Ағай, бир инде? Саҡ ҡына яҙып ҡарайым.

— Кит, тим, Әлфиә! Әсәй, ҡара әле бынауҙарынды.

— Ҡуйығыҙ, бәпестәрем. Ағайың яҙышһын. һеҙ минең яныма килегеҙ. Хәҙер аш бешерәбеҙ.

Тимербулат йырын дауам итте. Үҙе һаман дәфтәрҙәрен ҡутарҙы.

Бейек, бейек баҫҡыстарға боролоп менә һалдаттар,
Ҡыҙыл ғәскәр ғәйрәтенән ҡан ҡалтырай Колчактар.
Йәшәһен, йәшәһен, шанлы ҡыҙыл ғәскәрҙәр.

Гөлйөҙөм ҡоштабаҡта ыумас ыуып әҙерләне. Ҡалған бер-ике ҡуш ус онон урап кәштәгә һалды. Усаҡта янмай быҫҡып, шыйылдап яткан тун, сытырҙы ҡуҙғатып өрҙө. Әсе төтен, кире ҡайтарып, уның күҙенә керҙе лә йәшен ағыҙҙы. Ул, өҫтөндәге ҡалын һарғылт ҡаты буҙ күлдәгенең итәген әйләндереп, күҙен, танауын һөрттө лә, итәк йөйҙәренең иҙелеп, тишелеп барғанын күрҙе. Быйыл йәй көнө үҙҙәренең ураҡҡа йөрөтә торған өлкән аҡ буҙ сатырҙарын боҙоп, үҙенә, балаларына күлдәк, ыштан теккәйне. Уның былай тиҙ туҙыуына аптырап ҡуйҙы ла, ҡояшта янып бөткән нәмә ни күпмегә сыҙаһын, тип уйланы. Ул, әлеге кейем туҙһа, башҡаса боҙор нәмә булмағанын да иҫәпләне. Советкә аҙыраҡ ситса тауары килгән, бик аптырағандарға өләшеп бирәбеҙ, тигәйнеләр. Ни эшләп һаман бирмәйҙәр икән? Буйлы нәмә, ти. Бер биш-алты аршын тейһә лә, күлдәк сығыр ине әле. Хәҙергә киң итеп, итәк тотоп, бөрөп тороп булмай инде... — Ул, уйын бүлеп, ишек алдында шығырҙаған аяҡ тауышына ҡолаҡ һалды. Улына боролоп:

— Балам, әллә атынды ҡураға индермәнеңме? — тине.

— Индерҙем. Бесән һалдым. Ниңә?

— Әллә ни шығырҙағанға әйтәм. Ҡапҡалыр шул, буран бит. Тәҙрә тоң. Бер нәмә лә күренмәй. — Ул усаҡ

йылыһына һырныҡҡан ҡыҙҙарының бәләкәсен алдына алды.— Эй бәпесем, өшөп бөткәнһең.

Ғәйшә, танауын тартып, һыуыҡ тәпәйҙәрен әсәһенең алдына йыйыштырып урынлашырға өлгөрмәне, шығырт итеп солан ишеге, уның артынса уҡ өй ишеге асылып китте. Өйҙәгеләр ни икәнен дә уйлап өлгөрмәнеләр, ялбыр бүркен, шинелен ҡар баҫып" киткән һалдат иҙән уртаһына баҫты, тирә-яҡҡа ҡаранып, аҡ тештәрен йылтыратып йылмайҙы ла:

— һаумыһығыҙ! — тине.

Гөлйөҙөм, балаһын урындыҡҡа баҫтырып, аһа тип ауыҙын асҡансы, Тимербулат йөрәге ярылырҙай булып ҡурҡҡан кеше шикелле:

— Атайым! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Улар өсөһө бер юлы уға ташландылар. Ҡосаҡлап, уның өҫтөнә һырыған ҡар киҫәктәрен үҙ өҫтәренә ҡойҙолар.

Гелйөҙем илай-илай келде. Кем ни тип һүҙ башларға белмәй өтәләнделәр. Тимербулат, атаһының сисеп тотторған бүркен алып, ҡайһы сөйгә элергә белмәйенсә тыҙған китаптарын тапай-тапай, урындыҡ буйлап югерҙе. Уның туң бейәләйҙәрен Әлфиә алып усаҡ еҫтенә йылыға һалды. Гөлйөҙөм, шинелде алып, ишек янындағы ағас сөйгә элде. Айбулат, уларҙың тотош ойпалауҙарынан бер аҙ бушанғас, тағы берәмләп һаулашты ла берәмләп үбеп сыҡты. Күҙ йәшен тамағына тейөлтеп, ҡыҫып һуккан йерәгеН тыйҙы ла ҡуш ҡуллап сәсен һыйпаны. Билендәге ҡайышын, йәшел гимнастеркаһын төҙәтеп, алға табан шыуған кабуралы револьверен уң яҡлап арткараҡ тартты, Ҡашаяҡ яҡта уларҙың был буталыштарына ғәжәпһенеп, ауыҙын асып ҡарап ултырған Ғәйшәгә ынтылды.

— Ай, минең бәләкәсем! — тип күтәреп алды ла ике битенән алмашлап үпте. Үҙе киткәндә сәңгелдәктә ҡалған, хәҙер дүрт йәшлек булған балаһын ҡулында тағы ла үргәрәк күтәреп, уны баштан-аяҡ ентекләп һөйөп текләне лә тағы күкрәгенә ҡыҫты: •— Ай, минең бәләкәсем!

Ғәйшә, үҙенең кескәй ғүмере эсендә беренсе тапҡыр күргән был кешенең киң күкрәгенә башын ҡуйып, өндәшмәй шымтайып ҡалды. Ҡалғандар, уларҙы уратып, шатлыҡлы шаулаштылар.



## 2

Элегерәк Баҡый мөғәллим, Баҡый шәкерт, хатта Баҡый хәлфә тип уҡымышлылығы менән тирә-яҡҡа исеме таралған, хәҙер инде уҡытыусы Баҡый, коммунист Баҡый тип танылған был кеше менән Айбулат беренсе тапҡыр яҡындан осрашты. Айбулаттың ҡайтҡан хәбәрен ишетеү менән, ул, ишекте киң асып, урамдағы буранды эйәртеп, шаулап килеп инде.

— һаумыһығыҙ, Айбулат иптәш,— ул, түргә тура ынтылып, Айбулаттың ҡулынан ҡаты ҡыҫып һелкте.— Мин уҡытыусы. Ишетеү менән югерҙем. Волоскә барырға тип ат эҙләргә сыҡҡайным. Бөгенгә китмәй ҡалып, һиңә килдем. Эш муйындан, иптәш!

Айбулат ҡаҙан быуы, самауыр боҫо менән йылынған өйөндә гимнастеркаһының иҙеүен ысҡындырып, бәләкәй ҡыҙын тубығына таяндырып, түрҙә аяҡ салып, семьяһы менән ыумас эсеп ултыра ине. Ул:

—• Әйҙүк, мөғәллим иптәш, үргә сыҡ,— тип үҙе түбәнерәк шыуып, түрҙән урын күрһәтте. Тимербулаттың уның тураһында ауыҙ һыуы ҡороп һөйләгәнен дә, ауылдан алған хаттарҙы ла күҙ алдына килтереп, ул Баҡыйҙы берҙән үк таныны.

Гөлйөҙөм, был хәлдәрҙең әле өнөмө, төшеме икәнен дә айыра алмаған кеүек, шатлыҡтан иҫереп, уйсан йылмайып, иренең һөйләгәнен йотолоп тыңлап, унын, йөҙөнөң һәр бер ваҡ һыҙыҡтарын ентекләп ҡарап ултыра ине. Тимербулат бер туктауһыҙ атаһына һорауҙар яуҙыра. Уның ғәжәп яуаптарынан иҫе китеп, күҙҙәрен ҙур асып, атаһына һырныға ине. Уҡытыусының килеп инеүе уларҙың шатлығын тағы йәнләндереп ебәрҙе. Хәбәрҙәр күбәйеп, тағы ла ҡыҙығыраҡ булып китте.

Гөлйөҙөм өйҙәренә беренсе тапҡыр ингән был уҡытыусынан башта тартынһа ла, тиҙ үк үҙләште. Уның ҡуйы ҡара сәсе, ағы еңгән ҙур ҡара күҙҙәре, эре шаҙраһы, кешегә тура ҡарап ҡысҡырып һөйләүе башта хатта ҡурҡыныс тойолдо. Ләкин ошо йәмһеҙ битте уның кешене үҙенә ылыҡтыра торған яҡшы ҡылығы, саф йөрәге, тура тәбиғәте ҡаплап ала ла уны бик һөйкөмлө күрһәтә. Ул ике һүҙҙең береһендә, әллә ҡайҙан көтәлмәгән йор һүҙ табып, көлдерөп ала. Баҡыйҙың, үҙ кеше кеүек бер ҙә инәлтмәйенсә, сисенеү менән үргә менеп китеүе, Айбулатты әллә ҡасан белгән дуҫы кеүек, үҙенең бетә эш-

тәре тураһында асыктан-асык һөйләүе, ҡайһы берҙә уға кәңәш биреүе Гөлйөҙөмгә айырыуса оҡшаны. Ул тағы ла рәхәтләнде. Бына хәҙер унын өйендә шатланыр, гөрләшер вакыт етте, Кеше килде. Айбулат менән ниндәй күңелле һөйләшеп, шаулашып ултыралар. Үҙе Айбулаттан күҙен алманы. Ябыҡкан. Танауы ҡырлы. Күҙ төптәре күк. һаҡалы етек. Гөлйөҙөм уны нык йәлләп ҡуйҙы. Яғаһы ла керләнгән. Юлда оҙаҡ килгәс ни. Үҙе алып ҡайтҡан йәшел тоҡсайында бер пар күлдәк-ыштаны, таҫтамалы, бер киҫәк кер һабыны бар. Кер йыуып алырға, үҙен мунса индерергә кәрәк. Хәҙер уны яҡшыграҡ ашатырға, ял иттерергә кәрәк. Әллә өйҙә оҙаҡ тора ала, әллә юҡ. Тағы саҡыртып алғансы, бындағы эштәрҙе юнәтергә тип ебәрҙеләр, ти. Кем белә, әллә бер йоманан, әллә бер айҙан саҡыртырҙар. Тағы китһә... Иртәгә үк ҡара тауыкты һуйып һурпа бешерергә кәрәк. «Өләшвн ашаһын, тиҙ ҡайта», тигән әбейҙәр һүҙенә ышанып, ике йыл буйы Айбулатҡа тип һаҡлаған ҡаҡ ҡаҙыһын көҙ көнө балаларына бешереп ашатып ҡуйыуына бегөн укенде. Эсенән үҙен-үҙе алйот тип орошто.

Ярай әле йәйҙән һаҡлап ҡуйған тоҙло майы, ҡыҙыл эремсеге бар... — Ул шул уйҙар менән үҙен бер йыуатып, бер орошоп, ыумас артынса елгөрткән самауырын ултырта һалып, ашъяулыҡ уратып Айбулаттың юлдан ҡайтҡан икмәген телеп һалды, май ултыртты, мәтрүшкә сәйҙең еҫен аңкытып, сәй яһаны. Ағас ҡалаҡ менән йөрөтөп һөт ҡойҙо. Самауырҙың боҫо балаларҙын. епкә теҙеп, түбәгә элгән ҡағыҙ селтәрҙәрен, ҡағыҙ суҡтарын елпелдәтте. Ҡыуыкһыҙ яҡкан бишле лампаның һөрөмө, быуға ҡатышып, өйгә еҫ тарата. Гелйөҙөм әленәнәле уның филтәһен баҫып төҙәтә тора. Үҙе Айбулат менән Баҡыйҙын һүҙҙәрен тыңлай.

— Эштәр бында ғәләмәт күп һәм ауыр булды. Былтыр бөтә волостә ауыл Советтәрен яцынан һайлап, көскә таҙартып, үҙебеҙҙең ярлы-ябағайҙан ярлылар комитете теҙөп кенә беттөк тигәндә, чехы килеп сыкты. Шунан Колчагы. Коммунистәр булһын, союз молодеждар булһын, добровольно яҙылып китеп бөттө. Бигерәк тә Әхмәҙизең китеүе билгә һукты. Совет эшен бик яҡшы алып бара ине ул. Ошо арала волостә лә һайлау үткәрергә тейешбеҙ. Шуның алдынан, числоның егерме бишендә, партсобрание билдәләнгән. һин унда бараһындыр инде?



— һис һүҙһеҙ барабыҙ. Миңә партия учетына баҫырға ла кәрәк. Волком секретаре кем?

— Зөфәр Мурзин. һин беләһен. инде уны?

— Беләм, бик беләм. Минең йылғы. Бергә үҫтек.

— Бергә үҫкәнһегеҙ, бергә көрәшкәнһегеҙ. Был турала ул да, башҡалар ҙа бик йыш иҫкә алалар.

Айбулат ҡыуаныслы көлеп ҡуйҙы:

— Булды ул беҙҙең йәш саҡтарҙа, — тине лә,—• продналог ңисек бара? — тип һораны.

— Йыйып оҙатып торабыҙ. Беҙҙең волостән һуңғы? айҙа ғына алты йеҙ самаһы оҙатылды. Көҙ көнө йыйылышта халыҡҡа фронт хәлдәрен һөйләп, һәр кем мөмкин тиклем ярҙам итһен тигәс, ике йөктән артык шөкәрә киптереп бирҙеләр. Күкәй, май ҙа байтаҡ йыйылды, һәр кем хәленән килгәнсә советкә килтереп тора. Бигерәк тә әбей-һәбейҙәр, бисәләр,— Баҡый йылмайып һүҙе» бүлде лә дауам итте. — Сәғиҙә инәй килгән булған, бер тоҡсай шөкәрәһе, бер йомғаҡ майы бар. Уны нығытыш төрөп теккән дә минә тапшыра: «Балам, берүк Исхаҡтың үҙ ҡулына тапшырһындар инде»,— тигән була.

Айбулат йәлләү ҡатыш көлдө:

— Бахыр,— тине.

— Шунан беҙ уға был күстәнәстәрҙен, тотош ебәрелгәнен, унда тик бер Исхаҡ ҡына булмай, унын кеүектәрҙең дә, Сәғиҙә әбей кеүектәрҙең дә миллионлап булғанын һөйләп биргәс:

— Йә, ярар, ярар, балам. Миңә ни, алйотҡа, шулай тыҡкап һөйләп күрһәтмәһәң, белмәйем шул, ти. Үҙе көлә, кәрәк булһа, тағы әйтерһегеҙ, ти.

— Тимерғәле олатай үҙе ни хәлдә? Уны һорашмай ҙа ултырам.

— Ул беҙҙең актив. — Баҡый шатланып тауышьш күтәрҙе. — Беҙ уны ярлылар комитетенә ағза итеп һайланыҡ. Бик тырыша. Тик һаулығы етмәй.

— Исхаҡтан хәбәр юҡ шикелле?

— Юҡ шул. Көньяҡ фронтта ине. Ул да фронттав ҡайтып кәләш алып ҡына өлгөрҙө лә, добровольно китте. Кулактар игенде йәшерә, малай. Ҡаҙанҡап һарайынан баҙын табып, илле бот иген алдыҡ. Үҙенә ун бот ҡалдырҙыҡ. Союз молодежи бер ҙә ҡуя торған түгел. Беҙҙең ауылдан ун ике малай, өс ҡыҙ — бик боевойҙар^ Гел шулар менән эш иттек. Йайыҡ яғынан тоҙ тейәп ҡайтып сауҙа итеүселәр бар. Беләһең инде, беҙҙә тоҙ яғг

ауыр мәсьәлә. Малайҙарға әйтеп кенә ҡуябыҙ. Бына һин фәлән ваҡытта, фәлән юлды күҙевдән яҙҙырма, тибеҙ. Мылтыҡ бирәһең инде, әлбиттә. Тора шунда. Өс көнмө, дүрт көнмө, төндәме — барыбер. Тотоп алып килә. Ә халыҡҡа тоҙ. Асатай ҡайтҡаны бирле миңә ҙур иптәш булды әле. Уны ауыл Советенә председатель итеп "ҡуйғанда бик яҡшы булыр ине.

— Әле кем һуң, насармы ни?

— Арғы ос һиҙейәттең улы Мөхәммәткирәй. Насар тип, әллә ни насарлығы юҡ юҡлығын. Йыуаиг. Уны шун:дай продналог-фәлән эшенә ҡуҙғатыуы һәлмәгерәк. Бы,на, мәҫәлән, берәүҙең йәшергән игене бар икәнен һиҙеп тораһың. Барайыҡ, эҙләйек тип әҙерләнһәң: «Кеше нәмә*he,* кеше илатып, үҙ ауылың», — тип ебей ҙә китә. Мәсьәләнең мөһимлеген тешенмәй. Башҡаға булдыра, эшләй. •Ә йәштәр бетөнләй башҡа. «Фронтҡа икмәк кәрәк, ҡалала эшселәр асығалар. Бында артыҡ иген бушҡа сереп •ята»,— тип бер генә һейләп төшөндөрәһең, өтеп ала ла китәләр. Шулай хәлдәр.

Улар, һүҙҙән туҡтап, эҫе сәйҙәрен һемерҙеләр. Бер аҙҙан Баҡый, Айбулатҡа ҡарап:

— Беҙ беҙ инде. Артта, тыныс шарттарҙа, эшләйбеҙ. Анау-бынау яҡка үтеп-һүтеп аҡ казак рустары отрядтәре бер талай теңкәгә тейә торғайнылар, уларҙы баҫтылар. Ә бына фронтта хәлдәр нисек бара әле?

— Фронтта совсем башҡаса инде ул. — Айбулат уйланып йылмайҙы ла, үҙ. башынан үткәндәрен ҡыҫҡаса ғына һейләне. — Унда залпым күтәреләһен, дә, ҡулдағы ҡоралды дошманға тоҫҡап, асыҡтан-асыҡ һөйләшәһен. Тәүге йылдарҙа империалистик һуғыштың ҡурҡыныс, .ауыр дәһшәтен елкәлә һөйрәп үткәрергә тура килде. Уның бөтә ауырлығын күтәргән һалдаттар, арыған нл •өҫтөндәге ҡушбаш сәмреғоштоң үткер тырнағынан ҡотолдоҡ, тип шатланды. Ләкин был шатлыҡта оҙаҡ иҫерергә тура килмәне. Ете башлы ялмауыҙ капиталистәр, Россияның бөтә ҡара көстәрен туплап алып, әллә инде •етмеш башлы ялмауыҙға әйләнеп, социалистик революцияның утын, ялҡынын ҡан менән баҫтырырға керештеләр. Төрле яҡтан ҡара болот һымаҡ баҫып килгән был хәшәрәт көстәр менән көрәшкә бетә илдең эшсе, ярлылары саҡырылды. Ошо сигналға яуап итеп, фронттағы һалдаттар мылтыҡтарын үҙҙәренең ысын дошмандары •булған капиталистәргә ҡаршы әйләндереп тоҫҡанылар.



Мине, Саратов лазаретендә ярам- төҙәлеү менән, кире 51рославль йәйәүле полкына оҙаттылар. Шунан, барыбыҙҙы ла алдынғы линияға алып барып ауҙарҙылар. Немец бомбаһы тағы яуа башланы. Мин тағы ла ҡулдан яраландым. Улай ҙа ярам еңел булды. — Ул, беләген асып, тәрән йөй күрһәтте. — Тағы ла санитар поезы менән Әстрханға оҙаткайнылар. Мәскәү вокзалында уҡ унан ысҡынып ҡалдым, ҡайҙа, ни етте поездарға зләгеп, Петроградҡа ҡарай һыпырҙым. Бына шул көндән бирле шунда йөрөп, ҡыҙылармееш булып алып, нисәмә фронтты үткәреп, әле бына аҙ ғына тынысланыу менән өйгә ҡайтыц, бындағы эштәрҙә ярҙам итергә ҡуштылар. Уком ҡарамағына ебәрелгәйнем, унда: «Бик яҡшы, үҙ волосеңдә кеше етешмәй, партиялылар бик кәрәк»,— тип, ревком председателе итеп ебәрҙеләр.

Баҡый ҡыуанды.

— Бик шәп булған, бик шәп. Беләһен, бит, эсер-фәлән кеүек этем һаяҡтарҙан баш ҡатты. Күп нәмәне аңлап бөтөп булмай. Юғарынан күрһәтмә килгәнсе, эште бында ашығыс хәл итергә кәрәк. Ә улар үҙҙәренекен эшләп ташлайҙар. Шунан буталыш китә. Ысынлап та, ныҡлы большевиктәр яңы ғына күбәйә башланыҡ. Бына йыйылышҡа барғас күрерһең әле.

Ул арала, артынан ҡыуғын төшкән һымаҡ ахылдап, Асатай килеп инде. Ҡарлы бүркен урындыҡка ырғытты ла:

— һау ҡайттыңмы, Айбулат ағай? — тип, уға ташланды.

Улар ҡосаҡлашып күрештеләр.-Айбулат, Асатайҙы ҡосағынан сығарып, ике ҡулы менән уны артҡараҡ этеп, баштан-аяҡ ҡараны:

— Бына һиңә Асатай! һин хәҙер бөтөнләй Арыҫланғәле булып киткәнһең бит. — Ул шатланып ҡысҡырып көлдө. — Молодец!

— Ә ниңә?!—Асатай кинәнеп келдө. — Иптәш комиссар, имею честь представиться, младший командир Ҡрасной Армии Чапаевской дивизии Арыҫлан Байкарин, — Ул шаярып, ләкин ҙур эрелек менән яурындарын артҡа ташлап, үксәләрен бер-береһенә шалт һуғып, һүҙҙәрен яҙып әйтеп, Айбулатҡа честь бирҙе.

Айбулат тағы ла күңеллерәк итеп, ҡалын тауыш менән:

— Вольно! — тип яңғыратты.

Барыhы ла хахылдап көлөштеләр.

— Бәләкәй төҙәтмә: яланбаш көйө честь бирҙең.

— Уныhы бик нык шатланғанға күрә ул, ғәфү ит!

— Икенсе төҙәтмә: мин хәҙер иптәш комиссар түгел, ревком председателе булам.

— Ә, унынына hин үҙең ғәйепле, күрешкәндә әйтеп күрешмәнең, иптәш ревкомГ

Улар тағы ла көлештөләр.

Тимербулат уларҙың былай күңеяле итеп осрашыуҙарына бигерәк ҡыҙыкты. Тештәрен ялтыратып, танауын йыйырып көлөп, улар араhында уралды. Уйынан: «Иртәгә үк союзға яҙылам», — тип ҡарар итеп ҡуйҙы.

Асатайға ла сәй яhанылар. Улар, хәҙер өсәүләшеп геүләшеп hөйләшеп, бер-берећенә хәбәрҙәрҙе тиҙерәк hөйләп бөтөрөргә тырышҡан кеүек ашыҡтылар.

Айбулат әле Асатайҙы, әле Баҡыйҙы тыңланы, әле үҙе hөйләне. Уларҙың бетәhенен. дә күҙ алдына тыуған илден. бетә ваҡиғалары бергә эркелеп кәүҙәләнде.

Ялҡынлы граждандар hуғышы. Бына ошо ваҡиғаларға әллә ҡайҙан, алыҫ Питерҙән, Ленин тауышы килеп тора. Уның етәкселегендә большевиктәр партияhы эшселәрҙе, ярлы крәҫтиәндәрҙе үҙ ҡанаты аҫтына алып, көрәшкә алып бара. «Беҙ еиәсәкбеҙ! Бөтә власть Советтәргә! Фабрика-заводтар — эшселәргә, ер — крәҫтиәндәргә!» — ти. Ана Петроград. Революцион пролетариатты үҫтергән бишек. Уларға ярҙам итергә, уларҙың ярҙамына таянырға.

Граждандар hуғышы бәтөп етмәгән. Бөйөк үҙгәрештен, бөтә тауышы, бөтә шәүләhе, бөтә гөрөлдәүе Айбулаттын. тыуған ауылында ла сағыла, тауышы яңғырай. Уның бәләкәс кенә ауылында ла бөйөк көрәштең кеслө тауышы көндән-көн күтәрелә бара. Хәҙер ауылдың ергә тиңәлерҙәй булып ялпашҡан өйҙәрендә йәшәүсе ярлылар күтәрелеп, күкрәк киреп ҡалҡкан. Бейек өйҙәгеләр, унын был күкрәк тауышынан ҡурккан hымаҡ, ҡапыл сүккәндәр ҙә, асыуҙарын эскә йыйып, удайлы минутты көтәләр. Уртасалар башта ике якка ҡаранып сайҡалhалар ҙа, хәҙер ярлыларға ҡушылып, уның ҡеүәтен арттырғандар.

Ошо мең туғыҙ йөҙ ун туғыҙынсы йылдың башында Чапаев, үҙенең сигенеүҙе белмәгән батырҙары менән, баҫкан ерёндә ут осҡондары уйнаткан аттарына атланып, Айбулаттың тыуған яландарында булып, башҡорт



еттәрен ҙә йәртеп, ҡылыс уйнатып үткән. Бына Айбулат алдында уның көтөүсе дуҫы Асатай, шуларҙың йәнле шаhите, үҙҙәренең походтары тураhында hөйләп, күҙҙәре эрелек менән янып ултыра.

— Ҡыпсаҡтың Мотый ағай, беҙ аптыраште торған саҡта, ҡайтып инде лә, барыбыҙҙы ла йыйып, Уральскигә алып китте. Ул Чапайҙа беҙҙең командир булып хеҙмәт итте. Беҙ уның менән бетә волостән йеҙ иллеләп доброволец киттек. Ғиззәт, Ғүмәр, Хөсәйен, Шәйдулла, Ғатау, Ғәлиуллин, Нурғәлиев, мин. Ҡыпсаҡтан шул Мотыйҙың үҙе менән бер туған ике энеhе, Шакир, Йдрис,. Таллынан hинең ҡустың Заhит...

— Мин уны ишеткәйнем.

— Бик күп инде. hанап ҡына бөтөрөрлөк түгел. Мин әле лә ҡайтмай инем, врачтар ҡуйманылар. Тағы ауырырhың, тип ҡайтарҙылар. — Аҙаҡ Асатай уларға үҙенең Ныязғол менән булған бәрелешен дә hөйләне.

— Әйттем мин уға, алыш кәрәкме, атыш кәрәкме, тинем. Етте инде hиңә лә, шешкә тулдың, тинем.

— Дөрөҫ әйткәнhең. Күптән кәрәк ине. Нй эшләп әле булhа уны иркен йәшәтәhегеҙ?

— БЪй, «ил аулаҡ булhа, дуңғыҙ түбәгә сыға». Бында уның яғаhынан алырҙай кеше булмағас, иркенләй.

— Ул эште бик оҫта йөрөтте шул, — тине Баҡый,— башта малынын, бер аҙын ярлыларға үҙе өләщкән булды. Шунан ерен конфисковать иткән саҡта ярлыла.р комитетенә лә, укомдан килгән уполномоченныйға ла бер hүҙ әйтмәне. Әле йылмайып, ҡунаҡка керергә Димләп, улар бармағас: «Йә, йә, барыhы ла алдығыҙҙа булhын. hис бер hүҙем юҡ. Закон ҡуша икән, мин баш эйәм», — ти. Үҙе шунда ла ап-аҡ булды. Шулай шыма ғына тороп ҡалды ла ҡайҙалыр китеп барҙы. Бына тора ла тора.

Асатай тағы ҡыҙҙы:

— Шул, шул. Сығып йөрөп килде лә үҙебеҙҙең аранан аҡгвардеецтәр йыйнай башланы. «Үҙебеҙҙең башҡорт» тигән булып, үҙе алып барып, уларҙы мылтыҡ ауыҙына ҡуйҙы.

Айбулат ҡомhарҙы. Тынын ярhыу алып hораны:

— Кемдәр, кемдәр китте?

— Камалов Хөснөй, Сирай Вәлитов, Ҡаҙанҡап кейәүе Йәрми, Әбделмән.

— Әллә Әбделмән дә? Уға ни ҡалған унда, ауыҙың асһа, үпкәһе күренеп тора?

— Шул, шул. Тамаҡҡа алданды, һантый! Таллынан Шәүәли, тағы Моратшанан кемдер. Барыһы бер ун-ун бишләп ахыры.

Айбулат уртын эскә тартты! Борсолоп, тәмәке ура* башланы.

— Ул ҡоҙғонға етте инде... — тине Айбулат.

Асатай тағы һүҙ ҡушты:

•— Айбулат ағай, мине партияға алығыҙ.

— Ғариза яҙ. Рекомендация бирермен.

— Берәүһенә мин дә бирергә булғайным, — тин! Баҡый.

Уларҙың һүҙен югереп килеп ингән Мәғфүрә бүлде. Ул Айбулатты улы кеүек ҡосаҡлап күреште лә илап ебәрҙе:

— Эй айналайым, ҡайһылай олоғайып, ҡарт һалдат булып киткән! Иә, һау ҡайттыңмы? — Ул илай-көлә Гөлйөҙөм янына ултырҙы.

Айбулаттың да, Мәғфүрәне күргәс, күделе йомшап китте. Күҙенә йәш эркелгәндәй булды, ул уға ирек бирмәне.

— Эй запас, запас, һин дә ҡартайып киткәнһең. Тешең дә төшкән,— тип уйын һүҙҙәр әйтеп, уның илауын туктатырға тырышты.

— Ҡартаймаған ҡайҙа инде ул, илленең өҫтөнә сыҡҡас!

— Ҡотлояр ағай ҡайҙа йөрөй, беҙҙең, большак?

— Ул хәҙер әллә нindәй- түрә бит! — Мәғфүрә ҡартының түрәлегенән шатлыҡлы көлөп шаярҙы. — Әллә ҡайһы утар байының күмгән игенен тапҡандар тиме, шуны оҙатабыҙ тип киткәйне. Кисәнән бирле ҡайтҡаны юҡ.

Баҡый асыҡланы:

— Расторгуевтың баҙынан биш йөҙ бот иген сыҡҡан. Ҡотлояр ағайҙы, элекке комбед председателе, хәҙер совет члене булғанға, шуны оҙатышырға ебәрҙек.

— Оһа, ул да комбед булған икән. Ул керешһә, ҡуймаҫ.

Асатай, көлөп, уның тураһындағы әңгәмәне хәтерләне.

— О ул ҡырып эшләй. Былтыр Ҡаҙанҡаптың игене сыҡҡас, Ҡаҙанҡап уға: «Зинһар, ҡустым, кәнфит, игенде



теләһә ни эшләтегеҙ, берүк үҙемә тейә күрмәгеҙ»,— тиг. инәлә икән дә, Ҡотлояр ағай уға: «Мин, Ҡаҙанҡап, һинә кәнфит түгелмен, ярлыларға кәнфитмен. Ә һинә, беләбелһәң, әсе торма булырмын, кит әле, арыраҡ тор, игенде тейәргә оронсоҡлайһың!» — тип бойҙайлы тоҡтарҙы үзе арбаға алып-алып ырғыта, ти.

' Бары ла көлештөләр. Айбулат күҙенән йәш сыҡҡансы рәхәтләнеп келдә.

— Әйттем бит, ул бер нәмәне башлаһа, осона сыҡмай туктамай торған. Хәҙер кәрт уйнарға ла ваҡытьс юҡтыр инде?

Мәғфүрә ире өсен булған бер ғорурлыҡ менән етди; өҫтәне:

— Юҡ, ҡа*йҙа ул! Хөрриәт сыҡҡаны бирле ауыҙынабер тамсы араҡы алғаны, бер ултырып кәрт уйнағаны, юҡ. Эштән бушамай. «Хәҙер шаяра торған заман түгел»,— тип, йәштәрҙе өтөп алып бара.

Улар, шулай геүләшеп, төрлө хәбәрҙең осона сығырға өлгермәнеләр, тағы ла ишек шартлап асылды. Унаш күтәрелгән тумалаҡ быуҙар араһынан, өҫтөнән ҡойолған ваҡ ҡар бертөктәрен сәсрәтеп ҡағынып, бер ҡыҙ килеп инде. Шунан ул йәһәт, сымры баҫып, түргә табаа атланы ла ике ҡулын да һуҙып:

— ,Айбулат ағайым, һау ҡайттыңмы? — тип күреште.

Айбулат, уны ни тип ҡаршы алырға ла белмәйенсә икеләнеңкерәп, ҡыҙға аптырау ҡатыш һоҡланыу күҙҙәрен ташланы ла:

— Бик һәйбәт әле, туған. Тик мин һине кем тип тәәйтә алмайым бит әле, — тип, танымағанлығын өҫтөнә^ алды.

Ошо әңгәмәне генә көтөп ултырған һымаҡ, тынып ҡалған кешеләр, бер юлы шаулашып көлөп ебәрҙеләр:

— Бына кәрәк булһа, әйтмәгеҙ, әйтмәгеҙ, таныһын; Айбулат!

— Шулай була шул ул, йәштәр үҫә, ҡарттар сүгә!

— У хәҙер йәштәр көнләп түгел, сәғәтләп үҫәләр. Йә, йә, таны!

Улар шулай геүләшкәнсә, ҡыҙ, алһыу битттәрен со'корайтып, ҡап-ҡара нәҙек ҡаштарын күтәреп, әҙ генәоялсанproblem йылмайыу менән бөтәһенә лә ҡарап алды ла, Мәғфүрәгә туктап:

— Әсәй, ҡара әле, Айбулат ағайым мине танымай-сы! — тип, сыңғырҙаҡ саф тауыш менән ҡыйыу көләп ебәрҙе. Шунан ғына Айбулат:

— Әй әттәһе, туғанҡайым Диләкәй, һин дәбаһа! — тип көләп яңынан ҡул бирҙе. Шунан, бәләкәй сағындағы кеүек итеп: — Ялбыр баш! — тип өҫтәне.

— Мин, ағай, мин.

Ул ҡары ирееп еүешләнгән аҡ йөн шәлен башынан •сисеп, урындыҡ ситенә ултырҙы. Оҙон ҡара ҡалын сәсе-ееҥ ике йыуан толомо һике еҫтөнә бөгелеп әйләнеп ятты.

Ә Бакый һәр ваҡыттағы үҙенең мөһабәт ғорур та-уышы менән асыҡланы:

— Айбулат, һин уны Диләкәй генә тимә әле. Ул хә-ҙер беҙҙең волостә башҡорт ҡыҙҙарынан иң беренсе уҡытыусы, беренсе совет мәктәбе уҡытыусыһы Дилә-4>руз Аралбаева иптәш булыр. Үҙе союз молодежи ағза-йы, активистка.

Башҡалар ҙа уны йөпләп:

— Эйе, эйе,— тиештеләр.

Был һүҙҙәрҙән Айбулат бик тәрән тулҡынланды. Диләкәйгә тағы нығыраҡ һоҡланыу менән текләне. Та-мағын төйәлдөрөп, күҙенә эркелгән шатлыҡлы күҙ йәш-тәрен һертмәй йоторға тырышһа ла, уның тауышы ҡал-тырап, эске тәрән тойғоһон белгертте. Ул күҙҙәрен тәҙрә аша ҡайҙалыр алыҫҡа ташланы.

Айбулатты шатлыҡлы, тәрән хистәр солғап алды.

3

Иртәгәһенә Айбулат, үҙе өй беренсә йөрөп, ауылдағы ағай-эне, туғандарын күрҙе.

Ауырыуҙан саҡ төҙәлеп, өйҙә көскә кәңгерҙәп йөрө-гән Хәмдиәнең ҡыуанысынан тағы ла нығыраҡ хәле бөт-кәндәй булды. Шулай ҙа ул, тороп ултырып, ябығып, ап-аҡ булған битенең сырыштарын йыйырып, шатлыҡлы йылмайҙы.

— Эй раббым, кейәү, һин бит, һау ҡайттыңмы?

— Бик шәп ҡайттым. Дыу һелкетеп. Үҙең ни хәлдә-•һең, кәйенйеңгә?

— Кисә үк ишетһәм дә, ауырығас ни, бара алманым. Бер ҙә хәлем юҡ. Иә анау балалар ҙа яталар. — Ул мөйештә бер мендәр һалып, бер ҡыптыр тун аҫтында



ҡуҙғалмай ятҡан **оло улы** менән ҡыҙына күрһәтте. — Йоманан артты инде.

— Иә, һин бара алмаһаң, мин килдем. Ауырыуҙан төҙәлеп бөтмәй тороп сығырға ярамай. Өҙләкһәң — төҙә-леүе ауырыраҡ бул-а ул. Ҡайнағанан хат алаһыңмы?

— Бер йома тирәһендә килгәйне. — Ул, хатты эҙләп; яҫтыҡ аҫтын, кейеҙ ситтәрен һыйпаны. — Әллә ҡайҙа •куйғанмын. Башым аңғы-миңге. Бер ҙә хәтерем юҡ.

— Йә, ярар. Мин икенсе килгәнсе табып ҡуйырһын.

— Ярар, улай булһа. Хаты бик ҡыҙыҡ. Бер туҡта-май буржуйҙарҙы өтеп алып барабыҙ, тип яҙған. Күрә-һең, гел һуғышта инде. — Ул һораулы ҡараш менән Айбулатҡа текләне.

Айбулат был һуңғы айҙарҙа Ҡыҙыл Армияның Орел, Воронеж ҡалалары янында, Деникиндең ҡаты ҡаршы-лығын еңеп, уны емереп ҡыуғанын хәтерләп уйланды. Ул Әхмәҙиҙең ошо фронтта икәнен белә ине.

Айбулат тағы бер аҙ һөйләшеп ултырҙы ла ҡайтырға ҡуҙғалды. '

— Һин, кәйенйеңгә, тиҙерәк төҙәлергә тырыш инде.

— Шулай тип тырышам да инде. Былай ятыу эш түгел.

Айбулат сығыр алдынан тынын өрөп ҡараны. Тын, тәмәке төтөнө һымаҡ быуланып, һауала тәгәрәне. Ул өйҙөң былай һыуыҡлығынан Хәмдиәнең бер кисәк тә утыны булмағанын аңланы. Нисек булһа ла ярҙам итер-гә ҡарар итте.

Ҡайны-кәйнәһен күрергә ул Гөлйөҙөм менән бергә китте. Улар бер аҙ атлауға Шәрифә әбей ҙә осраны. Ул тау яҡ тыҡрыҡтан күренде. Ҡырҡ ямаулы ҡыҙыл кепө-һөн ҡымтып элеп, дөйә йөнөнән бәйләнгән ҡыҙғылт һары шәлен ауыҙынан ҡаплап бәйләп, иҫке ҡара ситек өҫтө-нән кейгән ҡуңыслы күн ҡатаһы менән көрт йырып, шәп-ләп атлап килә ине. Гөлйөҙөм уны байтаҡ ерҙән үк абайлап, Айбулатҡа күрһәтте:

— Ана Шәрифә апайым, һине күрергә тип килә, ахы-ры.

Айбулат, туҡтап, уны көттө:

— Ә ул бирешмәгән икән әле.

— Юҡ, бирешмәй. Ауылда ике әбей бик ныҡҡа сыу-тылар. — Шәһиҙә инәй ҙә ул.

— Ул да бармы ни әле?

— Бар. — Гөлйөҙөм көлөп ебәрҙе. — Ғазраилдең исемлегенән төшөп ҡалғанмын, ти. Ул да, һуғыштан бушап, килеп тикшерергә ваҡыт тапмай, тип көлә.— Улар көлөшә, һөйләшә әбейҙе ҡаршы алдылар.

— Ай, кейәүгенәм, — тип ул ике ҡуллап күреште лә,— йә, һау ғына ҡайттыңмы? — тип тешһеҙ ауыҙың асып йылмайып, ҡояштың нурына ҡулын ҡуйып, үҙенән әллә ҡайҙа оҙон Айбулатҡа үрелеп ҡараны. Айбулат уға ҡыуанып, көлөп яуапланы:

— Бик шәп ҡайттым, ҡәйенбикә. Үҙең һау ҡартаяһыңмы?

— Шәп булғас, бик ярай. Башың һау ҡалғас, ҙур бәхет инде. Мин дә шәп ҡартаям. Миңә ни нәмә булыр тиһең. Бирешмәй йөрөп ятам әле. Ҡайҙа бараһығыҙ, Муйылбикәгәме?

— Эйе, шунда хәл белергә барайыҡ тип сыҡтыҡ.

— Әйҙәгеҙ улай булһа, бергә барайыҡ. Тәүҙә һине барып күреп, шунан уларға китермен, тип килә ята инем әле.

Улар керт баҫҡан берләм юлдын, ҡарын йыртып, аллы-артлы өсәүләп, урамдын, үр яғына ыңғайланылар.

Урам тын. Анда-һанда алыҫта ғына бер-ике әҙәм күренә лә, тиҙерәк өңөнә йомолған йомран һымаҡ, ҡар баҫҡан өйҙәренә инеп юғалалар. Айбулат был сығыуында уҡ байтаҡ кешене күреп, ауыл хәле менән танышырға уйлаһа ла, тура килмәҫен иҫәпләне. Берәмләп өйҙән-өйгә йөрөп, шунан берәй көн йыйылыш үткәреп алырға уйланы.

Алдан елтәңләп барған Шәрифә әбей үҙенен, һүҙен дауам итте:

— Гөлйөҙөм, әсәйенде күрһән дә уҡытып өшкөрттөк, шифаһы булманы. Инде тирегә һалып ҡарайыҡ әле. Тир ауырыуына шул килешә торғайны.

— Ни нәмә һуйырбыҙ һуң инде. һарыҡ юҡ та?

— Ниңә, минең аҡ һарығым бар бит. Бына кейәү ҙә ҡайтты. Бер ыңғай уны ла ҡунаҡ итергә булыр.

— Яңғыҙ һарығындымы?

Әбей асыулана яҙҙы. Тауышын күтәрҙе:

— Бына тағы бер һүҙ! Янғыҙ булһа, йәндән аяулымы? Урта бармаҡтай кейәүем ҡайтып килһен дә мин шуны һанашып торайыммы, юҡты һөйләйһең, килешмәгәнде!— тип Гөлйөҙөмдө орошоп бөткәс, Айбулатҡа ҡараны: — Кейәү, хәҙер үк шул һарыҡты салып ташласы.



Айбулат әбейһенең был уйына төптән ҡаршы булһа ла, уның. әле генә үпкә ҡатыш әйткән һүҙҙәренән һуң, ҡаршылыҡ күрһәтеүҙең файҙаһыҙлығын аңланы. Шулай ҙа бер уҡталды:

— Ҡәйенбикә, тоҡомон өҙмәҫкә кәрәк ине лә...

— Быныһы ла шуны һөйләй. Тоҡом кәрәк булһа, яҙ берәр бәрәс табылыр әле. Минең һүҙемде йыҡмағыҙ әле икәүләп тороп!

Айбулат был эштең дә, Муйылды тирегә һалыуҙың да юҡҡа маташыу икәнлеге тураһында әбейгә аңлатыуҙың файҙаһыҙ булырына ышанды ла, уны үпкәләтмәне.

— Ярар инде, һин тигәнсә булһын,— тине.

Улар барып ингәндә, өй тын ине. Ишек асҡан тауышҡа ла баш ҡалҡытыусы булманы. Улар өсәүһе лә сисенделәр. Шәрифә әбей мейес эргәһендәге ҡораҡлы юрғанды ипләп кенә асты. Керҙән йышылып, биҙәге лә айырылмаҫлыҡ булған ала яҫтыҡта сал сәстәре туҙып, башын артҡа ташлап, Муйылбикә ята ине. Ул, күҙен асмай, ауыр ыңғырашты. Гөлйөҙөм уның битенә яҡын эйелеп: «Әсәй, әсәй»,— тип ҡараһа ла, Муйыл ыңғырашып, эҫегә өтөлөп, ярылып бөткән ирендәрен"ап-аҡ теле менән яланы ла башҡа яуап бирә алманы. Уның ауыҙына ҡалаҡ менән һыу тамыҙҙылар. Ул тағы яланды ла ҡылҡынып йотто. Уның тирәһенән эҫе ялҡын еҫ бөрелеп тора ине.

Шәрифә уның ҡулын тотоп ҡарап:

— Янып бара,—• тине.— Төн буйы күҙен асманы, йоҡламай ултырып сыҡтым,— тип өҫтәне. Ул быларҙы килеп ҡарай ине. Муйылдың өҫтөн тағы ла ҡымтып ябып, Үмәрҙе барып уяттылар. Ул тун аҫтынан башын сығарып, әбей яғына ҡараны. Шунан, Айбулатты күреп ҡалып, аптырап ҡараны ла, көсһөҙ кәүҙәһен ҡапыл ҡуҙғатып, тырмашып тороп ултырҙы. Айбулат уға торорға ярҙамлашып арҡаһынан ҡалҡытты ла, ике ҡуллап күрешеп:

— Ҡайным, һаулығың нисек?— тип ҡысҡырҙы.

— Кейәү, һин дәбаһа, балам!

Айбулат баш ҡағып яуап бирҙе лә, ымлап хәлен һорашты. Башын, кәүҙәһен күрһәтте. Үмәр ҡарт быны тешенөп, яңы һаңғырауланған кешеләр тауышы менән ҡысҡырып һөйләне.

— Үҙем арыуландым. Тик хәл генә юҡ. һаташмайым Да хәҙер. Тик ана ҡәйнәң йән белмәй ята. Әҙәм буламы,

15*

юкмы инде. Үҙең һау ҡайттыңмы? Сәпсимгәме? Бик оҙаҡ һуғыштығыҙ инде. Алла ярҙам бирһен. Беҙ бында тупалам тейеп, барыбыҙ тигәндәй ауырышып киттек.

Айбулат, уның менән ҡысҡырып та, ымлап та һөйләшеп, янында байтаҡ ултырҙы. Ул арала Гөлйеҙөм Тимерғәле ҡартты, Сәғиҙә әбейҙе ярҙамға алып килде. Шәрифә күрше малайҙарын үҙ өйөнә югертеп, һарығын тотоп алып килергә ҡушты.

Тимерғәле ҡарт та, Сәғиҙә лә Айбулат менән илашып күрештеләр. Ҡарт бик бирешкәйне. Айбулат уларҙы йыуатты. һаулыҡтарын һорашты. Улар аҙыраҡ тынысланып, үҙ хәлдәрен һөйләнеләр.

— Былай арыу торабыҙ ҙа, ҡайғы баҫты. Шунын менән бик ҡаҡшаныҡ. Исхаҡтан хәбәр юк, йылдан артты инде.

— Яланбикәбеҙ анаулай булып үлеп ҡалды. Кейәүен аҡтар аткан, ти. Балалар үкһеҙ етем ҡалдылар,— тип өҫтәне Сәғиҙә.

Айбулат Тимерғәлене баштан-аяҡ ҡараны. Алама кепе, тишек быйма, ҡЫрҡылып бөткән бүрек аҫтынап күренеп торған ап-аҡ сәс, үҙе ябығып, яңаҡтары сурайып сыҡкан да эйәге аҡ һаҡал менән ослайып барып бөткән. Ҡаштары салланып, күҙ ҡабағына аҫылынғандар.

Айбулат уны бик йәлләне. Бала кеүек әүрәткеhе килде.

— Ҡайғырма, олатай. Инде тыныс көндәрҙе быға тиклем кеткән кеүек оҙаҡ көтмәбеҙ. Исхаҡ та ҡайтыр. Хәҙер инде буржуйҙарҙың хәлен бөтөрҙөк. Ҡалғандарын таҙартһаҡ, бөтәһе лә яҡшы булыр. Уға хәҙер күп ҡалманы инде, — тине ул.

Тимерғәле ҡарттың алдында йылы өмөт нурҙары сатҡыланып ялтырағандай булды. Ул Айбулаттын, һүҙҙәрен, уның күҙҙәренә ҡарап, өмет осконо менән тыңланы.

Сәғиҙә әбей ҙә шыбырҙап ҡына ниҙер теләп ҡуйҙы.

Тимерғәле ҡарт:

— Шул көндәргә тиҙерәк ирешһәк ине инде. һин дә, Исхаҡ та Лениндең үҙен күргән кешеләр, беләһегеҙ инде. Өмөт ҙур. Тик бына тиҙерәк еңһәк ине инде. һау ҡалһағыҙ ине. Заһидулла кейәү ҙә шулай тип яҙа. Ул Чапай менән үҙе теләп'китте. Ярман һуғышынан ҡайтЫп йыл ярым ғына өйҙә торҙо ла үҙе теләп китте.

— Еңеүҙәргә еттек инде, олатай, күп ҡалманы. Заһит



бик һәйбәт иткән. Минә лә бик йыш хат яҙа торғайны. Был арала ғына алғаным юк. Сафура киләме?

_ Килә, килә. Ике өйҙөң ҡарттарын ул ғына күтәрмәләп йөрөй әле. Бик шәп ул. Әллә ни, һалдатка булып алғайны, батырайҙы ла китте.

___һуң Исхаҡ кәләше Зәлифә бында тормаймы ни?

___Юҡ әле. Исхаҡ үҙе киленде төшөреп өлгөрмәне, Һуғышҡа китте. Юғиһә ул килен дә бик уңған, үткер бала.

— Хәҙер бөтә йәштәр шулай булырға тейеш. Шулар өсөн ирек алабыҙ тип һуғышабыҙ бит.

— Эйе, шулай инде. Күҙ ҡара танымаһа ла, эштең ҡалайға табан барғанын төшөнөп ултырабыҙ ғуй.

Айбулат ҡарттын, хәлләнеп, көрәйеп киткән тауышына кинәнде. Уның әле генә болот һымаҡ баҫҡан ауыр уйҙарын тарата алыуына эсенән ҡыуанып, ҡартты тағы ла йөпләне:

— Юҡ, олатай, әле һин, ҡарт булһан. да, Совет власенә тырышып ярҙам итеп ятҡаныңды беләбеҙ. Ярлылар комитетендә эшләгәнһең бит әле.

Ҡарт тағы йылмайып ҡалҡынды.

— Хәлдән килгәнен аямайбыҙ ҙа уныһын. Күберәк кәрәк ине ярҙам, күберәк. Ҡартайғанда күргән үҙ власебеҙ бит.

Ике малай, аҡ һарыҡтың муйынына еп бәйләп, һөрмәкләтеп алып килеп, лапаҫ аҫтына бағанаға бәйләнеләр.

Шәрифә Айбулат менән Тимерғәле ҡартты ҡабаландырҙы.

— Йәгеҙ, йәһәт булайыҡ. — Ул ҡулындағы өлкән бысаҡты уларҙын, ҡайһыһына тотторорға тип уйланды ла, Айбулатҡа ҡарап, уны мейес аръяғына саҡырҙы. Аҡрын тауыш менән: — Кейәү, күңеленә ауыр алма, һарыҡты мин һинең ҡайтыуыңа ла, Муйылдың һаулығына ла булһын тип аҡ ҡорбан итеп салдырам, — тине. Айбулат, уның был һүҙҙәренә аптырап:

— Ни эшләп, ҡәйенбикә, уны күңелгә ауыр алайым. Рәхмәт инде. Минең өсөн бер ҙә мәшәҡәтләнмәһәң дә ярар ине. Тик ҡәйнәмде тирегә һалабыҙ тигәс, мин ҡаршы тешмәнем.

— Юҡ, әле хикмәт унда түгел. Мин үҙем әйткәс, үҙем эшләйем инде,— ул тағы бер аҙ туҡталып торҙо.— Тик бына һарыҡты салғанда Тимерғәле ҡоҙа салһын,

тим. һин, коммун кешеһе, алланы бар тип белмәйһевдер ул? -

Айбулат әбейҙең борсолоуын әле генә аңлап, көлөп ебәрҙе.

— Ә, һин шуға шикләнеп тораһыңмы ни әле? Ярар, ярар, олатайым үҙе генә салһын,— тине ул.

Улар икәүләп ишек алдына сыҡтылар. Тимерғәле һарыҡты йыҡты, малайҙар унын, аяҡтарын бәйләштеләр.

Гөлйөҙөм, көйәнтәләп һыуҙан ҡайтып, эсәк-ҡарыщ йыуырға әҙерләнде.

Ул арала Мәғфүрә лә килеп етеп ярҙамлашты. Һарыҡтың тиреһен тунап алыу менән, уны тиҙ генә өйгә алып инеп, Муйылды сисендерә һалып, Мәғфүрә менән Сәғиҙә баш яғынан Шәрифә менән ГөлйөҘем аяғынан тотоп күтәреп, йылы тирегә һалдылар ҙа, уны, бала биләгән һымаҡ итеп, юрған менән ҡапланылар.

Муйылды тирелә киskә тиклем тотһалар ҙа, улар көткән һөҙемтә килеп сыҡманы. Ул тирегә һалыу менән боҫо борҡорап тирләп китергә лә, эҫелеге төшөп, төҙәлә башларға тейеш ине. Ләкин ул бер тамсы ла тирләмәне, Күҙен дә асмаған көйө ыщғырашып, эҫелеге тағы ла нығыраҡ көсәйеп, хәле бөттө.

## БУРАНЛЫ КИСТӘРҘӘ

1

Улар, волостең алты тәҙрәһе урамға ҡараған оло бүлмәһе кәрәсин лампаһының һөрөме, махорка төтөнө менән ерҙән-ала тулғансы, оҙаҡ итеп һөйләштеләр. Хәл итергә тейешле мөһим мәсьәләләр бик күбәйгәйне. Ҙур өҫтәл әйләнәһендә, ҡайһылары стена, мейес буйҙарында теҙелеп ултырған был ҙур төркөм һигеҙ-туғыҙ ауылда, бер нисә утарҙа совет һәм партия эштәрен алып барыусы работниктәр активе ине.

Айбулат ревком председателе вазифаһын ең һыҙғанып алып бара. Күптән түгел фронттан ҡайтҡан военком Петров ваҡытлы рәүештә ревком эшен алып бара ине. Ул Айбулат килеүгә ысын күңеленән шатланды.

— Ну, хәҙер беҙ һинең менән эште юлға һалырбыҙ. Юҡһа бер үҙемә ике яуаплы эш, етмәһә, яңы урын, уныа өҫтәүенә күбеһе башҡорт халҡы, телдәрен белмәгәс, масса араһында эште нығытып алып китергә яйһыҙ ине.



һин быңдағы кеше лә булғас, бик уңайлы эшләрбеҙ инде,— тине.

Айбулат уға ныҡ ярҙамсыл буласағын, унын да үҙенә тәжрибә яғынан ҙур иптәш икәнен әйтте.

Петров ҡуйы ҡуңыр сәсе, киң маңлайы, тәрән мәғәнәле үткер һоро күҙҙәре менән дә, һүҙҙе һөйләгәндә ҡырҡа, ҡыҫҡа һөйләп, уң ҡулының усы менән һәр һөйләменең аҙағын өҫтәлгә һуғып нығытып ҡуйыуы менән дә, хатта тауышы менән дә Айбулаттың йөрәгендә тәрән хөрмәт һәм яҡшы иҫтәлек ҡалдырған фронттағы иптәше большевик-агитатор Титовҡа оҡшай ине.

Йыйылышта Айбулат ауылдағы контрреволюцион элементтәр менән көрәште көсәйтеү, комбедтәрҙең эшен яығытыу һәм партиянын, һигеҙенсе съезының урта хәлләләр тураһындағы ҡарарҙарын тормошҡа үткәреүҙен, әкрен барыуы тураһында һөйләгәндән һуң, Ныязғол тураһында туҡталды. Унын, әле булһа, иркенләп йөрөп, продразверсткаға аяҡ салыуы, аҡтарға ярҙам йыйып ебәреп ятыуы; халыҡ араһында Совет власенә ҡаршылыҡ йоғонтоһо таратып ятҡан был өлкән кулактың эштәре тураһында бер сара ла күрмәү волком тарафынан ысҡындырылған ҙур хата икәнен әйтеп, мәсьәләне асыҡ һәм ашығыс хәл итеүҙе талап итте.

Унын артынса һүҙ алған Баҡый, Ныязғолдоң халыҡтан буш хаҡка вечныйға алған ерҙәренең әле тулыһы менән ҡайтарылып, бүленеп бөтмәгәнлеген һөйләп, яҙғы сәсеүгә тиклем посевком Солтанов был эште яҡшыртырға һәм киләһе йыйылышта уҡ күрелгән сараларынан отчет бирергә тейеш, тине.

Посевком, ҡара ялпаҡ йөҙлө, көләс күҙле, ҡыҫҡа мыйыҡлы, ситтән килгән бер егет ине. Ул, һөйләгәндә •әҙерәк елкәһен сығарып, йәшел гимнастеркаһы өҫтөндәге ҡайышын төҙәтә биреп һөйләне. Унын һүҙен тыңлағанда Айбулат әллә ҡайһы ерен оҡшатманы: әллә йәшерәк, әллә йомшағыраҡ. Әллә икеһе лә бергәме? Ул, унын зиенән нығыраҡ танышырға, һөйләшергә кәрәк, тип уйлап ҡуйҙы.

Партиянын, волость комитете секретаре Мурэин Зөфәр йыйылышта председателлекте үҙе алып барҙы. Айбулат уны фронтҡа киткәне бирле күргәне юҡ ине. Ул һуғыштан күптән түгел ҡаты яранан төҙәлеп ҡайтҡайны. Күп тә үтмәне, уны элекке эше— партиянын волком секретаре итеп һайлап ҡуйҙылар.

Айбулат уны бөгөн айырым бер һағынған иғтибар менән ҡарап ултырҙы.

Ул башҡаларға ҡарағанда төҫкә һылыулығы менән дә айырылып ултыра. Ҡара оҙон ҡаштары, төҙөк һылыу бите, ирҙәрсә энергичный соҡор эйәкле, тигеҙ ҡыр танаулы, мыҡты буйлы ине. Һөйләгәндә үткер һәм тапҡыр һүҙҙәр ҡуллана. Урыны менән көлдөрә, кәрәк ерендә әсе әйтә. Унын. шоморт ҡара күҙҙәре кешегә тура ҡарайҙар, үҙенең фекер ағымына ҡарап, бер йылы нур алалар, бер ут уйнатып яналар. Айбулат Петров менән Мурзин тураһында һөйләшкәндә, Петров уны ысын талант, самородок һәм ныҡ ышанған большевик, тип ҡылыҡһырланы.

Ҡалғандарҙың күбеһе уҡытыусылар. Улар араһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан дүрт кеше. Быҙаулыҡ яғынан килгән Таллы уҡытыусыһы Йәмилә, Плаксиндән Нина Шестакова, Украина ауыл Совете секретаре Нюра, унын ҡатарында өлкән кешеләр һымаҡ етди төҫ менән, алдындағы блокнотына ниҙәрҙер яҙғылап, Дилә ултыра. Ул ысынлап та уҡытыусылар һәм партактив араһында иң йәш, иң бала кеше. Ләкин унын тәплө аҡыллылығы, әҙәплелеге, эшмәкәрлеге, уны шулай алдынғы кешеләр араһына ҡуйған ине.

Күп мәсьәләләр ҡаралғандан һуң, Нина менән Йәмиләнең тәкдимдәре буйынса, һәр ял көнө бер ауылға сығып, доклад, концерт, спектакль ҡуйырға булдылар.

## 2

Улар ҡайтырға сыҡҡанда, күҙ асҡыһыҙ әсе буран донъяны ҡаплап алғайны.

Айбулат Баҡый менән китте. Буран аяҡтан йығырҙай булып бәрелә лә, әллә ҡайҙа бикләнмәй ҡалған ағас ҡапҡаларҙы шығырҙатып асып, бетә көсе менән хупылдатып ябырға ашыға. Ел ынғайына башты, кәүҙәне эйеп өлгөрмәйһең, шуны ғына көтөп торған һымаҡ, икенсе яҡтан өйерелтөп һуғып, ҡар бөртектәрен биткә һибә.

Баҡый үҙенең ҡалын тауышы менән буран гөжләүен еңеп:

— Әллә ысҡынғанмы бауҙан Ҡаф тау арты ендәре*
Әллә йыртылғанмы хоҙайҙың бихисап ҙур мендәре, —
тип декламировать итеп ебәрҙе.

Был Айбулатҡа бик оҡшаны. Ул, рәхәтләнеп келеп, ҡыҙыҡһынды.



— Йә, йә, ҡалай тура әйтелгән, тағы бер һөйлә әле.

Баҡый инәлтмәне. Туҡайҙың буран тураһындағы был щиғырын ҡат-ҡат һөйләне.

— Үҙең сығарҙыңмы әллә был шиғырҙы, Баҡый?

— К)ҡ, Айбулат, Ғабдулла Туҡаевтыҡы бит.

Айбулат үҙенең ғүмерендә татарса матур әҙәбиәттән «Таһир — Зөһрә», «Буҙ егет» һымаҡ китаптарҙы ғына уҡығанын уйлап ҡуйҙы. Туҡайҙың «Йәшен таштары», «Күңел емештәре» тигән бер нисә бәләкәй китаптарын уҡығанын хәтерләне. Ваҡыт булғанда, унын башҡа нәмәләрен дә табып уҡырға кәрәк, тип уйланы.

— Әйткәндәй, беҙҙә библиотека мәсьәләһе ҡуйылманы? Китап тирәһе насарҙыр инде?

— Әлбиттә, етешһеҙлек ҙур. Шулай ҙа партиянын Пугачевка өйәҙ комитете ебәргән «Ҡыҙыл повозка» байтаҡ китап ҡалдырып китте. Волостен алғы бүлмәһендәге шкафта. Пьеса-маҙарҙарҙы беҙ шунан алып ҡуябыҙ. Китаптарҙы ла ҡулдан-ҡулға йөрөтәбеҙ. Бөтенләй юҡ ише түгел.

Улар ҡайтып еткәндә, Баҡыйҙын кәҫтән һалынған тәпәш өйөнөң алғы тәҙрәһендә картуфҡа филтә үткәреп яһалған май шәме генә быҙылдап янып ултыра ине. Улар ишек асып ябыуға, ул да йылт итеп һүнеп ҡуйҙы.

Баҡый кейемен сисә-сисә һөйләнде:

— Мә, кәрәк булһа. Энйебикә, тор әле. Шырпын бармы?

Энйебикә йоҡоло тауыш менән иҫнәне лә:

— Юҡ,— тине.

Айбулат кеҫәһенән зажигалка сығарҙы. Ул да, әллә нисә ҡабат сыртылдатып сирткәс кенә, саҡ тоҡанды. Картуф лампаһын тағы ҡабыҙҙылар. Энйебикә тороп, әллә ҡасан һүнеп ҡалған самауырын яңынан тоҡандырып, соҡалаҡҡа ултыртты.

Баҡый шаяртып һөйләнде:

— Бына хәҙер, боронғо әҙәмдәр һымаҡ, саҡма сағып, быҙыҡ яндырып көн итәбеҙ инде.

— Ярар әлегә. Донъяларҙы төҙәтә башлаһаҡ, яҡтыртырбыҙ.

Баҡый уйланды.

— Эйе. Ул көндәрҙе тиҙерәк еткереп күрә алһаҡ, бөтә донъяға үҙебеҙҙең кем икәнде танытыр инек, Айбулат.

— Шик тә юҡ. һуғыш бөтөү менән тотонабыҙ инде. Ер үҙебеҙҙең ҡулда, заводтар, фабрикалар үҙебеҙҙә. Коммуналар төҙөп тороп, геүләп эшләй башлаһын әле крәҫтиәнен, күрерһең шунда.

— Ысынлап та, күрербеҙ бит, Айбулат, ул көндәрҙе. Халыҡ, бал ҡорто һымаҡ йөрөп, донъя көтә башлар. Эйе,— Ул үҙенең ҙур күҙҙәрен ялтыратып, матур киләсәкте күргән кеүек, һоҡланып һөйләй ине.

Улар һөйләшкән арала Энйебикәнең самауыры ҡайнап сыҡты. Ул урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп сәй әҙерләне. Сөсө күмәс бүлгеләп һалды. Май ҡуйҙы. Китек-ҡотоҡ өс шәшке ултыртып, ҡалай менән моронлаған сәйнүктән сәй яһай башланы. Баҡый Айбулатты юғарыраҡ ултыртты.

— Әйҙә, әйҙә түрҙәнерәк,— тине ул, үҙе уның янына ултырып.— Сәй эсеп, бер-ике сәғәт йоҡларбыҙ ҙа юнәлербеҙ, миңә сәғәт 9-ға дәрескә өлгөрөргә бит. Ә һин ҡайтаһыңмы?— тип һораны ул.

— Юҡ, бер нисә көн бында булам әле. һин унда ҡайтыу менән Асатайҙы бында ебәр. Иртәгә кискә килеп етһен. Өйҙә лә хәҙергә мине көтмәһендәр.

— Ирай, әйтермен. Хәҙер һин дә, минең һымаҡ, ике арала бүленеп йәшәйһең инде. Мин дә бит, ҡартайған көндә, Энйене яңынан кейәүләп, йомаһына бер, ике йомаға бер килеп йөрөйөм. Ике йыл инде шулай. Минең менән күсеп барғыһы килмәй.

Айбулат, Баҡыйҙың был һүҙенән көлөп, Энйенең ниңә бармағанын һораны.

Энйе ҡул ғына һелтәне.

— Уның артынан ун биш йыл эйәреп йөрөнөм инде, етер. Гел күсеп йөрөү арҡаһында балаларҙы әрәм итеп бөттөк. һыуыҡ тейһенме, башҡа ауырыу eләкһенме. Хәҙер бер бәләкәсе генә булһа ла һау үҫһен тип тик ятам.

— Эйе, был ғәфү ителерлек сәбәп инде. Минең Гөлйөҙөм.дә ҡуҙғалмаҫ ахыры. Өс бала менән тиер.

— Ннңә, шулай шул. һеҙгә ни, ирҙәргә, ярай ҙа ул. Эш тип, барыбер өйҙә тормайһығыҙ.

Тан, һыҙылғанда Баҡый сығыш китте. Энйе, ирен оҙаткас, Айбулатҡа самауыр ҡайнатырға уйлаһа ла, Айбулат уға борсолмаҫҡа ҡушты.

Әсәһе менән бергә тороп, әллә ниҙәр бытылдап һөйләнә-һейләнә имгәкләп килгән ҡара малайҙы Айбулат ҡулына алып һикертеп-һикертеп һөйҙө. Малай, был рәхәттән шарҡылдап көлеп, алдағы аҫлы-өҫлө сыҡ.кан



ваҡ ҡына аҡ тештәре менәк Айбулаттың маңлайын тешләп кинәнде. Айбулат уны кире урынына ултыртып кейенә башлағас, малайға был оҡшап етмәне, ул ҡаштарын йыйырыш, ҡулдарын һуҙып, тағы ла уйн-арға сажырҙы.

Айбулат уның маңлайынан үпте лә:

— Юҡ инде, Марат Баҡиевич, уйын күп булмай _ул,— тип, баланы әсәһенә тотторол сығып китте.

Айбулат килеп ингәндә, Мурзин волость өйөндә иңе инде. Ул өҫтәлдәге шәмде үҙенә яҡын ғына ултыртып, ~кара пальтоһын яурынына һалып, ниндәйҙер бер китапты ҙур иғтибар менән укып ултыра ине.

Айбулат уның менән һаулашҡас:

—• Бик иртә килгәнһең, ахыры, Зөфәр,—• тине һәм уның ниндәй китап уҡығанын һорашты, ҡыҙыҡһынды.

Мурзин, асыҡ йөҙ менән йылмайып, Айбулатка б')-ролдо да усы менән китапҡа һуғып ҡуйҙы.

— Сәғәт биштә килдем. Кисә бынау китапты укый *башлағайным, айырылып булмай. Өсенсе ҡат тнкшерәм инде. Уҡыған һайын яңы бер нәмә сығып тора, уйлаған һайын мәғәнәһе тәрәнәйә бара,— тине Мурзин һәм китапты ябып, һыртын Айбулатҡа күрһәтте.-— Ҡара әле.

Айбулат, «Манифест Коммунистической партии», тип уҡыны.

— Ә, бына был китапты мин быйыл күпме эҙләп тә •кулға төшөрә алманым. Самарҙа Волгин иптәштән алып •бер укығайным да мин уны, ҡулға ҡәләм тотоп укыма-)Ғас ни, хәтерҙән сыҡкан. Ҙур китап, тәрән китап.— Ул тиҙ генә сисенде лә Мурзин янына ултырҙы. Улар икәүләп укый башланылар. Мурзин үҙенең айырыуса ҡыҙыкһынған ерҙәрен укып күрһәтеп:

— Бына ошонда инде коммунистәр өсөн булған ғилемдең үҙеге. Бына ниндәй даһи кешеләр, ә? 1848 йылда яҙғандар, уйлап ҡара, етмеш йыл элек. Бегенгө кеүек •әйтәләр. Ә киләсәктә нисәмә быуындарға был теория ҡалыр әле. Юҡ, Айбулат, беҙҙең юлдан да дөрөҫ юл «уктыр, беҙҙе һис бер ваҡытта ла был юлдан тайҙыра -алмаҫтар, — тине. Ул, үҙенең был уйҙарын .әллә ни саҡ-.лы халыҡ алдында иҫбат иткән һымаҡ, әллә ҡайҙа алыҫ •бер нөктәгә текләп^ ҡулын һелтәп һөйләне.

Уларҙың был эшен Петров килеп инеп бүлде:

— Ә, һеҙ партучеба менән шөғөлләнәһегеҙ, ахыры. Яҡшы эш.— Ул да китапҡа күҙ ташланы.— Бына һеҙ

ниндәй хазина тапканhығыҙ! Мин дә уны байтактан кабатлағаным юк. Кемегеҙҙең китабы, миңә лә биреп тороғоҙ,— тине.— Миндә Маркстың «Капитал»ы бар,— тип өҫтәне. Мурзин вәғәҙә бирҙе.

— Тик тәүҙә Айбулаттың сираты. Ә «Капитал»ды миңә бирерhең.

— Бөгөн үк алырhың.

Улар, өҫтәл тирәләй ултырып, кисәге hейләшеү буйынса йыйылыш һәм бюро карарҙарын алып, ашығыс һәм мөһим эштәргә керештеләр.

...Айбулат төштән hуң hыбай сабып килеп еткән Асатайҙан кәйнәhенең үлгән хәбәрен ишетте. Өйҙән: «Берүк ©ҫтөнә тупрак hалырға кайтып етhен», тигән үтенес ебәрhәләр ҙә, уның вакыты юк ине. Шуға күрә, ул үҙенә паекка тейгән ярты боттай кукуруз онон, бер әсмүхә сәйен, башка вак-тейәктәрен төйнәне лә, юлаусы менән Гелйөҙөмгә оҙатты. Үҙенең кайта алмаясағын әйтеп, көтмәҫкә кушты. Шуның артынса ук Асатайҙы волисполком аттарынан иң якшы парҙы ектереп, йәшерен пакет менән Самарға губчекаға оҙатты. Ул Асатайға:

— Йөҙ илле сакрым. Дүрт көн срок. Көнө-төнө сап. hак бул. Унан ниндәй әмер булhа ла иҫән-hау кейе миңә алып кайтып тапшыр. Әгәр ҙә кеше килергә булhа, бергә алып *Кпл.* Эштең ниҙә торғанын үҙең беләhең, үҙеңдең йәш большевик икәнеңде күрhәт,— тине. Айбулат уны үҙе сығып оҙатып калды.

Буран өйөрелтәп hуға. Күк менән ер бергә тоташкан кеүек. Ошо киске монар, кар томаны эсенә елеп кереп юғалған пар аттын. артында Асатайҙың толобо ғына бер аҙ кара димгел булып барҙы ла тиҙ үк ул да күҙҙән юғалды.

Айбулат тәрән тын алды. Уның йөрәгендә әллә ниндәй хәл иткес кыркыулык та, шуның менән бергә талғынлык та бар ине. Ул быны үҙенә нисек.тә асыгклай алманы. Эштәрҙең мөhимлегеме, кәйнәhенед үлеү хәбәренәнме, аяғындағы яраның кисәнән бирле hыҙлап тороуымы, әллә барыhы ла бергәме икән, тип уйланды ул.

Ул яңынан боролоп ингәндә Петров та, Мурзин дә кайтырға йыйынғайнылар. Айбулат улар менән махорка төрөп каптас, Петров:

— Әйҙәгеҙ, Айбулат, Мурзин, беҙгә барып кискегә ашап алайык. Шунан-бергә килербеҙ,— тине.



Айбулат шунда ғына үҙенең бөгөн ауыҙына бер канәмә алмағанын хәтерләне. Ас карынға капкан әмәке уның күңелен бутаны. Ул тәмәкеhен тартмай иҙәнгә ырғытты ла:

— У бик була, әйҙә барабыҙ,— тине.

Улар оло урамға өсәүләшеп төшөп киттеләр.

## 3

Асатай hүҙендә торҙо. Үҙенә бирелгән заданиене өс көн эсендә үтәп, дүртенсе көн тигәндә Самарҙан губчека кешеләре менән волоскә кайтып та төштө. Эште оҙакка hуҙманылар. Юлдан килгән иптәштәрҙе тамакландырып, аҙырак ял иттерҙеләр ҙә, аттарҙы алыштырып, эңерҙән үк Айҙакайға юл алдылар.

hауа, hалкынайып, аяҙға тартты. Йома буйына уйнаған томра бурандарҙан йәшенеп, болоттар араhында күренмәй йөрөгән ай, тулы битен шаян ялтыратып, әллә кайҙан капыл килеп сыкты ла нуры менән ерҙең ак юрғанын балкытып ебәрҙе. Уның тирә-яғынан карahыу зәңгәр күкте биҙәкләп сәселгән Етегән, Аркысак, Өлкәр йондоҙҙары, айҙың ошо матур нурҙарына кушылырға, улар менән бергә ерҙе иркәләргә ынтылған hымак, дөрөм йылмылданылар. Аллы-артлы ике саналағы кешеләр ҙә, танауҙарынан сыккан ак быуҙы hауала таратып, ушкыра-ушкыра алға ынтылған аттар ҙа хәҙер асык күренәләр. Ат тояктарының зыйкылдауы менән сана табандарының жыйылдауы ғына тын яткан кар далаhының тынıслығын боҙа ине. Алдағы саналағы чекист Доронин ухылдап кирелеп куҙғалды. Дилбегә кағып hуйтылдаған Асатайға ул:

— Мин бер аҙ йоклап киткәнмен, ахыры,— тине.

— Эйе, аҙырак йоклап алдын, шул, иптәш Доронин. Ул я-кшы эш. Ял иттең. — Ул атын кыуаланы, — на-на-на?!

Доронин, толоп салғыйын күтәреп, шинель кеҫәhенән махорка сығарып, уны газета кағыҙына калын итеп урап, hыҙғас, бер талай күтәреп торған hаҫык ялкынлы шырпыhын токандырҙы. Асатай аттарҙы акрынайтты. Доронин тирә-якка күҙ ташлап:

— Быуа ошо икән Самарҙың иген ундыра торған кара тупрағы,— тине.

Асатай уның артынан тирә-якка каранып:

— Ошо инде. Был әле бер яҡ мөйөшө генә,— тине. Уларҙың гөмбөрҙәшкән тауышына арттағы сананан икенсе чекист Волков быларҙы һикереп төшөп ҡыуып етте лә, сана эргәһенән йәйәүләне:

— Ух, көн һыуыҡ. Аяҡ өшөй башланы,— тине ул.— Уның янына Асатай ҙа төшөп йәйәүләне.

Улар был тирәнең тәбиғәте тураһында, ниндәй януарҙар барлығы тураһында һораштылар.

Асатай үҙ байлығы тураһында һөйләгән ҡиәфәт менән:

— У бында барыһы ла бар, бүре лә, төлкө лә, ҡуян да,— тине.

— Ә айыу?

— Айыу юҡ.

Чекистәр артабан ҡыҙыҡһындылар.

— Был яландар кем ҡулында ине?

— Был тирәләр Расторгуев ҡулында ине. Ана бая үткән утар уныҡы. Үҙе аҡтар менән ҡасты. Ә бынау үҙәктән сыҡҡас Ныязғол ере башлана. Ике меңләп десятина ине барлығы. Уның еренең иң яҡшыһы, иң күбеһе Ырғыҙ йылғаһы аръяғынан китә.

— Ул ҡайҙан алған ул ерҙәрҙе?

— Ҡайҙан булһын, беҙҙеке. Үҙебеҙҙен, башҡорттарҙан бишнәккә тип алдап-йолдап алып бөткәйне.

— Ә хәҙер кире алдығыҙмы һуң?

— Алмай ни!—Асатай бер һүҙ менән яуапланы ла ҡайҡайып атлап китте.

Айбулатҡа һыуыҡ ине. Арҡаһын буйлаған һыуыҡ, аяҡтарына югереп, аяғынын, яраһына төшөп, уны һыҙлата ине. Ул, кәйефһеҙләнеп, үҙалдына һүгенде.

— Ай, ҡороғоро. Тапты ваҡыт һыҙларға.— Ул баҫып ҡарап, шәп атлап йылынырға уйлаһа ла, был эштең барып сыҡмаясағын белде. Ҡуҙғалманы.

Алдағы саналағылар уға өндәштеләр:

— Иптәш ревком, йоҡоға киттеңме әллә, әйҙә тәмәке тартырға.

— Юҡ, иптәштәр, йоҡо баҫмай әле, эш насарыраҡ.— Ул ҡуҙғалып тора алмағас, үҙенең күңелһеҙ хәлен әйтергә булды.— Аяҡтың яраһы аҙыраҡ шаярта.

Унщ аяғы яралы икәнен, әле ауыртып һыҙлап килгәнен яңы ғына ишеткән иптәштәре Асатайҙы ҡапыл ашыҡтырҙылар:

— Әйҙә, улай булғас, тиҙерәк ҡыуала!



Волков, ҡыҙыулаған аттарҙың арттағыһы үҙ тәңгәлендә килеп етеү менән, Айбулат янына һийереп менеп ултырып, дилбегә менән сыбыртҡыны үҙ ҡулына алды.

— Йәле, иптәш Айдаров! һинең хәл бик маҡтанырлыҡ түгел ахыры. Бая уҡ әйтәләр уны. Минең янда әҙерәк дарыу бар, һинә барып төшөү менән эсерермен.

Айбулат, үҙенең ауырыуынан уңайһыҙланған һымаҡ, тағы ла һүгенде:

— Шайтан алғыры, ҡайтканы бирле бер ҙә белгертмәй ине. Ә көнө килгәс, ҡара инде.

— Борсолма, иптәш, бөтәһе лә тәртиптә булыр. Мин һинә бына тигән перевязка яһармын. Минең янда аҙыраҡ бинт тә бар.— Ул Айбулаттын, аптырау ҡатыш һораулы ҡарашына яуап итеп дауам итте.— Ысын-ысын, иптәш ревком, аптырама. Мин һуғышта санитар булдым, ә граждандар һуғышында хатта фельдшер урынында ла эшләргә тура килде. Шуға күрә, үҙемдең ғәҙәт буйынса, һәр ваҡыт беренсе ярҙамды күрһәтә алам,— тине лә үҙенең ауырыуҙар һәм яралылар менән булған сикһеҙ күп эпизодтарын һөйләп китте.

Айбулат был бәләкәй буйлы, ҡаҡса, үткер зәңгәр күҙле, уйын-көлкө ҡатыштырып, үткер һүҙҙәр ҡулланыш һөйләргә оҫта кеше менән бик дуҫлашып китте. Үҙе лә шул әңгәмәгә әүрәп, аяғы ауыртканын да онотоп, баштан үткәндәрен һөйләп алды. Улар, күптәнге дуҫтар кеүек, яҡынлаштылар.

Саналар һаман алға шыуҙылар. һауа сатлама һыуыҡҡа әйләнде.

Тендә, кетмәгәндә, тыштағы һыуыҡты ҡосаҡлап алып ингән һымаҡ, шағырҙашып килеп тулған был юлсыларҙың төҫтәре етдилеге, ҡуҙғалыштарҙың йәһәтлеге, Айбулаттың, ауыртыныуын йөҙенә сығармаҫҡа тырышып, аҡһай-аҡһай тәҙрәләрҙе кейем-һалым менән ҡороп ташлауы, ниндәйҙер бер мөһим эште хәл итер алдынан була торған был ҡиәфәттәр Гөлйөҙемдө албырғатып ебәрҙеләр. Ҡунаҡтар уның менән:

— Ә хозяйка, һаумы!—тип көлөшеп ҡул биреп күрешһәләр ҙә, кейемдәрен сисеп, үргә менеп китеп, яйлап тәмәке урарға тотонһалар ҙа, Гөлйөҙем үҙенең тынысһыҙ тойғоһонан айный алманы. Ашығып ут яҡты. Аш һалды, самауыр ҡуйҙы.

Айбулат, Асатай артынан соланға сығып, Ныязғол менән Ймайҙыщ ейҙәме, ҡайҙа икәнлеген тағы бер аныҡ-

ларға һәм улар алдан бер-бер нәмә һиҙенеп шылтайыщ еығып китмәһендәр тип, күҙәтергә ҡушып ебәрҙе.

Волков, урындыҡтан төшөп, тәмәке төпсегөн усаҡ алдына ырғытты ла, Айбулатҡа аяҡ кейемдәрен сисеп ташларға ҡушып, үҙе полевой сумкаһынан ҡуңыр дарыулы бер шешә, бинт, мамыҡ алып, уның яраһын бәйләргә әҙерләнде. Ысынлап та, Айбулаттың уң аяғының бөгәр аҫтындағы яраһы асылып, балтыр буйлап ҡуйы ҡыҙыллыҡ таратып шешкәйне. Волков яраның тирәяғына бармаҡтары менән баҫып ҡараны ла башын сайҡаны:

— Эһе, иптәш, эшең шәптән түгел бит. Әйтәм ерле, бик сытырайһың.

— Әйтмә инде, шайтан алғыры, тапҡан ваҡыт!

Гөлйөҙөмдең эсе һыҡрап китте. Ул, үҙ яраһы ауыртҡан һымаҡ, тешләнеп ҡуйҙы. Волков, тәжрибәле врачтар һымаҡ, үҙенә ныҡ ышанған төҫ менән, ҡулдарын һабынлап йыуып, эшкә кереште.

— Зарар юҡ, туған, иртәнгә хәтлем ҡыҙыллығы бөтһә, унан ҡурҡыныс та бетә. Бойоғорға ярамай,— тип врачтар тоны менән һөйләнде.

Уның был ҡыланыштарына Айбулат келөмһөрәп ҡараны. Әллә дарыу бик тура килдеме, әллә Волковтың әңгәмә ҡатыш төрлө һүҙҙәр һөйләп келдерә-көлдөрә йәлтелдәп тороуымы — ул тынысланып ҡуйҙы. Ул аҡ бинтле аяғын мендәр өҫтөнә һуҙып, ял итергә ҡырынайҙы.

Ул арала йоҡонан тороп быларҙы ентекләп ҡарап торған Тимербулатты Доронин саҡырып алып янына ултыртты:-

— Иптәш Айдаров, еткән улың бар икән дәбаһа.

— Бар, өлкәне был. Ҡалғандары ана яталар, ваҡтар әле,— ул ҡашаяҡта яткан балаларына күрһәтте.

— Исеме Тимербулат тиһеңме? Йә, иптәш Тимербулат, эштәр нисек һуң? Уҡыйһыңмы?

Тимер үҙенең ватыҡ-һыныҡ руссаһы менән дүртенсе клаҫта уҡыуын, күптән түгел союз молодежигә кереүен һөйләне.

— Шулаймы ни? Яҡшы, яҡшы. Минең дә һинең һымаҡ улым Саратов губернаһында әсәһе менән тора. Ул да уҡый. Тик мин уны дүрт йыл күргәнем юҡ. Хәҙер ҙур булғандыр инде.— Ул, Тимерҙең ҡара сәстәрен һыйпайһыйпай, бер талай ситкә ҡарап уйланды. Шунан ул,



ҡуйы һары керпектәрен һирпеп, зәңгәр күҙҙәрен көлдөрөп, ун ҡулы менән Тимербулаттың башын артҡа салҡайтыға, уның йөҙөн нығыраҡ хәтерләргә тырышҡан кеүек текләне лә: — Ә һин союзда ниндәй эштәр алып бараһың һуң?— тине.

— Беҙме? Беҙ бөтәһен дә эшләйбеҙ,— тине Тимер.— Ни ҡушһалар ҙа. Мәктәпкә утын ташыйбыҙ, ҡыҙылармеецтәр семьяларына бесән килтерешәбеҙ, ауыл Советенең бөтә йомоштарын үтәйбеҙ, байҙарҙың йәшергән игендәрен табабыҙ. Шунан Яйыҡтан килгән тоҙҙо конфисковать итәбеҙ.

— Ниндәй тоҙҙо, ниңә конфисковать итәһегеҙ?

— Бәй, спекулянттәр Яйыҡҡа барып тоҙ тейәйҙәр ҙә, йәшереп алып ҡайтып бында ҡыйбатҡа һаталар. Ә беҙ, күпер төбөндәме, юлдамы, боҫоп, ҡарауыллап ятабыҙ ҙа, тотоп алып барып Советкә тапшырабыҙ.

Улар шулай әңгәмәләшкәнсе, Гөлйөҙөмдөң ашы ла өлгөрҙө. Ҡунаҡтар был эҫе аш, йылы өй, ҡайнар сә^ҙән бөтөнләй йылынып, иреп киттеләр. Улар, йоҡоға талсығып, мендәрҙәргә ҡыйшайҙылар ҙа тынып ҡалдылар. Айбулат аҙыраҡ хәл алғандай булып китте.

Ләкин былай иркенләп, йәйрәп ятып йоҡларға ваҡыт юҡ ине. Айҙың ҡобараһы осоп, күк итәгенә һарҡып, йондоҙҙар берәмләп һүнә башлап, таң һарғайғанда, Асатай килеп етте.

Айбулаттын:

— йә, ни?—тиеүенә, Асатай:

— Бетәһе лә урынында, ҡуҙғалырға мемкин,— тине.

Улар өсәүһе бер юлы кейенә башланылар.

Улар ни тиклем шым маташһалар ҙа, йоҡоға сос Тимербулат тағы ла ырғып тороп ултырҙы. Кейенеп бөткән атаһына ҡарап:

— Атай, тағы китәһегеҙме ни?— тине.

— Китәбеҙ, улым.

— Ҡайҙа?

— Эш менән, улым. Юҡты төпсөмә, ятып йоҡла.

Тимерҙе үпкәләү хисе ҡаплап алды. Ул, иларға ете-^шеп ҡыҙарып, арты менән боролдо. «Ярар, мин уларҙан бер нәмә лә йәшермәнем. Ә улар, мине малай һанап, ҡайҙа барғандарын да әйтмәгән булалар. Ярар... Икенсе юлы мин дә әйтмәм әле». Ул ошо хәсрәтле уйҙарын ослап елгөрмәне, уның артынан Доронин ҡосаҡлап үҙенә әйләндерҙе лә, ҡыҫып ҡосаҡлап, маңлайынан үпте.

— Йә, Тимер, хуш! Ҙур үҫ. Большевик булып, батыр күрәшсе булып үҫ,— тине.

Волков та уға ҡул биреп һаубуллашты.

Тимерҙең күңеле ҡапыл күтәрелде. Улар менән ҡат-ҡат -ҡул биреп күреште лә, уларҙың теләк-кәңәштәрен йәне-тәне менән үтәргә әҙерлеген белдергән ихлас тауыш менән:

— Обязательно! Ярар!— тине.

Ололар сығып киттеләр. Бындай, бер күргәндә үк үҙҙәренә ылыҡтыра торған яҡшы кешеләрҙең шулай тиҙ китеүҙәренә эсе бошоп, Тимербулат, әсәһе янынараҡ шыуып, уның яҫтығына башын ҡуйып күрһөндө.

— Әсәй, ниңә инде улар иртәгә тиклем дә торманылар икән?

— Эштәре ашығыстыр шул. Торорға ярамай инде. Бахырҙарҙың, исмаһам, йоҡолары ла туйманы. Атайыц берәй ерҙә ауырып ятып ҡалмаһа ярар ине, ут кеүек янып бара. Тиф булмаһа ярар ине, тигәйнем, юҡ, аяҡтың яраһы һыҙлай, шуныҡылыр, ти.

— Атайым да инде. Үҙе ауырығас, урынына мине генә ебәрһә ни була!

Гөлйөҙөм улының был балаларса һөйләшеүенә ҡыуаныслы келдө:

— Эй улым, улым, тағы сак ҡына үҫә торғаның бар шул әле.— Уны бәләкәй сағындағы һымаҡ итеп муйынынан ҡосаҡлап ятып яратты.— Иә, йоҡлайыҡ инде,— тине.

Тимербулат тиҙ үк йоҡлап китте. Ул, бәләкәй сағындағы кеүек, әсәһенең күкрәгенә танауын терәп ятып, тыныс ҡына тын алып йоҡланы.

Гөлйөҙем, улының ҡалын ҡара сәстәрен артҡа табан һыйпай-һыйпай, күҙен дә йоммай, уйға сумды. Борсоулы уйҙар уға йоҡо бирмәнеләр. Бигерәк тә Айбулаттың уға «төпсөнмә» тип әйтеүе уның тыныслығын алды. Айбулат Гөлйөҙөм менән һаулашҡанда бик ашығыс ҡына: «Иөҙөкәй, һин беҙҙең килгәнде, киткәнде, кемдәр булғанын берәүгә лә асаһы булма. Һорашып килеүселәр булһа ла, белмәйемдән башҡаны әйтмә, яраймы. Иә, һау бул»,— тигәйне. Гөлйеҙөм ярар, тиеүҙән башҡа бер һүҙ ҙә ҡуҙғатманы. Ә баштағы оҙон, буталсыҡ уйҙар, умарта ҡорто ояһындағы кеүек, ҡапыл гежләп киттеләр. Гелйеҙөмдең зирәк күңеле, һиҙгер йөрәге бөтәһен дә асыҡ аңлай ине.



Беҙҙең ирекҡә сыҡҡан илебеҙгә әле өс йәш тә тулмаған. Йәш Совет власенең нығыуын, ҡағынып-талпынып үҫеүен тирә-яҡтан ҡамап килгән ете башлы ялмауыҙҙай интервенттәрҙен, береһе лә күрә алмай. Ә бында үҙ халҡыбыҙ араһында оялаған ҡарт бүре — капиталистәр, помещиктәр, байҙар, түрәләр — үҙенец ағыулы ауын һуҙып, донъяны дөрөҫ аңлай алмаған саф йәштәрҙе аулап ята. Шулар араһында хәҙер иң ныҡ зыян яһап яткан Ныязғол бай тыштан йылмая, эстән өшөй, ҡалтырай, улы Имай менән икәүләп, дүрт күҙ менән, Россияла булған бөтә контрреволюцион көстәрҙең берләшеүен көтәләр. Ошо Ныязғол ҡогкоһона бер нисә кеше эләгеп китеп харап булдылар. Хәҙер уларҙын, ҡатын, бала-сағалары асығып, илашып, Ныязғолға баралар. Ул башта уларҙы йыуатҡан булды, йылмайҙы, аталарының өлкән, бай кешеләр булып ҡайтасағын һөйләне, хәйер биргән кеүек итеп, ваҡ-төйәк аҡсалар ҙа биргеләне. Ә хәҙер уларҙан һырт биреп ҡаса, һөйләшеп тә тормай. Гелйөҙөм был турала күп кешеләрҙән ишеткәне бар. Ә Айбулат, Асатай, Баҡыйҙар бик йыш ҡына: «Етте инде ул хаингә, күҙендә уғы булһа, беҙҙе берәмләп атырҙай булып ҡарап йөрөй, тик ҡулы ғына ҡыҫҡараҡ»,—тиҙәр ине.

Ул күп уйланды. Осона сыға алмаған кеүек икенсе яҡҡа боролоп ятты ла Айбулаттың һыҙланып сығып китеүенә йәне һыҡрап китте. Һаман да шул байҙар этлеге тип уйланып ғазапланды. Әллә шунан ҡотолһалар, был тирә-яҡ тынып ҡалыр ине, тип ҡарарланы ла йоҡоға китте.

Таң атыуға, ут алырға югереп ингән Сабира Гөлйөҙөмдөң төндәге уйҙарын нығытты. Ул:

— Ай, Гөлйеҙем еңгә, бөгөн Ныязғол менән Имайҙы риставайт итеп алып киткәндәр бит, ишетмәнеңме әле?— тине.

Гелйөҙөм:

—• Юҡсы...— тине. Һорауҙар ҙа бирмәне.

Сабира, сыбыҡҡа ҡыҫтырып алған тиҙәк ҡуҙын һүндермәҫкә тырышып өрә-өрә, хәбәрен тағы ла тултырып ҡуйҙы:

— Ныязғолдоң әсе телен, батырлығын әйт әле. Самарҙан килгән кешеләр менән сатылдап ирешә, ти. «Мин китһәм дә, минен елем ҡалыр әле, мине ағай-эне онотмаҫ»,— тип әйтә, ти. Ә тегеһе, быға тиклем башын сумашаҡа һалып ултырған Имайы: «Ай, совет власе күпкә

түгел ул, тауҙан аҡкан ямғыр һыуы ни, ул ни»,— тип әйтә, ти. Иллә этләштеләр ҙә инде. Ҡәһәр һуккыр, ҡарундар!

Был хәбәрҙән Гөлйөҙөм иркенләп керһөндө лә тәҙрәгә ҡарап ҡуйҙы. Инде Айбулат ҡайтһа аҙыраҡ өйҙә. тынныслап торор, ил дә тыныс ҡалыр, тип уйланы.

## ПАРТИЗАНДАР

### 1

Хаят ауылдың һылыуы һанала. Уға тейгән сикһеҙГ б-айлыҡ, иркәлек, рәхәт тормош бик һирәктәргә эләгәине. Өс ҡатындың иң кесеһенән тыуған иркә ҡыҙ тирәяҡтағыларҙың иң бәхетлеһе булып үҫте. Хаятты күргәв кеше уның йеҙөнә, ҡуңыр күҙҙәренә ҡарауҙан туя алмай.

Хаят бынан ике-өс йыл элек үткән рәхәт көндәрен хәтерләй. Ҡаланан Фәрит килгәйне. Ул аҙ торҙо, күп һүҙҙәр һөйләне: һуғыш, революция, хеҙмәт, мәхәббәт,. тағы ла әллә ниҙәр тураһында. Китә торған көнө елкән залдың гөллө тәҙрәһе янында ул, Хаяттың ҡулын ҡыҫып, түшенә матур ал сәскә ҡаҙаны. «Мине көтөрһөң. бит, Хаят?» — тине. Хаят, ҡыҙарып, башын түбән эйҙе, ни тип әйтергә лә ояллы.

Хаят шул иҫтәлектәр менән ауылда яңғыҙһынып йәшәй. Ул ваҡыттағы ҡайнап торған кешеләр әллә ҡайҙа таралышып киттеләр, береһенән бер хәбәр юҡ.

Хаят бөгөн эсе бошоп, өй арттарындағы түңәрәк күлдең ситендә һыу еҫтөнә ҡарап, ниндәйҙер бер оҙон көйҙө аҡрын ғына йырлай ине. УнЫң күҙҙәренә мунсаға югереп инеп киткән Айбулат сағылып ҡалды. Ул күлден тал ҡыуаҡтары араһынан югереп сыкты. Ашығып сабышып килгән ес-дүрт һыбайлы бандиттең аттан һикереп төшеүҙәре булды, улар әләңләп ҡаранып, әле генә күҙ-' ҙән юғалған Айбулатты эҙләргә тотонғанда Хаятты күрҙеләр.

Хаятка былар ят кешеләр түгел ине. Ул бармағы менән, мунсаға тәртөп күрһәтте. Шунан тиҙ генә югереп, баҫҡыстарҙан менеп, үҙенең бүлмәһенә инде. Күҙҙәре көҙгөгә төштө. Биттәре яна, күҙҙәре зәһәрле асыу менән йылмаялар, йөрәк, ниңәлер, ғүмерҙә булмаған кеүек һикерә, ҡулдар аҙ ғына дерелдәй... «Тукта... был ни эшләп былай һуң әле, ниңә мин ҡурҡам әле?» Ул үҙе-



н шулай һораны. Караутына ултырып, йөрәгенә ҡулы менән баҫты. Бер көнө, уҡытыусы Баҡыйҙы тотогс алыш киткәндә, төптө былай түгел ине ләбаһа, бөгөн мин ни эшләп былай ҡурҡам һуң әле, тип уйланы. Ул урынышан тороп, тәҙрәһен һирпеп асты, ишек алдына күҙ. ташланы.

Ул арала шарт итеп бүлмә ишеге асылды. Хаят һиҫкәнеп, ялт итеп боролоп ҡараны. Әсәһе килеп инде.

— Атаҡ, балаҡайым, ни эшләп улай төҫөң ҡасып,. ҡобараң осоп киткән, ни булды? — Хаяттыа әсәһе Миңлекәй, ҡурҡкан һымаҡ, ҡыҙыныщ күҙҙәренә ҡараны. Хаят ендәшмәне, әсәһенә тәҙрәгә төртөп күрһәтте.

Унда ике бандит ике ҡулынан тотоп, тарткылашып„ һелкешеп, ниҙер әйтеп яуаплашкан Айбулатты һөйрәкләп алып баралар ине. Айбулат тартыла, ике яғына *лш* ҡарап, ниҙер һөйләй, ә артта берәүһе туйыр ҡамсы менән Айбулаттың арҡаһына өҙлөкһөҙ һуға, уның күлдәгетаҫма-таҫма булып теленә, үҙе бөтә кәүҙәһе менән ҡайҡайып китә, ләкин һаман тартыша.

Хаяттын, әсәһе ҡуркып:

— Атаҡ, хоҙайым, эй раббым, Айбулатты тотҡандарбит, — тине.

Хаят тәҙрәне япты ла әсәһенә күҙ һирпте:

— Әсәй, мин күрһәттем уны...

Миңлекәй, ни тип әйтергә лә белмәйенсә, ҡыҙына* ҡараны. Ҡаушап:

— Алйот, ағайың бит, — тине.

Хаят әле генә, әсәһенен, «ағайың бит» тигән һүҙенәш генә, үҙенең ниңә был тиклем ҡалтырауын төшөнгәндәй-: булды. Ләкин уның йөрәгенең ҡайһы ерендәлер, бик. алыҫтан, икенсе бер һиҙеү, бөгөн генә шундай йәш һылыуҙың ошондай эшкә батырсылыҡ итеүенә көс биргән* бер исем унын, мейеһенә бәрелде, теленә килде.

— Ә атайым?..

Миңлекәйҙең өҫтенә һалкын һыу һибелгән кеүек. булды. Унын, ҡаушауы, аптырауы ҡапыл баҫылды. Ҡурҡыуҙан асылған күҙҙәре, ярым асыҡ ауыҙ яңынан тыныс хәлгә әйләнделәр, ул ирендәрен ҡымтыны. Ул шул көйөбер аҙ уйланған һымаҡ торҙо ла тағы тәҙрәгә ҡараны. Хәҙер инде ишек алдына йыйылып киткән халыҡтыщ, ҡапканан, тәҙрәнән баштарын сығарып, йәшле күҙҙәрев һәрткән бисәләрҙең, тауышҡа сабыулап сығып өргән эттәрҙең, һаман урам буйлап туҡмалып китеп барған Ай-



булаттын, күҙҙәре аларған бандиттәрҙең өҫтөнә тыныс тшна күҙ ташланы. Ул, шулай бер талай ҡарап тороп,. Айбулатты һөйрәкләп барған бандиттәр урам мөйөшөнән боролоп киткәс кенә, ҡыҙына әйләнде:

— Тотоусылары кемдәр ине?

— Ҡотлобай ағайьш, Сәйетхужа Моратшин, тағьв ике кеше, уларын таныманым.

Ауыр, һалмаҡ итеп:

— Ауыҙыңдан тыныңды сығарма, һинең дә башыңды ашарҙар,— тине Миңлекәй.

2

Ете көн үтте.

Бандиттәр, үҙҙәренен, ғәҙәттәре буйынса, ауыл һайын яңғыҙ-ярым ҡалған совет эшселәрен, коммунистәрҙе, укытыусыларҙы аҫып, киҫеп, атып йөрөргә сығыгь киттеләр.

Ауылдан кешеләр сығып Айбулатты алты көн буйына тирә-яҡтағы тауҙарҙы, үҙәктәрҙе, һыу буйҙарын ҡалдырмай эҙләнеләр. Тик етенсе көн тигәндә Тәрәнүҙәк; төбәнән уның үлек кәүҙәһен табып алып ҡайттылар.. Күҙҙәре соҡоп сығарылған, ҡолаҡтары, танауы ҡыркылған ине.

Уны торпошаға урап, арбаға һалып, ишек алдына килтергәс, күмәк кешене күргән Ҡашҡар абалап өрөгє сыкты. Атты етәкләп барған Әпләс ағай эткә асыуланып:

— Кит артабан,— тине.

Эт ишек алдына таралған ауыр еҫкә моронон күтәреп, уңлы-һуллы боролоп еҫкәнде лә, ҡолактарын шымайтып, башын түбән баҫып, соланға инеп китте. Бында* Ҡашҡар үҙенен. бәләкәй хужаларына осраны. Солан' ишеге төбөндә Айбулаттын, өс балаһы, аталарын тейөге ҡайткан арбаны күҙҙәре менән йоторҙай булып, ҡараго торалар ине.

Был балаларҙыщ иң ҙуры Тимербулат әле туғандарына, әле арбаға ҡарай. Ул һулаҡай ҡулы менән туғандарының яурындары аша ҡосаҡлаған, уң ҡулы менән күҙҙәренә эркелгән йәштәрен һертә, уны туғандарына күрһәтмәҫкә тырыша. Унын тубыктары дерелдәп сүгє№ баралар, йерәгє үҙенә ишетелерлек булып дөрһөлдәп

1пуға, сикәләре ҡыҫҡан кеүек була, кемгәлер асыуы килә, туғандарына ҡарай, иламаҫҡа тырыша.

Арбаны ишек алдына килтереп туктаткан кешеләр, кәртә янынараҡ барып, аҡрын ғына ниҙер һөйләштеләр. Исмәғилде әллә ҡайҙа югерттеләр. Ауыл Совете пред-седателе Әхмәҙи килде. Үлек эҫегә ылбырап бөткәнгә күрә, йыуып күмеү мөмкин түгеллеге тураһында кәңәштеләр ҙә, шулай ғына күмергә булдылар.

Исмәғил, өлкән итектәрен һөйрәй-һейрәй, ашығып килде лә председателгә:

— Әхмәҙи ағай, мулла ҡәбергә күмдермәй. «Мин шосолмандар зыяратына кафырҙы ҡуйҙырмайым, йыназа ла уҡымайым», — ти. Ни эшләйбеҙ инде?

Арба янындағы биш-алты кеше бер юлы лыбырҙа-;шып һәйләшеп киттеләр:

— Ни ти, ни ти?

— Ҡүмдермәйем тип әйтә, ти, бит.

— Кем, мулламы?

— Ул ни эш тағы, ҡайҙан сыҡкаң закон ул тағы ла...

Әхмәҙи асыуы килеп, тәҫә ҡомһарҙы:

— Инде кәрәкмәгәнгә былсылдарға тиһәң, беҙҙең гмулланы ғына ҡуш инде. Әпләс ағай, бар әле һин һөй-ләшеп ҡайт. Ул дурак ни мажара ҡуптарырға маташа ;икән тағы!

Урта йәштәрҙән үтеп, башына сал инә башлаған Әпләс, йәһәт атлап, муллаға китте.

Өс тәҙрәһе урамға ҡараған бейек ағас өйҙөң ҡапҡа эргәһендәге бәләкәй ишекте асып, Әпләс ишек алдына инеп китте. Ишек алдында мулла тәһәрәт алып ултыра, таҡыр ерҙең дүмсәһенән аҡкан һыуы боролоп-боролоп Шөҙәккә төшеп эркелә. Ҡаҙ себештәре, сотор-сотор итеп, берелен-берелһе сукып ебәрәләр ҙә, эркелгән һыуҙы су-ҡыштары менән һөҙөп эсеп, баштарын ургә күтәреп йо-талар. Ике ҡулы менән таяҡка таянып, алға бекөрәйә биреп, мулла эргәһендә Ҡаҙанҡап Абдулла тора ине.

— Әссәләмәғәләйкүм,— тине Әпләс.

Мулла менән Ҡаҙанҡап икеһе бер юлы:

— В.әғәләйкүмәссәләм,— тинеләр.

Әпләс яйлап ҡына һүҙ башланы:

— Иә, хәҙрәт, мине һиңә ебәргәйнеләр. Бына минеи жүрше Айбулат ҡусты мәрхүм булып ҡалды. Шуны бө-ргөн ерләргә кәрәк ине.



Мулла өндәшмәне. Ситектәренә мәсих тартты. Галоштарын ҡағып кейҙе. Соландың бүрәнәһенә ҡаҡкан сөйҙән ҡыҙыл башлы оҙон таҫтамал алып, уҡына-уҡына, һөртенә башланы: «Иннә әнзелмәһә фей ләйләтел--кәдр-» — ҡайһы ерен ишеттереп, ҡайһыһын ауыҙ эсе-нән генә уҡып, оҙаҡ итеп һөртөндө. Шунан һуң ғына яуап бирҙе.

— Мин бер ҡабат әйткәнмен бит. Мосолмандар зыяратына кафырҙы күмдерә алмайым. Теләһә ҡайҙа күмегеҙ, ихтыярығыҙ.

Әпләс, урынынан ҡуҙғалып, алға бер-ике атланы ла, -кулдарын артҡа ҡуйып:

— Һуң, мулла, уны кафыр тип тә әйтеп булмай инде. Мосолмандан тыуған үҙебеҙҙең кеше ләбаһа.

Мулланың тауышы күтәрелеп китте.

•— Һин, Әпләс ҡустым, шәриғәтте миңә өйрәтмә инде. Мин уны, әлхәмделиллә, маҡтаныу булмаһын, үҙем дә яҡшы беләм. Эһе, эһе, — тип тамаҡ ҡырып ҡуйҙы.

Быға тиклем өндәшмәй ҡарап торған Ҡаҙанҡап мулланы йөпләне:

— Шулай, шулай, мулла. Әпләс ағай, һин беҙҙең мулланың алдына кеше сыға алмағанын беләһең бит инде.

Әпләс бик уңайһыҙланды. Түбән ҡарап:

— Уныһын беләбеҙ белеүен. Тик әле бына илдең аҙаматы, бынамын тигән бер ир-егете үлгәс, йыназалап, арыу тәрбиәләп ҡуйыйыҡмы әллә тип йерегән йөрөш бит инде. Былаиға ҡалһа, әҙәм балаһын ҡайҙа күмһәң дә ятып ҡала ғуй. Теге донъялағыһы, уныһы, беҙҙен. ҡулда түгел инде ул. Унда беҙҙән башҡа ла хөкөмсөләр . бар-ҙыр әле.

Уға ҡаршы Ҡаҙанҡап:

— Ҡуй әле, Әпләс ағай, уны инде һин ил аҙаматы тимә, коммун коммун инде ул. Уның яҡшыһы ла, яманы ла бар, — тип тотонғайны, ул арала ҡапҡаның ике яғын да шатыр-шотор асып ебәреп, бер юлы унлап кеше килеп инделәр. Күбеһе йәштәр. Алда Хөсәйен, Исмәғил, Зәйни.

Улар бер ҙә тартынып торманылар. Килеп ингәс үк Хөсәйен:

— Йә, Әпләс олатай, тиҙ буламы, юҡмы? Йәһәтерәк ҡыймылдаһағыҙсы, ни эшләп тораһығыҙ! — тип ҡысҡы-рып ебәрҙе.

Бүтәндәре лә:

— Эйе шул, көн кисәүләп китте лә, яҡты күҙҙә ерләргә кәрәк ине,— тиештеләр.

Әпләс, килеүселәргә ҡарай ыңғайлап:

— Юҡ бит, бына мулла риза булмай,— тип асыуланып ҡысҡырҙы.

Килеүселәр барыһы бер юлы сыуылдашып киттеләр. Олораҡтары иплән һөйләшергә ҡушалар, йәштәр уларҙы бик тыңлап тормайҙар.

— Ни эшләп күмдермәй ул? Уның ни эше бар? Зыярат йорттоҡо!

— Иыназа уҡымайым ти бит.

— Уҡымаһын, уның йыназаһы кемгә кәрәк!

— Тек&рөргә лә кәрәкмәй уның уҡыуы! Харап икән!

Ул арала Әхмәҙи ҙә килеп инде. Ул, йыйылған кешеләрҙе аралап, мулла янына барҙы:

— Иә, мулла, был ни эшең һинен.? Айбулат үҙебеҙҙең, ҡәҙерле кешебеҙ ине. Ауылға, халыҡҡа яҡшылыҡтан башҡа ни зыяны тейҙе. Кешеләргә изгелек эшләргә тырышып йөрөп ҡорбан булды ул. Күмергә кәрәк, мулла, — тине.

Мулла, соландан сапанын алып сығып, еҫтөнә кейә башланы, үҙе Әхмәҙигә ҡарай-ҡарай:

— Әхмәҙи энем, һин йәш кеше. Китап бына былай тип әйткән: әгәр ҙә бер кеше, хатта ул урыҫ булһа ла, алланы бар тип белһә, уны мосолман зыяратына күмергә ярай, тигән. Ә коммунист булған кеше, ул бөтөнләй алланы танымай.—Мулла һүҙенен, ошо еренә еткәндә, төкөрөгөнә сәсәп тотондо. — Шулай булғас, ул кафырҙың да кафыры була тигән һүҙ инде. Беҙ уны күмергә рөхсәт итһәк, илдән бәрәкәт күтәреләсәк, ямғыр яумай, иген ҡороясаҡ, һәм барыбыҙ ҙа тамуҡлы буласаҡбыҙ. Әлғаязо билләһи...

Муллаға өңөлөп ҡарап торған Ҡаҙанҡап:

— Эйе, дерөҫ, эйе, дөрөҫ бит инде,— тине.

Мулла тағы ла Һуҙыңҡырап, һүҙҙәрен яйлап-яйлап •әйтергә тотонғайны, халыҡтың түҙеме етмәне.

— Ҡуйсәле, мулла, бөтмәҫ һинең әкиәттәрең! — тип жысҡырыштылар.

—• Теге донъя була торған булһа, иң тәүҙә тамуҡҡа здулла үҙе китер әле. Баҙарҙа эсеп йөрөгәнен оноҡкан, хеше тикшерә!

Халыҡ күбәйгәндән күбәйҙе. Мәзин килеп мулланы •яклаша башланы.



Әхмәҙи ҡул ғына һелтәне.

___Ҡуйығыҙ, иптәштәр, әйҙәгеҙ, үҙебеҙ күмәбеҙ! — тине.

— Эйе шул, ни. нәмәһе уға инәлеп торорға! Совет менән күмәбеҙ. — Йыйылған кешеләр мулланы әрләй-әрләй сығып киттеләр.

— Оятһыҙ, ни һөйләй бит. Ожмах була торған бул\\а, Һинән алда Айбулат ағай инер әле. Әрәм тамаҡ,— тине Х&сәйен. Асыуҙан уньщ күҙҙәре уйнай, үҙе ерг» төкөрөнә ине.— Ҡайҙан табып тора шәриғәтен. Атам заманындағы иҫке китаптарҙа ҡайҙан коммунистәр тураһында яҙылған инде, алдаҡсы!

— Ысын дабаһа!

— Әрәм тамаҡ шул. — Хөсәйен менән ҡатар барғав Зәйни ҙә элеп алып китте. — Миңә анау тиҙәк тапатҡан; өсөн биш тәңкәне тәки бирмәй бит, ҡарун.

— Бнрер, бирмәй ни, көтөп тор. Етмәһә, анау Ҡаҙанҡабы, зсе кәпәйеп, мулланы ыңғайына һыпырып тора. Шулар күрһәтеп үлтерткәндер әле.

— Булыр. Әллә Айбулат ағай Ҡаҙанҡаптың оло> өйөн клуб иттергәнен ул оноткан тиһеңме?

Ҡартыраҡтар уларҙы тыйып алдылар.

— Ҡуйығыҙ, балалар, ҡыҙмағыҙ. Ишетеп ҡалһалар,. әллә ни тиерҙәр. Коммунист тип, шулай итәләр бит инде.

—• Коммунист булһа, коммунисте кем тип уйлай улар, кеше түгел типме ни? Улайға китһә, улар үҙҙәре әҙәм түгелдәр.

Улар, ҡыҙыу-ҡыҙыу барып, Айбулаттын, ишек алдына тулып киттеләр. Унда бисәләр ҙә күмәк йыйылып киткәйне. Улар ҙа мулланьщ былай ҡыланыуына асыуланып геүләштеләр.

Әхмәҙи олораҡтар, йәштәр, совет активтәре менән дә бер аҙ кәңәшеп алды.

Үмәр Айбулаттың йыназаһыҙ ерләнеүенә һис тә риза була алманы.

— Эй улым, — тине ул Әхмәҙигә,— йыназаһыҙ күмелгән әҙәмдең гөнаһы теге донъяла бер нисек тә киселмәй тигән бит китапта. Мулланың үҙе дөмөгөп кенә> китһен ине лә, бына кейәү мәрхүмдең үҙенә ауыр булыр, тип ҡурҡам шул.

Тимерғәле ағай быға ҡырҡа ҡаршы сыҡты.

— Юҡты һейләмә, ҡорҙаш. Китап әйткән: халыҡ өсөн, хаҡлыҡ өсөн дошман ҡулында ҡаны түгелеп

донъянан киткән кеше шәһит булып үлә, тигән. Ә шәһит үлгән кешенән теге донъяла бер кем дә һорау алмай, яза ла бирмәй. Ундай кешегә һигеҙ ожмахтың да ишеге асыҡ була, тип әйткән. Беҙҙең Айбулат мәрхүм бына ошо ҙур шәһит үлеме менән донъянан китте. Мулла, үҙенең яуыҙлығына барып, туҙға яҙмағанды һөйләй ул, үс итә. Әйҙә, һөйләһен, уның бөтә һөнәре шул инде. Ә Айбулатты без үҙебеҙ хөрмәтләп, ҡәҙерләп күмәбеҙ. Әпләс аят укыр", беҙ доға ҡылырбыҙ.

Ҡарттарҙың бөтәһе лә Тимерғәленең һүҙенә риза булдылар.

— Ысын, бик һәйбәтләп үҙебеҙ ерләйек, үҙебеҙ.

Хесәйен менән Исмәғил үҙ фекерҙәрен әйттеләр:

— Әхмәҙи ағай, беҙ, комсомолдар, уның зыяратына ҡыҙыл йондоҙ яһап ҡуйырбыҙ.

— Эйе, Әхмәҙи ағай, ана Покровкала моряк зыяратына ҡуйғандар бит, шунын кеүек итеп.

— Дөрөҫ, бик һәйбәт булыр. Йондоҙ ҡуйырбыҙ, рәшәткә менән уратырбыҙ,— тине Әхмәҙи.

— Рәшәткә эсенә ағас ултыртырбыҙ, гелдәр сәсербеҙ,— тип өҫтәне Диләкәй.

Айбулаттың үҙенең өйә, бала-сағаһы янында актыҡ тапҡыр ике-өс сәғәт самаһы тоттолар ҙа әҙерләнгән ҡәбергә алып киттеләр.

Арба ҡуҙғалып киткәндә, уның өс балаһы ла ишек алдына сыҡҡайнылар. Улар, был үлемдең бөтә ҡурҡынысын, бөтә дәһшәтен яңы ғына төшөнгән кеүек, аталарын бетенләйгә юғалтыуҙарына әле генә ышанған кеүек, өсеһө бер юлы илап ебәрҙеләр. Улар янына йыйылған бисәләр уларҙы әүрәтергә тырыштылар, ләкин бер-ике һүҙ әйтәләр ҙә үҙҙәренең йәштәренә быуылалар ине.

Ике бәләкәй бала кискә тиклем илап, ҡараңғы төшкәс кенә йоҡлап киттеләр. Айбулаттың ҡәйенбнкәһе Шәрифә әбей яңғыҙ билдәш һыйырҙы һауып һөт эсерҙе. Улар янында иптәшкә йоҡларға ҡалды. Тимербулат кендеҙ туғандарын әүрәтеп аҙыраҡ түҙгән булһа ла, улар йоҡлап киткәс, үкһеп иларға тотондо. Шәрифә әбей, уның эргәһенә ултырып, үҙе иламаҫҡа тырышып, уны әүрәтте:

— Сеү, балам, илама. һин ҙур бит. Ана туғандарың һиңә ҡарап ҡалдылар. Уларҙы ҡарарға кәрәк. Берәй яҡҡа эшкә барырһың. Ашарға оноғоҙ ҙа бөткән. Ҡоро һөт менән генә тамаҡ туйҙыра алмаҫһығыҙ, илама, ҡуй,— тине.



Тимербулат аҙыраҡ тынысланды. Башынан һыйпап ултырған Шәрифә инәһенә:

— Инәй,— тине.

— Әү, балам.

— Атайымды кем коммунист тип күрһәтте икән?

— Ҡайҙан беләһең инде уны, балам. Илдә дуҫ та күп, дошман да күп бит. Шуйда бер алла ҡарғағаны күрһәткәндер инде, үҙе шул көнгә ҡалғыры...

Тимербулат бер аҙ шымып ятты.

— Инәй, әсәйем дә ҡайтмаҫмы икән ни инде?

— Ҡайтыр, балам, һау ғына йөрөһен, ҡайтыр.

Шәрифә әбей был һүҙҙәрҙе әйткәндә, үҙенең һүҙҙәренә үҙе лә ышанмай йне. Сөнки быға тиклем бандиттәр ҡулына эләккән бер кешенең дә кире әйләнеп ҡайтканы юҡ. Гөлйөҙөмдө тотоп алып киткәндәренә ай ярым булды, хәбәре лә юҡ ине. Бер нисә тапҡыр үлеген сығып эҙләнеләр, тапманылар. Туғаны иҫенә тешкәс, Шәрифә әбейҙең йөрәге тағы ла нығыраҡ һыҡрап китте.

— Инәй, әсәйем ҡайтмаһа, уны барыбер эҙләп китәм мин.

— Юҡты һөйләмә, балам, һау булһа, үҙе лә әйләнеп ҡайтыр. һин уны ҡайҙан табаһың, туғандарын, кемгә ҡарап ҡалыр?

— һин ҡарап торорһоң. Олатайым ҡарашыр. Мин, күп булһа, ун көн йөрөрмөн.

Әбей тағы ла:

— Бушты һөйләмә, Тимербулат,— тине. Ул Ти&ербулаттын, бала көйенсә бындай уйға килеүенән ҡурҡты. Атаһы менән эсәһе харап булдылар, өсенсеһө юғала бит ннде, тип уйланы.

Уның бынан ун көндәр элек Айбулат менән һөйләшкән һүҙҙәре иҫенә төштө. Ул ошолай өс бала менән йоҡлап ята ине. Берәү ишек ҡаҡты, һикереп тороп асыуға, Айбулат килеп инде. Ул ашығыс ҡына һаулашты, балаларҙың хәлен һораны, «ни нәмәң бар, ҡәйенбикә, ашарға бир, бик асыктым», — тине. Шәрифә соландағы һике аҫтынан көршәк менән ҡатыҡ сығарып, ҡаймаҡ туғып бирҙе. Айбулат уны ҡабалан ғына эсте лә, ҡалғанын үҙенен. котелогына тултырып, бер таба сөсө күмәс алып китте. Ул киткәндә Шәрифә, борсолоп:

— Кейәү, бигерәк тә хәтәр йөрөйһөң бит. Киткән һайын әтрәткә тип китәһең, үҙен, һаман әйләнеп ҡайтаһың, эләгеп ҡуймаһаң ярар ине,— тине.

Айбулат уға ҡаршы тәрән көрһендө.

— Эй ҡәйенбикә, Гөлйөҙөмдөң йә тере, йә үле хәбәрен ишетмәмме тип йөрөйөм бит. Ҡайтҡан һайын инде ҡайтмаҫҡа тип китәм. Юҡ, булмай бит. Бәлки, бөгөн ҡайтып килгәндер, инде бөгөн ишек ҡаҡҡанда ул ҡаршы сығыр кеүек була ла тора...

Айбулат кеҫәһенән тәмәке сығарып төрҙө, тышҡа уты күренмәһен тип, ишекте япты.' Ҡараңғыла быҙылдаған тәмәке уты янында ике кеше һаҡлыҡ менән генә һөйләштеләр.

— һау булһа, ҡайтыр, — тине ул ваҡытта ла Шәрифә әбей,— үҙең харап булып ҡуйма.

Айбулат тағы ла уфланы.

— Ай Гөлйөҙөм, Гөлйөҙөм... — Ул тағы уйға ҡалды. Уның тауышы әллә ҡайҙан, алыҫтан килгән кеүек ҡалын, баҫынҡы ине. Ул шулай байтаҡ баҫып торҙо ла, иҫенә бер нәмә төшкән кеүек, ҡапыл ҡуҙғалды. — Ярай, ҡәйенбикә, хуш, балаларҙы яҡшы ҡарарға тырыш. Мин инде килһәм дә бер генә килермен. Беҙҙең партизандар отряде бынан етмеш саҡрымдар самаһында ята. Мин бында волостәге бер аҙ эштәремде бөтөрәм дә, Селекле буйлап юнәләм. Хуш.

— Хуш. һау йөре...

Шәрифә әбей Айбулаттың «бер генә килермен» тип әйткән һүҙҙәрен тағы иҫенә төшөрҙө. Ана шул «бер генә» килеүендә уны харап итеп ҡуйҙылар.

## 3

Ауыл урамынан өс һыбайлы уҙыуға ярты сәғәттәй ҙә ваҡыт үтмәне, оло юлдың саңы әсе ел менән һирпелеп, ярты ауылдын, өҫтөн ҡапланы. Тапыр-топор иткән ат тояғы, кешеләрҙен, ҡысҡырышҡан тауыштары ишетелде. Саң араһынан һыбайлылар күренеп ҡалалар, тик айырым-асыҡ берәүһененң дә 'теҫе, йөҙө күренмәй ине. Эҫелектән бер ҡайҙа ла сыҡмай ятҡан халыҡтың һирәкләп урамда ҡалғандары ла, был сандыщ тигенгә күтәрелмәгәнен һиҙеп, өйҙәренә таралыштылар. Урамдар буш ҡалды.

Өй артында күләгәлә ултырған Тимерғәле ҡарт менән Үмәр ҡарт ҡына урындарынан ҡуҙғалманылар. Улар, биттәрен ҡояш сыуағына йыйырып, ҡулдарын



манлайҙарына ҡуйып, килеүселәргә ҡарап ултыра берҙеләр.

Тимерғәле ҡарт:

— Әлеге аҡтармы икән тағы ла, короғорҙары, — тине.

— Шуларҙыр инде, ҡәһәрлектәр, ҡороттолар бит донъяны, дошмандар. Тағы ла ни һәләкәт ҡуптарырҙар икән инде былары?

Саң араһындағы кешеләрҙен, төҫтәре асыҡ күренә башланы. Шалтыр-шолтор иткән арбалар, өсәрләп теҙелгән атлылар, яңғыҙлы һыбайлылар, ауылдың көрпөлдәп ятҡан саңлы тәрән юлын тағы ла борхолдата-борхолдата, урамға тулға киттеләр,

Пулемет ултыртҡав тимерле арбалар арттараҡ киләләр ине.

һыбайлыларҙың ҡайһыһында мылтыҡ, ҡайһыһында ҡылыс, ҡайһыларында икәүһе лә бар. Кейемдәре төрлеһөнөң төрлөсә: йәшел һалдат кейемдәре бар, баштарына фуражка кейгәндәр, эҫе булыуға ҡарамай, бүрек кейгәндәре лә, таҡыя кейгәндәре лә, яланбаштары ла бар. Барыһын да ҡоро саң ҡаплаған. Күҙҙәре йылтырап күренә. Тотош йәшелдән кейенгән командир һымаҡ берәүһе Үмәр ҡарт менән Тимерғәле ҡарт янына килеп туҡтаны.

— һаумыһығыҙ, олатайҙар, ауыл Советегеҙ ҡайҙа? — тип һораны.

• — Бик һаубыҙ әле, бик һаубыҙ.

— Ауыл Советe, ана мәсетте үткәс, ҡыҙыл түбәле өлкән һары өйҙә булыр.

Командир:

— Әһә, яҡшы,— тине. Уның яҡшы тураты баҫҡан урынында бер нисә ҡат әйләнде, башын салыҡлал, алғы аяҡтарын күтәреп, енелсә ҡағып ҡуйҙы. Тик эйәһе уның ауыҙлығын ныҡыраҡ ҡулға алып, бөйөрөнә ҡамсы менән бер тартҡас ҡына, ынғайға килеп, юртып китте. Командир, отрядена тура барыу билдәһе итеп, уң ҡулын күтәрҙе. Үҙе алғараҡ сығып, атын атлатып китте. Күтәрелгән ҡулға ҡарап, уның артынан башҡалар ҙа ат еҫтөндә һәлмәк кенә һелкенеп киттеләр.

Үмәр менән Тнмерғәле ҡарт урындарынан торҙолар.

— Былар аҡтарға оҡшамайҙар түгелме һуң? Бүтән берәй халыҡмы икән? '

— Әллә, былары йомшаҡ күренәләр. Әллә ҡыҙыл партизандар килдеме икән?

-- Ни эшләп араларында беҙҙең балалар күренмәне һуң әле?

•— Бәй, былары башҡа әтрәттер.

Улар икәүләшеп, өй эргәләп, ауыл Совете яғына йүнәлделәр.

Ҡарттар барып еткәндә, баяғы командир Әхмәҙиҙән кемдә, ҡайҙа тамаҡ туйҙырырға мөмкин, һөт, ҡатыҡ, май кеүек нәмәләрҙе кемдәрҙән һатып алырға була икәнен һорашып тора, уның эргәһендәге бер нисә иптәш командирҙәре йыйылышып һөйләшеп, бөтәһе лә тигәндәй тәмәке урап тоҡандырып торалар ине.

Әхмәҙи:

— Туҡтағыҙ, ошонда туҡтарға була. Ә ашау-эсеү инде бында һәр кемдә мөмкин булыр,— тине.

— Ярай улай булһа, беҙ хаҡын түләрбеҙ.

Быны тыңлап торған Тимерғәле менән Үмәр Әхмәҙи эргәһенәрәк килеп:

— Былар кемдәр булалар һуң, аҡтармы, ҡыҙылдармы?.— тип шыбырҙап һоранылар.

— Былар аҡтар түгел, ҡыҙыл партизандар, — тине Әхмәҙи,— бына уларҙың тамаҡтарын туйҙырырға кәрәк булыр. Тимерғәле ағай, бер икәүһен һин үҙеңә алып кит. Аҡсаһын бирербеҙ, тиҙәр. Бер нисәһен, атай, үҙебеҙгә алып ҡайт. *

— Ярай, ярай, әйҙә барһындар. һөт, ҡатыҡты ни аҡсаһыҙ ҙа ашатырбыҙ уны, һатыпалған ризыҡ түгел әле, мал һөтө,— тине Тимерғәле ҡарт.

— Ашатмай ни, ашатырбыҙ, Бара ғына күрһендәр. Булғанын йәлләмәбеҙ,— тине Үмәр ҡарт. Ул бер аҙ партизандарға ҡарап торҙо ла: — Минең кейәү мәрхүмдең иптәштәрелер инде был егеттәр. Барһындар берүк. Хәлдән килгәнен аямам,— тип өҫтәне. Шунан күҙенә эркелгән йәшен ҡартайып ҡатҡан бармаҡтары менән һертөп ҡуйҙы. Тәрән көрһөнде. Партизандар уға үҙ балалары кеүек яҡын тойолдолар, •

Командир үҙе эргәһендәге икенсе бер кесе командирғә ҡарап:

— йәгеҙ, иптәштәр, хәҙер үк ауылдың тирә-яғына посҡа кешеләр ҡуйығыҙ. Дүрт яҡҡа һәр посҡа икешәр кеше, связь өсөн бер кеше ҡуйығыҙ. Ҡалғандарығыҙ ейҙәргә таралығыҙ. Ашаған өсөн түләргә. Тағы бер тапҡыр әйтәм, иптәштәр, кеше нәмәһенә һорамайынса ҡағылмағыҙ. Үҙегеҙҙе ипле тотоғоҙ. Әгәр ҙә берәүегеҙ бер



кешене рәнйетә торған булһа, үҙенә үпкәләр. Штаб ошонда булыр.

___Тыңлайбыҙ, иптәш командир. — Уньщ янындағы кесе командирҙәр, бөтәһе бер юлы честь биреп, таралып киттеләр.

Быға тиклем бандиттәр килгән һайын, билалдан ҡасҡан тауыҡ себештәре кеүек, ҡасып-боҫоп бөтә торған халыҡ был партизан отряде менән әллә нисек ҡайнашып, аралашып китте. Улар менән һөйләшәләр, көлөшәләр. Улар араһында гармунсылар, бейеүселәр, йырлаусылар ҙа бар икән. Ашап, эсеп, ял итеп алғандан һуң, улар йыйылышып, уйнап, бейегт, зыҡ ҡуптылар. Быға ауылдың йәштәре ла ҡатнашты. Бандиттәрҙең бәйләнеүенән ҡоттары осоп бөткән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бөгөн ирәбе йөрөйҙәр, ҡасмайҙар, партнзандарға аш бёшереп, сәй ҡайнатып, ҡунаҡ һыйлағандағы кеүек, йәһәтләп йәрөйҙәр.

Ауылдан бер юлы ун алты кеше отрядкә добровольно инде. Улар штабта бындағы тормош, бандиттәрҙең йөҙәтеүҙәре, талауҙары, кемдәрҙең уларҙы яҡлауҙары тураһында байтаҡ мәғлүмәттәр бирҙеләр.

Отрядкә яҙылған егеттәр янында, партизандарҙы үҙенең яҡындары кеүек эҫе күреп, Тимербулат та урағып йөрөй. Әле генә отрядкә яҙылған Хөсәйен Тимербулатты командирға күрһәтте:

— Фролов иптәш, бына бандиттәр үлтергән Айбулат ағайҙың улы,— тине.

Командир:

— Ә, Айдаровтың улымы ни? — тип, ул йәлләгән, иркәләгән күҙҙәре менән Тимербулатҡа ҡараны. Уны үҙенең янына саҡырып алып һораша башланы:

— һин Айбулат ағайҙың улымы?

— Эйе.

Фролов Тимербулаттың был тиклем атаһына оҡшағанлығына иҫе китте. Уның һөйләгәндә ҙур ҡара күҙҙәрен һирпеп ҡуйыуы, үтә ҡыйыулығы, һәр нәмәгә ентекләп ҡарауы, ҡыр танауы, ауыҙының аҙыраҡ ослайып тороуы, хатта тауышының да ҡалынса кер булыуы, бөтәһе лә уға яҡын иптәше Айбулатты күҙ алдына баҫтырҙылар.

— Тағы кемдәрегеҙ бар?

— Ике ҡыҙ туғаным бар. — Тимербулат, һүҙҙән

туктай биреп, башын түбәң баҫты ла: — Әсәйемде бандиттәр алып киттеләр,— тине.

Фроловтың ҡаштары йыйырылды, асыуы килеп, тешен ҡыҫты. Ун. ҡулы менән билендәге ҡылысынын, эфесенә таянып, ергә ҡараны.

Тимербулат иртәнән бирле кемгә барып, ҡайһылай итеп әйтергә.белмәй йөрөгән үҙенен, мөһим уйын командирҙең йомшаҡ һүҙҙәре йоғонтоһо менән үҙенән-үҙе әйтеп бирҙе:

— Командир ағай, мине лә отрядкә яҙ!

Командирҙең уйсан йөҙө көләмһөрәп, шаян теҫкә ә.йләнде. һоро күҙҙәрен көлдөрөп Тимербулатҡа ҡараны:

— Ә-ә... ҡыҙыл партизан булырға итәһеңме ни, әйҙә. Атайындың урынына партизан булып ал да дошмандарҙан уның үсен алырһың. Нисә йәштәһҫн һуц?

— Ун биш тулып ун алтыға сыҡтым.

— У-у, полный егет булғанһың, әйҙә! Мылтыҡ ата беләһенме һуң?

— Аҙыраҡ беләм, өйрәнермен.

Улар янына килеп еткән Исмәғил дә йөпләп ҡушылды.

— Ул бик боевой егет. Хәҙер өйрәнер. Үҙе союз молодежи ағзаһы.

Командир, баҫҡыста ултырған еренән тороп, отрядена хәбәр итте:

— Иптәштәр, бына тағы бер доброволец. — Ул Тимербулатты, яурынынан ҡосаҡлап, партизандарға күрһәтте.

Иптәштәре, шаулашып ултырған ерҙәренән боролоп, быларға ҡаранылар.

— Бына ул, вояка, ҡарағыҙ! — тине командир.

Партизандар шаулашып, көлөшеп ебәрҙеләр. Араларындағы рус иптәштәре:

— Молодец!

— Исеме кем? — тип ҡысҡырып һораштылар.

— Тимербулат Айдаров, — тип асыҡлап таныштырҙы командир.

Тимербулат был туғандарса шатлыҡлы шау-шыуҙан аҙыраҡ оялып ҡыҙарҙы, ләкин бирешмәне. Үҙен влкәндәр араһында өлкән кеүек хис итә башланы.

Ул, ҡыуанып, өйөнә югереп ҡайтты. Ахылдап, Шәрифә инәһенә һөйләне:

— Инәй, мин отрядкә индем. Хәҙер китәм, — тине ул.



Шәрифә аптырап китте:

— Ни юкты һөйләйһең! Кит, алйот, башымды әйләндереп йөрөмә. Анау быҙау әллә ҡайҙа сығып киткән, ҡарап алыга ҡайт! — тине.

— Юҡ, инәй, мин яҙылдым инде. Ҡайҙа минең күлдәк-ыштан. Инәй, ҡайҙа тием? Таҡыям да әллә ҡайҙа...

Ул шулай югерекләп, аҡтарынып, өйҙең аҫтын-өҫкә килтерҙе. Ямаулы күлдәк-ыштандарын таптьь Бөтә аламаларҙы аҡтарып бетерҙө.

Шәрифә әбей орошоп та, асыуланып та, илап та ҡараны, ләкин Тимербулат быларҙыц береһенә лә ҡараманы.

— Юҡ, инәй, мин барыбер китәм. Илама, инәй. һин Әлфиә менән Ғәйшәне ҡарап торорһон, әле. Нинә илайһың инде?

—• Иламай ни, атайың юғалды, әсәйең юғалды, инде һин китәһең. Мин, ҡарт кеше, ҡалайтып барыһын да күтәрәйем. — Шәрифә әбей еңдәре менән күҙҙәрен һөрттө.

Тимербулат, ҡыҙыулығын аҙыраҡ баҫып:

- — Ниңә мин юғалайым, ти. Мнн, бәлки, әсәйемде табып ҡайтырмын.

— Таптың, һиңә ҡалған. Был тиклем үҙһүҙле булырһың икән!

Тимербулат туғандарыньщ әле береһен, әле икенсеһен тотоп яратты. Уларҙы ҡалдырыу бик йәл ине. Ләкин ул, шатлығынан, был юлы иламаны ла. Әйтерһең, уның атаһы терелде, йәки әсәһе әйләнеп ҡайтты.

Шәрифә әбей уны еңә алмағас:

— Тамағың ас бит, исмаһам, ҡатыҡ эс,— тине.

— Бир, эсәм.

Ул унан-бынан ғына ҡатыҡ эсте лә тағы штабҡа китте.

Урамдан барғанда, һулаҡай яҡта, Сабира еңгәләрҙең өй артьшда, бер төркөм партизандар гармунға ҡушылып, «Ҡом бураны» кейенә йырлашып ултыралар ине. Ул, аҙыраҡ туктап, йырҙарын отоп алды:

Уралдары, Уралдары,
Таш икән урамдары,
Башты түгел, ташты вата
Болыпевик ҡоралдары.

Иырлайҙар, туктап һөйләшәләр, шаулап көлөшөп алалар, ял итәләр ине.

Ҡояш байыны, ай ҡалҡты. Кис, матур йәйге һалҡын кис ине.

Отряд, килгәндәге кеүек, яңынан тейәнеп, йыйынып, китергә бойороҡ көтөп, урамға теҙелде.

Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр. Ул ҡырҡып яһалған бәләкәс мылтыҡты арҡаһына аҫты. Аттың бауырлығын күтәреп, ҡуржындағы ваҡ-төйәген тартып бәйләне. Эйәренә яҡшылап ҡайҡая биреп ултырып, иптәштәре рәтенә теҙелде.

Инде партизандарҙың төҫтәренә көндөҙгө шаянлыҡ урынына етдилек сыҡҡан. Барыһы ла өндәшмәйҙәр, ендәшкәндәре лә бик аҡрын һейләшә. Тимербулат, улар ыңғайына ҡаштарын йыйырып, командиргә ҡарап тора ине. Уның һул яғынан берәү килеп:

— Иә, улым, хуш инде,— тине.

Ул Тимербулаттың олатаһы Үмәр ине.

— һау йөрә, батыр бул. Яҡшы кешеләр менән китәһең, әрәм булмаҫһың, хуш,— тине.

Тимербулат олатаһына ҡул биреп хушлашты.

— Ярар, олатай, һин эйткәндәрҙе онотмам,— тине.

Унан һуң Тимербулат янына Шәрифә инәһе килде.

— Улым, хуш инде, һау йөрө. Хат яҙ,— ул күҙ йәштәрен һөрттө, Тимербулаттың өҙәңгегә баҫҡан аяҡтарын һөйҙө.

— Хуш, инәй,— тине Тимербулат. Уның йөҙө тыныс ине. — Хат яҙырһың. Әсәйем мин юҡта ҡайтып килһә, әйтерһең, улың ҡыҙыл партизан булып китте, тиерһең.

— Ай бала, бала... — тине Шәрифә әбей. Үҙе ситкәрәк тайпылды. Улар Үмәр ҡарт менән икәүләп, отряд ҡуҙғалып киткәнсе, шунда ҡарап тороп, оҙатып ҡалдылар.

Фролов:

— Прямо шагом марш! — тип команда бирҙе.

Отряд ҡуҙғалып китте. Көндөҙ килгәндәге кеүек, арбалар шылтыраны, аттар бышҡырышты. Кешеләрҙен гөмбөр-гөмбөр һөйләшкән тауыштары, партизанлыҡҡа яҙылыусыларҙы оҙатыусыларҙың хушлашыуҙары ишетелде.

Отряд ай ҡалҡҡан яҡ тауҙы артылып төшә башланы. Ана, алда командир Фролов бара. Уның артында биш-алты рәт өсәр-өсәр теҙелгән һыбайлылар, унан арбалар, йөктәр тауҙың башына менәләр ҙә, һарҡыуға төшөп, күҙҙән юғалалар.



Улар артынан, көндөҙгө кеүек үк, саң күтәрелде, ай ятстыһын тоноғайтты. Шалтыр-шолтор иткән тауыштар, алыҫая-адыҫая барып, бөтөнләй тынды. Бер аҙҙан ауыл' шыш-шым булып ҡалды.

Шәрифә әбей, ейгә ҡайтып," ике бала янына ятты. Ауыр итеп көрһөндө. Өй эсе тыныс. Ишек алдында ят-•ҡан һыйыр ғына, ныҡ туйып ҡайтҡан ахыры, буфф итеп тын ала ла, тағы ла үҙенең кейөшөң көйшәй башлай/ Ҡашҡар, бөкләнеп ятып, ишек төбөндә йоҡлай.

Ауылда шылт иткән тауыш юҡ. Ул бөтә өйҙәре, ке-' шеләре, малдары, кәртә-ҡуралары менән тау итәгендә, ай яҡтыһында тынып ята. Ауыл өҫтөн тыныс ҡына, тигеҙ генә яҡтыртҡан ай Ырғыҙ йылғаһыныщ тулҡындарында енһөҙ шаяра, уныщ кемеш тауышлы тоноҡ һыуында йымылдай.

## АЛҒА, ИПТӘШТӘР!

### 1

Гөлйөҙөм күҙен бик ҡыйынлыҡ менән асты. Ул үҙенен. ҡайҙа һәм ни эшләгәнен тешөнмәне. Ул үҙенең ҡайһы ере ауыртҡанын да һиҙә алманы, тик думбыған башы шаулай, ҡолаҡтары сеңләй ине. Шулай байтаҡ ятҡас ҡына, йоҡонан уянғандағы һымаҡ бер хәл булды ла, ул, үҙенең ҡайҙалығын аңларға тырышып, күҙҙәрен йөрөттө. Мөйөштә ниндәйҙер кеше һүрәттәре бар. Улар янында янған май шәме һелкенә, унда ҡулына б£ла тотоп, йылмайып ултырған ҡатын да шуға эйәреп һелкенгән төҫлө тойола. Был ҡарауҙан Гвлйөҙөм арыны ла тағы күҙен йомдо. Бер аҙҙан тағы күҙен асып, мөйөштәге һүрәтте, уның ҡулындағы баланы күрҙе лә, ҡапыл йөрәге һыҡрап китеп, үҙенең бәләкәй ҡыҙын хәтерләне, шуныщ менән бергә үҙенен, был хәлгә төшөүен дә асыҡлап алды. Был ниндәйҙер урыҫ ейө. Мөйөштә урыҫ аллаһы. Ул үҙенен. бында инеүен төш кеүек хәтерләй. Уға күпме ваҡыт үткәнен аныҡлап әйтерлек түгел ияе. «Бәпесем, Ғәйшәм, ҡайҙа илап йврөй икән...» тигән уй уны урынынан ҡуҙғатты. Ләкин ул ҡуҙғала алманы. Аяҡтары, ҡулдары хәлһеҙ ине. Ябыҡ ишек аша алғы бер бүлмәнән Ҡотлобайҙың иҫерек тауышы килә.

— Бына шулай, ҡустылар, хәҙерге көндә йә беҙ, йә улар... Юҡ, улар түгел, беҙҙекеләр еңәсәк. Беҙ киткән

көн оҙаҡламай килер. Сит илдәрҙәге беҙҙең ярҙамсылар йоҡламайҙар улар, тик беҙ батыр булайыҡ. Осраған бер-болыпевикте сүпләп торайыҡ, шунан уларҙың көсө әллә ҡайҙа китә алмаҫ.

Кемдер уға үҙенең мыҫҡыллы иҫерек тауышы менән ҡаршы әйтә:

— Йә, ташла, куп ишеткән һүҙҙәр улар, Ҡотлобай түрә, әйҙә йырлашабыҙ.

— Юҡ, улай тимә, Филипп Степанович, һин минең иң өлкән командирем, әфисәрем, минен, һүҙҙе йөпләп кенә тор, ә һин ҡаршы бараһың, их...

— Ярар, ярар, мин һинең әфисәрең. Әйҙә гармун уйнатып йырлайбыҙ.

— Тарт, Аллаяр, тарт гармунды!

Иҫерек тауышҡа ғырылдаған гармун еырылдауы ҡушылып китте.

Гөлйөҙөм был бысраҡ әҙәмдәрҙең хәшәрәт тауыштарын ишетеү менән бик ҡаты ғазапланды ла, үз/енең бөтә көсөн йыйып, урынынан ҡалкты. Иөрәгенә, энә ҡаҙалған кеүек, сәнсеү йәбеште, ҡапыл барып тәҙрәгә ынтылды. Тәҙрә ныҡ ине. Боролоп ишеккә барып ҡағылды, ул тыштан бикле ине. Ул шунан тәҙрә төбөнә кире барып, башын һалып, тышты ҡараны. Был бүлмә ике ҡатлы йорттоң түбәнге бер бәләкәй бүлмәһе ине. Тәҙрә тураһынан күләгәләрен ергә йәйеп ултырған эре ейәнкеләр тирә-якты әйләндереп алған, улар һыртынан йәшел рәшәткә әйләндерелгән. Ә ул рәшәткә буйлап аҡ бандиттәрҙең аттар янында маташҡандары күренә. Көн кисәүләгән, эҫе һүрелгән. Гелйөҙөм кире тартылды. Унын шаҡарылған ҡулы, ҡаймыҡҡан бармаҡтары, аяҡтары бер юлы һыҙлай башланылар. Күлдәгенең дә еңе, итәктәре йыртылып бөткәйне. Ул, ситлеккә ябылған инә арыҫлан кеүек, аяҡтарының ауыртканын да иғтибарға алмай, ғәрлегенән ярһып, бүлмә буйлап йөрей башланы.

Ошо аяҡ тауыштарын ишетепме әллә былай бер нәмә иҫенә төшепмө, айыу һымаҡ алпан-толпан баҫып, Ҡотлобай килеп инде. Ул ишекте асыу менән карауаттың буш икәнен күреп, аптыраған һымаҡ уң яҡҡа күҙ һалды ла, Гөлйөҙөмдөң мөйөштә торғаныш күреп, күҙенә төшкән япрай ҡаштарын ялбыратып, эре һары тештәрен ыржайтып, йылмайҙы. Үҙе баҫкан урынында ҡатып тора ине.



___Ә, һин, һылыу еңгәм, тәмле йоҡонан уянғанһын икән, матур төштәр күргәнһевдер инде. һин, әкиәттәге батыр кеүек, ун көн буйы йән белмәй йоҡлайһын икән... — Ул бер ҡулы менән ишектең бауыш тотҡан көйө, бик оҙаҡ мыҫҡыллы көлөп, Гөлйөҙемдө үсектерергә тырышты. — Мин дә йоҡлап торҙом, төшөмдә һине үземә йәш кәләш итеп алғанмын имеш тием, ҡыҙыҡ теш бит, ха, ха!.. Булмаһа, килешәбеҙме әллә, ә?—Ул ҡулдарын йәйеп Гөлйөҙемгә табан атланы.

Нәфрәтле асыуҙан Гөлйөҙәмдөң башы әйләнеп китте. Шуның менән бергә үҙендә әллә ҡайҙан күтәрелгән ныҡ көс һиҙҙе лә, бетә хәле менән ынтылып барып, Ҡотлобайҙың битенә йоҙроҡ менән һуҡты, унан күкрәгенә һынҡылдатканса төртөп ебәрҙе. Ҡотлобай, сүмәксеп китеп, артына лап итеп йығылып төштө. Ул урынынан торорға маташып, эт кеүек ырылданы, ҡалҡырға тырышты. Был дөбөр-шатыр тауышты ишетеп, Ҡотлобайҙың ярҙамсылары килеп инделәр ҙә уны ҡултыҡлап алып сығып киттеләр. Был мажараны тыңлап торған аҡ офицер Филипп Степанович бот сабып хахылдап көлөргә тотондо. Ҡотлобайҙы бер ҡулы менән ҡултыҡлап, икенсе ҡулы менән честь биреп хахылданы:

— Бына һиңә беҙҙен, «великий генерал»! Еңеү менән ҡотлайым. Ха, ха! Уй-уй! — Ул рәхәтләнеп келә ине.

Улар менән бергә офицерҙен, һөйәркәһе Клава ла көлөштө, шунан Гөлйөҙөм янына якын килеп ҡарай башланы.

— Ух һин, бик уҫалһың икән. Ун көн иҫтән тайып ятаһың, ә үҙең һуғышаһың. Юҡҡа ҡарышаһың. Риза булырға ла ҡуйырға ине. Иң ҙур начальниктең йәре булыу ниндәй ҙур байлыҡ ул. Ә мин бына, ишеткәнен, барҙыр, помещик Расторгуевтың иркә ҡыҙымын. Тормош ҡушҡас, ни эшләмәк кәрәк. — Ул ебәк күлдәктәрен шаулатып, ҡулындағы, муйынындағы алтын сылбырҙары менән уйнай-уйнай, тағы күп итеп ниҙер һөйләнде, Гөлйеҙемде оҙаҡ димләне. — Мин һинең. үҙенде йәлләйем, матурһың, йәшһең, ә ул һине ярата. Беләһеңме, ул һине бынан нисә йыл электер Ныязғол йәйләүендә күреп яратҡан. Үҙе һөйләй. Юҡһа әллә ҡасан атып китер ине, уға ул бер нәмә лә түгел.

Гөлйеҙөм был һүҙҙәргә ҡаршы нәфрәт менән ерәнеү ҡушылған бер тойғонан ҡапыл укшыны ла иҙәнгә ҡоҫоп ебәрҙе. Быны күргән Клава:

— Бына һинә кәрәк булһа! — тип ике ҡулын сәпелдәтте лә югереп сығып китте, бер оло графин менән стакан тотоп килтереп, Гөлйөҙөмгә һыу эсерҙе.

— Мә, эс. һинән эш сыҡмаҫ, ахыры, шулай үлерһен инде. йә, эс тә ят, — ул бер аҙ аптырап ҡарап торҙо ла: — Иә, ярар, — тине. Үҙе, ниндәйҙер бер күңелле квйҙө таҡматслап, коридор буйлап китеп барҙы.

Гөлйеҙөм Клава ҡойоп ҡалдырған бер стакан һалҡын һыуҙы йотлоғоп эсеп беттө лә, урынына һуҙылып ятып, күҙен йомдо. Шул ваҡытта уға Ҡотлобайҙың сығып барғанда әйткән һүҙҙәре иҫенә төшөп, ул урынынаи ырғып торҙо. Тукта, ул ниҙер һөйләнде: «Юҡ инде, һин минең менән улай күп шаяра алмаҫһың. Мин һиңә бер генә пуля ебәрермен дә Айбулатын. янына оҙатырмын. Мин үҙемә һылыу ҡыҙҙар табам, улар унарлап йерейҙәр. һин миңә ҡарамаһан, да барыбер еңелгәнһең, минең тоҙаҡтаһың. Ана, таш келәтте ҡара әле, ундағы дуҫтарың янында һиңә лә урын булыр. Шунан күмәкләшеп Айбулатҡа китерһегеҙ...»

Ғөлйөҙөмдөң йөрәге яңынан ҡуҙғалды: был юлы ғәрләнеп түгел, һыҙлап һыҡранды уның йөрәге. Был хәшәрәт ни лығырҙай һуң әле... Айбулат, Айбулат янына ебәрәм, эй алла, ысынлап та Айбулатым да эләктеме икән ни быларға? Юҡтыр, булмаҫ. Улар бит хәҙер яңғыҙярым түгел бит, мендән артыҡ ғәскәрле партизандар отряде. Алдайҙыр. — Ул әҙерәк тыныслаңһа ла, таш келәт уның башынан сыҡманы. Ул тағы ла тәҙрә янына барып, күҙҙәрен ҙур асьга, урам аша күренгән таш лавкаға ҡараны. Лавка бикле, тимер селтәр менән ҡапланған тәҙрә быялаларын сан, баҫкан. Башҡа бер билдә лә юҡ. Шулай ҡарай торғас, Гөлйөҙөм был урынды ҡапыл танып ала, ул, «аһа, был Кузьмин утары бит» тип уйланы. Ҡаршылағы таш лавка уның иҫенә үткәндәге бер йәйҙе хәтерләтте: ул Айбулат менән казак русы байҙарына ураҡ урып йөрөп, ҡайтышлай ошо лавкаға тейгәйнеләр. Улар унда үҙҙәренә кәрәк кейем-һалым нәмәләре алғас, анау һул яҡ өстәрәк бер өйгә, тетя Дашаға киттеләр. Тетя Даша Гөлйөҙөмдө ҡосаҡлап ҡаршы алды, Айбулаттың арҡаһынан тапап яратты. Ә Тимербулатты ҡулына күтәреп алып һөйҙә... Былар бөтәһе лә Гөлйөҙөмдөн, күҙ алдына асыҡ булып килделәр, тетя Даша әле лә бында түгелме икән, тигән өмөтлө уй башына килде. Айбулат тураһындағы хәбәр Гөлйеҙөмдең йөрәген



Һыҙлатыуҙан туктаманы. Унын күҙҙәренән мөлдерәп ыҡҡан йәштәр эҫелек менән ҡыҙарған биттәренә тәгәрәйҙәр ине. Ҡараңғы төштө. Ә йоҙаклы таш лавка ҡәбер кеүек тыныс ҡалды.

Төн урталары етте. Аҡтарҙың да тауыштары баҫылды, йоҡланылар, күрәһең. Тик өйҙөң ике мөйешөндә торған часовойҙар ғына үҙ-ара ниҙер һөйләшәләр. Гелйөҙөм ипләп кенә ишекте этте. Ул һырттан бикләнгәйне. Ул, тағы тәҙрә янына барып, иҙәнгә ултырҙы. Асыҡ елгөнән ҡаршылағы таш келәткә оҙаҡ ҡараны. Хәҙер уныц уйҙары ошо аҡ таш бинанан берәй хәбәр алыу өмөтө тирәһендә әйләнделәр. Нисек итеп белергә, кеше бармы унда, әллә юкты һөйләнеме анау иҫерек баш? Айбулат бында ла булмаҫ, ҡулға ла төшмәгәндер. Сөнкн улар хәҙерге ваҡытта, бөтә көстәрен туплап, Ырғыҙ, Сәләнкә буйҙарын байҡап, Самарҙан киләсәк ҡыҙыл ғәскәр көсө менән берлектә аҙаҡҡы ударҙы бирергә әҙерләнеп яталар. Ауылдар менән партизандар араһыдағы бәйләнеште алып барыуҙа төп урын тотҡан Айбулат семьяһы был турала яҡшы белә ине.

Гөлйөҙөмдөн., шулай байтаҡ ултырғас, иҫенә тағы бер уй төштө: «Тукта, йырлап ҡарайым әле, унда кешеләр булһа, бәлки, тауышымды ишетерҙәр». Ул башта «Урал» көйөн әкрен генә, һүҙһеҙ генә көңрәтеп көйләне. Быны ишетеп ҡалған часовойҙар, һөйләшеүҙәренән туктап, тыңлай башланылар. Гөлйөҙөм асыҡ өлгөгә яҡынырак барып шәберәк йырлай башланы:

Ситлектәрҙә бикле һандуғастын,
һайрар талы ҡайҙа ҡалды икән?
Күҙ нурымдай күргән беҙҙең дуҫтар
Мин ҡараған ерҙә бармы икән?

Ирәндеккәй тауҙың, ай, башында,
Бөгөлөп кенә үҫкән өс балан,
Бөгөлөп кенә үҫкән балан кеүек,
Бөгөлөп илап ҡалды ес балам...

Аҡ келәттең рәшәткәһенә ай яктыһы төштө. Эстәге быялалар ялтыранылар. Гөлйөҙөм, хәҙер бөтә яҙмышы ошо тәҙрәләр аша хәл ителергә тейеш кеше кеүек, керпек тә ҡаҡмай теклəп йырланы.

Тәҙрәнән ҡапыл бер бит күренде. Унын, янында бик асыҡ булмаһа ла, тағы бер баш ҡыймылданы ла тағы юғалды. Быны күргән Гөлйөҙөмдөң күкрәгенән көс кү-

тәрелде, тауышы көсәйгәндән-көсәйҙе. Унда кешеләр барлығына, уларҙың Гөлйөҙөмдөң тауышын ишетеүҙәренә уның шиге ҡалманы. Хәҙер улар араһында кем булһа ла уны таныясаҡ, Үткән кеҙ улар Октябрҙең ике йыллығын дан итеп үткәргәйнеләр. Һигеҙ ауылдан кешеләр йыйылып килеп, Имелдә ҡалаларҙан килгән иптәштәрменән бергәләшеп, өлкән демонстрация яһап, урамда йырлап, майҙандарҙа докладтар һөйләп, кисен спектаклдәр ҡуйып, аҙаҡ дөйә ите ашап ҡунаҡ булышып, гөрләшеп үткәргәйнеләр. Ә Гөлйөҙемдө бер урындан да ҡалдырмай бергә йөрөттөләр. Бөтә концерттәрҙә йырлап сыҡты, хор менән дә, яңғыҙ ҙа ул йыр менән алда булды. Шуға күрә уны «һандуғас Гөлйөҙем», «Йырсы Иөҙөкәй» тип атанылар. Ул йырынан туктап уйланды.

ЧаЪэвойҙың береһе:

— йә, йә, тағы берәй йыр һыҙҙырт әле, йырға бик оҫта икәнһең дәбаһа,— тине.

Икенсеһе:

— Юҡһа күҙгә йоҡо тейөлә, етмәһә, һине күҙ йоммай һаҡларға ҡуштылар.— Улар шулай икәүһе лә лабырҙашып келөштөләр ҙә тәҙрә ҡаршыһына ук килеп баҫтылар.

— Иырла тағы, йырла әле!

Гөлйөҙөм, уларға әллә ниҙәр әйтеп һүгергә укталһа ла, үҙен тыйҙы. Ул, шул арала таш келәт тәҙрәһенән әллә нисә кешенең үҙенә ҡарап торғанын күреп, тағы ла йырлап ебәрҙе. Гөлйеҙөм хәҙер инде йырына нардомдарҙа һәр ваҡыт ул йырлағанда ҡушылып уйнай торған Мортой ҡурайсы исемен ҡушты:

Мортой ағай, тартсы ҡурайыңды,
Яу көйҙәрен һеҙгә кейләйем;
Беҙҙен. башҡа килде ауыр хәсрәт,
һеҙ дуҫтарыма шуны ла һөйләйем.

Ул туктап тыңланы. Тәҙрәнән яуап килмәне. Таш келәттәге алты кеше ут яҡтыһы булмаған, аҡтарҙың командирҙәре яткан был өйҙән төн уртаһында килгән был йыр тауышына башта ни тип тә мәғәнә бирә алманылар. Уларҙың өсөһө Казачи грандағы Покровка ауылыныщ революция башынан бирле аҡ казактарға ҡаршы һуғышып йөрөгән рус егеттәре ине. Икәүһе Диңгеҙбай ауылы комсомолдары, ә береһе Кәмәлектән, Әмиров тигән оло ғына уҡытыусы ине. Улар, укомдыщ ҡушыуы буйынса,



партизан отрядена ҡушылырға китеп барған саҡта, һис бер уйламаған ерҙән, аҡтар ҡулына эләгеп ҡуйғандар. Бандиттәр уларҙы йома буйынса отрядтең ҡайҙалығын әйттерергә тырышып, тукмап-тукмап һорашһалар ҙа, әгәр әйтһәләр, ҡотолдороу вәғәҙәһе бирһәләр ҙә уларҙан бер ауыҙ һүҙ ҙә ала алманылар.

Әле был йырға ҡаршы йаштәр:

— Әйҙә беҙ ҙә ҡаршы йырлайыҡ, моғайын, беҙҙең кешелер,— тиһәләр ҙә, Әмиров арҡыры төштө.

— Туктағыҙ, йәштәр, бында тағы берәй хәйлә булмағайы, аҙыраҡ көтәйек, беҙҙең кеше булһа, тағы ла йырлар әле,— тине.

Иәй таңы тиҙ һыҙылды. Ай яҡтыһы аҡһылланып нурын юйҙы. Ҡояш сығышы алһыуланып ҡыҙарҙы. Ваҡ аҡ болоттар, береһен-береһе ҡыуып, күктең уртаһына үрләнеләр. Әй артындағы өйәңкеләрҙә турғайҙар сутылдаштылар. Баҡсаның арғы аулаҡ мейөшөндәге ҡыуаҡтар араһында һандуғас һайрай башланы. Ирекле ҡоштарҙыщ йәйге таңға кинәнеп йырлашыуҙары Гөлйөҙөмден. йөрәген өҙҙөләр. Бәләкәйҙән көйләргә, моңланырға дәртле өйрәнеп үҫкән Гелйөҙөм бөтә барлығы менән шиғри тәбиғәтле, тәрән тойғоло ине. Ул тағы ла уйға ҡалып ултырҙы. Унын. тәне ут кеүек яна, башы зыңҡып ауырта, эсе билен уралтып киҫә, эстән өҙек-өҙөк ҡайнарланып аҡкан ҡан аяҡтары буйлап иҙәнгә эркелә. Был унЬщ буйындағы, Айбулаттың: «Быныһы ул булыр инде, ҡыҙыбыҙ икәү бит»,— тип иркәләп кәткән балаһы бандиттәр тукмағын күтәрә алмай түгелә ине.

Гөлйөҙөм үҙендә әллә ниндәй бер еңеләйеү һиҙҙе. Уны хәҙер теге тәҙрәнән ҡарап тороусылар ҙа асыҡ күрҙеләр. Әмиров нығытып ҡарағандан һуң, иптәштәренә:

— Был ҡатын кеше, туғандар, беҙҙен, кеше ул. Күрәһең, уны ла биклəп ҡуйғандарҙыр. Тик кем тип кенә әйтергә лә белмәйем, яуап бирергә кәрәк,— тине.

Быға тиклем үҙенен, башындағы яраһынын, һыҙлауынан урынынан ҡуҙғала алмай ьвдғырашып яткан Ғилман да, урынынан тороп, тәҙрәнән ҡараны ла:

— Әмиров ағай, был беҙҙен, Гөлйөҙөм апай бит!— тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ҡайһы?

— Бәй, ҡайһы тип ни, Айбулат ағайҙың ҡатыны, эй бахыр, тере икән, ә Айбулат ағай юҡ инде...

— Эй туғандар, шул дабаһа, иҫең бар булғыры, ,тине Әмиров. Был хәл уларҙың алтауһын да аптырашҡа ҡалдырҙы. Барыһы ла геүләшеп ошо турала һөйләнеләр.

Рус егеттәре лә:

— Эйе, ул беҙҙең ревком председателенең ҡатыны була шул. Әх, нисек итеп ҡотҡарырға?..— тиҙәр ине.

Улар шулай һөйләшкәнсе, Гөлйөҙөм дә үҙенең элекке саҡтағы күмәк халыҡтар менән бергәләшеп йырлап йөрөгән йырҙарын ҡысҡырып башлап ебәрҙе:

Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға,
Иркенлек, тигеҙлек байрағы елберҙәһен алда.

Был йырға часовойҙар ҡаршы тешәп өлгөрә алманылар, таш келәттән кеслө ирҙәр тауышы күтәреп алып китте:

- Шул ҡыҙыл байраҡты ҡыҙыл һөңгө менән һаҡларбыҙ,
Ҡанлы һуғыштар булһа ла, ихтилалды яҡларбыҙ.
Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға.

Был тауышты ишетеү менән Гөлйөҙөмдөң күңелендә ниндәйҙер бер тантаналы, шатлыҡлы зрелек тыуҙы. Ул тауышын аҙ ғына ла тартмай бөтә көсө менән ҡыекырып йырлай ине:

Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға...

Был тауыштан бөтә банда отряде, зыҡ ҡубып, аяҡҡа баҫты. Иыр тауышына иреп торған һантый часовойҙар, барыһы бер юлы аҡырышып, таш келәт яғына югерҙеләр.

— Эй, йырламағыҙ, эй, арестандар, молчать!

Күҙҙәрен алартып, Ҡотлобай яланбаш көйө югереп килеп сыҡты. Ул револьверен әле тәҙрәгә, әле часовойҙарға һелкеп әшәке һүгенде, аҡырынды:

— Ни бар унда, ни тауыш, ни ҡарап тораһығыҙ, эттәр?

Ул шулай һүгенә-һүгенә ҡайҙалыр тағы инеп китте. Бер ярты сәғәт самаһы үтеүгә, Ҡотлобайҙың урынбаҫары, кисә Гөлйөҙөм күргән офицер менән бер нисә һалдат таш һарайҙы астылар ҙа, ундағы партизандарҙы берәмләп сығара башланылар.

Гөлйеҙем, тәҙрәгә ҡаплакып, йотолоп ҡарай башланы. Унан сыҡкан кешеләрҙең өҫ-баштары йыртыҡ, кулдәктәре ҡанға буялып ҡаткан, бик йонсоуҙар ине.

Ҡотлобай сығып, үҙенең самогонға ҡарлығып бөткән ,-яман тамаҡ төбө тауышы менән ҡысҡырып, ҡулындағы ҡағыҙҙы һелтәп, приказ бирҙе:



— Ҡурғылы тәрән үҙәк башына алып барып алтауһын да атырға. Шагом маррш!

Коммунистәр, комсомолецтәр ҡулдарын артҡа ҡайырып бәйләнгән көйө Гелйөҙөм яғына йеҙҙәре менән әйләнделәр. Унлап бандит, штыктарын терәп, уларға алға атларға ҡуштылар.

Гөлйеҙөм Әмировты ла, Ғилманды ла бер юлы танып, исемдәре менән ҡысҡырҙы:

— Әмиров ағай, Ғилман, мин — Гөлйеҙөм!

Улар, өй тураһыйа етеп, барыһы ла Гөлйөҙөмгә ҡарап баш эйеп, иҫәнләштеләр.

Әмиров:

— Күрешә алманыҡ, хуш, туған!— тине.

Гөлйөҙөм бер нәмә иҫенә төшкән кеүек ҡапыл ҡысҡырҙы:

— Айбулат һаумы икән?

Бүтәндәр ҡыйманы, Ғилман яуапланы:

— Дәминдәр шайкаһының эттәре уны харап иттеләр. Ҡайғырма, Гөлйөҙөм апай, Тимербулатың хәҙер отрядтә һуғышып йөрөй.

Ғилманды бер бандит штыгы менән арҡаһына төрттө. Улар мөйөшкә боролдолар ҙа барыһы бер юлы күтәренке тауыш менән «Интернационал»ды йырлап ебәрҙеләр.

Тағы ла бандиттәр аҡырышты. Уларҙың ларылдауҙарын еңеп, урам баҡсаһы аша йәштәр тауышы ишетелде.

— Беҙҙән, бөтә иптәштәргә сәләм!

— Беҙ үлмәбеҙ!

— Беҙ үлһәк тә, беҙҙең кес ҡалыр!

— Йәшәһен революция!

— йәшәһен бейөк Ленин!..

Гөлйеҙем, уларҙы күрергә ни тиклем тырышып ынтылһа ла, бүтәнсә күрә алманы. Уларҙы ағастар ышыҡланы, тауыштары алыҫайҙы. Унын, ауырыуы, туҡмалыуы арҡаһында, тәне ҡыйралып, ныҡ йөҙәгәйне. Былар өҫтөнә кисә иҫенә килгәндән алып ошо минутҡа тиклем үткәргән фажиғәле кисерештәр унын хәлен алды. Ул иламаны. Йөрәге ошо донъя ҡоротоп йөрөүсе дошманДарға асыу, нәфрәт менән ҡаткайны. Ул бик һыуһаны, ләкин һыу эсереүсе юк ине. Ул яй ғына эйелеп иҙәнгә ултырҙы ла, аяҡ-ҡулдарын ғына түгел, күҙ ҡабағын да күтәрә алмай ауырайып, һуҙылып ятты, күҙҙәрен йомдо.

Ҡотлобай бетә отряденә, был урындан ҡуҙғалып, Ырғыҙға табан юл алырға приказ бирҙе. Ул, ҡаныҡҡан

эт һымаҡ, Гөлйөҙөмдө тағы ла бер хурларға йә бетөнләй атып китергә тип бүлмәгә барып инде. Ләкин хәрәкәтһеҙ ятҡан Гөлйөҙөм бер нәмә лә һиҙмәне. Ҡотлобай уға бер аҙ ҡарап торҙо ла, ҡалын ирендәрен мыҫҡыллы ҡыйшайтып йылмайҙы:

— Әһә, һин дә^иптәштәрең артынан теге донъяға киткәнһең, ярай, бик яҡшы,— тип ишеген дә япмай шартлата баҫып сығып китте.

2

Бөйек Октябрҙең өс йылы үтеп тә китте.

Мең туғыҙ йөҙ егерме беренсе йылдын. яҙынан башлап унда-бында сәселеп ҡалған контрреволюцион элементтәр Самар губернаһының тимер юлдан алыҫ яландарында, урмандарында үҙҙәренең аҡ банда шайкаларын төҙөп алып, партия һәм совет эшмәкәрҙәренең башына етеп йөрөнөләр. һис бер көтмәгәндә бер нисә ҡоралллы бандиттең совет эшселәренең, коммунистәр, комсомолецтәрҙең тышыс эшләп йөрөгән ерҙәренә баҫып инеп, уларҙы атыуҙары, киҫеүҙәре, уҡытыусыларҙыц уҡытып торған урындарынан тотоп алып китеүҙәре кеүек быcраҡ эштәр күп булды.

Был, тәү ҡарағанда оло янғындан һуң ҡалған, әле быҫҡып ятҡан ваҡ ҡуҙға оҡшаған хәл, яҙ айҙарында байтаҡ ҡына көс туплап, Ҡотлобай, Дәминдәр, Сапожков тигән бәндәләр ҡулы аҫтында байтаҡ ҡурҡыныс отрядтәргә әйләнеп алды. Бына ошо ваҡ бандиттәр менән көрәшергә тип, бөтә Ырғыҙ, Кәмәлек, Кәрәлек буйы большевиктәре, коммунистик ҡыҙыл партизан отряде төҙөп алып, һуғышҡа керештеләр, Самарға хәбәр итеп, Ҡыҙыл Армиянан ярҙам һоранылар.

Көткән ярҙам оҙаҡҡа һуҙылманы.

Самарға ебәрелгән нарочныйҙар менән йәшерен бойороҡтар килде, күрһәтмәләр бирелде. Урындағы партия һәм совет етәкселәре, ошо бойороҡтар буйынса, был дошмандарға аҙаҡҡы ударҙы бирергә ашығыс әҙерлек башланылар.

Гөлйеҙөмдең хәбәрһеҙ юғалыуына һәм, уны ҡурсып йөрөп, харап булған Айбулат ваҡиғаларына ике ай самаһы ваҡыт үтеүгә, аҡ бандиттәр тағы ла Айҙаҡай ауылына килеп төштөләр. Был турала партизандарға хәбәр итеЛде. Улар, «аҫыл ҡош аяғынан эләгә», тип кинәнделәр.



Коммунистик лартизандарҙың төп торған урындары Дйҙакайҙан төньяҡтағы Алмағаслы тип йерөтөлә торған ике тау араһындағы утарҙа ине. Отряд командире Мурзин, кесе командирҙәрҙе йыйып алып, бандиттәр араһынан тулы мәғлүмәт алып килеү өсөн ауылға кеше ебәреү тураһында кәңәште.

Бөгөн йәйҙең бик матур иртәһе ине. Ҡояш байтаҡ күтәрелгән. Тик әле уныщ үҙәктен, эсенә үк килеп етмәгән нурҙары ағастарҙың өҫтөн генә иркәләйҙәр.

Отрядтәгеләр бөгөн көндәгегә ҡарағанда иртәрәк торғандар, улар әллә ниндәй бер эске әҙерлек тойғоһо менән ҡуҙғалалар. Был ваҡытта шаулашып, келешөп, төрлө әңгәмәләр табып шаярған йәштәр ҙә етди төҫ менән үҙ эштәренә тотонғандар.

Үҙәк буйлап һалҡын шишмә сылтырап аға. Уның бөгөлеп киткән тапҡырындағы таллыҡта ҡаҙан аҫылған. Унда ҡатын-ҡыҙҙар иртәнге ашты бешереп йөрөйҙәр. Улар араһындағы уҡытыусылар Йәмилә, Нина, Диләкәй, бер ситкәрәк эркелеп, бөген сығасаҡ стена газетаһының баш мәкәләһен уҡыйҙар. Улар эргәһенә алмағастан өлкән ҡыҙыл алма туп итеп өҙөлөп тештө лә Дилә яғына тәгәрәне. Дилә, уҡыуынан туктап, алманы тотоп алды:

— Бына, иптәштәр, беҙҙең, өлөш,— тип көлөп, алманы тешләне лә иптәштәренә һуҙҙы. Ул шулай һейләнеп боролғанда, Мурзиндең кесе командирҙәр менән бик етди һүҙ алыға барғанын күреп, иптәш ҡыҙҙарына мәғәнәле ҡараш ташланы. Улар ҙа быны аңланылар, ҡағыҙҙы бөкләп кеҫәгә һалып, улар янына югерешеп килделәр. Унда хәҙер Асатай, Семенов, Хөсәйен, Әхмәҙи, Исхаҡ, ҡарттарҙан — Ҡотлояр, бик йәштәрҙән Тимербулат торалар ине. Улар араһында кемде разведкаға ебәреү тураһында ҡыҙыу ғына һүҙ көрәше бара. һәр кемден, үҙе барғыһы килә. һәр кем үҙенен, был эштә оҫталығын иҫбат итә.

Тимербулат:

— Ағай, мин барайым, мин бәләкәй кеше, малайҙар менән уйнап йөрермен дә, хәбәр йыйырмын,— тине.

— Юҡты һейләмә, Тимеркәй, һин ярамайһың.

— Мин шәберәк, булдырырмын,— тй Асатай.

— Ул турала һүҙ юҡ. Булдырырһыщ. Тик һинец юлың ул яҡҡа түгел, Землянкаға табан буласаҡ.

Быға тиклем ҡыймай торған Диләкәй үҙен тәкдим итте.

Аҙаҡ шулай итергә булдылар: Ҡотлояр, көтөү эшенән ҡайткан кеше булып, ауылға инә. Ҡыҙы Диләне лә бергә ала. Тик уны ауылға индермәй, ә көтөүсе Истебай ҡыуышында ҡалдыра. Ауылдан килгән хәбәр шулар аша Сусаҡтау артында һыбай көткән Тимербулатҡа тапшырыла ла, ул отрядҡа сабырға тейеш була. Улар, шулай һүҙ төйнәшеп, таралыштылар.

3

Бандиттәр үҙҙәренең был килеүҙәрен ҡорбан байрамына тура килтергәйнеләр. Мең ярымдан артыҡ һыбай, йөҙҙән артыҡ ылау, алтмышлап ҡы^-ҡатын, бер көтөү һыйыр-һарыҡ малы ҡыуып, вәхши күсе һымаҡ, бөтә ауылды ябырып алдылар.

Ҡотлобай, сайҡалып баҫып, ҡылысын ерҙән һөйрәтеп, фуражкаһын кейеп, ҡатып бөткән ҡара сәсен бер яҡ сикәһенән ялбыратып, ғәйеттән сыҡкан халыҡ янына килде. Уның артынан бер бандит бер оло һарыҡты һөйрәкләп алып килә ине. Ҡотлобай уны муллаға хәйер итеп тотторҙо. Халыҡҡа ҡаршы әйләнеп, тышҡа сығарып ҡуйылған мәсет мөнбәренә һул ҡулы менән таянып, уң ҡулын һелтәй-һелтәй телмәр һейләне.

— Беҙҙең ҡәҙерле муллабыҙ һәм мосолман ағай-эне! Һеҙҙең хәйер-фатихағыҙ арҡаһында иҫән-һау йөрөп, һеҙҙә инде бына икенсе тапҡыр дин байрамы — ҡорбан ғәйетен үткәрәбеҙ. Бер нисә баш ҡорбан салдырам. Был малдарҙа кеше хаҡы юҡ. Барыһы ла коммуналарҙыҡы. Шикләнмәгеҙ, хәләл мал. Бөтә илебеҙҙә ҡан түгеп, беҙҙең алла биргән байлыҡҡа эйә булып ултырған ағай-энеләрҙе донъянан юғалтып, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөн асып, диндән яҙҙырған дәһриҙәрҙе бөтөрөп киләбеҙ. Быға, әлбиттә, әүәл алла, икенсе һеҙ ярҙам итәһегеҙ. Өсөнсөнән, сит илдәрҙәге дуҫтар ташламайҙар. Уларҙың әлеге кире сигенеп тороуҙары, беҙҙең Колчак, Деникиндәрҙең, китеүҙәре тик көс йыйыу өсөн генә ул. Оҙаҡламай большевиктәргә ҡаршы бик ныҡ көстәр күтәреләсәк, эйе, ағай-эне, миңә ышанығыҙ, улар оҙаҡҡа барасаҡ түгел... — Ул тағы байтаҡ лаҡылданы. Ләкин тыңлаусыларҙан берәүҙә уның һүҙен йөпләмәне. Тик кешеләр ҡапыл ташлап китергә генә ярамаҫ, тип баштарын баҫҡан көйө тик тора-



лар ине. Уның һүҙе бетөүгә мулла менән Ҡаҙанҡап Абдулланың ғына:

— Эйе, эйе, амнн!

— Эйе, шулай булһын! — тигәндәре генә ошо байтаҡҡа һуҙылған тынлыҡты боҙҙо.

Үмәр менән Тимерғәле, берейһенең сапан салғыйын икенсеһе тартып, бөтә кешенән алда ҡуҙғалып, өйҙәренә ынғайланылар. Мәсеттән байтаҡ киткәс, Үмәр:

— Әгәр яраһа, хәҙер башын яра бирер инем ләғинден.1 Муйыны аҫҡа килгәнен ҡасан күрермен икән, раббым,— тине лә тауышы ҡалтырап туктаны, күҙҙәре асыуҙан ут кеүек яндылар. Ул таяғыш ергә ике-өс ҡат туҡылдатып һөйләнде: — Алмалай ҡыҙым Гелйеҙөмдө юк итте, арыҫландай кейәүемде харап итте, ҡанескес...

Тимерғәле туйтандап атлап уға яҡыныраҡ килде лә, йыуатырға тырышты:

— Йә, ҡорҙаш, бик кеймәйек. Был хәтле бысраҡлыҡты ер күтәрмәҫ. Был хәшәрәт бәндәнең кешелеге бөткән, ғүмере лә күпкә түгел. Тик әлеге вәхшилеген итеп йөрей шунда. Сабыр итәйек. Беҙҙең балалар йоҡламай бит улар, — тине.

Ҡотлобайҙы бер яғынан мулла, икенсе яғынан Абдулла ҡатарлап, юғары урамға алып киттеләр. Оҙаҡ та үтмәй, уның ҡушыуы буйынса, бөтә отрядтә һыйыр-һарыҡтан ҡорбан һуйып, ит бешерә башланылар. Төшкә табан бер нисә өйҙә, урамда, өй күләңкәләрендә бөтә бандит отряде майға мансылып, һөйәк талаған иттәр кеүек, ашап, эсеп иҫереп шаулай башланылар. Үткәнһүткән бала-сағаларға ла ит һоғондороп, һөйәктәр тоттороп, яҡшатлы булырға тырыштылар. Быны күреп торған Шәрифә әбей урамда йөрегән Әлфиәне янына саҡырып алып етәкләне лә өйөнә алып ҡайтып китте.

— Балаҡайым, ауыҙыңа ла ала күрмә уларҙын, аштарын. Асыҡһаң, әйҙә ҡатыҡ бирәм, ҡаймаҡ бирәм, балам. Әйткәнде тыңла берүк. Был малдың һәр бер ҡан тамсыһы ашарға ярамаҫлыҡ харам.

Улар шулай өтәнләшеп өйгә етеп барғанда, Ҡотлояр ҡаршы килеп сыҡты. Әбей уны күргәс,*капыл аптырап, артҡа тартылды. Быны абайлаған Ҡотлояр уны тынысландырҙы.

— Ҡурҡма, ҡоҙағый, ҡурҡма. Мин бит көтөүҙән ҡайтҡан кеше булып киләм. Бында бер кем дә минең тегендә икәнде белмәй.

— Улай булһа, ярай ҙа. Шулай ҙа һаҡ була күр, ҡоҙа, алла һаҡлаһын,

.— Ҡоҙағый, һин үҙең дә бик урамда йөрөмә, балаларҙы ла йөрөтмә. Донъя хәлен белмәҫһең.

— Ярай, ярай. Юлығыҙ уң булһын, эшегеҙ эш булһын.

— Шулай булһын.

Улар шулай аңлаштылар ҙа, икеһе ике яҡҡа киттеләр.

Тап төш ваҡыты етеугә Истебай һыйыр көтөүен Ҡупасай күленә һыуларға төшөрөп, унда үҙенең улы Уралбайҙы ҡалдырҙы ла, сыбыртҡыһын биленә ҡыҫтырып*. ялпандап атлап, ауылға инде.

Уны күргән ауыл ситендәге часовой:

— Тукта, ҡайҙа бараһың, һин кем? — тип ҡысҡырҙы.

Истебай тыныс тауыш менән:

— Уйбай, күрәһең ғуй, бынау көтөүҙе әйҙәп ҡуйғандан кәйен, ауылға барып тамаҡ туйҙырайым, тип китеп; ултырамын әү. Мал һуйғандар тип исеттем. Ҡорбан байрамында бер тамаҡ туйдырайыншы!

— Бар, улай булһа, юлыңда бул.

Истебай үтеп китте.

Ул, ауылдың осонан башлап. өй һайын кереп, «корбандан ауыҙ иттерһәгеҙ булмаймы», тип һөйләнә-һөйләнә ауыл уртаһына бандиттәрҙең ҡайнашҡан ерҙәренә барып етте.

Улар барыһы ла ял итергә таралғандар. Ҡайһыһы арба аҫтында, ҡайһыһы өйәңке аҫтында йоҡлап яталарине.

Истебай, бер арба янында аттар менән булашҡан бер егеттең ҡаҙаҡ икәнен кейеменән танып, уның янына туҡтаны.

— Ай, шырағым, ҡазаҡ баласы буласыңдбы? — тип һораны.

— Эйе, ағакә, ҡазаҡ баласымын.

— Эйе, йомос эстәп йөрөйсеңбе?

— Юҡ, ҡызмәттә имәсмен. Подвод ҡыудыртып алыш киттеләр. Аттарымдын, артынан жөремен.

— Ә, улай икән, әкәң жуҡба?

— Әкәм бар. Жортта мастерлыҡ ҡылады. Шишәм ваҡ балдар менән тирмәдә ҡалды.

— Уй, байғос.



Ҡаҙаҡ егете, атының алдындағы бесәнен юнәтеп, §4стебай янына килеп ултырып, тәмәке ураны, кисетен уға һуҙҙы.

•— Тарт, ағакә,— тине.

— Рәхмәт. Мин үҙем дә сул яҡтамын. Жас ваҡыттан осо.нда Ныязғол дигән байдың ҡулында ҡызмәт ҡылдым. Хәзер уны ҡызылдар ҡамап ҡуйғандан кәйен, уның малы ҡороп ҡалды. Мин хәзер ауылдын, сыйыр малын көтәмен.

— Ә, Ныязғол дигәнендә, минең әкәм дә ун алтынсы йылда унда ҡызмәт ҡылыпты. Аты Сарсынбай, белмәсмесең?

— Уйбай, шырағым, син сул Сарсынбай улы булып шығасыңба? Уй, айналайым, уны мин бик жаҡсы беләрмен. Машинала ҡысҡытырап ясалған бешән жомосонда, анау далада бергә булдыҡ ҡуй!

— „Сарсынбай улы Күчәрбай буламын.

Улар, яңы осрашҡан иҫке таныштар кеүек, ҡыуаныштылар, оҙаҡ һөйләштеләр. Истебай һүҙ урауында Күчәрбайҙан отрядтең ҡайҙан килеп ҡайҙа барғанын, ҡоралдарын, нисә ат, нисә командир, тағы ҡайҙа ниндәй төркөм отрядтәр булғанын, кемдәрҙе ҡайҙа ҡулға алып атҡандарын — барыһын тәпсеп һораша барҙы.

Ҡарап тороуға йәш кенә. һөйләгәндә ололарса фекер йөрөткән Күчәрбай, үҙенең аҡыллы уйсан күҙҙәре менән Истебайҙы ентекләп ҡарап ултырып, тауышын түбәнәйтә биреп, уның һораған нәмәләренә бик ихлас тура яуаптар бирҙе. Ул Истебайҙың буш кешё түгел икәнен, юҡҡа ләпелдәргә килмәгәнен башта уҡ һиҙеп алғайны.

Истебай, урынынан ҡуҙғалып:

- Ярар, энем, китәйен, сыйырдарым көтәдер. Минән әкәңә күп сәләм сөйлә,— тине.

Күчәрбай, икеләнгән тауыш менән уны туктатты.

— Ау, ағакә, азырак тора бир,— тине.

Истебай кире бөрләп.

Күчәрбай ши...ер менән тирә-яғына уратып ҡарап алды ла, шыбырҙаны:

— Бер кемгә лә белдермәсәң, сиңә әитәтен бер-ике сүзем бар иде...

— Айтчы, күрәйен, ҡурҡма.

— Син, ағакә, үҙең ҡайсы яҡты яҡсы күрәсең. Аҡтымы, ҡызылдымы?

— Ул сораудың төптө кирәге бар имәс, Күчәрбай шырағым. — Ул көлөп кенә ҡотолорға булды. — Синен менән мәғән көтөүҙә чыбыртҡы, бас шурпасы да муйын сөйәге ҡуй!

— Уй, жуҡ, ағакәм, кәлмәсәңче. Бик ҡаты серле жомосом бар.

— Айт, айт, ҡурҡма димен ау!

Күчәрбай Истебайға эйелде. Унын ныҡ ышаныслы кеше булыуын нығыраҡ асыҡларға тырышҡан һымаҡ, өлкән ҡара үткер күҙҙәре менән бер аҙ текләне лә, һүҙен һуҙҙы:

— Ир булсаң, сүзеңдән ҡайтма, мине тотторма,— тине.

Истебай бүркенең ҡолаҡтарын ялпылдатып баш эйҙе.

— Осо сездең ауылдың Айбулат дигәндең ҡатынын безде әйдәп жерөгән Ҡотлобай истәк көчлөк менән алып китепте икән...

Истебайҙың был хәбәргә тыны ҡыҫылды. Саҡ ишеттереп:

— Йә, сунан? — тине.

— Сунан сул. Ул байғос усындан киткәндән алып жул буйынча йомадан артыҡ осо Ҡотлобай менән түбәләсеп, бас эймәй бик ҡаты хәлдән тайып тәгәрәде. Сунан ул Чаған суы буйындағы Кузьмин утарында хәлсезләнеп жатҡан чағында унын үлгән хәбәре чыҡты. Кәйен, бандиттәр ул утардан киткәс, унда Айбулат мәрхүмдең бик яҡын күргән тетясе Даша менән минең шишәм, мин, уны төндә күтәреп алып китеп, үзебездең тирмәгә алып барып жасереп ҡуйдыҡ. Мин киткәндә азғантай арыуланып ҡалды. Тура килгәндә осо жаҡҡа хәбәр итергә ҡусты. Бына сул, ағакә.

Истебай болоҡһоуҙан бер һүҙ ҙә әйтә алманы, тик Күчәрбайҙың ҡулын ике ҡуллап ҡаты ҡыҫты. Быға ҡаршы Күчәрбай тағы нығыраҡ ирәбәләнеп китте.

— Тағы суны да айтайым: осо көндәрҙә Ҡотлобай Кузьминдә алты большевикте атырға оҙатып иде. Ачыға ҡалай, ҡалай булғанын белмәйем, ә улар ҡалай ҙа, ярға терәп ҡуйған жирдән атыудан алда асҡа тумалап, ҡурғы арасында юҡ булғандар тиде. Атырға барыучылар Ҡотлобай түрәнең ачыуынан ҡурҡып, «эстәрен бөтөрдөк», тип доклад ҡылғандар. Уны да сәғән тапсыр** дым. Миндән бурыч тестө, ағакәм.



— Ай, шырағым, Күчәрбайым, зур рәхмәт булсыиь. Без озаҡламай уларды табып алырбыз. Егетлегең жирдә ятмас. Теләсәң, төндөң ҡараңғысын юғалтма, ҡач^ Ана тора сулау, минен. ҡыуысым сунда, басың сау бул~ са, ат табылыр.

Улар айырылыштылар.

Иҫтебай, үләң әйтә-әйтә, тағы ла ары атланы:

— Ау, анау таудын. басынан куч киләде.
Күчкән сайын бер юрға бус киләде.
Туған илдин айырылған, ай, ҡыйын икән,
Ҡара күздән мөлдөрәп жас киләде...

Ау, алатуса, тағыдай алатуса,
Ҡыздар матур күренер билен быуса,
Исегендин алдына су сибеп ҡуй,
Әкәц тайып йығылсын безде ҡыуса... ау.

Унын был йырҙарын ишеткәс, ҡаҙаҡса ан.лағандар< ҡысҡырып көлөшөп ҡалдылар. Ул, уларҙың береһенәлә ҡарамай, сыбыртҡыһын һөйрәп китә бирҙе. Бер аҙ барып күпер башынан үҙенә арҡыры төшеп атлағагс Ҡотлоярҙы күреп:

— Әйҙә, ағакә, Рәхимә жиңгәләргә барып симез ит соғонамыз. У ҡандай өлкән байрам бегөн! — тип ҡысҡырҙы.

— Ә, булады, Истебай, әйҙә киттек.

Улар Ныязғол ейөнә табан юнәлделәр.

— Бу өйгә күп ҡызмәт салдыҡ, әйдә бер ҡунаҡ булайыҡшы.

Ҡотлояр, унын һүҙҙәренә иғтибар итмәйенсә, күҙенә һорау менән ҡараны. Истебай көлөп үләңен дауам итте:.

Кызыл ҡасыҡ, ау, ҡыҙыл ҡасыҡ,
Ҡыздар туйға баралар дер-дер басып,
Син арьяҡта булсаң да, мин бир жаҡта
Касыңа үтә алмаймын дәрья тасып, ау...

Ҡотлоярҙың түҙеме бөтте. Ҡомһартып ҡашын Й№ йырҙы.

— Истебай, тием, ниңә шашаһың, көн үтә бит.

Истебай уға боролоп та ҡарамай, йыр менән яуапланы: —

Бай ҡапкасы эргәсендә тәмәке бир,
Барын сунда сөйләсермез ҡатар басып, ай...
Кызыл ҡасыҡ...

Ҡотлояр Истебайҙың ошо тәҫеленә риза булып тыдаысланды. Улар икәүләп Ныяҙғолдоң оло ҡапҡаһына ышыҡландылар. Истебай, бүркенең ҡолағы эсенән яҙыу «сығарып, Ҡотлоярҙың усына йомдорҙо. Үҙ-ара һүҙ берkеттеләр.

Бик тиҙлек менән күрше ауылға, ауыл Советы председателенә хәбәр тапшырырға. Мөмкин булһа, Кустингә, ат саптырырға, булмаһа, Мәғфүрәне, ҡыр тиҙәге йыйырға тип, ҡап тотторoп сығарып ебәреп, хәбәр иттерергә. Бандиттәр бында ҡуна ҡалһалар, Сусаҡтауҙың төньяҡ һырҡыуына ут яғырға. Өҫтәлмә белдермәләрҙе Истебай таң менән һыйыр көтөүен йыйырға килгәндә алып киләсәк.

Ҡотлояр кире китте.

Истебай, туй атҡарғандағы һымаҡ, ендәрен һыҙғанып, ашыға-ашыға ҡунаҡ һыйлап йөрөй торған Миңлекәй янына килде.

—- Уйбай, бездең жас жкңгәй, билен бистән быуып, аяғы аяҡҡа теймәй жөрөп жатыр? Байрамдар ҡотло булсын!

Бөгөнгө шатлыҡ менән осоноп йөрөгән Миңлекәй, элекке замандағы кеүек, Истебайға:

— Иә, ни бында аламаң ялпылдап, түр боҙоп йөрөйһөң, әйҙә, бар ана аш ейөнә!—тип ҡарамай үтмәксе ине. Ләкин Истебай, үҙенең бөтә тел оҫталығын юлға һалып, Миңлекәйҙе һөйләндерергә йәтешләнде:

— У безден, жиңгәйгә ҡунаҡтар ҡасында, жаҡсы юрға шикелле, өлтерәп жөрөү килесәде.

Миңлекәйҙең күптән иғтибар күрмәгән ҡатынлыҡ хисе байтаҡтан ишетмәгән ҡупрайтыу һүҙҙәренә эреп китте. Ул, туктала биреп, Истебайға йылмайып боролдо:

— Ай, һин, йолкош Истебай. Әле булһа шул татлы телеңде ташламайһың икән. Шул телең булмаһа, күптән күҙеңде ҡарға соҡоп китер ине,— тине.

— Дөрәҫен сейләүгә ниндәй осталыҡ кирәк? Сездә ҡунаҡтардың бик зурдары жата икән, бик жаҡсы.

— Уй, Истебай, Ҡотлобай үҙе иң өлкән башлыҡтары менән беҙгә төшкән. Улар әле беҙҙә ес көн буласаҡтар. Бөгөн ике һыйыр һуйҙыртты. Мәшәкәт күп. Киске көтөү төшкәс, һин дә кил. йомош булыр. Тағы бер нисә мал Шуйырға кәрәк булыр. Егермеләп кеше бит.

— Ә, булды. Киләм. Син тигәндә, мин ләббәй ҡуй,



Миңлекәй тағы борғоланды:

— Шулай, Истебай, минең аш-һыуымды онотм».. Донъялар гел былай булмаҫ әле. Беҙҙең боронғо замандар кире әйләнеп килһә, беҙҙең мал тағы һинең ҡулыңа ҡала ғуй.

— У әйтереӊ бармы. Тиз килермен. Әле лә бында, булам. Жомосоң булса, чаҡыр.

Истебай, эште шулай яйлап алып, Ҡотлоярҙың яуап хәбәрен көтеп, һарай эргәһенә барып ятты. Ул унда тәмәке тоҡандырып, ҡырын ягкан кейе, был тирәлә ниҙәр барғанын күҙәтә башланы.

Бандиттәр быяла тәҙрәләр менән уратылған террасала, түңәрәк еҫтәлде әйләндереп, кәрт уйнайҙар. Уларҙыд: береһе Ҡотлобай, Колчактан ҡалған Макаров тигән аҡ офицер, Дәминдәр. Истебай Айбулатты тотоп алып китеүселәрҙен, ошолар икәнен якшы белә. Ә ҡалған дүрт кешенё, улар янында һырышҡан ике бисәне танымай ине.

Эске яҡ ишектән, күҙҙәрен йылмайтып, Хаят килеш сыкты. Ул өҫтөнә кәпләнеп торған аҡ батист күлдәк кейгән, ҡулында алтын йөҙөк, алтын сылбырлы беләҙектәр ялтырай. Ул, иркәләнеп, борғоланып баҫып, Макаров янына килде, уның елкәһенә ҡулын һалып, кәрттәренә күҙ йөрөттө лә, ниҙер әйтеп, сыңғырҙатып көлөп. ебәрҙе. Макаров был келөүҙән ниңәлер ҡыҙарынды ла,. Хаятка боролоп, әллә ниҙәр шыбырҙаны. Хаят, башын. артҡа ташлап, сәс толомдарын сайҡатып, тағы бер көлдө лә баҫкыстан югереп төшөп китте. Макаров уның артынан бер аҙ ҡарап ҡалды ла, компаньондарының ҡысҡырышып протест яһауҙарына ла ҡарамайынса, кәрттәрен өҫтәлгә ырғытып, Хаят артынан тешеп китте.

Көн кисәүләне. Ҡыҙыулыҡ һүрелде. Халыҡтың буталыуынан, малдың ҡайнашып йөрөүҙәренән сыккансаң-туҙан баҫылды.

Ҡотлоярҙан көткән хәбәр оҙаҡлағандай булды. Истебайҙың эсе боша башланы. Ул оло ҡапҡаға ҡарап күп тә ятманы, тал сыбыкты ат итеп атланьга, саң борҡотоп югереп, Әхмәҙиҙең ун ике йәшлек улы килеп инде.

— Истебай ағай, көтеүең ауылға төшеп тарала бит, инде, ни эшләп ятаһыҫ, әйҙә!—тигән булып уның кепесалғыйынан тартты ла, усына йомарлаған ҡағыҙ остоғон Истебайға тотторҙо. Үҙе: — Әйҙә, һая! — тип ҡыс-

-ҡырыҡлап, ағас атын ҡамсылап, урамға сығып югерҙе.

Истебай ҙа урынынан йәһәт тороп:

— Уй, малдың аҡылы юҡ инде уның, барайын,— тип ашығып атлап, ауылдан сығып китте.

## ЕҢЕҮ

йәйге төн. Иге-сиге күренмәгән иркен дала, үҙенен, жүкрәген көн буйы ҡайнар ҡояшта ҡыҙҙырып алған да шдуның ҡыҙыуын хәҙер һауаға бөркөп ята. Хәҙер ҡайҙа ғына ятһан да, ниндәй үлән өҫтөнә тәгәрәһән, дә, ер шундай ҡоро, йылы, хәл йыйҙырғыс рәхәтлек бирә. Был ваҡыттарҙа бала-саға өҫтәренә лә ябынмай, аҫтарына ла түшәмәй, ишек алдарына теҙелешеп, тәгәрәшеп йоҡлайҙар. Ә ололар, йоҡонан бик йыш уянып, берәй хәтәрле тауыш юҡмы икән тип, ҡолаҡ һалып тыңлайҙар ҙа, тағы юйоп китәләр. Уларҙың йоҡоларында тыныслыҡ юҡ. Иыл буйына һыҙылған, йома, ун көн һайын тигәндән ҡабатланып торған һуғыш, бәрелештәр бөтә тыныслыҡты алтандар.

Ҡояш сығышы яғынан Ырғыҙҙы аша сығыу менән юл Айҙаҡайҙың бесәнлек яланына китә. Ул ялан Кәсәүни тигән түмәләстән башлана ла, тотош бер арҡа булып һуҙылып барып, егерме, утыҙ километрҙар киткәс, Сергей тигән рус ауылының иген яланына барып төкәлә. Әлнде Ырғыҙҙы аша сыҡмайынса унын, ағышына ҡаршы атлап көнсығыштан төньяҡҡа табан ыңғайлап барһаң, бик алыҫ китмәйенсә үк Тряпкин тигән утарға етәһең. Шунан аҙыраҡ барып һулғараҡ тартһаң, шыңғырап ятҡан таҡыр ялан юлы ике тау араһына алып кереп китә лә Алмағаслы утарына, ҡыҙыл партизандарҙын. иң ныҡ тупланған, иң төп отряде торған төйәккә алып бара. Юлдың үҙәккә инеп китә торған ауыҙында ике яҡлап ҡайын ағастары, япраҡлы ботаҡтарын суҡаландырып, матур бер йәшел ҡапҡа яһағандар.

Бына ошо тәбиғи ҡапҡаның ике яғында ла, унан күтәрелгән тау башында ла, йәйге төндөң һирәк ҡараңғыһын үтә күргән үткер күҙҙәрен ялан, тауҙарҙан алмайынса шыҡ баҫып, партизан отряденең часовойҙары торалар. Был үҙәкте ике яҡлап гигант дөйәләрҙең ҡуш үркәсе һымаҡ көмөрәйешеп яткан ҡырлас тауҙы буйлатып та часовойҙар баҫҡандар. Улар керпек тә ҡаҡмайҙар. Отрядтең һәр бер кешеһенә кәрәкле күрһәтмәләр, приказдар индерелгән. Улар ошо боевой приказдарҙы эңерҙән үк алып ҡуйғандар ҙа уларҙы теүәл үтәргә сигнал ғына көтәләр. Тынлыҡ. Утарҙы уртаға ярып, тоноҡ һалҡыш шишмә шылтырап ағып ята. Әллә ҡайҙа бытбылдағаш бүҙәнәләрҙең тауышы ҡолаҡ төбөндә генә ишетелә. Уларҙы уҙып, әллә ҡайҙа алыҫта, көйөлдө көйләп ҡуя, ағас араларындағы аттарҙың ғуршылдатып үлән сәйнәгәне, ҡайһыһынын, ушҡырғаны асыҡ ишетелә. Былар ҙың береһе лә үткер часовойҙарҙың иғтибарынан ысҡынмайҙар.

Алмағаслының уртаһындағы өс тәҙрәһе көньяҡҡа ҡараған ҡыҙыл түбәле өйҙең, урта тәҙрәһенә ҡаршы ҡуйылған киң өҫтәлдә кәрәсин шәм яна, Был өйҙә — отрядтең штабы. Өҫтәл артындағы ултырғыста, төш буйына күҙен дә йоммайынса, тәрән уйға батып, отряд командире Мурзин Зөфәр ултыра. Уның оҙон матурҡаштары, дуғаланып бөгөлеп, икеһе бергә ҡушылға» кеүек, йыйырылғандар. Уның ҡулындағы тәмәке яйлаге ҡына нәҙек төтөн сығара. Ләкин Зөфәр уны баянан бирле һурғаны юҡ. Уның алдында ниндәйҙер ҡағыҙҙар, газеталар ята. Ул ҡайһы саҡта уларға күҙ һала ла, бер аҙ уҡый, ҡайһы саҡта кистән үк ошо өйҙөң хужа ҡатыньв үҙ баҡсаһынан индереп ҡуйған ҡыҙыл әнис, эре йәшел антоновка, аҡһыл һары юкә алмаларынан берәр тешләп ҡуя ла тағы газета, яҙыуҙарын ҡарай.

Отряд ял итә. Өс көндән бирле разведкала йөрөгә арығандары өсөн ял итергә ҡушылған Тимербулат, Диләфруз, Ҡотлояр, алма ағастары аҫтындағы таҡыр ергәбаш аҫтарына кейемдәрен һалып, теҙелешеп ятҡандар.

Былан ҙа арыуҙың ни икәнен белмәгән йәштәр, Тимербулат менән Диләкәй, бөгөн бөтенләй ҙур яуаплылыҡ, ғорурлы шатлыҡ менән ҡанатланғандар. Улар, өлкәндәрҙе уятмаҫҡа тырышып, күҙҙәрен аҙ ғына йомоға яталар ҙа, тағы шыбырҙаша башлайҙар. Улар хәҙербала түгелдәр, ә ҡыҙыл партизандар. Улар хәҙер индеябай рядовой партизандар түгел, ә разведчиктәр. Улар,, быға тиклем хәбәр ташыу эшен бик яҡшы үтәп килһәләр ҙә, уны ябай эшкә һанайҙар ине. Ә был үткән көн эсендә разведкаға йөрөү, улар өсөн айырыуса ауыр, ҡатмарлы, ҡурҡыныслы боевой задание булды. һәм был задание тулыһы менән яҡшы үтәлде. Был турала командирҙәр үҙҙәре уларға рәхмәт әйттеләр. Бының өҫтөнәкисә иртә менән Тимербулат әсәһенең һаулығын ишетте. Был хәбәргә бөтә отряд ҡыуанды. һәр кем былдағы

дошманды бөтерөү менән Гөлйөҙөмдө, Кузьмин ҡурғы-һы ярынан тәгәрәшеп төшөп, бандит пуляһенән ҡотол-^ан партизандарҙы табып алып ҡайтырға тырышып, һәр жайһыһы унда үҙен ебәреүҙе һораны. Ә бер нисә сәғәттән улар бөтә отряд менән һуғышҡа, шул бысраҡ дошман-дарҙы бөтврөү өсөн атакаға китәсәктәр. Ни эшләп инде ошондай ҡайнап торған бейёк күтәрелеш заманында йәштәр күҙенә йоҡо килһен. Мөмкин түгел. Тимербулат урынында мыштырҙап әйләнә. Үҙенең ҡыҫҡа мылтығын йыйпап ҡуя ла билендәге револьверен шыуҙыра.

— Дилә апай, йоҡланыңмы әллә? — ти ул.

— Юҡ, Тимерәй, йоҡо килмәй. Ниңә йоҡламайһың?

— Мин шуны уйлап ятам әле, кисә һин Истебайҙан зсәйем хәбәрен ишетеп ҡайтып әйткәс, йөрәгем ярылып яштерҙәй булды. И түҙеп булмай, бер юлы илағы ла ки-лә, келгөм дә килә, әллә кемдәрҙе, әллә ҡайҙағы тетя Дашаны ла, ҡаҙаҡтарҙы ла ҡосаҡлап алғым килә.

—•• Эй Тимерәй, һин түҙеп торһаң да, мин һине аңла-иым. һин тәүҙә ҡып-ҡыҙыл булдың, шунан танау оста-рыңа тиклем ағарып киттең дә, күҙеңә мөлдөрәп йәш эркелде, ә үҙең ҡыуанып йылмаяһың. Тик мин һине һүҙ •әйтеп борсоманым. һине Мурзин ағай күкрәгенә ҡыҫып ҡосаҡлап тәбрикләгәндә, үҙемдең күҙҙән, минең генә түгел, Йәмиләнең дә, Нюраның да, башҡа бик күптәрҙең дә күҙенән йәш тәгәрәп китте. Тимерәй, һин уны әйтәһең, ул турала Истебай ағайҙан орошолдом әле. Беләһеңме, ул ошо хәбәрҙе яйлап ҡына әйтеүенә, мин ҡапыл ҡыс-ҡырҙым да ебәрҙем. Ул миңә асыулана биреп ҡараны ла: «Диләкәй, һин улай оскалаҡ булып өйрәнмә. һәр <5ер эште, ниндәй шатлыҡлы, ниндәй ҡайғылы булмаһын, тыныс йән, һалҡын ҡан менән үткәрергә кәрәк. Хәҙер заманы шундай. һин бит партизанка, етмәһә, разведчик-һең...» — тине. Мин дә ҡарышманым. «Ағай, бында, күл янында, һыйырҙар ҙа беҙ генә бит», — тйп үҙемде аҡ-дарға маташҡайным, «барыбер» тип кенә ебәрҙе.

— Истебай ағай үҙе бер герой инде ул, — тине Ти-мербулат. — Юҡ, мин ҡысҡырманым да, тыныс та бул-дым, ҡыҙыҡ бит әле, бер юлы илағы ла, көлгә лә, ҡыс-ҡырып ебәрге лә килә. Ни эшләп улай икән, кешенең шатлығы бик ҙур булһа, шулай буламы икән әллә?

— Күрәһең, шундай тойғолар бер юлы ҡаплап ала-лыр инде,



— Их, иртәгә аҡтарҙы ҡырып ырғытһаҡ, бер-ике көн-дән Кузьмингә лә етеп булыр ине. — Ул бер аҙ уйлан-ды. — Әсәйемде алып ҡайтыр инек, теге алты партизан-ды табып алыр инек... Шунан...

— Шунан?

— Бәй, аръяғын үҙең беләһең инде. Әсәйемде ҡа-рап, ауырыуынан төҙәтер инек тә Самарға уҡырға китер« инек. һин бараһың бит?

—• Барам. һуғышты бөтергәс, беҙ бергә китербеҙ.

Улар тағы ла аҙыраҡ тындылар. Ә уларҙың йәш йө-рәктәре сафлыҡ, ғорурлыҡ, боевой хистәр менән тибә.

Таң яғы алланды. Алмағаслы утарын, Үркәс тауҙа-рын, уларҙан һуҙылып киткән яландарҙы баҫып, оҙатс йоҡоға талдырған кеүек тойолған тынлыҡ, ысынында,, тик тышҡы тынлыҡ ҡына ине. Арыҫлан да бит берәй-ҡуйы ҡыуаҡ аҫтына боҫа ла, өҫтөнә бер ырғыу менә» дошманын бәреп йығырға йәтешләнеп, унын уңайльк яҡынлағанын сөтә. Партизандар ҙа, шуньщ һымаҡ, тыш-тан шымдылар ҙа, эстән бөтә ғәйәр көстәрен йыйып,. дошманға аҙаҡкы, хәл иткес ҡаты ударҙы бирергә әҙер-ләнеп, унайлы моментте һағалап торҙолар.

Был момент оҙаҡ кәттөрмәне.

Үркәс тауҙарҙын. уң яктағыһынын. түбәһенән килет ҡыялап төшкән текә берләм юлдан дөпөлдәп сабып теш-кән ҡара айғырҙың тояҡ тауышы төнгө тынлыҡҡа сик ҡуйҙы ла бөтә отрядте аяҡка баҫтырҙы. Ике сәғәт буйы-на елеүҙән аҡ күбектәре осоп килгән был ҡара айғырҙың: ахылдап барып туҡтағанын да көтмәйенсә, Асатай һи-кереп ергә төштө, шул арала ҡаршы алып кетөп торған Заһит, теҙгенгә йәбешеп, атты етәкләп алып та китте. Асатай, югерә-атлап, Мурзин янына кереп китте. Улз честь биреп, рапорт яһаны.

— Иптәш командир, һеҙ ҡушкан задание тулыһьь менән үтәлде,— тине ул.

Уны ҡаршы алып баҫкан Мурзин:

— Яҡшы, ултыр, һөйлә,— тине.

Асатай ул күрһәткән ултырғысҡа ултырҙы.

— Хәҙер үк бынан бөтә отряд менән ҡуҙғалырға!

— Тукта, һин тәртип менән. Ҡайҙа тап булдыщ, кем-дәр һәм күпме көс килә?

— Ташкүстәнде үтеп егерме биш саҡрым ҫамаһын-да, Ҡушуба тәңгәлендә тап булдым. Туптар, пулеметтар-менән, өс-дүрт йөҙ самаһы ҡыҙылармеецтәр.

— Ниндәй күрһәтмәләр?

— Хәҙер үк бөтә отряд менән ҡуҙғалырға. Сәғәт таңғы өстән дә ҡалмайынса Тряпкинде үтеп, Ырғыҙҙы аша сығып, Кәсәүниҙе арҡыры киҫеп, Ҡаратауға еткәнсе цепь тартып торорға. Бына беҙгә план да ебәрҙеләр. — Асатай планды Мурзингә бирҙе лә, түш кеҫәһенән тағы бер конверт сығарып, көләмһерәп һуҙҙы: — Ә бынауһы, Зөфәр ағай, еңгәмдән хат, — тине. Мурзин конвертте тиҙ генә асып, ашығыс күҙ югертеп сыкты. Был хатта Юлия экзамендәрҙе яҡшы биреп *врач исеме алғанын, Ырғыҙ буйҙарындағы хәрби частәргә врач итеп ебәрелгәнен, тиҙҙән ҡәҙерле Мурзинен күрәсәген яҙғайны.

Мурзин, был хатты уҡығас, үҙендә ниндәйҙер бик күщелле еңеллек тойҙо, «Юлинькам, минең аҡыллы Юлинькам», тине ул. Шунан, Асатайға ҡарап:

— Әйҙә, тиҙ генә йыйылығыҙ! — тине.

Егермеләгән командирҙәрҙен, бөтәһе лә штабҡа килеп тулдылар. Ҡыҙыл Армиянан килгән планды өҫтәлгә йәйеп һалып, бөтәһе лә шуның өҫтөнә эйелделәр. Мурзин, ҡулындағы ҡалын карандаш менән төртөп, билдәләргә күрһәтеп, иптәштәренә аңлатты. Ул:

— Бына шулай. Бик дөрөҫ. Беҙҙең һорауҙар һәм тәкдимдәрҙе нығытҡандар ҙа бына өҫтәлмә күрһәтмәләр яһап ебәргәндәр. Бик яҡшы, иптәштәр, бик шәп, — тип һүҙен бөтөрҙө. Уның һүҙе туктауға командирҙәр терлө һорауҙар менән Асатайға боролдолар.

— Йә, унда кемдәрҙе күрҙең?

— Ни тинеләр беҙҙең турала?

— Машиналары бик шәпме инде уларҙың?

Асатай уларҙың ҡыҙыкһыныуын ҡәнәғәтләндерҙе.

— Ух, иптәштәр, уларҙың эш шәп инде. Өҫтәрендә ялт иткән ҡыҙылармеецкий форма, һәр береһендә шалтылдап торған ҡорал, алдарында пулемет. Командир менән комиссар мине ашатып, эсерҙеләр ҙә, беҙҙең. бындағы хәлде һорашып, тиҙ генә ошо планды һыҙғылап бирҙеләр. Беҙҙең мәғлүмәттәр бик яҡшы булып сыкты. Шунан, беләһегеҙме, иптәштәр, ундағы комиссар минең таныш.

— Йә, кем ул?

— Бәй, 19-сы йыл үҙем Самарҙан барып алып килгән чекист, бишенсе йылдан партиялағы подпольщик Дороянн. Әлбиттә, тәүҙә ҡапыл танышманыҡ. Ә фамилияларҙы ишеткәс, ул да, мин дә бер аҙ ҡарашып торҙоҡ та,



тәүҙә мин, унан ул төҫмөрләп һораштыҡ та, ҡыуанышып, яңышан күрештек. Ул барыһын да һораша. Айбулат ағайҙың да, Баҡый укытыусының да, Баһауҙың да, Сәғәҙәт ағайҙың, Ғәпделлатифтең дә харап булғанын күптән ишеткән. Ул турала кейөнөп алды ла: «Ярай, беҙ уларҙан үсте шундай алырбыҙ, көлдәре күккә осор», — тине.

— Шулай тиме? Ай, күп йәшәгер большевик.

— Тимербулаттыщ отрядтә йөрөгәнен әйткәс, эй ҡыуанды. «Ә, мин күргән бәләкәй ҡара малаймы? Молодец, бик яҡшы!» — ти.

Улар шулай итеп бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә геүләшеп һөйләшеп алдылар ҙа, ашығыс совещаниегә ултырҙылар. Унан һуң Мурзиндең һәр бер командиргә берәмләп биргән ҡыҫҡа, асыҡ приказдарын тыңлағас, бөтәһе лә штабтан сығып киттеләр. һәр кем бик тиҙлек менән үҙенен. группаһы менән ҡуҙғалып, ике йома буйына алмағастар аҫтына яткырып ял иттергән, ялан, далаларҙа һирәк осрай торған тәбиғәттең был матур мөйешө менән һаубуллашып, ҡуҙғалырға команданы көтөп, боевой тәртипкә теҙелделәр.

Мурзин үҙенең баҫкан ерендә бейеп торған, бөҙрә яллы, йондоҙ ҡашҡа аҡ бәкәл туры атьшың билендәге ҡашлы эйәренә еңел һикереп атланды ла, һалкын шишмә бөгөлөшендәге убаға күтәрелеп, бер нисә. минут буйына бөтә отряде өҫтөнә һынаулы ҡарап торҙо. Шунан ул, алда теҙелгәндәрҙән күҙен алып, артҡа ҡайырылып ҡараны. Унда Хөсәйен командаһы аҫтындағы мыкты егеттәр үҙҙәренең аттарына менеп теҙелгәндәр ине. Уларҙың теҫөндә ниндәйҙер бер айырым эрелек, ҡаты етдилек күренә. Улар аттарының ауыҙлыҡтарын шыкырайта тартҡандар ҙа, үҙҙәренең баштарын артҡараҡ ташлап, үткер ҡараш менән ҡарап торалар.

Мурзин, атын атлатып, улар янына барып туктаны, уларҙың барыһына ла берәмләп ҡарап сыкты ла, тағы бер ҡат төшөндөрҙө:

— Иптәштәр, һеҙгә особый мәһим задание тапшырам. Уның ни тиклем мөһимлеген һеҙ үҙегеҙ ҙә яҡшы аңларһығыҙ. һеҙ батырлыҡ менән күп һыналған егеттәрһегеҙ. Хәҙер һеҙгә мин шуны ҡабатлайым, иптәштәр, иң беренсе бурыс һеҙгә — дисциплина, иптәштәр. Хөсәйенден. һүҙенән сыҡмағыҙ. Юл буйлап йөрмәгеҙ. Сусаҡтауҙың ҡырласынан юлһыҙ тура тартығыҙ. Аттарығыҙҙы тау араһында ҡалдырып, йәйәү, кәрәк булһа, түш менән

шыуып китегеҙ. Уларға тын алырға бирмәгеҙ, эштәрең бөтөрөгөҙ. Был, иптәштәр, беҙҙең еңеүебеҙҙең иң, үҙәге. Ярай, туғандар, изге юл.

— Тыңлайбыҙ, иптәш командир, бөтә күрһәтмәләр тулы үтәлгән булыр! — тине Хесәйен.

Мурзин бөтәһе менән дә исемдәрен әйтеп һаубуллашты. Аҙак, уң ҡулы менән Хөсәйендең муйынынан ҡосаҡлап, маңлайынан үпте лә команда бирҙе:

— Уңға шагом марш!

Әйтерһең дә, партизандарҙың үҙҙәре генә түгел, аттары ла ошоно ғына көтөп торғандар: барыһы бер секундҡа ялт итеп артҡа боролдолар ҙа бая Асатай сабып тешкән берләм юл менән тауға елеп менеп киттеләр.

Айҙаҡайҙағы бандиттәр әле һаман йоҡлайҙар ине. Уларҙы таң әтәстәре лә уята алманы. Был саҡырылмаған ҡунаҡтар килгәндән бирле өрөүҙән туктамаған эттәр тауышы ла уларҙың йоҡоһон боҙманы. Үҙҙәрен был тирәлә хужа һанап, иркенләп йөрөргә керешкән был ҡанескес хәшәрәттәр йәйрәшеп ятып йоҡлайҙар ине.

Сусаҡтау аша ялтырап тешкән Самар юлында һаҡта торған шешмәк күҙле, ялбыр сәсле бандит часовой йоҡонан уянып, тәмле итеп бер иҫнәп алды ла, бик оҙаҡ һуҙылып кирелгәндән һуң, кеҫәһенән кисетен сығарҙы. Тик ул ҡағыҙ эҙләп тәмәке төрөргә әҙерләнгәндә генә, ҡуйы әрем араһынан шыпырт иткән тауышҡа, юлдың уң яғына боролдо. Ул яҡшылап тыңланы, был шыптырҙағандың ни нәмә икәнен тикшерергә уйлап, мылтығын тоҫҡап, әремгә табан әйләнде лә, ике аҙым алға ынтылыуы булды, шул секундта уның арт яғынан шыҡ иттереп елкәһенә бирелгән приклад уны сүмәксетеп ергә ҡолатты. Шунда уҡ уның башына тоҡ һымаҡ бер нәмә ҡапланылар ҙа, ике партизан ике ҡулынан тотоп, әремлеккә һөйрәп алып та киттеләр.

Хөсәйен командаһындағы егеттәр Ҡыҙыл Армияға Самар яғынан юл асып көттөләр.

Ҡыҙарып ҡояш сыҡҡан саҡта партизандар отряденең алдағы частәре, Айҙаҡайҙың көнсығыштан кеньяғына ҡуҙғалған типһәнлегенән буйлап барып, Ҡаратанау һөҙәгенә килеп етеп, Казачи гранға үтә торған оло юлды бүлеп алғайнылар инде.

Связнойҙарҙан Әхмәҙи, Миша Фролов, Исхаҡ, Тимербулат үҙҙәренең яҡшы аттарында үҙәк буйлап Кустингә ҡарай саптылар. Отряд шулай наступлениегә

-әҙерлек менән тупланып торғавда, Айҙаҡай яҡта тытырғҙаған пулемет, шартлаған снаряд тауыштары бөтә яланды яңғырата башланылар.

Күп тә үтмәне, ауылдан сығып ҡаскан төркөм-төржөм һыбайлылар, берәм-берәм сәселеп, югерешкән йә-;йәүлеләр күренә башланы. Уларҙың кейенеп, агка атла•йып өлгөртәне яланға саба. Ҡайһылары, йоҡоһонан торған көйгә, күлдәк-ыштандан ғына, яланаяҡ югерешеп •сығалар ҙа, үҙҙәрен ярҙан ырғытып, һыу буйҙарындағы кесерткән, әрем араларына тәгәрәйҙәр, таллыҡка ҡасалар, ҡайһылары өй, ҡураларға ышыҡланалар ине.

Ҡотлобай менән Колчак офицере, егерме-утыҙлаған һыбай уртаһында, пар ат еккән кырандаста ултырып ауылдан йән-фарман сабып сыҡтылар ҙа, Ҡаратанауҙың кеньяҡ итәгендәге ҡыуаҡлыҡка тарттылар. Арттаֆаҡ ҡалған ҡасҡын һыбайлылар ҙа тәртипһеҙ рәүештә улар артынан саптылар. Ҡотлобай ошо ҡыуаҡлыкта отряден йыйып алып йә төпләнеп һуғышырға, йә элекке еңелә башлағандағы тәжрибәһе буйынса, ары, Слабодкаға тартып, казак русы яландарына, ундағы ҡуйы ҡурғыларға ҡасып ҡотолмаҡсы ине. Ләкин ул был ниәтен тормошка ашырыу түгел, уйын да ослап, план да ҡороп елгөрә алманы, был яҡтан, ҡыуаҡтар ышығында тупланып әҙер торған ҡыҙыл партизандарҙын. ҡаты көсөнә ҡаҡлыкты. Бандиттәр ҡыуаҡка килеп етеп тә өлгөрмәнеләр, партизандар ура ҡысҡырып, Мурзиндең йәһәт командаһы аҫтында улар өҫтөнә ташланды.

Бер юлы өс яҡтан атылып килеп төшкән гранаталарҙан Ҡотлобайҙың пар аты бер юлы үрәпсеп барып, һөрөнөп тәгәрәне, кырандас түңкәрелеп китте. Ҡотлобай менән офицер, икеһе ике яҡка сәсрәп барып төшөп, аяҡҡа баҫтылар. Офицерҙен, башынан сорлап ҡан китте. Ҡотлобай, ҡаныҡкан эт кеүек, ҡыҙыл күҙҙәрен аҡайтып, тештәрен шыҡырҙатып, револьверҙән ата башланы.

Ҡыҙыл Армия менән партизандарҙың берләшкән кесө эште тиҙ тотто. Бандиттәрҙе өс яҡтан ҡыҫып алып, ҡайһыһын ҡылыстан үткәрә, ҡайһыһын мылтыҡ көбәгенән осора башланылар.

Шул көндән башлап Ырғыҙ буйҙары халыҡтың иң яҡшы улдарының, ҡыҙҙарыныц башына етеп йөрөүсе бысраҡ бәндәләрҙән әрселеп ҡалды. Ил күкрәк киреп тын алды, алдағы тыныс, матур тод^опткя аяҡ баҫты.

40973
ЧИ5ЛИ0ТЕКА I
объеди... Учалинского ГОК

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

hәҙиэ Дәүләтшина hәм унын романы хаҡында бер нисә hү>
*(Ғәйнан Әмири)*. . . . . . . . . . . . 5
БЕРЕНСЕ КИҪӘК . . . . . . . . . . . . 13
ИКЕНСЕ КИҪӘК . . . . . . . . . . . . . . . 327

Хадия Лутфулловна Давлетшкна

ИРГИЗ
роман
*(ка башкирском языке)*

Редакторы *М. С. Игебаева*
Художество редакторы *£. З, Хәйбуллин*
Техник редакторы *А. Я- Горбачева*
Корректоры *Р. Л. Каhарманоеа*

ИБ № 766

Наборға бирелде Н]Ш 1977 йыл. Баҫырға •ҡул ҡуйылды 20|1У 1977 йыл. Ҡағыҙ форматы 84xЮ8|„. Тип. ҡагызы № 3. Шартлы баҫма таб. 26,04. Учет.-нэд. таб. 26,0 Тиражы 30 000. Заказ № 92. Ха-кы 1 hум 75 тин.
Бапгкортостан квтап нәшриәте, Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство, Уфа-25, ул. Советская, 18.

Бапгкорт АССР-ы Мвнистрҫәр Советенең Нэшрвэт, полиграфия h»1 китап саузаhы эштәре буйынса идаралығының
Өфө полиграфия комбинаты.
Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.